# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ



VI
ТОМ

# BASHKORT PEOPLE'S CREATIVE ACTIVITY

## EPOS: THE QYSSAN AND DASTAN

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## ЭПОС: КИССЫ И ДАСТАНЫ

# BASKURT HALIK FOLKLORU

## EPOS: KISSALAR VE DESTANLAR

УФА
«КИТАП»
2002

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## VI ТОМ

### ЭПОС:

### ҠИССАЛАР ҺӘМ ДАСТАНДАР



ӨФӨ
«КИТАП»
2002

УДК 398 (470.57)
ББК 82.3 (2 Рәс=Баш)
Б 29

Мөхәрририәт: *Әхмәт Сөләймәнов (баш мөхәррир), Кәзим Аралбаев, Рауил Бикбаев, Салауат Галин, Эрнест Ишбирҙин, Ринат Йосопов, Фәнүзә Нәҙершина, Розалиә Солтангәрәева, Зиннур Уракчин, Сабир Шәрипов, Ғайса Хөсәйенов.*

Төҙөүселәр — *Нур Зарипов*, *Әхмәт Сөләймәнов, Ғайса Хөсәйенов һәм Зәйтүнә Шәрипова.*

Инеш мәкәлә *Нур Зариповтыҡы*.

Аңлатмалар һәм һүҙлек *Нур Зарипов*, *Әхмәт Сөләймәнов, Ғайса Хөсәйенов һәм Зәйтүнә Шәрипованыҡы.*

Һүҙ ахыры *Әхмәт Сөләймәновтыҡы.*

Томдың яуаплы мөхәррире — *Ғайса Хөсәйенов.*

Нәшриәт мөхәррире — *Фәниҙә Исхаҡова.*

**Күсереп баҫтырғанда томға һылтаныу мотлак.**

Редакционная коллегия: *Ахмет Сулейманов (главный редактор), Кадим Аралбаев, Раuил Бикбаев, Салават Галин, Эрнест Ишбердин, Ринат Юсупов, Фануза Надршина, Розалия Султангареева, Зиннур Ураксин, Сабир Шарипов, Гайса Хусаинов.*

Составители — *Нур Зарипов*, *Ахмет Сулейманов, Гайса Хусаинов и Зайтуна Шарипова.*

Предисловие *Нура Зарипова*.

Комментарии и глоссарий *Нура Зарипова*, *Ахмета Сулейманова, Гайсы Хусаинова и Зайтуны Шариповой.*

Послесловие *Ахмета Сулейманова.*

Ответственный редактор тома — *Гайса Хусаинов.*

Редактор издательства — *Фанида Исхакова.*

**При перепечатке ссылка на том обязательна.**

**Б 29** **Башҡорт халыҡ ижады.** Алтынсы том. Эпос. — Өфө: «Китап», 2002. — 552 бит.

ISBN 5-295-03003-2 (т. 6)
ISBN 5-295-01393-6

«Башҡорт халыҡ ижады» туплanмаһының был томы «Тәүрат» менән «Ҡөрьән»дән таныш «Йософ ҡиссаһы»ның, шулай уҡ Көнсығыштан үтеп инеп, Уралға ерекҡән бүтән мөхәббәт дастандарының башҡорт версия һәм варианттарынан төҙөлдө.

ФII — 21

УДК 398 (470.57)
ББК 82.3 (2 Рәс=Баш)

ISBN 5-295-03003-2 (т. 6)
ISBN 5-295-01393-6

© Н. Т. Зарипов, А. М. Сулейманов, составление, 2002

## МӨХӘРРИРИӘТТӘН

Урта һәм Кесе Азия, Ҡавказ тарафтарында йәшәгән мосолман төркиҙәр араһында ифрат та нык таралған эпик поэмалар — дастан һәм ҡиссалар, бигерәк тә уларҙың мөхәббәт темаһына ижад ителгәндәре, шул тарафтарҙан күсеп килеп, башҡортлашҡан ҡәүемдәр, халҡыбыҙҙың яҙыу таныған кемсәнәләре, йөрөмтәл мосафирҙар, дәрүиштәр, башҡалар аша беҙ йәшәгән тарафтарға ла килеп юлыҡҡан. Юлыҡҡан да бәғзеләре милли фольклор репертуарына ереккән. Саф башҡорт ерлегендә тыуған эпостарыбыҙҙан айырмалы рәүештә, тик Уралға, тик тарихи Башҡортостанға хас топонимдар, этнонимдар уларҙа телгә алынмаһа ла, милли эпик сюжеттарыбыҙ менән ауаздашлыҡтары, образдар системаһының, күтәргән темаларының, идеяларының халҡыбыҙ күңеленә хуш килеүе арҡаһында, Көнсығыш рухы әллә ҡайҙан уҡ аңҡып торған был әҫәрҙәрҙең башҡорт версиялары, варианттары хасил булған.

«Башҡорт халыҡ ижады» тупланмаһының был томы ана шундайҙарҙан төҙөлдө. Уны күренекле әҙәбиәтсе һәм фольклорсы Нур Талип улы Зарипов (1925—1997) әҙерләй башлағайны. Үкенесебеҙгә ҡаршы, был эште атҡарып сығарыу уға насип булманы. Шулай ҙа йыйынтыктың мул ғына өлөшөн («Буҙйегет»тең Өфө, Саттаров Рәхимйән варианттарын; «Йософ менән Зөләйха»ның Вәхитов Зиннәтулла, Закиров Заһир, Ғайсина Бәширә, Вәлиева Нәғимәләрҙән; «Таһир менән Зөһрә»нең Теләкәева Рәхилә, Булатов Зәкәриә, Ғарифуллин Сабирйән, Усманова Хәнифәләрҙән, «Сәйфелмөлөк»төң Рысаева Миңзифанан яҙып алған версия һәм варианттарын, уларҙың аңлатмаларын һәм һүҙлеген) ул әҙерләп өлгөргәйне.

«Ҡиссаи Йософ»тоң Ҡол Ғәли версияһын һәм аңлатмалар менән һүҙлектең ошо текстҡа ҡараған өлөшөн һәм ҡиссаның яҙма вариант, версиялары хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе филология фәндәре кандидаты, БДУ доценты Зәйтүнә Шәрипова, *Ғәзизә Ғүмәрова менән Ғәйникамал Иҫәнбаеванан* яҙып алынғандарын һәм халыктың йәнле репертуарынан теркәлгәндәренең аңлатмаларын (№№ 15—44) филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан фәндәр академияһы академигы Ғайса Хөсәйенов әҙерләне. «Буҙйегет» ҡиссаһының элекке баҫмаһына кермәгән урындарының байтағын төп нөсхә буйынса Салауат Хөсәйенов менән Зәйтүнә Шәрипова өҫтәне. Томды тулыландырыу, камиллаштырыу, уға һүҙ ахырын яҙыу кеүек эштәрҙе филология фәндәре докторы, профессор Әхмәт Сөләймәнов атҡарҙы.

# МӨХӘББӘТ ТУРАҺЫНДАҒЫ ДАСТАНДАР ҺӘМ ҠИССАЛАР

Көнсығыш классик поэзияһында ҙур урын алған романтик (мөхәббәт) дастандар йоғонтоһонда тыуып, төрки телле халыҡтар араһында киң таралған уртаҡ сюжеттар бар. «Йософ менән Зөләйха», «Таһир менән Зөһрә», «Буҙйегет» һәм «Сәйфелмөлөк» — шундай әҫәрҙәр.

Быларҙың йәшәү тарихы үҙенсәлекле. «Йософ — Зөләйха», «Таһир — Зөһрә», «Буҙйегет» сюжеттары башта халыҡ ижадында тыуғандар. Аҙаҡ айырым шағирҙәр тарафынан эшкәртелеп, ҡиссалар баҫылып сыҡҡан, яңынан-яңы әҫәрҙәр — романтик поэмалар, драмалар, хатта романдар яҙылған. Яҙма ҡиссалар баҫма китап формаһында ла, ҡулдан күсермәләрендә лә киң таралып, халыҡ телендә йәшәүҙең яңы дәүерен, яңы баҫҡысын үткәндәр, байтаҡ үҙгәрештәр кисергәндәр.

Мәҫәлән, «Йософ — Зөләйха» сюжетының тәү башлап миф-легенда формаһында ассиро-вавилондар тарафынан ижад ителеүе билдәле. Артабан беҙҙең эраға саҡлы 8—5-се быуаттарҙа ул боронғо йәһүд (еврей) телендә Библияның «Ветхий завет» тигән беренсе киҫәгенә «Иосифтың һатылыуы» исемендә ингән. Беҙҙең эраның VII быуатында «Йосыф сүрәсе» исемендә Ҡөрьәндә урын алған. Төрки халыҡтары араһында ул ислам дине менән бергә ана шул Ҡөрьәндәге «Йосыф сүрәсе», бигерәк тә унын тәфсирҙәре аша таралған булырға тейеш.

Библияға ингән «Иосифты һатыу» хикәйәтенә донъя әҙәбиәтендә күп яҙыусылар эленән-эле әйләнеп ҡайтҡандар, прогрессив немец яҙыусыһы Томас Манн хатта «Иосиф һәм уның ағалары» тигән бер роман яҙған. Мосолман донъяһында ла ул күп яҙыусыларҙы әүәләүәлдән ҡыҙыҡтыра килгән. Беренселәрҙән булараҡ, уға мәшһүр «Шаһнамә» эпопеяһының авторы Фирдәүси иғтибар иткән һәм X быуатта «Йософ вә Зөләйха» поэмаһын яҙған.

Төрки телендә «Йософ вә Зөләйха» ҡиссаһы тәү башлап Ҡол Ғәли тарафынан XIII быуатта яҙылған һәм 1839 йылда баҫылып сыҡҡанға тиклем ҡулъяҙма формаһында киң таралған. Ҡулъяҙма күсермәләре беҙҙең көндәрҙә лә табылғылап тора. СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалында ғына, мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа башҡорт ауылдарында табылған ете ҡулъяҙма китап һаҡлана.

«Таһир менән Зөһрә» һәм «Буҙйегет» сюжеттарының үҫеш тарихы ул ҡәҙәр оҙон түгел. Тәүгеһе Сайяди тарафынан яҙылған «Дастан Бабахан» («Бабахан дастаны») тигән поэмала бик тулы һүрәтләнә. Ләкин үҙ ваҡытында бер тапҡыр ҙа баҫылмаған был дастандың ҡасан яҙылыуы хаҡында асыҡ ҡына әйтеп булмай. Татар әҙәбиәтселәре уны XIV быуат ахырында, XV быуат башында ижад ителгән тип иҫәпләйҙәр[1]. Әммә башҡа ғалимдар (мәҫәлән, Х. Ҡороғлы) Сайядиҙы XVII—XVIII быуаттарҙа йәшәгән үзбәк шағиры тип раҫлайҙар. Энциклопедияларға ла ул шулай инеп киткән.

«Таһир — Зөһрә» сюжетының XIX быуатта Әхмәт Уразаев-Ҡормаши тарафынан әҙәбиләштерелеүе йәки, үҙе әйткәнсә, «ғосманлы тәуарихларыннан күреп, еңелерәк нуғай һәм ҡаҙаҡ теленә ирекле рәүештә тәржемә ителеүе», был тәржемәнең 1876 йылдан алып, Октябрь революцияһына саҡлы бер нисә тапҡыр баҫылып сыҡҡанлығы билдәле. Ҡормашиҙан дүрт йылға элегерәк В. В. Радлов Тобол татарҙарынан яҙып алған бер вариантын төрки халыҡтарынан үҙе йыйған әҫәрҙәр йыйынтығында баҫтырған[2]. Шул уҡ темаға XIX быуатта төрөкмән шағиры Молланепестың да «Зөһрә менән Таһир» исемле бер поэма яҙғанлығы, был уртаҡ сюжеттың шулай уҡ әзербайжан, ҡарағалпаҡ, нуғай халыҡтарында ла киң таралғанлығы мәғлүм.

«Буҙйегет» — шулай уҡ күп кенә төрки халыҡтары араһында ҡулъяҙма формала таралған әҫәр. «Бос жигит» исемле бер ҡулъяҙмаһы В. В. Радловтың баяғы йыйынтығының өсөнсө киҫәгендә[3] ҡаҙаҡсаға әйләндереп баҫылған. Сағыштырыу был варианттың беҙҙең ошо китапта бирелгән ҡулъяҙма менән бер булыуын күрһәтте.

Татар әҙәбиәте тарихында Әхмәт Уразаев-Ҡормаши авторлығына бәйләп йөрөтөлгән икенсе бер ҡулъяҙма текст 1874 йылда Ҡазан университеты типографияһында «Ҡиссаи Буз йикет» исемендә айырым китап булып сыҡҡан, Октябрь революцияһына тиклем 13 тапҡыр баҫылған. Әхмәт Уразаев «Таһир илә Зөһрә» китабының ахырында әйтеп үткән мәғлүмәттәрҙән «Буҙйегет» ҡиссаһын да «ғосманлы тәуарихларыннан күреп», уны еңелерәк нуғай һәм ҡаҙаҡ теленә ирекле рәүештә тәржемә иткәнлеген аңларға мөмкин.

---

[1] Борынгы татар әдәбияты. — Казан, 1963, 250-се бит.

[2] Радлов В. В. Образцы народной литературы тюркских племен, живущих в Южной Сибири и Джунгарской степи. Ч. IV. — Спб., 1872.

[3] Радлов В. В. Образцы народной литературы тюркских племен... Ч. III. — Спб., 1870. Ошо уҡ текст, бер аҙ ҡыҫҡартылып, 1976 йылда Алма-Атала сыҡҡан «Ғашыҡ-наме» китабында баҫылған.

«Буҙйегет» ҡиссаһының йәнә дүрт баҫма тексы билдәле[1].

Беҙҙең китапҡа алынған вариант (ҡулъяҙмаһында ул **«Әлҡисса Бус йекет»** тип атала) 1842 йылда Өфөлә яҙылған. Яҙыусыһы — әҫәргә инеш һүҙҙән һәм сюжет ағышына ҡарата әйтелгән «ғибрәт һүҙҙәре»нән (текста ундай һүҙҙәр алты урында осрай) күренеүенсә, Баһауи (ҡулъяҙмала — Баһави) фамилиялы кеше[2]. Береһе (Радлов баҫтырған текст) тотош ҡаҙаҡсалаштырып баҫылған, икенсеһе (ошо китапҡа алынған текст) төрлөсә яҙылып («Аңлатмалар» бүлегендә ҡулъяҙмаға характеристиканы ҡарағыҙ), төрлөсә аңлатырға юл ҡалдырған ҡулъяҙмаға таянып ҡына авторҙың милләтен билдәләү мөмкин түгел. Шулай ҙа ҡулъяҙманың ҡайһы бер тел үҙенсәлектәренә, башҡортса яҙылышлы һүҙҙәр һәм грамматик формалар күп осрауына ҡарағанда, Баһауи көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда ҡаҙаҡтар менән аралашып йәшәгән кеше булһа кәрәк. Һәр хәлдә уның Өфө менән тығыҙ бәйләнеш тотҡан, шул уҡ ваҡытта бөтә төрки һәм Көнсығыш культураһынан мәғлүмәте булған, үҙ заманының эстетик зауыҡтарын яҡшы аңлаған, сәсән телле, нескә күңелле кеше булыуы бәхәсһеҙ.

Беҙ эш иткән ҡулъяҙма ниндәй (төп йәки күсермә) нөсхә булыуына ҡарамаҫтан, уның Радлов баҫмаһы менән берҙәйлеге ҡиссаның ниндәй сәбәптәндер авторҙың үҙе тарафынан яҙылып бөтмәүен, тамамланмаған хәлдә лә ҡулдан ҡулға киң таралыуын раҫлай.

Ҡиссаларҙа матурлыҡ идеалына бәйле хыялдарҙа тыуған саф мөхәббәт сағыла, сүлдәр, диңгеҙҙәр аша бер-береһенә тартылған ғашиҡтарҙың фажиғәле яҙмышы хикәйә ителә. Асылда, был — урта быуат Көнсығыш поэзияһында киң таралған романик дастандар (поэмалар) темаһы, күп әҫәрҙәрҙә ҡабатланған традицион сюжет. Әммә беҙҙең өсөн бында айырата шуныһы ҡыҙыҡлы: геройҙарҙың эш-ҡылыҡтары, сюжетты хәрәкәткә килтергән мотивтар башлыса фольклорҙан, атап әйткәндә, героик эпос һәм батырҙар тураһындағы әкиәт жанрынан алынғандар. Буҙйегет менән Ҡарасәс, мәҫәлән, бер-береһен төштәрендә, ә Сәйфелмөлөк Бәҙиғолъямалдың һүрәтен күреп ғашиҡ булалар, Таһир менән Зөһрә — тыумаҫ борон уҡ йәрәштерелгән балалар, Йософто көнсөл ағалары ҡойоға һалып китәләр; Буҙйегет үҙенең йән дуҫы менән икәүҙән-икәү Зәйтүн ғәскәренә ҡаршы тороп, уның йөҙәрләгән һалдатын ҡыра. Буҙйегет-

---

[1] Бу зуғлан. Әхмәтбик һәм Юсыфбик. — Ҡазан, 1896. Икенсе баҫмаһы — Ҡазан: Хөсәенов, 1910; Киссаи Бузжигет. Нуғайсанан ҡаҙаҡсаға мулла Аҡылбик бине Сабал тәржемәһе. — Ҡазан; Матбуғаи Кәримиә, 1911. Бозуғлан. Ҡарағалпаҡтың халыҡ дастаны: Хәйретдинов Кияс жрауҙан Ҡ. Мамбетназаров яҙып алған. — Нокис, 1961; Боз йигит (телдән Б. А. Ҡарасов яҙып алған) //Ноғай халыҡ йырлары. — М.: Наука, 1969.

[2] Был хаҡта тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе түбәндәге мәҡәләнән алырға мөмкин: Нур Зарипов. «Буҙйегет» ҡиссаһының Өфө варианты //Ағиҙел. — 1979. — № 12; Башҡорт әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре /Н. Т. Зарипов менән Ғ. Б. Хөсәйенов редакцияһында, — Өфө, 1979.

гең үҙен иһә уның итек табанына алтыға бөкләп һалған алмас ҡылысы ғына киҫә ала һ. б. һ. б.

Ҡиссаларҙың хикәйәләү стилендә фольклор саралары, фольклор формалары шулай уҡ ҙур урын ала. «Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһы, мәҫәлән, халыҡ телендә йөрөй торғас, ҡисса формаһын бөтөнләй юғалтып, баштан-аяҡ әкиәт формаһына күскән. «Әл-ҡисса Буҙйегет» әҫәрендә ҡобайыр һәм бәйет формалары, сәсәндәр ижадына хас һүрәтләү саралары (бигерәк тә әйтемдәр, тапҡыр һүҙҙәр) ҙур урын ала. Ҡары ахундың йыры — шау дидактик ҡобайырҙар стилендә. Ҡыҫҡаһы, шул: романик ҡисса-хикәйәттәрҙә фольклор һәм яҙма поэзия традициялары бергә үрелеп, тема ике арала йөрөгән формала яңы идея-эстетик кәүҙәләнеш ала. Гуманистик идеалдар яҡтылығында мөхәббәт ирке яҡлана, ғашиҡтарҙы фажиғәле яҙмышҡа дусар иткән социаль тигеҙһеҙлеккә һәм ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы, үҙһүҙле тирандарға ҡаршы әсе нәфрәт белдерелә.

Социаль мотивтар «Таһир менән Зөһрә» һәм «Буҙйегет» поэмаларында көслөрәк бирелгән. Күп төрлө ҡаршылыҡтарҙы еңеп, ғауҙар-диңгеҙҙәр аша бер-береһенә ашҡынған саф йөрәкле Буҙйегет менән Ҡарасәс йәки Сәхибьямалдың һәләкәте — был инде үкенесле яҙмыш ҡына түгел, ә шул уҡ социаль тигеҙһеҙлектең ғибрәтле бер фажиғәһе. Шуға бында тирандарға, кешенең үҙ рухын, уның юғары тойғоларын һәм гуманистик ынтылыштарын иҫәпкә алмаған феодаль тәртип-йолаларға ҡарата асыу сағыла.

Йәштәрҙең иркен сикләгән феодаль мөнәсәбәттәр, реакцион йола һәм дини ҡанундар мөхәббәт трагедияһын тыуҙыра. «Фажиғәле ҡапма-ҡаршылыҡтың былдай тибы феодаль йәмғиәттә генә барлыҡҡа килә»[1].

Таһир менән Зөһрә, Буҙйегет менән Ҡарасәс һәм, өҫтәргә кәрәк, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу, Тарғын менән Аҡйондоҙ (Аҡъюныс) трагедияһы ла, асылда, шул фекерҙе ҡеүәтләй.

Беҙҙең өсөн бында йәнә шуныһы әһәмиәтле: мөхәббәт темаһына бәйле рәүештә халыҡ ижадында яңы эстетик мотивтар, яңы төшөнсәләр тыуа. Был, бөтәһенән бигерәк, матурлыҡ төшөнсәһе.

Дөрөҫ, халыҡ ижадында матурлыҡтың үҙен тасуирлап күрһәтеү, һынландырыу юҡ дәрәжәһендә. Егет йәки ҡыҙҙың матурлығы, әҙәттә, «бик һылыу», «бик матур», «сибәр» кеүек дөйөм эпитеттар йәки «айҙай һылыу», «ай кеүек нурлы йөҙлө» ише традицион сағыштырыуҙар менән генә һыҙатлана. Әгәр фольклорҙа геройҙың портретын һүрәтләү, ғөмүмән, булмауын иҫәпкә алһаҡ, быға аптырарға урын ҡалмай, әммә был «кәмселек» мөхәббәт хикәйәттәрендә икенсе яҡ менән ҡаплатыла: ғашиҡтарҙың матурлығы уларҙың сафлыҡтарын, бер-береһенә тоғролоҡтарын, юғары тойғоларын хикәйәләү аша тултырыла. Мөхәббәт тойғоларын һүрәтләүҙә инде сәнғәтсе һүҙ оҫталары һис ниндәй наҡыҫлыҡ күрһәтмәгәндәр, һәр кемдең күңелен елкендererлек иң сағыу романтик буяуҙар менән эш

[1] Борев Ю. Б. Основные эстетические категории. — М.: Высшая школа, 1960. — С. 154.

иткәндәр. Быныһы инде, асылда, геройҙарҙың характер үҙенсәлектәрен һүрәтләү тигән һүҙ. Тап бына ошо тәңгәлдә «Буҙйегет» һәм «Таһир менән Зөһрә» поэмалары «Йософ менән Зөләйха» хикәйәтенән өҫтөнөрәк тора.

Ҡөрьәндәге «Йософ» сүрәһенән айырмалы булараҡ, хикәйәттә геройҙарҙың икеһе лә бик матур. Йософтоң нурлы йөҙөнә шаҡ ҡатып, бисәләр ит йәки әфлисун урынына үҙҙәренең бармаҡтарын турап ултырыуҙарын да һиҙмәйҙәр хатта. Был инде идеаль матурлыҡтың да иң юғарыһы, әлбиттә. Әммә ғишыҡ уты бары Зөләйха күңелендә дөрләй, уны ғына көйҙөрә. Ә Йософ иһә— үтә пассив; ул бөтә яҙмышын тәҡдиргә тапшырған. Бында, әлбиттә, Ҡөрьән йоғонтоһо ла һиҙелеп ҡала.

Таһир менән Буҙйегеткә килһәк, былар инде үҙҙәре лә, һөйгән ҡыҙҙары ла — мөхәббәт ҡорбандары, һис ниндәй ҡаршылыҡ алдында тыйылып ҡалмаған актив характерҙар. Батша (йәки хан) ғәскәренә ҡаршы торғанда, егеттәргә эпос геройҙарына хас ғәҙәттән тыш батырлыҡ һыҙаттарының йәбештерелеүе образдарҙың эстетик әһәмиәтен арттыра. Ғорур йәштәрҙең фажиғәле үлеме — феодаль тормошҡа протест һымаҡ ҡабул ителһә, Таһир менән Зөһрәнең ҡәберҙәрендә шытып сыҡҡан гөлдәрҙең (йәки тирәктәрҙең) бергә үрелеп үҫеүе тәрән мәғәнәле поэтик символ булып тора. Ул, ислам идеологияһына ҡапма-ҡаршы рәүештә, мөхәббәттең үлемдән көслөрәк булыуын сағылдыра. Был әҫәрҙәрҙең халыҡ араһында киң таралыуы һәм бөгөнгө көнгә тиклем йәшәүе ана шул гуманистик идея менән аңлатыла ла инде.

Инде бөтә һөйләгәндәрҙән шундай һығымта яһарға мөмкин.

Һуңғы быуаттарҙа халыҡ ижадына Көнсығыш поэзияһының йоғонтоһо фольклорҙа яңы күренештәр тыуҙыра. Башлыса эпос традициялары ерлегендә ижад ителгән фажиғәле мөхәббәт ҡиссалары ике формала — ҡулдан ҡулға күсерелеп һәм телдән телгә һөйләнеп — киң тарала. Халыҡ телендә улар ҡыҙыҡлы үҙгәрештәр кисерә; фольклор традициялары көсәйтелә, ҡайһы берҙәре хатта тулыһынса тип әйтерлек әкиәт стиленә күсә.

Тиҫтәләгән йылдар буйына күп кешеләр — фольклорсылар һәм крайҙы өйрәнеүселәр, сәсәндәр һәм, ғөмүмән, халыҡ ижадын һөйөр һәүәҫкәрҙәр ҡатнашлығында тупланған материалдарҙан һайлап алып, өс китапта бирелгән башҡорт халыҡ эпосы — быуаттар төпкөлөнән хәҙерге заманғаса килтереп еткерелгән изге аманат, ата-бабаларҙың беҙҙең быуынға тапшырған рухи мираҫы ул. Был мираҫта башҡорт халҡының оҙайлы тарихи тормош юлы, быуаттарға һуҙылған социаль ынтылыштары, әхлаҡи эҙләнеүҙәре, эстетик ҡараштары, рухи йөҙө сағыла.

*НУР ЗАРИПОВ.*

# ҠИССАИ ЙОСОФ

## Һәҙа китаб Йософ ғәлиәссәләм*

Бисмиллаһи әр-рәхмани әр-рәхим!

Әлхәмду шөкөр вә дан булһын Аллаға[1],
Мәңге йәшәй торған зөләлжәләлгә.
Бөтә йыһанда тиңдәш юҡ ул Хоҙайға,
Уны баҡый һәм бөйөк тип белдек имде.

Унан аҙаҡ — алла дуҫы Мөхәммәткә[2],
Пәйғәмбәрҙәр араһындағы Әхмәткә,
Ике йәйә араһы[3] ҡалған Әхмәткә —
Маҡтау-данлау яуып торһон даим имде.

Унан ололайыҡ мәғәрә эйәһен[4],
Тау эсендә лә туҡтатманы һөйөүен,
Дуҫлыҡҡа әҙер торҙо, тыйҙы асыуын,
Тоғролого әллә кемдән артыҡ имде.

Унан аҙаҡ Хаттаб улы Ғүмәр[5] тыуҙы,
Ғәләмдә ғәҙеллеге менән мәшһүр булды,
Йөҙ мең ирҙән изгелекте артыҡ ҡылды,
Дүрт мең дүрт йөҙ мәсетте һалдырған имде.

Унан да һуң шаһит булған изге Ғосман[6],
Сифаттарын төшөндөргән изге Ҡөрьән,
Алла уға оло диҡҡәтен ныҡ бүлгән —
Ҡөрьәндең йыйылмаһын төҙөгән имде.

Унан инде — ғәскәр башы батыр Ғәли[7],
Йөҙ меңдәргә етә, имеш, уның ғәскәре,
Мәшһүрлектә сағыштырғыһыҙ зөлфәкәре,
Ғәлиҙән дә батырыраҡ юҡтыр имде.

Уның күңелендә йөрөй ике егет,
Дин юлында йөрөгәндер үҙе кеүек,
Хәсән менән Хөсәйендер[8] — ике шәһит*,
Йәшләй йәннәт эйәһе булдылар имде.

Унан тағы ла ихтыяр ирәндәргә,
Хаҡ һөйгәне Мостафаны[9] күргәндәргә*,
Һис кәм түгел — утыҙ өс мең ярандарға —
Һәммәһен дә өлгө итеп беләм имде.

Унан ары — бөтә тоғро хәлифтәргә,
Уҡымышлы, эшен дауам итеүселәргә,
Дингә ышанған изгеләргә, әүлиәләргә —
Барыһы менән алла риза булһын имде.

Унан күренде бер ир — ғилем шишмәһе,
Зиннәтләнде уның менән ислам дине,
Ап-асыҡ белерһегеҙ һеҙ ҙә уны —
Сабит улы Ноғман[10] тип әйтерҙәр имде.

Унан аҙаҡ — дин сәрүәре имамдарға,
Иман нигеҙе, ислам нуры булғандарға,
Хаҡ оло рәхмәтен белдерә уларға —
Әллә күпме афариндар яуһын инде!

Алла мәрхәмәтенә һыйынмайыммы?
Ярлыҡауҙарына өмөт итмәйемме?
Унан әллә ярҙамдар ҙа көтмәйемме? —
Мораҡҡа еткереү уға еңел имде.

Мин — бер зәғиф — һинә һыйынырмын,
мәүләм,
Тәүфиҡҡа ла өйрәнермен һинән, аллам,
Күңелде балҡытып сәбәр, оло эйәм, —
Фәһем менән зирәклелек биргел имде.

Ярҙам итсе, үтенәмен мин — зәғиф ҡол,
Һин — етәксе тотҡандарға иң тоғро юл.
Тәүфиҡ бирәмен тиһәң, ҡөҙрәтең ҡыл,
Бәндәләргә юл башлаусы булғыл имде.

Мин зәғифтә хикмәткә табан йүнәлдер,
Өгөт-нәсихәт өйрәнмәгә илһамландыр,
Күкрәгемдә морат шәме һин тоҡандыр,
Хәтеремде нурың менән яҡтырт имде.

Күңелемә ғәм вә фәһем һыуы һин бир,
Камиллығың менән хикмәт ҡеүәһе бир.
Тағы минә илһам, тәүфиҡ ҡеүәһе бир,
Ҡөҙрәтең бар: ни теләһәң, булыр имде.

Хәтеремдән хата, арыуҙарҙы юйғыл,
Күңелемә рәхмәт орлоктарын һалғыл,
Мин меҫкенгә тәүфик капкаларын аскыл,
Акылым саф, телем татлы кылғыл имде.

Хикмәткә төшөнөргә бир һин кеүәт,
Кол хәтерен байыталыр акыл-һиммәт.
Йософ сәүче* әхүәлдәрен бел тиҙерәк,
Акылым пак, телем асык кылғыл имде.

Йософтоң ниндәй хәлдәр үткәргәнен,
Кәрҙәштәре Йософка ни күрһәткәнен,
Мысырҙа батша булып көн иткәнен
Назым менән әйтәйем — тыңла имде.

Йыһанға килде, ниһәйәт, Йософ нәби,
Атаһы — хактың, һөйгәне Якуп[11] нәби*,
Дәдәһе — Исхак[12] сәүче, дин табибы,
Алла дуҫы Ибраһимдың[13] улы имде.

Бынан ары хикмәттәргә күсмәксемен,
Гөл һәм рәйхан, ынйы-мәрйен сәсмәксемен,
Йософ сәүченең хәлдәрен асмаксымын —
Мөъминдәргә файҙалылыр, тыңла имде.

Киссаларҙан хикмәтлерәк вә күрклерәк,
Тыңлағанда ла колакка ятышлырак,
Китаптарҙың барыһынан мәшһүрерәк
Ошо кисса икәнлеге мәғлүм имде.

## Йософтоң төш күргәне, атаһының юрағаны, ағаларының илағаны...

Ғәзиз Йософ тамам ун бер йәштә ине,
Якуп сәүче итәгендә йоклар ине,
Йоклаганда гәжәйеп бер төш күрҙе лә
Мәғәнәһен атаһынан һорар имде:

«Нурлы кояш, тулган ай һәм ун бер йондоҙ
Сәждә[14] кылдылар төшөмдә миңә төп-төҙ.
Төшөмдә шулай күрҙем — һис бер ялганһыҙ,
Йә, атайым, төшөмдө һин юра имде.

Төшөмдөң мәғәнәһен аңлат имде,
Һуңынан ни булырын да белгерт имде,
Төшөмә дөрөҫ аңлатма биргел имде,
Алда ниндәй изгелек бар — белдер имде».

Мәшһүр бер риүәйәттер ул жаббарҙан:
Бер йәһүҙә бар ине — аты Бостан.

Һораны ул йәһүҙә хаҡ-рәсүлдән,
Дөрөҫ яуап, асыҡ һүҙен көтөр имде:

«Йә Мөхәммәт, ошондай төш Йософ күрҙе:
Ай, ҡояш, ун бер йондоҙ сәждә ҡылды,
Йондоҙҙарҙың исемдәре ни белдерә?
Һәр береһен дә яҡшылап аңлат имде.

Ысынлап та, һин хаҡ рәсүл булһаң әгәр,
Мөғжизиәт көсөнә таянһаң әгәр,
Ун бер йондоҙ атамаһын белһәң әгәр —
Шикһеҙ, пәйғәмбәрлек һиңә», — тиер имде.

Унан һуң Мөхәммәт оҙаҡ уйға ҡалды,
Һәм Ябраил хәҙрәт тә шунда уҡ килде,
Етеү менән үҙе башлап сәләм бирҙе,
Йондоҙ атамаларын аңлатыр имде.

Мөхәммәт әйтер: «Йәһүҙә, атың Бостан,
Әйтермен һиңә ошондай һүҙ-аман:
Инанып, булырһыңмы һин мосолман?
Йәһүтлектән биҙеп, ошоно тыңла имде».

Бар йәһүттәр ошо һүҙгә ризалашты[16],
Мөхәммәт ул йондоҙҙарҙың серен асты.
Йәһүҙә быны ишетеп бик яратты —
Матур тел аныҡ иман килтерер имде.

Рәсүл әйтер: «Тәүге йондоҙ — Жәрйан[17]
булды.
Икенсеһенең исеме Тариҡ ине,
Өсөнсөһөнөң исеме Бирйан ине,
Дүртенсеһенең исеме Ҡуфтар ине,

Бишенсе йондоҙ исеме Ҡабәс ине,
Алтынсыһыныҡы инде Ҫабит ине,
Етенсе йондоҙҙоң аты Ғомуд ине,
Һигеҙенсе (юл төшөп ҡалған — З. Ш.)

Туғыҙынсыһыныҡы Ҡылыҡ ине,
Унынсы йондоҙҙоҡо — Жарих ине,
Ун беренсе йондоҙ Фәрғ атала ине», —
Һәммәһенә асыҡ бәйан ҡылды имде.

Унан Яҡуп Йософтоң төшөн юраны,
Бәхетле бөтөр тип эштең аҙағы:
«Мәүләнең тейер мотлаҡ һиңә ярҙамы;
Ҡәҙер-хөрмәт вә бөйөклөк килер имде.

Өмөттәр бар: мәүлә һиңә бирер мөлкәт,
Өҫтәүенә насип итер бик күп ниғмәт,

Ҡәрҙәштәрең дә күрһәтер һиңә хөрмәт,
Ун бере лә һиңә хеҙмәт итер имде.

Бар ғәләмдә һинең исемең мәшһүр булыр,
Мәшрик — Мәғриб ололары һине белер,
Ҡиәмәткә ҡәҙәр исемең мәңге ҡалыр,
Хәлил ҙәбх дәүләте күренер имде.

Пәйғәмбәрлек рисаләте[18] аласаҡһың,
Һәм мәмләкәт эйәһе лә буласаҡһың,
Рәхәт тормош, һөйөнөскә сумасаҡһың —
Донъя әхирәт дәүләте күренер имде.

Эй, уғланым, инанғыл — ышан һин миңә:
Төшөндә солтанатлыҡ күренгән һиңә.
Шөкөр ҡыл, рәхмәттәр уҡы мәүләңә —
Хоҙай һиңә яҡшылыҡтар ҡыла имде.

Вә ләкин аманат әйтәйемсе, улан:
Был төшөндө һис бер кемгә һөйләп ҡуйма.
Башкалар һиңә кенә тотмаһын, һаклан —
Әҙәмигә шайтан дошман булыр имде.

Күрербеҙ: ошолар раҫ вә мәғлүм булһа,
Ҡәрҙәштәрең төшөндөң асылын белһә,
Юрағандар өсөн улар һиңә асыу йыйһа, —
Тәү баштан уҡ беҙгә михнәт була имде.

Әй, уғылым, мин бәндәңә һин инанғыл,
Һүҙҙәремде башҡаларға белдермәгел,
Был төшөндө һис бер кемгә лә әйтмәгел —
Ошбу серҙе хоҙай белһә еткән имде».

Бар ине Яҡуптың бер үгәй ҡыҙы.
Ул ишетте, тыңлап тороп, ошо һүҙҙе.
(Ошаҡсынан һаклай күрһен хоҙай беҙҙе!)
Барыһын ҡәрҙәштәренә һөйләр имде:

«Ҡәрҙәшегеҙ Йософ бөгөн бер төш күрмеш,
Ун бер йондоҙ, ай-көн уға сәждә ҡылмыш,
Атайығыҙ төшөн изгегә юрамыш,
Мин ишеттем: изгелеккә юрар имде».

Быны ишеткәс, ҡәрҙәштәрен борсоу баҫты,
Көнсөллөгө, асыуҙары баштан ашты,
Һәммәһенең күңеленә ҡайғы ятты —
Бергәләшеп яуыз ниәт ҡорҙо имде:

«Әгәр ҙә төш еренә етер булһа,
Йософ әгәр оло батша булыр булһа,

Һәммәбеҙ ҙә уға хеҙмәт итер булһаҡ —
Бөтәбеҙгә ниндәй ғәрлек булыр имде!

Йософто эргәбеҙгә саҡырайыҡ,
Ниндәйерәк төш икән — һорашайыҡ,
Уға ҡаршы берәй сараһын табайыҡ, —
Был хәбәрҙең раҫлығын беләйек имде».

Алдарына Йософто килтерҙеләр —
Унаулашып илашып ултырҙылар —
Түбәнселек менән генә үтенделәр:
«Ни төш күрҙең? Беҙгә лә белдер имде!»

Йософ төшөн ҡәрҙәштәренә һөйләмәҫ,
Ата һүҙен боҙорға ул һис тә ҡыймаҫ,
Ялғанды әйтергә бер ҙә теле бармаҫ —
Сараһыҙҙан ни эшләргә белмәҫ имде.

Ун ҡәрҙәштең барыһы ла үрә торҙо,
Нисек тә әйттерергә икешәрләп барҙы,
Сер белергә тырыштылар, бик ялбарып,
Һәр береһе түбәнлеккә төшөр имде:

«Күргән төшөңдө һин беҙҙән һис йәшермә,
Шикләнеп һәм ғәжәпләнеп һин ҡарама,
Эй, ҡәрҙәшем, беҙҙе һин дошман күрмә:
Төшөң нисек юралды — һөйлә имде.

Туғандары хәтерен Йософ һаҡланы,
Өндәшмәне, ни тиергә һүҙ тапманы,
Тоғро ине, алдарға теле барманы —
Сараһыҙҙан барыһын һөйләне имде».

Тыңлағас, баяғылай ҡыланманылар,
Йософҡа хәҙер ышаныс һалманылар,
Йософ төшөнә лә ышанманылар:
Хәҡиҡәт түгел был, тиерҙәр имде.

«Әйҙә, барып атабыҙға баш орайыҡ,
Йософто атабыҙҙан һорап алайыҡ,
Алып китеп берәй төрлө эш ҡылайыҡ:
Үлтерәйек йә йыраҡҡа олаҡтырайыҡ.

Атабыҙ уны беҙҙән дә артыҡ һөйә,
Унын йөҙөн күрмәһә лә яныл көйә,
Мираҫ инселәһә, уға беҙҙән артыҡ бирә —
Уны, ысынлап, ныгыраҡ һөйә имде».

Килделәр вә сәләм-хөрмәт күрһәттеләр,
Асыҡ сырай менән ягымлы өндәштеләр,
Йософ тураһында оҙаҡ һөйләштеләр:

— Беҙҙең менән барһын! — тип һорарҙар имде. —

Эйе, Йософ беҙҙең менән бергә барһын,
Уй ҡатында беҙҙең менән бергә йөрөһөн,
Фәһеме артһын, күңелдәре күтәрелһен,
Ҡискелеккә хеҙмәтеңә ҡайтыр имде.

Төрлө ерҙәр, ағар һыуҙар — барыһын күрһен,
Сәхрәләрҙә төрлө гөлдән сәскә тирһен,
Күргәндәрен килеп тасуирлап бирһен, —
Һеҙ тыңлағыҙ, ул һөйләһен, — тиҙәр имде.

Яҡуп, быны ишеткәс, бик һағышланды,
Бәлә килгәндәй ҡайғырҙы, бәғере янды,
Ҡәнде бер төш күргәйне — хәтере ҡабынды:
Йософто ебәрергә һис ризалыҡ бирмәҫ имде.

Яҡуп әйтте:
— Төнә бер төш күргәйнем,
Төшөмдә, имеш, ун бер бәрәс көтә инем,
Һаҡлай алманым, берећен шунда юғалттым,
Ҡулымдан бүреләр алып китер имде.

Улар әйтте:
— Йософто беҙ ныҡ һаҡларбыҙ,
Ҡәрҙәшебеҙҙе ҡорт* ауыҙына бирмәбеҙ,
Ғәләм ҡорттарын ҡырырбыҙ, үлтерербеҙ,
Валлаһи, Йософ өсөн! — тиерҙәр имде.

Яҡуп әйтер: — Уйлағанығыҙса эш сыҡмаҫ,
Йософом һеҙҙең менән бара алмаҫ,
Үҙемдең дә был эшкә күңелем ятмаҫ,
Йософһоҙ йәнем һис тынғы тапмаҫ имде.

Ахырҙа улар Йософто ҡоторттолар:
— Атабыҙҙан ризалыҡ ал, — тип әйттеләр, —
Беҙҙең менән тамашаға сыҡ, — тинеләр,
Гөлгә ҡунып, ҡоштар унда һайрар имде.

Йософ әйтте:
— Риза булһаң, рөхсәт бирһәң,
Ағаларым менән бергә ҡырҙа йөрөһәм,
Йөрөгән урындарын күҙҙәрем күрһә,
Ҡис етеүгә хеҙмәтеңә ҡайтам имде.

Исраил[19] Йософҡа һис тә ризалашмаҫ,
Аҙға ғына унһыҙ ҡалыуҙы башына алмаҫ,
Ә улының күңеле ҡупҡан, һаман тынмаҫ,
Муйынына һарылып ялбарыр имде.

Ҡаза килһә, күҙенде ул һуҡырайтыр,
Ҡаза килһә, мөмкинлектәр ҡулдан китер,
Илаһиҙың хөкөмө булһа, сараһыҙ итер —
Һис шикһеҙ, шулай килеп сығыр имде.

Зарлы Яҡуп сараһыҙҙан риза булды,
Уландарынан да ныҡлы вәғәҙә алды,
Йософто ебәрергә ул ҡарар ҡылды:
«Иртәгәһен һеҙҙең менән барыр имде».

Әйтер: — Иртәгә һеҙ уны алырһығыҙ,
Икешәрләп нәүбәтләшеп күтәрерһегеҙ,
Ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп йөрөтөрһөгөҙ:
Нәфесе пак, күңеле шат булһын имде».

Исраилдың ҡарарына һөйөнөштөләр,
Икәү-икәү йыйылышып һөйләштеләр,
Йософто үлтерербеҙ, тип антлаштылар,
Бәләһенән ҡотолорбоҙ, тиҙәр имде.

«Һуңынан атабыҙға йүгерербеҙ,
Илашып, ах-вах килеп, өҙгөләнербеҙ,
Йософто ҡорт ашаны, тип әйтербеҙ,
Атабыҙҙан арттырып иларбыҙ имде.

Унан һуңыраҡ хатабыҙҙы беҙ танырбыҙ,
Тәүбә ҡылып, гонаһыбыҙҙан арынырбыҙ,
Бер туҡтауһыҙ хаҡҡа доғалар ҡылырбыҙ —
Тәүбәбеҙҙе хоҙай ҡабул итер имде».

Ул төп үтте, иртәгәһе килеп етте,
Әҙерләнеп ун ҡарындаш ваҡыт көттө,
Йософто һорап, өҙмәйенсә өмөттө,
Исраилға сәләм бирҙе барыһы имде.

Быларҙы күреп Яҡуп ризалыҡ бирҙе,
Үҙе иһә илай-илай үрә торҙо,
Үҙ ҡулы менән Йософтоң башын йыуҙы,
Тарай-тарай оҙон сәсен үрер имде.

Аш ейҙерҙе, ҡулы менән һыу эсерҙе,
Өҫтәренә төрлө-төрлө тун* кейҙерҙе,
Тундарын йофар менән сыландырҙы,
Күҙҙәренә унын һөрмә тартыр имде.

Ибраһимдың сәлләһен башына һалды,
Исмәғил ҡәмәрен биленә алды,
Исхаҡ-аусы кәрзиненә аҙыҡ һалды,
Бардуғына* эсер һыу ҙа ҡойор имде.

Күндерҙе Йософто ла ул үбә-коса,
Тапшырҙы һәр береһенә устан уска:
«Иртә кайтығыҙ бөтәгеҙ ошбу кистә,
Ах, ул кис касан етер! — тиер имде. —

Аманат: Йософто якшы һаклағыҙ һеҙ,
Нәүбәтләшеп, икешәрләп күтәрегеҙ,
Һәммәгеҙ ҙә изге тәрбиә күрһәтегеҙ!» —
Ошолайтып быларҙы күндерер имде.

Бәс, Якуп юлға карап ултырып калды,
Йософто күтәреп улар юлдан барҙы,
Барыһы ла һөйөнөшөп атлай бирҙе,
Динә меҫкен илай-илай йүгерер имде.

Якуп әйтер: «Йә, кыҙым, кайҙа бараһың,
Ни сәбәптән илай-илай эйәрәһең?
Кабаланып та Йософка етә алмаҫһың —
Кәрҙәштәре тамашаға илтер имде».

Динә меҫкен төңөлмәне, етте кыуып,
Етеү менән Йософ кулын тотто ныклап:
«Йософом, кире кайт!» — ти ялбарып,
Кәрҙәштәре, йәне көйөп, бошонор имде.

Ялбарыр зарлы Динә — кире дүнмәҫ,
Ағалары бошоноуын да һис күрмәҫ,
Йософ кулын ныклап тотоп, һис ебәрмәҫ:
«Йә, Йософом, төңөл!» — тип илаулар имде.

Ағалары Йософто күтәрҙеләр,
Бер калкыулык аркаһына ашырҙылар,
Бахыр Якуп, яңғыҙ калып, зарлы илар,
Динә өйгә һыктай-һыктай кайтыр имде.

Динә әйтер: «Мин дә йоклап ята инем,
Төш аралаш капыл илап килеп торҙом,
Эй атайым, төшөмдә ун корт күрҙем,
Алдыбыҙҙа Йософто кабырҙар имде».

Быны ишетеп, Якуп та өнһөҙ калды,
Кайгы уттары бәгеренә токанды,
Йәнә бөтә күңелен бошоноу алды —
Икәүләшеп үкенеп иларҙар имде.

* * *

Улар Йософто түбә аша ашырҙылар,
Шунда инде этеп ергә төшөрҙөләр,

Аҙыктарын эткә биреп ейҙерҙеләр,
Бардуғынан эсер һыуын түгер имде.

Зарлы Йософ унан ары йәйәү барҙы,
Ҡәрҙәштәренең яуыз уйын белеп алды,
Унын күңелендә шөбһәләр яралды,
Икеләнеп, үҙ хәлдәрен һорар имде.

Йософ әйтер:
— Ҡәрҙәштәрем-өмөттәрем,
Ник былай ҡыланаһығыҙ, ағаларым?
Ниңә һеҙ өндәшмәйһегеҙ, ғәзиздәрем?
Мин һуң һеҙгә ни ҡылдым? — тиер имде.

Улар әйтер:
— Һин бер ялған төш күргәнһең,
Төшөң менән беҙҙән һөйкөмлө булғанһың,
Атабыҙҙан ул төшөңдө юратканһың —
Бөгөн бына шунын язаһын ал имде!

Зарлы Йософ илап:
— Мин арыным, — тине, —
Һыуһыҙлыктан тамам йонсоу алды мине,
Аяҡтарым ауырта, талдылар, — тине.
Ҡәрҙәштәре һис кенә баҡмаҫ имде:

Бөгөн файҙа ҡылдырмаҫлыҡ төш
күргәнһең,
Атабыҙҙан төшөңдө юраттырганһың,
Үҙең генә беҙҙән һөйкөмлө булғанһың, —
Быңа шунын мәкере тейҙе имде.

Шәмғунға һыйынһа инде, кире ҡағыр,
Рауил тотоп төртөп йыҡты, сәсен тартып,
Башҡалары, яуызланып, унан артыҡ,
Ҡыуа-кыуа төрлөсә туҡмар имде.

Рауил, сәсенә йәбешеп, ергә һөйрәр:
— Килтерегеҙ Йософто — үлтерең, — тиер. —
Йәнә әйтер: — Йәлләмәйек, бөтөрәйек, —
тиер,
Икәүләшеп туҡтамай һуғырҙар имде.

Шул сәғәттә килеп етте ләғин Иблес,
Өҫтәп тағы хөсөт ҡыла яуыз Иблес,
Ун ҡәрҙәштең йәнен ҡылды артыҡ хәсис,
Һәммәһен дә боҙоҡ юлға тартыр имде:

— Был ялғансы уғлансыҡты үлтерегеҙ,
Ошбу ялған төш тәғбирен бөтөрөгөҙ,

Алдашыуҙың яҙаһын белдерегеҙ! —
Иблес һаман коткоһон һалыр имде.

Уны ишетеп, былар тамам ярһыны,
Асыуҙарын сәсә Йософка барыһы.
Эш нисек бөтөрөн Йософ тоҫмалланы, —
Татлы йәндән инде өмөт китер имде.

Йософ әйтер:
— Яуыз ниәт ҡылдығыҙмы,
Ләғин шайтан һүҙенә ойоноғоҙмо?
Минең ғәзиз йәнемдән туйҙығыҙмы,
Ҡәрҙәшлекте оноттоғоҙҙамы имде?

Боҙоҡ уйҙы ерецә еткерерһегеҙ,
Тулған айҙай нурлы йөҙөм һулытырһығыҙ,
Атабыҙға был әхүәлде белдерерһегеҙ:
Һораһа, яуап бирергә кәрәк имде.

Исраилды ҡалдырырһығыҙ мәхрүм итеп,
Хөсөт менән ағыуларһығыҙ, бәғерен өтөп,
Ҡурҡмайһығыҙмы, ҡәрҙәштәр,
ул бөйөктән? —
Былдай хәлде һис кенә хуп күрмәҫ имде.

Хәлем насар, тәнем яна, зарлы күңелем,
Нимә төштөм был михнәткә мин — бер
мәзлүм?
Эй дәриға!* Атам Яҡуп ҡалды мәхрүм,
Аҙаҡтан мине ҡайҙа күрер имде?!

Үҙем ситдыҡ*, атам Яҡуп, бабам Исхаҡ,
Ун ҡәрҙәшем яфаһынан ҡалдым мин саҡ,
Боҙоҡ уйҙарына тура килдем бит тап,
Бөтәһендә лә яуыз ниәт имде.

Быны ишетеп, Шәмгун тамам асыуланды,
Бысаҡ тартып, Йософка табан ташланды,
Бысаҡ менән үлтерәккә ул ынтылды, —
Уны күреп, Йософ кет-кет көлөр имде.

Шәмғун әйтер:
— Әйт, Йософ, ниҙән көлдөң?
Үткер бысаҡ күреүгә әллә шат булдың?
Әле генә хәсрәтләнеп илай инең,
Көлөүеңдең сәбәбе ни — аңлат имде.

Йософ әйтер:
— Ҡәрҙәштәрем, әйе, көлдөм,
Өйҙә элек яуыз эшкә ниәт ҡылдым,

Әле бына шул эшемдән кире дүндем —
Ҡәрҙәштәрем ҡасан ҡабыр икән имде?

Әйттем: ун оранлы ҡәрҙәштәрем,
Ун шәриф* вә ун зариф* серҙәштәрем,
Минең ғәйрәтле арыҫландарым —
Былар менән ниндәй дошман йотор имде?

Аһ, иң ҡаты дошман минә һеҙ булдығыҙ,
Нахаҡ бәлә, ауыр яра һеҙ һалдығыҙ,
Йәнәһе, ауыр хатамды белдегеҙ —
Был ғибрәтте аңларға кәрәк имде.

Бына хәҙер ул яҙығым булды асыҡ,
Бөтә тәнем өҙгөләнә, рәнйеүем ҡаты,
Изгеләргә ошондай эш түгел лайыҡ.
Яманлыҡты эшләмәһәң һәйбәт имде.

Әгәр барығыҙ ҙа мәслихәт күрһә,
Мин үлеп, моратығыҙ еренә етһә,
Минең тағы йөҙ мең йәнем булһа —
Бөтәһен дә һеҙгә фиҙа ҡылам имде.

Быны ишетеп, Йәһүҙәнең йәше тамды,
Аяу уты ҡайнаны, бәғере янды,
Яуыз эштән, тәүбә ҡылып, кире дүнде,
Үлтермәйек Йософто, тиер имде.

Ҡәрендәшлек шәфҡәтен ул күрһәтте,
Йософтоң, үрелеп, ҡулынан тотто,
Һыйындырып, итәктәре менән япты,
Ҡәрҙәштәре яфаһынан ҡаплар имде.

Зарлы Йософ Йәһүҙәнән шәфҡәт күрҙе,
Халик шулай Йософҡа ярҙам бирҙе.
Туғыҙ ҡәрҙәше Йософто яман күрҙе,
Йәһүҙә менән дәғүәләшеп торор имде:

Йәһүҙә әйтер:
— Эшегеҙ дөрөҫ булмаҫ,
Ҡәрҙәш ҡәрҙәште бер ваҡытта үлтермәҫ.
Ундай эшкә тәңренән рәхмәт булмаҫ,
Иң яҡшыһы — тәүбә ҡылып, төңөлөү имде.

Тәңренән ҡурҡайыҡ, яуыз ғәмәл ҡылмайыҡ,
Әхирәттә гонаһлы булып ҡалмайыҡ,
Ожмах биреп, тамуҡты һатып алмайыҡ,
Тамуҡ эстәренә мәңгегә төшмәйек имде.

Ошбу эште, ай, ҡәрҙәштәр, һеҙ ҡылһағыҙ,
Атағыҙға, һөйләшкәнсә, аңлатһағыҙ —

Мәүлә рәхмәтенән айырылаһығыҙ.
Яман уйҙан төңөлөү яҡшы булыр имде.

Быларҙың оло бабаһы — данлы хәлил,*
Уттарға атты уны Нәмруд яһим[20],
Ут эсендә лә һаҡланы уны йәлил:*
Хәлил өсөн утты баҡса ҡылды имде.

Унан аҙаҡ хәбәр ебәрҙе изге йәлил.
Ибраһимға йәлил әйтер: «Йә, хәлил,
Минең өсөн яратҡан улыңды ҡорбан ҡыл —
Һөйөклө Исмәғиленде![21] — тиер имде.

Бәс, бысаҡ Исмәғилде һис киҫмәне,
Хәлилгә лә ут яҡын да килмәгәйне.
Яҡуп тәңрегә һис бер гонаһ алманы —
Һеҙ ҙә шулай тәңренән ҡурҡығыҙ имде.

Йәһүҙә һүҙҙәрен улар ишетмәҫтәр,
Өҙгөләнеп, тәүбәгә һис тә килмәҫтәр,
Әхирәт ғазабынан да ҡурҡмаҫтар —
Һәммәһе Йософҡа асыу тотор имде.

Йәһүҙәнең имде дарманы ҡалманы,
Өгөтләп тә бер ҙә булдыра алманы,
Ҡулдарынан Йософто ала алманы —
Аптыранып, ни эшләргә белмәҫ имде.

Әйтер:
— Үлтермәгеҙ, йәлләгеҙ, тип,
Ҡәрҙәшегеҙ ҡанын ҡоймағыҙ, тип,
Һис булмаһа, бер ҡойоға ташлағыҙ, тип,
Йә үлер, йә йыраҡҡа китер имде.

Был фекер уларға бик оҡшап төштө,
Ошо тәҡдимгә улар тиҙ килеште,
Бөтәһе бер-береһенә ҡараштьы —
Меҫкен Йософ һаман да инәлер имде.

## Ағаларының Йософто ҡойоға һалғаны, аталарын ҡайтып алдағаны

Ул ҡойо элек-электән ҡалған ине,
Уны уҫал Ғад[22] кафыр ҡаҙған ине,
Төбө тәрән, һыуы үтә әсе ине,
Һыуын уның һис берәү ҙә эсмәй имде.

Тора-бара уның һыуы өҫкә ҡалҡҡан,
Йылан-саян — барыһы унда урын тапҡан,

Хәшәрәттәр уҡмашышып бергә яткан,
Әллә ҡайҙан йыйылғандар бында имде.

Ул заманда бер заһид* та булмыш ине,
Ҡитап аша Йософ менән таныш ине,
Башҡаларға ла мәғлүмәт ҡылмыш ине,
Ишеткәндәр ғәжәйепкә ҡалмыш имде.

Ул заһид был хәлдәрҙе алдан уҡ белде,
Халиҡтан бик үтенде, доға ҡылды,
Йософто бер күреренә өмөтләнде,
Мәүләнән оҙон ғүмер һорар имде.

Ул заһидтың Йософто күргеһе килде,
Ниһәйәт, доғаһы унын ҡабул булды,
Халиҡ уға оҙон ғүмер насип ҡылды,
Йософто күреү көнө лә етер имде.

Халиҡ заһидҡа: «Ваҡытың етте һинең,
Бар әйҙә, Ғад ҡойоһона кергел, тине,
Йософ ситдыҡ матурлығын күргел, тине,
Йософ унда килгәнсе, көтөп тор имде».

Килде, төштө ул заһид был ҡойоға,
Бер өҙләкһеҙ сәждә ҡылды ул мәүләгә.
Араһында доға ҡылды ул мәүләгә,
Йософто күреү теләге менән имде.

Һәр кистә ризығы унын анар* ине,
Уң яғында нурҙан кәндил яныр ине,
Унын йәше мең ике йөҙ йыл ине,
Ахырҙа ул Йософто күрер имде.

Йософтоң биленә бер еп таҡтылар,
Үҙҙәренең йөрәгенә ут яҡтылар,
Ҡойо эсенә һалырға уй тоттолар,
Ялбарыуын Йософтоң ишетмәҫтәр имде.

Йософ әйтер: «Һис бер яҙыҡ эш ҡылманым,
Һеҙ ҡурҡҡан буталсыҡ төш тә күрмәнем,
Бер ерҙә лә оятлы кеше булманым», —
Ярлы Йософ меҫкенләнеп ялыныр имде.

Улар Йософ зарына ҡолаҡ һалманы,
Хәсрәтләнеп илауына аптыраманы,
Йәһүҙәнең кәңәшен дә тыңламаны —
Барыһынын да асыуы ташыр имде.

Йософ әйтер: «Яуызлыҡты уйламағыҙ,
Шайтан ҡотҡоһона төшөп ойомағыҙ,

Шәрә итеп, тундарымды һалдырмағыҙ,
Ата хаҡын, туған хаҡын һаҡла имде.

Бөгөн үлһәм, аҙаҡ миңә кәфен кәрәк,
Әй дәрифа! Кәфен булһын ошо күлдәк».
Уларҙағы һыуыҡ бәғер, ҡаты йөрәк —
Күлдәген иңенән һуйып алырҙар имде.

Биленә бер еп тағып килтерҙеләр,
Йософто шул ҡойоға төшөрҙөләр,
Шәфҡәтһеҙҙәр! Йөҙҙәрен сөйөрҙөләр,
Берене килеп арҡанын киҫер имде.

Йософ әйтер: «Эй илаһым, бөйөк Аллам,
Бисаралар өлөшө — рәхимле аллам,
Һис өмөтөм ҡалманы ағаларға,
Миңә үҙең ярҙам күрһәт», — тиер имде.

Уны ишетеп, ҡәрҙәштәре шаштылар,
Барыһы ла хаҡҡа төбәп олоштолар,
Йыйылышып, бергәләп һөйләштеләр,
Илаһым, үҙең ярҙам бир, тиҙәр имде.

Бисаралар таянысы — мәлик-рахман,
Ҡөҙрәте менән Ябраилға ҡылды фарман:
«Йә, Ябраил, Йософҡа күрһәт һин ярҙам!» —
Рисаләт мишуратын бирер имде.

Алланың хәбәрсеһе — Ябраил хәҙрәт,
Хоҙай уға биргән икән шундай ҡөҙрәт:
Ҡауышты Йософ менән шул уҡ сәғәт —
Йософто һыуға теймәҫтән үк тотор имде.

Ябраил әйтер Йософҡа: «Әй һин, уғлан,
Мәүлә һиңә ебәрҙе изге сәләм,
Пәйғәмбәрлек бүләк итә, әйҙә, ҡыуан,
Рисаләтең мөбәрәк булһын имде!»

Йософ янына Ябраил килеп еткәс,
Ябраилды Йософ үҙе лә танығас,
Хаҡтың сәләмен-ҡотлауын ҡабул ҡылғас,
Һүнгән күңеле шатланып китер имде.

Ҡойоноң иң төбөндә бер таш бар ине,
Ябраил ул ташты өҫкә сығарҙы,
Һыу өҫтөндә батмайынса был таш торҙо,
Йософ килеп таш өҫтөнә ултырыр имде.

Таш өҫтө ебәктән дә йомшаҡ булды —
Йософ шулай халиҡтан шәфҡәт алды,

Йософтоң нуры менән ҡойо тулды,
Балҡып, нуры хатта тышҡа сығыр имде.

Йәлилдән Ябраилға килде тағы фарман,
Сәфәргә сыҡты унан, ожмахҡа табан.
Ожмахтан алып килде кейем, тәғәм,
Өҫтөнә кейеп, Йософ ашҡа тотонор имде.

Ҡейем кейҙе, тәғәм ейҙе, шөкөр ҡылды,
Йөҙө төрлө-төрлө нурҙар менән тулды,
Ябраилдың нуры менән бергә ҡушылды, —
Ерҙән күккә нурҙан күпер үтер имде.

Шунда ғына заһид урынынан торҙо,
Йософтоң матурлығын күҙҙәре күрҙе,
Ирешге ул моратына күпме йылғы!
Күрешеп, ул хаҡҡа шөкөр әйтер имде.

Заһид әйтер: «Эй Йософ, бер ҙә ҡайғырма,
Ҡәрҙәштәреңдән күңелеңде айырма,
Уларға яуыз доғалар һис тә ҡылма!»
Йософ һорар: «Үҙ хәлеңде һөйлә имде».

Заһид әйтер: «Китап аша тәүләп күрҙем,
Ҡарағас та йөҙөңә ғашиҡ булды.
Мең ике йөҙ йыл буйы доға ҡылдым,
Иншалла, моратыма еттем имде».

Йософҡа заһид күп кенә өгөт бирҙе,
Йософ иһә өгөттәрен бик хуп күрҙе,
Шул саҡта ғына заһидҡа әжәл килде —
Йософ тағы ҡайғыға батыр имде.

Бойорҙо Ябраилға Мәүлә йәлил:
«Йософ янына тиҙ барғыл, йә, Ябраил,
Сәләмдәремде һин еткер, өгөтләгел,
Хәтеренән ҡайғы-хәсрәтен юй имде.

Ҡойонан сығарылғас, һатыласаҡ,
Һуңынан төрлө ғәйбәткә юлығасаҡ.
Артабан зинданға ла ябыласаҡ, —
Был хәлдәргә минең әмер булыр имде.

Һуңынан бәләләрҙән дә ҡотҡарам,
Атаһына, ниһәйәт, юлыҡтырам.
Дәүләтен дә, мөлкәтен дә мин арттырам —
Таж вә тәхет, мәмләкәт бирәм имде.

Көнләшкәндәр хеҙмәтенә киләсәктәр,
Оятсылыҡ, хурлыҡ кисерәсәктәр,

Үкенестә, хәсрәттә йөрөйәсәктәр, —
Йософ — бик шат, улар һыҡтап тотор имде».

Шул уҡ сәғәт Ябраил Йософҡа килде,
Сәләмде, әйткән һүҙҙәрен еткерҙе,
Йософ, киләсәген аңлап, шөкөр ҡылды,
Ҡазаларға ризалығын бирер имде.

* * *

Ҡәрҙәштәре ҡайтырға ыңғайланы,
Берсһе кәзә бәрәсен боғаҙланы,
Ҡанын Йософ күлдәгенә буяғыланы,
Башҡалары илай-илай ҡайтыр имде.

Юл буйында яңғыҙ ағас үҫә ине,
Яҡуп шунын төбөндә көтә ине,
Һауанан, алыҫтан бер өн ишетелде,
Тыңлаһаң, «етмеш» тигән һымаҡ имде.

Яҡуп әйтер: «Әллә етмеш көнгә микән,
Әллә тағы бары етмеш айға микән,
Әллә инде хатта етмеш йылға микән
Йософомдоң кисегеүе?» — тиер имде.

Зарлы Яҡуп илай-илай юлға сығыр,
Йософтан айырылыу уты бәғ(е)рен яғыр.
Яҡуп баҡты шул тарафҡа — ауаз сығыр,
Йософто күрһәм, тип көтөп торор имде.

Күңеле зарлы, илай-илай өйгә керҙе,
Улдарынын һөйләгәнен шикле күрҙе,
Йософто юҡ иткәндәрен һиҙҙе,
Намаҙ ҡылыр, үҙе илай-һыҡтай имде.

Уғландары үҙ араһы антлаштылар,
Өйгә етә үкерешеп илаштылар.
«Аһ дәриға! Йософ! — тип инрәштеләр,
Йософобоҙҙо юғалттыҡ», — тиҙәр имде.

Яҡуп өйҙә намаҙын уҡыр ине,
Уландарынын инрәүе ишетелде,
Ҡолағына илау тауышы ярып керҙе,
Тороп, шундуҡ ҡаршыларына сығыр имде.

Уны күреп, үҙҙәре лә үкенделәр,
Тундар йыртып, сәстәр йолҡоп, бөтөнделәр,
Йософ! тип барыһы ла һыҡтанылар,
Йософобоҙҙо алдырҙыҡ, тиҙәр имде.

Уны ишетеп, Яҡуптың аҡылы шашты,
Ҡысҡырҙы, һуштан яҙып, ергә төштө.
Уны күреп, уландары ҡайғырышты,
Аһ дәриға! Хата ҡылдыҡ! — тиерҙәр имде.

Ул төн үтте, тағы ла иртә булды,
Шунда ғына меҫкен Яҡуп аңға килде,
Уландарын саҡыртып, һорау бирҙе:
— Ҡайҙа минең Йософом? — тиер имде.

Уғландары илай-илай яуап тотто:
— Барыбыҙ күмәкләшеп берәр уҡ аттыҡ,
Уҡтарыбыҙҙы алырға тип киткән саҡта,
Йософ әйбер һаҡларға ҡалыр имде.

Ҡире килгәнсе әйләнеп, ҡаза килгән,
Шул ерҙә бер яуыз бүре йөрөгән,
Хәҡиҡәт, шул бүре Йософто ейгән,
Ләғнәт төшһөн уға! — тиерҙәр имде.

Яҡуп әйтте:
— Әгәр шулай булған икән[23],
Бүре уны ашап һәләк иткән икән,
Ағзаларынан берәй нәмә ҡалған икән,
Табып алып, килтерегеҙ шуны имде!

Кәфенләп, мин уны гүргә һалыр инем,
Өҫтөнә матур ҡоролма ҡуйыр инем,
Үҙем Йософом эргәһендә ҡалыр инем,
Ғүмеремде шунда үткәрермен имде.

Улар әйтте:
— Эй атабыҙ, күп ҡараныҡ,
Унаулашып ҡайҙарға эҙләргә барманыҡ,
Унда-бында һис нәмә таба алманыҡ.
Һәммәһен дә бүре ашап бөткән имде.

Берәүһе ҡуйынынан ҡанлы күлдәк алды,
Яҡуптың алдына шуны йәйеп һалды.
Төртөп күрһәткәс тә күлдәктәге ҡанды,
Яҡуп тағы һуштан яҙып ҡолар имде.

Иҫенә килгәс, күлдәкте тотоп ҡараны,
Үбә-ҡоса, илай-илай тотҡоланы,
Бер ерендә лә йыртығын табалманы,
— Ниндәй шәфҡәтле бүре һуң? — тиер имде.

Ҡанын эсеп, итен бөткәнсе ашағас,
Йософомдан мине шулай мәхрүм ҡылғас,
Өҫтәүенә, күлдәге лә йыртылмағас,
Берәй хикмәт барҙыр бында, — тиер имде.

Бәс, шулай булған бит һеҙҙең теләгегеҙ,
Йософто ебәрергә үтенеүегеҙ,
Алып китеп, шунда һәләк иткәнһегеҙ!
Былай илап тороуығыҙ ялған имде.

Һүҙҙәремә бөтәгеҙ ҙә буйһоноғоҙ,
Тотоп ҡортты, бында алып килтерегеҙ,
Ҡушҡанымды үтәгеҙ һис бер һүҙһеҙ,
Был хәлдең хәкиҡәтен беләйем имде.

Юғиһә, мин сәждә итеп, доға ҡылам:
Һеҙгә ҡаты яза бирер олуғ хоҙам;
Ул һәр ваҡыт ҡабул итә минең доғам,
Мин мәзлүм доғаһынан ҡурҡығыҙ имде.

Быны ишетеп, улар йәнә ҡуҙғалдылар,
Тауҙа бер гонаһһыҙ бүре ауланылар,
Яҡуп эргәһенә тотоп килтерҙеләр;
— Йософто ашаған бүре! — тиҙәр имде.

Меҫкен Яҡуп ул бүрене шунда күрҙе,
Илай-илай хәсрәт менән ҡаршы барҙы.
— Йософом ҡайҙа? — тип, әсенеп һораны, —
Ниңә ейҙең Йософомдо, әйтсе имде.

Эй бүре! Ниңә ашаның, әйт, йәшермә:
Нисек бөтөн ҡалды күлдәк — аңлат миңә?
Халиктан ҡурҡмайынса, мин нәбигә*
Хәсрәт һалып, улын һәләк иттек имде?

Халиктан бүрегә шунда әмер килде,
— Исраилга һөйләп бир һин, — тине, — хәлде!

Телгә килеп, бүре ни булғанын әйтте,
Әҙәп һаклап, йомшаҡ һүҙен һөйләр имде.

Бүре әйтте:
— Валлаһи, Йософто күрмәнем,
Уның ҡайҙа икәнен дә белмәнем.
Алла шаһит, ул тирәлә йөрөмәнем,
Мин гонаһһыҙ, ышанығыҙ миңә имде.

Һин бит үҙең алланың бер рәсүлеһең,
Хаҡ ебәргән илселәрҙең береһеһең,
Тәңре аша һин бит үҙең дә белерһең:
Пәйғәмбәрҙәр ите беҙгә харам имде.

Теләһәң, бойороҡ бир, мин барайым;
Ошо тирә бүреләрен мин йыйнайым,
Барыһын да ҡаршыңа хәҙер туплайым, —
Дөрөҫлөктө әйҙә раҫлаһындар имде.

Улар ҙа Йософто бер күрмәгәндәр,
Валлаһи, уға хаслыҡ ҡылмағандар,
Тәңрегә һис гонаһлы булмағандар,
Пәйғәмбәрҙәр ите беҙгә харам, тиҙәр имде.

Мин үҙем Мысырҙан яңы килдем,
Бер ҡәрҙәшем бар ине, шунда үлде.
Ризыҡ ҡапмағаныма ун ете көн тулды:
Хәсрәтемдән ауыҙым аҙыҡланмаҫ имде.

Хайран булдығм: бер ерҙә мине тоттолар,
Золомлоҡ менән эргәңә һөйрәттеләр,
Ауыҙыма ҡайһылары ҡан һөрттөләр, —
Гонаһһыҙмын, асылын бел һин имде.

Якуп ҡорт һүҙенең раҫ икәнен белде,
Үҙ ҡулы менән бүрегә аш ейҙерҙе.
Әйтер:
— Был ҡазаны бирҙе тәңре, —
Доға ҡылып, ҡортҡа рөхсәт бирер имде.

Был ҡазаны бирҙе миңә хоҙай-мәүлә,
Сабырһыҙлыктан бөйөктәр төштө түбән.
Шуға булырмын мин сабыр-күркәм,
Сабырлыҡтан морат хасил булыр имде.

Йәһүҙә ул урынға көн дә сығыр,
Ҡойо эргәһенә барып, көн дә бағыр,
Йософ менән хәбәрләшеп, күңел баҫыр,
Үҙ хәлдәрен дә һөйләп ҡайтыр имде.

## Малик Дуғырҙың төш күргәне, Йософто ҡойонан сығарғаны, ағаларының һатып ебәргәне

Мысыр эсендә бер бай сауҙагәр йәшәй ине,
Уның исеме Малик ибне Дуғыр ине.
Дуғыр улы Малик бер төш күргән ине,
Төш мәғәнәһен юраусынан һорар имде.

Юраусыға Малик әйтер: — Күрҙем бер төш,
Төшөмдә Ҡәнғанға китеп барам, имеш.
Ғад ҡойоһона барып етеүем булмыш —
Ҡояш, ысын, күктән ергә инер имде*.

Ҡояш, хәкикәт, күктән ергә һенде,
Яғамдан сыҡты, ҡуйынымдан керен,
Күктән яуҙы ямғыр ише ынйы-мәрйен,
Уларҙы мин итәгемә йыйҙым имде.

Бик һөйөнөп, уларҙы алдым йыйып,
Һандығыма бергә-бергә һалдым ҡуйып.
Төшөмдөң мәғәнәһен аңлауы ҡыйын.
Юраусым, йә, аңлат миңә шуны имде.

Төш юраусы саҡырҙы:
— Ултыр яныма,
Мәғәнәһен асып бирәм һорауыңа.
Ике ҡыҙыл алтынды ҡуй был яғыма:
Төшөң бик мөбәрәк булһын имде.

Әгәр ҙә шундай төш күргәнһең икән,
Төшөңдә ул урынға барғанһың икән,
Хәкикәт, унда дәүләткә эйәһең икән —
Бер шәриф ҡол* ҡулыңа төшөр имде.

Ул ҡолдо һин шунда һатып аласаҡһың,
Аҙаҡ һатып, күп ниғмәттәр табасаҡһың,
Дәүләт-мөлкәт эйәһе буласаҡһың,
Шул сәбәптән алда рәхәтлек көтөр имде.

Ошоларҙан олуғлыҡҡа ирешерһең,
Һәм халиҡтың берлегенә төшөнөрһөң,
Ҡафырлыҡ михнәтенән ҡотолорһоң.
Донъя — әхирәт дәүләте — күренер имде.

Быны ишетеп, Малик Дуғыр сәфәр ҡылды,
Ҡәнған иленең эсенә килде, керҙе,

Ғад ҡойоһона еткәс, йөгөн төшөрҙө, —
Төшөндә күргәнен иҫтә тотор имде.

Ҡолдарына бойорҙо — тыңланылар,
Ул ҡойоноң тирә-яғын ҡаранылар,
Ҡабат-ҡабат эҙләй торғас, арыныдар,
Малик Дуғыр үҙе лә эҙләшер имде.

Әллә ҡайҙан һауанан бер өн килде,
Дуғырҙың ҡолағына ишетелде,
Әйтте: «Теүәл илле йыл ваҡыт ҡалды
Ул уғланды алыуыңа һинең имде!

Икеләнмәй тап илле йыл ҡайтып тор һин,
Унан инде был мәҡәмгә* тағы кил һин,
Ул уғланды кәм баһаға һатып ал һин,
Күп байлыҡҡа аҙаҡ үҙен һатырһың имде.

Был хәтәрҙән Малик кире ҡайтып китте,
Шунан теүәл илле йыллап ваҡыт үсте.
Дуғыр улы был ерҙәргә йәнә килде,
Вәғәҙә етте, тип бик һөйөнөр имде.

Бер нисә фәрештә килгән булған икән,
Шунда ҡоштарға улар әүерелгән икән,
Ошолайтып Йософҡа иш булған икән,
Ҡоштар булып ҡойонан сығалар имде.

Малик Дуғыр ул ҡоштарҙы унда күрҙе —
Фәрештәләр икәнен һис белмәҫ үҙе.
Был мәлдә Малик әле кафыр ине,
Уҡ алып ҡоштар атырға барыр имде.

Яҡын килгәс тә ул ҡоштар юҡҡа сыҡты,
Быны күреп, Малик Дуғыр хайран ҡалды.
Баҡты: ҡойо эсенән бер нур ағылды —
Малик һушын йыя алмай торор имде.

Шул уҡ сәғәт урынына килде йәнә,
Аңһыҙ түгел — һиҙенде был: зирәк ине.
Ике ҡолона бойорҙо: «Барың, ана
Шул ҡойонан һыу килтерең», — тиер имде.

Бәшир менән Бөшрә биҙрә алдылар,
Ҡойоноң эргәһенә яҡын барҙылар,
Биҙрәгә бау бәйләп, ҡойоға бәрҙеләр, —
Йософ барыһын күреп ултырыр имде.

Икәүләшеп биҙрәһен һыуға батырҙы,
Тиҙ генә мөлдөрәмә итеп тултырҙы,
(Хаҡ Йософҡа барырға Ябраилды күндерҙе)
Өҫкә сығырға рөхсәт еткерер имде:

— Йә, Йософ, һин көҙгөгә баҡманыңмы?
Көҙгөлә күркең күреп, маҡтанманыңмы?
Мин һатылыр ҡол булһам, тип әйтмәнеңме?
Минең хаҡты берәү ҙә түләй алмаҫ,
тимәнеңме?

— Йәшермәйем, көҙгөгә мин ҡарағайным,
Күркем күреп көҙгөлә, маҡтанғайным.
Һатыла торған ҡол була ҡалһам, тигәйнем,
Баһамды түләй алмаҫтар, тигәйнем имде.

Ябраил әйтте:
— Йә, Йософ, баҫ аяҡҡа,
Биҙрә тотҡаһына йәбеш, сыҡ һин тышҡа,
Күрерһең — һатырҙар һине күпме хаҡҡа.
Һатып алыусылар килгән, әҙер имде.

Икәүләшеп Бәшир, Бөшрә бауҙы тартты,
Ғәзиз Йософ шул ваҡытта өҫкә ҡалҡты,
Ҡадир мәүләм тәҡдиргә шулай ҡушты,
Ни эшләйһең, уның хөкөмө шулдыр имде.

Ҡойонан бөтөнләйгә сыҡты үҙе,
Тулған айҙай балҡый ине уның йөҙө,
Малик күргәс тә бер аҙға һушын юйҙы,
Ниндәй шатлыҡ — ошо уғлан, тиер имде.

Малик күп йылдар даими әйтә килде,
Ҡолдарына исемен дә белдергән ине:
— Ҡайһығыҙ арағыҙҙан тәүҙәрәк күрә,
Азат итеп, шуға ҡыҙым бирәм имде.

Бәшәр ҡайтып Маликка хәбәр һалды,
Малик Дуғыр һөйөнөп ҡаршы барҙы,
Ҡаршы барып, Йософтоң ҡулынан алды,
Алып килеп, сатырына йәшерер имде.

Йософ ҡәрҙәштәре шул саҡ тауҙа йөрөгән,
Ҡараһалар — теге урынға каруан килгән.
Күмәкләшеп, ашығып шунда йүгергән, —
Ә Йософ ҡойола булмай сыҡҡан имде!

Шунда уҡ Малик Дуғырҙың алдына барған,
Бергәләшеп каруанын уратып алған,
Әйткәндәр:
— Беҙҙең бер ҡолобоҙ юғалған.
Бер шик юҡ, һеҙ алғанһығыҙ! — тиҙәр имде.

Рауил әйтте:
— Бирегеҙ яҡшылыҡ менән,
Юғиһә оран һалам бөтә көс менән,
Һәммәгеҙ ҙә һәләк булыр михнәт менән:
Тауышымдан кешеләр йән бирер имде.

Малик ҡарышманы — аҡыллы ир ине —
Йософто ҡәрҙәштәренә кире бирҙе.
Тегеләр ҙә ошо эштән файҙа күрҙе,
Ҡол итеп һатайыҡ үҙен, тиҙәр имде.

Ниәттәрен улар ошолай атҡарҙылар,
Йософҡа ғәрәп телендә аңлаттылар:
— Үлтерәбеҙ, әгәр әйтһәң, — тип ҡурҡыттылар,
Ҡол итеп һатабыҙ — буйһон, — тиерҙәр имде.

Малик Дуғыр зирәк ине — быны белде,
Эстән генә күңеленә шатлыҡ тулды,
Һатып алырға Йософто риза булды, —
Быны күреп, Йософ түгелеп илар имде.

Йософ әйтте:
— Һеҙ мине һатаһығыҙмы?
Ҡайғы-хәсрәт утына атаһығыҙмы?

Яуыз эште әйтер, тип ҡурҡаһығыҙмы?
Серҙе асмайым, ант итәм, — тиер имде. —

Мине һатмаң: кафыр ҡоло була алмам,
Бер нисек тә кафыр ҡоллоғонда ҡалмам,
Атам Яҡупты хәсрәткә ҡуя алмам —
Дәдәм хәлил хөрмәтен һаҡлағыҙ имде!

Улар әйтте:
— Беҙ һине әле тыңланыҡ.
Атабыҙға Йософто ҡорт ейҙе, тип аңлаттыҡ.
Исраилға ауыр хәбәрҙәр ауҙарҙыҡ.
Йософ, был инәлеүеңде туҡтат имде.

Бәс, Йәһүҙә лә Йософто өгөтләне,
Әйтте:
— Был ҡазаны һиңә бирҙе тәңре.
Ҡәрҙәштәрең һаман да үс тота, — тине, —
Улар аҙаҡ, һине үлтерерҙәр имде.

Иң яҡшыһы — риза булып, һатылып тор,
Ҡәрҙәштәрең яфаһынан ҡотолоп тор,
Исраилдан хәсрәт менән айырылып тор,
Ҡауыштырыуҙы халиҡ үҙе белер имде.

Улар әйтте:
— Һатабыҙ был ҡолдо һеҙгә,
Шартыбыҙ бар: һатабыҙ беҙ йыраҡ ергә,
Ниндәй баһа бирерһегеҙ икән беҙгә,
Икеләнмәй һатасаҡбыҙ, — тиҙәр имде.

Малик һорай:
— Ниндәй ҡол һуң был —
әйтегеҙ,
Ниңә һатаһығыҙ уны — аңлатығыҙ?
Ни ҡылды, ниңә ҡасты — һөйләп бирегеҙ.
Аҡылы, күрке һеҙҙән артыҡ, — тиер имде.

Әйттеләр:
— Атабыҙ элек һатып алды,
Тора-бара беҙгә һәр саҡ юлдаш булды.
Ахырҙа, ниңәлер тамам яуызланды,
Ҡасып килеп был ҡойоға төшөр имде.

Малик әйтте:
— Уның хәлен асыҡлағыҙ,
Нисә төрлө ғәйебе бар — аныҡлағыҙ.
Бер ниндәй шөбһә ҡалмаһын, тырышығыҙ,
Һатыу-алыу шарты дөрөҫ булһын имде.

Улар әйтте:
— Шикләнмәгеҙ, ысын, ул — ҡол.
Ҡолобоҙҙоң өс төрлө ғәйебе бар шул:
Уғры вә ялғансы, өҫтәүенә, ҡасҡын.
Өс төрлө ғәйебе менән алғыл имде.

Малик әйтер:
— Ни әйтһәгеҙ, мин аңланым,
Ысынлап та, был ҡолдо һатып алырмын,
Ғәйептәре булһа ла, ҡабул ҡылырмын,
Ниндәй хаҡ ҡуяһығыҙ, һорағыҙ имде.

Әммә ләкин бында һис алтыным юҡ,
Төрлө-төрлө туҡымам бар, атласым күп.
Бер нисә йармаҡ тәңкәм* бар, ҡиммәте юҡ.
Һатыуҙы нисек ҡылырбыҙ? — тиер имде.

Йософ уйлар:
— Эштәре уңмаһа ине,
Ҡәрҙәштәр ризалашмаһалар ине,
Алыусы ҙур хаҡ бирә алмаһа ине,
Мин бисара ҡол булмаһам... — тиер имде.

Улар әйтер:
— Бер ни ҙә ҡыла алмайбыҙ,
Был сауҙаға һис кенә риза булмайбыҙ.
Ҡулығыҙҙан ебәк-атластар алмайбыҙ,
Күпме йармағың бар, шуны бир, — тиерҙәр
имде.

Малик әйтер:
— Йармағым бар, теүәл ун
һигеҙ,
Хәҡиҡәт, алтыным юҡ, шуны белегеҙ.
Ошо ун һигеҙ йармағымды алығыҙ,
Ҡалғандарың миңә бағышлағыҙ имде.

Улар әйтер:
— Ун һигеҙен дә алабыҙ,
Шулайтып һатыулашыуҙы тамамлайбыҙ,
Барыбыҙ был сауҙаға риза булабыҙ,
Ҡалғандарын һеҙгә бағышлайбыҙ имде.

Аҙаҡ инде Малик Йософка һүҙ ҡатты:
— Былар һине ҡол тип миңә бит һатты.
Ошо хәл дөрөҫмө, ошо һүҙҙәр раҫмы?
Дөрөҫлөгөн асыҡлап әйт, — тиер имде.

Улар әйтте:
— Ҡол! Ҡоллоҡка ризалыҡ бир!

Үҙеңдең телең менән дөрөҫләп ебәр.
Юғиһә, ысынлап һине үлтерербеҙ
барыбер! —
Йәшерен генә уны ҡурҡытырҙар имде.

Ысынлап та, Йософ үҙе ҡурҡып ҡалды,
Ҡурҡышынан ҡоллоҡҡа ла риза булды:
— Мин — ҡол, — тине, күҙҙәренә йәштәр тулды, —
Алла ҡоло, — тип эстән генә уйлар имде.

Улар әйтте:
— Йә, Малик, һин беҙгә инан,
Ҡол булыуына шик тотма, беҙгә ышан.
Бау-бығауын сисмәгеҙ һис аяғынан,
Мысырға хәтле бығаулы барһын имде.

Бик ялғансы — һүҙенә һис ышанмағыҙ,
Йәлләп-аяп, миһырбанлыҡ күрһәтмәгеҙ,
Бер ваҡытта якшы һүҙ ишеттермәгеҙ,
Аҙығы тик арпа икмәге булһын имде.

Малик әйтер:
— Һүҙҙәрегеҙгә ышандым,
Риза булып, ҡолоғоҙҙо һатып алдым.
Өс төрлө ғәйебе менән ҡабул ҡылдым —
Был турала берәй яҙыу кәрәк имде.

Тегеләр ҙә был үтенесте хуп күрҙе,
Бетеү яҙып бирергәрәк ҡарар ҡылды.
Бөтәһе лә яуыз эшкә тоғро ҡалды —
Ҡул ҡуйырға барыһы ла риза имде.

Шәмғун үҙ ҡулдары менән яҙыу яҙҙы,
Шуны яҙып, фетнәгә нығыраҡ аҙҙы,
Йософтан йөҙ дүндереп, тамам биҙҙе.
Пәйғәмбәрҙе бәндәлеккә һатыр имде:

— Барыбыҙ ҙа был сауҙаға риза булдыҡ,
Ҡолобоҙҙо һатыуҙы лайыҡ күрҙек,
Ул үҙе лә риза булғас, яҙыу яҙҙыҡ.
Ҡолобоҙҙо һиңә тапшырабыҙ имде.

Быларҙы ишетеп, Йософ ҡан иланы,
Бәғере көйөп, хәсрәттә эсе янды.
Илай-илай Халиҡтан рөхсәт һораны:
— Кире барам, рөхсәтең бир! — тиер имде. —

Ризалыҡ бир, яндарына кире барам,
Күҙҙәренә, туйғансы, бер ҡарап ҡалам.
Яҙығымды ғәфү итеүҙәрен һорап,
Бәхилләшеп айырылам, — тиер имде.

Маликтың был һүҙҙәрҙән эсе өҙөлөр,
Йософтан артығыраҡ йәше түгелер.
Йософтоң ҡыланышы аңларлыҡ түгелдер —
Был ғибрәткә ғәжәпләнеп торор имде.

Малик Дуғыр Йософҡа яуабын бирҙе:
— Күрмәйһеңме, улар һиңә низәр ҡылды?
Миңә бит бик осһоҙ ғына хаҡҡа һатылдың.
Ниңә бараһың? Улар һине һөймәй имде.

Улар һаттылар бит ун һигеҙ йармаҡҡа,
Теләнеләр, шикһеҙ, һинән айырылмаҡҡа.
Бер ҙә улар лайыҡ түгел һин бармаҡҡа,
Ҡәҙерең әллә күпмегә артыҡ имде!

Бер йармаҡтың* ҡиммәте — бел хаҡын, —
Мең дүрт йөҙ йармаҡ тора беҙҙә бер алтын.
Шул баһаға ғына алдым һине һатып. —
Малик Йософҡа хәлен аңлатыр имде.

Йософ уға илау аша яуап бирҙе:
— Улар шулай эшләргә кәрәк тип белде,
Теләктәре, мораттары шундай ине.
Уларҙан шәфҡәт өмөтөн өҙмәм имде!

Унан Малик Йософҡа рөхсәт итте,
Меңкен Йософ хәсрәт менән кире китте.
Ун ҡәрҙәшен, ниһәйәт, ул ҡыуып етте,
Һәр береһен үбә-үбә илар имде.

Әйтер:
— Беләм, минән тамам һеҙ биҙҙегеҙ,
Ожмах биреп, тамуҡ һатып һеҙ алдығыҙ.
Мине Исраилдан мәхрүм һеҙ ҡылдығыҙ —
Хоҙай нисек кенә ҡауыштырыр имде?

Аһ дәриға! Ғәзиз башым түбән булды,
Ҡәрҙәштәрем, бындай яфа миңә ҡылды,
Атам Яҡуп, бахыр, минән мәхрүм ҡалды.
Ҡауышыуҙар оҙаҡ алыҫ ҡалды имде.

Бынан һуң мине кемдәр тәрбиә итер?
Илаһам, кемдәр күҙемдең йәшен һөртөр?
Мин ҡайғылы меңкенде кем иш итер,
Өҫ-башымды минең кемдәр йыуыр имде?

Оҙон сәсем тарай-тарай кемдәр үрер,
Мәхрүмлегем, меңкенлегем кемдәр күрер?
Мин — ҡайғылыға иптәш булып кем йөрөр?
Азат инем — бәндәлеккә төштөм имде.

Атам мине үҙ иңенә ала ине,
Йоҡом килһә, яҫтығына һала ине,
Торғоҙоп, төрлө аш-ризыҡ бирә ине —
Шул рәхәттән был михнәткә төштөм имде.

Аһ дәриға! Был ҡоллоҡта ни ҡылайым,
Нисек кафыр ҡоллоғонда мин торайым?
Ҡәрҙәштәр йыраҡ ҡала, нисек күрәйем?
Айырылырға тәҡдиребеҙ ҡушты имде.

Был тәҡдирҙе тәңренән тип белеү кәрәк,
Хаҡ хөкөмөнә ҡол ризалығы кәрәк. —
Язаһына сабыр, риза булыу кәрәк —
Ҡазаһына ла башымды эйҙем имде.

Зарлы Йософ ҡайғыһынан ҡан-йәш түгер —
Илағанын ағалары күрмәмеш булыр —
Барыһын үбә-ҡоса ул бәхилләшер.
Малик Дуғыр һушһыҙ булып илар имде.

Ҡәрҙәштәре лә түҙмәйенсә илашты,
Хәсрәтләнеп вә ҡайғырышып аһлашты,
Ысын күңелдән өҙгөләнеп иңрәште —
Ҡылыҡтары өсөн эсе бошор имде.

Әйтерҙәр:
— Беҙ һине кире алыр инек,
Ҡулыңдан етәкләп тәүбә ҡылыр инек,
Һатыу уйынан кире ҡайтҡан булыр инек —
Бигерәк тә ғәрләнәбеҙ! — тиҙәр имде. —

Атабыҙға тағы ялған әйтә алмайбыҙ,
Һине кире уға илтә лә алмайбыҙ,
Был эштә бер сара ла ҡыла алмайбыҙ.
Михнәттәргә һин сабырлыҡ күрһәт имде.

Йософ әйтер:
— Һөйләгән һүҙ кире килмәҫ.
Хаҡ тәҡдире ниндәйлеген кемдәр белмәҫ!
Уға ҡол теләге һис тә ҡаршы булмаҫ,
Хаҡ фарманына буйһоноу кәрәк имде.

Был тәҡдирҙе тәңрем бирҙе — һеҙгә мәғлүм.
Хәсрәтләнеп, атам Яҡуп ҡалды мәхрүм,
Айырылып ҡалды Ибне Йәмин энем,
Мине аҙаҡ ҡайҙа ғына күрер имде?

Ҡәрҙәштәре туҡтап тормай һаман китте,
Йософ өсөн айырылыр мәл дә етте.
Ҡанлы йәштәр эркелеп, бәғерен өттө,
Үҙе һаман артҡа боролоп ҡарай имде.

## Малик Дуғырҙың Йософто Мысырға алып киткәне, юлда төрлө мажараларға осрағаны

Бахыр Йософто юлға кейендерҙеләр,
Балаҫ түшәп, бер дөйәгә мендерҙеләр.
Бау менән ҡулдарын нығлап бәйләнеләр,
Бушап, юлда ҡасмаһын, тиерҙәр имде.

Бер хәбәши[24] ҡол бар ине, Ҡылыс атлы,
Барлыҡ ҡолдар араһында иң ғәйрәтле.
Йөҙө ҡара, үтә ҡаты тәбиғәтле,
Йософто шул ҡолға тапшырҙылар имде.

Шул уҡ сәғәт каруан ҡуҙғалып китте,
Ҡаруан юлы бер гүрстан аша үтте.
Йософтоң бер ҡәбергә күҙҙәре төштө —
Үҙ анаһы Рәхиләнең ҡәбере имде.

Илай-илай һөйләнер:
— Рәхилә анам,
Ниндәйерәк хәлгә төштөм, күҙенде һал!
Ҡәрҙәштәрем һатты мине, һин белеп ҡал,
Азат инем, бәндәлеккә төштөм имде.

Хөсөт ҡылып, атамдан да айырҙылар,
Ғазаптарҙа бәғеремде яндырҙылар.
Мәхлүк тунын иңдәремә кейҙерҙеләр,
Ҡул-аяғым сынйыр менән бәйле имде.

Ҡәрҙәштәрем миңә ҡылды рәнйеү, зәхмәт,
Бәләкәйҙән төштө миңә шундай михнәт,
Ҡөҙрәт менән алла бирһен инде шәфҡәт,
Минең өмөт — тик хоҙайҙа, — тиер имде. —

Әй, анам, минең хәлемде күр, зинһар,
Бәндәлеккә һатып алды мине кафыр,
Мәүләм генә бирҙе миңә былдай тәҡдир,
Һуңынан, бәлки, шәфҡәтен ҡылыр имде.

Эй дәриғә! Ғәзиз анам, ятаһыңмы?
Минең хәлем нисегерәк — беләһеңме?
Миңә ҡарап хәлдәремде күрәһеңме:
Ҡул-аяҡтарым минең бығаулы имде!

Анаһының гүренән бер тауыш килде:
— Ғәзиз улым, Йософом, әйт, ниҙәр булды?
Ҡәрҙәштәрең нимә уйлап, улай булды?
Йософ, һинме был хәлдәргә төштөң имде?

Йәнем-уғлым, был яфаға ниңә инден,
Яфаға һалырлыҡ ул тиклем нимә ҡылдың?
Нисек минең ҡәбер эргәһенә килдең?!
Гүр аша ла йәнем өҙгөләнә имде.

Атаң Якуп был хәлеңде белмәнеме?
Ул меҫкенгә хәлең мәғлүм булманымы?
Ибне Йәмин һинең менән килмәнеме,
Был бәләгә вайымһыҙ нисек ҡалдың имде?

Һинең атайың — Якуп, бабаң — Исхаҡ,
Оло бабаң ҡарышманы хаҡҡа бер саҡ.
Һин үҙең дә уның рәхмәтенә бул хаҡ!
Өмөтлән, тиҙҙән шатлыҡтар килер имде.

Әй хоҙайым! Был хәжәтем һиңә мәғлүм,
Һәр ваҡытта өмөт тотор барса мәзлүм.
Залимдарға һатылған бит минең уғлым —
Ҡөҙрәт менән уға шәфҡәт күрһәт имде.

Йософ уны ишетеп һушын юйҙы.
Хаҡ Рәхилә мөнәжәтен ҡабул ҡылды,
Уның доғаһы Йософҡа тура килде:
Таж вә тәхет һәм солтанат бирҙе имде.

Ҡылыс баҡты — Йософ бер ҙә күренмәне,
Эҙләһә лә, ҡайҙалығы беленмәне,
Тырышһа ла, бер яңғыҙы табалманы, —
Хужаһына хәлде барып әйтер имде.

Ҡылыс әйтер:
— Хужам! Туҡтаһын каруан!
Һис шикһеҙ, беҙҙән ҡасҡан теге уғлан!
Каруан туҡтаны, барыһы ла шунан
Күмәкләшеп Йософто эҙләрҙәр имде.

Ҡылыс шунда бер сапҡы ат табып менде,
Эҙләүселәрҙең барыһынан алда ине,
Атын ҡыуып, шәп-шәп итеп саба ине,
Йософ торған урынға бара имде.

Йыраҡтан уҡ Йософтоң яңғыҙын күрҙе,
Меҫкен Йософ, уны күреп үрә торҙо,
Аяғын һөйрәп илай-илай юлға керҙе, —
Ҡылыс һүгер, туҡмар, ерҙән һөйрәр имде.

Йософ әйтер: «Әй Илаһым, ни ҡылайым,
Был михнәттән нисек кенә ҡотолайым?
Залимдарҙан ҡотолорға ни уйлайым?
Әй хоҙайым, ярҙамыңды күрһәт имде?»

Йософ йәнә ялбарҙы: «Эй Хоҙай, — тип, —
Рәхимдәрең менән мине ярлыҡа, — тип, —
Минең хәлде үҙең беләһең бит,
Һиңә генә һыйынайым хәҙер имде.

Олуғ бабам Ибраһим — дуҫың ине,
Һинең әмереңде һәр саҡ тыңлай ине,
Улы Исмәғил дә һиңә ҡорбан ине,
Һинең хөрмәтеңә арналғайны имде.

Эй хоҙайым, әгәр хата ҡылған булһам,
Әмереңде тыңламай, гонаһлы булһам,
Атам Яҡуп хеҙмәтенән ҡалған булһам,
Үкенәм, тәүбә ҡыламын, — тиер имде. —

Падишаһым, әгәр мин гонаһһыҙ булһам,
Хаталар менән юлдан яҙмаған булһам,
Был бәләгә һис гонаһһыҙ төшкән булһа,
Был ҡәүемгә бер ғәләмәт күрһәт имде».

Бәс, ул Ҡылыс Йософто тиҙ алып килде,
Килтереү менән Маликтың ҡулына бирҙе.
Малик төшөп бер-ике рәт яңаҡланы,
Дөйәгә мендереп бәйләп ҡуйыр имде.

Шул ваҡытта тәңренән фарман булды,
Ҡөҙрәт менән күктә ҡара болот ҡупты,
Ел сыҡты, ҡарлы-боҙло ямғыр яуҙы,
Шул ҡәҙәр ҡаты ғәрәсәт ҡубыр имде.

Баштарына ҡундырһа, моғайын, ярыр,
Тәндәренә тейһә, ғәрип булып ҡалыр.
Бөтәһе, аҡырышып, ярҙамға саҡырыр,
Тик берәү ҙә ярҙам итмәҫ ине имде.

Бындағылар берен-бере күрмәҫ булды,
Ҡайһылары зөлмәт эшкә хайран ҡалды,
Күк күкрәне, йәшен дә йәшнәп торҙо.
Быны күреп Малик ҡаты ҡурҡыр имде.

Малик әйтер: — Хәлебеҙ бигерәк яман,
Йә рабби, ниҙән ҡупты ошо туфан?
Әй дәриға! Барҙыр бында бер ғәзиз йән,
Шунын ярлыҡауын беҙ һорайыҡ имде!

Әйтер:
— Был ғазап — күктән: белегеҙ,
Золом-йәбер ҡылыусылар — сафланығыҙ!
Яҙыҡлы кешеләр тәүбәгә килегеҙ!
Юҡһа, бөтәбеҙ ҙә һәләк булабыҙ имде.

Әгәр берәү беҙҙән золом күргән булһа,
Ул мәзлүмдең доғаһы күктәргә ашһа,
Күк эйәһе яфа-бәләләр яуҙырһа...
Тәүбә ҡылың! Юҡһа, һәләк булдыҡ имде.

Ҡылыс, быны ишеткәс, шунда уҡ килде,
Хатаһын-гонаһтарын раҫ тип әйтте:
— Белегеҙ: гонаһ минән, — тип дөрөҫләне, —
Шул ҡол уғлансыҡты туҡмағайным имде.

Малик Дуғыр бойорҙо ул ҡара ҡолға:
— Бар, Йософтоң аяғын үп, ғәфү һора,
Иң тәүҙә күңелен күр, өҫтөн ҡара,
Мәгәр беҙгә изге доға ҡылһын имде.

Бәс, Йософтоң ҡаршыһына Ҡылыс барҙы,
Бик ҡаты илап, үкенеп, башын орҙо,
Хата-гонаһ ҡылғанлығын әйтеп бирҙе,
Төшөп, Йософтоң аяғын үбер имде.

Малик тағы уның менән бергә барҙы,
Теҙгә сүгеп, алдарында ҡул ҡаушырҙы,
Малик та Йософҡа инәлеп ялбарҙы,
Хатабыҙҙы кисерә күр, тиер имде.

Быны күреп, Йософ миһырбанлыҡ ҡылды,
Ҡулын күтәреп, хоҙайға доға ҡылды.
Йософтоң доғаһы шунда ҡабул булды,
Михнәт үтеп, ҡар-ямгырҙар кәмер имде.

Шул сәғәттә ҡар-ямғыр ҙа туктап ҡалды,
Яуа торған ямғырҙар ҙа яумаҫ булды.
Боҙҙар иреп, һыуҙар ҡоро ергә һеңде,
Көн асылып, йыһан шатлыҡҡа тулыр имде.

Быны Малик ғибрәт сифатында күрҙе,
Бау-бығауҙарын аяҡ-ҡулдан систерҙе.
Малик һәм ҡолдары ысынлап ялбарҙы,
Малик үҙе барыһынан уҙҙырыр имде.

Насар кейемен алып, күлдәк кейҙерҙе,
Дөйәһенән төшөрөп, атҡа мендерҙе,
Олоһо-кесеһе Йософҡа ялбарҙы,
«Эй хоҙай, каруан — Йософтоко имде.

Барығыҙ ҙа Йософҡа буйһоноғоҙ!
Оло-кесе — барығыҙ ҙа ҡол булығыҙ!
Бынан ары уны батша тип белегеҙ!
Уның әмеренән һис сыҡмағыҙ имде!»

Һуңынан Йософ хөкөмө булды ыңғай,
Оло хөрмәт бирҙе уға мәлик хоҙай.
Һис бераү сыҡмаҫ булды бойороғонан,
Малик Дуғыр үҙе лә тыңлар имде.

Һөйләгән һайын Йософтоң фәһеме артты,
Аҡылы теүәл, теле матур, һүҙе татлы.
Йөҙөн асһа, йыһан үҙе нурға батыр,
Кеше матурлығын күреп туймаҫ имде.

Унан Белүс шәһәренә каруан керҙе,
Шәһәр халҡы барыһы ла кафыр ине,
Йософтоң матурлығын улар күрҙе —
Һәммәһе был хәлгә таң ҡалыр имде.

Йософтоң эргәһенә йыйылдылар,
Хаҡтың шундай сәнғәтенә таң ҡалдылар,
Йософ менән әңгәмә лә ойошторҙолар,
Хәл-әхүәлен яҡшылап һорарҙар имде:

— Әйт асығын: кем һине былай бар итте,
Йөҙөңдө күркәм итеп кем яратты?
Биҙәктәрен кем һалды шулай шул хәтле?
Беҙ ҙә уға ҡол булыр инек имде!

Йософ әйтте:
— Алла — мине бар ҡылыусы,
Ерҙә, күктә беҙ — ҡолдарҙы туйҙырыусы,
Был эштәргә лайыҡ бары уның көсө.
Беҙҙе, һеҙҙе ул яратты — белегеҙ имде!

Был һүҙҙәргә барыһы ла инандылар,
Бер аллаға барыһы ла табындылар,
Йософтоң пәйғәмбәрлеген танынылар,
Ысынлап та мөъмин булдылар имде.

* * *

Улар тағы Бәйан шәһәренә керҙе,
Халыҡ Йософтоң йөҙ күркәмлеген күрҙе,
Ҡайһы бераү Йософҡа тәре бирҙе,
Улар шул тәрегә табыналар имде.

* * *

Аҙаҡ каруан Ҡоддос шәһәренә керҙе,
Ҡоддос бәге уны төштә күргән ине,
Бөтә шәһәр халҡына әйткән ине:
— Каруан килә, сығып ҡаршылағыҙ имде!

Ғәскәр йыйып, Ҡоддос бәге ҡаршыланы:
— Был каруандың хужаһы кем була? — тине.
Каруандыҡылар уға яуап бирҙе:
— Малик Дуғыр каруан хужаһы имде.

Ҡоддос бәге быға бик ныҡ ғәжәпләнде:
— Малик Дуғыр бынан йыл да үтер ине,
Моғайын, быйыл берәй хикмәте барҙыр —
Ҡаршыларға бойороҡ булмаç имде!

Хаҡ бойороп, фәрештәләр килгән ине,
Был хәлдәргә Йософҡа иш булған ине,
Һәр ваҡытта уның эргәһендә йөрөгән ине,
Тел-күҙҙән Йософто ныҡ һаҡлайҙар имде.

Әҙәм, уның менән бергә пәрей булған,
Йософ менән дә шулай бер пәрей тыуған,
Һәр кем менән парлап пәрей тыуа торған,
Әгәр үлһә, пәрей ҙә үлә торған имде.

Фәрештәләр бәккә былай яуап биргән:
— Дөрөç, ошоно ҡаршыларға әмер килгән,
Бар әйҙә ҡаршыларға ғәскәрең менән,
Һин төшөңдә күргән уғлан — шулдыр имде.

Был уғланды күреп, бәк бик хайран ҡалды,
Фәрештәләр һөйләгәс тә аңлап алды:
— Һәммәгеҙ ҙә хөрмәтләгеҙ был уғланды,
Ҡәҙере — бөтәһенән артыҡ! — тиер имде.

Шул уҡ сәғәт каруан эргәһенә килде,
Хөрмәт менән Йософҡа ул сәләм бирҙе,
Әҙәп менән Йософҡа:
— Әйтсе беҙгә, — тине, —
Кем икәнең беҙгә мәғлүм булһын имде.

Йософ уға ошолай тип яуап бирҙе:
— Һин төшөңдә күргән кеше шул мин инде.
Ҡаршылағыҙ, тип бойороҡ килгән ине,
Хәҡиҡәт, мин тап шул кеше булам имде.

Малик ишетеп был һүҙҙе ғәжәпләнде,
Ҡунаҡ итеп, үҙенә саҡырып алды,
Йософто һәм юлдаштарын ололаны,
Һәммәһенә ҡәҙер-хөрмәт ҡылыр имде.

Ҡоддос бәге әйтте:
— Миңә ни әйтерһең?
Миңә ниндәй өгөт-нәсихәт бирерһең?
Эй Йософ! Миңә ниҙәр тип бойорорһоң?
Ни ҡушһаң да, мин үтәргә әҙер имде.

Йософ әйтте:
— Эй мәлик, һүҙемде тыңла,
Минең һүҙҙе тотоп, кер әйҙә тоғро юлға,
Һиңә нишләп утҡа, потҡа* табынырға?! —
Мөъмин булып, уттан, поттан баш тарт имде.

Ул бәк әйтте:
— Һүҙҙәреңде ҡабул ҡылдым,
Һин һөйләгән тәңрегә лә мин буйһондом,
Хаҡ пәйғәмбәр тип һине генә белдем,
Шулай ҙа потханаға* инәйек имде.

Әгәр ул пот сәждә ҡылып, телгә килһә,
Һине күргәс, һорауыңа яуап бирһә,
Пәйғәмбәр тип, һинең менән иҫәпләшһә,
Мин, һис шикһеҙ, мөъмин булам, — тиер
имде.

Йософ әйтер:
— Риза булдым. Беҙ торайыҡ.
Икәүләшеп потханаға беҙ керәйек.
Сәнамдан хәл-әхүәлен бер һорайыҡ,
Тыңлайыҡ: ниндәй яуап бирер имде?

Йософ менән потханаға мәлик керҙе,
Шул ваҡытта Йософто был сәнам* күрҙе.
Ынтылды Йософҡа табан, сәләм бирҙе,
— Хәҡиҡәт, һин пәйғәмбәрһең! — тиер имде.

Тағы ул сәнам Йософҡа сәждә ҡылды,
Ҡоддос мәлиге үҙе күреп ышанды,
Халиктың берлегенә лә ул инанды,
Мөъмин булып, тар билгауын* сисер имде.

Йософҡа төрлө ниғмәт — аш килтерҙе,
Йософ, һонолоп, берәр киҫәк алып ейҙе,
Өс йөҙ тукһан кеше тағы ейҙе, туйҙы,
Ә ниғмәттәр һис кәмемәй ҡалыр имде.

Унан Ҡоддос мәлик әйтер был Маликка:
— Ошбу беҙгә лайыҡ булыр сәрүәрлеккә,*
Бер бәхәсһеҙ лайыҡ ул оло хөрмәткә,
Унан артығыраҡ кем генә булыр имде?

Малик Дуғыр был мәликкә яуап бирҙе,
Әйтте:
— Беҙҙең сәйетебеҙ* — Йософ имде.
Сәйетлеккә Йософ беҙҙән лайыҡ инде,
Мин — Йософтоң ҡоломон, — тиер имде.

Ҡоддос мәлиге Йософ янына килде,
Малик Дуғыр был мәликтән рөхсәт алды,
Ул шәһәрҙән күсенмәккә ниәт ҡылды,
Өгөтләп, Йософто ла күндерер имде.

Ҡаруандар ҡыбырланы, юлға китте,
Ҡоддос мәлигенең башына етте:
— Уғлан бит ҡулыбыҙҙан ысҡынып китте,
Тиҙ ҡыуып етеп ҡулға алайыҡ имде!

Ун ике мең кеше аттарға атланды,
Ҡыуып етеп, алып ҡайтырға ниәтләнде,
Мәлик әйтер:
— Йә, Йософ, етәләр инде?
Йософ әйтер:
— Һис ҡурҡма, килһендәр имде.

Быны ғәскәр Йософҡа яҡынланы,
Йософ, туҡтап, уларға ҡараш ташланы,
Уны күреп, барыһы шунда туҡтаны,
Һушын юйып, аттарынан төшөр имде.

Ун ике мең ир атынан ауып төштө,
Бөтәһенең, һушы китеп, аҡылы шашты.
Ҡаруан күсте. Ул арала өс көн үтте,
Тегеләр һаман һушһыҙ ятырҙар имде.

Быны күреп, һәммәһе лә хайран ҡалды,
Йософ иһә күрке менән ғорурланды,
Матурлығына Йософ шөкөрҙәр ҡылды,
«Миңә оҡшаш кеше юҡтыр, — тиер имде. —

Тыуманы һәм тыумаясаҡ оҡшаш миңә.
Һәр кемдең аҡылы шашыр, мине күрһә,
Бер күреүгә мохтаж була, бик үтенә,
Бер күрергә йәнен фиҙа ҡылыр имде».

Шул сәғәттә Ябраил да торҙо әҙер,
Шулай ҡушты Ябраилға мәлик ҡадир:
— Йә, Йософ, ялбарып ни тинең хәҙер?
Ғорурландың, халиҡ сәнғәтен күр имде.

Унынсы көн Гурус шәһәренә керҙе,
Ул шәһәр халҡы бөтәһе ен-бәрей ине,
Йософ, ниһәйәт, уларҙың йөҙөн күрҙе, —
Һәр береһе Йософтан күрклерәк имде.

Ҡол уйлаған һәр саҡта ла тура килмәҫ,
Ул шәһәрҙә Йософто һис бер кем белмәҫ,
Матурлығын күрһә лә, ҡабул ҡылмаҫ.
Төҫкә-башҡа бөтәһе бик матур имде.

Һәр береһенең Йософтан йөҙө нурлы,
Һындары мөнәүүәр, нурҙар төрлө-төрлө,
Бөтәһенең аҡылы камил, үҙе ғәрле:
Быны күреп, Йософ бик үртәлер имде.

Халиҡтан шунда Йософҡа хәбәр килде,
«Йә, Йософ, ҡөҙрәтемде күр һин, тине,
Сабыр бул, үҙ хәлдәреңде бел һин, тине,
Ҡүрк биреүсе, хәҡикәт, мин бит имде!»

Шулай, Йософ үҙ хәлен асыҡ белде,
Маһайып йөрөүенә бик үкенде,
Өҙгөләнеп, мәүләгә сәждә ҡылды,
Тәүбә ҡылып, йә раббым тип илар имде.

Тағы ла халиҡтан ныҡлы ярҙам булды —
Йософтоң матурлығын кире бирҙе,
Тышҡы-эске күркәмлеген бергә ҡушты,
— Йә, Йософ, башыңды ҡалҡыт, — тиер имде.

Бәс, Йософ сәждәнән башын күтәрҙе,
Ул шәһәр халҡы Йософтоң йөҙөн күрҙе,
Бөтәһе лә ғәжәпләнеп үрә торҙо,
Нурын күргән ихтыярһыҙ ҡалыр имде.

* * *

Ҡаруан был шәһәрҙән алыҫлашты,
Ниһәйәт, юл Мысырға[25] ла яҡынлашты,
Малик Дуғыр Йософҡа ялбарыр имде.

Малик әйтер: «Йә, Йософ, инде һин бар,
Нил йармағы[26] ошолор, барып һин күр,
Мәслихәт булыр, шунда һыуға һин кер,
Өҫтөндәге туҙан-тупраҡ китер имде».

Йософ Маликтың әмеренә риза булды,
Торҙо, Нил тармағына яҡын килде,
Ҡул күтәреп, халиҡҡа доға ҡылды:
«Ҡөҙрәт менән берәй пәрҙә биргел имде».

Йософ нәбиҙең доғаһы ҡабул булды,
Шул уҡ сәғәт күктән көмбәҙ пәйҙә булды,
Йософ нәби шунын эсендә һыу ҡойондо,
Унын тәнен һис бер әҙәм күрмәҫ имде.

Һыу эсендә бер балыҡ булыр ине,
Башҡа балыҡтарға ул бойороҡ бирҙе:
«Халиҡтың ятраҡаны һыуыбыҙға керҙе,
Әҙәп һаҡлаң, бер кем күҙ һалмаһын имде».

Уны ишетеп бөтә балыҡ тиҙ-тиҙ ҡасты,
Оялыһы ояһына кереп ятты,
Һис береһе күҙ ҙә һалмай көтөп ятты,
Барыһы Йософҡа хөрмәт һаҡлар имде.

Ул оло балыҡ Йософҡа йәнә килде,
Үҙенең хеҙмәтен уға тәҡдим итте,
Йософ шунда ул балыҡҡа менеп алды,
Арҡаһына кирә баҫып торор имде.

Шул балыҡтың өҫтөндә ғөсөл алды,
Нуры артты баяғынан мең ҡәҙәре,
Шул сәғәттә Ябраил да килеп етте,
Хаҡ сәләмен, затлы хөллә* бирер имде.

«Бына, Йософ, Халиҡ һиңә ҡылды сәләм,
Әйтте: «Йософҡа һәр саҡ ярлыҡаусы булам,
Һуңынан уны олуғ мәлик тә ҡылам,
Әммә ләкин сабыр булһын», — тиер имде.

Йософ нәби йыуыныуҙы тамамлағас,
Арыуланып, таҙарынып, һыуҙан сыҡҡас,
Хөллә кейеп, күңеле шатлыҡ менән тулғас,
Йософҡа балыҡ үтенес әйтер имде.

Йософҡа әйтер һәм шунда һорар балыҡ:
«Миңә дәүләт, байлыҡ бирҙе оло Халиҡ,
Ҡөҙрәте менән тағы бирҙе батшалыҡ,
Балыҡтар солтаны булам, — тиер имде. —

Балыҡтарҙың солтанымын, дәүләтлемен,
Бала өсөн, Йософ, бик тә хәсрәтлемен,
Берәй бала биреүҙе бик үтенәмен,
Шуның өсөн берәй доға ҡылһаң имде.

Халиҡ та һинең доғаңды ҡабул ҡылыр,
Ҡөҙрәте менән, бәлки, бер уғыл бирер,
Минән һуң ул уғлан һиңә доға ҡылыр,
Үлеп, мин донъялыҡтан киткәс имде».

Йософ ҡулын күтәреп доғаһын ҡылды,
Халиҡ тарафынан доға ҡабул булды,
Ул балыҡтың аҙаҡ ике улы тыуҙы,
Икеһе лә дәүләт эйәһе булыр имде.

Икеһе лә кирәмәтле* булып тыуҙы:
Бере — Юнысты[27] ҡабып йотоусы булды.
Икенсеһе йөҙөктө йотоусы булды —
Йөҙөк Сөләймән[28] пәйғәмбәрҙеке имде.

Балыҡ шунда Йософ менән хушлашты,
Икәүләшеп алҡышлашып айырылышты,
Балыҡ һаубуллашып һыуға кире төштө,
Йософ Малик эргәһенә килер имде.

Йософ килде: шатланған һәм көләсләнгән,
Нуры мең ҡат арта төшкән элеккенән,
Нурҙар балҡыр өҫтөндәге кейеменән,
Ерҙән күккә нурҙан терәк ҡойған имде.

Йософтоң кире килгәнен Малик белде,
Шул уҡ сәғәт ҡолдарына әмер бирҙе,
Һандығынан етмеш төрлө кейем алды,
Йософ кейһен, тип алып бирер имде.

Малик Дуғыр Йософҡа ҡаршы барҙы,
Уның иңендәге кейемдәрҙе күрҙе,
Һорар:
— Быңдай кейемдәрҙе кем кейҙерҙе?
Матурлығына таң ҡалып торор имде.

Йософ әйтер:
— Ҡейемде бирҙе Мәүләм,
Шулай миңә тәңрем бүләк итте дәүләт,
Унан инде күңелемә булды рәхәт,
Серемде ул минең асыҡ белә имде.

## Йософтоң Мысырға килгәне, бөтә шәһәр халҡының таң ҡалғаны

Малик Дуғыр ул урындан күсеп китте,
Мысырға яп-яҡын бер ергә барып етте,
Мысыр халҡы һауанан тауыш ишетте:
«Бер ғәзиз шәхес Мысырға килә имде!

Малик Дуғыр һарайына йүгерегеҙ,
Ул уғланды бөтәгеҙ барып күрегеҙ,
Әҙәмигә оҡшамаған — һеҙ белегеҙ,
Изге фәрештәгә бик оҡшаған имде.

Уның килеүе һеҙҙең өсөн булыр ҡотло,
Аҡылы теүәл, һәр бер әйткән һүҙе татлы,
Йөҙө нурлы, холоҡтары мөрәүүәтле —
Барып күреү өсөн ашығығыҙ имде!»

Мысыр халҡы ишетеп бик һөйөнөштө,
Мотлаҡ күрергә кәрәк, тип килеште.
Оло-кесе, ир-ҡатындар йыйылышты,
Һәр берәһе ҡаршы барып һорар имде.

Күп тә үтмәй, бик күп атлы ғәскәр ингән,
Барыһы ла изге фәрештәләр икән,
«Йософҡа иптәш булығыҙ», — тип хаҡ әйткән,
Шуға ла Йософҡа иш булғандар имде.

Араһында Йософ килә, хөллә кейеп,
Йөҙө балҡый, тирә-яҡҡа нурын һибеп,
Килтерҙеләр Йософто шулай итеп.
Йософ уларҙан айырылып тора имде.

Мысыр халҡы, уны күргәс, булды хайран,
Әйтерҙәр: «Был түгелдер ҙә әҙәмиҙән.
Берәй изге фәрештәлер төшкән күктән».
Барыһы ла уға сәждә ҡылыр имде.

Улар ҡасан Мысырға яҡын килде:
Төрлө аш-һыу, тәғәм — барыһы тәмләнде.
Йософ еҫе тирә-яҡтарға таралды,
Бөтә ерҙән ғәнбәр* кеүек аңҡыр имде.

Малик Мысыр эсенә кереүе менән,
Һарайға Йософто индереүе менән,
Япмаһын алып, йөҙөн асыуы менән,
Һарайҙан нурҙары балҡып сығыр имде.

Уны күреп, Мысыр халҡы йыйылышты,
Һарай алдына бөтәһе өйөлөштө,
Теләктәрен Маликка еткереште:
— Ҡолоңдо сығар, күрәйек, — тиҙәр имде.

Малик әйтер:
— Моратығыҙ ҡабул булмаҫ,
Һарайыма берегеҙ ҙә керә алмаҫ,
Йософтоң матурлығын да күрә алмаҫ,
Берәр динар* бирмәһәгеҙ миңә имде.

Риза булып, берәр динар килтерҙеләр,
Рөхсәт алып, һарайына уҡ керҙеләр.
Йософтоң ғәжәп матурлығын күрҙеләр,
Ҡарап-күреп һис кем туя алмаҫ имде.

Икенсе көн Мысыр халҡы йәнә килде,
Ике динар ҡыҙыл алтын тотҡан ине.
Йософ йөҙөн күрергә теләйҙәр ине,
Күргәндәре хайран ҡалып торор имде.

Өсөнсө көн, дүртенсе көн, бишенсе көн...
Арттырҙылар көн һайын берәр алтын,
Йософҡа бер ҡарау — уйы бар халыҡтың,
Күрһәләр ҙә, матурлыҡҡа туймаҫ имде.

Шулай итеп ун көн ваҡыт үтеп китте,
Унынсы көн унар алтын улар бирҙе.
Оло-кесе — барыһы күрергә килде,
Күргәндәре һушһыҙ булып ятыр имде.

Бер нисәһе һыны матурлығын күрҙе,
Бер нисәһе эске күркәмлеген тойҙо,
Бере рәсүлийәт* һыҙаттары һиҙҙе —
Һәр төркөм үҙенсә генә күрер имде.

Һүрәтен күргәндәр малын фиҙа ҡылды,
Булмышын күргәндәр йәнен фиҙа ҡылды,
Егерме биш меңләп кеше шаһит булды,
Рәсүлийәтен күргән — иман килтерҙе.

Унан аҙаҡ хаҡтан тағы фарман килде,
Малик Дуғыр Йософто алып инде,
Һарай эсендә алтын тәхеткә килтерҙе,
Йософто шул тәхеткә ултыртыр имде.

Һөрәнселәр өҫтән тороп ҡысҡырҙылар,
— Был угланды кем һатып алыр? — тинеләр.
— Бының ҡиммәтен кем белер һуң? — тинеләр.
— Кем баһаһын еткерә, шул алыр имде.

Һарай алдына халыҡ йәнә тулды,
Оло-кесе, бай-фәҡир — барыһы килде,
Хәлүәселәр, икмәкселәр өмөтләнде,
Һәр береһе «мин алһам!» тиерҙәр имде.

Бер ҡарсыҡ бер кәләп еп алып килгән,
Йософто һатып алырға ниәтләнгән.
Йософто күреү өсөн ул хәйлә ҡорған,
Шул арҡала Йософҡа бер ҡарар имде.

Риүәйәттәрҙән риүәйәт шөйлә, имеш:
Йософ эргәһенә бер ҡыҙ килгән, имеш,
Уның хаҡында күп хәбәрҙәр ишетмеш,
Йософто алырға уйлап килгән имде.

Мең дөйәгә мал-хазина тейәндергән,
Һәр карауашты* берәр атҡа мендергән,
Барыһына ла затлы ебәк тун кейҙергән,
Баштарына мәрйенле таж үрер имде.

Ошо рәүештә һарайға килеп имде,
Йософтоң йөҙөнә бер күҙ һирпеп алды.
Рәсүллек нурын күреп, ул хайран ҡалды,
Хаҡ сәнғәтен, Йософ күркен аңлар имде.

Йософтан ул һораны:
— Ҡем улы һин?
Күреп торам, ысынлап, һин ҡол түгелһең,
Әйт, йәшермә, үҙең ҡайһы ырыуҙанһың,
Ниндәй солтан улыһың? — тип һорар
имде. —

Ошо хәлдә ҡалыуың һис дөрөҫ түгел,
Ҡол итеп һатылырға һин лайыҡ түгел,
Һинең өсөн һатыулашыу — яҡшы түгел, —
Ҡайһы кеше дөрөҫ баһа бирһен имде?!

Ни өсөн ҡайғы-зарың күп, күңелең тар,
Хәсрәт-михнәт ниңә һиңә булды йәр?
Әйт һин миңә, ниндәй бының хикмәте бар,
Хәл-әхүәлеңде асыҡлап һөйлә имде.

Йыһанда һинең кеүектең булғаны юҡ,
Һиңә оҡшаш берәүҙең дә тыуғаны юҡ,
Һис берәүҙә һинекеләй сифаттар юҡ, —
Хуш килдең арабыҙға беҙҙең имде.

Хәбәр ишеткәс, бөтә малымды бирҙем,
Һине һатып алырға тип ниәтләндем,
Иҫәп-һанһыҙ мал-хазина алып килдем,
Әммә ләкин малым етмәҫ, белдем имде.

Йософ уның һүҙҙәренә яуап бирҙе,
Һүҙен ишетеп, бөтәһе хайран ҡалды.
Күҙҙәренән гәүһәр кеүек йәштәр аҡты,
Асыҡ теле йомшаҡ һүҙҙәр һөйләр имде.

Әйтер:
— Минең хәлде бары халиҡ белер,
Уның хөкөмө ҡолдарына лайыҡ булыр.
Ни ҡылһа ла, тап үҙенә лайыҡ булыр:
Был тәҡдирҙе миңә ул үҙе бирҙе имде.

Ҡөҙрәте менән мине хоҙай бар итте,
Ошоноң кеүек матурлыҡты яратты,
Был ҡазаңы өҫтөмә үҙе йөкмәтте —
Уның хөкөмөн һис берәү белмәҫ имде.

Һиңә ҡол кәрәк булһа, әйҙә һатып ал,
Күпме хаҡҡа лайыҡ тиһәң, шуны һин һал,
Әгәр байлығың етмәһә, азатлыҡ ал!
Төпсөнөп һин башҡаһын һорама имде.

Быны ишетеп, Йософтоң ҡулын алды,
Шулай итеп, Талут ҡыҙы мөъмин булды,

Йософ уға мосолманлыҡ иғлан ҡылды,
Асыҡ телдән саф иманын бирер имде.

Мәүлә хәлил мәғрифәтен лайыҡ ҡылды,
Малын ҡыҙ фәҡирҙәргә өләшеп бирҙе,
Үҙе ғибәҙәтханаға барып керҙе,
Бөтә ғүмерен ошонда үткәрер имде.

Халиктан мәғрифәт рәхмәтен алды,
Унан һуң да эше гел табыныу булды,
Гонаһтарының барыһын хаҡ ғәфү ҡылды,
Көндән-көнгә ошо хәлдә булыр имде.

## Зөләйханың төш күргәне, Йософто эҙләп Мысырға киткәне

Ҡолаҡ тотоп, тыңлағыҙ ошо һүҙҙе:
Был — Зөләйха, мәликзада, Таймус ҡыҙы.
Тулған айҙай балҡып тора уның йөҙө,
Ожмахтағы хур ҡыҙына оҡшар имде.

Ул Таймус — оло мәлик, Мәгриб эйәһе,
Йөҙ мең ирҙән артыгыраҡ хеҙмәтсеһе.
Күк хужаһы ҡушыуынса, байлык эйәһе,
Донъяла иң оло мәлик булыр имде.

Байлыҡтары менән донъя тулған, имеш,
Батша үҙе поттарға табына, имеш,
Ә Зөләйха — уның яраткан ҡыҙы, имеш —
Был хәлдәрҙең асылын да аңла имде!

Зөләйха мәлик Таймустың ҡыҙы ине,
Яҫтығы атаһының тубыгы ине.
Йософ һынын төшөндә бер күргән ине,
Һүрәтте ысын икән тип белде имде.

Яҡуп Йософто нисек яраткан булһа,
Йософ Яҡуп алдынан төшмәгән булһа,
Зөләйха ла атаһына ғәзиз инде,
Бәлки, күпкә артығыраҡ һөйөр имде.

Зөләйха бер көндө йоҡлап ята ине,
Йософ һүрәте тағы төшөнә инде.
Күреү менән был юлы ғашиҡ булды,
Зөләйха илап уянып китер имде.

Атаһы ҡыҙынан һорар:
— Ни илайһың?
Күңелеңдә ни кисерәң, ни теләйһең?

Төшөндә ниҙәр күреп борсолаһың?
Бөтәһен дә ҡалдырмай һөйләп бир имде.

Зөләйха әйтер:
— Мин ятып торған инем,
Төшөмдә бик гүзәл һүрәтте күрҙем,
Уянһам — һүрәт юғалды, мин бер үҙем,
Шул сәбәптән илап ултырамын имде.

Ул һүрәт күҙем алдына асыҡ килде,
Хәтерем шашты вә фәһемемде алды.
Аҡылымды, сабырымды йыйып алды —
Күңелем, нәфсем тик шуны теләр имде.

Атаһы әйтер:
— Мин үҙем күрһәм ине,
Уның ҡайҙалығын да эҙләтеп тапһам ине,
Малым вә мөлкәтем фиҙа ҡылыр инем,
Уны-һине ҡауыштырыр өсөн имде.

Зөләйха йоҡонан тамам мәхрүм ҡалды,
Ай кеүек күркле йөҙҙәре ныҡ һурыҡты,
Эсмәй, ашамай һис берниндәй ризыҡты,
Көнө-төнө, Йософ, тиеп илар имде.

Ошо хәлдә тағы ла бер йыл уҙҙы,
Зөләйха теге һүрәтте йәнә күрҙе,
Был юлы һүрәт уға өгөт тә бирҙе:
— Өгөтөмә, Зөләйха, ышан, тыңла имде.

Шуны һин бел: мин — һинеке, һин — минеке.
Була күрмә минән башҡа һис кемдеке.
Иҫеңдә тот минең дә ғашиҡ икәнлекте,
Минән башҡаға күҙ ҙә һалма имде!

Зөләйха был өгөттәргә риза булды,
Йоҡонан уянып тирә-йүнгә күҙ һалды,
Тағы ла теге һүрәт күҙҙән юғалды, —
Зөләйха ла һуштан яҙып ауыр имде.

Атаһы, был хәлде күргәс, хайран ҡалды,
Ғашиҡлыҡ сәбәп икәнен асыҡ белде,
Зөләйханы дауаларға сара ҡылды,
Аҡылы килмәҫ, һис дауа килешмәҫ имде.

Аҡылы шашты, ятһа, һис йоҡо алмаҫ,
Килтерһәләр, тәғәм ризыҡ ҡаба алмаҫ,
Һис берәү менән бер-ике һүҙ һөйләшмәҫ,
Бер ниндәй ҙә табиб сара тапмаҫ имде.

Өсөнсө йыл һүрәтте күрҙе йәнә,
Бик ҡаты ант биреп, инәлеп һораны:
— Әйт миңә мәҡәменде,* ҡайҙа ул? — тине, —
Мине бөтәһенән мәхрүм иттең имде.

Йософ әйтер:
— Йә, Зөләйха, бел һин шуны:
Мин — Мысырҙың батшаһымын, мине таны.
Мысырға кил, күрергә теләһәң мине,
Мысыр эсендә булырмын мин имде.

Сабырлыҡ менән эшлә һин был эште,
Сабырлыҡтан башлана һәр эштең башы,
Моратына тиҙ етер сабырлы кеше —
Ниәттәргә күркле сабырлыҡ кәрәк имде.

Зөләйха, быны ишетеп үрә торҙо,
Һүҙен аңлап, аҡылын, фәһемен йыйҙы,
Атаһына үҙенең хәлен һөйләп бирҙе,
— Теләгәнем — Мысыр батшаһылыр, — тиер
имде.

Бау-быҒауҙарын систерҙе, иҫе ҡайтты,
Бынан ары һөйләгәне булды татлы.
Йөҙөндә нур балҡыны, теле асылды,
Әммә үҙе гел Йософто уйлар имде.

Зөләйханың тыуған иле — Мәғриб* иле,
Йыраҡ ҡына Мысырҙан унын юлы,
Әгәр ҙә атлы булһа, көнө-төнө
Алты айҙа Мәғрибкә етерҙәр имде.

Егерме бәктән килде оло яусылар.
Һәр береһенең башында алтын таждар,
Килтергәндәр алтын тәре менән малдар, —
Барыһы ла Зөләйханы теләй имде.

Һәр бер мәликтән айырым яусы килде,
Зөләйханы кейәүгә димләйҙәр имде,
Ә Зөләйха атаһына әйтер инде:
«Мысыр батшаһына мине биргел имде».

Атаһы был хәбәрҙе асыҡ белде,
Яҙыу яҙып, Мысырға кеше ебәрҙе,
Яҙыуында ҡыҙы теләген белдерҙе:
«Ҡыҙым бар, шул һине генә теләр имде».

Таймус Талус улымын — белең уны,
Бер ҡыҙым бар — Зөләйха, һиңә лайыҡ,
Шундай тәкдир ҡушҡан уға тәңре халиҡ,
Теләһәң: яусынды ебәр, — тиер имде. —

Күп солтандар һораны, ул ризалашмай,
Күңеле ятмай, береһен дә оҡшатмай,
Хәтеренән һис кенә һине сығармай,
Көтө-төнө һине генә көтөр имде.

Мин ҡыҙымды, ысынлап та, һиңә бирәм,
Мең дөйәгә йыһаҙдарҙан йөк тейәтәм,
Тағы ла мең ҡасырға* мал йөкмәтәм,
Мең дөйәлә затлы ебәк булыр имде.

Тағы ла мең ҡарауаш* эйәреп барыр,
Улар һинең һарайында хеҙмәт ҡылыр,
Һәр әйткәнегеҙгә буйһонорға әҙер, —
Кеме ҡытай, кеме руми* булыр имде».

Ул саҡ Мысыр мәлиге Ҡәнзәфәр ине,
Илселәр яҙыу тотоп уга килде,
Уҡып, риза булды, үҙенсә хуп күрҙе,
Яуапнамәлә сәләмдәр яҙыр имде:

«Кем теләһә мине, мин дә бик теләрмен,
Йөҙ мең тапҡыр һағынып ҡаршыларммын,
Якшы теләк-хисемде фиҙа ҡылырмын,
Тәкдимегеҙ ҡабул ҡылам», — тиер имде.

Ҡәнзәфәрҙән илселәр килеп еткәс тә,
Таймус уның яуабын ҡулына алғас та,
Ул хаттың ыңғай икәнлеген белгәс тә,
Зөләйханы Мысырға әҙерләр имде.

Мең дөйә һәм ҡасырға йөк йөкмәттерҙе,
Тағы ла мең ҡол — ҡарауаш атландырҙы, —
Зөләйха Мысырға шулай килеп керҙе,
Һарайҙа үҙ тәхетен ҡуйҙырыр имде.

Ебәк кейҙе, төҙәтенде, тажын һалды,
Күңеле асылып, хәтере шатлыҡҡа сумды,
Гүйә, айҙың ун дүртенсе көнө тыуҙы —
Йөҙө ҡояш кеүек балҡып торор имде.

«Ниһәйәт, моратыма ирештем, тиер,
Ғәзиз Мысыр батшаһын күрәм, тиер,
Бөтә малым дәрүиштәргә бирәм, тиер,
Шөкөр, бына моратыма ирештем имде».

Шул ваҡытта бәктәр менән батша килде
Бәктәр китте, мәлик яңғыҙ тороп ҡалды,
Ә Зөләйха, уны күреп, асыуланды:
— Был ниндәй ир, ниңә ҡалды? — тиер имде.

Ҡарауаштар* Зөләйхаға яуап бирҙе:
— Мысыр ғәзизе* — солтаныбыҙ инде үҙе,
Хәкиҡәт, һин теләгән Ҡәнзәфәр — үҙе,
Әҙәпһеҙлек күрһәтмә, — тиерҙәр имде.

Был һүҙҙән Зөләйханың аҡылы шашты,
Һушы китеп, тәхетенән ауып төштө,
Ҡарауаштар барыһы ла ҡайғырышты,
Быны күргәс тә, Ҡәнзәфәр сығыр имде.

Ниһәйәт, Зөләйха меҫкен аңға килде,
Ниндәй хәлдә ҡалғанлығын асыҡ белде,
Ҡайғы-хәсрәттән уның йөҙө һулыны, —
Ҡарауаштар барыһы ла күрер имде.

Улар һорай:
— Әйтсе, ни булды, Зөләйха?
Һинһеҙ беҙгә кәрәк түгел ошо йыһан,
Уны күреп, ауып төштөң. Ни һуң булған?
Беҙгә шуны асыҡлап һөйләһәң имде.

Зөләйха әйтер:
— Йыраҡ ҡалды минең илем,
Ах, шундай хатанан ауыр минең хәлем,
Аһ, дәриға! Рәнйеүем ҙур, оҙаҡ юлым,
Алты айлыҡ михнәтем буш булды имде.

Мин төшөмдә күргәнем был ир түгел,
Тағы әйтәм: был ир миңә лайыҡ түгел,
Һис тә төштә күргәнемә оҡшаш түгел,
Аҡылы, күрке уның бындай түгел имде.

Тулған айға оҡшай ине уның йөҙө,
Бал-шәкәрҙән татлыраҡтыр әйткән һүҙе,
Хәсрәтлегә рәхәт бирә ике күҙе, —
Унһыҙ миңә был йыһан хуш түгел имде.

Төшөмдә ул миңә вәғәҙәләр бирҙе,
Ни сәбәптән вәғәҙәһен үҙе боҙҙо?
Алты айлыҡ михнәттәрем юҡҡа булды,
Минең шәһәр бынан йыраҡ ҡалды имде.

Ҡарауаштар Зөләйханы йәлләнеләр,
Йылы һүҙ менән уны өгөтләнеләр,
Зөләйханы сабырлыҡҡа өндәнеләр:
— Сабырлыҡ моратыңа еткерер имде.

— Ҡайҙан беләһең, Халиҡ сәбәп иткәндер,
Ул төшөң, бәлки, ысынға тура килер,
Ысынлап та, бәлки, моратың ҡабул булыр,
Теләгеңде үтәү уға еңел имде.

Зөләйха өгөтләүгә шунда бирелде,
Мысырҙа торорға ахырҙа риза булды,
Берәү ошо серҙе белмәй ҡалды,
Хатта Ҡәнзәфәр үҙе лә белмәҫ имде.

Унан һуң байтаҡ ваҡыт үтеп китте,
Мәликтән үҙен Зөләйха һаҡлап йөрөттө,
Йөҙө һулыһа ла өҙмәне өмөтөн,
Бер туктауһыҙ Йософто уйлар имде.

Халиҡ һаҡланы Ҡәнзәфәрҙән Зөләйханы,
Йософ өсөн һаҡлай ине — белгел уны,
Ҡәнзәфәр иһә бер ни ҙә белмәй ине,
Хәжәт төшкәндә, ен ҡыҙы килер имде.

Зөләйха Ҡәнзәфәргә буйһонмаҫ, баш бирмәҫ,
Үҙен һаҡлар, уға бер ҙә яҡын килмәҫ,
Ҡәнзәфәр һаман был хәлдең асылын белмәҫ,
Ен ҡыҙын Зөләйха тип һөйөр имде.

## Ҡәнзәфәрҙең Йософто һатып алғаны — Зөләйханың ғишҡы яңырғаны

Унан һуң ете йыллап ваҡыт үтте,
Хәлдәр тынды, күп ай-йылдар китте,
Ниһәйәт, Йософ Мысырға килеп етте,
Мысырҙа ҡол ителеп һатылыр имде.

Өндәүселәр баҙар эсендә йүгереште,
«Был уғланды кем һатып ала?» — тиеште,
Гүзәл йөҙөнән пәрҙәһен күтәреште,
Йөҙ нуры көн яҡтыһын ҡаплар имде.

Бер кеше лә уны һатып ала алманы,
Баһа биреп, уға яҡын килә алманы,
Мысыр малы уға баһа була алманы —
Бөтә ғәләм байлығы ла етмәҫ имде.
Дуғыр улын хеҙмәтенә саҡырып алыр,
«Ҡолоң килтер, беҙ күрәйек», — тиер имде.

Шул сәғәт Ҡәнзәфәр шундай әмер ҡылды:
Матурлап, ҙурлап биҙәнеләр майҙанды,
Ебәк түшәк менән тулды һарай алды,
Эргәһендә ултырғыстар торор имде.

Бәктәр, Ҡәнзәфәр көрсиҙәргә* ултырҙылар,
Шунда уҡ Йософто бында килтерҙеләр,
Оло-кесе барыһы хөрмәт күрһәттеләр,
Майҙандағы көрсигә ултырырҙар имде.

Майҙанға Йософ килеп тә ултырҙы,
Йөҙөнөң нуры бөтә майҙанға тулды,
Зөләйха шул ваҡыт Йософто күрҙе,
Күргәс тә һушһыҙ булып төшөр имде.

Ҡарауаштар барыһы бергә йыйылды,
Иҫен юйып төшкәненә ғәжәп ҡылды.
Һорарҙар:
— Ҡатын, әйтсе, нимә булды? —
Китмәйенсә, төбәшеп һорарҙар имде.

Зөләйха әйтер:
— Ебәрегеҙ, төшәйем,
Нисә йылғы хәсрәтем менән ҡауышайым,
Айырылыу хәл-әхүәлен һорашайым,
Хәҡиҡәт, ҡауышыу көнө етте имде.

Улдыр — минең теләгем, шуны белегеҙ,
Һеҙ минең өсөн уны һатып алығыҙ,
Бар малды уның өсөн фиҙа ҡылығыҙ,
Күпме һораһалар ҙа бирегеҙ имде.

Фәрештә бар ине — Йософтоң юлдашы,
Әйтер:
— Быны алһа ала тик бер кеше —
Бары батша була ала тиңе-төшө,
Батша кеүек шаһтар ала, белгел имде.

Өндәүселәр ҡаты һөрән һалдылар:
— Был уғланды кем һатып ала? — тиҙәр,
Һөнәре бер ун төрлө, тип өҫтәнеләр,
Берәм-берәм һанап сығырҙар имде.

— Беренсенән, буйы зифа, матур үҙе.
— Икенсенән, айҙай яҡты, күркле йөҙө.
— Өсөнсөнән, асыҡ теле, йомшаҡ һүҙе.
— Етмеш ике телде тамам белер имде.

— Дүртенсенән, шәфҡәтле, мәрхәмәтле.
— Бишенсенән, алып* йөрәкле һәм һиммәтле.
— Алтынсынан, күптәрҙән күпкә ҡеүәтле,
Ҡырҡ ирҙән ҡеүәте артығыраҡ имде.

— Етенсенән, дине тоғро, дийанатлы.
— Һигеҙенсе, хыянатһыҙ, аманатлы.
— Туғыҙынсы, холҡо гүзәл, һүҙе ҡотло.
— Унынсы, үҙе пәйғәмбәр нәҫеле имде.

Батша, быны ишетеп, хайран ҡалды,
Йософтоң матурлығына күҙен һалды,

Күргәс тә, сабыры китте, һушһыҙ ҡалды,
Таң ҡалып, ғәжәпләнеп ул торор имде.

Батша әйтер:
— Был уғланды миңә һатың,
Алтын-көмөш кәрәк булһа, шуны алың,
Ни баһаны һорайһың, бәйән ҡылың,
Ҡиммәтенең дәүмәлен белдерең имде.

Фәрештәләр унда ни, әҙерҙәр ине,
Йәшерен генә Дуғырға кәңәш бирҙе:
— Һәр төрлөһөнән барыһын һора, тине,
Йософ ауырлығы ҡәҙәр бирһен имде.

Тәжир* әйтте:
— Үлсәүеңә алтын һалдыр,
Икенсе үлсәүеңә Йософто баҫтыр,
Башка зиннәттәреңде лә бында алдыр,
Йософ ауырлығы хәтле бирерһең имде.

Унан батша быңдай шартҡа риза булды,
Шул уҡ сәғәт хазина һаҡсыһы килде,
Үлсәүенә ул биш йөҙ мең алтын һалды,
Алтын Йософ ауырлығы тартмаҫ имде.

Үлсәүенә әллә күпме алтын һалды,
Үлсәнеләр, барыбер етерлек булманы,
Хазинала алтын-көмөш тә ҡалманы,
Бөтәһен йыйғанда ла етмәҫ имде.

Атлас-ебәк, мишек-ғәнбәр — барын ҡуйҙы,
Гәүһәр-яҡут, ынйы-мәрйен йәнә йыйҙы.
Быңдай хаҡҡа батша аптырап ҡалды,
Бөтә байлығы Йософҡа етмәҫ имде.

Батша әйтер:
— Беҙҙең сауҙа барып сыҡмаҫ,
Баһаһына, шарт буйынса көсөм етмәҫ,
Ғәләм малын йыйһаң да быға етмәҫ,
Ҡалғанын һин миңә бүләк итһәң имде!

Тәжир әйтер:
— Ярай, сауҙаға ризалашам,
Еткәненсә, малыңды ла ҡабул ҡылам,
Етмәгәнен үҙеңә бушлай ҙа бирәм,
Был уғланды риза булып бирәм имде.

Шулай итеп, батша Йософто алды,
Малик Дуғыр ҙа ҡолона күҙен һалды,
Ҡулында пәйғәмбәрлек нурҙарын күрҙе,
Һатыуына бик үкенеп торор имде.

— Ай дәриға! Ҡайҙа һуң минең дәүләтем?
Быға хәтле нисек һине белмәгәнмен?
Ҡулындағы нурын да күрмәгәнмен, —
Бөгөнгө көн уғлан ҡулдан китте имде!

Малик әйтер:
— Эй, Йософ, йөҙҙәрең нурлы,
Фәрештә сифатлыһың, һүҙең татлы,
Әҙәмиҙә күрмәнем һинең сифатты,
Әйтсе миңә, һин кем һуң? — тип һорар
имде.

Йософ әйтер:
— Һиңә хәлемде һөйләп бирәм,
Ҡемлегемде лә хәҙер асып һалам,
Әммә ләкин бер шартым бар: үҙең ҡара,
Барыһынан да серемде һаҡла имде.

Ҡем икәнлегемде һиңә асып һалам:
Минең атым Яҡуп уғлы Йософ булам,
Олуғ бабам хаҡыбыҙҙың дуҫы булған,
Атам Яҡуп, бабам Исхаҡ булыр имде.

Был һүҙҙе ишетеп, Малик хәсрәтләнде:
— Элегерәк быларҙы нисек белмәнем?
Тоғро йәндән айырылдым, мәхрүм ҡалдым,
Пәйғәмбәрҙе бәндәлеккә һаттым имде!

Аһ дәриға! Әгәр быны белгән булһам,
Бер кемгә лә ҡол шикелле һатмаҫ инем,
Азат итеп, атайыңа илтер инем,
Үҙем шунан ҡолоң булып ҡалыр инем.

Йософ әйтер:
— Был мөмкинлек үтте инде,
Тәңребеҙҙең тәҡдиренсә булды инде,
Сараһыҙҙан бәләләргә төштөм инде, —
Хаҡ әмеренә ҡол риза була имде.

Малик әйтер:
— Эй ҡәҙерлем, тоғро Йософ,
Ҡыҙым бар, уланым юҡ — бел һин анык,
Минең өсөн доға ҡылғыл, күңелең һалып.
Һин гонаһһыҙ — доғаң ҡабул булыр имде.

Йософ нәби ҡул күтәреп доға ҡылды,
Халиҡ унының доғаһын ҡабул ҡылды,
Егерме дүрт уғыл уға хоҙай бирҙе,
Һәр береһе дәүләт эйәһе булыр имде.

Малик шунда Йософтан һораны йәнә:
— Һине миңә һатыусылар кемдәр ине?
Ниңә һатты, өҫтәүенә осһоҙ һине —
Бынынһын да һөйләп бирһәң ине миңә.

Йософ әйтер:
— Унынһын әйтә алмайым,
Хаҡ һүҙен боҙоп, гонаһ ҡыла алмаймын,
Ғәйбәт һөйләп, шайтан күңелен байытмайым,
Ул серҙе асмайым, ирекһеҙләмә имде.

Айырылыу ваҡыты етте, асыҡ бел һин,
Саф күңелендә гел иманың йөрөһөн,
Йософто күрҙем, тип әйтмә бер кемгә һин,
Аманатым: был серемде һаҡла имде.

Мысыр мәлиге Ҡәнзәфәр, уйлап юҡты,
Йософто алғанына эсе нык бошто:
— Ҡаҙнала алтын-көмөш юҡка сыкты,
Мохтажлыҡ-хәйерселеккә төштөк имде.

Йософ әйтте:
— Шаһ бойорһон, әмер ҡылһын:
Хазина һаҡсыһы ҡаҙнаға күҙ һалһын,
Нимә ҡалған хазинала, барып күрһен,
Шунан шаһҡа килеп хәбәр бирһен имде.

Аптырағас, батша шунда әмер бирҙе,
Ҡаҙнала ни ҡалған, белергә ебәрҙе,
Хазинадар хазинаға йүгерҙе,
Барһа, ҡаҙнала туп-тулы байлыҡ имде.

Хазинадар шунда уҡ боролоп килде,
Былдай хәлде асыклап һөйләп бирҙе,
Батша, ишетеп былар ҙы, хайран ҡалды,
Ғәжәпләнеп һәм таң ҡалып тыңлар имде.

Батша яйлап хазинадарҙан* һораны:
— Берәй хикмәт бармы, — тип аптыраны, —
Юҡ хазина нисек тулһын, — тип һораны, —
Был кирәмәт,* был бәрәкәт ҡайҙан имде?

Хазинадар әйтер:
— Был серҙе белмәймен,
Мәғәнәһен дә һис аңлата алмаймын,
Былдай хәлде юҡ берәүҙән ишеткәнем,
Серҙе белһә уғлан үҙе белер имде.

Йософ әйтер шунда батшаға:
— Эй солтаным,
Минең изге мәүләм барҙыр — олуғ собхан.

Бөтә ошо яҡшылыҡтар — бары унан,
Юҡтарҙы бар ҡылыу уға еңел имде.

Шуны белегеҙ: унандыр бар ғинәйәт,
Ҡөҙрәте менән күрһәтер ул кирәмәт,
Шуға ла мин уға ҡылам шөкөр-рәхмәт,
Һеҙгә һис бурысым юҡтыр, — тиер имде.

Хазинадар әйтер:
— Шунда йөрөй инем,
Йософтоң эргәһендә тора инем,
Ҡуктә ҡоштар осҡанын да күргән инем,
Йософ менән әҙәмсә һөйләшер имде.

Әйтерҙәр:
— Эй Йософ ҡара ана, күр һин,
Ошоно аңлаһаң, тырышһаң ине,
Тәңребеҙҙең ҡушҡанына риза бул һин,
Баһаң күпме икәнлеген белгел имде.

Бынан элек көҙгөгә бер баҡҡан инең,
Көҙгөләге күркең күреп, маҡтанғайның,
Мин һатылыр ҡол булһам, тигән инең,
Миңә ысын баһаны кем бирер имде?

Баһаңдың дәүмәлен белдеңме инде,
Тәҡдирең нисеклеген күрҙеңме инде,
Ни баһаға һатыуҙарын белдеңме инде?
Үн һигеҙ йәрмаҡҡа һаттылар бит имде.

Бөгөн күрҙең: ҡиммәтең күпме тора.
Халиҡ һиңә изгелеген күпме ҡыла,
Бөтмәҫ байлыҡ хазинаңа нисек тула, —
Халиҡҡа рәхмәттәреңде ҡылғыл имде.

Унан һуң Йософтан батша һораны,
Оло хөрмәт күрһәтте, ҡәҙерләне,
Ҡулынан алып, Зөләйхаға былай тине:
— Был мөбәрәк уғландыҡты һаҡла имде.

Уға тейешенсә ҡәҙер-хөрмәт күрһәт,
Дәрәжәгә, ололауҙарға лайыҡ зат,
Миңә ҡарағанда ла нык ярат,
Ул беҙҙең улыбыҙ булһын! — тиер имде.

Батша һүҙен Зөләйха ҡабул ҡылды,
Йософто ҡәҙерләне, хөрмәтләне,
Өс йөҙ алтмыш төрлө кейем әҙерләне,
Һәр көн бер төрлөһөн кейҙерер имде.

Йософ әйтер:
— Был эш миңә түгел ҡулай,
Ҡейемдәрҙе ниңә әҙерләйһең былай?
Бындай эште бөтә кеше ғәйеп ҡылғай
Хатта батша үҙе лә кеймәҫ имде.

Зөләйха әйтер:
— Тундарҙы кейгел инде,
Батша бит үҙе, «кейендерергә», тине.
Хәкикәт, батша үҙе өгөтләне мине,
Ҡей, нур өҫтөнә нур ғына булыр имде.

Үҙ ҡулы менән Йософтоң сәсен тарар,
Ынйы-мәрйен ҡушып сәстәрен үрер.
Әммә күңел тынысльғын юя барыр,
Ғишҡы еңде, сабыры һис ҡалмаҫ имде.

Зөләйха Йософ матурлығын сағыштырҙы,
Ихтыярһыҙ, ғәжиз булып, меҫкен ҡалды,
Ул Йософҡа баштан-аяҡ ғашиҡ булды,
Ҡөндән-көнгә ғишҡы һаман артыр имде.

Зөләйха хәлдән тайҙы — белештермәй үҙен,
Бер сәғәт күрмәй торһа Йософтоң йөҙөн,
Сабыры ҡалмаҫ, аңламаҫ кеше һүҙен,
Ни әйтһә лә: «Йософ!» — тип ҡысҡырыр имде.

Берәй ваҡыт тамырынан ҡан алдырһа,
Табиб уның тамырына бысаҡ һыҙһа,
Шул саҡта, ҡаны ағып, ергә тамһа,
Ер өҫтөндә Йософ исеме яҙылыр имде.

Ҡайһы берҙә күк йөҙөнә күҙен һалһа,
Күктә янған йондоҙҙарҙы күреп ҡалһа,
Шул мәлдә Йософто хәтеренә алһа,
Йондоҙҙар ҙа: «Йософ!» — тип ҡабатлар имде.

Шулай ул тамам тынысльғын юйҙы,
Үҙенең хәлен Йософҡа асмаҡ булды,
Һөйөп Йософтоң ҡулын ҡулына алды,
Етәкләп, потханаға индерер имде:

«Йә, сәнам, хәжәтемдән килдем мин һиңә,
Ошо уғлан шикһеҙ лайыҡ торор миңә,
Ярҙамыңды күрһәт, зинһар, өмөтөм һиндә,
Был уғланды буйһондорһаң миңә имде».

Ялбарҙы ул сәнамға,* күп зарланды,
Ғишыҡ уты көсәйҙе, сабырын алды,
Күңелендәген йәшермәй һөйләргә булды,
Сараһыҙҙан сәнамға ялбарыр имде.

Уны күреп, Йософ нәби доға ҡылды.
Сәнам ауып китеп, ун киҫәк булды,
Халиҡтан сәнамға шундай әмер килде:
«Йософ — хаҡ пәйғәмбәр» тигән һүҙҙер
имде.

Зөләйха хаҡ ҡылғанын асыҡ күрҙе,
Сәнамға оло хурлыҡ килгәнен белде,
Сәнам, телгә килеп, барын әйтеп бирҙе,
Быны Зөләйха Йософтан һорар имде.

Зөләйха әйтер сәнамға:
— Был хәл — ниҙән?
Сәнам бер бөтөн ине, ун киҫәк хәҙер...
Йософ әйтер:
— Быға халиҡ бирҙе әмер,
Сөнки тәңре был ғәмәлде һөймәҫ имде.

Зөләйха әйтер:
— Шуныһы бик ғәжәп торор:
Нисек итеп халиҡ ул сәнамды күрер?
Был сәнам шундай хурлыҡҡа нисек түҙер? —
Сәнам өйҙә йәшерен тора имде.

Йософ әйтте:
— Хоҙайҙың ҙур ҡөҙрәте был,
Барса хәлдә ҡолдары әҙер булалыр,
Йәшерен эштәр уға мәғлүм була гел,
Һәр кем ҡайҙа, ни ҡылған — күрер имде.

Зөләйха әйтер:
— Әгәр ҙә шулай итеп,
Халиҡ беҙгә берәй төрлө ярҙам итһен,
Баяғы сәнамым тағы бөтөн булһын —
Йә, Йософ, һин ни тиһәң, шул булыр имде.

Ҡурҡамын: потханаға батша керер,
Унға ярылып ятҡан сәнамды күрер,
Нишләп шулай сыҡҡан — беҙҙән һорар,
Беҙ гонаһлы тиеп уйламаһын имде.

Шунда Йософ тағы ла доға ҡылды,
Хоҙай уның теләктәрен ҡабул ҡылды,
Шул саҡ сәнам баяғыса бөтөн булды,
Зөләйха ғәжәпкә ҡалып торор имде.

Унан һуң ғашиҡлыҡ уны әсир ҡылды,
Көндән-көнгә ғишҡы һаман арта барҙы,
Йөҙө һулыны, йоҡонан мәхрүм ҡалды,
Ашау-эсеү ҡайғыһы китте имде.

Бер көн батша үҙе эргәһенә инде,
Зөләйханың хәле мөшкөллөгөн күрҙе,
Һорар, аптырар:
— Хатын, һиңә ни булды,
Тәкәтең юҡ, күркле йөҙөң һулыған имде?

Бойорҙо табибтарҙы тиҙ саҡырырға,
Табибҡа уйланы был хәлде аңлатырға,
Табиб килде хатын сирен асыҡларға,
Ҡулын алып, тамырын тотоп ҡарар имде:

— Ниндәй сир икәнлеген әйтә алмам,
Был рәнйеүгә дәрманымды еткерә алмам,
Уның сирен мин асыҡлап әйтә алмам,
Хәҡиҡәт, ғашиҡлыҡ бәләһелер имде.

Зөләйха ғәзиздән йәшерен ҡылды,
(Ғәзиз уның ни тиерен белмәй ҡалды).
Табибтан ул сир сәбәбен йәшермәне,
Һүҙе менән табибҡа белдерер имде.

## Зөләйханың дая кәңәшен тотҡаны, һарай һалдырғаны, Йософ менән һөйләшкәне

Зөләйха бер көндө ятып торор ине,
Бер даяһы* килде, хәлен белешергә инде,
Әйтер:
— Әй ҡатын, һиңә ниҙәр булды,
Ни сәбәптән был хәлгә төштөң имде?

Йә, күҙ бағам, нилектән күңелең тар?
Матурлығың һарғайған, ни ҡайғың бар?
Сирең минән йәшермә, асығын әйт,
Хәлең насар, кәйефең бик мөшкөл имде.

Зөләйха даяһына шуны һөйләне:
Ауырыу серен даяһына асып бирҙе,
Бөтәһенән үҙе серен йәшерә ине, —
Бер-кемгә, лә һөйләмәүен үтенде имде.

Зөләйха әйтер:
— Ҡәнғандың ҡол уғланы...
Беләһеңдер, изге даям, һин дә уны?
Был хәлдәргә ул төшөрҙө, бел һин шуны,
Уның ғишҡы мине шулай итте имде.

Дая әйтте:
— Хәлең мөшкөл икән, һиҙҙем,
Ниңә белдермәйенсә һаман да түҙҙең?

Мәслихәт эш эшләп, ризаландыр үҙен,
Шулай моратыңа ирешерһең имде.

Ғашиҡлыҡ ғашиҡҡа һәр саҡ бәлә булыр,
Мәғшуҡтың теләге гел генә шул булыр,
Ғашиҡ күңеле көндән-көн нығыраҡ һулыр,
Тәкәте лә, ҡөҙрәте лә ҡалмаç имде.

Йә, хужам, ғашиҡ хәле еңел булмаç,
Табибтар ҙа ул дәрткә дарман тапмаç,
Ғәләм ҡыуанғанда ла ғашиҡ көлмәç, —
Һәр саҡ һөйгәненең ҡайғыһын тотор имде.

Зөләйха әйтер:
— Эй даям, бик раç әйтәһең
һүҙең,
Бигерәк мәслихәтле булды әйткән һүҙең,
Минең өсөн ни эшләргә уйлайһың бөгөн?
Юҡһа был сирем үлтерер имде.

Ни ҡушһаң да миңә, хәҙер шуны ҡылам,
Һинең әмереңә бөтөнләй буйһонам,
Бәлки, был ауырыуымдан да ҡотолам,
Баштағы моратыма ирешһәм имде!

Дая әйтте:
— Малыңды тотоу кәрәк,
Ғашиҡ кешегә мал фиҙа ҡылыу кәрәк,
Хазина-малды күңелдән ҡыуыу кәрәк,
Ғашиҡ икәнһең, байлығыңдан төңөл имде.

Ҡатын әйтте даяға:
— Йә, риза булдым,
Һинең өгөт-кәңәштәреңә буйһондом,
Мал-мөлкәттең барыһын фиҙа ҡылдым,
Минең өсөн ни ҡылһаң да — ҡылғыл имде.

Дая әйтте:
— Төҙөүселәр хәҙер килһен,
Һиңә лайыҡ бер һарай төҙөп бирһен,
Шулай булһын: күргән берәү хайран
ҡалһын,
Эсе ғәжәп төрлө нағыш булһын имде.

Уртаға ынйы-мәрйен сымылдыҡ ҡуйылһын,
Ҡыҙыл алтын ағастар унда үçһен,
Ботактары һәр береһе бер төрлө торһон,
Емештәре төрлө-төрлө булһын имде.

Төрлө-төрлө терәктәр унда торһон,
Уларҙың бер нисәһе аҡыҡ булһын,

Бағананың бер нисәһе бәллүр булһын,
Ҡайһылары ынйы-мәрйендән булһын имде.

Ул терәктәрҙең төбөндә ҡыуаҡ үҫһен,
Сыбыҡтары барыһы ла алтын булһын,
Терәктәр араһына үгеҙ ҡуйылһын,
Улары инде көмөштән булһын имде.

Саф ҡыҙыл алтындан берәй ат яһалһын,
Гәүһәр, яҡут менән матур биҙәкләнһен,
Эргәһендә төрлө-төрлө ағастар эшләнһен,
Емештәре тик алтындан булһын имде.

Ул ағастар өҫтөнә ҡош ҡундырылһын,
Ҡоштарҙың һәр береһе бер төрлө булһын,
Һарайҙың эстәре шундай матурланһын,
Һәммәһе лә һандал-гөлдән булһын имде.

Ул һарайҙы шулай итеп эшләһендәр,
Төмән* төрлө нағыш менән биҙәһендәр.
Диуарҙарын бәллүр менән көпләһендәр,
Алтын-көмөш менән балҡып торһон имде.

Уның эсенә йомшаҡ ебәк түшәһендәр,
Гәүһәрҙән кәндилдәр яндырһындар,
Ғәнбәр, мишек, зәғфрандар төтәтһендәр,
Биҙәкле лә, хуш еҫле лә булһын имде.

Түшәме лә һүрәттәр менән биҙәлһен,
Дүрт диуарға ла рәсемдәр төшөрөлһөн,
Йософ һүрәте лә араһында булһын,
Үҙенденең дә йөҙ-һынының сағылһын имде.

Тап уртала зиннәтле тәхет ҡуйҙырып,
Иңеңә иң затлы кейемдәрең һалып,
Башыңа тейешле матур таж кейеп,
Тәхет өҫтөндә балҡып ултыр имде.

Ҡарауаштар хеҙмәтеңә әҙер торһон,
Ҡыҙыл алтын һауыттар тотоп торһон,
Мишек-ғәнбәр еҫтәре лә аңҡып торһон,
Көмбәҙе ҡыҙыл алтындан булһын имде.

Йософто саҡыртып алдыр, шундуҡ килһен,
Килеү менән был ғәжәпкә күҙен һалһын,
Күргәс тә ихтыярһыҙ аптырап ҡалһын,
Бөтә сабырлығы шунда бөтһөн имде.

Көтмәгәндә генә шунда һине күрер,
Өмөт бар: буйһонор тамам, әсир булыр,

Башындағы дәртеңә лә дарман булыр,
Моратыңа ирешерһең шунда имде.

Зөләйха дая кәңәшен ҡабул итте,
Ләкин ауырыу көсәйҙе, хәле бөттө,
Ғәзиз бер көндө килгәнендә белеште:
— Һинең сирендең сәбәбе ниҙә имде?

Ҡатын әйтер:
— Төҙөүселәреңде саҡыр,
Миңә лайыҡ матур һарай хәҙер һалдыр,
Һарай эсенә ғәжәп нағыштар һалдыр,
Төрлө һыуҙар эсендә ағып торһон имде.

Ахырҙа Ҡәнзәфәр үҙе әмерен ҡылды,
Биҙәүселәр, оҫталар ҙа күп йыйылды,
Биҙәлгән һәм күркәм һарай ҙа һалынды,
Оҫталарҙың барыһы ла унда имде.

Зөләйха ынйы-мәрйенләп сәсен үрҙе,
Ынйы-мәрйен бик матурланы үҙен,
Батша киткәс, Зөләйха һарайға керҙе,
Йөҙ нуры һарай эсенә бөркөлөр имде.

Өҫтөнә ул затлы ебәк күлдәк кейҙе,
Биҙәкләнгән тажды башына ҡуйҙы,
Менәүәр тәхеткә ултырырға булды,
Йөҙөнән яҡты нурҙар ағылыр имде.

Йософто килтерергә ҡушҡас, барҙылар,
Һарайға тиҙ килергә, тип саҡырҙылар,
Аңламағанға вайымһыҙ ине — алданылар,
Беҙгә ғәзиз ҡушты, тип әйттеләр имде.

Ҡабаланып һарайға Йософ килде,
Тәхеттә балҡып ҡатын ултыра ине.
Абайланы һәм шунда уҡ кире дүнде,
Һиҙенде лә ҡасыу яғын ҡарар имде.

Зөләйха был хәлде һиҙеп ҡалыуы менән,
Йософ хәүефләнеп ирегә китеү менән,
Ниңә килгәненә үкенә башлау менән,
Ете ишек биктәрен бикләне имде.

Ҡаш һикертер, күҙен ҡыҫыр, һүҙен һөйләр,
Һөйләгәндә тынынан хуш еҫ аңҡыр,
Үҙе йәннәт нурҙарына оҡшап ҡалыр,
Ауыҙында ынйы тештәр йылтырар имде.

Йософ әйтер:
— Эй Хоҙайым — Хоҙаүәндә,

Һинең хөкөмөңә килтерҙе мине бында,
Был фетнәгә төшкән ҡолға сабыр ҡайҙа?
Ҡөҙрәтең менән сабырлыҡ биргел имде.

Бәс, Йософто Зөләйха етәкләп алды,
Ғашиҡ булғанын асып, әйтеп һалды,
Һөйөнөп, Йософтоң ҡулынан алды,
Ҡөс менән үҙенә таба тартыр имде:

— Мин һине бала саҡта төшөмдә күрҙем,
Шунан бирле матурлығыңа ғашиҡ булдым,
Нисә йылдан бирле теләгем ҡабул булды,
Моратыма бөгөн ирешермен имде.

Ҡыҫып тотто Зөләйха Йософтоң ҡулын,
Баҫып тора, тулған айҙай балҡып нуры,
Ә Йософ иһә эҙләй ҡотолоу юлын,
— Ҡотҡарсы! — тип Хоҙайға ялбарыр имде.

Йософ уйлар: «Аулаҡ һарай биҙәттергән,
Хур ҡыҙы кеүек үҙе биҙәнгән-төҙәнгән,
Шайтан-иблес аҙҙырыуына бирелгән,
Мәкер-хәйләләрҙән, Аллам, һаҡла имде.

Эй, Хоҙайым, әгәр улай була ҡалһа,
Иблес-ләғин күреп, эсе бошонмаһа,
Әгәр һинән ярҙам килмәй ҡалһа,
Атам Яҡуп оятсылыҡ күрер имде!»

— Тоғролоҡ бир! — тип Йософ ҡабатланы,
Сабырлығын, тоғролоғон ныҡ һаҡланы,
Тунының ете төймәһен ысҡындырманы,
— Аллам, һаҡла! — тип хаҡҡа һыйына имде.

Халиҡ: «Ярҙамыма мөрәжәғәт иттең,
Һәр ваҡытта мине ярҙамсың тип белдең,
Һис ҡайғырма, михнәттәрҙә ярҙам алдың,
Әле лә ҡоткарам, хөрмәтле итәм имде».

Йософ әйтер:
— Ҡатын, ебәр, ҡулымды
алайым,
Боҙоҡлоҡ эшләп, хаҡҡа гонаһлы булмайым,
Яҙыҡ эштәр менән бысранмайым,
Шайтандар ҡотҡоһонан арындыр имде!

Бәс, Зөләйха Йософҡа ҡаршы торҙо,
Матурлығын бер туҡтауһыҙ маҡтай бирҙе,
Сибәрлеген берәм-берәм һанап теҙҙе,
Маҡтауынан маҡтауы арта бара имде.

Зөләйха әйтер:
— Эй миһырбанлы,
һөймәлекле,
Холҡоң һәйбәт, йөҙөң яҡты, һүҙең татлы,
Ҡауышыу ниәтләп һарайҙы биҙәттем,
Һарай биҙәктәренә күҙ һал имде!

Йософ баҡһа, күрҙе һарай матурлығын,
Маҡтамайынса түҙә алманы үҙен,
Ул һорай ҡуйҙы батшаның ҡайҙалығын:
«Ниңә ҡатыны менән бергә түгел икән
имде?»

Зөләйха Йософҡа ошолай яуап бирер:
— Ғәзиздең был һарайҙа ни эше бар?
Был һарайҙың нағыш-биҙәге һиңә оҡшар,
Сөнки тик һинең өсөн төҙөлгән имде.

Ошо һарайҙың матурлығы һиңә лайыҡ,
Һис арттырып һөйләмәйем, һүҙем аныҡ,
Фиғылың хуш, ғишҡың көслө, һүҙең татлы,
Ғашиҡ булып, һиңә әсир төштөм имде.

Йософ әйтер:
— Ғәзиз мине һатып алды,
Минең фиғыл-холҡом уға оҡшап ҡалды,
Мине бит уғыллыҡҡа ҡабул ҡылды, —
Мин атама нисек хыянат итәм имде?

Хыянат эшләүсене халиҡ һөймәҫ,
Дошмандарына ғазабын һис кәметмәҫ,
Ярҙам һораусыларҙы ул ситкә типмәҫ,
Сабыр иткел һәм аллаға ялбар имде.

Зөләйха ул һүҙҙәрҙе һис аңламаҫ,
Йософтан да төңөлмәҫ, һис тыңламаҫ,
Уға лайыҡ һис бер генә һүҙ ҙә һөйләмәҫ,
Үҙ һүҙен генә ҡабатлай бирә имде.

Һүҙе һайын Йософҡа маҡтау яңғырар,
Ҡауышыуҙы уйлап, ниәтендә ҡаты торор,
Түбәнселек менән инәлер, ялбарыр,
Матурлығын бирәм-бирәм һанар имде.

Әйтер ки:
— Эй Йософ, һинең һүҙең татлы,
Ялҡмайынса тыңлау өсөн ул рәхәтле,
Йөҙөң латиф, әйткән һүҙең мөрәүәтле,
Ишетһәм дә, рәхәтем нык артыр имде.

Күрешеүҙәр — йөрәгемә йән рәхәте,
Гүзәллегең ҡояш кеүек, ғишҡың ҡаты,
Буй-һының таң ҡалырлыҡ, һүҙең мәргән,
Хәнйәр кеүек йәнемде киҫер имде.

Һиңә оҡшаш берәүҙе донъяла белмәҫмен,
Бер миҙгел һинһеҙ тора алмаҫмын,
Һинән айырылып бер үҙем түҙә алмаҫмын —
Айырылһам, йәнем тынғылыҡ тапмаҫ имде.

Яңы тыуған айға оҡшаш ҡаштарың бар,
Ынйыларға оҡшаш матур тештәрең бар,
Мишек-йофар еҫе килгән сәстәрең бар,
Үрергә үҙ ҡулым менән лайыҡ имде.

Ғәжәп нәфис ҡара бөҙрә толомоң бар,
Кешелекле, итәғәтле һүҙҙәрең бар,
Бер һирпелһә, йөрәк һыйырлыҡ
күҙҙәрең бар,
Керпектәрең йәнемә ҡаҙалыр имде.

Әйткәнең хуш, телең асыҡ, ярымлы күҙ,
Буйың матур, үҙең яҡшы, һының төп-төҙ.
Тағы ғәжәйеп баш-ҡул, менәүәр йөҙ
Күк эйәһе һиңә яҙмыш иткән имде.

Яҡутҡа оҡшаштыр һинең яңаҡтарың,
Йәш алманан нәфисерәк эйәктәрең,
Бал-шәкәрҙән татлыраҡтыр ирендәрең,
Эйәктәрең күңелемде үртәр имде.

Яңы бөккән тал сыбыҡтай бармаҡтарың,
Ынйы-мәрйендәй теҙелмеш тырнаҡтарың,
Ҡамфурҙан да ағыраҡтыр беләктәрең,
Ҡулдарың ебәктән йомшағыраҡ имде.

Хәҡиҡәт, һин ихтыярһыҙ иттең мине,
Ай-вай, ҡасан етә инде ҡауышыу көнө?
Гел даими күреп торһам ине һине,
Күрмәһәм, һис сабырлығым ҡалмаҫ имде.

Эйе, Йософ, әйткәнең хуш, үҙең ғәрле,
Һис берәү ҙә күрмәгәндер һиндәй йәрҙе,
Әҙәмиҙән тыумыш түгелһеңдер — нурлы —
Аналарҙан һинең кеүек тыумаҫ имде.

Был һүҙҙәрҙе Йософ шымып тыңлап торҙо,
Зөләйханың ниәттәрен асыҡ тойҙо,
Хөрмәт менән йомшаҡ ҡына яуап бирҙе,
Нәсихәт биреп, тынысландырыр имде.

Йософ әйтер:
— Зөләйха, өгөтөм тыңла,
Ни әйтермен — фәһем ҡыл, ишет, аңла,
Тәндән йән айырылһа — шуны тыңла,
Күркле йөҙҙә һис бер нуры ҡалмаҫ имде.

Ҡолдарға әжәл вәғәҙәһе килеү менән,
Йән алыусы килеп йәнде алыу менән,
Йән айырылып, ҡоро кәүҙә ҡалыу менән,
Күркле йөҙҙә лә нуры ҡалмаҫ имде.

Күркле йөҙлө, кәфен урап, гүргә керһә,
Күп түгел, гүрендә тик өс көн торһа,
Әгәр дуҫы, гүргә кереп, уны күрһә,
Күреү менән, төңөлөп ҡасыр имде.

Гүр эсендә күркле йөҙҙөң күрке ҡасыр,
Йылан-сая, ҡорт-ҡырмыҫҡа уны ашар,
Ҡороҡ кеүек оҙон сәстәр өҙөлөп төшөр,
Бер ни тоймай ҡоро кәүҙә ятыр имде.

Үткер күҙҙәр ҙә унда бер ни күрмәҫтәр,
Ынйы кеүек тештәр ҙә ҡойолоп бөтөр,
Ун ике һөйәктең барыһы юҡҡа сығыр,
Ите сереп, туҙып-ҡаҡшап ятыр имде.

Гүр эсендә күркле йөҙҙәр боҙолорҙар,
Ете ағза һеңерҙәре өҙөлөрҙәр.
Йылан-саян, ҡорт-ҡырмыҫҡа теҙелерҙәр,
Ауыҙ-морон, тел-тамаҡҡа тулыр имде.

Күркле йөҙҙәр, гүргә кергәс, нуры бөтөр,
Алдаҡсы ҡол йәшерен эштән тағы нишләр?
Бурыслының бурысы унда үтер,
Бынан унда бурысы барыу насар имде.

Күркле-күркһеҙ матурлығы һулыясаҡ,
Гүр эсендә бер тигеҙ ҡаласаҡтар,
Һәр кемдең нимә ҡылғанын күрәсәктәр,
Уң-һулдан ике фәрештә яҙыр имде.

Бына белдең: хәлдәр шулай була икән,
Ҡолдарына мәүлә хисап ҡыла икән,
Ҡылған эш шунда алдыңа килә икән, —
Яман эштән һаҡланырға кәрәк имде.

Зөләйха әйтер:
— Минең гонаһ ҡылғаным юҡ,
Ҡурҡып, уйҙан ваз кисергә дарманым юҡ,
Айырылыу ғазабын күп татыным, хәсрәтем суҡ,
Ҡауышыу дәрте сабырҙы алды имде.

Оҙаҡ итеп һиңә һүҙ һөйләнем,
Һиңә лайыҡ шундай матур йорт төҙөттөм,
Йәнемде йәлләмәй, хәҡиҡәт, һине һөйҙөм,
Мал-мөлкәтте һиңә фиҙа ҡылдым имде.

Йософ әйтер:
— Миңә һарай һис кәрәкмәй,
Ожмах һарайына барыбер етмәй.
Ожмахтағы ниғмәттәр һис кәмемәй,
Донъя йорто — фани һарай, — тиер имде.

Зөләйха әйтер:
— Йә, Йософ, ни һанайһың,
Йәшермә, күңелеңдән ни кисерәһең?
Әйтсе миңә: һин кемдән, ниңә ҡурҡаһың?
Егетлегеңде бер күрһәт, — тиер имде.

Йософ әйтер:
— Эйе, ҡурҡамын халиҡтан,
Үҙемде шулай итеп һаҡлаймын яҙыҡтан,
Әхирәтте уйлағанға һаҡланамын,
Шуға һиңә буйһонғом килмәй имде.

Зөләйха әйтер:
— Буйһонсо, Йософ, миңә,
Күпме яфа килтерҙең һин минең йәнгә,
Мин күпме яҡшылыҡтар ҡылдым бит һиңә,
Һин — хоҙайым, мин — хеҙмәтсең булам
имде.

Бәс, Зөләйха Йософтоң ҡулынан тотто,
Йософ та уға ҡарабыраҡ ылыҡты,
Шул ваҡыт халиҡтан сәләм етте:
Яҙыу булып күҙенә күренер имде.

Шул уҡ сәғәт Яҡуптан киҫәтеү килде:
«Был — зина», тип ул да ҡабатлар инде.
Күҙ алдында Яҡуп нәби пәйҙә булды,
Аят уҡып, киҫәтеү ҡабатлар имде.

Шунан атаһы Йософ алдында күренде,
«Боҙоҡ эштән нәфсеңде тый, улым», — тине.
Уны ишеткәс, Йософҡа сабырлыҡ килде,
Ә Зөләйха Йософҡа табан атлар имде.

Шул уҡ ваҡыт бер фәрештә килеп керҙе,
Йософҡа халиҡ ҡөҙрәтен күрһәтте,
Йософтоң арҡаһынан бер һыйпаны,
Тынысланып, тәүбәгә килһен имде.

Тәңренең бер аяты иҫенә килде,
«Гонаһлы язаһын алыр», — тигән инде,
Йософ бының ни икәнен асыҡ белде,
Алланан ғәфү, ярҙам һорар имде.

Аяттың мәғәнәһен Йософ аңлағас,
Хәүефле киҫәтеүҙәрҙе аңғарғас,
Яман эштән ҡотолорға ярҙам булғас,
Хаҡҡа ойоп, боҙоҡ эштән дүнде имде.

Зөләйха тажын һалды, тәхеттән төштө,
Килде вә Йософтоң муйынынан ҡосто,
Тоғро Йософ гонаһ эште кире ҡаҡты,
Бындай аҙғынлыҡты тәңре һөймәҫ имде.

Ул һарай эсендә сәнам тора ине,
Зөләйха уны хоҙай тип белә ине,
Ҡейеме менән уны Зөләйха ҡапланы,
Әйтер ки: «Хоҙайымды ҡапланым имде».

Халиҡтан Йософ шундай күрһәтмә алды,
Халиҡ Йософҡа ошондай яҡшылыҡ ҡылды,
Уҡырға татлы, йөкмәткеһе яҡшы Ҡөрьән
бирҙе,
Ҡөрьәндән тоғрораҡ дуҫ-юлдаш юҡ имде.

Сәнамды ҡаплағас, Йософ аптыраны,
Зөләйханан уның сәбәбен һораны.
Зөләйха Йософҡа яуап ҡайтарҙы,
«Тәңремдән тартынамын», — тиер имде.

Йософ әйтер: «Йә, Зөләйха, ни эш ҡылдың,
Шуның кеүекте нисек тәңре тип белдең,
Сәнамды күлдәгең менән ҡаплап ҡуйҙың?
Минең аллам нишләһәм дә күрер имде.

Сәнам — мәхлүк, яралмыш. Хаҡ-яратыусы,
Бөтә йәшерен фиғылды ла ул күреүсе,
Бер ваҡытта ла юҡ унан ҡотолоусы.
Сәнам йәнһеҙ: күрмәҫ, тоймаҫ, белмәҫ имде.

Сәнам битараф һәм кәрәк түгел ябыу,
Түбәнлек — уға алла итеп табыныу,
Изге алла бойороғона боҙоҡлоҡ ҡылыу,
Валлаһи, һис кенә лә яҡшы түгел имде.

Тәңре күрер, күргәнендә яңылышмаҫ,
Уның яҙған тәҡдирен ҡол аңлай алмаҫ.
Тәңре ебәргән уҡ юлдан һис тайпылмаҫ.
Уны ҡаза уғы тип йөрөтөрҙәр имде.

Быны ишетеп, Зөләйха мәкер ҡорҙо,
Йософҡа ғишҡы күңелендә ашып тулды,
Ҡасыр Йософ, тип ул ныҡ хәүефләнде,
Шуға ла ҡулын ебәрмәй торор имде:

— Ниңә ҡасаһың? Һарай аулаҡ түгелме ни?
Эсе гәүһәр, алтын затлы түгелме ни?
Ә үҙем һуң һиңә лайыҡ түгелме ни?
Егетлеккә дәрт-дарманың юҡмы имде?

Йософ әйтер:
— Эй хоҙайым, ҡотҡарыусым,
Ҡотолорға бынан көс-ҡеүәттәр бирсе,
Ҡөҙрәтең менән үҙең, зинһар, ҡотҡарсы,
Бының мәкере сабырҙы алды имде.

Мәңгелек ҡотҡарыусыбыҙ тәңре-рахман,
Һәм рөхсәттәр биреүсе лә улдыр һаман,
Ҡөҙрәте менән Йософҡа ебәрҙе ярҙам,
Ябраилды тағы ебәрер имде.

Хәлил әйтте Ябраилға:
— Эй Ябраил,
Тиҙ генә барып Йософто өгөтләп кил,
Ул һиңә лайыҡ түгел тип өйрәтеп кил,
Гонаһтан нәфсеһен тыйһын үҙе имде.

Шул сағында эргәһенә изге рух килде,
Килеү менән донъя нурына күмелде,
Хаҡ сәләмен Йософҡа шундуҡ еткерҙе,
Өгөтләп, арҡаһынан һыйпар имде.

Әйтер:
— Эй, Яҡуп улы Йософ ситдыҡ,
Мәүләм һиңә ебәрҙе сәләмдәр сук,
Был эш һиңә лайыҡ түгелдер: төңөл, сыҡ,
Яман эшкә үҙеңде бәйләмә имде!

Бәғзе тәфсирселәр* әйтер:
— Былдыр ялған,
Ҡөҙрәтле хаҡ Йософҡа биргән илһам:
(Михнәт сигеп, Йософ тәхеткә ултырған,
Быларын үҙең уйлап аңла имде).

Дәр-әл-мәхзүн* мәкамында ибне Исхаҡ,
Ибне Йәмин һағыналыр уны һәр саҡ,
Фәһем ҡыл, аңларға тырыш, уларға баҡ,
Улар ҡауышыу өмөтөн өҙмәҫтәр имде.

Ҡөҙрәтлемен, нәүбәт менән табыштырам,
Ярҙамым менән һеҙҙе лә ҡауыштырам,

Хәсрәттәре бирҙәрҙе күрештерәм,
Дуҫтарҙы — шат, дошманды хур ҡылам
имде.

Ҡөҙрәт менән батшаларҙың йәнен алам,
Гүр эсенә әсирлеккә илтеп һалам,
Ҡөҙрәтлемен, тәҡдирем һиңә ҡылам,
Зөләйхаға ла иман бүләк итәм имде.

Мысырҙа оло батша буласаҡһың,
Зөләйханы никахланып аласаҡһың,
Ул — һинеке, һин — уныҡы буласаҡһың,
Ул — ҡатын, һин батша буласаҡһың имде.

Ә Йософ хаҡтан был хәлдәрҙе ишеткәс,
Мәүләнән быңдай ишарат килеп еткәс,
Ошолайтып халиҡ изгелектәр ҡылғас,
— Ҡотҡар! — тип инәлеп ялбарыр имде.

Халиҡ әйтер:
— Йөҙ төңөлтөп ҡасыу — һинән,
Ҡөҙрәт менән ете ишек асыу — минән,
Ҡотҡарамын Зөләйханың михнәтенән,
Был эштән тыйылырға ярҙам итәм имде.

Халиҡҡа һығынды ла Йософ ҡасты,
Ҡөҙрәт менән ете ишек халиҡ асты,
Сәләмәт, шатланған Йософ сапты,
Артынан Зөләйха ҡыуа төшөр имде.

Бәс, Зөләйха Йософто ҡыуып етте,
Етеү менән итәгенән ныҡлап тотто,
Йософтоң артҡы итәге йыртылып китте,
Бер-бер артлы таш ҡапҡанан сығырҙар
имде.

Ғәзиз унда торған икән, быны күрҙе:
Төҫө ғасҡан, яуыз ине Зөләйханың йөҙө,
Хәлен һораны, ниҙер булғанын һиҙҙе,
Һорашыр, ысынын белергә теләр имде.

Зөләйха йүгереп батшаға килде,
Әйтер: — Бына шул уғланың — яуыз нәмә,
Ниндәй яза тейер уға, үҙең билдәлә,
Төрмәгәме, әллә язамы? — тиер имде.

Зөләйха әйтер:
— Быны зинданға яптыр,
Ҡурҡытып, өгөтләп тоғро юлға баҫтыр,
Һис юғында әрлә, булмаһа, ҡысҡыр,
Әҙәпһеҙлек ҡылды бит ул, — тиер имде.

Гәзиз һорар:
— Йә, Йософ, ни эш кылдың?
Ошолай насар юлга ниңә бастың?
Тотанакһызлыктан зур гонаһка баттың,
Бөтә халыкка безгә рисуай иттең имде.

Йософ әйтер:
— Юк, гәзизем, ул — гонаһлы,
Хәкикәт, мин — арыумын, ул — языклы,
Зөләйханың тануклы* юк, мин тануклы:
Кескәй углан миңә шаһит булыр имде.

Гәзиз әйтер:
— Ул бит яңы гына тыуган углан,
Ун ете көн элек кенә тыуган булган,
Һөйләшә алмай был йәштә һис бер инсан,
Ни һөйләп безгә таныклык бирер имде?

Йософ әйтер батшага:
— Эй олуг батшам!
Көслөлөр, гәйрәтлеләр ул изге алла!
Ул һөйләтһә, телгә килер ошо бала —
Тогролоғома таныклык бирер имде.

Шунда гәзиз хезмәтсегә әмер бирзе,
Йәш баланы үз әсәһе алып килде,
Шунан гәзиз баланы кулына алды,
Ягымлы һәм йомшак итеп һорар имде.

Угылансыктан һорар, әйтер:
— Эй йәш сабый,
Бөтә гәләмдәрзә юктыр бала һиндәй,
Ошо хәлдә ни генә белерһең икән, сабый?
Күргәнеңде безгә һөйләһәң имде.

Асык итеп, матур телдә бала һөйләй,
Уның ни һөйләгәнен батша тыңлай,
Телгә килеп, барһын аптырата сабый,
Ә ул күргәнен түкмәй-сәсмәй һөйләр имде.

Углан әйтер:
— Мин алдаксы була алмайым,
Гәйбәт һөйләп, аллага гонаһлы булмайым,
Ялган таныклык һис бер бирә алмайым, —
Үз хөкөмөн изге тәңрем бирһен имде.

Эйе, гәзиз, хәкикәтте ишет минән,
Аңларга тырыш: был дәгүәнең асылы низә?
Уны белергә була Йософтоң күлмәгенән,
Итәгенең арты йыртык — гонаһһыз имде.

Шулай итеп, батша эштең асылын белде,
Йософ кейеменең йыртыҡлығын күрҙе,
Таныҡлыҡтың дөрөҫлөгөнә ышанды,
— Зөләйха, ғәйеп һиндә, — тип орошор имде.

Ғәзиз әйтер: — Зөләйха, әйткәнең ялған,
Асыҡланды: һин икәнһең гонаһ ҡылған,
Бар, Йософтан ялын, ғәфү үтен унан,
Тәүбәгә кил, ниәтеңдән төңөл имде.

Унан һуң ғәзиз Йософто өгөтләне,
Йомшаҡ һүҙҙәрҙе Йософҡа күп һөйләне,
Был хәлгә ҡағылып, Йософтан үтенде:
— Зөләйханың серен, зинһар, һаҡла имде!

Унан инде ғәзиз тышҡа сығып китте,
Зөләйха Йософҡа мөрәжәғәт итте:
— Нисек яңы тыуған бала һөйләште?
Был ғибрәткә ғәжәпләнеп ҡалыр имде.

Йософ әйтер: — Йә, Зөләйха, һин күрҙеңме
Тәңренең ҡөҙрәтенә ышандыңмы,
Ғибрәттән, күңелең шиктән арындымы?
Хаҡ сәнғәте менән сабый һөйләшер имде.

## Һарайҙа ғәйбәт таралғаны, Зөләйханың ҡатындарҙы ҡунаҡҡа саҡырғаны

Мысыр ҡатын-ҡыҙҙары быны ишетте,
Күмәк араһы ғәйбәт итеп һөйләне,
Ишеткәне-ишетмәгәне йыйылышты,
Һәр береһе бер төрлө һүҙ һөйләр имде.

Зөләйха ҡолона ғашиҡ булған, имеш,
Ҡоло, уны тыңламай, тартынған, имеш.
Быны батша үҙе күреп торған, имеш.
Ҡолдо ҡыуа сыкканын да күргән, имеш.

Зөләйханың ғәйбәтен сәйнәүселәр,
Һәр береһе үҙенсә һүҙ йөрөттөләр:
«Мәлик ҡатыны абруйын төшөрҙө һәм
Халыҡ араһында рисуай булды имде».

Зөләйханы тикшергән ул ҡатындың
Бер нисәһе үҙҙәре лә ғәйепләнде,
Ҡайһы береһе был ғәйептән арынды,
Барыһы халыҡҡа рисуай булыр имде.

Зөләйха ҡатындар ғәйбәтен ишетте,
Бик оло мәжлес йыйырға ҡарар итте,
Тегенән-бынан дүрт йөҙләп ҡатын килде,
Түңәрәкләп, түргә ултырырҙар имде.

Шунда Зөләйха Йософтан бик үтенде,
— Һүҙемде йыҡма, бер генә тыңла инде:
Саҡырһам, шунда уҡ килеп кер, — тине, —
Матурлығыңды ҡатындар күрһен имде.

Үҙ ҡулдары менән Йософтоң сәсен үрҙе,
Иңдәренә зиннәтле тундар кейҙерҙе,
Ҡулына ҡыҙыл алтындан тас тотторҙо,
Ҡунаҡтағыларға һонорға тейеш имде.

Ул ҡатындар көрсиҙәргә* ултырҙылар,
Һәр беренә әфлисун, бысаҡ бирҙеләр,
Тотторҙолар ҙа, турарға бойорҙолар,
Тап шул мәлдә Йософ килеп инер имде.

Ҡатындар «ҡамасау» тип асыуланды,
Аңғармаҫтан Йософ күҙҙәренә салынды,
Уны күреп, барыһы ла телһеҙ ҡалды,
Әфлисун тип, бармаҡтарын киҫер имде.

Йософҡа бағып улар сихырланды,
Һиҙмәйенсә һаман бармағын тураны,
Ҡулдарының киҫелгәнен дә тойманы, —
Барса ҡатындар ҙа хайран булған имде.

Әйттеләр:
— Валлаһи, был әҙәм түгел!
Бының ише ҡол кем ҡулына төшөр!
Уны күргән берәү аҡылынан шашыр,
Һис шикһеҙ ул — берәй фәрештә имде.

Зөләйха әйтер:
— Ҡатындар, күрҙегеҙме,
Ниңә йөҙөм һулығанын белдегеҙме?
Бер күреүҙән ҡулығыҙҙы киҫтегеҙме —
Һуштан яҙып ултырҙығыҙмы имде?

Йософто күргәнемә тап ете йылдар,
Уға булған мөхәббәтем һаман артыр,
Меҫкенмен мин, ғишыҡ уты бик яндырыр,
Тимәк, сабырым һеҙҙекенән артыҡ имде.

Белдегеҙме, минең серҙең асылы ниҙә?
Был уғландың ҡояштан да нурлы йөҙө,
Күркәм аҡылы, мең мәртәбә татлы һүҙе,
Йөҙөн күргән, йәнен фиҙа ҡылыр имде.

Зөләйха әйтер:
— Йә әмеремә буйһона,
Һәм минең сиремә ул дауа була,
Йә тоткон итәм, һалкын зинданға һалам,
Ҡалған ғүмере зинданда үтер имде.

Йософ ялбарыр ил тәңреһенә:
— Һалдыра күр Ҡәнзәфәр зинданына,
Ҡурҡам, төшөрмөн тип гонаһына,
Яман эштән зиндан миңә артыҡ имде.

Өмөт итәм йәлләү-ярҙамыңа һинең,
Һағынырмын һине генә, раббым. Мине
Зөләйханың мәкеренән коткарһаң ине,
Зинданды үҙем теләп һайлайым имде.

Хаҡ Йософ теләген тормошҡа ашырҙы,
Шайтандар ҡотҡоһон юҡҡа сығарҙы,
Зөләйханың мәкеренән ҡотолдорҙо,
Боҙоҡлоҡтан да нәфсеһен тыйыр имде.

Ҡатын әйтер:
— Йә, Йософ, белдерәмен һиңә,
Хәҙерҙән үк буйһонаһыңмы миңә,
Юғиһә, һалдырамын зиндан эсенә,
Был арала ни ҡарарға килдең имде?

Йософ әйтер:
— Хаҡҡа гонаһлы булыуҙан,
Гонаһ алып, тамуҡ утында яныуҙан,
Алдағы көн оятлы булып ҡалыуҙан,
Бөгөнгө көн миңә зиндан яҡын имде.

Бынан Зөләйханың асыуы ҡабарҙы,
Нык ғәрләнде, күңеленән хәйлә ҡорҙо,
Йософ биленән ҡәмәрен ысҡындырҙы,
Затлы ебәк кейемдәрен һуйыр имде.

Мәлик Раян каршыһына Зөләйха барҙы,
Раянға Йософто һөйләп нык зарланды,
Әйтер:
— Беҙҙең ҡол уғлан буйһонмаҫ булды,
Бойорһағыҙ, уны тоткон итәм имде.

Уны ҡиммәт баһаға һатып алдым,
Бөтә малым-мөлкәтемде фиҙа ҡылдым,
Өҫтәүенә, унан әҙәпһеҙлек күрҙем,
Ышанысһыҙ, бер кемгә буйһонмаҫ имде.

Әмер бирҙе Зөләйхаға мәлик Раян:
— Әгәр ҙә баш бирмәй икән ул ҡол уғлан,

Тейешлелер ул ҡолға һис шикһеҙ зиндан,
Рөхсәттер тотҡонлоҡҡа ябырға имде.

Бәс, Зөләйха шунда уҡ кире ҡайтты,
Оҫталарҙан бер һандыҡ йүнәттерҙе,
Йософто шул һандыҡ эсенә һалдыртты,
Йөксө күтәреп зинданға илтер имде.

## Йософтоң зинданда ятҡаны, икмәксе менән шарапсыға төш юрағаны

Был хәлдәрҙе Ҡәнзәфәр шунда уҡ белде,
Асыуланып Зөләйха янына килде:
— Йософ — ғәйепһеҙ, бөтә ғәйеп — һиндә, — тине,
Һандыҡтан Йософто ул сығарыр имде.

Аяҡ-ҡулдарынан бау-бығауҙарын систерҙе,
Йомшаҡ ебәк түшәктәрен түшәттерҙе,
Эргәһенә хеҙмәтселәрен баҫтырҙы,
— Тиҙ сығарам, һис ҡурҡмағыл, — тиер имде.

Унан ары күп түгел, бер көн булды.
Аллабыҙ Ҡәнзәфәрҙең йәнен алды.
Ҡәрҙәше ине унын мәлик Раян.
Солтанлыҡ мәлик Раянға ҡалыр имде.

Зиндандағы тотҡондарҙы азат итте,
Йософто тик мәлик Раян сығартманы,
Хаҡ, әмер биреп, Ябраилды ебәртте,
Өгөтләп, хаҡ сәләмен еткерер имде.

Ябраил бер ап-аҡ ынйы тотоп килде,
Килгәс тә Йософтоң ауыҙына һалды,
Тәғбир* ғилемен, хикмәт серҙәрен бирҙе,
Мөғжизәле көскә эйә булды имде.

Йәмәндән Мысырға бер шымсы килде,
Бик күп мал килтереп ришүәт бирҙе,
Икмәксене һәм шарапсыны ант иттерҙе:
— Раянға ағыу бирегеҙ, — тиер имде.

Мәликкә был әхүәлдәр мәғлүм булды —
Икмәксе менән шарапсыны тотҡон ҡылды,
Күп йылдар буйы улар зинданда ҡалды,
Әсирлеккә бик ныҡ ҡайғырырҙар имде.

Күпмелер үткәс, шарапсы бер төш күрҙе,
— Тәғбир* ғилемен белеүсе бармы? — тине,
Йософ шунда шарапсыға яуап бирҙе,
— Төшөңдө һөйлә, юрайым, — тиер имде.

Шарапсы әйтер:
— Төшөмдә шуны күрҙем,
Өс шәлкем бешкән йөҙөм һыға инем,
Ҡыҙыл алтын касаларға ҡоя инем,
Раянға һона инем, ул эсте имде.

Икмәксе лә:
— Мин дә бер төш күргән инем,
Башыма күп итеп икмәк күтәргән инем,
Ул икмәктәрҙе Раянға илтер инем,
Ҡоштар килеп икмәктәрҙе суҡыр имде.

Йософ ул икәүҙең дә төшөн юраны,
Шарапсыға изге юрау әйтер ине,
— Шатлан, һине азатлыҡ көтә, — тине,
Раян һиңә ҙур дәрәжә бирер имде.

Ә икмәксегә әйтте:
— Ҡурҡыныс төшөң,
Аһ дәриға, бик ҡыҙғаныс һинең эшең,
Хәҡиҡәтте бел: бөтөр һинең башың.
Мәлик һине, шикһеҙ, үлтерер имде.

Икмәксе был юрауҙы кире ҡаҡты,
Күрмәнем ундай төш, тип баш та тартты,
— Күрәсәкһең, – тине Йософ, — хаҡ
ҡылғанды,
Хаҡ ебәргән ҡаза кире ҡайтмаç имде.

Шарапсы Йософ юрауын ысынға алды,
Дөрөçлөгөнә инанды, мөъмин булды,
Зиндан әһеле Йософтоң хаҡлығын белде,
Тик икмәксе генә кафыр ҡалыр имде.

Бынан һуң күп ваҡыт түгел, өс көн үтте,
Мәлик Раян икмәксене дарға әйтте.
Шунан күҙҙәрен суҡырға ҡоштар төштө, —
Бөтә халыҡ ғәжәпкә ҡалыр имде.

Унан мәлик шарапсыға кейем бирҙе,
Тағы ла затлы тундарға кейендерҙе,
Шарапсылыҡ дәрәжәһен кире бирҙе,
Йософ уға аманат һүҙ әйтер имде.

Әйтер:
— Минең хаҡта мәликтең иçенә төшөр,
Хәлдәрем тураһында аңлатып бир,
Гонаһым юҡ икәнлегемде һөйләп бир,
Раббым алдында телгә ал, — тиер имде.

Шул уҡ сәғәт күк эйәһе — олуғ Собхан,
Мәликтәрҙең мәлиге — бөйөк солтан,
Ябраилды ебәрҙе. Ул, төшөп күктән,
Хаҡ сәләмен Йософҡа еткерер имде.

Әйтер:
— Һине Яҡуптан, әйт, кем һөйҙөрҙө?
Ҡәрҙәштәрең яфаһынан кем ҡотҡарҙы?
Тар ҡойоноң төптәренән кем сығарҙы?
Ҡотолоу рәхәтем кем татытты имде?

Зөләйха мәкеренән кем ҡотолдорҙо?
Ҡөҙрәт менән сабыйҙан кем һөйләттерҙе?
Ете бикле ишектәрҙән кем сығарҙы?
Гонаһ эшләүҙән кем азат итте имде?

Йософ әйтер:
— Ошо ниғмәттәр — тәңремдән,
Рәхәтлектәрҙең барыһы — Собханымдан,
Яҡшылыҡтарҙың һәммәһе — Хоҙайымдан,
Михнәттәрҙән ул ҡотҡарыр, — тиер имде.

— Бәс, ни өсөн һығынмайһың һаман Хаҡҡа,
Халиҡ хөкөмөн ул Раян ниңә йыға?
Хөкөм сыҡһа, кем ҡаршы сыҡһын быға?
Олуғлыҡ хаҡҡа лайыҡ булыр имде.

Йософ шунда үҙенең ғәйебен аңланы,
Төшөнгәс, ҡаты хәсрәткә тарыны,
Әйткәненә үкенеп, тәүбә ҡылды,
Сәждә ҡылып, тәңрегә ялбарыр имде.

Күп тә тормай, Ябраил тағы ла килде,
Халиктан Йософҡа сәләмен килтерҙе:
«Турайып баҫ, теләгәнең ҡабул булды,
Сәждәнән, Йософ, башыңды күтәр имде.

Күпмелер был зинданда ҡаласаҡһың,
Аҙаҡтан, ирекҡә сығып, рәхәттәр
табасаҡһың,
Мысырҙа батшалыҡ аласаҡһың, —
Был михнәтте сабыр ғына үткәр имде».

### Ҡәнғән ғәрәбенең Мысырға килгәне, Йософ менән һөйләшкәне, Яҡупҡа сәләм еткергәне

Әле Йософ зиндандың эсендә ине,
Ҡәнғәндән бер ғәрәп Мысырға килде,
Тәҙрә аша ғына Йософ уны күрҙе,
Ашығып, дөйәһен ҡыуып барыр имде.

Бына ғәрәп зинданға яҡын уҡ килде,
Йософ бында икәнлеген дөйә белде,
Йософҡа дөйә буҙланы, зарын әйтте:
«Мин Ҡәнғандан килдем, — тип әйтер
имде. —

Атаң Яҡупты Ҡәнғанда күреп килдем,
Уның хәле хөртәйгәнен белеп килдем,
Хәсрәтләнеп ҡайғырғанын күреп килдем, —
Бахырҙың көндән-көн зары артыр имде.

Һаман да һинең хәсрәтеңдә йота Яҡуп,
Һинән дә һөйөклөрәк бер кеме юҡ,
Һине һағынып, түгелеп илар, һушһыҙ булып,
Нисә тапҡыр иҫһеҙ булып ятыр имде.

Илай торғас, ике күҙе күрмәҫ булды,
Зәғифлектән һөйәктәре тотмаҫ булды,
Бер ниндәй эшкә лә көсө етмәҫ булды:
«Йософ, Йософ», — тип илап ултырыр имде.

Шулай оҙаҡ Йософ тип илағанға,
Тик илауға бар көнөлөн һалғанға,
Ҡауышыуға өмөтләнеп зар ҡылғанға —
Йәш урынына күҙенән ҡан ағыр имде.

Әле ул һаман да шулай көн-төн илар,
Бөтә ғәләм ҡайғыһына таңға ҡалыр,
Хоҙабыҙҙың рәхмәтенә өмөт бағлар,
Ҡауышыуға бер ҙә өмөт өҙмәҫ имде».

Меҫкен дөйә Йософҡа яҡын килде,
Шулай итеп, Яҡуп хәлен һөйләп бирҙе,
Йософ өнө ҡолағына ишетелде —
Ҡапҡала сүкте һәм тубыҡланып торор имде.

Бәс, дөйә буҙлап хәлдәрҙе һөйләп биргәс,
Хәл-әхүәлдәр тулыһынса мәғлүм булғас,
Яҡуптың хәле мөшкөллөгөн дә белгәс,
Йософ һушһыҙ булып ауып төшөр имде.

Шул минутта ғәрәп килеп тә етте,
Дөйәһенең ҡапҡала сүккәнлеген күрҙе,
Таяҡ алып, дөйәне туҡмарға булды —
Уның таяғын ер ебәрмәй торор имде.

Ғәрәп бахыр ни эшләргә лә белмәне,
Аяғын тартып ала алмай, аптыранды,
Ахырҙа ул Йософҡа әйтте — ялбарҙы.
— Аяғымды ер ебәрмәй, — тиер имде.

Йософ әйтер:
— Эй ғәрәп, ни тиерһең?
Ҡайҙа барҙың һәм ни эшләп йөрөйһөң?
Гонаһһыҙға дөйәнениңә туҡмайһың?
Ҡайҙан килдең, хәбәреңде һөйлә имде.

Ғәрәп тә Йософҡа оҙаҡ ҡарап торҙо,
Әйткән һүҙенән яҡшы тәьҫир ҡалды,
Үҙ хәлдәрен дә йәшермәй һөйләп бирҙе:
— Аяғымды ер тотто, — тип ҡабатлар имде.

Йософ әйтер:
— Әй ғәрәп, ниәтең ниҙер?
Аяҡтарың ысҡынмауы — үҙеңдәндер,
Дөйәңде туҡмарға теләүеңдәндер,
Хәҙер был уйыңдан кире төңөл имде.

Ғәрәп үҙ ғәйебен таныны, тәүбә ҡылды,
Шунда уҡ аяҡтарын ер ысҡындырҙы,
Йософтоң эргәһенә яҡын уҡ килде,
Ҡулын үбеп, хөрмәтен күрһәтер имде.

Йософ унан төрлө хәбәр һораштырҙы,
Ғәрәп уға бик теләп яуап бирҙе,
Бөтәһен дә берәмләп һанап бирҙе,
Ғәрәп һөйләр, Йософ тыңлап илар имде.

Ғәрәп әйтер:
— Мин Ҡәнғандан яңы килдем,
Йөк килтерҙем, был шәһәрҙә сауҙа ҡылдым,
Күп кенә ҡыҙыл алтын табыш алдым,
Йөгөм һаттым, хәҙер Ҡәнғанға кире ҡайтам
имде.

Йософ әйтер:
— Ҡәнғанды беләһеңме?
Унда һаман бер бейек тирәк бармы икән?
Ян-яғындаботаҡтары күренә микән?
Ботаҡтар һаман ун ике микән имде?

Эй дәриға! Ниндәй йыраҡ Ҡәнған иле!
Айырылышҡандарҙың төшөрмө юлы?
Елдәр ҡупһа, шул яҡтан Ҡәнған еле
Ул ағастың еҫтәрен килтерер имде.

Ғәрәп әйтер:
— Аңланым әйткән һүҙеңде,
Белдем, фәһемгә алдым һинең сереңде,
Ләкин тыңлап-тыңлап торам да үҙеңде —
Был эш төбөндә бер хикмәт барҙыр имде.

Оло агас тигәнең — Яҡуп булалыр,
Ун бер улы хеҙмәттә әҙер торалыр,
Ун икенсеһе — Йософ ғәйеп булғандыр,
Хәҡиҡәт, бүре ейҙе тигәндәр имде.

Шунан бирле меҫкен Яҡуп булды хайран,
Илай-илай үткәрә ул көндәрен һаман,
Йософ менән ҡауышырға эҙләр дарман,
Өмөтләнеп Хоҙайға ялбарыр имде.

Табыныу йортонан Яҡуп бер ҙә сыҡмаҫ,
Ҡүңеле китек, ауыҙына ризыҡ ҡапмаҫ,
Күҙен асып йыһанға ла баға алмаҫ,
Илай торғас, ике күҙе күрмәҫ имде.

Йософ ғәмен хәтеренән һис сығармаҫ,
Бер ваҡытта Йософто онота алмаҫ,
Бер кемдең дә өгөтөнә ҡолаҡ һалмаҫ,
Йософ тип, тау-таш бергә илар имде.

Йософ уны ишетеп, ҡан-йәш түкте,
Тулҡынланып ғәрәптең ҡулынан тотто:
— Яҡупҡа аманат ебәрәмен, — тип әйтте, —
Ул меҫкенгә минән сәләм булыр имде.

Әйтерһең: мин — зарлылар илсеһемен,
Ҡайғылы-михнәтлеләрҙең береһенмен,
Кәмһетелгән мәзлүмдарҙың әһелемен, —
Тотҡондарҙан да сәләм әйт, — тиер имде.

Хушлашҡанда шунда Йософ ғәрәп менән,
Бер беләҙек сығарҙы үҙ ҡуйынынан,
Тотторҙо Йософ ғәрәптең уң ҡулына:
— Беләҙегем һиңә йәдкәр булһын имде.

Аманатымды онотоп ҡуйма, ғәрәп,
Сәләмемде иҫеңдә тот, еткер тиҙерәк,
Яҡупҡа минең хәлде белгерт әҙерәк,
Минең өсөн бер доғаһын ҡылһын имде.

Уның доғаһы һис һүҙһеҙ ҡабул булыр,
Халиҡ миңә лә азатлыҡ насип ҡылыр,
Иншалла, михнәттәрҙән һуң рәхәт килер,
Пәйғәмбәр доғаһы ҡабул булыр имде.

Ғәрәп әйтер:
— Ҡем икәнең белһәм ине,
Күркле йөҙөңдө бер генә күрһәм ине,
Йөҙөңдө күреп, шиктәрем бөтһә ине,
Яҡупҡа кем икәнлеген әйтер инем.

Йософ әйтер:
— Кем икәнлегемде әйтергә,
Йөҙөм асып, пәрҙәне күтәрергә,
Рөхсәт юҡтыр был теләгендә үтәргә,
Ә рөхсәтһеҙ эш мөбәрәк булмаҫ имде.

Йософ әйтер:

— Һиңә һондом бүләгемде,
Ҡыҙыл яҡуттандыр ул, ҡабул ит инде.
Аманат итеп тот, ҡиммәт беләҙек,
Хаҡы егерме мең Мысыр алтыны имде.

Донъялыҡҡа был беләҙек һиңә етер,
Егерме мең ҡыҙыл алтынға ул бәрәбәр,
Был донъяның вафаһы юҡ, килер-китер,
Әхирәт өсөн инанмаҡ кәрәк имде.

Һаубуллашып шунан урынынан торҙо,
Рөхсәт алып, ғәрәп үҙ юлында булды,
Көнө-төнө был хәбәр иҫендә булды,
Ҡайтып сәләмде тапшырырға ашыға имде.

Ҡәнғанға ғәрәп ҡайтып инде,
Көтөп тормайынса иртәгәһе көндө,
Һөйләмәй, аңлатмайынса үҙ өйөндә,
Туп-тура Яҡуп янына килер имде.

Ғәрәп Яҡуптың өйөнә төндә килде,
Саҡырҙы ла тыштан ғына сәләм бирҙе,
Динә сығып, уны күрҙе, ғәжәпләнде.
— Хәбәрең ни, төнөн килерлек? — тиер имде.

Ғәрәп Динәгә тыштан уҡ тауыш бирҙе:
— Миңә бик ныҡ кәрәк ине Яҡуп нәби,
Күреп килдем әле Мысырҙа бер тотҡондо,
Меҫкен сәләм еткереүҙе һорар имде.

Динә, быны ишеткәс тә, өйгә инде,
Яҡуп нәби намаҙ ҡылып тора ине,
Бына ул уңға һәм һулға сәләм бирҙе:
— Ни булды һуң, кем килде? — тип һорар имде.

Саҡырҙылар, шунда уҡ инде өйгә,
Күргәндәрен һөйләп бирҙе тегеләргә:
— Мысырҙан берәү сәләм ебәрҙе һеҙгә,
Ул зинданда тотҡон булып ята имде.

Төрмә уны бирештергән, хәлһеҙләнгән,
Һинең йөҙөң күреү ине бар теләге,

Ул тотҡон һинең доғаңа өмөтләнә,
Доға ҡылһаң, бәлки, азат булыр имде.

Яҡуп һорар:
— Унын йөҙөн күрмәнеңме?
Атаң нисек, ҡайҙан һин, тип һораныңмы?
Ни сәбәптән тотҡон булған — белмәнеңме?
Ни эшләп ул беҙҙең хаҡта һорар имде?»

Ғәрәп әйтер:
— Атын һораным — әйтмәне,
Хәлдәрен дә бер нисек тә белгертмәне,
Күркле йөҙөнән ябыуын күтәрмәне,
Шулай ҙа нуры балҡып торор имде.

Яҡуп сәүче ул ғәрәпкә доға ҡылды,
Әйтте:
— Һүҙең яҡшы, миңә татлы булды,
Хәсрәттәрем еңеләйеп, рәхәт булды,
Хәбәрең өсөн һиңә шөкөрҙәр ҡылам имде.

Ғәрәп әйтер:
— Шөкөрҙәрең миңә түгел,
Был донъяла моратым хасил булды,
Ошо беләҙек миңә тип бағышланды,
Егерме мең ҡыҙыл алтынға тиң имде.

Ғәрәп әйтер Яҡупҡа:
— Эйе, Исраил,*
Минең өсөн дә әхирәтлек доға ҡыл,
Гонаһтарҙы ярлыҡаһын мәүлә-хәлил,
Донъя — фани, әхирәт — баҡый, — тиер
имде.

Яҡуп әйтер:
— Өмөт тотам ошо хәбәргә,
Ҡөҙрәтең менән бәхет бир сауҙагәргә,
Йәннәттә лә беҙҙе ҡауыштырһаң бергә,
Унда миңә күрше булып торһа имде.

Унан тәмле теле менән дөйә һөйләр,
Дөйә лә Яҡуп нәбиҙән ярҙам һорар,
Хәҡикәт, Яҡуптан ул да доға һорар,
Әхирәт рәхәтлектәрен теләр имде.

Яҡуп нәби дөйә өсөн доға ҡылды,
Хаҡ тарафынан доғаһы ҡабул булды,
Ожмахта дөйәгә яйлы тәхет ҡорҙо,
Халиҡ шулай бер кирәмәт ҡылыр имде.

Аҙаҡтан ғәрәп үтенер Исраилдан,
Ялбарыр тотҡондағы меҫкен өсөн дә:
— Исраил, бер доға ҡылығыҙ тәңрегә,
Тотҡонлоктан, бәлки, ул ҡотолор имде.

Яҡуп нәби ҡул күтәреп доға ҡылды,
Доғаһы тәңре алдында ҡабул булды,
Ябраил Йософтоң эргәһенә килде,
Йософҡа яҡшы хәбәр килтерҙе имде.

Ябраил шул ваҡыт әйтер:
— Эй ситдыҡ,*
Һиңә атаң доғаһы бирҙерҙе ирек,
Халиҡ ҡотолдорҙо, ебәрҙе рәхәтлек,
Михнәттәрҙән рәхәткә сыҡтың имде.

## Мәлик Раяндың төш күргәне, Йософтоң зиндандан сыҡҡаны, Мысыр батшаһы булғаны

Ун ике йыл Йософ зинданда ятты,
Бәс Яҡуптың доғаһы уға етте,
(Бынан алда беҙ быны әйткәйнек инде),
Ошолайтып Йософ азат булыр имде.

Тағы ла Ябраил Йософ янына килде,
Йософҡа ебәргән ине уны тәңре,
«Төшөңдән килгәйне һиңә михнәт-рәнйеү,
Рәхәтлектәр ҙә төштән килер имде».

* * *

Хөкөмө булып оҙаҡламай хоҙайҙан,
Бер төш күргән Мысыр шаһы мәлик Раян,
Юраусылар быңдай төшкә ҡалған хайран,
Берәүһе лә уны юрай алмай имде.
Раян әйтер: «Ете һимеҙ һыйыр күрҙем,
Барыһының да арҡаһына менеп йөрөнөм,
Береһенән-беренә күсә торҙом, —
Төшөмә үҙем дә ғәжәпләндем имде.

Йәнә күрҙем ете һыйыр үтә зәғиф,
Етеһе лә үтә арыҡ, үҙе хәлһеҙ,
Аслыҡтан ҡалғандар икән шулай зәғиф,
Улары һимеҙ һыйырҙарҙы ейәр имде.

Тулып еткән ете бойҙай тағы күрҙем,
Йәнә ете ҡороп бөткән башаҡ күрҙем,

Ул бойҙайҙар капыл күккә осто — күрҙем,
Тик өс бойҙай ерҙә ятып калды имде».

Юраусылар бер нисек юрай алманы,
Бындай төштө аңлатыусы табылманы,
Берәү ҙә төштөң мәғәнәһен белмәне,
Бөтәһе лә аптырашып калыр имде.

Бәс, уларға Раяндың асыуы купты,
Шул мәлдә генә шарапсы килеп етте,
Хәтерләп Йософто ул аптырап китте —
Ни әйтергә тип, икеләнеп калыр имде.

Шарапсының хәлдәрен мәлик күрҙе,
— Ниңә аптырашта калдың улай? — тине,
Ниндәйҙер хикмәт бар, әйт дөрөҫөн, — тине,
Ни сәбәптән икеләнеп калдың имде?

Шарапсы әйтер:
— Көҙрәтле йыһан шаһы,
Зинданда тоткон бер әҙәм балаһы,
Хикмәт ғилеме биргән уға аллаһы.
Был төшөндө юраһа, ул юрар имде.

Мәлик әйтер:
— Ул уғланды кайҙа күрҙең,
Төш юраусы икәнен кайҙан белдең?
Төш юрау ғилеме белгәнлеген нисек белдең?
Нисек итеп тикшерҙең юрауын имде?

Шарапсы әйтер:
— Зинданға эләккәйнем,
Шунда сакта ғәжәйеп бер төш күргәйнем,
Мәғәнәһен ул уғландан һорағайным,
Унын әйткәне миңә котло булды имде.

Акылы камил, ғилеме теүәл, үҙе ғәрле,
Йөҙө күркәм, холко якшы, мең-мең төрлө,
Дине — ислам, һөймәлекле, йөҙө нурлы,
Япмаһын аса, нуры сәселер имде.

Мәлик һорар:
— Зинданға ул нисек ингән?
Ни эшләгән, ниндәй ғәйептәр ул кылған?
Шарапсы әйтер:
— Тәңреһе каза биргән,
Ун ике йыл зинданда ултырмыш имде.

Раян әйтте шарапсыға:
— Тиҙерәк бар,
Минең төштөң мәғәнәһен һораша һал,

Үҙең уның алдында тик баҫып ҡал,
Рәхәтлектәр киләсәген белгерт имде.

Шарапсы әйтте:
— Мин мөшкөл хәлдә
ҡалдым,
Ул уғландың алдында оятлы булдым,
Хәлен сыҡҡас та һөйләргә вәғәҙә ҡылдым —
Ете йылдан һуң иҫемә килде имде.

Өгөтләне шарапсыны мәлик Раян,
— Уның тәңреһе барҙыр, тәңре — Собхан,
Бөтә күргән ҡазалары булғас унан —
Һис ҡайғырма, тоткон ғәфү итер имде.

Шундуҡ шарапсы зинданға барып инде,
Зиндан эсендә Йософто күрҙе, белде,
Әҙәп менән башын эйеп, сәләм бирҙе,
Оялып, йөҙөн ҡаплап торор имде.

Йософ, тоғро шарапсыға хөрмәт ҡылды,
Әйтер:
— Миңә был ҡазаны тәңре бирҙе,
Ләғин-шайтан арабыҙҙа хөсөт ҡылды,
Һин оялма, хата һинән түгел имде.

Аҙаҡтан шарапсы һораны Йософтан:
— Бер ғәжәйеп төш күргәйне мәлик Раян,
Раян төштөң мәғәнәһен һорар һаман,
Юраусылар хәтеренән юйылған имде.

Йософ шунда шарапсыға яуап бирер:
— Дөрөҫ, был төштө бер кем дә белмәҫ инде.
Шарапсы мәлик Раянға кире барҙы,
Һөйләшкәндәрен уға еткерер имде.

Мәлик Раян быны ишеткәс, һөйөндө,
Шарапсыға шунда уҡ тағы бойорҙо,
Йософ ултырған зинданға кире барҙы,
Күргән төштөң мәғәнәһен һорар имде.

Шарапсы Йософ алдында ҡул ҡаушырҙы,
Ултырмайса, аяғөҫтө, үрә торҙо,
Мәлик Раяндың төшөн Йософ юраны,
Мәғәнәһен асыҡ итеп әйтер имде.

Йософ әйтер:
— Ете йыл осһоҙлоҡ була,
Төрлө-төрлө ниғмәт менән донъя тула,
Унан һуң тирә-йүндә ҡоролоҡ була,
Тап ете йыл илдә ҡытлыҡ булыр имде.

Унан һуң тәңре мәрхәмәтен ҡыласаҡ,
Мәхлүктәргә рәхәт-шатлыҡтар киләсәк,
Төрлө-төрлө аҙыҡ-түлек күп буласаҡ,
Байлыҡтары көндән-көнгә артыр имде.

Мәлик Раян ҡаршыһына кире барҙы,
Ишеткәндәрен шарапсы һөйләп бирҙе,
Йософ исеменә күп маҡтау яуҙырҙы,
Ул һөйләр, ә мәлик Раян тыңлар имде.

Шарапсыға тағы ҡушты:
— Һин кире бар,
Барып, Йософто һин зиндандан сығар,
Бында килтер, өҫтөнә затлы кейемдәр һал,
Зиндан уға бер ҙә лайыҡ түгел имде.

Ул тиклем дә сифаттары һәйбәт булғас,
Хикмәт ғилемдәренә лә эйә булғас,
Дине дөрөҫ, йөҙө яҡты, аҡылы булғас,
Уға ҡәҙер һәм ихтирам кәрәк имде.

Мин уға затлы кейемдәр кейҙерермен,
Үҙенә ҙур дәрәжәләр бирермен,
Бөтәһенә яҡшылығын белдерермен, —
Донъяла абруйлыларҙан булыр имде.

Шарапсы тағы ла Йософҡа китте,
Сәләм биреп, хөрмәт менән ҡулын үпте,
Йософ нәби уны күргәс шатланып китте:
— Ҡайғы-хәсрәттән рәхәткә сыҡтым имде.

Йософ әйтте шарапсыға:
— Бар, кире ҡайт,
Ҡулын киҫкән ҡатындарҙың барыһын тап,
Уларҙы эҙләп табыуға тотон ныҡлап,
Раян эштең ниҙәлеген белһен имде.

Шарапсы ҡайтып мәликкә хәбәр еткерҙе,
Мәлик Раян был хәбәрҙе бик хуп күрҙе,
Ҡулын киҫкән ҡатындарҙы ул йыйҙырҙы
Зөләйха ла улар араһында имде.

Мәлик әйтер:
— Мәғлүм итең хәлегеҙҙе:
Ни сәбәптән киҫкәйнегеҙ ҡулығыҙҙы?
Зөләйха әйтер:
— Ғәфү ит гонаһыбыҙҙы,
Йософ ғәйепле түгел, ғәйеп беҙҙә имде.

Мәлик Раян шул уҡ сәғәт әмер бирҙе:
Йософ өсөн зиннәтле һарай һалдырҙы,

Затлы ебәк-атлас түшәк түшәттерҙе,
Һарайҙы төрлө нағыштар биҙәй имде.

Шәһәр менән ул зиндандың аралығы —
Дүрт фәрсәнт* юлдың йыраҡлығы,
Ошо хәтле ер ине бармаҡлығы,
Зинданғаса мәлик ғәскәр теҙер имде.

Раян ғәскәре бөтәһе атҡа менде,
Зиндан алдына тиклем һыбай килде,
Йософто сығарып, затлы кейемдәр бирҙе,
Кейендерҙе — барыһы шатланыр имде.

Йософ нәби зиндандан да азат булды,
Зиндан әһеле илашып мәхрүм ҡалды,
Бәс, уларға Йософ сәүче доға ҡылды,
Доғаһын тәңре ҡабул итер имде.

Зиндандың әһеле теләне азатлыҡ,
Риза булды ҡотҡарырға изге халиҡ,
Зиндандағыларға бирҙе ирек:
— Йософҡа бағышлайым, — тип әйтер имде.

Мысыр халҡының барыһы ҡаршы килде,
Йософтоң йөҙөн күреп рәхәтләнде,
Алтын-көмөш, ынйы-мәрйендәр һибелде,
Оло-кесе шатланып йүгерер имде.

Йософ бик күп доға ҡылды Мәүләһенә,
Шөкөр-маҡтауҙар яуҙырҙы Хоҙайына,
Унан ғына килеп сәләм бирҙе Раянға,
Етмеш ике телдә һүҙен һөйләр имде.

Төрлө телдә Раянға маҡтау ҡылды,
Ишеткәндәр ғәжәпләнеп хайран ҡалды,
Йөҙөн күргәндәр уғата ләззәтләнде,
Астар туйыр, һыуһағандар ҡаныр имде.

Раян да күрҙе Йософтоң матурлығын,
Ғәжәпләнде, күреп холҡо яҡшылығын,
Фиҙа ҡылды Йософҡа бөтә малын:
— Мөлкәтем бары һиңә булһын, — тиер имде.

Мәүлә бирҙе Йософҡа дәүләт-бәхет,
Ҡөҙрәт менән бүләк итте мөлкәт-тәхет,
Мәлик Раян да Йософҡа бик ышанып:
— Мәмләкәт һиңә лайыҡ, — тиер имде.

Таж һалып, тәхеткә менде Йософ нәби,
Утыҙ йәшәр егет булды хаҡ хәбибе*,

Йөҙөнөң нуры балҡыны ҡояш кеүек,
Күргән кеше һис бер күреп туймаç имде.

Аҡылы камил, хикмәт ғилемен белер,
Дәғүәселәр дәғүәләшеп быға килер,
Оло-кесе ғәҙел, дөрөç хөкөм һалыр,
Һис бер кем дә һүҙенән сыҡмаç имде.

Унан һораны Йософтан мәлик Раян:
— Ҡайҙан килде һиңә бындай ғилем, уғлан?
Йософ әйтер:
— Бүләк итте Мәүләм-Собхан,
Был бүләкте тик ул ғына бирер имде.

Мәлик Раян был хәлдәрҙе шулай белде,
Йософҡа күңелен бирҙе, мөъмин булды,
Ислам динен, лайыҡ күреп, ҡабул ҡылды,
Ҡулын тотоп, саф мосолман булыр имде:

— Белдем: һинең динең ысынлап хаҡ икән,
Уны һиңә тәңре үҙе ебәргән икән,
Падишаһлыҡ һиңә лайыҡ икән,
Һәр кем дә уның әмерен тотһон имде.

Шунда тағы Ябраил Йософҡа килде,
Халиктан Йософка күп сәләм килтерҙе —
Йософҡа һөйөнөслө хәбәр бирҙе:
— Раян быға һылтау ғына, — тиер имде.

Йософ Нәби Ябраилдан хәбәр алды,
Халиҡҡа күп шөкөр-рәхмәттәр ҡылды,
Йөҙ нурынан ҡояш-ай ҙа тоноҡланды,
Төрлө эш-саралар Йософ күрер имде.

Ҡытлыҡҡа алдан уҡ әҙерлектәр күрҙе,
Ашлыҡты күп итеп әҙерләргә бойорҙо,
Шулай итеп игендәрҙе күп иктерҙе,
Биш йылдан артығыраҡҡа етер имде.

Мысырҙа ете йыллап киңлек булды,
Төрлө-төрлө аҙыҡ менән ғәләм тулды,
Үтеп китте, ете йыл тарлыҡ булды,
Ҡайғырып:
— Иген икмәк, — тиер имде.

Ете йыл күктән ямғыр бер яуманы,
Ҡоро ерҙә үлән дә үçә алманы,
Бер генә лә аçыл елдәр ҙә иçмәне,
Бик тә ҡаты ҡоролоҡтар килер имде.

Ғәзиз Йософ ул шәһәргә хәбәр бирҙе,
Мысыр әһеле бөтәһе йыйылып килде,
Алтын-көмөш биреп, ашлыҡ һатып алды,
Ҡыҙыл алтын тәңкә тотоп имде.

Икенсе йыл бирҙеләр ат-ҡасырҙарын,
Өсөнсө йыл — атлас, ебәк тауарҙарын,
Дүртенсе йыл — бөтә йорт-йыһаздарын,
Бишенсе йыл ул-ҡыҙҙарын бирер имде.

Ҡайһылары ҡол булдылар алтынсы йыл,
Һәм Йософто һатҡандар ҙа — уныһын бел —
Уғыл-ҡыҙҙары менән булдылар Йософҡа
ҡол,
Шәһәр халҡы барыһы ҡол булыр имде.

Халиҡ Ябраил аша сәләм ебәрҙе,
— Йә, Йософ, ризалыҡ менән шөкөр ҡыл,
Мысыр халҡы барыһы булды һиңә ҡол,
Һине һатҡандар ҙа ҡол булды имде.

Тарлыҡ менән шулай алты йыл да үтеп
китте,
Амбарҙарҙа ашлыҡ-ниғмәт тамам бөттө,
Йософ нәби был хәлдәрҙән уйға батты,
— Йә, илаһым, ярҙам һинән, — тиер имде.

Шул сағында Ябраил тағы килде,
Йософҡа халиҡ әмерен еткерҙе,
Әйтер:
— Хәҙер бына йөҙөңдө белдер,
Минең ҡөҙрәтемде, зинһар, күргел имде.

Йософ нәби шәһәргә хәбәр ебәрҙе,
— Иртә менән майҙанға сығығыҙ, — тине,
— Минең күркәм йөҙөмә бағығыҙ, — тине,
Баҡҡан кешенең асығыуы бөтөр имде.

Оло-кесе, ярлы-бай — барыһы килде,
Һәм Йософтоң йөҙөнә ҡарап текәлде,
Ашау-эсеү ҡайғыһы онотолдо,
Матурлығын күреп туйып булмаҫ имде.

Айға бер көн ул майҙанға сығыр инде,
Күркәм йөҙөнән япмаһын алыр ине,
Оло-кесе, бай вә фәҡир бағыр ине,
Шунан бер ай ашамай торорҙар имде.

* * *

Ябраил хәҙрәт бер көн тағы ла килде,
Йософҡа ул хаҡтың сәләмен еткерҙе,
«Һарай әһелдәре менән сыҡ сәхрәгә,
Йә, Йософ, хоҙай әмерен үтә имде.

Шикләнмәйсә, хәҡиҡәткә һин ышанғыл,
Тап булған тәүге кешене алып ҡалғыл,
Үҙеңә һин уны вәзир итеп ҡуйғыл,
Халиҡ әмере шулай булыр, бел имде».

Йософтоң бер шәп бәйге аты бар ине,
Ул аттың шундай ғәҙәте лә бар ине:
Өҫтөнә эйәр һалыу менән кешнәр ине,
Мысыр халҡы барыһы ла ишетер имде.

Ҡолдарына ат килтерергә бойорҙо,
Аты кешнәп, бөтә ғәскәре йыйылды,
Һәммәһе ғәзиз Йософ әмерен тыңланы,
Мысыр халҡы ла ҡарарға килер имде.

Оло-кесеһе, байы-ярлыһы килде,
Бәктәр, хандар, бөтә шаһтар хеҙмәт ҡылды,
Мәғриб батшаһы, мәшриҡ әһеле килде,
Шаһ менән тамашаға сығырҙар имде.

Ике йөҙ мең ғәскәр килә уң яғынан,
Йәнә ике йөҙ мең килә һул яғынан,
Ике йөҙ мең ғәскәре килә алдынан,
Тағы шул тиклем артынан килер имде.

Алтын-көмөш баулы әләм күтәрҙе,
Артынан йәнә йөҙ мең кеше эйәрҙе,
Ике йөҙ мең хеҙмәтсеһе ҡылыс тотҡан,
Ошолайтып ул сайранға сығыр имде.

Солтанды бер күргәндәр ҙә таң ҡалдылар,
Һәммәһе: ярлы-байы — аптырандылар,
Ғәйрәтенән дошмандары тетрәнделәр,
Быны ишеткәндәр хайран ҡалыр имде.

Ғәзиз Йософ ғәскәр башында бара ине,
Бер юлсыны осратты, уны күрҙе,
Ул бахырҙың туны шундай иҫке ине:
«Миңә тиң түгел, — тип Йософ уйлар имде. —

Бөгөн үҙем Мысыр батшаһы булған хәлдә,
Халиҡ биргән дәүләт минең ҡулда,
Уны вәзир итеп тәғәйенләгән хәлдә,
Миңә бер ҙә лайыҡ була алмаҫ имде».

Шул ук сәғәттә Ябраил етте килеп,
Йософҡа сәләм ебәргән бөйөк Халиҡ:
«Хәтереңдән был уйҙы сығар тиҙ үк,
Былдай уйлау һиңә лайыҡ түгел имде.

Зөләйха һине боҙоҡҡа тартҡанын да,
Һинә ҡарата мәкере артҡанын да,
Ҡасканыңда итәгеңде йыртҡанын да —
Барыһын да, Йософ, иҫеңә төшөр имде.

Ун өс көндән был бер айлыҡ улан ине,
Шул хәлдәрҙе бишектән күргән ине,
Һинең өсөн таныҡлыҡ та биргән ине.
Ни сәбәптән һиңә лайыҡ түгел имде?

Быларҙы Йософ иҫенә төшөрҙө —
Алып килде, затлы кейемдәр кейҙерҙе,
Үҙенә вәзир хеҙмәтенә ҡуйҙырҙы,
Теге меҫкен ихлас мөъмин булыр имде.

## Зөләйханың Йософҡа ғишҡын аңлатҡаны, бәхетле ғүмер кисергәндәре

Бала саҡтан Йософ сәүче бер төш күрҙе,
(Уны алдан һеҙгә һөйләп биргән инек).
Һуңынан бик күп ҡайғы хәсрәт күрҙе,
Төрлө-төрлө михнәттәргә төштө имде.

Унан ғына Хоҙайҙан рәхәттәр килде,
Ябраил аша сәләмдәрен ебәрҙе:
«Йә, Йософ, был михнәттәрең ниҙән инде —
Хәлил* һиңә мәғлүм итә, бел һин имде.

Һис берәүҙе шәфҡәтеңдән мәхрүм итмә,
Яфаланғандарҙы тар ҡойоға түкмә,
Яла яғып, бәлә уттарына илтмә,
Тотҡондарға миһырбанлы булһаң имде.

Михнәт бөттө, Мәүлә һиңә рәхәт бирҙе,
Өҫтәүенә сикһеҙ оло мөлкәт бирҙе,
Батшалыҡ ҡылырға һиңә форсат бирҙе,
Аманат: яҙыҡ эштән һаҡлан имде».

Йософ нәбигә ысынлап рәхәт килде,
Мысырҙа хөрмәтле олуғ батша булды,
Изге уға бөтә мөлкәтте лә бирҙе,
Бар эште яҡшылыҡ менән эшләр имде.

Ай тулып, һәр яңыһы булғанында,
Ғәскәр йыйылып бергә-бергә килгәнендә,

Атка меңеп Йософ сайранға сыҡҡанда,
Һигеҙ мең кеше оҙата барыр имде.

Ҡөҙрәте менән хаҡ уны итте барлы,
Хөкөмө ғәҙел, аҡылы теүәл, үҙе ғәрле,
Дине бөтөн, ғилеме тамам, йөҙө нурлы,
Йөҙөн күргән йәнен фиҙа итер имде.

Зөләйха зәғифләнде, күҙе күрмәҫ,
Ашау-эсеү кейенеүгә күңел һалмаҫ,
Ныҡ ҡартайҙы, Йософ уны күреп белмәҫ,
Ә Йософто ул һис тә онотмаҫ имде.

Йософ йөрөгән юлдарҙан китмәҫ булды,
Бар ғүмерен бағышларға ниәт ҡылды,
Бисара Зөләйхаға бары шул ҡалды,
Ғишыҡлығы унын һаман артыр имде.

Шулай итеп, сираттағы ай тулғанда,
Аты кешнәп, ғәскәр тағы йыйылғанда,
Ғәзиз Йософ сәхрәләргә йыйынғанда,
Зөләйха юлында илап тотор имде.

Зөләйханың ындай хәлен Йософ белмәҫ,
Зирәк Йософ Зөләйхаға яҡын килмәҫ,
Илағаны ҡолағына ишетелмәҫ,
Барабан, борғо тауышы ҡаплар имде.

Зөләйха хәсрәт йотоп кирегә китер,
Ҡайғы-хәсрәт уттары бәгерен өтөр;
Илай-илай Йософ эргәһенән үтер,
Шулай ҙа ҡауышыу өмөтөн өҙмәҫ имде.

Зөләйха оҙаҡ көндәр шулай йөрөнө,
Тамам хәлдән тайҙы, башы миңрәүләнде,
Үҙе табынған сәнамға үпкәләне,
Мәнфәғәте юҡ икәнен белде имде:

«Ғәзиз инем — тол ҡалдым, ғәрипләндем,
«Сәнам!» тип ялбарыуымды ишетмәнең,
Йософ ғишҡы сәбәбенән михнәтләндем,
Һинән бер ярҙам юҡ һаман, белдем имде.

Мысырҙа бик хөрмәтле ҡатын инем,
Ғәләмдәргә етәкселек ҡыла инем,
Унан һине тәңрем тип белә инем,
Һис ҡасан да рәхмәтең булманы имде.

Ошо Йософ минен ҡолом булыр ине,
Илаһына ғибәҙәттәр ҡылыр ине,

Хоҙайы хеҙмәтенә буйһонор ине,
Хоҙай уға мөлкәт, ғиҙҙәт бирер имде».

Зөләйханың сәнамдан күңеле ҡайтты,
Мөъмин булып, сәнамдан үҙе баш тартты,
Сәнамды һуҡҡылап ваҡ-ваҡ kиçәктәргә
ватты,
Kиçәктәрен баҙарҙа ул һатыр имде.

Тағы ла ай тулып, яңыһы тыуҙы,
Йософ йәнә сайранға атын ҡыуҙы,
Зөләйха ҡысҡырып уға тауыш бирҙе:
— Йә, Йософ, миңә бер генә күҙ һал имде.

Халиҡ шул саҡ Зөләйхаға ярҙам итте:
Ниһәйәт, тауышын Йософ та ишетте,
Ишетеп, Йософ атының теҙгенән тартты,
Күҙе күрмәй, Зөләйха баçып торор имде.

Ул арала Йософ яҡынлашты,
Яҡынлашты, хәл-әхүәлдәрен һорашты,
— Kемһең һин, ни кәрәк һиңә? — тип белеште, —
Әйт теүәлләп, хәжәтеңде үтәйем имде.

Зөләйха әйтер:
— Эй йыһандар шаһы,
Хәлем зәгиф, күҙем күрмәй — бел һин асыҡ,
Мысыр батшаһы ефете — Зөләйха ҡарсыҡ,
Бына хәҙер ошо хәлгә төштөм имде.
Иçеңдәме, һине һатып алған инем,
Бөтә малым һиңә фиҙа ҡылған инем,
Һинең ғишҡыңдан мин хайран ҡалған
инем —
Бына бөгөн ни хәлгә төштөм имде!

Ҡулдарымдан китте инде аш-һыу, ниғмәт,
Һис ҡалманы, юҡҡа сыҡты бар мал-мөлкәт,
Әммә ләкин кәмемәне ғишҡым-хәсрәт,
Бер туҡтауһыҙ яндыра, арта имде.

Икрар итеп инандым мин тәңрегә,
Һәм инандым һин — Йософ пәйғәмбәргә,
Һис шиктәрем ҡалманы мөъминдәргә,
Әлхәмделилла, мөъминә булдым имде.

Йософ Зөләйханы күреп, бик йәлләне,
Уның ғишҡы-хәсрәтенә ғәжәпләнде,
Әйткәненә ысынлап ышанманы,
Һынамаҡ өсөн ҡабатлап һорар имде:

— Йә, Зөләйха, ҡайҙа һинең һанһыҙ малың,
Зифа буйың, оҙон сәсең, нескә билең?
Тулған айҙай балҡыр ине матурлығың —
Нисек итеп ошо хәлгә төштөң имде?

Зөләйха әйтер:
— Матурлығымды, малымды
бирҙем,
Һинең өсөн бөтәһен дә фиҙа ҡылдым,
Бәхетемдән, тәхетемдән мин төңөлдөм,
Һинең ғишҡың мине әсир итте имде.

Йософ әйтер:
— Әгәр ҙә ысынлап ғашиҡ
булһаң,
Ғашиҡлыҡта тоғролоҡто һаҡлай алһаң,
Ғашиҡлыҡҡа ысынлап дәғүә ҡылһаң,
Был дәғүәңә берәй дәлил кәрәк имде.

Зөләйха әйтер:
— Әйҙә, яҡыныраҡ кил,
Рәхим итеп, ҡамсыңды, Йософ, миңә бир,
Ғашиҡ булһам, ул хәҙер һиңә белдерер,
Күрһәтмәһә, был дәғүәм урынһыҙ имде.

Йософ уға ҡамсыһын урап тотторҙо,
Ҡатын ҡамсыға бер өрөп кире бирҙе,
Ҡамсыға ут тоҡанмышын Йософ күрҙе,
Уты Йософтоң ҡулын көйҙөрөр имде.

Ҡамсыны атып ебәрҙе Йософ ситдыҡ,
Зөләйханың ғишҡын белде ул ап-асыҡ,
Тоғролоғон күрҙе, күңелдә ҡалманы шик,
Ғәжәпләнеп, атын кире борор имде.

Зөләйха әйтер:
— Йә, Йософ, ышандыңмы,
Ҡамсы ниҙән ҡабыныуын аңланыңмы?
Әллә ҡулың янғанын да тоймаңыңмы?
Ҡырҡ йыл ул ут мине көйҙөрә имде.

Йософ нәби был ғибрәткә ғәжәпләнде,
Зөләйхаға нәсихәттәр, өгөт бирҙе:
— Һин өмөтлән, көткән вәғәҙә көнө килде,
Михнәт үтте, рәхәт килде, аңла имде.

Шул мәлдә Ябраил тағы осоп килде,
Хаҡ сәләмен Йософҡа ул еткерҙе,
Ә Зөләйха уғыл-ҡыҙҙан өмөт өҙҙө,
Хаҡҡа илап, зар-интизар ҡылыр имде.

Ябраил әйтер:
— Мәүлә сәләм ебәрҙе,
Хәкикәт, һиңә ул ебәрҙе мине,
Зөләйхаға никах кылып, алһын тине,
Зөләйха — катын, һин — батша булһын
имде.

Ябраилдан Йософ нәби быны белде,
Зөләйха торған урынға кире барҙы,
Быларҙы һөйләп, уны шатландырҙы:
— Йә, Зөләйха, рәхәт-һөйөнөс килер имде.

Быны ишетеп, Зөләйха кайғыға калды:
— Эй хоҙайым, үҙең беләһең минең хәлде,
Матурлығымдан, малымдан күптән яҙҙым,
Үҙем карт, өҫтәүенә ике күҙем күрмәҫ имде.

Мәүләмдән тәкдиремә әмер булһа,
Күҙҙәремдең нурҙары ла кире килһә,
Матурлығым да Йософка лайык булһа,
Мәүләмдән генә ярҙамды көтәм имде.

Шул сәғәт Ябраил кабаттан килде,
Канаты менән һыйпаны, доға кылды —
Зөләйханың күҙе асылды, йәп-йәш булды,
Йөҙө тулған ай шикелле балкыр имде.

Йософ нәби шунда оло мәжлес йыйҙы,
Әмер биреп, Зөләйхаға никах кылды.
Бәктәр, күп кунактар һарайға йыйылды.
Бик күп кыуаныс-шатлыктар булыр имде.

Унан һуң икеһе генә аулак калды,
Йософ Зөләйханың саф икәнен белде,
Зөләйханың кулын тотоп ул һораны:
— Халик нисек минең өсөн һаклар имде?

Зөләйха Йософка ыңғай хәбәр бирҙе:
— Халик, ысын, һинең өсөн һаклар ине,
Миңә окшаш пәрей кыҙы килә ине,
Кәнзәфәр уны мин тип һөйөр имде.

Йософ әйтер:
— Хәтерләйһеңме ул көндө?
Яман эшкә өндәгәйнең бит һин мине.
Алла һаклаһын, кылған булһак беҙ уны,
Был моратка бөгөн етмәҫ инек имде.

Зөләйха әйтер:
— Эйе, Йософ, шулай инде,
Битемә бәрмә инде һин ғәйебемде,

Ҡөҙрәте менән һаҡланы хоҙай мине,
Бәләнән һине, мине һаҡланы имде.

Тулған айға оҡшай ине һинең йөҙөң,
Һөйләһәң, тыңламаҡҡа татлы һүҙең,
Халиҡ һиңә бүләк иткән матурлығың —
Һине күргәс, кемдең сабыры ҡалыр имде.

Зөләйха әйтер:
— Рәхмәт уға, һине бирҙе,
Бар теләгем, моратым да ҡабул булды,
Йөҙөм күрке һәм дәүләтем кире бирҙе,
Рәхмәт-шөкөр ул мәүләгә ҡылам имде.

Унан аҙаҡ хаҡ тәҡдире шулай булды,
Ошо икәүҙең ғүмере бергә уҙҙы.
Ун ике ул мәүләнең бүләге булды,
Олоһона Мөсәлим тиерҙәр имде.

## Ағаларының Мысырға килгәне Йософтоң Шәмғунды алып ҡалғаны, Ибне Йәминде килтерергә шарт ҡуйғаны

Ҡәнған иләндә ҡаты ҡоролоҡ булды,
Яҡуп сәүче* уландарына бойорҙо,
Әйтер: «Беҙгә ҡытлыҡ бик ауыр булды,
Ашлыҡ алырға Мысырға барың имде.

Илебеҙҙә беҙҙең хәйер һис ҡалманы,
Елкәбеҙҙән хәйерле эш һис килмәне,
Ҡытлыҡ беҙҙе аптыратты, хуш килмәне,
Йә, балалар, Мысырға барығыҙ имде!

Мысырҙа һатлыҡ ашлыҡтары бар икән,
Батшаһы — мөъмин, дине лә дөрөҫ икән,
Алтын юҡ, һатыулашығыҙ йөк-мал менән,
Ул ғәзизгә беҙҙән сәләм әйтегеҙ имде».

Ун ҡәрҙәш тә дөйә менеп юлға сыҡты,
Унынһы ла юлланырға мәжбүр булды,
Ибне Йәмин генә бармай өйҙә ҡалды,
Ҡәнғандан Мысырға ҡарай барыр имде.

Юлда бер каруан менән осраштылар,
Асыл-нәҫел бер-беренән һораштылар,
Исмәғил нәҫеленән икән — белештеләр:
— Исхаҡ нәҫеленәнбеҙ, — тип әйтерҙәр имде.

Яҡуп сәүче хәлдәрен улар һораны:
— Меҫкен Йософһоҙ ни эшләй Яҡуп? — тине.

Ә Йәһүҙә ҡыҫҡа ғына яуап бирҙе,
— Яҡуптың хәле насар, — тиер имде.

Үҙҙәре тегеләрҙән хәбәр һорашты,
Мысырҙан килеүселәр менән һөйләште,
Ашлыҡ хаҡы күпме икәнен белеште,
Хушлашып, Мысырға ҡуҙғалдылар имде.

Хаҡ тәғәлә Ябраилға тағы бойорҙо,
Йософҡа ҡунаҡтар килерен белдерҙе,
Ағалары һаман да юлда ине,
Ун өс көндән генә Мысырға етер имде.

Ғәзиз Йософ Ябраилдан хәбәр алды,
Ҡәрҙәштәре килеүенә бик ҡыуанды,
Хоҙайына шөкөр-рәхмәттәр яуҙырҙы,
Килеп етеүҙәрен көн-төн көтөр имде.

Мысырға ҡәрҙәштәре килеп еткәс,
Ябраил был турала хәбәр иткәс,
Ағаларын йыраҡтан күреп танығас,
Уфтанып, тәхеттән ауып төшөр имде.

Бер аҙҙан Йософтоң иҫе кире ҡайтты,
Вәзире был ҡыланышҡа хайран ҡалды,
Әйтер:
— Йә, шаһ, ни хәлдәр, һиңә
ни булды? —
Аҡылың шашып, һуштан яҙып яттың имде.

Йософ нәби вәзиренә һорау бирҙе:
— Ҡайҙан килгәндәр улар — беләһеңме?
Вәзир әйтте:
— Килгәненә биш көн уҙҙы,
Юлсы улар, йомоштары барҙыр имде.

Йософ әйтер:
— Ул юлсылар ҡайҙан килгән,
Белешегеҙ, ниндәй йомоштары төшкән?
Вәзир әйтер:
— Ул меҫкендәр бында килгән,
Ашлыҡ өсөн Ҡәнғандан килгәндәр имде.

Йософ әйтер:
— Бер һарайҙы әҙерләп ҡуй,
Эсенә тултырығыҙ төрлө нимәт-һый,
Шул уҡ сәғәт тегеләрҙе килтереп ҡуй,
Уларҙы үҙең хеҙмәтләндер имде.

Вәзир ул юлсыларҙы табып алдырҙы,
Төрлө ниғмәт, тәмле тәғәмдәр ҡуйҙырҙы,

Алдарында аяғүрә баҫып торҙо,
Түбәнселек менән хөрмәт ҡылыр имде.

Тегеләр ошондай һый-хөрмәт ашаған,
Өҫтәүенә, вәзирҙән ҙур хөрмәт күргәс,
Ололоклап һәм ҡәҙерләп ҡабул иткәс,
Ағалары ғәжәпкә ҡалырҙар имде.

Аптырашып, үҙ-ара һөйләшә улар:
— Батша беҙҙән бик күп алтын көтә, буғай,
Шуның өсөн дә ул беҙҙе ололоҡлай,
Алтыныбыҙ юҡлығын белмәйҙер имде.

Шәмғун әйтер:
— Атабыҙҙы ул беләлер,
Тап уның өсөн беҙгә хөрмәт ҡылалыр,
Яҡуп — рәсүл икәнлегенә инаналыр? —
Шуға күрә беҙҙе ололайҙыр имде.

— Сәбәбе шул, — тип әйтер Йәһүҙә унан, —
Барыбыҙ ҙа фәкирерәк башҡаларҙан,
Батша беҙҙең хәлебеҙҙе асыҡ күргән,
Шуға ла мәрхәмәтен күрһәтер имде.

Рауил әйтер:
— Был шаһ — ғәҙел, һүҙ юҡ
бүтән,
Беҙҙең зәғиф хәлебеҙҙе күҙе күргән,
Мөшкөл хәлебеҙҙе тойоп, ул йәллә гән,
Ғәҙел кеше ғәриптәрҙе һөйөр имде.

Йософ эстән генә һығылып тыңланы,
Ҡәрҙәштәренең барыһын да таныны,
Шәмғун менән Йәһүҙәне айырманы,
Ябраил ғына килеп асыҡлар имде.

Унан Йософ бойорҙо Мөҫәлименә,
— Һыу килтереп ҡой минең һауытыма,
Илтерһең шунан теге меҫкендәргә,
Бөтәһенә аяҡсы булырһың имде.

Һыу эсереп, һәммәһенә лә хеҙмәт ит,
Аманат: ағаларға күрһәт хөрмәт,
Ҡайҙан, ниңә килгәндәрен бел, әйт,
Кемлегенде һораһалар, өндәшмә имде.

Мөҫәлим һауыттарға һыу тултырҙы,
Ҡунаҡтарҙы ҡарарға әҙер торҙо,
Алдарында аяғүрә баҫып торҙо,
Ҡулдарына туҫтаҡтар тотторҙо имде.

Һәр береһе һыу теләһә, ҡойоп бирҙе.
Хөрмәтләүҙе үҙе өсөн ҙур дәрәжә күрҙе,
Хөрмәт итеп эсһәләр, тағы тултырып ҡуйҙы,
Ошолай ҡәҙер-хөрмәт күрһәтер имде.

— Аҡылы камил, теле йомшаҡ, мөрәүәтле,
Күңеле йомшаҡ, йөҙө яҡты, үҙе күркле,
Әйткәне — раҫ, һүҙе тапҡыр, теле татлы,
Был Йософҡа оҡшаған, — тиҙәр имде.

Һорашалар:
— Эй егет, йөҙөң бик нурлы,
Матурлығың хуш, мөрәүәтле, үҙең ғәрле,
Беҙгә яҡшылыҡ күрһәтәһең күп төрлө,
Кем һин, кемдең улы һин? — тиерҙәр имде.

Мөсәлимдең уларға яуабы әҙер:
— Әйткәнегеҙ ғибранисә* нисек булыр?
Мине һеҙгә хеҙмәт итергә ҡуйҙылар,
Ни һөйләйһегеҙ һуң? — тип яуаплар имде. —

Мысыр шаһы һеҙҙе бигерәк тә һөйә,
Йөҙөгөҙҙө күрмәһә, хәсрәтләнә,
Һеҙҙең менән танышыуға өмөтләнә,
Мине һеҙгә хеҙмәткә бирҙе имде.

Һеҙгә һәр ваҡыт хеҙмәт итәсәкмен,
Киткәнсе эргәгеҙҙә буласаҡмын,
Үҙемде лә дәрәжәле тоясаҡмын,
Һеҙҙе күреү миңә рәхәт була имде.

Улар күрҙе Мысыр шаһы яҡшылығын,
Ҡәҙерләп, хөрмәт итеп яратҡанын
Һәр беренә бер икмәк биргәнлегем —
Күмәкләшеп ғәжәпкә ҡалырҙар имде.

— Был батша бигерәк йомарт, тиештеләр.
Аш-һыуға мул икән, тип һөйләштеләр.
Ашлыҡтың хаҡы күпме? — тип
һораштылар,
— Бер йөк ашлыҡ мең ике йөҙ алтын имде.

Унан Йософ биҙәттерҙе һарай-тәхетен,
Бөтәһен йыйыштыртты, килтереп шартын,
Ҡол-ҡарауашына ҡушты, әйтеп ваҡытын,
— Ҡәнғандар килһен! — тип бойорор имде.

Ул арала өс көн үтеп киткән ине,
Тегеләр Мөсәлимгә өйрәнгән ине.
Барыһына аҡ атлас тундар биргәйне.
Дүртенсе көн һарайға барырҙар имде.

Һарай эсенә барып инеүҙәре менән,
Йософтоң ғәйрәтен күреүҙәре менән,
Солтанатын, көсөн белеүҙәре менән,
Унығы ла, баш ороп, сәждә ҡылыр имде.

Йософ әйтер:
— Ҡалҡытығыҙ башығыҙҙы,
Ултырығыҙ һәм йыйығыҙ аҡылығыҙҙы,
Һөйләп ебәрегеҙ миңә хәлегеҙҙе,
Ни хәжәт менән килдегеҙ, әйтең имде.

Шунан тегеләр сәждәнән баш ҡалҡытты,
Һәммәһе күҙен асты, аҡылын йыйҙы,
Унығы ла ҡалҡынып үрә торҙо,
Тәхет эргәһендә ҡурҡынып торор имде.

Йософ шунда ағаларын таныны,
Һәр береһенә берәм-берәм ҡараны,
Пәрҙә аҫтында һиҙҙермәйсә иланы,
Ә улар Йософто һис белмәҫтәр имде.

Йософ бойорҙо — ун һандыҡ килтерҙеләр,
Рөхсәт бирҙе, ун ҡәрҙәше ултырҙылар,
Ҡурҡыу, борсолоу, билдәһеҙлек кисерҙеләр,
— Ниндәй аяныс, үкенес, — тиҙәр имде.

Йософ һорар быларҙан:
— Һеҙ кемдәрһегеҙ?
Ҡайһы илдән килдегеҙ, ни теләйһегеҙ?
Ысынлап та, бер туған ҡәрҙәштәрһегеҙ?
Атағыҙ кем һуң һеҙҙең? — тип һорар имде.

Улар әйтер:
— Беҙ Ҡәнғандан килгәнбеҙ,
Дәрәжәле Исхаҡ сәүче — беҙҙең бабабыҙ,
Хәҡикәт: ун ике бер туғандарбыҙ,
Атабыҙҙы Яҡуп нәби тиҙәр имде.

Берәүебеҙ өйҙә ҡалды, килә алманы,
Иң бәләкәйебеҙҙе бүре ашаны,
Атабыҙ уны бигерәк һөйә ине,
Шул хәсрәттән ике күҙе күрмәҫ имде.

Йософ әйтер:
— Ололар, ни һөйләйһегеҙ,
Һеҙ әйтәгеҙ — атабыҙ нәби, тиһегеҙ,
Ҡесебеҙҙе артығыраҡ һөйә тиһегеҙ,
Пәйғәмбәргә улай эшләү яҙыҡ имде.

Улар әйтер:
— Эйе, ғәзиз, ишет беҙҙән,

Күрһәң ине кесебеҙҙе бер күҙ менән,
Һин дә уны һөйөр инең бар күңелдән —
Күргәнең булмағас, аңламаҫһың имде.

Беҙ ҙә уны шундай итеп һөйөр инек,
Әҙ генә күрмәһәк тә һағыныр инек,
Бер ялған төш күргән, аҙаҡ шуны белдек,
Атабыҙ изгегә юрай икән имде.

Йософ әйтер:
— Ниндәйерәк төш күргән һуң,
Атағыҙ ул төштө нисек юраған һуң?
Улар әйтер:
— Атабыҙ, тыңлағандан һуң,
Мысыр батшаһы булаһың, тигән имде.

Ул төшөн беҙгә һуңынан һөйләмәне,
Уның төшөн атабыҙ ғына юраны,
«Мысыр батшаһы булыр» тип ололаны,
Шуға ла уны беҙ өнәмәнек имде.

Йософ әйтер:
— Ул төш улай булмағанмы,
Шулай юрау әллә тура килмәгәнме,
Энегеҙ Мысыр батшаһы булмағанмы,
Хәлдәрен уның беләһегеҙме имде?

Улар әйтер:
— Ғәзиз, ул уғлан ҡайҙа булһын?
Хәҡиҡәт, яуыз бүре ашаны бит үҙен,
Ожмахталыр инде күптән йәне уның,
Был донъянан мәңгелеккә үтте имде.

Бына инде, гәзиз, хәлебеҙҙе белдең,
Атайыбыҙ һиңә ебәрҙе күп сәләм,
Тамам йонсотто ҡоролоҡ, шундай бөлдөк,
Һеҙҙән ашлыҡ һорарға килдек имде.

Мохтаж булып торабыҙ беҙ алдығыҙҙа,
Күп түгелдер алып килгән малыбыҙ ҙа,
Ярҙам, изгелек көтәбеҙ барыбыҙ ҙа, —
Яҡшылығың бөтә ғәләмгә мәшһүр имде.

Йософ әйтер:
— Һүҙҙәрегеҙ ҡабул булһын,
Арағыҙҙан берәйегеҙ ҡалып торһон,
Икенсе мәртәбә килергә сәбәп булһын, —
Ибне Йәмин һеҙҙең менән килһен имде.

Әгәр һеҙҙең тарафтан тоғролоҡ булһа,
Ибне Йәмин һеҙҙең менән килер булһа,

Атағыҙ юл ебәрергә риза булһа,
Хәҙер бушлай ашлыҡ тейәтәмен имде.

Ашлыҡ бирәм, төрлө-төрлө ниғмәт бирәм,
Бөтәгеҙгә лә аҫыл кейем кейҙертәм,
Башка төрлө бүләктәр ҙә һеҙгә бирәм,
Атағыҙға ла бүләк ебәрәм имде.

Ун ҡәрҙәше был тәкдимде ҡабул ҡылды,
Шәмғун Мысырҙа ҡалырға риза булды,
Йософ йөк тейәтергә бойорҙо,
Әйберҙәрҙе йөк эсенә ҡуйыр имдә.

Бәс, уларҙы күндерҙе Йософ ситдыҡ,
Яҡшылап эшләп тейәтте тағы ризыҡ,
— Атағыҙға минән сәләм еткерегеҙ күп,
Ә үҙегеҙ кире килерһегеҙ имде.

Хәҡиҡәт, мин барығыҙҙы ла һөйәмен,
Икенсе ҡат күрергә бик теләймен,
Әйләнеп килеүегеҙҙе мин көтәмен,
Һеҙҙе шулай һөйәмен, — тиер имде.

Улар Мысырҙан сығып барғанда ла,
Ял итергә туҡтаған урында ла,
Ҡемдер берәү юлдарында осраһа ла,
Уларҙы ҙурлап, ололап торорҙар имде.

Улар әйтер:
— Был ерҙән гел үтер инек,
Ошо урында туҡтап ял итер инек,
Ҡәҙер-хөрмәтте һис тә күрмәй инек,
Берәй хикмәт барҙыр бында, — тиҙәр имде.

Улар ашығып Мысырҙан ҡайтыр ине,
Йософ еҫе уларға эйәрә килде,
Арттарынан иблес-мәлғүн ҡыуа ине:
Йософ еҫен бөтөрөргә уйлай имде.

* * *

Уландары Ҡәнғанға ҡайтып та керҙе,
Күреү менән Яҡуп сәүче һушын юйҙы,
Йәш аралаш ҡапыл ғына көлөп ҡуйҙы,
Унан тағы иҫтән яҙып ятыр имде.

Уландары Яҡуп менән күрештеләр,
Көлөүенең сәбәбен дә һораштылар,
— Әйтсе, баба,* нинә көлдөң? — тиештеләр,
Ниңә иҫһеҙ булып яттың? — тиҙәр имде.

Яҡуп әйтер:
— Һүҙегеҙҙе мин төшөндөм,
Шул сәбәптән шатландым да көлдөм,
Арағыҙҙа берәү юҡ икәнен белдем,
Шуға тағы һушымды юғалттым имде.

Мысыр хужаһы нисек һуң ашлыҡ бирҙе,
Белдегеҙме, ҡайһы диндә тотор үҙе?
Улар баҫып Яҡупҡа яуап бирҙе:
— Ул һеҙгә ҙур изгелек күрһәтте имде.

Асыҡланыҡ — уның дине саф мосолман,
Беҙҙе ул ныҡ ҙурланы, ҡәҙерләне һаман,
Ҡыҙыҡһындырҙы батшаны Ибне Йәмин,
Шәмғун унда ҡалды инде, — тиҙәр имде.

Ишеткәс тә Яҡуп ҡысҡырып ебәрҙе:
— Нишләп ҡалдырҙығыҙ һуң унда
Шәмғунды?
Ниңә ебәрәйем мин Ибне Йәминде?
Бер алданып, Йософһоҙ ҡалдым бит имде!

Уғландары Яҡупҡа яуап бирҙе:
— Ул ғәзиз тағы бик ныҡ һорашты һеҙҙе,
Һинең өсөн бик иланы, яныпкөйҙө,
Күп итеп сәләм ебәрҙе имде».

Аҙаҡ Яҡуп был тәкдимгә риза булды,
Улдарының барыһынан ант бирҙерҙе,
Ахыр Ибне Йәминде ебәрергә булды,
Һәр береһе ышандырып һүҙен бирҙе.

Астылар улар аҙаҡ тоҡтарын,
Ҡутарҙылар ҙа тейәлгән йөктәрен,
Ышандырҙылар күмәкләп аталарын,
«Үҙебеҙҙең байлығыбыҙ!» — тиҙәр имде.

Яҡуп Нәби уларға рөхсәт бирҙе,
Ибне Йәминде ҡулдарына тапшырҙы,
Ун ҡәрҙәш хушлашып юлға ҡуҙғалды,
Батша хеҙмәтенә тип барырҙар имде.

Яҡуп әйтер: «Унда барып етеүегеҙ менән,
Үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ яман телдән, күҙҙән,
Бөтәгеҙ ҙә бер ҡапҡанан йөрөмәгеҙ,
Икешәрләп кенә үтерһегеҙ имде».

### Ағаларының йәнә килгәне, Ибне Йәмингә Йософтоң үҙен танытканы бур итеп алып ҡалғаны

Уғландары Мысырға килеп тә етте,
Икешәр-икешәре ҡапҡанан үтте,
Ибне Йәмингә инергә сират етте,
Бер үҙе ни эшләргә лә белмәҫ имде.

Шам ҡапҡаһынан бер үҙе килеп керҙе,
Олоһонан-кесеһенән юл һораны,
Һис бер кем унын телен дә аңламаны,
Хайран булып, шунда илап торор имде.

Шунда килеп етте хаҡ илсеһе Ябраил,
Килтерҙе Йософҡа тағы хаҡ сәләмен.
Әйтте: «Килде бит ҡәрҙәшең Ибне Йәмин,
Ҡыуанысты белдерергә килдем имде.

Йә, Йософ, тор имде, ҡаршыларға йыйын,
Индәреңә һал иң матур атлас кейем,
Һиҙҙермәйсә бер кемгә, дөйәгә мен,
Ҡәрҙәшеңде күрергә ҡабалан имде.

Ул Шам ҡапҡаһы эргәһендә торалыр,
Кемде күрһә лә өндәшә, ялбаралыр,
Бер кем белмәҫ ғәрәпсә, яуап бирәләр,
Бер яңғыҙы аптырап, илар имде».

Йософ нәби күрһәтелгән ергә китте,
Шамдан ингән ҡапҡа эргәһенә етте.
Ибне Йәмин белмәне ул икәнлекте,
Йософ, йөҙөн ҡаплап, һорау бирер имде.

Йософ әйтер: «Йә, ғәзизем, ни һорарһың,
Ҡайһы илдән килгәнһең, ҡайҙа бараһың?
Нинә илап тораһың һуң, ни теләйһең?
Хәлдәреңде минә һөйләп ебәр имде».

Һөйләп бирҙе: «Мин Ҡәнғандан килгән инем,
Мысыр шаһы хеҙмәтенә бара инем,
Шәһәргә ингәс, юлды белмәй тора инем,
Атам «Ибне Йәмин» тип йөрөтөр имде.

Ун ҡәрҙәш килеп еттек был ҡапҡаға,
Икешәр-икешәр инделәр һәр ҡапҡаға,
Иш етмәйенсә ҡалдым яңғыҙ ҡапҡала,
Ҡайғыларҙан шулай илап торам имде.

Тағы ла минең ҡарындашым бар ине,
Бер әсәнән тыуған инек унын менән,

Уны уйлап та ағалыр йәш күҙемдән,
Ни эшләргә белмәйенсә торам имде».

Әйтер: «Кем һуң үҙең шундай мөрәүәтле,
Бөтөргәндәй булдың күңелдән хәсрәтте,
Ғәрәпсә[60] хуш һүҙҙәр һөйләнең татлы,
Был телде нисек өйрәндең?» — тиер имде.

Йософ әйтер: «Мин Ҡәнғанда торған инем,
Бер ваҡытта шул ерҙәрҙе күргән инем,
Бәләкәй саҡта унда мин торған инем,
Ошо телде шул ваҡытта өйрәндем имде».

Ибне Йәмин: «Эй изгелекле йән, — тине,
Хәсрәт уттарына төштөм инде, — тине,
Йөҙөңдө күрергә теләгем бар, — тине,
Япмаң асып, йөҙөңдө бер күрһәт имде».

Йософ әйтте: «Был эште ҡыла алмайым,
Йөҙөмдән пәрҙәне ала алмайым,
Теләгеңде һис кенә үтәй алмайым,
Сабыр итеп торғол бер аҙ ваҡыт имде».

Унан Йософ уға өгөт-кәңәш бирҙе,
Үҙе ҡулы менән beләҙек тотторҙо,
Ул беләҙек саф ҡыҙыл алтын ине,
Ҡырҡ мең Мысыр аҡсаһына торор имде.

Быялалыр, тип уйланы Ибне Йәмин,
Ни эшләтергә белмәйенсә беләҙеген,
Йософ әйтте:
— Кей беләгеңә бүләгем.
Үҙе эстән генә көлөп торор имде.

Ибне Йәмингә Йософ юл күрһәтте,
Икеһе бергә шәһәр яғына китте,
Ибне Йәмин ҡәрҙәштәрен ҡыуып етте,
Күмәкләшеп һарайға баралар имде.

Йософ әйтте:
— Инде миңә рөхсәт ҡылғыл,
Ҡәрҙәштәрең эргәһенә барып торғол,
Уларҙан айырылмайса һарайға килгел,
Ҡайғырма, күңелең хуш булыр имде.

Ибне Йәминдең айырылғыһы һис килмәҫ,
Тегеләр янына барырға теләмәҫ,
Әйтер ки:
— Айырылырға көсөм етмәҫ,
Һинең янда булыу миңә рәхәт имде.

Ҡайғыһынан күҙҙәренә йәштәр тулды,
Әйтер: — Һүҙҙәрең күңелемә татлы булды,
Бар булмышым менән һиңә әсир булдым,
Һинән башҡа бер кем кәрәк түгел имде.

Һинән башҡа бер кемде лә күҙем күрмәҫ,
Һинән башҡа күңелем һис тә тынғы белмәҫ,
Бер һүҙем бар, тик һорарға телем бармаҫ...
Төҫ-һының нәк Йософҡа оҡшар имде.

Йософ әйтер:
— Мин үҙем дә ҡолмон, — тиер, —
Мәүләм бар, уның хөкөмөн тотам, — тиер, —
Аллам әмерен һындырырға ҡурҡам, — тиер, —
Бойорғанын үтәргә кәрәк имде.

Бар, ҡәрҙәштәрең менән бергә-бергә бул,
Күңелеңде ас, хәсрәттәрҙән арынғыл,
Рәнйеү-ҡайғыларҙы ситкә ҡуй, шат бул,
Күңел йәрәхәте дауаһы булам имде.

Ибне Йәмин ҡәрҙәштәре янына килде,
Килеү менән күрешергә ҡулын бирҙе,
Ибне Йәмин шат икәнен улар күрҙе,
— Ниңә шатланаһың? — тип һорарҙар имде. —

Бер ваҡытта һинең шат булғаның юҡ,
Йософто ҡорт ашағандан һуң, көлгәнең юҡ,
Тешеңде күрһәтеп, бер йылмайғаның юҡ,
Бөгөн шатланаһың, — тип әйтерҙәр имде.

Ибне Йәмин уларға тиҙ яуап бирҙе:
— Һеҙҙән мин бит айырылып ҡалған инем,
Шул ваҡытта бер дөйәле кеше килде,
Минең менән ғәрәпсә һөйләште имде.

Пәрҙә менән ҡапланғайны уның йөҙө,
Юлсыларға дуҫ та икән, мөрәүәтле,
Теле йомшаҡ, һүҙҙәре күңелгә ятышлы,
Уны тыңлау — йән рәхәте, — тиер имде. —

Һеҙҙең эргәгеҙгә тиклем ул килтерҙе,
Бер беләҙек бүләк итеп миңә бирҙе,
Уны күреп, күңелемә шатлыҡ тулды,
Ҡайғы-хәсрәттәрем онотолдо имде.

Йәһүҙә әйтер:
— Ҡайҙа, беҙ ҙә күрәйек,
Беләҙеге ниндәй икән, беҙ беләйек,
Ҡәҙерен белеп, һинең өсөн һаҡлайыҡ, —
Беләҙекте Йәһүҙәгә бирер имде.

Йәһүҙә алды, ҡараны, быяла, тине,
Беләгенә кейеп ҡараны, һыйманы,
Рауил Йәһүҙәнән һорап алалманы,
Ибне Йәмингә әйләнеп ҡайтыр имде.

Ибне Йәмин беләҙекте кире һондо,
Рауил ҡулына ҡат-ҡат кейеп ҡараны,
Быны ғәжәп: уға ла ярамаҡы,
Кире Ибне Йәмин ҡулына кейелер имде.

Ҡәрҙәштәре берәм-берәм алып тотто,
Ҡайһылары кейеп ҡарарға маташты,
Һис береһенең ҡулына ла һыйманы,
Ибне Йәмингә генә ул таман имде.

* * *

Йософ бойорҙо:
— Төҙөүселәр хәҙер килһен,
Бер ғәжәп күркәм бейек һарай төҙөһөн,
Һарайҙың оҙонлоғо ҡырҡ аршын булһын,
Бейеклеге лә ҡырҡ аршын булһын имде.

Яҡуп нәбиҙең һүрәтен төшөрһөндәр,
Эргәһенә улдарын эшләһендәр,
Йософҡа ни ҡылғандарын күрһәтһендәр,
Барыһын да яҙып ҡуйһындар имде.

Алдатып атаһынан айырыуҙарын,
Сисендереп ҡойоға һалдырыуҙарын,
Хәҡиҡәт, үлтерергә йыйыныуҙарын —
Береһен ҡалдырмай төшөрһөндәр имде.

Ҡойонан сығарғас тағы килеүҙәрен,
— Ҡолобоҙ ул! — тип алдашып әйтеүҙәрен,
Һатҡанда ла аҙ баһаға биреүҙәрен...
«Өс ғәйебе бар» тип тә яҙылһын имде.

Шунан Йософ нәби бик ҙур мәжлес йыйҙы,
Һарайына төрлө ниғмәттәр алдырҙы,
Ҡунаҡтарына төрлө аш-һыу ҡуйҙырҙы,
Ағаларын да ҡунаҡҡа әйтер имде.

Ҡәрҙәштәре һарайға килеп тә инде,
Иң тәүҙә яҙыуҙарҙы Рауил күрҙе,
Шыпырт ҡына бер-беренә мәғлүм ҡылды:
— Беҙҙең боҙоҡ эшебеҙ бит! — тиҙәр имде. —

Атабыҙҙан Йософто алыуыбыҙ ҙа,
Атабыҙҙы ҡайғыларға һалыуыбыҙ ҙа,

Күпме яфа Йософҡа ҡылыуыбыҙ ҙа
Батша һарайына төшөрөлгән имде.

Ун ҡәрҙәше лә ул яҙыуҙарҙы күрҙе,
Үҙҙәренең боҙоҡлоғона хайран ҡалды,
Гонаһ эштәренә ысынлап үкенде,
Ашау-эсеүҙәр ҡайғыһы китер имде.

Алдарына ҡуйылһа ла төрлө нигмәт,
Йөҙҙәрендә үк сағылды ҡайғы-михнәт,
Барыһын солғап алды ҡаты хәсрәт,
Ауыҙҙарына ризыҡ та ҡапмаҫ имде.

Йософ тәржемәсене алдыртты:
— Һорасы, нинә тәмләмәйҙәр ризыҡты,
Инеү менән илаштылар ни сәбәптән?
Тәржемәсе уларҙан һорар имде.

Улар баҫып, тәржемәсегә яуап бирҙе:
— Беҙҙең бер ҡәрҙәшебеҙ булыр ине,
Уның йөҙө тап рәсемдәгесә ине,
Бүре ашаны элек, — тиерҙәр имде. —

Уны күргәс, хәсрәтебеҙ яңынан ҡуҙҙы,
Ашау-эсеү ҡайғыһы ла онотолдо.
Башҡа һарай әҙерләргә бойоролдо,
Ҡәрҙәштәрен шунда күсергә өндәр имде.

Ун бер ҡәрҙәш һарайына килеп керҙе,
Унда ла һәр төрлө нигмәт ҡуйҙырҙы,
Ун ағаһы, ултырып, ашап-ейҙе,
Ибне Йәмин генә илап торор имде.

Йософ әйтер:
— Нинә һинең йәшле күҙең,
Бәгерең тулышҡан, ҡайғылыһың үҙең?
Ни ҡайғың бар, янында бит ун ҡәрҙәшең,
Нинә илайһың, хәсрәтең ни? — тип һорар
имде.

Ибне Йәмин әйтер:
— Кире барыр инем,
Рөхсәт итһәң, һарайыңа инер инем,
Тағы ла бер ҡат һүрәтте ҡарар инем,
Ул рәсем Йософома оҡшар имде.

Йософ Ибне Йәмингә рөхсәт бирҙе,
Ибне Йәмин тәүге һарайға йәнә керҙе,
Ул һүрәтте ҡараны, асығын белде,
Һаман текләп, иларға тотонор имде.

Мөсәлимгә Йософ әйтер:
— Йә, улым, бар,
Ағайынды бер аҙ һарайҙа көтөп тор,
Һорау бирһә, хәлдәренде асыҡлап бир,
Ул меҫкенгә үҙеңде таныт имде.

Мөсәлим һарайға кире әйләнеп ҡайтты,
Ҡул ҡаушырып, ҡаршыһына барып баҫты,
Ибне Йәмин шунда Мөсәлимде осратты,
Илай-илай әхүәлдәрен һорар имде.

— Күренһәң, ҡайғыларҙы онотторағын,
Матурлыҡ менән беҙҙе йыуандырағын,
Йософома бигерәк тә оҡшап торағын,
Кем һин? Кемдең улы һин? — тип һорар
имде.

Мөсәлим шунда әйтер:
— Хәҙер әйтәм,
Эйе, ағам, ишет инде минән дөрөҫтө,
Минең атам — Мысыр шаһы Йософ тоғро,
Мысыр халҡы бөтәһе уға ҡол имде.

Атаһы Яҡуп нәби — Изге Исраил.
Бер ваҡыт уға килгән, имеш, Ябраил,
Пәйғәмбәрлек килтерҙе уға мәүләнән,
Рисаләт, кирәмәт бүләк итер имде.

Ибне Йәмин быны ишетеп шаҡ ҡатты,
Һушынан яҙып, аҡылын юйып ятты.
Мөсәлим дә аптыраны, йыуатты:
— Нимә булды һиңә? — тип һорар имде.

Ибне Йәмин Мөсәлимгә яуап бирҙе:
— Минең дә бер ҡарындашым булыр ине,
Уның исеме лә оҡшаш — Йософ ине,
Шуны иҫләгәс тә һушым китте имде.

Мөсәлим әйтер:
— Йә, ағам, инде тыңла,
Серемде асамын — үҙең бел дә һаҡла,
Йософтоң улы мин, инде шуны аңла,
Һин әйткән ҡәрендәшенден улымын мин.

Дөйә менеп, ул һинен янына килгән,
Шам ҡапкаһы төбөндә һине күргән,
Ағаларыңа алып барып ҡауыштырған,
Ҡыҙыл алтын беләҙек тә биргән имде.

Ибне Йәмин шунда бөтәһен аңлаған,
Аҡылы шашып, иҫһеҙ булып ергә ауған.

Аңға килгәс, шатлығының сиге булманы.
— Хәсрәтемә ҡауыштым, — тиер имде.

Мөғәлим икенсе һарайға килде,
Ни булғанын атаһына һөйләп бирҙе,
Йософ уның һүҙҙәрен урынлы күрҙе:
— Мин дә хәсрәтемә ҡауыштым бит имде.

Йософ та аулаҡ һарайға кире барҙы,
Яҡты йөҙөнән пәрҙәһен тартып алды,
Шул ваҡытта Ибне Йәмин уны күрҙе,
Оҙаҡ ҡына иҫтән яҙып ауыр имде.

Ибне Йәмин, ниһәйәт, иҫенә килде,
Икәүләшеп бер-беренә ҡулын бирҙе,
Шулай улар табышты-ҡауышты имде,
Фәрештәләр түгелеп илайҙар имде.

Унан һуң ултырҙылар улар аулаҡлап,
Хоҙайына уҡынылар шөкөр-рәхмәт,
Һөйләштеләр, түктеләр ҡайғы-хәсрәт,
Илай-илай Йософ һорау бирер имде.

Атаһының башта һорашты хәл-әхүәлен,
Ибне Йәмин дә көттөрмәне яуабын:
— Һуҡырайҙы илап — беләһең сәбәбен,
Хәсрәт йортонан бер генә сыҡмаҫ имде.

«Йософ» тиһәң, күҙҙәренән ҡандар тама,
Айырылыу ғазабынан бәғере яна,
Күрешеүгә өмөт тотоп хыяллана,
Ҡауышыуға һис өмөтөн өҙмәҫ имде.

Иҫендәлер, бар ине ҡәрендәшең Динә,
Һис яңы кейем кейгәне юҡ инсенә,
Һине һорар юлдан ҡайтҡан бер кешенән,
Һин юғалғандан һуң көлгәне юҡ имде.

Йософ әйтер:
— Хәҙер бар инде һарайға,
Бергә йөрө, барып ҡушыл ағаларға,
Эштәреңдә ярҙам итерһең уларға,
Ибне Йәмин ҡурҡыр, кире бармаҫ имде.

Әйтер:
— Һине аңғармаҫтан мин юғалттым,
Етмеш йыл ғазабымдан хәсрәт сиктем,
Һинән башҡа күпме ғүмер, ваҡыт үтте, —
Айырылыу утынан бәғерем көйөр имде.

Унан инде Йософ һорар:
— Өйләндеңме,
Йә ҡәрҙәшем, уғыл-ҡыҙың үҫәләрме?
Уландарыңа исемдәр бирҙеңме,
Ниндәйерәк исем ҡуштың, әйт һин имде.

Ибне Йәмин яуапты ҡайтарҙы былай:
— Ун ике уғыл бирҙе миңә хоҙай,
Һәр беренә һәр төрлө исем шундай:
Барыһы һинең ҡайғыға ишара имде.

Тәүге улымдың исемен Диңгеҙ ҡуйҙым,
Икенсеһенә Бүре исеме бирҙем,
Өсөнсөһөнөң исемен Ҡайғы тинем,
Дүртенсеһенә Ҡан тинем имде.

Диңгеҙҙәр ярында күп йәштәр түктем,
Тауҙа бүре аулап, анттар биреп бөттөм,
Ҡанлы күлдәктәрең тотоп хәсрәт йоттом,
Ҡайғы эстәрендә йөҙҙөм имде.

Бишенсеһе исемен Гүр тип атаным,
Алтынсыһыныҡын Дәрт тип әйттем,
Етенсеһенә [Мә] ғәр[ә] тип ҡуштым,
Һигеҙенсеһе — Арыҫлан тип аталыр имде.

Гүрстандар араһында күп иланым,
Дәртлеләрҙән дәртлеләргә күп йөрөнөм,
Мәғәрә-таш араһында ла ҡараным,
Арыҫландарҙы туҡтатып һораным имде.

Туғыҙынсыһының атын Фәрит* тинем,
Унынсыһыныҡын иһә Ғәриб тинем,
Ун беренсеһенең аты — Хәсрәт тинем,
Ун икенсеһен Ҡол тип атаным имде.

Ҡолдар күрһәм, күңелдәрен асыр инем,
Ғәриб күрһәм, ҡушылып илар инем,
Ҡайғылыларҙы күреп, йәлләп һыҡтар инем,
Ҡолдарға миһырбанлыҡ күрһәттем имде.

Йософ әйтте:
— Шундай исем нинә ҡуштың,
Ниңә уларҙы ҡушырға тырыштың?
Ибне Йәмин:
— Барыһы ла һинең өсөн,
Бөтәһен дә һинең өсөн күрҙем имде.

Йософ әйтер:
— Инде хәҙер ҡайғырмағыл,
Ҡәрҙәштәрең янына бар — айырылмағыл,

Минең янда ҡалаһың — асыҡ белгел,
Уның өсөн бер сара табам имде.

Һинең йөгөңә бер һауыт йәшерермен,
Шуны табып, һин угры, тиеп әйтермен,
Улар һорар:
— Ҡем шулайтып ҡыуандырҙы,
Йөҙҙәрең тулған айҙай балҡый имде?

Әйтер:
— Йөрәгемә шатлыҡ ҡошо ҡунды,
Халиҡтан рәхимлек ишараһы булды,
Ниһәйәт, мин моратыма бөгөн килдем,
Бына бөгөн шул билдәле булды имде.

Унан Йософ йөҙөнә пәрҙәһен япты,
Ҡәрҙәштәрен ҡәҙерләп ҡунаҡ та итте,
Үҙ ҡулы менән алдарына тәғәм илтте.
— Икешәрләп ултырығыҙ, — тиер имде.

Ҡәрҙәштәре ашамлыҡҡа ҡулын һонҙо,
Тәмле тәгәм еймәк булып ниәтләнде,
Ибне Йәмин ҡәрҙәшһеҙ мәхрүм ҡалды,
Ашамаҫ-эсмәҫ, хәсрәтләнеп илар имде.

Йософ әйтте:
— Иламағыл, ашағыҙ аш,
Туҡта инде, агыҙма күҙеңдән һис йәш,
Ҡил инде, үҙем булам һиңә ҡәрҙәш,
Әйҙә, тәғәм ейгел бергә, — тиер имде.

Ибне Йәмин шатланып бик риза булды,
Үҙ янынан Йософ уға урын бирҙе,
Иҡрам ҡылып, килгәнлеген бик хуп күрҙе,
Тәхетендә икәүләшеп ашар имде.

Ашап-эскәс, алтын һауытын килтертте,
Барыһының дөйәһенә йөк йөкләтте,
Ибне Йәмин йөгөнә һауыт йәшертте.
Икәүһенән башҡаһы һис белмәҫ имде.

Ул һауыт ҡыҙыл алтындан эшләнгән,
Гәүһәр-яҡут менән матурлап биҙәлгән,
Дүрт йөҙ мең алтын хаҡҡа баһаланған,
Шул ҡәҙәр ҡимммәтле бер хазина имде.

Хушлашып, доға ҡылып ҡуҙғалдылар,
Бер аҙ барғас, бер урында туҡтанылар,
Урын һайлап ял итергә уҡталдылар —
Арттарынан Йософ етеп тотор имде.

Йософ сәүче юлсыларҙы ҡыуып етте,
Яҡуп ялдарының барыһын да тотто:
— Һауыт урлағанһығыҙ, — тип хәбәр итте, —
Бурҙар икәнһегеҙ! — тиеп әйтер имде.

Улар әйтер:
— Валлаһилыр, беҙ алманыҡ,
Алла шаһит: урлыҡ һис ҡылманыҡ,
Электән дә ундай яман эш булманы, —
Әммә Йософ уларҙы кире борор имде.

Барыһын да Мысырға ҡайтарттылар,
Дәүләттәрен, йөктәрен аҡтарттылар,
Бөтәһенең дә йөктәрен бушаттылар,
Һауыт Ибне Йәмин йөгөнән сыҡты имде.

Йософ әйтер:
— Тоҙ-икмәк һанламанығыҙ,
Ни сәбәптән миңә хөрмәт ҡылманығыҙ?
Дүрт йөҙ алтынлыҡ һауытты урланығыҙ?
Бошоноп, үпкә һүҙҙәр әйтер имде.

Быны ишетеп, улар бик оялдылар,
Йософтоң ғәйрәтенән аҙанылар,
Һәммәһе бер-беренә ҡаранылар,
Береһе лә ни тиергә белмәй имде.

Унан улар Йософҡа яуап бирҙе:
— Был уғландың береһе лә яуыз ине,
Ул ҡәрендәше лә уның уғры ине,
Икеһенең әсәһе Рәхилә имде.

Йософҡа шундай ғәҙәт бәләкәйҙән килгән,
Бала саҡта һөт анаһы тәрбиәләгән,
Ул Йософто бигерәк тә ныҡ һөйгән,
Дүрт йәшкә тиклем янында тотор имде.

Атабыҙ Яҡуп Йософто кире һорар,
Дая ебәрмәҫкә үҙенсә хәйлә ҡорор,
Биленә ҡыҙыл алтын осҡорон аҫыр —
Һәм Яҡупка Йософто бирер имде.

Бер-ике көн үткәс, дая йәнә килде:
— Ҡыҙыл алтын аҫҡысым минең юғалды,
Әллә ул осҡорҙо Йософмо алды —
Атам Исхаҡтан ҡалған бүләк имде.

Яҡуп сәүче быны тикшерергә булды,
Йософтоң билендә икән, шуны белде,
Уны ҡайтарырға ҡарар ҡылды,
Тағы ике йылға хәтле торһон, — тине.

Бер нисә риүәйәттәрҙә ул былай.
Ашағанда, имеш, Йософ нан* йәшергән,
Йәшереп юкһылдарға уны биргән,
«Йософ — уғры» тейеүҙәре шунан имде.

Унан Йософ уларға яуап бирҙе:
— Иң тәүҙә яуыз эштәр үҙегеҙҙән, — тине,
Яҡуп сәүче һуң ни эшләп хәсрәт күрҙе,
Ҡулығыҙҙан тик яуызлыҡ килә имде.

Һеҙ түгелме атағыҙҙы илатмаған,
Алдыҡ менән һөйгән улдан яҙҙыртмаған,
Азат кешене ҡол итеп һатмаған? —
Харам ашап йәшәүсе һеҙҙер имде.

Шул сәғәттә Йософ тоғро бирҙе әмер:
— Һауытты урлаусыны тотоғоҙ хәҙер,
Шәриғәт ҡушҡанса уға хөкөм әҙер,
Ун ике йыллап зинданда тотор имде.

Улар Йософҡа ялбарып үтенде:
— Атабыҙ был улын бик һөйөр ине,
Шуға ла аманат итеп кенә бирҙе,
Уны ебәр, башҡабыҙҙы яптыр имде.

Йософ әйтте:
— Был эште ҡалдырып булмай,
Ғәҙеллектән сығып, золомлоҡ ҡылып булмай,
Ғәйеп өсөн ғәйепһеҙгә яза булмай,
Хата эйәһен алып китегеҙ имде!

Был һүҙҙәргә улар аптырашып ҡалды,
Уныһы ла бер тирәгәрәк йыйылды,
(Ысынлап та, уларҙың хәле ҡыйындыр):
— Ҡилегеҙ, нимәләр эшләйек? — тиҙәр имде.

Йәһүҙә әйтер:
— Мин бер уйҙы уйлайым:
Яҡыныраҡ барып, бик ҡаты ҡысҡырайым,
Ибне Йәминде унан сығарайым,
Һеҙ барығыҙ ҡылыс тотоп тороғоҙ имде.

Тауышымды ишетеү менән шундуҡ килең,
Шәһәрҙәге халыҡтың барсаһын да ҡырың.
Йәһүҙәнең ғәйрәтен бөтәгеҙ белең,
Ул ҡысҡырһа, һәммәләре үлер имде.

Йософ уларҙың кәңәшен алдан белде,
Ҡесе улы Мәмиләгә әмер бирҙе,
Йәһүҙәгә күрһәтеп:

— Бар ана, тине, —
Арҡаһын һыйпағыл уның, — тине имде.

Мәмилә Йәһүҙәнең янына барҙы,
Һиҙҙермәй(ен)сә эргәһендә баҫып торҙо,
Ниһәйәт, арҡаһынан ул һыпырҙы,
Йәһүҙә һис кенә быны тоймаҫ имде.

Йәһүҙәнең асыуланған сағы булһа,
Йәне көйөп, ҡысҡырырға ниәт ҡылһа,
Мәмилә уның арҡаһынан һыйпап ҡуйһа,
Үпкәһенән һауа ғына сығыр имде.

Ҡәрҙәштәре уның өнөн ишетмәне,
Ҡаты ҡысҡырырға көсө һис етмәне,
Үҙе менән нимә булған — ул белмәне,
Ҡәрҙәштәре аптырап, һорарҙар имде.

Улар әйтер:
— Ни сәбәптән ҡысҡырманың,
Ғәйрәтләнеп, шәһәр халҡын һин ҡырманың,
Һүҙебеҙҙе һин еренә еткермәнең,
Шул арала нимә булды? — тиер имде.

Йәһүҙә әйтер:
— Ошондай бер хәл булды,
Минең эргәмә генә бер уғлан килде,
Вайымһыҙ ғына яурынымдан һыйпап алды,
Тап шул саҡ минең һушым китер имде.

Ҡәрҙәштәре был хәл ишетеп, ғәжәп ҡылды:
— Быңдай хәл-әхүәлдәр нисек, ниҙән булды,
Әллә юҡһа Исраил нәҫеле бармы? —
Барыһы ла таңға ҡалып торор имде.

Уларға Йософтоң ныҡ асыуы килде:
— Хыянатсы икәнһегеҙ — шуны белдем,
Йәшергән серегеҙҙе лә белдем имде,
Ҡурҡытырға теләйһегеҙ икән имде.

Йыйынғанһығыҙ шәһәргә кермәгә,
Уйлайһығыҙ — көтмәгәндә ҡысҡырырға,
Шулай итеп, бөтә халыҡты ҡырырға —
Яуызлыҡ ниәтләйһегеҙ икән имде.

Ике тапҡыр илемә килдегеҙ һеҙ,
Беҙҙән күпме ҡәҙер-хөрмәт күрҙегеҙ һеҙ,
Һәм тоҙ-икмәк килгән һайын ейҙегеҙ һеҙ,
Яҡуп сәүченең улдары беҙ, тинегеҙ.

Асыуланып, Йософ төштө тәхетенән,
Һарайын иғтибарлап үткәрҙе күҙенән,
Һарай эсе тетрәнде ғәйрәтенән,
Мәрмәр терәктәре ауып төшөр имде.

Йософ әйтер:
— Хөрмәт итәм атағыҙҙы,
Юғиһә, һис тә ҡалдырмаҫ инем һеҙҙе,
Төрлөсә үлтертер инем барығыҙҙы, —
Ғәйрәтенән тегеләре ҡурҡыр имде.

Аҙаҡ Йософҡа улар нык ялбарҙылар,
Ниһәйәт, китергә рөхсәт тә алдылар,
Йәһүҙәнән айырылып юлландылар.
Ибне Йәмин менән ул ҡалыр имде.

### Ағаларының Ҡәнғанға ҡайтҡаны, Яҡуптың Йософҡа хат ебәргәне, Йософтоң яуап яҙғаны

Башҡалары ояла-ҡыҙара ҡайтып инде,
Яҡупҡа әхүәлдәрен һөйләп бирҙе.
— Ибне Йәминдең хәле бик мөшкөл инде,
Йәһүҙә лә уның менән ҡалыр имде.

Яҡуп нәби был эште белде асыҡ,
Ғәм-хәсрәте элеккенән булды артыҡ,
— Ибне Йәмин ҡылдымы һуң уғрылыҡ,
Ысынлап та күрҙегеҙме? — тиер имде.

Уғландары Яҡупҡа ошоно әйтте:
— Ул шаһ беҙгә ололап хөрмәт күрһәтте,
Алтын һауытын шунда уҡ юғалтты,
Ибне Йәмин йөгөнән ул сығыр имде.

Яҡуп әйтер:
— Хоҙайым, бар өмөт һеҙҙә,
Иншалла, Йософомдо күрермен ерҙә,
Өс уғланымды ла осратырмын бергә
Улдары әйтер:
— Нисек белдең имде?

Яҡуп әйтер:
— Хаҡ ҡушыуы шулай булһа,
Ҡолона даими бәлә-ҡаза килһә,
Хаҡ хөкөмөнә ҡол сабыр ризалашһа,
Михнәттән һуң рәхәт-шатлыҡ килер имде.

Ҡөрьәндә халиҡ биргән беҙгә өгөт:
Алла ярҙамынан һис өҙмәгеҙ өмөт,

Инанмағандар йөрөйҙәр кафыр булып,
Рәхмәтенән һис өмөт өҙмәйек имде.

Ғазраил[31] бер көндө килде Исраилға,
Ризалығын биреп иң тәүҙә Мәүләгә,
Һорау бирҙе, бер аҙ үткәс, Ғазраилға:
— Йософом иҫәнме? — тиеп һорар имде.

Ғазраил әйтер:
— Йософоң һинең тере,
Ҡайҙа икәнлеге лә беҙгә билдәле,
Үҙе солтан, бик күп байлык, мал әйәһе,
Бер тарафта батшалык итер имде.

Яҡуп әйтер:
— Эй Ғазраил, һин миңә әйт,
Мин меҫкенгә Йософтоң ҡайҙалығын әйт,
Ярҙамың һәм изгелегең миңә күрһәт.
Ә Ғазраил, рөхсәт юҡтыр, тиҙер имде.

Яҡуп әйтер:
— Аһ, ул рөхсәт ҡасан була,
Йософомдоң һөйөнөсө ҡасан килә?
Мәүләм миңә ярҙамын һуң ҡасан ҡыла?
Үҙе һорар, күҙенән ҡан ағыр имде:

— Йә, күңелем шатлығы, күҙем нуры,
Йә, бәғерем пәрәһы, нәфсем суры*
Ибне Йәминем — әсәһенең төҫө — улы,
Халиҡ һеҙҙе күрһәттерһен тиҙерәк имде.

Ҡурҡамын: нәүбәт менән әжәл килһә,
Мин һеҙҙәрҙән айырылһам мәңгелеккә,
Ҡауышмайса бергә, керһәм гүргә иртә, —
Шулай илай-һыҡтай хәлдән тайыр имде.

Улдары йыуатыр:
— Бөтөрөнмә бик тә,
Үҙ-үҙенде өҙгөләп, ҡайнама хәсрәттә,
Ҡауышырһығыҙ, моғайын, әхирәттә,
Донъялағы өмөтөңдө өҙгөл имде.

Яҡуп әйтер:
— Улай тип әйтмәгеҙ миңә,
Өмөтөмдө өҙмәҫмен һаман мәүләнән,
Рәхимен ҡылам тиһә, еңел бит уға,
Ҡауышырға өмөтөм бар, — тиер имде.

Һәр осраҡта ул, ҡөҙрәтле, ярҙам бирер,
Хәсрәтлегә хәсрәтлене ҡауыштырыр,

Меçкендәрҙе ҡөҙрәте менән шат ҡылыр,
Ышанғандар уға өмөтһөҙ булмаç имде.

Көндән-көн хәсрәттәр арта барҙы,
Ибне Йәмин Йәһүҙә менән унда ҡалды,
Михрабында* көн һайын сәждә ҡылды,
— Эй хоҙайым, һинән ярҙам, — тиер имде.

Әйтер:
— Әгәр ҙә ки был эш дөрөç булһа,
Мысыр хужаһы уны зинданға тыҡһа,
Йәһүҙә бар көсөнә шунда ҡыçҡырһа,
Шәмғун унын нығытмаһын ватыр имде.

Шәмғундың шул ҡәҙәре кеүәте күп,
Арыçландар туктатыр, йүгереп етер,
Ҡурҡмайынса уларҙың баштарын өҙөп,
Кәүҙәләрен пыран-заран итер имде.

Улдары әйтте:
— Беҙ ҙә шулайта инек,
Әммә ләкин үҙебеҙҙән көслө күрҙек,
Шунлыҡтандыр, күмәкләшеп беҙ баш бирҙек,
Һис ҡаршылыҡ күрһәтмәнек, — тиҙәр имде.

Исраил ҡыҙы Динәгә әмер бирҙе:
Динәһе ҡағыҙ-ҡәләмен алып килде,
Шәмғунды саҡырып, атаһы бойорҙо:
— Шәмғун, хәҙер хат яҙырһың, — тиер имде. —

Иң-иң элек, бисмилланы, Шәмғул, яҙғыл,
Унан инде Исраилды телгә алғыл,
Мысыр хужаһына мотлаҡ сәләм яҙғыл,
Хәле ауыр, көсө лә бөткән, тиеп имде.

Эй ғәзизем, ҡабул ҡылғыл, маҡтау һинә,
Күҙенде һал был мәктүбтең хужаһына,
Беҙгә күпләп килгән ине рәнйеү-яфа,
Әллә ҡасандан михнәткә тарыныҡ имде.

Дәдәм минең Ибраһим, дуçы алланың,
Нәмруд яһил тотор бәргән утҡа уны,
Ут эсендә лә уны алла һаҡланы,
Утты баҡсаға әүерелдергән имде.

Унан алла Ибраһимға бирҙе әмер:
— Йә, Ибраһим, буйһонаһың минә хәҙер,
Исмәғил улыңды килтер, булһын әҙер,
Минең өсөн уны ҡорбан итең имде.

Мин — Яҡуп та — шуларға ҡаным тартҡан,
Бер улым бар ине элек, бик яратҡан,
Мин инде шул бисара — улын юғалтҡан —
Ҡайғыларҙан тамам зәғифләндем имде.

Ошо хәсрәттәрҙән һаман бәғерем яна,
Күҙҙәремдән ҡанлы йәштәр һыуҙай аға:
«Аһ!» — тип әйтһәм, күкрәгемдән төтөн сыға,
Тотошлай йөрәгемә ҡан һауған имде.

Етмеш йылдар, Йософом, тип илауыма,
Шул ғазаптан йөрәгем тулауына,
Өмөтләнәм алла мине аңлауына,
Йософом менән ҡауыштыр, — тиер имде. —

Күп илауҙан ике күҙем күрмәҫ булды,
Күкрәк янды, бәғерем көйҙө, көсө һынды,
Ибне Йәмин унда ни насар эш ҡылды,
Ни сәбәптән уны әсир иттең имде?

Пәйғәмбәрҙәр һис кеше малына теймәҫ,
Билдәле ки, яҙыҡ эштәргә лә бармаҫ,
Улдары ла уғрылыҡ юлына баҫмаҫ,
Ибне Йәмин нахаҡҡа ғәйепләнгән имде.

Бынан элек хаҡ күрһәттә яҡшылығын,
Ҡәмемәһен ул сифаты, һаман артһын,
Улыма тик килтермәһен яуызлығын,
Уны кире ҡайтарһын, — тип һорар имде. —

Интектермәгеҙ мине, бик ғазапланам,
Юғиһә, мин хәсрәтемдән доға ҡылам,
Нәҫелең менән михнәт эстәрендә ҡалһаң?..
Мәзлүмдәрҙең доғаһынан ҡурҡ һин имде.

Ул гәзиздең йомошона йүгерҙеләр,
Оҙаҡламай Мысырға ла еткерҙеләр,
Уғландары ул бетеүҙе килтерҙеләр,
Ер үбеп, Йософҡа хат һонорҙар имде.

Ғәзиз Йософ ҡулына хат алды, күрҙе,
Асмаҫ элек үбеп йөҙөнә тигеҙҙе,
Унан һуң тегеләргә һорау бирҙе:
— Нишләп былай ҡыландым, әйтегеҙ имде?

Йософ әйтер:
— Һәр бер солтан ғәҙел булһа,
Изгеләрҙән уға берәй хәбәр килһә,
Хатты тотоу менән йөҙөнә тейгеҙһә,
Шулай тейеш, шулай кәрәк булыр имде.

Алыу менән Йософ хатты сыкты укып,
Инде уға бар әхүәлдәр булды асык,
Ғазаптарҙан бәғере ҡайнаны ташып,
Япма аҫтында йәшеренеп илар имде.

Ябраил шул ваҡыт килеп етте,
Ебәргән ине Йософҡа халиҡ үҙе:
— Йә, Йософ, тиҙ генә яҙ сәләм һүҙен,
Тиҙерәк хатты Яҡупҡа ебәр имде.

Унан Йософ яуап бирҙе Исраилға:
— Килешерме ундай эш тәңрегә?
Ҡол гел шөкөр ҡылырға тейеш мәүләгә —
Хоҙай хөкөмөнә бағыу кәрәк имде.

Йә, Исраил, әҙерәк яңылышҡанһың,
Мәүлә ыҙа ебәргәнен ят ҡылғанһың,
Һуңынан рәхәт бирәсәген онотканһың,
Хаҡ ни кушһа, ҡол үтәргә тейеш имде.

Ул хәлилгә утты бакса ҡылдырганың,
Исмәғил өсөн ҡорбан — ҡуй салдырғаның,
Эргәндә ун бер улыңды ҡалдырғаның,
Нишләп уларын яҙманың? — тиер имде.

Уландары яуап хатын килтерҙеләр,
Шунда ук Исраилга ла еткерҙеләр,
Яуап хатын барыһы ла хуп күрҙеләр,
— Был — пәйғәмбәр һүҙе, — тиерҙәр имде.

Бәс, Яҡуп ҡаты бойорҙо уғландарға,
— Кире барығыҙ, ашығығыҙ һеҙ Мысырға,
Өмөтөмдө өҙмәй ялбарам аллаға:
Ибне Йәмин Йософ менән булыр имде.

## Ағаларының кире Мысырға килгәне, Йософто таныған, Яҡупҡа сәләм алып ҡайтҡаны

Бәс, улар Мысырға кире килде,
Яҡуптан Йософҡа сәләм күндерҙе:
— Падишаһ, хәлебеҙ бик мөшкөлләнде,
Беҙҙе тот, Ибне Йәминде сығар имде.

Йософһоҙ ҡайтмаҫка ҡушты атабыҙ беҙгә,
Шуга ла бик мохтаж булып килдек һеҙгә,
Уның хәсрәте үтте бәғеребеҙгә. —
Хатты укып, Йософ уны белер имде.

Тәхетенән шунда Йософ төштө ергә,
Ҡәрҙәштәре менән ултырҙы ул бергә,
Бер яҙыу уларға һондо:
— Мәгеҙ, һеҙгә,
Уҡып ҡарағыҙ, — тип бойорор имде.

Улар Йософ ҡулынан ҡағыҙҙы алды,
Һәр береһе ҡағыҙға күҙен һалды,
Хәүеф менән бер-беренә ҡараны:
— Үҙебеҙҙең йәшерен эш, — тиерҙәр имде.

Йософ әйтер:
— Быны һис кем уҡый алмаҫ,
Был шәһәрҙә быны һис кем дә аңламаҫ,
Уҡыһа ла, һис кем мәғәнәһен аңғармаҫ,
Был хат һеҙҙең телдә яҙылғандыр имде.

Улар әйтте:
— Беҙ ҙә быны аңламайбыҙ,
Уҡып та, мәғәнәһен әйтә алмайбыҙ,
Хатта бер яҡшы һүҙ ҙә таба алмайбыҙ,
Насар мәғәнәле хат, — тиҙәр имде.

Яҙыуҙы элек үҙҙәре яҙған ине,
«Йософ — ҡол» тип һатҡан саҡтары ине,
«Өс төрлө ғәйебе бар» тигәндәр ине,
«Һатып алыусыға» тип яҙғандар ине.

Ошо хат Йософ ҡулына кергән ине,
Уны Йософ юғалтмайса һаҡлай ине,
Ебәктәр араһына һалып ҡуйған ине,
Яҙыуҙы улар өсөн тип һаҡлай ине.

Йософ әйтер:
— Бер ҡол һатыла, тигәнһегеҙ,
Ҡолобоҙҙоң өс ғәйебе бар, тигәнһегеҙ,
Шул шарт менән яҙыуҙы яҙғанһығыҙ. —
Улар:
— Беҙ яҙманыҡ, — тип баш тартыр имде.

Йософ әйтер:
— Бер һауыт-саҡ* килтерегеҙ,
Ул сыңғырап ни әйтер, шуны тыңлағыҙ,
Ни тиһә, шуға һеҙ инанығыҙ. —
Ағалары шундуҡ риза булды имде.

Йософ бойорғас та саҡ* килтерҙеләр,
Ҡыҙыл алтын тәңкә менән саҡҡа бәрҙеләр,
Ҡөҙрәт менән тауыш биргәнен белделәр:
Уларҙың барлыҡ ҡылғанын һөйләр имде.

Йософ әйтте:
— Хәҙер инде инандығыҙмы,
Саҡтың ни тигәнен тыңланығыҙмы,
Йософто нишләттегеҙ — иҫләнегеҙме?
(Сараһыҙҙан тегеләр дөрөҫләр имде.)

Ул ваҡыт бит Йософто алдағанһығыҙ,
Ҡырҙа йөрөргә тиеп саҡырғанһығыҙ,
Үҙегеҙ үлтерергә уйлағанһығыҙ,
Тик Йәһүҙә быға ҡаршы булған имде.

Һөйгән улын Яҡуптан айырғанһығыҙ,
Айырылыу ғазабында яндырғанһығыҙ,
Хәҙер килеп, минең алда маҡтанаһығыҙ:
— Беҙ — аҫылдар, шәрифтәр! — тиһегеҙ
имде.

Һеҙҙең берәр ҡулығыҙҙы киҫтерермен,
Барығыҙҙы муйынынан аҫтырырмын,
Терeләй тирегеҙҙе тунатырмын,
Йософҡа күрһәткәндәрегеҙ өсөн имде.

Бойорҙо:
— Бәйләгеҙ күҙҙәрен, — тине, —
Алтын ағас ботаҡтарынса аҫығыҙ, — тине.
Ҡәрҙәштәре ҡысҡырып иларҙар инде,
Йософҡа инәлеп-ялбарырҙар имде.

Әйтерҙәр:
— Һин беҙҙе, олуғ мәлик, азат ит,
Атабыҙ Исраил хаҡына хөрмәт ит,
Зинһар, бер меҫкен Яҡупҡа күрһәт шәфҡәт.
Үҙебеҙҙең ғәйепте таныныҡ имде.

Ул меҫкен беребеҙҙе юғалтты инде,
Ҡайғы ике күҙен һуҡырайтты инде.
Уны ишетеп, Йософ үҙе лә ғазапланды инде,
Барыһының ҡулдарын систерер имде.

Был хәлдәрҙән Йософтоң сабыры шашты,
Түҙмәне, йөҙөнән пәрҙәһен асты,
Тегеләрҙең барыһының күҙен систе,
Йософто күреп, ниҙер һиҙенделәр имде.

— Йософҡа һин бигерәк тә оҡшағанһың,
Йософ булһаң, ниңә беҙҙе ят күрәһең?
Әллә, ысынлап та, Йософмо икәнһең...
Валлаһи, Йософһоң бит! — тиерҙәр имде.

Йософ әйтер:
— Булһын барығыҙға асыҡ:

Мин — һеҙҙең ҡарындашығыҙ Йософ
ситдыҡ,
Бирҙе батшалыҡты миңә изге Халиҡ.
Мин — Йософ, һеҙ — туғандарым, — тиер
имде.

Быны ишетеп, барыһы һығылып төштө,
Үкенеүҙән барыһының аҡылы шашты,
Мысыр халҡына шунда уҡ барып етте,
Ошоға улар ғәжәпкә ҡалыр имде.

Йософ әйтер:
— Ҡалҡытығыҙ башығыҙҙы,
Бағышланым бөтә боҙоҡ эшегеҙҙе,
Һис ҡайғырмағыҙ, ғәфү итәмен һеҙҙе,
Кисерҙем ғәйебегеҙҙе, — тиер имде.

Ағалары баштарын күтәрҙеләр,
Һәр береһе Йософҡа ҡул бирҙеләр,
Бөтәһе лә, хәсрәтләнеп, йәш ҡойҙолар,
Быны күреп, фәрештәләр илар имде.

Йософ әйтер:
— Инде шулай тәртип ҡылам,
Күлдәгемде атабыҙға биреп ебәрәм,
Ул меҫкенде шулай итеп һөйөндөрәм,
Хатағыҙҙы ул ярлыҡаһын, — тиер имде.

Ни хәлдәр был, үҙе бер һүҙен дә әйтмәҫ,
Хатта бер-ике һүҙ ҙә яҙып тоттормаҫ,
Бүтән бер нәмә лә ебәрергә уйламаҫ —
— Ошо күлдәкте алығыҙ, — тиер имде.

Ҡойола Йософ яланғас ҡалған ине,
Хаҡ әмере менән Ябраил килгән ине,
Ул күлдәкте ожмахтан килтергән ине,
Килтереп Йософҡа кейҙергән ине.

Аны кейҙе лә ҡотолдо мәхрүмлектән,
Ул күлдәк бүләк булды инде Халиҡтан,
Ярҙам булды Йософҡа, һаҡланы һыуыҡтан.
Ошоға ишаралап ебәрер имде.

Анаһы үлгәс, Йософ етем ҡалды.
Якуп нәби бер ҡараусы һатып алды,
Уны Йософона һөт инәһе ҡылды,
Шул ҡатындың үҙ балаһын һатып имде.

Шул тиклем нык ҡайғырҙы ошо ҡатын,
Көнө-төнө тыя алмайынса күҙенең йәшен,

— Илаһым, хәлемә инеп, ярҙам итең,
Һөйөклөмдән айырҙы бит Яҡуп нәби.

Халиҡ әйтер:
— Бер хөкөмөмдө бирермен,
Уны ла һөйөклөһөнән айырырмын,
Айырып улынан, бәғ(е)рен яндырырмын,
Етмеш йыл илатырмын тамам имде.

Әүүәл һине улың менән ҡауыштырам,
Унан һуң Йософ менән осраштырам,
Ҡөҙрәтлемен, һүҙемде тормошҡа ашырам,
Минең вәғәҙәм үтәлмәйсә ҡалмаҫ имде.

Йософ бер ҡол һатып алды — Бәшир атлы,
(Был һүҙҙәрем тыңлау өсөн бик тә татлы)
Ҡоло иһә миһырбанлы, шәфәғәтле,
Һәр бер эште теләк менән үтәр имде.

Үҙ ҡулдәген Йософ шул Бәширгә һондо,
Йәнә бетеү яҙып ҡулына тотторҙо,
Бәшир, ҡулдәкте алып, сәфәргә йыйынды,
Йософтан Яҡупҡа барыр кәрәк имде.

Таң еле халиҡҡа ҡайғы-зар еткерҙе,
Ҡөҙрәте менән уга хаҡ рөхсәт бирҙе,
Бәширҙән ун ике көн алдараҡ килде,
Йософ еҫен Яҡупка еткерер имде.

Быны тойоп, Яҡуп нәби шөкөр ҡылды,
Хәсрәттәрҙән арынды, бик шат булды,
Әйтер:
— Минең Йософомдоң еҫе килде,
Таң елдәре килтерҙе, — тип әйтер имде:

— Әкрен генә иҫ, таң еле, ни иҫәһең,
Йософомдоң еҫен миңә килтерәһең,
Йәрәхәтте уңалтырға ярҙам итәһең,
Һин туктама, иҫ, мине шатландыр имде.

Ҡыуандырҙы, ҡарт кешене, әй таң еле,
Йософ еҫе туктамаһын, һин иҫ әле!
Уны тойҙом, күңелем рәхәтләнә әле,
Төп сәбәпсеһе — Йософом, — тип әйтер
имде.

Яҡуптың кешеләре тыңланылар,
Ҙур ғәйбәт итеп һөйләнеләр:
— Ҡайҙа, ҡайҙа Йософоң, — тип һоранылар,
Ҡуптәнге һаташыуы, тиерҙәр имде.

Унан аҙаҡ ун биш көндән Бәшир килде,
Бер ҡатынкай ҡойола кер йыуа ине,
Эргәһенә ҡабаланып Бәшир килде,
— Яҡуп өйө ҡайҙа икән? — тиер имде.

Ҡатын әйтер:
— Ниңә Яҡупты һорайһың?
Ниңә улай ашығаһың, кем булаһың?
Әллә Йософ өсөнмө ҡабаланаһың...
Яҡшы хәбәр килтергәнһең — күрәм имде.

Яҡуп нәби мине һатып алған ине,
Йософона дая итеп ҡуйған ине,
Бәшир атлы кескәй улымды һатҡан ине,
Етмеш йыл ҡайғы-хәсрәт кисерәм имде.

Халиҡ үҙе миңә вәғәҙә ҡылған ине,
Башлап һине һөйөндөрәм, тигән ине...
Йософтоң яҡшы хәбәре килде инде,
Ҡайҙа минең Бәширем? — тип илар имде.

Бәшир әйтер:
— Әй ана, һин һис илама,
Хәсрәт утында йөрәгеңде яндырма,
Хаҡ вәғәҙәһе үтәлмәй тип ҡайғырма,
Хәҡикәт, улың Бәшир — мин булам имде.

Меҫкен Бәширҙең михнәт-хәсрәттә башы,
Үҙенән-үҙе ағалыр күҙенән йәше,
Хәсрәтенән туҡтамаҫ күҙенән йәше,
Бөртөк-бөртөк күҙенән йәш ағыр имде.

Быны ишетеп, бисара шашып ҡалды,
Меҫкен ҡатын иҫен юйып ергә ауҙы,
Аңы ҡайтҡас, улына ҡулын һуҙҙы,
Берәйһе күрһә, ғәжәпкә ҡалыр имде.

Икәүләп Яҡуптың өйөнә керҙеләр,
Һөйөнөстән ҡатын ни эшләргә белмәй,
Сәләм әйткәс тә Бәшир күлдәкте биргәй...
Йөҙөн һөрттө — ике күҙе күрер имде.

Күҙен асты ла Исраил, күрҙе уны,
— Һин кем һуң, ниндәй кешеһең? — тип
һораны,
Бәшир әйтте:
— Әүүәл мине һатҡан инең,
Айырып ғәзиз анамдан, — тиер имде.

Аҙаҡ Яҡуп уҡыны ебәргән хатын,
Ҡайҙа икәнлеген белде ул Йософтоң,
Йософтоң Мысыр батшаһы булғанлығын,
Шөкөр итеп хаҡҡа сәждә ҡылыр имде.

### Яҡуп менән Йософтоң ҡауышҡаны

Аҙаҡ Йософ ҡәрҙәштәрен кейендерҙе,
Алтын-көмөшкә ат, ҡасыр ҡушып бирҙе,
Атаһын да килтерергә рөхсәт бирҙе:
— Бөтә нәҫел-нәсәбе килһен! — тиер имде.

Ағалары атаһы менән ҡауыштылар,
Барыһы ла ҡайғырып күрештеләр:
— Хаталанғанбыҙ икән, — тип илаштылар,
Ҡисерә күр гонаһыбыҙҙы, — тиҙәр имде. —

Алдаҡ менән Йософто һинән алдыҡ,
Ҡол итеп ҡайһы йыраҡ илгә һаттыҡ!
Бөгөн килеп уның солтан икәнен белдек,
Бөтә Мысыр халҡы уның ҡоло имде.

Яҡуп әйтер:
— Яҙыҡтарҙы бағышланым,
Хәҡиҡәт, хатағыҙҙы ғәфү ҡылдым,
Үҙем иһә халиҡтан рәхәтлек алдым,
Һеҙгә лә шулай булһын, — тиер имде.

Бер дөйә алып килде тағы Ябраил,
Дөйәне ебәргән икән мәүлә-йәлил,
— Йә, Ябраил, ашыҡ, йомошто үтәгел,
Тиҙ генә Йософ менән ҡауыштыр имде.

Ярҙам менән ул дөйәгә Яҡуп менде,
Олоһо-кесеһе Ҡәнғандан алыҫ ҡалды,
Етмеш өс мең кешеһе менән юл алды,
Уғландары туҡтауһыҙ иларҙар имде.

Яҡуп, ҡулын күтәреп, доға уҡыны,
Уландары да бергәләп «амин» тине,
Тәңре алдында доғалары ҡабул булды,
Улдары һаман да ҡайғырырҙар имде.

Ғәзиз Йософ бар ғәскәрен теҙеп ҡуйҙы,
Атаһын ҡаршыларға үҙе барҙы,
Борғо, нәғәрә тауыштары яңғырап торҙо,
Бәйге аттары ярһып кешнәр имде.

Яҡуп сәүче быны күреп шөкөр ҡылды,
Йософ, атынан төшөп, йәйәү килде,
Атаһы ла дөйәһенән төшөп килде,
Ата-уғыл илашып күрешер имде.

Килделәр туғандары, ун бер ҡәрҙәше...
Хоҙай ҡөҙрәтендә бөтә әҙәм эше,

Тормошҡа шулай ашты Йософтоң төшө,
Бөтәһе лә Йософ хеҙмәтендә ҡалыр имде.

Йософ әйтте:
— Юҡҡа сыҡты шайтан көсө,
Ҡәрҙәштәрем менән осраштырҙы изге,
Бөгөнгө көн Мысыр батшаһымын үҙем,
Шөкөр ҡылып шәһәргә керерҙәр имде.

Ҡилделәр унда Йософтоң угландары,
Яҡуп һорашты Йософтан уларҙы,
Йософ әйтте:
— Барыһы ла ейәндәрең
Зөләйханан тыуғандар, — тип әйтер имде.

Бәс, Зөләйха Яҡупҡа яҡын килде,
Хәл-әхүәлдәрен бабаһынын белде,
Яҡуп нәби Зөләйхаға доға ҡылды,
Аҙаҡ Йософтан Зөләйха һорар имде:

— Рөхсәт итһәң, ҡунаҡларым Исраилды,
Һарайыма саҡырайым ул рәсүлде?
Йософ әйтер:
— Йә, Зөләйха, һин бел инде:
Пәйғәмбәрҙәр ҙур һарайға бармаҫ имде.

Зөләйха бер бәләкәй һарай һалдырҙы,
Төрлө-төрлө тәмле ниғмәттәр алдырҙы,
Яҡупты өндәне — ул килде һәм күрҙе,
— Нисек һуң былай һалдырҙың? — тиер
имде. —

Был өйҙө миңә лайыҡ төҙөткәнһең,
Минең күңел теләгәнсә эшләткәнһең,
Ҡәнғандағы өйөбөҙгә оҡшатҡанһың...
Зөләйха:
— Йософ бойорҙо, — тиер имде.

Яҡупты барыһы түргә саҡырҙылар,
Зөләйха һарайына инеп ултырҙылар,
Төрлө-төрлө ниғмәттәр алдылар,
Яҡуп, уны күргәс, ғәжәпкә ҡалыр имде.

Яҡуп әйтер:
— Йөҙ егерме йәшем тулды,
Ғибәҙәттәр ҡылыу бөтә эшем булды,
Ашағаным гел арпа икмәге булды,
Пәйғәмбәрҙәр быңдай аштар еймәҫ имде.

* * *

Раян әйтер Йософҡа:
— Әй һин, Йософ,
Яҡупты беҙҙең һарайға алып килсе,
Миндәге ҡатын-ҡыҙҙар ҙа йөҙөн күрһен,
Уның менән дә әңгәмә ҡорһон имде.

Йософ әйтер:
— Раян мине бик ҙурланы,
Зиндандан сығарҙы, мәмләкәтен бирҙе,
Әй атам, уны барып күрәйек, — тине.
Яҡуп әйтер:
— Һүҙендә хата бар һинең имде.

Һис тә бурыслы түгелһең һин Раянға,
Һине бөтә халыҡ сығарҙы ул зиндандан,
Кешеләргә ярҙам килә ул собхандан,
Һин тик бары уға бурыслыһың имде.

Йософтоң һүҙен тыңлап, Яҡуп эйәрҙе,
Раян йөҙөндә тылсымлы нурҙы күрҙе.
— Нисә йәштәһең һун? — тип һорауын бирҙе,
Яҡуп әйтте:
— Йәшем йөҙ егерме имде.

Хәррәмдәге* ҡатын әйтте:
— Артыҡ, —
тине,
Яҡуп сәүче һүҙенә ышанманы,
Шул мәлдә Яҡуп нәби доға ҡылды...
Ҡукрәгенә эйәге һалыныр имде.

Мәлик Раян Йософтан йәнә һораны:
— Ҡатындың эйәге ниңә һалынды?
Йософ әйтер:
— Пәйғәмбәргә инанманы,
Шуга ла ул шул хәлгә төшөр имде.

Унан аҙаҡ Раян Яҡупҡа ялбарҙы:
— Ул меҫкен ҡатын бик оло йәштә ине,
Һүҙен алып, кире һеҙҙең дингә керҙе,
Уға изге доғаларыңды ҡыл имде.

Һинең дәдәң — Ибраһимдыр, хаҡтың дуҫы,
Атаң һинең — Исхаҡ сәүче, дин табибы,
Һеҙ үҙегеҙ ҙә халиҡтың Исраилы,
Һүҙең һинең ялған булмаҫ, — тиер имде.

Яҡуп сәүче, ҡул күтәреп, доға ҡылды,
Ҡатындың эйәге әүәлгесә булды,

Үҙенең яңылышҡанын ҡатын белде;
— Һине Исхаҡ икәнһең тип торам имде.

Ҡатын Яҡуптың кем икәнен һораны,
Яҡуп бөтә хәлдәрен уға һөйләне.
Халиҡ фарманы менән ҡарсыҡ үлде,
Бөтәһе был хәлгә ғәжәпләнер имде.

Һуңғараҡ Исраил тағы хәбәр бирҙе,
Яҡуп сәүче менән Йософ яҡын килде,
Бойорҙо йыуҙырырға, кәфенлеген һалды...
Үҙ ҡулдары менән ерләнеләр имде.

### Яҡуп нәбиҙең вафат булғаны

Яҡуп нәби Мысырҙа тап ҡырҡ йыл торҙо,
Бер көн килеп, Ябраил хәбәр бирҙе,
Исраил хаҡтың сәләмен еткерҙе:
Әмер килгән Мысырҙан китергә имде.

Яҡупҡа китеү ваҡыты мәғлүм булды,
Йософто, саҡыртып алып, иғлан ҡылды,
Йософ, быны ишетеп, ҡайғыға ҡалды,
Яҡуп иһә һаубуллашып китер имде.

Бәс, Яҡуп Йософто оҙаҡ өгөтләне;
— Кәңәшемде тот һин, — тип димләне, —
Һин үҙең дә Мысырҙы ташлап кит, — тине, —
Мөъминдәр мәкәме Мәккә түгел имде.

Яҡуп нәби Ҡәнғанға табан юл алды,
Ғәзиз Йософ илай-илай тороп ҡалды,
Вәзир, хеҙмәтселәренә хәбәр һалды:
— Яҡуп сәүче беҙҙе ташлап китер имде.

Ата-бабалар еренә Яҡуп ҡайтты,
Бик күп түгел, бер көн шул урында ятты,
Бөйөк Халиҡ фәрештәләренә ҡушты
Улар килеп, бер гүр ҡаҙып китер имде.

Яҡуп сәүче инде барыһын аңланы,
Васыят өсөн улandарын йыйып алды,
Уландарының һәммәһен дә барланы,
Донъялыҡта татыулыҡ теләр имде.

Яҡуп нәби сәләм биреп, хәл һорашты,
Фәрештәләр беренә-бере ҡараштьы:
— Тәңребеҙ дуҫына әжәл яҡынлашты,
Уның өсөн ҡаҙып йөрөйбеҙ ҙә имде.

Фәрештәләр гүрҙе ҡаҙып әҙерләнеләр,
Еҫле май һибеп, ебәктәр түшәнеләр,
Гүр эсен матур итеп биҙәнеләр,
Яҡуп унда керергә бик теләр имде.

Фәрештәләр әйтер:
— Әгәр керер булһаң,
Ысынлап та, был урынды һөйөр булһаң,
Шунда рәхәткә ирешергә уйлаһаң,
Исраил, ошо шәрбәтте эскел имде.

Яҡуп сәүче ҡулына һауытты тотто,
— Бисмилла! — тиеп шәрбәтте бер аҙ йотто —
Айырылды тәненән ғәзиз йәне, үтте,
Ҡош кеүек ожмахҡа ҡарап осор имде.

Фәрештәләр шул уҡ сәғәт йыуындырҙы,
Ожмахтан буҙ килтереп кейендерҙе,
Аҙаҡтан яҡындарына хәбәр бирҙе,
Бөтәһе лә күмәкләшеп илар имде.

Улдары бергә йыназаға йыйылды,
Фәрештәләр уға оҙаҡ намаҙ ҡылды,
Ул урында хәҙер дүртенсе гүр булды,
Хәлил, Сара, Исхаҡ, Яҡуп шунда имде.

Яҡуптың Ҡәнғандағы уландары,
Йософҡа ебәрҙеләр был хәбәрҙе,
Йософ, ишетеп был турала, бик ҡайғырҙы,
Хәсрәтләнеп күҙ йәштәрен ҡойор имде.

Йософ ишетте атаһының вафатын,
Уҡыны «Рабби ҡәд атайтани» аятын.
«Минә-л-мөлки вә ғәлләмтәни, — тине, —
Мин тәъвили илә хәдиси», — тиер имде.

Ҡем һәм ҡасан ғына барһа ла Йософҡа, —
Һөйләйҙер Яҡуп сәүченең вафатын.
Тәүәффани мосолман, тип ул дәм тиҙәр,
Вә әлхикни бис-салихин, тиер имде.

**Йософ пәйғәмбәрҙең вафат булғаны**

Ябраил Йософ янына тағы килде:
— Йософ, һиңе Халиҡ сәләм күндерҙе,
Хәҡиҡәт, алтмыш йыл ғүмерең ҡалды,
Шуға лайыҡ кәрәк-яраҡ әҙерлә имде.

Мысыр халыҡтарына ҡыл һин өгөт,
Ислам юлына баҫтыр, киҫ боҙоҡлоҡ,

Һин — үҙең пәйғәмбәрһең, был — хәҡиҡәт,
Кафырҙарҙы ислам юлына төшөр имде.

Йософ Мысыр халыҡтарын өгөтләне,
Күбеһе был эште бик хуп күрмәне,
Мәлик Раян да хатта өнәмәне;
— Беҙҙе исламға өгөтләй! — тиер имде.

Мәлик Раян Йософҡа кәңәш бирҙе:
— Мысыр халҡы һине һаман һөйә, — тине, —
Әммә исламға риза булмаҫтар, — тине, —
Быларҙы һин өндәмәгел, ҡуйғыл имде.

Йософ әйтте:
— Эй мәлик Раян, үҙең аңла,
Өгөтләргә әмер бирҙе миңә алла,
Шул әмерҙе генә мин ҡылдым бәйән,
Уның әмере үтәлергә тейеш имде.

Шулай булгас, өгөтләмәй тора алмайым,
Юғиһә, мин Мысырҙа ҡала алмайым,
Кафырҙар күршеһе була алмайым,
Кафырҙан айырым тороу кәрәк имде.

Йософ нәби мөъминдәрҙе бергә йыйҙы,
Бер хуш ергә Нәһрел-гойун* тип ат бирҙе,
Мысырҙан күсеп китеп, унда барҙы,
Бер шәһәрстан* төҙөй башлар имде.

Ғәзиз Йософ унда байлыҡ, муллыҡ тапты,
Ул шәһәргә төрлө ашамлыҡтар аҡты,
Юҡ урын көфөрлөккә, яуызлыҡ ҡасты,
Шәһәр эсендә именлек, татыулыҡ имде.

Раян ишетеп, ул шәһәрҙе ғәжәп ҡылды,
Шундуҡ шәһәргә барырға ла йыйынды,
Алдан Йософтан рөхсәт алырға булды,
Йософ әйтте:
— Бында кафыр инмәҫ имде.

Раян, быны ишеткәс тә, мөьмин булды,
Әммә ләкин тәҡдире башҡаса ҡылды,
Шәһәргә инеп тә етмәҫтән Раян үлде...
Ҡайһы берҙәр риүәйәт сығарыр имде.

Әйтерҙәр:
— Ҡайһылай оҙон ғүмер һөрҙө,
Йөҙ дүндерҙе, кафырлыҡҡа йәнә керҙе,
Ул арала Муса[32] сәүче килеп керҙе
«Ысын фирғәүен» тип йөрөтөрҙәр имде.

Ҡайһылары әйтер:
— Улы мәғсийәт[3] ҡылды,
Ике йөҙ йыл Мысырҙа мәлик булды,
Ул тағиҙың* улы фирғәүен ләгин булды,
«Мәғсийәт уғлы» ни тиерҙәр имде.

* * *

Йософ нәби шәһәрендә оҙаҡ торҙо,
Бер көн әжәл киләсәге мәғлүм булды,
Шунан, уғландарын йыйып, өгөт бирҙе,
Иманығыҙҙы һаҡлағыҙ, тиер имде.

Күп тә үтмәй Зөләйха ла вафат булды,
Йософ нәби ҡайғыһынан тамам бөлдө,
Башҡа өйләнмәне, яңғыҙ ғүмер һөрҙө,
Уғландары менән бергә йәшәр имде.

Унан инде Йософҡа нәүбәт килде,
Улдары, яҡындарынан айырылды,
Халиҡ менән ҡауышырға тип юл алды,
Халиҡ уға рәхмәтен яуҙырыр имде.

Бала-саға, яҡындары аһ орҙолар,
Кәфен тегеп бөтөргәс, намаҙ ҡылдылар,
Ул изгенең табутын әҙерләнеләр,
Бер хуш урынға уны күмерҙәр имде.

Ул тарафтарҙа мул булды төрлө ниғмәт,
Әҙәмигә, хайуандарға булды рәхәт...
Әммә Мысырҙа ҡытлыҡ. Был ни ғәжәп?
Халыҡтары бик ыҙалай, бөлә имде.

Мөсәлимгә Раян бер кеше ебәртте,
Йософ сәүче табутын бер аҙға һоратты,
Мөсәлимде был үтенес аптыратты:
«Мин атамды нисек бирәм?» — тиер имде.

Мөсәлимгә был хәбәр ауыр булды,
Шул сәғәттә ғәскәре әҙер торҙо,
Уның менән һуғышырға ҡарар ҡылды,
Һуғышманы, яҙмышына буйһонор имде.

Һуңынан араларында солох ҡорҙо,
Туғандары Мөсәлимгә өгөт бирҙе:
— Мәлик Раяндан атаң күп хөрмәт күрҙе,
Һуғышма, теләгенә ирештер имде.

Йософ сәүче табутын Раян алды,
Мысырҙың эргәһенәрәк дәфен ҡылды,

Шунан һуң унда рәхәтлек, киңлек булды,
Ә бында иһә кытлык-тарлык булыр имде.

Мөҫәлимгә Раян яҡшылыҡ күрһәтте,
Алып, һыу эсенә ҡуйҙырҙы табутты,
Мысыр эсенә уңыш, муллыҡ урынлашты,
Ике тарафта ла уңыш артыр имде.

Йософ нәби һыу эсендә ҡырҡ йыл торҙо,
Муса кәлимулла[34] ла Мысырға килде.
Кәлименә бөйөк халиҡ әмер бирҙе:
— Йософомдо һыу эсенән сығар имде!

Муса Йософ табутын эҙләп ҡараны,
Таба алманы. Бер ҡатынға осраны,
Йософ нәби табутын ул таба алды,
Муса аҙаҡ һыу эсенән сығарыр имде.

Ҡасан Йософ табутының ҡайҙалығын күрҙе,
Муса кәлим һыу эсенән дә сығарҙы,
Халиҡ үҙе Мусаға рөхсәт бирҙе,
Муса Йософ табутын алып килер имде.

Килде, Яҡуп табутына нәҙер ҡылды,
Ҡапҡасын төшөрөп, эргәһендә торҙо,
Унда бағып, күп ғәжәп нәмә күрҙе,
Пайҡы хәҙрәт[35] унда шундуҡ килер имде.

Муса сәүче шулай табутты табып алды,
Һәр беренә айырым-айырым һөйләп торҙо,
Йософ сәүче киссаһын һөйләп бирҙе,
Ҡыҙыл алтын менән яҙып та ҡуйыр имде.

## Хәтимә*

*Бәс, ҡупты ғәләм, шунда ҡуҙғалды бидғәт[36]*
*Кафырҙары ислам таба ҡылды дәғүәт.*
*Әмер бирлә доға ҡылды пайҡы хәҙрәт:*
*— Ҡисса яҡшылығы тынысландырыр имде.*

*Бөгөн кис менән йәһүттәр мәжмүғ булды,**
*Сәләм улы Ғабдулла янына килде,*
*Ҡайһылары Мостафаға сәләм ҡылды,*
*Бик күп мәсьәләләр һорар имде:*

*— Әгәр һин мотлаҡ рәсүл булырға теләһәң,*
*Рисаләт дәғүәләшергә уйлаһаң,*
*Йософ сәүче ҡиссаһын белә ҡалһаң,*
*Белгәнеңде беҙгә лә һөйлә имде.*

*Рәсүл әйтте:*
*— Йә, йәһүттәр, ултырығыҙ,*
*Йәһүтлекте күңелегеҙҙән сығарығыҙ,*
*Йомшаҡ телдән таҙа иман күрерһегеҙ,*
*Һуңынан әхүәлдәрҙе һөйләрмен имде.*

*Бәс, оло мәғәнә һалып, хәбәр асты,*
*Ишетеп, йәһүттәрҙең аҡылы шашты,*
*Мостафаның йомшаҡ һүҙҙәрен ишетте:*
*— Беҙҙән яҡшыраҡ был әйтер, — тиерҙәр*
*имде.*

*Хаҡ ҡушҡанса, Мостафа тәүфиҡлы ине:*
*— Ҡиссала улар хаҡында ғибрәт бар, — тине,*
*Аҡыллыраҡтары ҡыҙыҡһынып китте,*
*Ахмаҡтары тәкәббер генә тыңлар имде.*

Әлхәмдиллаһ, тамам булды һәҙа(л)* — китап.
Мәүләм ҙур ярҙам ҡылды — минән рәхмәт,
Аңлаһагыҙ, һеҙгә төрлө өгөт-хикмәт,
Был зәғиф ҡол назым менән теҙҙе имде.

Йософ сәүченең ҡиссаһын ҡылдым һаман,
Ғәрәп, фарсы телендәгесә ҡылдым тамам.
Уҡымаға, тынламаға булһын анһат,
Уҡығандар доға-хәйер ҡылһын имде.

Йософ сәүче ҡиссаһынан аҡыл артыр,
Тыңлаусыла фәһем артыр, йәше тамыр,
Эске боҙоҡлоҡтары сәселеп сығыр,
Илаһым уға рәхмәтен күрһәтер имде.

Ғалим кеше ошо назымды һөйләһә,
Аҡыллы кеше ҡолағын ҡуйып тынлаһа,
Икәүләшеп мин гонаһлыға доға ҡылһа,
Һорағаны унын тормошҡа ашыр имде.

Уҡығандар, тыңлағандар доға ҡылыр,
Был зәғифең доға теләр — халиҡ белер,
Гонаһлылар доға аша ярлыҡаныр,
Ярлыҡауға лайыҡлы булырҙар имде.

Гәүһәр таштың һәр береһе гәүһәр булмаç,
Күп кеше гәүһәрҙең ҡәҙерен аңламаç,
Был назымдың да ҡәҙерен ахмаҡ белмәç,
Аҡыллы тыңлар, аңлар, табыр имде.

Аһ дәриға! Һәр бер кеше табалманы,
Фәһеме көсһөҙ кеше лә яҙылманы.
Мин зәғифтең ошбу назымы боҙолманы,
Робағи вәзен* менән төҙөлдө имде.

*Быны яҙҙым зәғиф бәндә — аты Fәли,*
Егерме дүрт рәкем* менән яҙҙым юлды,
Йә, рәхим, ярлыҡағыл ул хата ҡолдо,
Рәхмәтеңдән миһырбанлыҡ булыр имде.

Өмөт тотор был мәзлүм һин мәүләгә,
Һин кәрим, һин рәхимле оло мәүлә!
Рәхмәт ҡыл һин меҫкен Ҡол Fәлигә,
Һуңғы нәфсемде ҡандыр — шатландыр
имде.

Хоҙайым, был хәжәтем һиңә мәғлүм,
Был ҡайғылының күңелен итмә мәхрүм,
Эй рахманым, рәхмәтеңдән ҡылма мәхрүм,
Һуңғы һулышымда иман бүләк ит имде.

Мәүләнең һәр саҡ ярҙамы арҡаһында,
Һәм рәжәп айының тап утыҙында,
Тарих тәүәл алты йөҙ утыҙында[37],
Был зәғиф был китапты төҙөнө имде.

Тәүфиҡ, ярҙам, фәһемде халиҡтан алдым,
Алла илһам биргәненә шөкөр ҡылдым,
Был арала ошо китапты тамам ҡылдым,
Һеҙгә, беҙгә ул файҙалы, тимен имде.[38абв]



# 1. ЙОСОФ МЕНӘН ЗӨЛӘЙХА

*(Вәхитов Зиннәтулла варианты)*

Бер батшаның ун бер улы була. Иң кесеһе, ун беренсеһе, Йософ исемле була. Ҡалғандарының исеме кәрәкмәй. Был кинйә малайы арала иң аҡыллыһы була. Етмәһә, үҙе бик матур ҙа була. Аталары ла, ил халҡы ла күберәк шул кинйәне ярата (төшәләр). Ағаларына был бер ҙә оҡшамай.

Берҙән-бер көндө был батшаның ун бер малайы йыйналышып һунарға сығып китәләр. Аталары әйтә: «Кинйәмде ҡалдырығыҙ», — ти. Оло малайҙары быны тыңламай. Йософтоң үҙенең дә бараһы килә. Шул көйө былар китәләр. Әй баралар былар, әй баралар. Бара торғас, Йософто аты менән алға уҡ төшөрөп ебәрәләр ҙә, үҙҙәре хәйлә ҡорорға тотоналар: ҡалай итеп был Йософтоң башын олаҡтырырға ла, ҡалай итеп аталарына ҡайтып күренергә.

Шунан былар, бик күп баш ватҡандан һуң, Йософто үлтермәй генә тотоп тәрән ҡойоға һалалар. Үҙҙәре шунда уҡ бер бүре үлтереп, ауыҙын ҡанға буяйҙар ҙа аталарына алҡайтып күрһәтәләр.

— Йософ ҡайҙа? — тип һорауға, улар:

— Йософто ҡорт[1] ашаны, — тиҙәр. — Ышанмаһаң, быны үҙең ҡара, ул яуыҙды беҙ үлтереп алып ҡайттыҡ. Ауыҙы ҡан ғына...

Аталары бик ҡайғыға ҡала быларҙың. Илай-илай ауырып, түшәккә ята.

Инде киләйек Йософ хәленә. Әй ята был ҡойо төбөндә, әй ята. Ҡараңғы ҡойо төбөндә ята торғас, бер тауыш ишетә был. Ҡараһа — ҡойо ауыҙынан биҙрә төшөп килә. Тын алмай ғына, көтөп тора был. Төшөп еткәс, биҙрәгә инеп ултыра. Шунан тартып сығаралар быны. Сығарһалар — бер бик гүзәл егет. Былар ошо ерҙән үтеп барыусы юлсылар икән, аптырап ҡалалар. Шунан ни, Йософто үҙҙәре менән илдәренә алып китәләр.

Йософто былар үҙҙәренең батшалары ҡулына тапшыралар. Шунда Йософ эшләй башлай, төрлө йомошҡа йөрөй, ни ҡушһалар, шуны эшләй, ни һораһалар, шуға яуап бирә. Быны бик яраталар.

Бер сак Йософто батшаның кыҙы Зөләйха[2] күреп кала. Күреп кала ла был ғашик була. Йософ үҙе лә быны бик яратып кала. Былар йәшерен генә осраша башлайҙар. Шулай ҙа бер көн килеп быларҙы тоталар, шунда уқ Йософто батша кашына алып киләләр. Батша бик каты була. Ул Йософто зинданға яптыртып та куя.

Йософ, зинданда ята-ята, һарғайып бөтә. Бер кем бер ни ҙә кайғыртмай, уны бөтөнләй оноталар.

Берҙән-бер көндө батша төш күрә. Һанаттарын йыйып ала ла һөйләй:

— Бөгәсә мин төш күрҙем,
Төшөмдә кыҙыл ут күрҙем,
Ут янында шеш күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем,
Һигеҙ һыйыр бер күрҙем,
Һимеҙ һыйыр бер күрҙем,
Һигеҙ һыйыр бер күрҙем,
Арык һыйыр бер күрҙем, —
Ул ни булыр, ярандар?[3]

Һарайҙағы бар халыкты сакыртып, был төштө юратып карайҙар — белеүсе юк. Илгә хәбәр сығаралар. Илдән йыйылған халыктан берәм-берәм һорап сығалар — юраусы юк.

— Һорамаған кеше калманымы? — ти батша ярандарына.

— Калманы, — тиҙәр тегеләр. Берәүһе әйтә:

— Анау зинданда яткан егет кенә калды, — ти. Батша әйтә:

— Килтерегеҙ шуны, — ти.

Йософто бығауҙары-ниҙәре менән батша кашына килтерәләр. Батша төшөн һөйләп бирә. Йософ шунан әҙерәк уйлап тора ла яуап бирә:

— Төшөңдә кыҙыл ут күрһәң,
Шөһрәтең булыр, бадишам;
Ут янында шеш күрһәң,
Илең артыр, бадишам;
Шеш башында ит күрһәң,
Малың артыр, бадишам.
Һимеҙ һыйыр тигәнең —
Туклык килер, бадишам;
Һигеҙ һыйыр тигәнең —
Һигеҙ йылға һуҙылыр.
Арык һыйыр тигәнең —
Аслык килер, бадишам;
Һигеҙ һыйыр тигәнең —
Һигеҙ йылға һуҙылыр.

Шунан батша был егеттең яуабына хайран кала. Йософто төрмәнән коткара ла кыҙы Зөләйханы бирә, үҙен илгә батша итеп куя[4].

Йософ әйткәнсә, илгә һигеҙ йыл тотош туклык килә. Ошо форсаттан файҙаланып, батша бөтә илгә запас калдырырға куша. Шунан һигеҙ йыл аслык килә. Башка илдәрҙә халык асыға, ә был бат-

шаның халҡы уйлап та бирмәй, Йософтоң зирәклеге арҡаһында, туҡ йәшәй.

Тирә-яҡта аслыҡ булғас, был батшалыҡҡа ағыла башлайҙар. Бер саҡ шулай икмәк һорап, Йософтоң ағалары ла килеп сыға. Йософ уларға ашлыҡ бирә. Шунда үҙен таныта:

— Ана ҡоштоң ояһындин
Ун бер бала осоп барҙы,
Унауы кире осоп ҡайтты,
Бере ҡырҙа ятып ҡалды.
Ағалары уны баҙга
Хөсөдлөк илә һалдылар.
Үтеп барған юлаусылар
Баланы төшөп алдылар.
Хоҙаның рәхмәте бик киң,
Югалманы бала меҫкен,
Ризыҡ нәфҡәләре* булғас,
Сәләмәт йөрмәки мөмкин[5].

Ағалары быны танып алалар, аптырап ҡалалар. Йософтоң аяғына йығылалар. Йософ әйтә: « Атайымды алып килегеҙ», — ти. Тегеләр вәғәҙә итәләр. Йософ әйтә: «Юҡ, мин ышанмайым. Вәғәҙәгеҙгә бына кесе ағайымды ҡалдырығыҙ», — ти.

Агалары риза була. Йософтан олораҡ туғандарын ҡалдырып китәләр ҙә, ҡайтып, аталарына хәбәр итәләр. Шунан икенсе әйләнеүҙә аталары ла килә. Йософ атаһын ҡосаҡлап күтәреп алып түргә ултырта ла ағаларын язалап үлтерә.

Гонаһлылар яза алды,
Гонаһһыҙҙар ҡарап ҡалды,
Хәлайыҡтар башын һалды,
Ғибрәт һәм һабаҡ алды.

Ҡатил* ағаларын тотоп,
Йософ бирде язаһыны,
Урын бирде, түшәк бирде,
Хөрмәт ҡылды атаһыны.

Гонаһтары ағыр булды,
Ҡатилдәр баш һалыр булды,
Шуның берлә тамам булды,
Зина ҡылыу харам булды.

Шуның берлә тамам булды,
Нури илә жиһан* тулды,
Тыңлағандар һабаҡ алды,
Һөйләгәнгә хәйер һалды.

## 2. ЙОСОП МЕНӘН ЗӨЛӘЙХА

*(Закиров Заһир варианты)*

Зөләйха мәгриб* батшаның ҡыҙы ине. Йосоп ғәләйәссәләм атаһы Яҡуп ғәләйәссәләмгә ниндәй һөйөклө булһа, Зөләйха ла атаһы Тимурсаға[9] шул тиклем һөйөклө. Матурлыҡта уға оҡшашлы ҡыҙ юҡ ине.

Көндәрҙән бер көн Зөләйха атаһының теҙенә ятып йоҡлай ине. Төшөндә Йосопто күреп, шул сәғәт ғашиҡ булып, илап уянды. Атаһы:

— Ни булды, ни теләйһең? Күңелеңдә ни бар, миңә һүҙеңде әйт, — тине. Зөләйха:

— Төшөмдә матур һүрәтле егет күрҙем; уяндым — ул янымда юҡ. Шул сәбәпле кәйефем юҡ, күңелем шуны теләй, — тине. — Ул күҙемә күренеп килде, аҡылымды, һушымды алды, мине диуана ҡылды, — тине. Атаһы әйтте:

— Мин уның ҡайҙалығын белһәм, кем икәнен белһәм ине, бар малым, мөлкәтемде һине ҡауыштырыу өсөн фида ҡылыр инем, — тине.

Был хәлдән һуң Зөләйха ашау, эсеү, йоҡонан мәхрүм ҡалды, ҡайғы-хәсрәткә талды. Бер йылдан һуң ул һүрәтте йәнә төшөндә күрҙе. Ул егет Зөләйханы өгөтләй: «Зөләйха, бел, һин минән башҡаға барма», — ти. Зөләйханың күңеле куш ҡуллап ҡабул итте. Ләкин был һаман да төш кенә, имеш. Уянып китһә, унын янында теге матур егет юҡ. Аҡылы китеп, һуштан яҙҙы. Атаһы был хәлгә хайран ҡалды. Ахыр ғыш-гишеклек әҙер итте,[7] табып төрлө дауалар ҡылды. Зөләйха аҡылға килгәс, тороп ултырҙы. Һис кем менән һөйләшмәç, тағам ашамаç булды. Был заруր[8] аяғына бығау һалды, эш яман булды.

Унан һуң өс йыл үткәс, ул матур егетте йәнә төшөндә күрҙе. Был мәртәбә,[9] тәҡдир менән ант итеп:

— Һин ҡайҙан, һин кем, йортоң ҡайҙа? — тип һораны. Йосоп һүрәте әйтер:

— Әй, Зөләйха, мин — Мысыр батшаһы, мине теләһәң, Мысырға бар. Сабыр менән башланыр: сабыр иткән мораҙына тиҙ еткән.

Зөләйха шул хәлдә уянды, аҡылын йыйып, атаһына хәбәр бирҙе:

— Теләгәнем Мысыр батшаһы ине, — тине.

Атаһы, Зөләйханың аҡылға килеүен күреп, аяғынан бығауын һалды. Зөләйха ашарға теләне, һүҙе тәмләнде, гел Йосопто маҡтаны. Мысыр менән Зөләйханын ҡала араһы — бик тиҙ йөрөгәндә, бер айлыҡ юл. Матурлығы ғаләмгә мәшһүр ине. Атаһы хат яҙып, Мысыр батшаһына ебәрҙе: «Мин, Зәмин батшаһы Тимус[10], Мысыр батшаһына хат яҙам. Бер ҡыҙым бар, матурлыҡта, ғилемлектә донъяла тиң күрмәймен. Ул ҡыҙға ҡул тараткан яусылар килде. Ул береһен дә ҡабул итмәç булды. Унын тәҡдире шулдыр: ул һине теләйҙер. «Мине Мысыр ғәзизе алһын», — тип әйтә. Ҡабул итһәң, хазина менән ҡыҙымды һиңә бирәмен. Ҡабул итһәң, хәбәр ит», — тип яҙҙы был хатына.[11]

Егет тә яуабын көттөрмәне. «Һәр кем мине теләһә, ҡабул итермен. Ҡыҙыңды йәнем менән ҡабул итәм, ебәр», — тигән, ти. «Сәләм менән Мысыр ғәзизе Ҡәдфир»[12], — тип ҡуйған, ти, егет үҙенен яуап хатында.

Мысыр ғәзизенең хаты килгәс, Зөләйханы әҙерләп Мысырға ебәрҙеләр. Зөләйха ай ярымда Мысырға етеп, арыу кейемдәрен кейенеп, башына таж кейеп, тәхеткә ултырҙы. Йөҙө тулған ай кеүек, шатлығынан рушан ине. Мысыр ғәзизен күрәм тип ултырғанда, батшаның вәзире Ҡәдфир килеп инде. Шуға барҙы. Зөләйха Мысырҙа ҡалды.

Ҡәдфир Зөләйхаға яҡынлыҡ ҡыла алманы. Зөләйха Ҡәдфирҙе лайыҡ күрмәне. Етенсе йыл торғанда, Йосоп көң* булып Мысырға килде.

Йосоп үҙ иленде Яҡуп пәйғәмбәр улы булған. Улар — ун ике бер туған, алты инәнән тыуған балалар[13]. Бер ваҡыт Йосоп төш күрә. Төшөндә ай, ҡояш, ун бер йондоҙ сәждә ҡылалар[14]. Йосоп уянып китеп, төштө атаһына һөйләне.

«Был төш — ҙур төш, агайындар ишетһә, хас ҡылырҙар», — ти атаһы.[15]

Ағалары ауҙан ҡайталар. Был турала оло улының ҡатыны иренә һөйләй. Ҡайным шулай төштө юраны: «Һин бай батша булырһың, — тине. — Ун бер йондоҙ — ағайҙарың, улар һиңә баш эйерҙәр», — тип әйтте, — ти. Был ағаһы башҡаларға һөйләй.[16] Тик ятып батша булырға теләй, тип үлтерергә уйлайҙар былар. Атаһына керәләр ҙә, Йосопто бер аҙ уйнатып алып ҡайтабыҙ, тип, алып сығып китәләр. Бер ағаһы әйтә:

— Беҙ уны үлтермәйек, — ти.

— Юл өҫтөндә ҡойо бар, шул ҡойоға килтереп ташлайыҡ, юлаусылар килеп алырҙар, — ти икенсеһе.

Алып китәләр, барып урманға етәләр, Йосопто туҡмайҙар. Ул хәлдән тая. Оло ағаһы үлтермәйек, атайыма әйтермен, ти. Теге ҡойоға алып киләләр. Күлдәген систереп алып, атын алалар, үҙен ҡойоға һалалар. Ҡуян ҡанына буяп, (күлдәген) атаһына алып ҡайталар ҙа, Йосопто бүре ашаны, тиҙәр. Ҡарт илай ҙа ҡуя.

Икенсе көн ҡойо эргәһенә каруан килеп туҡтай. Бер егет һыу алам тиһә, Йосоп биҙрәһенә йәбешеп сығып килә. Ағалары барып:

— Беҙҙең колобоҙ ине, бында ҡасып ятҡан икән, — тиҙәр. Матур егет булғас, күҙе ҡыҙып, каруан башлығы:

— Миңә һатығыҙ, — ти.

17 һумға[17] һаталар былар. Һатҡанға документ кәрәк була. Документка сәбәбен яҙып ҡуялар: «Илаҡ, алдаҡсы, ҡаскы, уғры». «Ҡабул иттек, һаттыҡ», — тип ҡул ҡуялар. Өс данала була: ағаһында, үҙендә, Мысыр кешеһендә.[18]

Зыярат эргәһенән үтәләр, Йосоп әсәһенен зыяратын күреп илай. Кешеләр, ысынлап та илаҡ икән, тип уйлайҙар. Ҡасмаһын тип, ат мендереп, уртала алып баралар.

Мысырға алып барып кейендерәләр, һатырға алып төшәләр. Шул тиклем матур була. Кеше күп йыйыла. Үҙе ауырлығы тиклем алтын һорайҙар. Хәбәр батшаға ишетелә, Зөләйха ишетә. Зөләйха

йүгереп килһә, төшөндә күргән егете була. Үҙҙәренә алалар.[19] Ғәзиз Ҡәдфир әйтә:

— Бына егет, дан егет, тәрбиәлә, — ти. Йосопто Зөләйха тәрбиәләй башлай. Зөләйха, ғашиҡ булып, Йосопто нисек булһа ла үҙенә әүрелдерергә итә. Йосоп риза түгел. Атайымдан да аҫыл ҡарап торған кешенән көлмәйем тип, Ғәзиз Ҡәдфирҙең күңелен һаҡлай.

Бер ваҡыт Иблис (Зөләйханың) төшөнә керә. Һин шәп итеп йорт һалдырт, йорт эсендә икегеҙҙең дә һүрәтегеҙ булһын, ти. Шул һүрәттәр һөйөшөп ултырһындар, ти. Шунан Зөләйха иренән шуны һорай инде, эшләтеп бир, ти.[20]

Һарайҙы матур итеп эшләтә, ете ишеге була. Йосопто алып инә, ишекте бикләй бара. Йосоптоң ҡулынан тотоп:

— Ниндәй матур йөҙөң, сәсең, — ти. — Мин һине төшөмдә күреп ғашиҡ булдым. Һин минең хәлгә баҡ, — ти. Зөләйха ҡауышмаҡты теләй. — Ҡемдән булһа ла ҡурҡынысың бармы? — тип һорай. Йосоп:

— Алланан ҡурҡам, ҡиәмәт көн рисуай булыуҙан ҡурҡам, — ти. Зөләйха:

— Тәүбә ҡылырһың, — ти.

— Гонаһ ҡылып тәүбәгә ҡайтҡансы, ҡылмай тороу яҡшы, — ти Йосоп. — Ғәзиз мине атам кеүек тәрбиәләне, мин уға нисек хыянат итәйем, — ти.

— Йосоп, миңә бер генә ҡара әле, — ти Зөләйха.

Йосоп Зөләйхаға ҡарап, йылмайып көлдө. Йосоптоң килеп ҡулын тотто. Йосоп ҡулын ала, ҡаса.[21] Һәр ишеккә етһә, ишек үҙе асылып китә. Етенсе ишеккә еткәндә, Зөләйха ҡыуып етә; итәгенән тотһа, итәк йыртылып китә. Йүгереп тышҡа сығалар. Тышҡы ишектә Ҡәдфир тора ине. Зөләйха әйтә һала:

— Һинең йәмәғәтең зина ҡылды, зинданға ябып туҡмамаҡ кәрәк, — ти. Зөләйха малайҙы яманлай: — Йосоп ҡыуҙы, — ти.

Зөләйха илап баш ине. Ғәзиз Йосоптан һорай:

— Был дөрөҫмө, яҡшылыҡҡа яманлыҡ ҡылдыңмы? — ти. Йосоп әйтә:

— Яуызлыҡты Зөләйха ҡылды, минең шаһитым бар. Беҙҙең хәлде ул күрҙе, шул шаһитлыҡ бирер, — тип, бишектәге балаға күрһәтә. Ғәзиз:

— Беҙҙе мәсхәрә иттең, быға тиклем бишектәге бала һөйләгәне юҡ ине әле, — ти. Йосоп:

— Алла һөйләтһә, һөйләр, һинән һорамаҫтар, — ти.

Ғәзиз баланы алды, бала телгә килде:

— Йосоп итәгенең алды йыртыҡ булһа, Йосоп ғәйепле; арты йыртыҡ булһа, Зөләйха ғәйепле.

Ғәзиз ҡараһа, ысынлап та, шулай икәнен күрҙе.

— Йосоп, һиндә ғәйеп юҡ; Зөләйха, һиндә ғәйеп, гонаһыңа тәүбә ҡыл! — тине.[22]

Был хәбәр бөтә Мысырға таралды. Зөләйха ҡолона ғашиҡ булған, тинеләр.

Аҡланыу өсөн, Зөләйха, мәжлес йыйып, ҡатындарҙы саҡыра. Ул әйтә:

— Нисә йылдар буйына минең хөрмәтемде күрәһегеҙ, ит турап ашатығыҙ минең ҡолома, — ти.

Йосопҡа ошо ҡатындар араһынан үтергә ҡуша. Ул ит турап ултырыусы ҡатындар араһынан үтә. Шундай матур ине. Күҙҙәрен Йосоптан ала алмайынса, бармаҡтарын турапылар. Ҡатындар: «Был берәй фирештәлер», — тиештеләр. Йосопто маҡтап, бармаҡтарын турап, үҙ яндарына саҡырҙылар.

Зөләйха бик каты көлдө.

— Йосоп, бынан сыҡ, — тине. Ҡатындарға ҡулдарына ҡарарға ҡушты. Ҡараһалар — бармаҡтарын турап, күлдәктәрен буяп бөткәндәр тегеләр.

— Һеҙ бер күреүҙә бармаҡ турағанһығыҙ, ә мин, уны иртән-кисен күреп, нисек түҙәйем? Һарайҙа унын күлдәген мин йырттым, — тип, үҙ ғәйебен асып һалды, ти, был. — Инде минә риза булмаған, зинданға бикләйбеҙ, — тине, ти. Ҡатындар:

— Зөләйхаға яҡын булһа, беҙгә лә яҡын булһын, — тиештеләр, ти.

Йосоп, ҡатындарҙың һүҙен ишеткәнсе, төрмәлә ултырыу яҡшыраҡ, тип, ете йыл төрмәлә ултыра.

Батшаның ҡулы аҫтында эшләгән ике егет[23] була. Йосоп бик һәйбәт төш юраусы була. Шул ике егет, Йосопто һынар өсөн, төш күргән булып һөйләйҙәр. Беренсеһе:

— Мин зиндандан сыҡтым, ширбәт эсереп, батша алдында йөрөнөм, — ти.

— Һинең төшөң бик яҡшы. Төрмәнән сығып, өс көндән һуң ширбәтсе булырһың, — ти Йосоп.

Икенсеһе:

— Икмәк бешереп, башыма ҡуйғайным, башымдағы икмәкте бер килен ашап бөттө, — ти.

— Һин өс көндән һуң сығырһың, мейеңде ҡош ашар, — ти Йосоп. Былар сығып китәләр. Сыҡҡас, тегеһе ширбәтсе була, икенсеһен аҫкандар, ти.

Зинданда ятҡанда Йосоп егеттәрҙең тәүгеһенә: «Төрмәнән сыҡҡас, батшаға әйт әле, минең эште тикшереп, мине сығарһын инде», — ти. Ләкин ул иптәше батшаға әйтмәй. Ун ике йыл үтеп китә.

Батша Риуан[24] төш күрә. Ете бешкән бойҙай башағы, ете йәшел бойҙай күрә. Етеһе лә уралып йәм-йәшел була ла ҡуя. Ете һимеҙ һыйыр, ете арыҡ һыйыр күрә. Ете арыҡ һыйыр ете һимеҙ һыйырҙы ашап бөтөрә лә ҡуя. Быны юратырға кәрәк ине. Бер кем дә әйтә алмай. Теге кеше батшаға әйтә:

— Зинданда һәйбәт төш юраусы бар, — ти. Батша быны төрмәгә ебәрә:

— Бар, шул кешенән белеп кил, — ти.

Теге килә төрмәгә, Йосопҡа батшаның төшөн һөйләй. Йосоп әйтә:

— Ете һимеҙ һыйыр — ете йыл уңыш мул булыр; ете арыҡ һыйыр — ете йыл аслыҡ булыр. Бына шул, — ти.

Батша, ул кешене үҙем күрәм тип, үҙенә саҡырта. Йосоп:

— Мин ғәйепле кеше, нисек батша янына барайым, — ти. Теге катындарҙың араһынан береһен генә саҡыртыуын һорай. Батша катынынан һорай. Зөләйха үҙен гәйепле, ти. Батша Йосопто төрмәнән сығара. Ҡалған кешеләр: «Һин сыҡһаң, беҙ нишләрбеҙ? Беҙҙе лә ташлама», — тиҙәр. Батша тикшерә. Бөтәһе лә ҡотолалар. Сыҡҡас, Йосоп йыуынып, батшаға килә. Уның менән һөйләшә, Йосоп етмеш телдә һөйләшә икән.

— Һин ҡайҙан, — тип һорай батша.

Йосоп атаһының теле менән һөйләшә. Батша аңламай.

— Һине үҙемдең урыныма батша итәм, — ти батша. Йосоп:

— Ҡуй, мин малсылыҡ менән шөғөлләнермен, — ти[25]. Был ваҡытта әле Ҡәдфир үлмәгән була. Ете йыл буйына ашлыҡ уңа, шунан ете йыл аслыҡ була. Дәүләтте йыйҙыра. Тәүге йыл алтын-хазиналар йыя. Үҙҙәре буш эшләргә булалар. Йосоп бөтә нәмәләрен кире бирә.[26] Шул вакытта Йосоптоң ағалары ла килеп, ашлыҡ алып ҡайталар. Был уларҙы таный. Икенсе килеүҙәрендә һорай:

— Һеҙ кем булаһығыҙ? — ти.

— Беҙ ун ике инек, беребеҙҙе бүре ашаны, — тиҙәр.

Шунан былар кесе энеләрен[27] дә алып киләләр. Икешәрен бер өҫтәлгә ултыртып ҡунаҡ итә. Кескәй бала илай[28]. «Ағамды һағынам, шуға илайым», — ти. Йосоп уны икенсе яҡҡа алып китеп һорай. Үҙен таныта ла уны үҙе менән алып ҡала. Батшаның алтын тәгәсе өҫтәлдә була, йөк тейәгәс, [шул тәгәсте бер ағаһының йөгөнә] тығырға ҡуша.[29] Оҙаталар. Юлға сыҡҡас, юлдан кире бороп алып киләләр.

Йосоп әйтә: «Мин һеҙгә яҡшылыҡ эшләйем, һеҙ батшаның тәгәсен урлайһығыҙ», — ти икән. Ҡараһалар, тәгәс береһенең йөгөнән сыға. Шунда Йосоп үҙен туғандарына таныта, аҡтты[30] уҡыта. Йосоп уҡырға бирһә, уҡымайбыҙ, тиҙәр. Шунан Йосоп пәрҙәһен асып ебәрһә — ағалары аптырап китә, таныйҙар быны.

Етмеш ике кеше булалар [?], бергә йыйылып, Мысырға киләләр.

Зөләйха илай-илай һуҡыр була.

Йосоп, батша булғас, маневерға[31] сыға. [Ҡапҡа төбөндә Зөләйха ултыра. Уны] үтеп китә[лә] кире боролоп, Зөләйха менән күрешә.[32]

— Йәшлегем кире ҡайтһа ине, фатиха ҡыл, — ти. Был юлы Йосопто күрә.

— Йәшлек дәүерем кире килһә, өсөнсөһө һиңә никахланыу, — ти [Йосоп]. Улар никахлашалар.



## 3. КИНЙӘ ӘКИӘТЕ

*(Мостафина Кәримә версияһы)*

Борон-борон заманда исемһеҙ бер ауылда Якуп исемле карт йәшәгән. Ете баһадир үҫтергән ул. Ә һуңынан карсыгы уга тагы ла бер кинйә ул бүләк иткән. Йосоп тип исем кушкандар был төпсөккә. Кинйә булгас, атаһы Йосопто бик иркәләткән, кулынан төшөрмәгән. Был малай, агаларына караганда, күп тапкырга зиһенлерәк булып үҫә икән. Ә һылыулыгы менән был тирәләге бөтә кешене таң калдырган.

Берҙән-бер көндө Йосоп йокоһонда төш күрә. Имеш, күктәге ай уның итәгенә тәгәрәп төшә, ә тирә-ягында йондоҙҙар була. Капыл Йосоп сүлгә барып сыга һәм унда кыу таяк сәсә* — таяк шунда ук йәшел агаска әүерелә.

Уяныу менән, Йосоп был төшөн атаһына һөйләп бирә. «Балам, — ти атаһы, — һин изге төш күргәнһең. Үҫеп еткәс, батша булырһың, ете агайың һиңә кол булырҙар».

Ә был вакытта карттың етенсе улы был икәү араһындагы һүҙҙе тыңлап тора ла агаларына алып барып еткерә.

— Был яуыздан котолорга кәрәк улайһа, — тип кәңәшләшә башлай Йосоптоң агалары.

— Шунһыҙ беҙҙе мәсхәрәгә калдырыр ул, — тиҙәр.

Бер көндө ете агаһы ла Йосопто ла һунарга алып сыкмаксы була. «Арыһа, аркабыҙҙа йөрөтөрбөҙ», — тип ялуарып, атаһынан ризалык алалар ҙа, Йосопто үҙҙәре менән алып сыгып китәләр. Быңа ошонда улар үҙҙәренең яуыз ниәттәрен гәмәлгә ашырмак булалар. Бер күл янында, ял итеп алмак булып, туктайҙар ҙа, шунда муйынына таш бәйләп, Йосопто күлгә ташлайҙар. Ә кинйәнең күлдәге бүре канына буяп, атаһына килтерәләр. Ләкин Йосоп үлмәй. Уның муйынына бәйләнгән таш шунда ук яҫтыкка әүерелә. Ә йөҙөндәге һылыулык, нур булып, әллә кайҙарга һибелеп тора, һәм, ошо нур буйлап, аккоштар Йосопка аҡшамлык ташый башлайҙар.

Бик күп вакыттар үткәндән һуң ошо күл янынан фәлән-фәлән илдән килгән карауан үтеп бара икән. Күл янына килеп тукталалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, унан нур һибелеп тора, ә нур эҙҙәрендә аккоштар осоп йөрөй. Юлсылар шунда ук күлгә биҙрә ташлайҙар.Серле әмер буйынса, Йосоп шунда ук биҙрәнең кылысына тотоноп ала. Биҙрәлә сыккан баланы күргәс, юлсылар аптырап кала. Был сакта Йосоптоң агалары ошо тирәлә һунарҙа йөрөгән булган икән. Улар, шау-шыу тауыштарын ишетеп, күл янына киләләр, унда Йосоптоң имен-һау тороуын күрәләр. Ете егет Кинйәнең тере булыуын фаш итмәҫ һәм икенсе юл менән үлтереү ниәте менән үҙҙәренә алмак булалар. «Һеҙ уга теймәгеҙ, — тиҙәр һунарсылар, — ул бит бала түгел, сихырсы». Ләкин юлсылар был серле табышты үҙ кулдарынан ыскындырырга теләмәйҙәр. Сауҙалаша торгас, агалары Йосопто бер бөртөк кортбашка (мәрйен бөртөктәренә араһына баҫыла торган кабырсак төрө. — *һөйләүсе иҫкәр-*

*мәһе)* һаталар. Сихырсы тигәс, карауан малайҙы кейеҙгә урай ҙа дөйәгә бәйләй һәм үҙ сәфәрен дауам итә.

Карауан Йосоптоң торған ауылынан үткән сакта малай, кейеҙ эсендә булһа ла, быны белә һәм, серле көс менән кейеҙҙе асып сығып, үҙе юк сакта вафат булған әсәһенең кәберенә йүгерә. Юлсыларҙың береһе быны күреп кала ла, Йосопто тотоп алып, тукмай-тукмай, кире карауан янына алып килә. Шул сакта капыл йәшенле борсак башлана. Карауандың дөйәләре, кешеләре кырыла. Тик тукмаған кеше Йосоптан ғәфү үтенгәс кенә, күк йөҙө асыла, һәм имен калған карауан үҙенең юлын дауам итә.

Ай баралар былар, йыл баралар. Бер заман ниндәйҙер батша иленә килеп сығалар. Был илдең халкы, беҙгә фәрештә килгән, тип, карауанға каршы йүгереп сыға. Бакһаң, улар Йосопто фәрештә тип уйлағандар икән.

Был ил батшаһының Зөләйха исемле йәш кенә бик һылыу катыны була. Батшалыкка фәрештә килеүен ишеткәс, Зөләйха иренән уны күрһәтеүҙе үтенә башлай. Батша кесе катынын һәр вакыт тыңлай торған була. Былар Йосопто күрергә киләләр. Зөләйха, Йосопто күреү менән, сак акылынан яҙмай кала. Егеттең һылыулығы уның бөтә күңелен солғап ала. «Юк, беҙ уны үҙебеҙгә коллокка һатып алайык, — ти Зөләйха батшаға, — был егеттән бик якшы хеҙмәтсе сығыр». Батша, Зөләйханың күңел серен аңламай, егетте һатып алырға риза була. Сауҙа килешеүе буйынса, батша карауансыға малай ауырлығы тиклем алтын бирергә тейеш була. Йосопто бизмәндең бер яғына баҫтыралар ҙа икенсе яғына алтын һала башлайҙар. Һалалар, ти, былар алтынды, һалалар, ти, акылы шул тиклем ҙур дәүмәлдә булыуын белмәйҙәр икән. Батшаның ике һарай алтыны киткәс кенә бизмән тиңләшә.

Шулайтып, Йосоп батша һарайына килеп эләгә. Бында үткән көндәр Йосоп өсөн төш кеүек була. Зөләйха егетте үҙенең хеҙмәткәре иткән булып сыға. Ләкин артабан Йосоп бер ниндәй хеҙмәт башкармай. Зөләйха уны бүлмәнән бүлмәгә алып йөрөй, байлыктарын күрһәтә. Батша һарайы ожмахтан кәм түгел икән. Зөләйха, бөтә байлыктарын күрһәтеп, Йосопто, нисек булһа ла, үҙенә әүрәтеп алмаксы була. Тик егет был байлыктарға алданмай, Зөләйхаға күңел һалмай.

Катындың башына икенсе бер хәйләкәр уй килеп төшә. Ул үҙ исеменән ете катлы йорт һалдыра. Йорттоң эсе тик көҙгөнән генә була. Донъялыктағы бөтә матурлык тупланған була бында. Эскә инеү менән, гөлдәр сәскә аткан, ағас япрактары шаулаған, шишмә шылтырап аккан, коштар һайрашкан иҫ киткес матур бакса араһында хасил булаһың икән. Ошо бакса араһында бер алтын, бер көмөш ултырғыс бар икән. Иркенләп ултырып, серле һүҙҙәр һөйләшеп ял ит әйҙә.

Йорт тамам эшләнеп бөткәс, Зөләйха Йосопто ошо сихри урынға алып килә. Улар ингән һайын арттағы ишектәр бикләнеп бара икән. Уны тик Зөләйха генә аса ала. Етенсе катка күтәрелгәс, былар икеһе лә көҙгө алдына килеп баҫалар. Һылыулыктары яғынан бер-

береһен еңерлек булмағандар шул улар. Икеһе лә зифа буйлы, икеһе лә йәш.

Бына шунда Зөләйха үҙенең бөтә уйын ғәмәлгә ашырырға була.

— Беләһеңме, Йосоп, мин бит һине тәүге көндән үк өҙөлөп ярattым, — тип һүҙ башлай ҡатын һәм Йосоптоң алдына теҙләнә, — күрәһең бит, хужам ҡарт, мин уның менән йәшәй алмайым. Көсләп, байлыҡҡа ҡыҙығып һаттылар бит мине. Ҡыҙған һин мине, Йосоп, үҙеңә ефетлеккә ал. Мин һинһеҙ йәшәй алмайым.

— Юҡ, Зөләйха, — тип яуап бирә Йосоп, — һиңә өйләнергә хаҡым юҡ, сөнки һин[минә] әсә хоҡуғында бит.

Зөләйха лә, нисек булһа ла, үҙ теләгенә ирешергә тырыша һәм Йосопто ҡосаҡлап ала.

— Әгәр риза булмаһаң, үҙем көсләп сығам һиңә, Йосоп! Был ишектәр һиңә асылмаясаҡтар, һин минән былай ғына ҡотола алмайһың!

Шул саҡ: «Сығып ҡасыусы һин бул, ишек асыусы мин булайым», — тигән сихри тауыш Йосоптоң ҡолагына ғына ишетелеп ҡала. Шуны ғына көтөп торғандай, егет был һарайҙан сығып ҡаса.

Был хәйләнең дә барып сыҡмауына асыуы ҡабарған Зөләйха Йосоптан үс алырға була. Бер заман хеҙмәтсе ҡатындарҙың береһе «Йосоптан батша ҡатыны Зөләйханың бер айлыҡ сабыйы бар икән» тигән хәбәр тарата. Бындай хәбәрҙе Зөләйха үҙе таратырға ҡушҡан икән. Был һүҙҙе ишетеп ҡалған батша, Йосопто тотоп алып, зинданға ташлай.

Был зиндандағы тотҡондарға көнөнә бер сынаяҡ һыу менән бер телем икмәк кенә бирәләр икән. Бындай шартҡа түҙә алмай үлеүселәр бик күп икән.

Берҙән-бер көндө тотҡонда ултырыусыларҙың береһе йоҡоһонан уяна ла күргән төшөн һөйләй башлай. «Мин төшөмдә урман ҡырылғанын, ҡыҙарып еләк бешкәнен күрҙем, — ти ул, — күкте ҡаплап ҡара ҡаргалар осоп йөрөнө. Ни булыр икән?» Был төштө бер кем дә юрай алмай. Йосопҡа сират килеп еткәс, ул былай ти: «Беҙҙең күбебеҙҙе дарға аҫасаҡтар», — ти. Ысынлап та, бер нисә көндән һуң, Йосоптан башҡа был зиндандағы бөтә кешене лә дарға аҫалар. Йосоп яңғыҙ тороп ҡала.

Был саҡта батшалыҡта ҙур үҙгәрештәр була. Зөләйханың ире тәхеттән төшә, һәм уның урынында яңы батша ултыра. Ә Зөләйханың ҡайҙа булыуы тураһында Йосоп бер нәмә лә белмәй.

Бер ваҡыт яңы батша төш күрә икән. Имеш, ете һимеҙ һыйырҙы ете ябыҡ һыйыр ашай икән. Ләкин был төштө батшалыҡта бер кем дә дөрөҫ юрай алмаған. Ахырҙа, батша янына Йосопто саҡырмаҡ булалар. Ләкин был ваҡытта егеттең йөрөрлөк хәле ҡалмаған була. Шуға күрә уны зиндандан алып сығалар ҙа өс көн буйы һөткә һалып ҡуялар. Бер аҙ хәл ингәс, Йосопто, кейендереп, батша янына алып баралар. Йосоп батшаның төшөн тыңлап ултыра ла былай тип яуап ҡайтара:

— Бик хәтәр төш күргәнһегеҙ, әфәндем. Тураһын әйтәйем: батшалыкта ете йыл иген уңыр, ә һуңынан ете йыл йот булыр. Йотка карай ашлык йыйнап калыу сараһын күрегеҙ.

Батша төштөң тогро булыуына ышана һәм Йосопто тотконлан сығара.

Был батшалыкта иген әҙерләй башлайҙар. Иген йыйыу эшенә етәкселекте батша Йосопка тапшыра. Егет арғымаккка атланып, күп урындарҙа булырға өлгөрә. Бейек тауҙа баҙ каҙҙырып, игенде шунда койҙора. Был вакытка Йосоптоң зинданда үткән ғазап эҙҙәре тамам юйыла. Ул кайтанан бөтә кеше һокланырлык һылыу егеткә әйләнә.

Йосоп көн һайын батша һарайы янындағы алама ғына сатыр янында күҙе һукырайған хәйерсе катынды osрата икән. Был катын, кешегә кул һуҙып саҙака һорамай, ә һәр сак илай ҙа ултыра торған булған.

Ете йыл һиҙелмәй ҙә үтеп китә. Ете йыл иген бура емереп үҫә. Бына шунан һуң аслык йылдары башлана. Алдан әҙерләп калған иген йот килгән ете йылдың алтауына етеп кала, ә етенсе йылда халыкка ни етһә, шуның менән тамак туйҙырырға тура килә. Бик ауыр була ул йыл. Йосоп хәлһеҙләнгән кешеләрҙе үҙенең һылыу йөҙө, ягымлы һүҙе менән йыуата икән. Ул килеп сыккан урындарҙа ас кешеләргә хәл инә, күҙҙәре асылып китә торған булган. Был һылыу егетте халык бик ярата һәм үҙенен батшаһы итеп һайлай.

Берҙән-бер көндө Йосоптоң һарайы алдында дөйәгә атланған бер кеше килеп туктай. Дөйә, алыҫ илдән килгәнлеген белдереп, шунда ук ергә ята. Егет дөйәнен хужаһын үҙенә сакыртып ала ла унын кайһы илдән сәфәргә сығыуын һораша башлай.

Был илгиҙәр Йосоптоң тыуған иленән булып сыға. Батша бындай хәбәргә бик шатлана һәм атаһының, ағайҙарының тормошон, яҙмыштарын һораша башлай.

— Фәлән ерҙә карт имәндең ете ботағы бар ине, хәҙер улар имәнме? — тип һорай Йосоп.

— Ул имән түгел, әфәнде, ә Якуп атлы ир булыр, балалары ла ете түгел, ә һигеҙ. Тик береһен бүре балаһы ашаны. Калган ете улы хәҙер ҙә имән, — тип һөйләп алып китә юлаусы. — Кинйә улын бүре ашауы тураһында ишеткәс, Якуп күҙҙән яҙҙы. Инә бүре был вакиға шаһиты булып килде һәм үҙ балаһының Йосопто ашамаганлығын әйтте.

— Улай булһа, юлсы туған, һин минән Якупка хат илтеп бир. Уландары менән миңә килһен, — ти ҙә Йосоп юлсыға тағы ла бер кулъяулык тоттора.

— Якуп, кесе улын хәтеренә төшөрөп, илаған сакта ошо кулъяулык менән йәшен һөртһөн.

Юлсы хәл йыйған дөйәһенә атлана ла Якуп иленә кире кайтып китә һәм картка Йосоп биргән аманатты тапшыра.

Якуп хат менән яулыкты кулына алыу менән:

«Йосоп баламдың еҫе килә», — тип илап ебәрә һәм кулъяулык менән күҙен һөртә. Шунда ук уның алдында донъя яктырып китә. Карттың күҙе кайтанан күрә башлай.

Тәрәп аҡыллы Йосоп бала саҡтан алып хәҙерге көнгә тиклем булған тормошон һәм башынан кисергәндәрен яҡшы хәтерләгән була. Ул ағаларының, үҙен һыуға ташлаған саҡта, нисек яны-лышҡанлыҡтарын һәм үҙенең ысындан да иҫән ҡалыуын күрһәтеү өсөн, атаһы менән туғандары килгәнсе, үҙенең тормош юлдарын сағылдырыусы бик күп һүрәттәр яһатып элеп ҡуя.

Билдәләнгән көнгә Яҡуп уландары менән килеп төшә. Уларҙы Йосоп батшалығының бөтә халҡы бик хөрмәтләп ҡаршы ала. Һый-хөрмәт башлана. Шул саҡ Йосоп ағаларын һүрәттәр эленгән бүлмәгә алып инә. Ете туған һүрәттәрҙе ҡарайҙар ҙа ҡурҡыуға ҡалалар. «Йосоп быларҙы тигенгә генә эшләтмәгәндер, — тип ҡурҡыша улар. — Хәҙер беҙ, ошо һарайҙан сыға алмайынса, һәләк булырбыҙ, ахрыһы». Ете ағайҙың һәр береһе, нисек кенә булһа ла, ҡасып ҡотолоу яғын ҡарай башлай. Зирәк Йосоп быны шунда уҡ аңлап ала. «Туғандарым, — тип өндәшә ул ағаларына, — һеҙ борсолмағыҙ. Мин һеҙгә ҡарата бер ниндәй ҙә яуызлыҡ уйламайым. Тик артабан шуны белеп ҡуйығыҙ: «һәр саҡ изгелек яуызлыҡты еңәсәк». Шунан һуң ғына ете туған тынысланa.

Йосоп үҙенең башынан үткәндәрен атаһына тулыһынса һөйләп бирә. Зөләйха менән булған ваҡиға хаҡында атаһының фекерен белергә теләй. «Был турала, улым, — ти атаһы, — һинә бер-ике көндән әйтермен».

Иртәгәһен Йосоп, һарайынан сығып, ҡапҡа янындағы алама сатыр янынан үтеп барғанда, теге һуҡыр ҡатын уға: «Йосоп, яныма килеп кит, зинһар», — тип өндәшә. Йосоп был һуҡырҙың үҙен таныуына аптырап ҡала һәм ҡатындың янына бара. Ҡатын Йосоптоң ҡамсыһын һорап ала ла уның еҙ һабын күҙенә килтерә һәм ҡапыл ауыр һыҙланған кешеләй бик нык ыңғырашып ҡуя. Шул арала ҡатындың күҙе асыла. Ул ҡамсыны кире Йосопҡа бирә. Тик Йосоп уны саҡ ҡулынан ысҡындырып ебәрмәй. Ҡамсының һабы ут кеүек эҫе була. Егет ҡатынға икенсегә әйләнеп ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, уның алдында элекке күреп туймаҫлыҡ һылыу, зифа буйлы, нәҙек билле Зөләйха ултыра икән. Йосоп Зөләйханы күтәреп алып ҡайтырға ынтылып ҡуя, ләкин атаһының кәңәш бирәсәген иҫенә төшөрөп, ярһыуынан тыйылып ҡала һәм, Зөләйханың янына ултырып, эштең низә булыуын һораша башлай.

— Һине зинданға япҡас та, — тип һөйләп алып китә Зөләйха, — батша миңә ябырылды. Ул һинән сабый булыу тураһындағы ялған һүҙҙе ысынға алған. Минең ант биреүҙәрем бушҡа ғына булды. Аҙаҡ сиктә ул мине вәзирҙәренән иҫтән яҙҙырғансы туҡматты. Бына ошо туҡмалыуҙан күҙҙән яҙҙым һәм һарайҙан алыҫ китә алманым. Һуҡыр булһам да, һинең һәр саҡ тауышыңды асыҡ белә торҙом мин. Ғәйеп миндә булды, Йосоп, һине бушҡа рәнйеттем, ул ғына түгел, зинданда интектерҙем. Шуның өсөн хәҙер мин һинән ғәфү үтенә алмайым. Ә бына элекке хәлемә ҡайтарыуың өсөн рәхмәт!

Ҡатын тынып ҡала. Йосоп та, һушына килгән кешеләй, ҡапыл һикереп тора ла, һарайына, атаһы янына йүгерә. Һарайға килеп инеү менән, атаһына Зөләйха менән булған осрашыуҙы һөйләп бирә. Яҡуп бер аҙ уйланып ултыра ла, асыҡ сырайлы ҡарашын

улына төбәп, былай ти: «Ул һинең яҙмышың булған, улым. Тимәк, һин уға өйләнергә хаҡлыһың».

Күп йылдар буйы йыуынмайынса тупраҡҡа батҡан Зөләйхаңы һарайға алып киләләр. Ҡатындар уны шифалы һыу менән йыуындыралар. Шунан һуң Зөләйха элеккенән дә һылыуыраҡ булып китә.

Бер нисә көндән һуң, мәсеттә аҙан әйтеп, Йосоп менән Зөләйханың туйын үткәрәләр. Ә һуңғараҡ Йосоптоң ете ағаһы ошо батшалыҡта ете туй яһай. Һигеҙ туған хәҙер ҙә бала көтөп, йөн тетеп, татыу ғүмер итәләр, ти.



## 4. ЙОСОФ МЕНӘН ЗӨЛӘЙХА ТАРИХЫ

*(Ғайсина Бәширә варианты)*

Борон заманда Яҡуп тигән бабай йәшәгән. Уның ун ике улы булған. Уныһы — тәүге ҡатындан, икеһе — йәш ҡатындан. Ике ҡатыны ла үлеп китә. Йәтимдәрҙең иң кескәйе Йосоп исемле булған. Атаһы йәлдәп, аны гел тубығында ғына аҫырай. Ағалары көнләшеп, аны, һунарға барғанда, диңгеҙгә һалырға булғандар. Еп бәйләп ярҙан төшөрәләр тегене: «Әллә нәмә алып сығырһың һыу төбөнән», — тип. Төшөп кенә еттем тигәндә, бауҙы киҫеп ебәрәләр. Диңгеҙ яман икән: яман балыҡ, төрлө хәшәрәттәр тулы. Ғәйептән бер йәлдәүсе кеше осрай. Шул балаға күлдәк кейҙереп, бер урынға ултырта. Диңгеҙ йәмләнеп китте, ти.

Күп тә үтмәй, был диңгеҙгә Мәлих исемле бер батша үҙенең ялсылары менән балыҡҡа килә. Ике ир снас* төшөрә. Тартып алһалар, балыҡ урынына бер бик яҡшы ир бала килеп сыға. Мыны алып, батша янына баралар. Батша баланы яратып ҡаршы ала.

Ағалары, был малай сыҡмаһын тип, өс көн аңдынылар.

Энеләрсе батша ҡулына төшкәнен күргәс, йүгереп киләләр ҙә баланы тартып алалар. Талаш китә. «Бала беҫтеке, һатабыҙ», – тиҙәр батшаға.

Батша әйтә:

— Минең бирә торған атласым да, алтыным да юҡ, – ти.

Тегеләр әйтә:

— Беҙгә күп кәрәкмәй.

Бер аҙ ғына хаҡ һорайҙар ҙа, дугавур* эштәйҙәр: «Был бала — яуыз бала, ҡасҡы, ҡасып төшөп китте» (инә башҡа булғас, ратмайҙар инде). Ҡасҡы, уғры, алдаҡсы — өс ғәйеп мән дугавур эштәнеләр.

Батша китергә йыйына. Ағалары Йосопто сылбырлатып, дөйәнең өҫтөнә һалдылар.

Юлга сығалар. Малай бер ерҙә башын күтәреп ҡараһа, инәһенең (ул Рәхимә исемле булған) ҡәбрен күрә. Күрә лә, Мәлих батшаға әйтә: «Рөхсәт итеп, бушат. Анау ағып ятҡан һыуға барып, йыуынып киләйем», — ти.

«Ҡасты» тип, батшаның бер хеҙмәтсеһе дөйәгә менеп, артынан китһә, теге малай инәһенең ҡәберендә илап, һөйҙәшеп ултыра икән.

Инәһе терелеп:

— Низән төштөң падишаның ҡулына? — ти икән.

Улы әйтә:

— Ағаларым дошмансылыҡ ҡылып, диңгеҙгә ташланылар. Шунан диңгеҙҙән алып, бик мәсхәрә ҡылып, осһоҙ хаҡҡа батшаға һаттылар.

Батшаның хеҙмәтсеһе шул саҡ килеп етеп: «Ник ҡастың?» — тип, малайға ҡамсы менән һуғып ебәрә. Инә быларҙы ҡаргай. Ҡарғыш аркылы бер бик ҡаты болот сығып, афәт булып, ҙур ҡырғынлыҡ килә. Мәлих батша әйтә: «Ҡарғыш алдыҡ. Тиҙ генә бер ергә йыйылығыҙ, тәүбә истәғәфәр ҡылайыҡ», - ти.

Һуҡҡан кеше гәфү үтенеп, малайҙың йөҙтөгөнә (аяғына) йығыла. Шул ваҡыт көн асылып китә. Малайҙы бик хөрмәтләп алып китәләр. Батша алып ҡайтып, малайҙы тәрбиәләп үҫтерә. Был малай тамам камил егет булып еткәс, батша, аны бер баҙарға алып барып, бөтөн ергә әбйәвление* бирә: «Бик яҡшы егет, һатам, хаҡы аҙ түгел», — ти. Бер Ҡәтфәр[4] исемле батша менән аның ҡатыны Зөләйханың балалары юҡ икән — шулар киләләр бала һатып алырға. Килгәс, Малик батшанан:

— Егетеңдең хаҡы күпме? — ти.

Малик батша Йосоптоң үҙенән һорай:

— Күпме һорайым һинең хаҡына? — ти. Йосоп әйтә:

— Весаның тәрилкәһенен бер яғына мин ултырам, икенсе яғына минең ауырлығым хәтле дәүләт (алтын) һалһындар, — ти.

Алтын килтереп һала башлай Ҡәтфәр батша. Алтын һалып тора — егет баҫып төшөп тора. Инде алтын бөттө. Шунан аш-ризығын тейәп бөтөрҙө. Ҡәтфер батша әйтә:

— Инде бер нәмәм дә ҡалманы, бөтөрҙөм. Шуға риза булһаң — булаһын, булмаһаң — юҡ.

Хәҙер Малик батша Йосопка әйтә:

— Ни эшләйбеҙ инде, нәрһәләр бөттө, — ти. Йосоп әйтә:

— Миңә һис бер донъя дәүләте бәрәбәр килмәй, инде ҡул һуғышын, — ти.

Риза булып, ике батша ошо урында ҡул һуғыша.

Егетте алып ҡайтып китәләр. Үҙҙәре: «фәкирләндек», — тип, бик ҡайғыға ҡалып ҡайтып баралар икән. Шул ваҡыт Йосоп һорай:

— Ник ҡайғыраһығыҙ? Минең өсөнмө?

— Эйе, — ти тегеләр.

— Ҡайғырмағыҙ, һис кәмемәгән дәүләт юҡ, — ти егет.

Малайҙы апҡайтып, ашатып-эсерәләр ҙә бер бүлмәгә яптыралар. Ҡәтфәр батша төҫкә-башка бик йәмһеҙ, ҡара, шаҙра кеше икән. Ҡатыны Зөләйха матур, йәш икән, ти. Хәҙер мының күҙе төшә бит Йосопка. Көн дә Йосоп бүлмәһенә ашты үҙе килтерә, ти. Ә Йо-

соп асыу мән каршы ала икән тегене. (Зөләйханың күңел биргәнен һиҙеп, һөжүм итеүенән курка.) Зөләйха аптырай ҙа бер карсыкка кәңәш итә. Шул сак әбей әйтә:

— Йосопто ун икенсе бүлмәнә ултырт. Үҙең бик якшы итеп алтын-көмөштән кейен дә калған ун бер бүлмәндән үтеп, уның янына кер, — ти. — Шунан ун ике ишекте лә эл, — ти. — Үҙең аш керет, — ти. — Керет тә әйт: «Йосоп, минең күңелем һиндә, һинең күңелең кемдә?» — тиң.

Зөләйха ошолай эшләй. Ҡәтфәр батша бер ни ҙә белмәй. Зөләйханың һүҙенә яуап итеп, Йосоп: «Мин андай хыянатты эштәй алмайым. Һин минең анам урынында, Ҡәтфәр атам урынында», — ти ҙә, ишектәрҙе кыра тибеп, каса башлай. Был касып бара — Зөләйха артынан йүгереп, баҫтырып бара. Арт итәгенән барып тотоуы була, тегеһенең йыртып касыуы була. Шул вакыт быларға каршы Ҡәтфәр батша килеп сыға. Тегеләр аптырап китәләр. Зөләйха әйтә:

— Һинең һатып алған колоң минә һөжүм итте. Мыңа ниндәй хөкөм бирәһең? — ти. Ҡәтфәр батша аптырап кала. Зөләйха шунда:

— Ун ике йыл зиндан булһын колоңа? — ти.

— Ярай инде әләйһә, иртәгә сәғәт ун икелә суд итәбеҙ, — ти батша.

Иртәгеһен сәғәт ун икегә хөкөмгә йыйылып, Йосопто батша катынына һөжүм итеүҙә гәйепләйҙәр. Йосоп шул сак әйтә:

— Ул һөжүм тиһә, минең кейем йыртылһын (йыртылган булыр. — Төҙ.), мин һөжүм итһәм, аның кейеме йыртылһын, — ти.

Тикшерәләр. Зөләйханың кейеменән йыртык сыкмай, ә Йосоптоконан сыга. Шулай булганда ла, Зөләйха:

— Мин ханымия, минең һүҙем һүҙ! — тип, тегене зинданға яптырып ташлай.

Йосоп зинданда 12 йыл ултыра. Күп ултыра торгас, төш юрауға шәбәйеп китә икән был. Зинданда кеше күп. Шуларҙың берәүһе һөйҙәй:

— Бөгөн төндә төшөмдә бер ток икмәк һатып йөрөй инем, минең икмәгемде тоткан коштар сукып ашап бөттөләр, — ти. Йосоп төштө юрай:

— Һине аҫыуга өс көндән сығаралар. Үлгәндән һуң да өс көн аҫылынып торорһон. Шунда аҫмала торғанда, күҙ-колағынды коштар сукып ашап бөтәләр, — ти.

Ошо вакыт батшалыкта тағы бер әҙәм[34] төш күрә. Ете арык һыйыр, ете һимеҙ һыйыр. Ете арык һыйыр ете һимеҙ һыйырҙы ашай ҙа күккә осоп китә. Мыны күп кеше юрай — тапмай. Зиндандан сыккан берәү шул сак әйтә икән:

— Төрмәлә бер Йосоп исемле йәш кеше төштө бик оҫта юрай, шуны алып килегеҙ, — ти.

Апкиләләр. Мыңа төштө һөйҙәйҙәр. Был әйтә:

— Ете йыл бик каты аш уңа, ерҙең өҫтөнә һыймай, — ти. — Ете [һимеҙ] һыйыр шул була. Шуның артынан ете йыл бик каты аслык килә, ти. [Ете һимеҙ һыйырҙың ете арык һыйырҙы ашап күккә осоуы] — байлык күккә осоу шул, ти.

Был вакыт инде Ҡәтфәр батша үлгән була. Был аҡыллы юраусыны зинданнан сығарып алалар ҙа шунын урынына ултыртып куялар. Йосоп батша булып ултырған дәүерҙә ете йыл бик ҡаты аш (иген) үҫә. Ошо байлыкты ете йыл бик нык итеп йыйып алдыра. Шунан хәҙер ете йыл бик ҡаты аслыҡ килә. Йосоп батша аслыкка бирешерлек түгел. (Бик әҙерләнде бит инде.) Ул батшалыҡ иткән шәһәр Мысыр шәһәре була.

Йосоптоң атаһы, ағалары Ҡәнгән илендәләр икән, анда бик ҡаты аслык, ти. Якуп батша (Йосоптоң атаһы) балаларын йыйғанда әйтә икән:

— Бер илдә, Мысыр шәһәрендә, бик бай батша бар имеш, ти. Һеҙ шаңа* барығыҙ. Мине белмәгән кеше юк, буш ҡайтармаҫтар, — тигән. Ун подводаға ун дөйә мән ун́ улын сығарып ебәрә ашлыҡ һорарға был батша.

Йосопҡа: «Ағаларың ашлыкҡа килә», — тип хәбәр итәләр. «Ағаларыңдың язаһын хөрмәт мән татып ала»,[35] — тиҙәр мына.

Тегеләр ҡапка төбөнә килеп торалар. Йосоп быларҙын унығына ун урын шәйҙәтә (әҙерләтә — Ф. Н.). 15 йәшлек бер малай эшсеһенә: «Һәр бер атты бер урынға куйып, ем бирегеҙ», — тигән фарман була. Малай ағаларын да һәр ҡайһыһын һәйбәт итеп шәйҙәлгән урынға керетә. Һәр береһенә ел мендәр ҡуйылған (йөн юк, шуға ел мендәр). Хөрмәт ҙур инде. Һыйлай башлайҙар тегеләрҙе. Ун көн кунак итәләр ағайҙарҙы. «Батша ризык бирәме? Ҡасан ҡайтара?» — тегеләрҙе шул борсой.

Ун көндән һуң, ағайҙар янына теге малай килә лә:

— Анау өйгә ашҡа керегеҙ, — ти.

Керәләр. Керһәләр, стенала туғандарын һаткан дугавурҙы күреп, аптырап китәләр. Шунда уҡ бер мөһөр (фотокарточка — Төҙ.) ҙә эленеп тора икән. Тегеләр телһеҙ булып, ҡарап торалар, ти. Ашнаҡсы бала:

— Нимәгә иҫегеҙ китеп алъяныгыҙ? — ти.

— Беҙҙең ваҡытында бүре ашаған бер энебеҙ бар ине, шунын мөһөрө ҡайҙан килгән? — тип, хайран калып торабыҙ, — тиҙәр икән.

Элек ағалары, Йосопто диңгеҙгә ташлағас, кайтып аталарына: «Туғаныбыҙҙы бүре ашаны», — тип алдағайнылар. Ышандырыр өсөн бер ҡош атып, шуның ҡанына Йосоптан һыҙырып алған күлмәкте буяп алып ҡайтҡайнылар. Аталары: «Ул бүре ҡайҙа?» — тип һорағас, «Урманда», — тип яуап биргәйнеләр. «Күлмәкте ниңә йыртмаған? Барығыҙ бүрене тотоп килтерен!» — тип кире сығарып ебәргәйне улдарын. Йөгөрөп барып, урманда йөрөгән бер ҡарт бүрене ҡыуып килтергәйнеләр ул саҡта. Батша: «Ниңә минең баламды ашаның?» — тип һорағас, бүре: «Һинең баландың ите минә хәрәм. Мин был яҡҡа яңы килдем. Бер балам бар ине, аҙашып калды, — ти. — 17 көн булды, балам хәсрәтенән һис бер тәғәм ашамағам», — тигәйне. Шунан Якуп батша, аш бешертеп, бүрегә аш ҡуйҙырғайны. Туйғандан һуң урманға, балаһы янына апарып ташлатҡайны[36].

Ашнаҡсы бала мөһөргә хайран ҡалып ҡарап торған ағайҙарға ҡарап:

— Батшам һеҙгә иген бирмәй. Иң элек уның ағаһы Ибниәминде алып килегеҙ, – ти. Ибниәмин атаһы янында ҡалған була.

Тегеләр ун көн ятып, буш ҡайтып китәләр шулай. Ҡайтҡас, булған мәсьәләне бөтәһен һөйҙәп бирәләр.

— «Ибниәминде алып килмәйенсә, ашлыҡ бирмәйем», — тип әйтте Мысыр батшаһы, — тигәндәр, ти.

— Ибниәминде бирмәйем. Береһен юғалттығыҙ, инде икенсеһен һәләк итергә итәһегеҙме? — тигән, ти, аталары.

Бирмәйем тиһә лә, ни хәл итһен? Аслыҡтың ҡатылығы батшаның ихтыярын һындыра. Ун бер подвода* менән тағы китәләр улдары.

Быларҙың килә торған юлында Йосоп, охранса* кейенеп, охранник* булып йөрөгән була икән, ти. Хәйлә ҡорған: икешәр подводаға иҫәпләп, бер ҡапҡа яҫатҡан. Ун кеше бер ҡапҡанан үтте, ти, Ибниәмин яңғыҙы ғына ҡалып ҡуйҙы, ти. Хәҙер мының янына «охранник» барҙы икән, ти. Тегеһе аҙашып ҡалғанына көйөнөп, илап тора, ти. «Охранник»:

— Әйҙә, үҙем алып барып урынлаштырам, — тип, үҙе торған ергә алып китте, ти. Ибниәмин әйтте, ти:

— Һин минең телде ҡайҙан беләһең?

— Мин һеҙҙең яҡта хеҙмәтсе булып торғайным элек, — тип әйтте, ти, «охранник».

Былар өйгә ҡайтып инәләр. Охранса кейемен сисеүе була — ағаһы Йосопто танып алыуы була. Күрешәләр, бик ҡаты илашалар.

Икенсе көн Йосоп тағы охранса кейенеп, Ибниәминде, «Бына энегеҙ аҙашып ҡалған», — тип, ағалары янына алып бара.

Ашнаҡсы аш килтерә, ике кешегә бер тәрилкә мән. Ағалары тағы икешәр ултыра, әлеге Ибниәмин тағы яңғыҙ ҡала. « Мин тағы яңғыҙ», — тип, Ибниәмин ғәрлегенән илай. «Охранник» әйтә:

— Илама, үҙем ултырам янына, — ти.

Ултыра. Икәүләп ашайҙар былар. Ашап бөткәс, «охранник» сығып китә. Ашнаҡсы малай:

— Һеҙгә бөгөн батша аш тейәтә, — ти.

Сығып, ун бер подвода аш тейәйҙәр. Шунда «охранник» Ибниәминдең йөгөнә бик ҡиммәтле алтын беҙәлек* тыға хәйлә мән[37]. «Шаулама, мин һине оғролап, алып ҡалырмын», — ти.

Юлға сығалар былар. Тегеләрҙең артынан бер ваҡыт ҡыуғын килеп еткән, ти. «Батшаның алтын беҙәлеген урлап ҡасҡанһығыҙ», — тип тентей башланылар, ти, арбаларҙы. Тентеп киләләр, киләләр икән, ти, беҙәлек Ибниәминдең йөгөнән сыҡты, ти. Ибниәминде тотоп, шал ерҙә ике йыл ярымға хөкөм итәләр. Шанда (шунда — Төҙ.) бер ағаһы әйтә ҡыуғынсыға:

— Ибниәминде бушат. Мине алып, төрмәлә биш йыл ултырт. Әтү беҙ атайыбыҙға нисек күренербеҙ? — ти.

Теге тыңламай. Ибниәминде алып китәләр. Ағалары аптырауҙа ҡалдылар. «Нисек ҡайтып әйтергә инде атайыбыҙға?» — тиҙәр. Ошонда бер хәйлә (закун) сығаралар. Ағаларының араһында бер

бак̇ырыусылары* бар икән. Ул бак̇ырып ебәрһә, кешенең йөрәге ярыла икән. Шамғун исемле, ти, ул. «К̇алаға барып, мин бак̇ырайым — үлгәне үлер, үлмәгәненә һеҙ һуғышырға барығыҙ», — ти икән Шамғун[38].

Шулай ти ҙә, үҙе генә китеп бара. Байтак̇ вак̇ыт үтә, к̇алғандары бер ҙә тауыш-фәлән ишетмәйҙәр. Бер аҙҙан һуң йөрөп-йөрөп к̇айтып керә. Ағалары:

— Ни булды? — тип һорашалар.

— Минең үпкәм һулыны, ғәйрәт к̇айтты, — ти Шамғун. (Батша янында булғанда, бер бала[39] мының арк̇аһын һыйпап үткәйне. Шуға ғәйрәте к̇айтып, бак̇ыра алмаған.)

Былар аталарына к̇айталар. (Әмәл юк̇!) Һөйҙәп бирәләр барын да.

— Балаң оғро булып сыкты, — тиҙәр. Шул сак̇ аталары:

— Бөтөнөһө хәйлә. Мине өйҙә ултырған еремдән ике баламды бергә күрәм, — тигән.

— Атайыбыҙ һаташа, һандраған икән, — тип уйлағандар балдары.

Якуп күп к̇айғынан, күп илауҙан һук̇ырайған икән. Тышк̇а сығып, моронон күтәрер ҙә, еҫкәнер ҙә ултырыр булды, ти.

— Ниңә алай итәһең? — тигәс.

— Ел мән Йософомдоң еҫе килә, — ти икән. Диңгеҙгә ташлағандан бирле 70 йыл үткән, ти, бит инде. Балалары: «Атабыҙ хыялый булды», — тип уйлайҙар икән, ти.

Бер заман бер к̇атын һыуҙа кер сайк̇ай, ти. Күл буйлап к̇ына, тиҙ-тиҙ атлап, бер иркәс* килә, ти. Ул, кер сайк̇аған к̇атын эргәһенә туктап:

— Якуптың өйө к̇айҙа? — тип һораған, ти. Шанда теге к̇атын:

— Тиҙ-тиҙ атлап киләһең, әллә Як̇уптың Йософонан хәбәр килтерәһенме? — тигән, ти. (К̇атын Йосоптоң бағыусыһы, нәнкәһе, булған икән. Уның Як̇упк̇а барғанда бер етем улы булған. Шаны Як̇уп ете йәшендә һатып ебәрә. К̇атын бик нык̇ илаған. Бер вак̇ыт илап ултырғанда, ул ғәйептән* бер тауыш ишетә: «Эй, к̇атын, илама. Як̇уп һинең баланды һатып, ете тамсы күҙеңдән йәш түктерҙе, анын өсөн мин Як̇упты 70 йыл илатам. 70 йылдан һуң мин Як̇упты Йософона күрештерәм. Анан алда һин үҙ балаң беләп күрешерһең».)

— Эйе, — ти.

— Як̇уп мән Йосоп күрешмәҫ борон мин улым мән алдарак̇ күрешергә тейеш инем, к̇айҙа минең балам? Һин кем? — ти к̇атын.

— Мин ана шул ете йәштә һатылған бала инде, — ти теге иркәс. Шул вак̇ыт к̇осак̇лашып, үбештеләр, иҫтән ауып киттеләр, ти.

Иҫ ингәс, икәүләп, Як̇упк̇а һөйөнсөгә барып керҙеләр, ти. Һөйөнсөгә килгән ир Йосоптоң диңгеҙҙә кейгән күлмәген (диңгеҙҙә бер якшы йән эйәһе осрағайны бит Йосопк̇а) к̇уйынынан сығарып, Як̇упк̇а бирә. «Йосоп сәләм әйтте. Ошо күлмәк мән күҙен һөртһөн атайым тине», — тигән, ти. Як̇уп күлмәкте алып күҙен һөртөүе була — күҙенең асылып китеүе була.

Яҡуп тиҙ генә йыйына ла улының янына, Мысыр ҡалаһына, китә. Был ваҡыт Мысырҙа ла аслыҡ:

Алтынсы йыл уғыл — ҡыҙын һәм һаттылар,
Етенсе йыл һатырға
Һис бер нәрҫә
тапманылар.

Аслыҡтың һуңғы йылы. Йосоп халҡын йәлдәй. Ни эшләргә белмәй, халҡын йыйҙыра ла былай, ти:

— Миндә шундай матурлыҡ бар. Мынаса аны һис кемгә күрһәтмәй йәшереп аҫыраным. Инде аптырағандан, пәрҙәмде асып, һеҙгә күренәм. Шуны күргәс, бер сутка* алданырһығыҙ, тамаҡ эҙләмәй. Мин ишәгемде эйәрләрмен — ул бик ҡаты тауыш бирер. Һеҙ шал саҡ юлға сығып яра теҙелегеҙ (юлдың ике яғына теҙелегеҙ — Төҙ.). Мин арағыҙҙан үтеп китәрмен, һеҙ ҡарап ҡалырһығыҙ. Шунан өйөгөҙгә ҡайтып бер сутка аслығығыҙҙы онотоп, ял итеп ятырһығыҙ, ти.

Халыҡ риза булып тарала. Батша икенсе көн ишәген эйәрләгәндә ишеге нык итеп тауыш биреүгә, халыҡ юлға сығып, яра теҙелә. Батша үтеп барғанда, бер әбей: «Йосоп! Йосоп!» — тип баҡырып (ҡысҡырып — Төҙ.) ҡала. Аның күҙе күрмәй, аяғы йөрөмәй. «Минең һиңә бирергә бер нәмәм дә юк», — тип, Йосоп уның янына бармай, үтә лә китә. Икенсе көн дә шулай була. Өсөнсө көн, бик нык баҡырғас, түҙмәй бара әбей янына.

— Әбей, һиңә ни кәрәк? Минең ҡулымда һис бер тәғәм юҡ.

Шунда әбей (был Зөләйха була) яуап бирә:

— Миңә бер нәмә кәрәкмәй, түлкә ҡулыңдағы ҡамсыңды бир, — ти.

Был бирә. Әбей ҡамсыны ҡулына алып, «өфф» тип, өрөп ебәрә лә, «тот шул ерҙән», тип, Йосопҡа тоттора. Йосоптоң ҡулы түҙмәне, утлы тимер тотҡандай булды. Атып ебәрҙе ҡамсыны. Шул ваҡытта әбей яуап бирҙе:

— Түҙмәнеңме? Мине ул ут 40 йыл көйҙөрҙө. Һинең ҡулыңды ғына көйҙөрҙө, ә минең йөрәгем янды.

— Һин кем һуң? — ти Йосоп.

— Мин Туймыс ҡыҙы Зөләйхамын, — ти. Ҡәтфәр батша ҡатыны. Һине һатып алып, аҫырап үҫтергән Зөләйха мин. Инде миңә ни тип яуап бирәһең? — тигән. — Алһаң да, алмаһаң да, хәҙер минән ҡотола алмайһың, — тигән.

Йосоп уйлай: « Алайым. Барынса ултырыр, барынса ашар», — ти.

— Ярай улайһа, вәғәҙә. Ҡисен никах уҡытырбыҙ, — ти ҙә китә.

Шул ваҡыт Зөләйхаға бер ерҙән бик якшы ел бәрелде [лә], — Зөләйха 17 йәшлек ваҡытына килде [лә ҡуйҙы, ти].

Кис була. Никах, туй йолаһына хатыннар йыйылған. Йосоп түргә сығып ултыра. Инде йәшлеккә сыҡҡан Зөләйха инәлтә инде: бер ҡыуышҡа кереп йәшенә.

— Зөләйха ҡасты, Зөләйха йәшенде, — тиҙәр ҡатындар. Йосоп аптырай:

— Ул ни эш? — ти (күтәреп килтерерҙәрме, ҡалай итеп килтерерҙәр әбейҙе тип ултыра ине бит инде).

Ҡатындар, Зөләйха янына барып:

— Ул ни ҡылығың, Зөләйха? Батша асыулана бит, бар тиҙерәк, — тиҙәр.

— Ул мине 40 йыл инәлтте. Минең аны әҙерәк инәлтергә хаҡым бар, — ти икән теге.

Шулай ҙа ҡатындар мыны тотоп, батша янына килтерәләр. Йосоп йәтә:

— Зөләйханы килтерең. Был ниндәй ҡыҙ? — ти. — Мин Зөләйханы күргәнем бар, мин аны беләм бит. Был — ул түгел, — ти.

Шунда Зөләйха яуап бирә:

— Туймыс ҡыҙы Зөләйха мин. Һине һатып алып үҫтергән Ҡәтфәр ҡатыны, — ти.

Ҡушылып яткас, Йосоп аптырап һораны:

— Был ни хәл булды һуң? Һин Кәтфәр мән йәшәнең дә? (Теге ҡыҙ булган була.)

— Ҡәтфәргә ҡушылыр булгас, бер ҡыуышҡа кереп, бик ҡаты илап ултыра инем, шунда күреп ҡалдым. Чистый мин булып[1] батша янына бер ен ҡыҙы йоҡларға кереп китте. Көндөҙ хеҙмәтендә мин булдым, төнгө хеҙмәтендә ул булды. Мине һинең өсөн Яббар алла һаҡланы, — тигән Зөләйха.

Мына шул Йосоп мән Зөләйха тарихы. Был башҡорт тарихы. Бала ваҡытта ишеткәйнем.



## 5. ЙОСОФ МЕНӘН ЗӨЛӘЙХА

*(Вәлиева Нәғимә варианты)*

Яҡуп атлы пәйғәмбәр йәшәгән. Уның ун бер уланы булған. Уны — бер инәнең, ун беренсеһе икенсе хатыннан тыуган. Бәкәсе* Йософ исемле икән. Әткәһе аны бик нык яраткан, янынан ебәрмәгән, ти. Ағалары Йософтан көнләшкән.

Бер көн Йософ төш күрә. Имеш, ун йондоҙ бөркәнсеген һалып, тулған айға сәждә ҡылды, ти. Төшөн әткеһенә һөйләй. Әткеһе төштө юрай: «Балам, һин батша булырһың, ун ағаң кәпәсен һалып, баш эйәрләр», — ти. Һөйләмәҫкә ҡуша. Яҡуптың Бәлхизә исемле аҫырау ҡыҙы мыны тыңлап тора. Йүгереп барып, Йософтоң ағаларына әйтә:

— Йософ төш күргән. Әткәйегеҙ юраны. Йософ батша буласаҡ, һеҙ уға сәждә ҡыласаҡһығыҙ, — тип көлә.

Ағаларының би-ик тә гәрлектәре килә инде. Ныҡ ғәрсел, көнсөл булғандар алар. Йософто юҡ итергә кәнәшләшәләр. Әткәләренә барып:

— Беҙ һунарға сыҡмаҡ булабыҙ. Йософто ла алайыҡ, — тиҙәр. Яҡуптың Йософто ебәрәһе килмәй.

— Бөгәсә мин яман төш күрҙем, эсем боша. Йософ ҡалһын бире, — ти. Уллары һаман ныҡыша. Йософто алдап апсығып китәләр. Йыраҡлашҡас, аны бөрөп алалар. Өҫтөнән көлмәгән систерәләр.

— Көлмәк булдыңмы беҙҙән, әткәйҙән төш юраттыңмы? — тиҙҙәр. Ҡаты итеп туҡмайҙар. Үтермәк булалар таш бәреп. Бәкәс ағаһы Йософто ҡыҙғана. «Юҡ, үтермәйек», — тип башҡаһына ялбыра. Йософтоң аяҡ-ҡулын бәйләп, ташландыҡ ҡойоға һалалар. Йылан-саяннар мыжғып ята икән ҡойола. Алар Йософҡа, хоҙай әмере буйынса, ҡағылмаған. Ябраил фәрештә Йософтон аяҡ-ҡулларын сисә, ашамаҡҡа килтерә. Аллаһы тәғәлә ҡушҡан була уға, Йософто тәрбиәләргә.

Ағалары бер ҡорҙо атып һуялар. Ҡанын Йософтоң күлмәгенә һөртәләр. Әткәләренә: «Йософто ҡорт ашаны», — тиҙәр. Ялғанлайҙар яуызлар. Яҡуп пәйғәмбәр биһуш була. Аңына килгәс әйтә:

— Шул мәлғүнне (ҡортто әйтә инде) тотоп килтерегеҙ, күрәйем үҙен, — ти.

Бер бүрене апкиләләр. Ҡорттоң хоҙай көҙрәте менән теле асыла:

— Мин ашаманым Йософто. Өс көн тәғәм ейгәнем юҡ, — ти. Олой-олой илай.

Яҡуп бүренең тамағын туйҙыра. Иркенә сығарып ебәрә. Йософто туғаннары харап иткәнен белә.

— Алла һеҙҙе мынын өсөн яҙалар, — ти. Үҙе зар илай икән. Ҡапыл күҙҙәре дөм һуҡырая. Уланнары үҙҙәренең хөсөтөн тана. «Йософто ҡойола ҡалдырҙыҡ», — тиләр. Апҡайтабыҙ, тип сығып китәләр. Ҙур бер каруан килеп туҡтаған икән. Йософто сығарып ятыуҙары икән. Ағаларының тағын көнсөллөгө тыуа. Йүгереп барып:

— Был беҙҙең ҡолобоҙ, ай, ләғнәт, ҡаскан ине, таптыҡ! — тиләр. Йософҡа тын алырға ла ирек бирмәйләр. Йәнә аңа ташланалар. Ҡаруан башлығы Йософтоң сибәрлеген күреп, хайран ҡала.

— Һатығыҙ ул ҡолоғоҙҙо, алам, — ти.

Тегеләргә шул кәрәк була инде.

— Һатабыҙ, һатабыҙ, — тип ҡысҡырышалар. Йософтоң бәкәс ағаһы ғына ҡатышмаған. Бер ярҙамсыһыҙ булған. «Әйткәйгә әйтһәң, һине лә үлтерәбеҙ», — тип ант иттергәннәр башҡалары.

Йософто бығаулап, арыҡ бер дөйәгә ултырталар. Бер ҡара ғәрәпте һаҡламаға ҡушалар. Йософ иленән, әткәһенән айырылыуын белеп:

Яуыз ағамнар айырҙылар,
Тыуған илемнән, әткәмнән, — тип

һамаҡлап китеп ултыра икән. Ғәрәптен мыңа асыуы сыға. Йософҡа ҡамсы менән ора. Йософ һығылып төшә. Тағы һамаҡлай. Ғәрәп был юлы бик ҡаты итеп ҡамсылай. Ҡапыл көн ҡараңғылана, һүнә, туфан ҡуба.

— Был ни ғәләмәт, ни ғәрәсәт, — ти каруан башлығы. — Кемегеҙ гонаһ ҡылды? — тип ҡысҡыра. Теге гәрәп:

— Мин! — ти.

— Ниткән гонаһ ул? — ти башлыҡ.

— Ҡолға ҡамсы менән орҙом, — ти гәрәп.

— Ғәфү ҡыл, — ти хужаһы.

Һаҡсы Йософтоң алдына йығылып, ғәфү һорай. Йософ ярлыҡай. Күк асыла, туфан бөтә. «Был изге зат,» — тип эсенә һала каруан башлығы.

Йософтоң быҒауын һалдырта. Ашата-эсерә. Өҫтөнә матур кейем кейҙерә. Йософ бик матур була. Йөҙө нурлы икән. Ауыллар аша үткәндә, кешеләр йүгереп сығып, һоҡланышып ҡарайҙар икән. Каруан башлығы маһайған шундай матур ҡолдо ҡулына төшөргәнгә. Йософто күрергә килгән халыҡтарҙан аҡса һауа икән. Нәфсеһе ҡотороп киткән. Халыҡтарын бик ҡыҙғанған Йософ. Битенә ҡара туфраҡ алып һөрткән. Улар күрмәгәндә генә. Каруансылар аҡса алмаһын тип инде бәндәләрҙән. Һуңғы аулларны үткәндә, кешеләр Йософто күрергә сыҡмаған да ҡуйған, ти.

— Битем бысыранды, йыуынып-сайынып алаһым килә, — тигән Йософ. Шунан йылғаға төшә. Һаҡсы ҡарап тора. Ҡасмаһын тип инде. Яр буйына яйлап ҡына укалары (тәңкәләре) һыҙырылған бер һуҡыр балыҡ килә икән. Үҙе шундай дәү, ти.

— Һыртыма баҫып сайын, — ти балыҡ, телгә килеп.

Һаҡсы ҡурҡып тороп ҡаса. Балыҡ Йософтоң пәйғәмбәрлеген белеп килгән. Йософ йыуына, доға ҡыла балыҡҡа рәхмәт әйтеп. Балыҡ йөҙөп китә. (Ул бер пәйғәмбәрҙе һоғонған булган икән. Алланың ҡарғышы төшкән икән. Икенсе бер пәйғәмбәр ярлыҡап доға ҡылһа, күҙең асылыр, тигән хоҙай.)

Йософно каруансылар ҡасҡан тип уйлай. Ул килгәс, тамам аптырайлар. Йософноң йөҙөндә нур уйнап торған. Мысыр батшаһына апарып һаталар аны.

Батшаның Зөләйха тигән ҡыҙы була. Һылыу икән үҙе шундай. Әткәһе менән ҡолдар ҡарап йөрөгәндә, Йософҡа төшә күҙе. Һуштан яҙып ғашиҡ була. «Эй хоҙаның рәхмәте, ете йыл төшөмдә күренеп ыҙалаған бәндә ошбу икән», — ти Зөләйха.

Әткәһенә әйтмәй. Йософно көн дә күҙләп йөрөй. Бер көн күрмәһә, сыҙар әмәле юҡ. Түҙемһеҙ, холоҡһоҙ була Зөләйха. Йософно батша яратып өлгөргән. Бик тәгәрле, тырыш булған Йософ. Зөләйха ғишҡын асмаҡсы була. 40 ғәйбәтсе хатын мыны һиҙеп, ғәйбәт тараткан. Зөләйханың асыуы сыҡҡан. Хатыннарны ҡунаҡҡа саҡыра, һыйлай. «Һеҙгә бер әкәмәт күрһәтәм», — тип ҡулларына бысаҡ тоттора. Алларына һәр береһенең берәр баш һыуған һала. Шунан Йософно саҡырып индерә. Бисәләр аны күргәс, һыуған тураһы урынына бармаҡларын ҡырҡҡылап бөтөрәләр. Мына шулай Зөләйха уларҙан үс ала.

Йософно үҙенә ҡаратмаҡ өсөн, Зөләйха һигеҙ ожмахише һигеҙ бүлмәле йорт һалдыра. Шунан Йософно саҡыра. «Ҡасыш уйнайыҡ», — ти. Йософноң теләге булмай. Зөләйха ғәрләнеп, Йософноң ҡулынан тарта. Йософ уның күлмәк итәгенә абына-һөрлөгә сығып йүгерә. Зөләйха: «Тотоғоҙ уғрыны!» — тип ҡысҡырып ҡала. Аларҙың ҡыланышын бәкәс кенә бала ҡарап торған була.

— Йософ мине көсләй яҙҙы, — тип, әткәһенә ошаҡлай Зөләйха. Теге бала түҙмәй әйтә (хоҙай әмере буйынса):

— Дөрөҫ түгел, ялған! Зөләйха апай үҙе Йософҡа йәбеште, — ти.

Зөләйха илап әткәһен дүндерә. Йыртылған итәген күрһәтә. Йософно зинданға ябалар. Аҙна буйы ашамаға бирмәйләр. Зөләйха үс алһа ла, Йософто күрәһе килә. Хеҙмәтсе кейемендә аш апара. Йософ уны таный, ашын ашамай. Зөләйха, өйөнә ҡайтып, кейемнәрен йолҡоп илай, ғәрлегенән.

Зиндан эсе ҡапыл яктырып китә. Ябраил фәрештә Йософҡа ризыҡ килтерә. Ике уғры ла булған була төрмәлә. Улар төш күрәләр.

— Берегеҙ ҡотолор, икенсегеҙ аҫылыр, — тип юрай Йософ төшләрен.

Уғрыларның бере нахаҡҡа ултырған була. Төш дөрөҫкә сыға. Теге әҙәмнәрнең бере ҡотола, икенсеһен үлтерәләр.

Зөләйханың Йософно күрәһе, уйын беләһе килә. Ҡарауылсыны, аҡса биреп, һатып ала. Шым ғына тыңлап тора. Йософ һамаҡлап ята икән:

— Яуыз ағамнар арҡаһында жафә сигәм,
Ошбу хоҙай тәкдирелер, барча күнәм,
Бер гонаһһыҙ зиндан ҡочоп ята бирәм,
Барча ғазапларға түҙә киләм[41]...

Зөләйха Йософно ҡыҙғана. Әткәһенә барып әйтмәк була. Һауалылығы баш бирмәй. Әҙрәк ятһын, тип дәхи уйлап ҡуя. Йософ зинданда төш күрә.

Аллы-гөллө сәскәле баҡса, имеш,
Ҡошлары һайрай сут-сут өҙлөп, имеш,
Йөҙөндә нур балкып уйнай, имеш,
Зиннәтле кейемгә төрөнгән, имеш.

Йософ үҙенең батша булырын мына шулай алдан күрә. Төшөн ҡотолорона юрай. Зөләйханың әткеһе лә төш күрә. Һигеҙ дәү ҡыҙыл һыйыр, һигеҙ дәү ҡара һыйыр, тип. Берәү ҙә юрай алмай икән. Теге төрмәнән ҡотолған бәндә батшаға барып әйтә: «Йософ юрай белә», — тип. Йософно килтерәләр.

— Һигеҙ ҡара һыйыр — һигеҙ йыл аслыҡ, ҡырылыш булыр; һигеҙ ҡыҙыл һыйыр тигәнең — аслыҡтан һуң туҡлыҡ килер,[42] — ти Йософ.

Һынап ҡарамаҡ булалар. Төш ыраҫ килә. Батша, аслыҡ булдырмаҫ өсөн, ку-уп иттереп ашлыҡ әҙерләтә. Халыҡ астан үлмәй ҡала. Башҡа илдәрҙән килеп һораналар. Йософноң ағалары ла

килә. Батша, Йософто төрмәнән сығарып, үҙенең яҡыны итеп ҡуйған була. Йософ бик тә гәҙел сабыр була. Килгән әҙәмдәргә ашлыкты үлсәп оҙатып тороусы ла Йософ була. Ағаларына тәүҙәрәк үҙен танытаһы килмәй. Бәкәс ағаһы уны танып ҡала. Йософ уға күҙ ата. Дәү ағаларына мул иттереп иген тейәтә. Иң бәкәсенең ҡапсығына бер алтын кәсә йәшерә. Тикшерәләр. Агалары тотола.

— Кем урлаған, шуны алып ҡалығыҙ, — ти икән дәүҙәре. Йософтоң агаларының эшәке булыуҙарына иҫе китә. Бәкәс ағаһын ҡалдыра. Үҙен уға таныта. Ҡунаҡ итә, һыйлай. Һуңынан, әткене алып кил, тип ҡайтарып ебәрә. Был саҡ Яҡуп пәйғәмбәр Йософон төшөндә күргән була. Улы һау-сәләмәт, иҫән икән тип. Бәкәс ағаһы шатланып ҡайтып инә өйләренә. Әткәһенә҆ң һөйөнсөләй. Анһы ышанмай тәүҙә. Йософ үҙенең ебәк күлдәген биреп ебәргән була. Әткәһенең ҡулына тотторалар. Ошбу күлмәк менән битен, күҙен һыпырғайны, хоҙай рәхмәте менән, яңынан күҙе асылды, ти, Яҡуптың. Дәү уланнары бәлтерәп төшә, Йософ беҙне үтерер инде, тиләр. Әткәләре: «Йософ һеҙҙе нишләтһә лә эшләтһен», -—ти. Тиҙерәк Йософона ашҡына. Улын барып таба. Ҡосаҡлашып, илашып күрешәләр. Әткеһе шатланып бөтмәй. Ағалары Йософтоң аяғына йығылалар, кәпәсләрен сисеп, сәждә ҡылалар. Йософ әткеһе хаҡына ғәфү ҡыла.

Йософ ғәҙел, тоғро була. Халыҡлар уны нык яраталар, маҡтайлар. Батша үлгәс, батша итеп ҡуйғаннар икән.

Бер саҡ Йософ батшалығын ат менән ҡарап йөрөй. Ҡапҡа төбөндә бер ҡартайып бөткән ҡарсыҡ ултыра икән. Сәсләре ҡырауҙай ап-аҡ, ти.

— Һин кем, нишләп мында ултыраң? — ти Йософ.

— Зөләйха булам. Йософ арҡаһында яфа сигәм, ғишҡым мине ҡартайтты, — тигән тегеһе.

Хоҙай тәгәлә Зөләйханы ошо хәлгә төшөрә, Йософто ялғанлап зинданға япҡанға, һауалы булғанға. Йософ Зөләйхаға үҙен таныта. Ҡапыл ҡулынан ҡылысы төшөп китә. Зөләйха аны ала ла тыны менән өрә. Ут ялҡыны күренеп ҡала. Ҡылыс һабы Йософтоң ҡулын бешерә.

— Һин сәк кенә лә утҡа түҙмәнең. Мин күпме яндым, көйҙөм, — ти Зөләйха. Аның ғишҡы шундай көслө булған.

Йософ Зөләйханы ҡыҙғана. Алланан аны үҙ хәленә ҡайтарыуҙы һорай. Ябраил килеп Зөләйханың битен ҡанаты менән һыпыра. Әүәлге йәш, матур сүрәткә ҡайта Зөләйха. Йософтың ғишҡы уяна. Алар ҡауыша. Балалары ла була аларның. Тигеҙ ғүмер кисереп, татыу йәшәгәннәр, ти, Йософ менән Зөләйха. Әткәһен дә, ағаларын да бергә йәшәткән, ти, Йософ пәйғәмбәр.

# 6. ЙОСОП ҺӘМ ЗӨЛӘЙХА

*(Байрамғолова Хәҙисә варианты)*

Борон Яҡуп пәйғәмбәр булған. Шуның улы Йосоп булған. Унан кесеһе Һибиннәмин тигән ҡустыһы, Динә тигән апаһы булған. Әсәләре үлеп киткәс, ҡарт икенсегә әбей алған. Уның ун улы булған, бер генә эйәрсән үгәй ҡыҙы булған. Ун ике йәшендә Йосоп төш күрә. Һәм шуны атаһына һөйләй:

— Мин төш күрҙем, атай. Ун бер йондоҙ күрҙем, бер ай күрҙем, — ти.

— Ах, улым, ҙур падишах булаһың, ун бер туғаның һиңә хеҙмәт итәләр. Һиңә пәйғәмбәрлек бирәләр, — тип юраған атаһы.

Теге үгәй ҡыҙ быны тыңлап торған да, ағаларына барып:

— Йосоп һәйбәт төш күрҙе, атаһы изгегә юраны, ун бер туғаның һинә хеҙмәтсе була, һин үҙең, Йосоп, пәйғәмбәр булаһың, — тип юраны, ти. Шул саҡ ағалары:

— Юҡ, нишләп беҙ уға хеҙмәтсе булайыҡ. Хәҙер беҙ уны үлтерәйек, юҡ итәйек.

Былар барыһы Йосопто үлтерергә һүҙ ҡуйышалар. Яҡуп пәйғәмбәр янына баралар ҙа:

— Йосопто беҙ сахараға алып сығабыҙ, беҙҙең менән ебәр уны, — тиҙәр, ти. Яҡуп ебәрмәгән. Тик уны, ай-вайына ҡуймай, ризалаштырғандар. Динә Йосоптоң оҙон сәстәрен (борон пәйғәмбәрҙәрҙең сәсе оҙон булған бит. — Б. Х.), ынйы менән матурлап, теҙеп үргән — Йосоптоң сәстәренән нур бөркөп тора икән.

Динә үҙе, илай-илай, сәс үрә икән. Илашып оҙатып ҡалғандар Йосопто. Уны алып сығып киткәндән һуң күктән Яҡуп пәйғәмбәргә: «Етмеш!» тигән тауыш килгән. Ул тауыш өс тапҡыр ҡабатланған.

Аһдариға, етмеш йылмы икән?
Вайтариға, етмеш көнмө икән?
Аһтариға, етмеш аймы икән? —

тип һамаҡлаған Яҡуп пәйғәмбәр. Ә был ваҡыт Йосопто һыуһатып, тамағына бирмәй асыҡтырып, бер-береһенән уҙҙырып, йә сикәһенә, йә башына һуғып, интектереп алып барып, бер ҡойоға төшөрөп ебәргәндәр. Ҡойо төбөндә бер таш ултырғыс булған икән. Йосоп, шунда һыу теймәй, ултыра икән. Йәһүдә тигән ағаһы Йосопто көн һайын барып-барып ҡарап торған икән.

Мәлек батшалығында Зөләйха тигән ҡыҙ булған. Ул Йосопто төшөндә күргән дә ғашиҡ булған. Зөләйха үҙе бик ҙур батша булған, падишаһ булған. Бер саҡ ул бөтә каруанын, аҙыраҡ байлығын алып, Йосопто эҙләп сығып киткән. Шул ҡоҙоҡ янына ла килеп еткәндәр, ти. Ҡойо эсенән Йосоптоң нуры күккә олғашып тора икән, әллә ҡайҙан матур булып күренә, ти. Йәһүдә тигән ағаһы ла ошо ҡойо янында булған. Ул үҙен, мин Йосоптоң ағаһы, тип таныштырып, һатыулашырға тотонған. Йосопто ҡойонан сығарып, әллә күпме аҡса биреп, һатҡандар. «Быны бығаулап алып китегеҙ, ул оғро

кыскынсы», — тип әйткән ағаһы. Шулай Йосопто койонан алып киткәндәр.

Бер вакыт Йосоп юлда әсәһенең кәберен күрә. Быгаулы көйө һикереп төшөп кәбергә барған. Әсәһе менән һөйләшә башлаған. Әсәһе кәберҙән өндәшә икән: «Ни эшләп улай булдың, балам? Ниндәй хәлдәргә төштөң?» — ти. Йосоп барыһын да һөйләп биргән, үҙе кәбер өҫтөнә ятып илай икән. Ылаусылар шул сак уны тукмап, яра һуғып, бәйләп килтереп һалғандар арбаға, үҙҙәренең йөгөнә. Йосоп шул сак, илай-илай, Алланан һорай икән: «Бер ғибрәт күрһәт инде быларға, күрһәт!»

Бына шунан башланған, ти, дауыл, борсак ямғыр, инде тегеләрҙе үлтереп кенә алып бара, ти. Ә Йосоптоң эргәһенә ямғыр төшмәй, ти. Эргәһенә килеп карайҙар икән — коп-коро икән, уға бер ел-ямғыр, һыу теймәй икән. [Бер уҙғынсы]:

— Был колға зыян тигеҙҙегеҙме әллә? Был колдоң карғышылыр ул, – тигәнгә былар, ылаусылар, яуап бирә икән.

— Беҙ уны касып китеп ултырғанында, тукманык, — тигәндәр.

— Хәҙер һеҙ унан ризалык алығыҙ, барығыҙ ҙа аяғына колағыҙ, — тигән [теге].

Шулай итеп, Йосоптоң быгауҙарын сисеп, кейендереп, һәйбәт итеп ултырткандар икән — ямғыр ҙа бөткән, ел дә туктаған, ти.

Шунан Йосопто алып киткәндәр Мысыр-шәһәргә. Килһәләр, Зөләйха [алдан барып] был шәһәрҙе матур итеп буяп, алтынға манып һарай эшләтеп, шишмәләр ағыҙып, гөлдәр менән биҙәп, сәскәбакса үҫтереп, ынйы-мәрйен менән буяп (куйған, ти]. Үҙе каршыларға көтә инде Йосопто. Килгән ылаусыларҙың шәһәргә инеүе булған — бөтә донъя нурға сумған икән. Йосоптоң һылыулығы, нуры шулай күккә олғашып килә икән. Бөтәһе лә, был ниндәй кеше икән, тип, һәр береһе (көллөһө лә) ат башындай, алтын тотоп, килеп күрәләр, ти. Батша ла байығып киткән инде: «Байып киттем бит әле», — тип шатлана икән. Йосоп та шул вакыт: «Минән нурлы кеше, минән һылыу кеше донъяла юк икән», — тип уйлаған. Шулай бер заман икенсе шәһәргә барһа, берәү ҙә сығып та күрмәй, алтын да алып килгән кеше юк, ти, үҙенең һылыулығы ла күренмәй, ти. Был инде үҙен үҙе мактағанға, бының көфөр еткән инде, һылыулығы бөткән. Йосоп кире тәүбә әйткән, насар уйлағанмын, тип.

Мысыр шәһәрендә Зөләйха көтә икән Йосопто. Ә Йосоп, хөкөм булмайынса, алырға рөхсәт булмайынса, алмай икән. Зөләйха Йосопто төрмәгә лә бикләтеп карай, зинданға ла бикләтеп карай, куркытып та булаша икән. Ә Йосоп алмай ҙа алмай, ти, икән. Был инде ун һигеҙгә етә, егермегә етә, ә Зөләйха быға кайғырып, һаргайып, сәстәре ағарып, тештәре төшөп бөтә. Зөләйха әйтә икән:

Йосоп әйтер: «Хөҙәүәннә*, хөҙәүәннә,
Сәнен хөкөм(өң) китерҙем, бәнем унда,
Монсафитнә* төшөм, кол, сабыр канда
Сабырың менән сабыръямал йөргел (биргел) имде».
Зөләйха әйтер: «Бән сәни төштә күрҙем,
Аны ямалыңа* ғишык булдым.

Малым, милкем — жөмләсен фиҙа кылдым*,
Бу көн һиңә мораҙым хасил булса имде», —

тип һамаҡлай икән. Йосоп һаман алмай икән тегене. Зөләйха һәйбәт итеп биҙәгән һарайын, йыйыштырып, өйөнә индереп бикләгән, ти. Ҡушылмаҡкалыр инде. Йосоп ҡаса. Йоҙаҡтар иһә асылып тик тора, ти, уның алдында. Зөләйха уның бер салғыйын ғына өҙөп тотоп ҡала.

Йосоп әйтер: «Йә, Зөләйха ҡуйғыл әлең,
Батыр эштән хаҡка ғасил улма йәлең,
Фәҙәттә эш* эшләнеп ҡуйма йәлең,
Сабыр бирһен, сабыр ҡылыу ҡулма йәлем», —

тип һамаҡлай. Һаман алмай икән үҙе. Зөләйха тағы ла һарғая, теше төшөп бөтә.

Инде хәҙер хөкөм килә икән Зөләйханы алырға. Ә Зөләйханың дине булмаған, кафыр ҡыҙы булған икән. Йосоп ала Зөләйханы. Бының сәстәре ҡарая, тештәре үҫеп, бөтөнләй матур булып китә. Уларҙың ике улы була: Мәмәлиә менән Мәҫәлимә исемле.

Бер заман Якуп пәйғәмбәрҙең иленда аслыҡ була. Икмәк булмай бөртөк тә. Якуп улдарына Мысыр шәһәренә барырға бойора: «Ул шәһәрҙең батшаһы мосолман, унда ашлыҡ бик уңған, ти, барып ашлыҡ алып килегеҙ!» — тип. Ун ылау менән китәләр былар шәһәргә.

Теге ваҡыт ағалары Йосоптоң күлдәген, бер бүрене туҡмап, шуның ҡанына буяп, йыртҡыслап алып киләләр Якуп пәйғәмбәргә: «Бына, Йософто бүре йыйҙы», — тиҙәр. Пәйғәмбәр бүрене тотоп алып килергә ҡуша. Бүрене тотоп алып киләләр. Ул телгә килеп: «Пәйғәмбәрҙәрҙең ите харам беҙгә, мине туҡмап, ҡаныма болғаныылар», — тип яуап бирә.

Йосоп иһә ағалары килеүенә, һарай төҙөп, уның стеналарына башынан үткәндәрен түкмәй-сәсмәй теҙеп яҙып ҡуя. Ағаларының яза күрһәткәндәрен, ҡойоға ташлағандарын яҙып ҡуя.

Тегеләр ун ылау булып килә. Йосоптоң ҡустыһы Һибиннәмин дә килә ун беренсе булып. Ҡапҡаға еткәс, батша быларға икешәр-икешәр инергә ҡуша. Икешәр итеп, ҡуша инәргә булмағас, Һибиннәмин яңғыҙы тора ла ҡала. Үҙе илап тора икән. Йосоп, бөркәнеп барып, ҡустыһы менән ҡуша инә лә, алтын беләҙек кейҙерә тегенә. Теге ағалары аптырап китәләр. Уның беләҙеген тотоп ҡарайбыҙ тиһәләр, ҡулынан китә лә бара икән. Ағалары инде барып инһәләр, үҙҙәренең ҡылған гәмәлдәре яҙылған икән. «Йосопҡа күрһәткән язабыҙ», — тип, әйҙә иҫтәре китеп намаҙ уҡыйҙар икән, тәүбә әйтеп.

Үҙҙәре илаша икән. Һәр береһе парлашып аш йүнәтә икән, ә әлеге Һибиннәмин яңғыҙы тороп ҡала. Йосоп уны үҙенең янына ашарға алып инә. Йосоп ҡустыһынан барыһын да һорашып, илашып таныша ҡустыһы менән:

— Бына етмеш йыл Динә апайым бер күлдәк кейә алманы,

ямап кейеп тик ултыра, сәсе ағарҙы, теше төштө, атайымдың күҙҙәре күрмәҫ булды, — тип һөйләй икән кустыһы.

— Мин һинең иң арттҡы арбаңа алтын тас ҡуям, «был бур» тип, һине алып ҡалырҙар, — ти Йосоп.

Тегеләрҙең карауандарын бөтәһен теҙеп сығарған, ә һибиннәминдең арттҡы йөгөнә бер алтын тас ҡыҫтырған. Шунда тегенең артынан һыбайлылар ебәреп, алып киткән. Ағалары зарлана икән: «Бер ҡустыбыҙҙы, сахараға алып сыҡҡанда, бүре ейҙе. Хәҙер атайға ни нәмә тип әйтәбеҙ инде, бирмәйбеҙ», — тип. Ә Йәһүдә тигәндәренең, һөрәнләһә, бер шәһәр ҡыра торған һөнәре булған. Был шулай итеп шәһәрҙе ҡырырга йәтешләнгән. Ә Йосоп белә бит инде ағаһының һәләтен, шуға күрә ул Мәмәлиә менән Мәсәлиәне ебәргән: «Ана шул бабайҙың барып арҡаһын һыйпағыҙ!» — тигән. Малайҙар йүгереп барып, тегенең арҡаһын һыйпағандар икән, шул ерҙә Йәһүдәнең тауышы сыҡмаған, һөрәнләй алмаған. (Шуға күрә бына арҡанан һыйпарға ярамай бит хәҙер ҙә. — Б. Х.). «Мин һөрәндәй алмайым, мин һөрәндәй алмайым, өнөм сыҡмай бит!» — тип сәбәләнә икән Йәһүдә. Былар шулай иген алып ҡайтып киткәндәр. Яҡуп пәйғәмбәргә һөйләйҙәр икән инде:

— Йөгөндә алтын тас табып, уны [һибиннәминде] алып ҡалдылар, — тигәндәр. Яҡуп пәйғәмбәр:

— Йосоптоң башын юҡ иттегеҙ, инде икенсе баламдың башын ашанығыҙ! — ти икән. Улар илашалар Динә менән.

Быға ҡәҙәр Йософ падишаһ атаһын саҡырып хат яҙып ебәргән булған. Шул саҡ һыу ситендә бер әбей кер йыуып ултыра ине. Тегенең янына һыбайлап [барәү] килеп туҡтай ҙа:

— Яҡуп пәйғәмбәрҙең өйө ҡайҙа? — тип һорай.

— Ни эшләтәһең? — ти әбей.

— Бына Мысырҙың падишаһы — уның улы, шул хат ебәрҙе Яҡуп пәйғәмбәргә, — ти икән һыбайлы.

Шул саҡ әбей, ултыра төшөп, илаған:

— Минең улымды һатып ебәргәйне Яҡуп, миңә хәбәр килгән ине: «Яҡуптан алда һине ҡыуандырам», — тип. Хәҙер Яҡуп ҡыуана! Ә минең улымдан һаман дә хәбәр юҡ! — тип илай икән әбей. Шулай әлеге егет уның менән танышҡан икән — ул үҙе әбейҙең улы булған да ҡуйған. Шулай итеп, [Яҡуптан] саҡ ҡына булһа ла, алда ҡыуанғандар инде.

Шулай атаһы [Йософ] эргәһенә барған [күсеп барган]. Ә атаһы инде бабай булған, бик ныҡ ҡартайған. Үҙе маҡтай-маҡтай яҡшы икмәк ашай икән:

«Йөҙ егерме йәшем торор,
Арпа икмәге ашым торор», —

тип. Ул улының ҡулында үлгән.



# 7. ЙОСОФ КИТАБЫ

*(Ғүмәрова Ғәзизә варианты)*

Яҡуп пәйғәмбәрҙең ике ҡатынынан ун ике улы булған. Рәхилә тигән ҡатынынан тыуған кесе улы Йософ исемле икән. Был улын Яҡуп пәйғәмбәр бөтәндәренә ҡарағанда нығыраҡ яраткан.

Шул Йософ уғлан бер саҡ төш күргән. Төшөн атаһына һөйләп биргән.

— Тыуған Көн, тулған Ай, ун бер йондоҙ
Төшөмдә сәждә ҡылды миңә төп-төҙ,
Ошо төшөм шулай күрҙем күреүен дә,
Ни икәнен, атай, юрап бирсе имде, —

тигән. Атаһы:

— Көн-ҡояш, Ай, ун бер йондоҙ шикелле, ун бер ағаң һиңә баш эйер, ун бере лә һиңә хеҙмәт ҡылыр, — тип юраған. —

Пәйғәмбәр-рисаләт булырһың һин,
Һәм мәмләкәт эйәһе булырһың һин,
Рәхәт — бәшәрәт күрерһең һин —
Төшөңдә шул ғәзим дәүләт күренер имде, —

тигән. — Вә ләкин төшөңдө ағаларына һөйләй күрмә, берәй хөсөт ҡылып ҡуйыуҙары бар, — тигән атаһы.

Ошо һөйләшкәнде Яҡуп пәйғәмбәрҙең бер үгәй ҡыҙы ишетеп ҡала ла агаларына алып бара ла тапшыра:

— Ҡәрҙәшегеҙ Йософ бөгөн бер төш күрмеш,
Ай, көн, ун бер йондоҙ уға сәждә ҡылмыш,
Атаңыҙ Яҡуп уны изгегә юрмыш —
Үҙ ҡолагым мән ишеттем шуны имде.

Ағалары, быны ишетеп, ҡайғы-хәсрәткә төшәләр:

— Әгәр ул төш дөрөҫкә килһә,
Йософ олуғ батша булыр булһа,
Йөмләбеҙ уға хеҙмәт ҡылыр булһа, —
Ул беҙҙәргә ҡаты ғәрлек, тейҙәр имде.

Былар Йософто үҙҙәре янына саҡырып һорашып ҡарайҙар, ни төш, ни күрҙең, тип. Йософ, атаһы әйткән һүҙен иҫендә тотоп, ләм-мим өндәшмәй. Аптырағас, хәйлә-мәкер ҡоралар:

— Атабыҙҙан үтенеп, Йософто яланда йөрөргә алып сығайыҡ та, үлтереп ташларбыҙ йә һатып ебәрербеҙ, — тиҙәр.

Яҡуп пәйғәмбәр башта ризалашмай.

— Бер төш күргәйнем, ун бер ҡуй көтәм, имеш, шуның берәһен бүре алып китте, — тип шомлана. Улдары, беҙ Йософто нык һаҡ-

барбыҙ, ҡош-ҡортҡа бирмәбеҙ, тип нык инәлгәс, күнеп, кесе улын илай-илай оҙатып ҡала.

Улдары сәхрәгә сығып киткәс, Динә исемле бер һеңлеләре арттарынан йүгерә.

— Әйҙә, Йософ, өйгә кире ҡайт! — тип ялбара. Ағалары, һеңлеләренең һүҙен тыңламай, Йософто күтәреп алып китәләр. Динә бер үҙе әйләнеп ҡайта. «Төшөмдә ун бүре күрҙем, шулар ағаларым булмагайы», — тип атаһының шиген тағы көсәйтеп ебәрә. Шунан Йософ өсөн борсолоп, икәүләп зар илаша башлайҙар.

Ул арала улдары бер тауҙы аша сығып, Йософтоң аҙығын эттәргә ашатып, эсәр һыуын ергә түгеп, ыҙа күрһәтәләр. Йософ аптырай.

— Һеҙ ҡәрҙәштәр — өмөттәрем,
Ник былай ҡыланаһыҙ, ғәзиздәрем,
Ниҙән былай итәһеҙ, бер ояларым,
Мин һеҙҙәргә ни хас ҡылдым имде? —

ти.

— Һин ялған төш күрҙең. Беҙҙән өҫтөн булмаҡсы иттең. Шунын язаһын алырһың! — тиҙәр быға. Ағалары уны, сәстәренән тартып, туҡмай башлағас, Йософ әйтер:

— Эй ағамдар, минә хаслыҡ ҡылдығыҙмы,
Мәлғун Иблес ҡотҡоһона төштөгөҙмө,
Минең яныМдан һеҙ туйҙығыҙмы,
Ҡәрҙәшлекте киҫтегеҙме минән имде?

Атаһы хаҡына, бабаһы Исхаҡ хаҡына үҙен иҫән ҡалдырыуҙы үтенеп һорай Йософ. Тегеләр һаман хаслығын, яманлығын ҡыла. Араларынан Йәһүҙә тигәненең, миһырбаны килеп, үлтереүгә ҡаршы төшә.

Йәһүҙә әйтер:
— Был эшегеҙ хаҡ булмаҫ —
[Ҡәрендәш] ҡәрендәште һис үлтермәҫ,
Быны ҡылған Хаҡтан рәхим күрмәҫ,
Яҡшыһы — тәүбә итеп, дүнеү имде.
Тәңренән ҡурҡың, яман ғәмәл ҡылмаң,
Әхирәттә гонаһлылар булып ҡалмаң,
Ожмах биреп, тамуғ утын һатып алмаң,
Тамуғ эсрә баҡый ҡалмаң һеҙҙәр имде!

Шулай ялбара-ҡурҡыта, Йәһүҙә ағаларын Йософто үлтермәҫкә, һис булмаһа, ҡойоға һалып китергә күндерә. Ҡойоға ташлайҙар инде Йософто. Саян-йылан, хәшәрәт тулы ҡойоға.

Ағалары өйгә әйләнеп ҡайталар ҙа аталарына:

— Йософто бүре ашап китте, — тип ялғанлайҙар. — Бына ҡанлы күлдәге генә тороп ҡалды, — тип, Йософ күлдәген күрһәтәләр. Аҡылынан шашыр сиккә еткән Яҡуп пәйғәмбәр:

— Йософомдо ашаған бүрене тотоп килтерегеҙ! — ти улдарына. Тегеләр ни эшләһен инде, бер тауға барып, бер гонаһһыҙ бүрене тотоп алып ҡайталар, бына үҙе, тип. Пәйғәмбәр үтенгәс, хоҙа ҡөҙрәте менән бүре телгә килә.

— Пәйғәмбәрҙәр ите беҙгә харам, кеше ейгәнем-ашағаным юҡ. Үҙем интизар булып ғәйеп баламды эҙләп йөрөүем, — ти бүре. — Үҙ хәсрәтем үҙемә оло, — ти.

Ҡиләйек Йософ хәленә. Йософ ташланғас, ҡойо төбөнә төшөп етеүенә, хоҙай ҡөҙрәте менән, Ябраил фәрештә бер таш пәйҙә итә, Йософ шуға ултыра. Оҙаҡ ҡына ята меҫкен Йософ ҡойола.

Бер каруан, сахранан үтеп барғанда, ҡойонан һыу алабыҙ тиһәләр, быларҙың силәгенә йәбешеп, Йософ килеп сыға. Ҡаруан башы Малик исемле сауҙагәр бик һөйөнә: «Бөгәсә төш күргәйнем, бер сибәр ҡол тапҡанмын, имеш, тип, төшөм юш килде», — ти.

Йософ пәйгәмбәр сибәрҙәрҙең сибәре, ти, шул. Йөҙө тулған Айҙай нур һибеп тора. Күргән бер кеше ғашиҡ була, ти, үҙенә. Йософто ҡойонан ҡотҡарып алғандарын шул тирәлә эшләп йөрөгән ағалары, күреп ҡалып, был беҙҙең ҡол ине, тип, сауҙагәргә осһоҙ ғына хаҡҡа һатып ебәрәләр.

Ҡаруан үткән юлда Йософтоң әсәһе Рәхиләнең ҡәбере була. Ул әсә ҡәбере менән зар илап хушлаша:

— Анам, Өмми Рәхилә,
Минең хәлем нисеклеген күҙең күргел,
Ҡәрҙәштәрем һатты мине, шуны белгел,
Азат инем, бәндәлеккә* төштөм имде.
Хөсөд ҡылып, атайымдан айырҙылар.
Фирҡәт утын йәнемә яндырҙылар,
Ғөрбәт* тунын иңемә кейҙерҙеләр,
Ҡул-аяғым сынйыр менән бәйле имде.
Ҡәрҙәштәрем ҡылды миңә рәнйеү, зәхмәт,
Ҡесе йәштән төштө миңә ошо михнәт,
Фазлы берлән ҡылһын ине хоҙай шәфҡәт —
Өмөтөм шул хоҙайымдан, — тиер имде.
Эй дәриға, ғәзиз анам, ятырмыһың,
Гүрҙә ятып, минең хәлем белерменһең,
Бағып шунан, был хәлемде күрерменһең —
Аяҡ-ҡулым бығауланған минең имде!
Анаһының ҡәберенән бер өн килде:
— Ай, Йософом, хәлең ниҙән былай булды,
Ҡәрҙәшләрең был яфаны нигә ҡылды,
Ғафил* булып, был бәләгә төштөң имде?..
Йә хоҙайым, был хәжәтем һиңә мәғлүм,
Дайым* өмөт тота һиңә йөмлә мазлум,
Залимдарга юлыҡмыш минең уғлым —
Фазлың* берлә уны үҙең ҡотҡар имде!

Хаҡ тәғәлә ана ялбарыуын ҡабул ҡылыр.

Каруанда Йософ ҡол юҡлығын белеп ҡалып, эҙләй башлаһалар, уны ҡәбер янында килеп табалар. Бер яман Хәбәш ҡол Йософто, ҡасып киткән, тип, ҡаты туҡмап ташлай.

Ул рәнйетеүгә хоҙанан фарман булды,
Ҡөҙрәт берлән күктә ҡара болот тулды,
Елдәр иҫте, ҡарлы ямғыр ҡаты яуҙы,
Шул хәтле ҡаты яуыр икән имде.

Ҡаруан оло хафаға ҡала. Малик сауҙагәр әйтә: «Был касафатлы бурап юктан түгелдер, хоҙай ҡарғышылыр. Арабыҙҙа берәй гонаһлы әҙәм барҙыр. Кем гонаһлы, тәүбә ҡылһын тиҙерәк!» — ти. Әлеге Хәбәш ҡол, Йософто яман туҡмап ташлағанын уйлап, хоҙай ҡәһәре шунан микән әллә тип, Йософ алдына теҙләнеп ғәфү үтенһә, — и, хоҙай бирмеше — ҡапыл ел-дауыл, ҡар-ямғыр туҡтай, көн асылып китә.

Йософтоң ниндәйҙер бер бәндә түгеллеген аңлап ала сауҙагәр. Уны ҡол хәленән ҡотҡарып, ирек ҡуя. Яҡшы кейемдәр кейҙерә. Кейенеп алгас, Йософтоң күркәмлеге тағы арта. Юлда туҡталған бер урында Йософтоң сибәрлегенә бар халыҡ хайран ҡала. Шунса һоҡланалар — Йософ шикелле хаҡ мосолман динен ҡабул итәләр. Йософто бер күрер өсөн генә лә, алтын түләйҙәр. Сауҙагәр алтын хаҡын көн дә арттыра ғына бара. Шул хәтле һушты алмалы сибәр була инде Йософ пәйғәмбәр.

Инде Зөләйха фасылына* киләйек. Мәғрип* иленең батшаһының Зөләйха исемле бик сибәр ҡыҙы була. Зөләйха төшөндә Йософто күрә. Күрә лә үлеп ғашиҡ та була. Был төш бер нисә тапҡыр ҡабатлана. Зөләйханың ғишҡынан тәҡәт тоторлоҡ хәле ҡалмай. Ашау-эсеүҙән ҡалып, һарғайып кибә башлай хатта. Өсөнсө йылына Йософто төшөндә йәнә күрһә, Йософ былай ти:

Йософ әйтер: «Йә, Зөләйха, мине күргел,
Мин Мысырҙың хөкөмдары — шуны белгел,
Әгәр мине эҙләр булһаң, Мысыр килгел, —
Мысырҙа минең янда булғыл имде.
Сабыр берлә эшләгел ошбу эште,
Сабыр берлә эшләнер эштәр башы,
Мораҙына тиҙрәк етер сабыр кеше,
Был эштә күркле сабыр булгыл имде».

Зөләйха төшөн атаһына һөйләп бирә. Мәғрип батшаһы Мысыр батшаһы менән хатлашып һөйләшә лә ҡыҙын Мысырға ебәрә. Дөйә-дөйә мал менән килгән Зөләйханы Мысырҙа ололап хөрмәтләп ҡаршы алалар. Мысыр батшаһы уны үҙ янына, тәхетенә алдыра. Зөләйха Йософто көтә бит инде. Мысыр батшаһы Йософ тигәне Ҡытфыр исемле икенсе батша булып сыға. Хаталыҡ менән кейәүгә сығырға килешкәнлеген аңлап, Зөләйха тағы ҡайғыға төшә.

Зөләйха әйтер: «Йыраҡ ҡалды минең илем,
Хата булып, шуға төштө минең хәлем,

Аһ, дəриға оло ҡайғым, йыраҡ юлым,
Күпме көнөм михнəт менəн үтте имде!
Мин төшөмдə күргəнем былай түгел,
Асыҡ белең, был миңə лайыҡ түгел,
Мысыр батша ул ғишҡыма оҡшаш түгел —
Күрке, ғаҡлы уның былай түгел имде.
Тулған Ай тик* балҡыр ине уның йөҙө,
Бал-шəкəрҙəн татлы ине уның һүҙе,
Мəғҙүмдəргə рəхəт бирер уның йөҙө —
Унһыҙ миңə был йыһан хуш түгел имде!»

Нишләһен индә Зөләйха, йәрәшелгән ҡыҙ Мысыр батшаһына кейәүгә сығырға мәжбүр була.

Бер ваҡыт Йософто Мысыр баҙарына һатырға алып сығалар. Малик сауҙагәр, был уғландың ун төрлө яҡшылығы бар, тип маҡтай.

— Әүәл улдыр, — ти ул, — буйы зифа, зариф* үҙле,
Икенсе — яҡты вә күрекле йөҙлө,
Өсөнсө — теле бик саф, туғры һүҙле,
Етмеш ике телде тамам белер имде!
Дүртенсе — шәфәғәтле* вә мөрәүәтле,*
Бишенсе — алп йөрәкле вә һиммәтле,
Алтынсы — бик күптәрҙән бик ҡеүәтле, —
Ҡырҡ ирҙән ҡеүәтлерәк үҙе имде.
Етенсе — дине бөтөн, динәйәтле,
Һигеҙенсе — хаин* түгел, аманатлы,
Туғыҙынсы — холҡо һәйбәт, теле татлы,
Унынсы — пәйғәмбәрҙәр нәҫеле имде.

Зөләйха Йософто тәҙрәнән күреп ҡала ла ирен — Ҡытфыр батшаны, Йософто нисек кенә булһа ла, үҙҙәренә алдырырға ебәрә. Ҡытфыр батша бар мөлкәтенә тотор, бар хазинаһында булыр алтын-көмөш хаҡына Йософто һатып ала.

Йософто батша үҙ улы урынына күрә. Йософ хужаһына бик тоғро хеҙмәт итә. Йософто күргән һайын Зөләйха һушһыҙ булыр хәлгә төшә, үҙе һағышынан һарғайып кибә. Табибтар төрлөсә дауалап ҡарай, һис ниҙең шифаһы теймәй.

Үҙенең һарғайып кибеүенең сәбәбен бер саҡ хеҙмәтсе ҡатынға сер итеп кенә сисә:

— Йософҡа үлеп ғашиҡмын, — ти. Хеҙмәтсе ҡатын былай ти:

— Эй бикә ханым, ғишыҡ хәле еңел булмаҫ,
Табибтар ул дәрткә дарман таба алмаҫ,
Ғәләм ҡыуанғанда ла, ғашиҡ көлмәҫ, —
Һәр[ә]дәм мәғшуҡ ҡайғыһын татыр имде.
Зөләйха әйтер:
— Эй, даям, раҫ әйтерһең,
Мин уйлағанса, һинең һүҙең,
Был көндән һуң минең өсөн ни эшләрһең?

Юкһа, был ғишыҡ үлтерер мине имде.
Ҡатын әйтер:
— Малың исраф ҡылмаҡ кәрәк,
Ғишҡың өсөн малың фиҙа ҡылмаҡ кәрәк,
Мал-мөлкәттән күңел тамам биҙмәк кәрәк,
Ғашиҡ булғас, хазина мал түкгел имде!
Зөләйха әйтер:
— Эй, дая,* риза булдым,
Мин һинең өгөтөңдө ҡулай күрҙем,
Мал-мөлкәтем йөмләһен фиҙа ҡылдым.
Минең өсөн ни ҡылырһың, ҡылғыл имде.
Ҡатын әйтер:
— Эшселәр хәҙер килһен,
Һиңә лайыҡ бер һарай бина ҡылһын,
Шулай булһын — күргәндәр хайран ҡалһын,
Эсе-тышы биҙәкле булһын имде.

Хеҙмәтсе ҡатын ул һарай тирәләй гөл-баҡсалар уртыртырға ҡуша.

— Алмалар, хөрмәләр бешеп ултырһын. Бөтөнөһө шау алтын-көмөштән булһын. Ағастарында төрлө ҡоштар һайрап торһон. Һарай эсен төрлө һүрәттәр менән биҙәт, стеналар шау көҙгө булһын. Алтын тәхет эшләт, шунда үҙең ултырырһың. Йософто һарайға саҡырырһың. Ул шунда зиннәтле, биҙәкле, гөл-баҡсалы һарайға хайран ҡалып, һинең алтын тәхеттә ултырғаныңды күреп, үҙеңә ғашиҡ булыр — мораҙына шулай ирешерһең, — ти.

Зөләйха батша фарманы менән шундай һарайҙы ҡорҙора. Һарай иҫ китмәле, ул алтын-көмөш, энйе-мәрйен менән генә биҙәлгән. Баҡсаларҙа алмалар, хөрмәләр бешеп ултыра, ҡоштары һайрап тора, шишмәләр ағып ята.

Саҡыра Зөләйха Йософто һарайға. Зөләйха алтын тәхеттә ултыра. Йософ һарайға килеп кереүе була, хайран ҡала.

Зөләйха әйтә:
— Эй Йософ, һине төштә күрҙем,
Шунда һиңә тамам ғашиҡ булдым,
Мал-мөлкәтем йөмлә фиҙа ҡылдым,
Һиңә оҡшаһа, мораҙыма етәм имде.
Эй Йософ йән, миһырбанлы, мөрәүәтле,
Холҡоң яҡшы, йөҙөң яҡты, һүҙең татлы,
Был һарайҙы биҙәттерҙем һин сифатлы,
Был һарайҙың нағышына баҡғыл имде.
Йәш Айҙай нескә ҡашларың бар,
Энйеләргә тиң һинең тешләрең бар,
Йофар еҫе килеп торор сәсләрең бар.
Ҡулым менән үрмәгә лайыҡ имде.
Якут төҫлө һинең яңаҡларың,
Йәш алманан латифыраҡ* эйәкләрең,
Бал-шәкәрҙин татлыраҡ дудаҡларың,*

Ике иренең күңелемде үртәр имде.
Яңы үҫкән тал сыбыктай бармаҡларың,
Энйе-мәрйен төҫлө теҙелгән тырнаҡларың,
Ҡәмфәрдин* артығыраҡ беләкләрең,
Ҡулларың ефәктән йомшаҡ имде.

Быларҙы ишетеп, Йософ сабыр ғына былай ти:

Йософ әйтер: «Йә, Зөләйха, һүҙем тыңла,
Ни әйткәнем ишетеп, яҡшы аңла,
Һин әйткән һүрәтемдән йәнем сыҡһа,
Күрекле йөҙҙөң һис бер нуры ҡалмаҫ имде.
Күрекле йөҙләр кәфен һарып гүргә керһә,
Күп тә түгел, гүр эсендә өс көн торһа,
Ҡандай дуҫ гүр эсендә уны күрһә,
Күрмәҫ өсөн йөҙ дүндереп ҡасыр имде.
Гүр эсендә күрекле йөҙҙөң күрке китәр,
Йылан-саян, ҡорт-ҡырмыҫҡа уны ашар,
Ҡороғ кеби оҙон сәсләр өҙләр төшәр,
Тоймаҫ кәүҙә шунда ятыр имде».

Шул саҡ Зөләйха Йософтоң ҡулын тота, Йософ бихуш була яҙа, ғишҡы уяна. Шулай ҙа Йософ дәртен баҫып ҡалырға сараһын таба. Шулай бер-ике тапҡыр иблис ҡотҡоһо менән нәфсеһе ҡуҙғалып ҡуя, әммә Йософтоң сабырлығы, хужаһына тоғролоғо еңә.

Был хәлдән ҡотолмаҡ булып, Йософ ҡасмаҡсы итә. Уны Зөләйха ҡыуып етеп, күлмәк итәгенән тота. Күлмәк йыртылып китә. Нәҡ шул саҡ ҡаршыларына батша үҙе осрай. Был хәлде күреп, ул аптырай ҡала. Зөләйха телгә килеп: «Бына, Йософ ҡолоң миңә яуызлыҡ эшләмәк булды», — тип ялғанлай. Шаһитлыҡҡа яңы тыуған баланы күрһәтәләр. Бала, алла ҡөҙрәте менән телгә килеп, Йософтоң гонаһлы түгеллеген әйтә. Йософ аҡлана.

Шул арала бөтә ҡалаға ғәйбәт тарала. Ҡала ҡатындары, бына ирле ҡатын, батша ҡатыны Зөләйха улдары урынына йөрөгән йәш ҡолона ғашиҡ булған, имеш, гиш-ғишрәт ҡылмаҡ икән, тиҙәр.

Быны ишетеп, шул ғәйбәт һөйләгән ҡатындарҙы хаслап, үҙенә ҡунаҡҡа саҡыра Зөләйха. Ҡунаҡтарына емеш тоттороп, бысаҡ менән турарға ҡуша. Нәҡ шул саҡта ғына Йософ былар янына килеп керә. Ҡунаҡ ҡатындар Йософтоң гүзәллеген күреп, хайран ҡалып, алма тип үҙҙәренең бармаҡтарын турап торғанын да тоймайҙар хатта ки. Шунан ни

Зөләйха әйтер: «Һеҙҙәр инде күрҙегеҙме,
Минең йөҙөм ник һулыуын белдегеҙме,
Бер бағыуҙа ҡулларығыҙҙы киҫтегеҙме,
Бихуш булып төштөгөҙмө?» — тиер имде.
Мин Йософто күреүемә ете йылдыр,
Ғишҡым уға көндән-көнө арта торор,
Меҫкен үҙем бисара, ғажизмындыр,
Шөйлә икән сабырым һеҙҙән артыҡ имде!»

Зөләйха шулай ҙа, ғишкын ҡабул итмәү асыуынан, Йософто ялғанлап, батшаһынан төрмәгә яптырта.

Ун ике йыл төрмәлә интегеп ята Йософ, һис бер ғәйеп-гонаһы юк көйө. Бер сак Йософ янына Ябраил фәрештә килә: «Алла әмере [менән], быңдай михнәт һиңә [төшөндә] килгәйне, ҡотолоу ҙа һиңә төштән булыр», — ти.

Әмәле сыға: Мысыр шаһы бер төш күргән, ти. Төшөндә ете һимеҙ һыйыр йылғанан сығып, ете арыҡ һыйырҙы ашаған, имеш. Был ни мәғәнә аңлата икән, берәү ҙә шаһтың төшөн дөрөҫ юрай алмаған, ти.

Төрмәлә Йософ менән бергә ятып сыҡҡан бер саҡый* Йософтоң төштө дөрөҫ юрағанын хәтеренә төшөрә лә:

— Йософто юратырға саҡырт, — ти, — шаһ хужам.

Саҡырта Йософто шаһ. Йософ ни, йәһәт кенә юрай ҙа бирә.

Йософ әйтер:

— Ете һимеҙ һыйыр — ул нәк ете йыл иген уңмаға,
Төрлө ниғмәт — аҙыҡ менән донъя тулмаға,
Ете арык һыйыр — ете йыл ҡытлык булмаға,
Ул йыллар ғәйәт ауыр булмаҡ имде.

Йософтоң шунса зирәклеген күреп, шаһ уны төрмәнән сығарта. Батшалығына алдырып, үҙенә ярҙамсы — вәзир иттереп ҡуя. Йософ тиҙ арала унған, ғәҙел, ярҙамсыл вәзир булып таныла.

— Ғаҡыл камил, киләм вә хикмәт белер,
Дәғүәселәр дәғүә менән уға килер,
Бай-ярлыны ғәҙел, дөрөҫ хөкөм ҡылыр,
Һис берәүгә йәбер-яфа ҡылмаҫ имде, —

тип маҡтайҙар барыһы ла.

Ете йыл иген унған туҡлыҡ йылдарында Йософ ҡаҙнаға бик күп итеп иген йыя, күрше-тирә илдәрҙән дә һатып ала, ҡаҙна буралары иген менән тула.

Ете йыл буйы ҡытлыҡ башланғас, Мысыр халҡы әүәл йыйылған иген менән туҡ йәшәй. Өҫтәүенә күрше илдәргә ҡиммәт хаҡҡа иген һатып, нык байый. Йософ иген өсөн күп ил-халыҡтарҙы ҡол урынына һатып ала. Бер саҡ үҙе ҡол Йософ, хәҙер уға бөтәһе үҙҙәре ҡол хәленә ҡала. Ябраил фәрештә уға әйтә: «Йә, Йософ, шөкөр ҡылғыл инде, һине һатҡан Мысыр әһле хәҙер үҙеңә ҡол булды», — ти.

Йософ-вәзир якшы ат, ғәскәр менән айға бер ҡаланан ситкә сығып, сайранда* йөрөп әйләнә. Уны ул, ял итеү менән бергә, шуның өсөн дә эшләй, имеш: ас халыҡ, Йософтоң матур йөҙөн күреп, ашау-эсеүен онота, асығыуын тоймай. Шулай аслыҡ хәлен үткәреп ебәрә икән.

Бер сыҡҡанында бер ғәрипте осрата. Үҙенең кейеме тишек-тошоҡ. Ул теге заманда Зөләйха яла яҡҡан шаһитлыҡ ҡылған бала булған, имеш. Шуны белеп, Йософ ғәрипте үҙенә ярҙамсы итеп ала, уны хөрмәт итә.

Хәҙер Зөләйхаға кире ҡайтайыҡ. Йософ, уның ғәйепләүе арҡаһында, ун ике йыл төрмәлә ултырып, инде вәзир булып бар донъяға билдәле сағында Зөләйха ҡартайып ҡарсыҡҡа әйләнеп, күҙе һуҡырайып, меҫкен бер хәлгә төшә. Йософ, үс тотоу түгел, уны онотоп бөтә. Тик Зөләйха ғына тамсы ла онота алмай.

Зөләйха үҙе бер саҡ, Йософ өсөн төҙөткән һарай янына атлы ғәскәре менән айға бер үтеп китеүен белеп, уның юлы янына сығып ултыра бер, Йософ күреп, танып туҡталмаҫмы, тип. Үҙе үкһеп илап ултыра. Йософ бер ни күрмәй, ишетмәй үтеп китә.

Икенсе юлы, Аллаға ялбарғас ҡына, үтешләй юл ситендә үкһеп ултырған ҡарсыҡты шәйләй Йософ.

— Кем булаһың? Нишләп быңдай хәлгә төштөң? — тип һорай Йософ.

Зөләйха әйтер:
— Ишет, йә шаһы йыһан,
Хәлем зәғиф, күҙем күрмәҫ, белгел баян,*
Мысыр хакимы ғәзиз ефете Зөләйхамын —
Мин шул хәлдән ошо хәлгә төштөм имде!
Мин — шулмын, һине һатып алған инем,
Йөмлә малым һиңә фиҙа ҡылған инем,
Һинең ғишҡың менән хайран ҡалған инем,
Бөгөн килеп шул хәлдәргә төштөм имде.
Минең ҡулдан китте барса нигмәт,
Береһе ҡалмай бөттө-китте мал вә мөлкәт,
Вә ләкин һис бөтмәй ғишыҡ-хәсрәт,
Бер туҡтауһыҙ ғишыҡ уты үртәр имде.
Икрар ҡылдым,* инандым бер хоҙаға,
Һәм инандым һин Йософ пәйғәмбәргә,
Һиҫ ғомыным ҡалманы* мөьминдәргә,
Үҙем мөьмин — хәҡиҡәт, — тиер имде.

Был һуҡыр ҡарсыҡтың Зөләйха икәнен белеп, Йософ бик ғәжәпләнде, бәғерен ҡыҙғаныу уратты. Зөләйха үҙе хаҡында һөйләгәнгә ышанып етмәй һораны:

— Йә, Зөләйха, ҡайҙа һинең даның, малың,
Зифа буйың, оҙон сәсең, хур ямалың,
Тулған Ай тик* балҡып торған һинең йөҙөң,
Нисек шул хәлдән был хәлгә төштөң имде?
Зөләйха әйтер:
— Ямалым,* малым бирҙем,
Һинең өсөн йөмләһен фиҙа ҡылдым,
Бәхетемдән, тәхетемдән кире дүндем —
Һинең ғишҡың миңе әсир ҡылды имде!
Йософ әйтер:
— Әгәр һин сын ғашиҡ булһаң,
Ғишыҡлыҡҡа һәр саҡ тоғро ҡала алһаң,
Ғишыҡ зарын, дәғүәһен ҡылыр булһаң,
Был дәғүәгә берәр дәлил кәрәк имде.

Зөләйха әйтер:
— Улай булғас, яҡын килгел,
Ҡәрәм әйләп, ҡамсыңды минә биргел,
Ғашиҡ булһам, һин шунда белгел,
Түгел икән — был дәғүәм батил* имде.

Йософ ҡамсыһын Зөләйхаға һондо. Зөләйха, ҡамсыға бар тыны менән өрөп, кире биргәйне, ҡамсыға ут тоҡанып, Йософтоң ҡулы өштө.

Зөләйха әйтер:
— Күрҙеңме, аңланыңмы,
Ҡамсыға ут ҡапҡанға таң ҡалдыңмы,
Ошо уттың яныуына түҙмәнеңме,
Ә ул ут мине ҡырҡ йыл яндыра имде!

Шунан Аллаһы Тәғәләнең ҡушыуы менән Йософ — Зөләйха никахлашып, ирле-ҡатынлы булдылар. Зөләйха хоҙай ҡөҙрәте менән һуҡыр ҡарсыҡтан кире йәп-йәш ҡыҙға әйләнде. Икәүләшеп оҙон ғүмер татыу йәшәнеләр. Ун ике улдары донъяға килде.

Инде Яҡуп пәйғәмбәр менән ҡалған улдарына киләйек. Былар йәшәгән Ҡәнғән илендә лә ете йыл ҡытлыҡ булды. Игендәр уңманы, кешеләр асыҡты. Аслыҡ Яҡуп пәйғәмбәр ғаиләһен дә ҡырлап үтмәне.

Улдары бер саҡ, ашлыҡ эҙләп, Мысыр иленә килеп сыҡтылар. Ағалары килерен Йософ алдан белде. Һарайына саҡыртып, һыйхөрмәт ҡылды. Үҙенең кем икәнен танытманы.

— Һеҙ кемдәр булаһығыҙ,
Ҡайһы илдән киләһегеҙ,
Үҙегеҙ бер туғандармыһығыҙ,
Атағыҙ кем була? — тип һораны Йософ.
Улар әйттеләр:
— Беҙ Ҡәнғәндән киләбеҙ,
Бабабыҙ Исхаҡ*, изге заттан булабыҙ,
Үҙебеҙ ун ике бер туған ҡәрҙәш инек,
Атабыҙ Яҡуп атлы, — тирҙәр имде. —
Берәүебеҙ килмәне, өйҙә ҡалды,
Ҡесебеҙҙе бүре ейҙе, күркле ине,
Атабыҙ уны бик нык һөйәр ине,
Шул хәсрәттән ике күҙе күрмәҫ имде.

Йософ ағаларына күп итеп иген тейәп ебәрә, атайығыҙға минән сәләм әйтегеҙ, ти. Икенсе килгәндә, энегеҙ Ибн-Йәминде лә алып килегеҙ, ти.

Икенсе юлы ағалары Ибн-Йәминде лә алып киләләр. Йософ Ибн-Йәминде үҙе ҡаршы сығып ала. Бер яҡут беләҙек бүләк итә.

Йософ, ағалары килеүгә, бер ҙур зиннәтле һарай һалдырып ҡуя. Стеналарын матур итеп биҙәттерә. Уларҙың Йософто нисек итеп ҡойоға ташлап киткәнлектәрен дә төшөрттөрә. Ағаларын шул һарайына саҡыра. Улар, стеналағы һүрәттәрҙе күреп, үҙҙәре ха-

кында икәнен төшөнәләр, шомланалар. Вә ләкин Йософ был юлы ла ләм-мим бер нәмә белгертмәй. Тик араларында Ибн-Йәмин генә һис толка тапмай илай ҙа илай, ағаһы хакында кайғыра. Аҙак Йософ уға үҙенең кем икәнлеген аса. Быны һуңынан ағалары ла белә.

Әле стеналағы һүрәткә карап, үҙҙәренең яман эштәрен һөйләп биргәс, Йософ ағаларына асыуланып былай ти:

> Һеҙ батил* эштәр күп кылдығыҙ,
> Һеҙ атағыҙҙы күпме илаттығыҙ,
> Алдап, кесе улын һеҙ алдығыҙ,
> Койоҡайға илтеп һеҙ һалдығыҙ,
> Аҙак уны кол итеп һеҙ һаттығыҙ,
> Карҙәшкә шунан яман эш булырмы имде?

Шулай ҙа Йософ ағаларынан үс алмай, уларҙы кисерә.

Йософ атаһына алдан хәбәр ебәрә Бәшир тигән бер кеше аша. Бәшир Якуп пәйғәмбәрҙә бала караусы булып эшләгән катындың улы була. Якуп уны әсәһенән имсәктәге көйө айырып һатып ебәргән була. Баланы имсәктән айырып һатып ебәреүе өсөн Хоҙай аҙак Якуптың үҙенә шундай ук язаны бирә бит: Йософтоң атаһынан айыртылып һатылып ебәреүе ана шунан ул.

Ярай, бына ошо Бәшир аша Йософ үҙенен күлдәген атаһына ебәрә. Шул күлдәктең еҫе таң елдәре менән үк атаһына килеп етә. Быны тойоп, Якуп былай ти:

> — Был ни хикмәт — Йософомдоң еҫе килде,
> Уны минә сабах* елкәйе килтерҙе.
> Әкрен иҫсе, сабах еле, ник үтәһең,
> Һин, хәкикәт, Йософомдан еҫ илтәһең,
> Йәрәхәттәрем уңалтмаға һин итәһең.
> Гел иҫсе, сабах елем, минә имде.

Оҙакламай Бәшир килеп, Йософтоң күлдәген Якупка бирә. Якуп шул күлдәктең еҫен еҫкәп, бит-күҙен һыпырып алыуы була, күҙе күрә башлай. Якуп пәйғәмбәрҙең һөйөнөсөнөң сиге юк: улы иҫән, ул атаһын кунакка сакырған. Шул сак, бына Хоҙай хикмәте, әлеге Бәшир сабый сағынан айырылған әсәһе менән осраша. Улар шатланыша.

Якуп пәйғәмбәр улы Йософ пәйғәмбәр янына Мысырға килә. Унда кырк йыл йәшәй. Бер сак уға Ғазраил килеп, үлем сәғәте еткәнен әйткәс, улы менән тиҙ генә кәңәш итешеп, тыуған яғына әйләнеп кайта һәм шунда вафат була.

Бер вакыт Мысырға кафырҙар һуғыш башлай. Йософ пәйғәмбәр быларҙы туҙҙыра. Оҙакламай Зөләйха вафат була, уның артынса — Йософ пәйғәмбәр үҙе лә. Шуның менән «Йософ китабы» ла тамам.

# 8. ЙОСОФ ҒӘЛИӘССӘЛӘМ ҠИССАҺЫ

*(Иҫәнбаева Ғәйникамал варианты)*

Яҡуп пәйғәмбәрҙең ун ике улы араһында иң матуры Йософ исемле улы икән.

Йософ ун бер йәшендә саҡта бер төш күрә. Китап уны былай көйләй:

— Ғәзиз Йософ ун бер йәшәр ирде,
Яҡуп атаһы алдында йоҡлар ирде.
Йоҡлағанда ғәжәп бер төш күрде;
Тәүилен атаһынан һорар имде.
Тыуған көн, тулған ай, ун бер йондоҙ
Төшөмдә сәждә ҡылды мәнә төп-төҙ,
Ошбу төштө шөйлә күрҙем* һис ғоманһыҙ,*
Йә атам, быны тәүүил ҡылғыл* имде.

Атаһынан шулай юрап биреүен һорай. Атаһы Яҡуп пәйғәмбәр әйтә:

— Өмөттөр, кем, хоҙай һиңә бирер мөлкәт,
Фазлы берлән разый ҡылыр бик күп ниғмәт,
Ҡәрҙәштәрең һәммәһе ҡылыр хөрмәт,
Ун бере лә һиңә ҡылыр хеҙмәт имде, тей.
Вә ләкин аманаттыр, улым, тыңла,
Был төшөңнө һис кемгәсә әйтер булма,
Әҙәмдәр кенәһенән* һаҡлан — шуны аңла.
Әҙәмигә шайтан дошман булыр имде.

Бигерәген ағаларыңа әйтә күрмә инде, бер-бер хәсәт ҡылып ҡуйыуҙары бар үҙеңә, ти. Яҡуп пәйғәмбәрҙең бер үгәй ҡыҙы ошо һөйләшкәндәрен ишетеп ҡала бит.

Вар ине Яҡуптың бер үгәй ҡыҙы,
Ул ишетмеш был икәүҙең ошбу һүҙен,
Ошаҡсынан һаҡлаһын халиҡ — алла үҙе,
Варын ҡәрдәшләренә әйтер имде:
— Ҡәрдәшеңеҙ Йософ, дәйер, бер төш күрмеш,
Ай, ҡояш, ун бер йондоҙ уңа сәждә ҡылмыш,
Атағыҙ Яҡуп уны изге юрмыш —
Мин ишеттем, шулай тәүүил ҡылды имде.
Әгәр ул төш туры килер булһа,
Йософ олуғ батша булыр булһа,
Йөмләгеҙ уңа хеҙмәт ҡылыр булһа,
Ул һеҙләргә ҡаты ғәрлек булыр имде.

Шулай ағаларына еткерҙе бит инде төш юрауын. Ағаларының ғәрлеге килә. Энеләре уларға баш булһын, имеш. Был эш булмаç, тиҙәр былар. Берәй хәсәт ҡылмаҡсы итәләр. «Әйҙә, быны яланға

алып сығайыҡ та аҙаштырып ҡалдырайыҡ, ҡош-ҡорт ашап китһен. Йә үҙебеҙ үлтереп ташлайыҡ», — тейҙәр.

Аталарына барып:

— Йософто ялан-сәхрәгә алып сығайыҡ әле, беҙҙең менән күңел асып ҡайтһын, — тип һорайҙар. Аталары ризалыҡ бирмәй башта:

— Әллә ниндәй төш күргәйнем, бүре-фәлән ашап китеүе бар, — тей.

— Беҙ ҡарап, һаҡлап ҡына йөрөтөрбөҙ, — тейҙәр ағалары. Йософ, бала кеше, үҙе лә ҡыҙығып китә, ағалары менән донъя күреп ҡайтҡыһы килә иркенләп.

— Атай, мине ағаларым менән ебәр инде, — тип үҙе һорай. Йософо ла шулай үтенгәс, атаһы ризалыҡ бирә инде.

Китәләр былар сығып ялан-сәхрә буйҙарына. Яҡуп пәйғәмбәр бошоноп оҙатып ҡала. Аталары алдында улдары, яҡшы күренгән булып, Йософто иңдәренә күтәреп, хөрмәт күрһәтеп алып киткән булалар. Аталарынан күҙ яҙғас та, Йософто ергә бәреп төшөрәләр. Аталары Йософҡа тип биреп ебәргән һабаға* һалған һыуын түгәләр, ризығын эткә ырғыталар. Йософтоң сәсен тартып, типкеләп ыҙалай башлайҙар.

— Ағаларым, ғәзиз ҡәрҙәштәрем, нигә улай мине ыҙалайһығыҙ? — тип Йософ аптырап әйтһә,

— Ана, күргән төшөң үҙеңә ярҙам итһен, беҙҙән мәрхәмәт көтмә, яуыз, — тип көләләр. Бер ағаһы хатта бысаҡ күрһәтә, һуйып ташлайым үҙенде тип, ҡотон ала.

Йософ ялынырға, ялбарырға тотона, гонаһһыҙ-ниһеҙ энегеҙҙе үлтереп, оло гонаһлы була күрмәгеҙ, ти. Шунан араларында Йәһүҙә исемле бер ағаһы, Йософто ҡыҙғанып, ағаларын туғанды үлтереү ише яман гонаһтан тыйылырға өндәй. «Беҙ уны, ана, ҡойоға һалайыҡ, унда теләһә нишләр, шунда үҙе лә үлер», — ти.

Юлдарында бер ташландыҡ ҡойо тап булған була, шунда Йософтоң өҫтөн һалдырып, үҙен ҡойоға ташлайҙар.

Йософто, гонаһһыҙ баланы, Алла ҡушыуы буйынса Ябраил фирештә ҡойола батып үлергә форсат иттермәй, ҡойонан сығып торған бер таш өҫтөнә ултырта. Йософто, килеп-китеп, ҡарап йөрөй. Ризығын да бирәлер инде шунда. Йософтоң үҙенән нур килеп, ҡойо эсе яҡтырып торған, ти.

Ҡойола бик оҙаҡ ятмай Йософ. Сүлдән үтеп барған бер каруан ҡотҡара. Йософто ҡойонан сығарғанды ағалары күреп ҡалалар ҙа йүгереп килеп тә етәләр.

— Был беҙҙең ҡол ине. Эҙләйбеҙ-эҙләйбеҙ, ул ҡойоға йәшеренгән булган икән, яуыз! — тиҙәр.

— Ул ҡолоғоҙҙо беҙгә һатығыҙ, — ти каруан башы.

— Ул ҡолобоҙҙоң өс яман ҡылығы бар: үҙе уғры, үҙе ялғансы, үҙе ҡасҡы, — тиҙәр.

— Булһын, барыбер алам мин уны, — ти каруан башы.

Шунан ни агалары Йософто осһоҙға һаталр ҙа ебәрәләр. Илай-илай, каруан менән китә Йософ ҡол ителеп.

Үҙҙәре яғынан, әсәһе Рәхилә ҡәбере янынан үтешләй, Йософ әсәһе менән хушлашырға дөйәнән төшә. Бының төшкәнен берәү ҙә

күрмәй. Бер сак караһалар, дөйә башында Йософ юк. Тотоналар эҙләргә. Уны карауылларға куйылған бер колдарынан таптыралар, кайҙа ул һатып алған колобоҙ, тип. Теге кол эҙләй башлай. Каскы гигәндәр ине, дөрөҫ икән, касып китеүе шулдыр инде, тиҙәр. Кара тәнле кол Йософто кәбер янында теҙләнеп ултырған ерендә барып таба. Асыуынан аркаһына камсы менән бер һыҙыра һуға. Йософ бөгөлөп төшә, меҫкен балакай.

Шунан бер сак аяҙ күктә капыл кара болоттар сығып, кар катыш ямғыр яуа башлай, дауыл сыға. Каруан куркыуға төшә. Хоҙайҙың ниндәйҙер шомлоголор, арабыҙҙа берәй яман гонаһ эшләгән әҙәм барҙыр, тиҙәр. Теге кара кол Йософка камсы менән һукканын, баланың асынып рәнйегәнен иҫенә төшөрә лә, әллә шул Хоҙайға барып етте микән, тип уйлап, барып Йософтан ғәфү үтенә, асыуҙан юкка камсы менән орғаным өсөн, тип.

Шунан көн аяҙая ла китә. Бөтөнөһө быға аптырай. Каруан башлығы, был кол тигәнебеҙ — изге бала, күрәһең, тип уйлай. Уның кул-аяғынан бығауҙарын һалдырта. Иреккә куя. Балаға барыһы ла кәзер-хөрмәт итергә тырыша. Йософ шулай сак әҙерәк тын алып кала инде.

Йософка хатта табына башлайҙар. Йософ, миндә көҙрәт бар икән тип, бер сак маһайып китә. Бер калаға барып инһәләр, Йософто күрер өсөн халык ябырылып килә, уға һокланып, котлау һүҙҙәре әйтеп калалар.

Ә алдағы бер калаға инһәләр, ғәжәп, кала тып-тын. Каруанға ла, Йософка ла карап биргән бер әҙәм дә юк. Йософ бар ни, юк ни, белгән-күргән кеше юк. Аптырай бит инде Йософ. Ни хикмәт икән, тип эсенән уйлана. Шунан белә: кешеләрҙе табындырыр хәлгә еткерер нуры юк икән хәҙер йөҙөндә, кәҙими әҙәм балаһы булған да калған.

Бала ғына булһа ла, аңлап ала сәбәбен: мин көҙрәтлемен, тип маһайғайны бит, шунан икән. Шуны уйлап, тәүбәгә килгәйне, әүәлге матурлығы, йөҙөндәге нуры кире кайтты, ти, хоҙайым, көҙрәте.

Каруан Мысырға якынлай. Халык тағы Йософка хайран итә. Йософто бер күреп калыр өсөн йәндәрен фиҙа кылырға әҙерҙәрме ни. Береһен береһе төрткөләп, Йософто күрергә тырышалар. Матурлығына кыҙ-кыркын һушһыҙ була, ти.

Теге каруан башы уйлай: был тамашанан файҙа сығарып була ла баһа. Кем Йософто күрергә теләй, әйҙә әле, хак алып тамаша кылдырайым. Бер күреүгә — бер алтын, ике күреүгә — ике алтын. Быға ла ябырылып килә Мысыр халкы. Көн дә хакты күтәрә бара сауҙагәр. Халык һаман килә.

Бик киммәт хакка һатып, байып китергә уйлай хәҙер каруан башлығы — сауҙагәр кеше. Һатырға баҙарга алып сыға Йософто. Байҙарҙың бик алғыһы килә, хакына торор алтын, байлыктары етмәй.

Зөләйха киссаһын былайырак көйләй торғайнык. Хәтеремдәгеләрен әҙерәк көйләп карайым әле.

Ҡолаҡ тотоп тыңлағыҙ ошбу һүҙҙе,
Ул Зөләйха Мәликзада Таймус ҡыҙы,
Тулған Ай тик, балҡыр ине уның йөҙө,
Ожмах эсе хур ҡыҙымы тиәр имде.
Зөләйха Мәлик Таймус ҡыҙы ирмеш,
Яҫтығы атаһының теҙе ирмеш,
Йософтоң һүрәтен төштә күрмеш,
Күреп, уға ғашиҡ булмыш имде.

Шулай өс тапкыр Йософто төшөндә күрә Зөләйха. Үлеп ғашиҡ була ла ҡуя. Ашамай-эсмәй башлай, йоконан ҡала, көн-төн Йософто уйлап. Атаһы, туғандары ни ғәжәп тип аптыраша, Зөләйханың һарғайып кибә башлағанын күреп.

Төшөндә Йософто өсөнсө тапҡыр күргәндә, Зөләйха Йософтан һорай, һин кем, ҡайһы илдәнһең, тип. Йософ әйтә: «Мине күргең килһә, Мысырга кил, мин — Мысыр батшаһымын, — ти. — Тик сабыр менән эшлә был эште», — ти. —

Сабыр берлә эшләгел ошбу эште,
Сабыр берлә эшләнер эштәр башы,
Мораҙына тиҙ етер сабыр кеше,
Был эш өсөн күркәм сабыр булғыл имде.
Шулай тине бит инде Йософ.

Зөләйха был төшөн атаһына һөйләй. Шулай-шулай, ти. Минең һарғайып кибеүем ошонан, ти. Ошо Мысыр батшаһына мине кейәүгә бир, ти. Ҡыҙы өсөн йәнен атып тотор атаһы риза инде. Мысыр батшаһына хат ебәрә. Батша менән батшалар тиҙ килешә. Күпме яусылар булды, береһен дә тиң күрмәгәйнем, ҡыҙыма Мысыр батшаһы кәләше булырға яҙған икән, ти.

Зөләйханың атаһы, ҡыҙын Мысыр иленә оҙатканда, дөйәләргә әллә ни ҡәҙәре мал, байлыҡ тейәп оҙата. Мысыр илендә туй була. Зөләйханың егете менән ҡауышыр төнө етә. Шәп һарайҙа сымылдыҡлы бүлмәлә ҡалдыралар килендәр йәш кәләште. Сымылдыҡты асып, кейәүе килеп инһә, бер ҡарт кеше, ти. Һушы китә Зөләйханың. Төшөндә күргән нур сәсеп торған Йософ урынына ҡарт бер батша.

Зөләйха, һушына килеп, былай ти (тағы көйләп ҡараған булайым әле):

— Бән төшөмдә күрҙегем былай түгел,
Байыҡ* белен был миңә лайыҡ түгел,
Был ир ул кешемә һис окшаш түгел,
Ғаҡлы-күрке уның улай түгел имде.
Тулған Ай тик,* балкыр ине уның йөҙө,
Бал-шәкәрҙин татлы ине уның һүҙе,
Мәхсундәргә* рәхәт бирер уның йөҙө,
Уның миңә был йыһан хуш түгел имде.

Мысыр батшаһы — Ҡытфыр исемле кеше — быға аптырай. Батша кеше сабыр булғандыр, артыҡ һыр бирмәй, туҙынып та бармай. Батшаның асыуы килһә, улай ҡылансыҡ кәләште әллә нишлә-

теүе лә бар. Хөкөмө үҙ ҡулында. Ҡытфыр Зөләйхаға ҡағылмай. Киләндәр, Зөләйхаһын холоҡһоҙланғанын күреп, төрләсә өгөтләйҙәр. Үҙҙәренсә тынысландырғандай итәләр. Зөләйха, нишләһен, никахлап бирелгән ире менән йәшәп китә инде. Йәшәүен йәшәй, үҙе ҡыҙ көйө ҡала, ти, Хоҙай ҡөҙрәте менән.

Ҡайтайыҡ баяғы әйткәнгә. Зөләйха шулай Мысыр батшаһы ҡатыны булып йәшәп ятҡанда Йософтоң баҙарҙа һатылыуын күреп ҡала бит. Күреүе була, һуштан да яҙа. Әлдә быны бер кем белмәй. Иренә, шул матур баланы үҙебеҙгә ул итеп һатып алайыҡ, тип ҡайғып әйтә. Ире, батша кеше, сибәр Зөләйхаһы өсөн барыһын эшләргә әҙер. Хеҙмәтсәндәргә бойора: «Күпме хаҡҡа булһа ла, шул уғланды миңә һатып алығыҙ», — ти.

Батша хеҙмәтсәндәре баҙарға бара. Йософто күрһәләр, иҫтәре китә, шул саҡлы сибәр булыр икән, үҙенән нур һирпелеп тора, үҙен күреп туйғыһыҙ, ти.

Теге һатып тороусы сауҙагәр телгә лә бөткән әҙәм икән. Йософто маҡтап, һайрап, йырлап тора, ти. Ун дүрт төрлө һөнәре бар был уғландың, ти икән ( Көйләп әйтеп ҡарайыҡ тағы):

Әүәл шулдыр: килеше якшы, зариф* үҙле,
Икенсе — бигрәк якты күрекле йөҙлө,
Өсөнсө — теле татлы, туры һүҙле,
Етмеш ике телде якшы белер имде.
Дүртенсе — шәфәғәтле, мөрәүүәтле,
Бишенсе — алп йөрәкле вә һиммәтле,
Алтынсы — батырҙарҙан да ҡеүәтле,
Ҡырҡ иргә ҡеүәте торор имде.
Етенсе — дине бөтөн, динәйәтле,
Һигеҙенсе — хайын* түгел, аманатлы,
Туғыҙынсы — холҡо латиф,* теле татлы,
Унынсы — пәйғәмбәрҙәр нәҫеленән имде.

Шулай холоҡ-ҡылығын, матурлығын, ун дүрт сифатын маҡтай-маҡтай һанай сауҙагәр.

— Әйт тейер хаҡын, — тиҙәр сауҙагәргә.

— Тейере — углан ауырлығы алтын, — ти.

Мысыр батшаһы хазинаһындағы һәммә алтынын һалдыра, Йософ ауырлығын тарталмай. Батша бүтән мал-мөлкәтен һалырға ла итә. «Ярар инде, — ти сауҙагәр, — ошо тауҙай алтын да етеп торор, ҡалғаны хәйерҙән булыр. Изге доға ҡыл, батшам, уғландын изгелеген күр», — тип Мысыр батшаһына бирә Йософто.

Шулай, бар хазинаһын биреп, алды бит инде Йософто. Хазинаһы бөтөүгә эсе яна инде батшаның. Уның нисек батшалыҡ итермен, тип бошона.

Ҡайтып хазина һарайын ҡараһа, хазинаһы кире туп-тулы, ти. Хоҙайҙың рәхмәтеме, баланың изгелегенең бәһаһымы, тип уйлай батша.

Йософто ҡол итмәй, үҙҙәренә ул итә. Зөләйхаһына тапшырып ҡуя.

— Ул күреп, тәрбиәлә, үҫтер, кеше ит, — ти. — Ысынлап та, батша улы булырлыҡ булһын, – тип бирә.

Зөләйха үҙ балаһы күреп тәрбиәләй Йософто. Яны затлы кейемдәр тектереп кейҙерә. Сәсен тарай, төҫөн-башын ҡарай. Тыштан үҙен тыйһа ла, эстән йөрәге яна, Йософто күргән һайын һуштан яҙыр сиккә еткән саҡтары күп була. Балалыҡ хаҡы тота инде, түҙә, сабыр итә. Элекке ғишыҡ утын баҫырға тырыша. Ни тимә, эсе яныуы барыбер йөҙөнә сыға. Һарғая Зөләйха, ашау-эсеүенең йүне юҡ. Түҙмәй, бер мәл хеҙмәтсе ҡатынына үҙ ҡайғыһын һөйләп бирә. «Һин, Зөләйха, булмаһа, бер зиннәтле һарай һалдырт, шунда бер тәхет эшләт, үҙең шуға ултырған сағыңда Йософто саҡырт. Шул тиклем зиннәтле тәхет түрендә сибәр ҡатын ултырғанды күреп, Йософ үҙе лә ғашиҡ булмай булмаҫ», — тип кәңәш итә.

Шундай һарай эшләтә. Иң шәп оҫталарҙы саҡырып, уны бик матур итеп биҙәтә. Һарайҙың тышын да, эсен дә күреп туйғыһыҙ иттерә.

Уңарсы Йософ та егет булып үҫеп етә. Матурлығы, зифалығы йәнә арта. Зөләйханың тәҡәт тотарлығы ҡалмай башлай.

Һарайы төҙөлөп бөткәс, Йософто саҡырта. Килә инде Йософ. Керә һарайға, матурлығына һоҡлана. Алдында ғына алтын-көмөшлө тәхеттә кейенгән, биҙәнгән Зөләйха ултыра. Ул тағы матурланыбыраҡ киткән.

— Йә, Йософ, был һарай оҡшаймы һиңә? — тип һорай Зөләйха.

— Бик зиннәтле һарай. Шәп, — ти Йософ. — Тик һинең яныңда ғәзиз атам булһа, тағы күркәмерәк булыр ине.

— Ғәзиздең* был һарайға бер ни ҡатнашы юҡ. Уны мин үҙем генә төҙөттөм, — ти Зөләйха. — Һинең өсөн генә тип. Ул һиңә генә лайыҡ, — ти.

Шунан Йософто яратып һөйгөһө килә, күңелең иретер һүҙҙәр әйтеп ҡарай Зөләйха:

— Йософ, һине күреү — йән рәхәте,
Йөҙөң ҡояш кеүек, ғишҡым ҡаты,
Һүрәтең ғәжәп төҫлө һүҙең татлы,
Хәнйәр кеүек, янымы киҫәр имде.
Дуғаланған ҡара ҡашларын бар,
Энйе кеүек һинең тешләрең бар,
Йофар еҫе килер сәсләрең бар,
Гел үрергә миңә генә лайыҡ имде.
Якут төҫлө һинең яңаҡларың,
Йәш алманан алһыуыраҡ эйәкләрең,
Бал-шәкәрҙин татлыраҡ дудаҡларың
Ике иренең күңелемде уртәр имде.

Шулай көйләп һөйләй-һөйләй, Зөләйха Йософтоң ҡулын тотоп, үҙ усында ыуалай, йөрәге сығарҙай булып бара. Йософтоң да күңеле ирегәндәй итә, йылмая башлай. Шул мәл атаһын — Яҡуп пәйғәмбәрҙе иҫенә төшөрә. Атаһы бармаҡ янағандай итә. Аңына килә Йософ, Зөләйха янынан тиҙерәк китеү яғын уйлай.

— Һинен йөрәгең юҡмы әллә, егет түгелһеңме? — тип намыҫына тейеп ҡарай Зөләйха.

— Мин улы иткән батшама хыянат итәһем юҡ, — ти Йософ.

Тиҙерәк всвәсәле бәләнән ҡотолмаҡ була. Ишеккә борола, ете бүлмәнең ете ишеге уның алдында асыла бара. Әммә артынан Зөләйха ҡыуып етә, тышҡы ишеккә еткәндә күлдәк итәгенән эләктереп ала. Йософ күлдәге арттан йыртылып китә. Шул саҡ ҡаршыларына батша тура килә.

— Ни эшегеҙ был ҡыуышып йөрөү? — тип һорай.

Аптырап ҡалған Зөләйха ялғанларға мәжбүр була:

— Йософ мине хыянатҡа ҡыҫтаны. Шунан ҡасып килеүем ине. Батшам, Йософҡа яза бир, — ти.

Былай ялғанлауға ғәжәпләнгән Йософ Хоҙайҙан яҡлау үтенә. Шул саҡ бер бүлмәлә бишектә ятҡан бала телгә килә: «Йософ ғәйепле булһа, күлдәге алдан йыртылған булыр», — ти. Ә Йософтоң күлдәге арттан йыртылған. Батша Йософтоң ғәйепһеҙ икәненә ышана.

Ләкин, Зөләйха үҙ үгәй улына, Йософҡа ғашиҡ булған икән, тигән хәбәр ҡалаға тарала. Бай ҡатындары бында, Зөләйханы ғәйепләп, ғәйбәтте ҡабартып ебәрәләр.

Зөләйха кунаҡ йыймаҡ була. Әлеге ғәйбәт һөйләгән бай ҡатындарын саҡыра. Һәр береһенең ҡулына бысаҡ биреп, бешкән итте турарға ҡуша. Шул саҡта ғына, Йософто матурлап кейендереп, ҡунаҡтар алдына сығара. Йософ килеп инеү менән, әлеге ҡатындар, уның шул саҡлы сибәр булыуына иҫтәре китеп, ҡулдарындағы бысаҡ менән үҙ бармаҡтарын киҫкеләгәнен дә һиҙмәй ҡалалар. Шунан ул был ҡатындарға шулай ти:

Зөләйха әйтер: «Һеҙләр инде күрҙегеҙме,
Йөҙөм ниҙән һулығанын белдегеҙме,
Бер күреүҙән ҡулығыҙҙы киҫтегеҙме,
Йософ ҡарап, бихуш булып төштөгөҙмө?
Мин Йософто күреүемә ете йылдыр,
Ғишҡым уға көндән-көн арта торор,
Меҫкен үҙем бисарамын гажиз ҡалыр,
Шөйлә икән сабырлығым һеҙҙән артыҡ имде».

Әлеге ҡатындар инде Йософто бер күреүҙә үҙҙәре һушһыҙ була яҙғас, Зөләйханың хәлен аңлайҙар, ғәйбәт һөйләүҙәренә үкенәләр.

Зөләйха, асыуы ҡабарып, Йософто иренә төрлөсә яманлап, төрмәгә яптыра. Был Мысыр батшаһы шул арала үлеп китә, уның урынына энеһе батша була. Йософтоң төрмәгә ябылғанын онота.

Йософ төрмәлә ун ике йыл ултыра. Уның менән күпмелер ваҡыт бергә батшаның ике хеҙмәтсеһе ултыра. Шулар төш күрә. Төштәрен Йософ юрап бирә. Береһе, йөҙөм емешен һығып, батшама һутын эсерҙем, тигәненә, һин тиҙҙән төрмәнән ҡотолорһоң, элекке эшеңдә эшләрһең, ти. Икенсеһенә, бешергән икмәктәремде түбәмә ҡуйып күтәреп алып барғанымда, икмәктәремде ҡоштар төшөп соҡоно, тип күргәненә, һин язаланып үлтереләсәкһең, ти. Юрағаны тура килә: тәүгеһе төрмәнән ҡотола, икенсеһен батша язалап үлтерә.

Бер заман батша үҙе төш күрә. Төшөн бер кем дә дөрөҫ кенә юрай алмай. Шул саҡ әлеге төрмәнән ҡотолған хеҙмәтсе Йософто иҫенә төшөрә. «Батшам, төрмәлә бер тотҡон ултыра, шул төштө бик дөрөҫ юрай, шунан юратып ҡара», — ти. Йософто саҡыртып, юраталар.

Батша төшөндә ете һимеҙ һыйыр, ете арыҡ һыйыр күргән була. Ете һимеҙ һыйыр һыуҙан сығып, ете һыйырҙы ашап китәләр, ти. Төшөмдә тагы ете тук башаҡ, ете буш башаҡ күрҙем, ти.

Йософ был төштө: ете һимеҙ һыйыр, ете тук башаҡ — ул ете йыл туҡлыҡты, ете арыҡ һыйыр, ете буш башаҡ — ете йыл ҡытлыҡты аңлата. Илгә тиҙҙән рәттән ете йыл туҡлыҡ килер, игендәр уңыр, иркен йәшәлер, шуның артынса рәттән ете йыл ҡытлыҡ килер, ҡоролоҡтан игендәр көйөр, халыҡ асығыр, тип юрап бирә.

Йософтоң аҡыллылығына, төшөн юрап, алдан күреүенә батша бик ҡыуана. Йософто төрмәнән сығарып, үҙенең вәзире итеп ҡуя. Шунан Йософ иген уңған ете йыл буйы дәүләт келәттәренә бик күп итеп йыйҙыра, ашлыкты кәбәндәрҙә башаҡлата һуктырмай ҡалдырта.

Ете йыл туҡлыҡтан һуң ысынлап та ете йыл рәттән ҡоро йылдар китә. Иген уңмай. Икенсе йылдарына халыҡ асыға башлай. Сит мәмләкәттәр, дәүләттәр игенһеҙ-ниһеҙ ҡала. Ә Мысыр иле аслыкты белмәй йәшәй, һаҡланмыш игенде йүнләп кенә тотона. Ҡалдырылған башаҡлы эҫкерт, кәбәндәр яйлап һуғып алына.

Йософтоң уңғанлығын, ғәҙел кеше икәнен күреп, Мысыр батшаһы батшалығын тотош Йософҡа тапшырып ҡуя. Мин һинең ғәҙел батша булыуыңа ышанам, ти.

Мысыр иле аслыҡ белмәй тук йәшәгәнен ишетеп, күрше илдәге ағалары Мысырға ашлыҡ эҙләп килеп сығалар. Йософ ағаларын таный, үҙе битенә бөркәнсек ябынып йөрөгәс, ағалары уны танымай. Быларҙың кем икәнлектәрен, ни эйтерҙәр икән тип, һораша. Шулай-шулай, Ҡәнғән иленәнбеҙ, карт атабыҙ бар, беҙ ун бер туған улдарыбыҙ. Тик ун беренсе бер кесе энебеҙҙе яланда бүре ашап китте. Ул ғына хәҙер арабыҙҙа юҡ, тиҙәр.

— Ә үҙегеҙ ун ғына кеше бит, — тигәс, ағалары:

— Бер энебеҙ атай карт янында ҡалды, уны ҡарап торорға кеше кәрәк, атабыҙ бүре ашаған энебеҙ өсөн ҡайғырып, күҙе һуҡырайҙы, — тиҙәр.

Йософ ағаларына йөктәренә күп итеп иген тейәтә лә, икенсе юлы килһәгеҙ, энегеҙҙе лә алып килегеҙ, уны килтермәһәгеҙ, ашлыҡ һатмам, ти.

Агалары ҡайтҡас, быны аталарына һөйләйҙәр инде:

— Шундай мәрхәмәтле йомарт батша, — тип, — ашлыкты һис йәлләмәй мул тейәтте, хаҡын да тейерен генә алды, — тиҙәр. — Юлда ҡараһаҡ, түләгән аҡсабыҙҙы ла йөгөбөҙгә кире һалдырған булып сыҡты.

— Икенсе килгәндә, энебеҙ Ибн Әминде лә килтерергә ҡушты, шунһыҙ ашлыҡ һатмам, — тигәнен дә әйтәләр.

Якуп пәйғәмбәр аптырай. Был изге кеше әллә беҙҙе белә микән, ти. Йософомдо белмәй микән, һорашығыҙ, ти.

Икенсе юлы Яҡуп Ибн Әминде лә ағалары менән ебәрергә була инде, аслыҡтан үлеп булмай бит. Улдарына кәңәш итә:

— Барығыҙ ҙа ҡаланың бер ҡапҡаһынан инмәгеҙ, бер ҡапҡаһынан икешәр-икешәр инегеҙ, ти.

Ағалары икешәр бүленһәләр, Ибн Әмин бер үҙе генә тороп ҡала. Ул үҙе бер ҡапҡанан инергә була. Шул яңғыҙ ҡалған Ибн Әминде Йософ үҙе ҡаршы ала. Йософто күргәс, Ибн Әмин уны юғалған ағаһына оҡшата.

— Йософ ағайыма оҡшағанһың, — тип илап ебәрә. Йософ Ибн Әмингә иҫтәлек итеп бер алтын беләҙек бүләк итте, ти. Ағалары, күҙҙәре ҡыҙып, беләҙектә кейеп ҡарай, яраһа, үҙҙәренә алырғалыр инде самалары. Тик беләҙек бер кемгә лә ярамай. Ҡире Ибн Әмингә ҡайтарып бирергә мәжбүр булалар.

Ағалары икенсе килеүгә Йософ бер шәп һарай һалдырып ҡуйған. Шунын эсендә ағалары уны нисек ҡойоға һалыуҙарын, аҙаҡ ҡол итеп һатып ебәреүҙәрен күрһәткән һүрәттәр төшөрттөрә. Ағаларын был һарайына саҡырта инде, күрһәтә, йөрөтә. Тегеләр, стеналағы һүрәттәрҙең үҙ этлектәренә оҡшағанын күреп, ғәжәпләнәләр. Ҡурҡа башлайҙар. Был әҙәм Йософто ҡойоға һалғанды, ҡол итеп һатҡанды берәй төрлө беләлер, был һүрәттәр юҡҡа ғына эшләнмәгәндер, тип шомланалар.

Йософ күп итеп һый әҙерләткән. Былар өҫтәлгә ултырыша, тик ауыҙҙарына аш бармай ҙа ҡуя ти шул. Күҙҙәре гел теге стеналағы һүрәттәрҙә икән.

Аҙаҡтан Йософ Ибн Әмингә үҙенең кем икәнен әйтә. Йософтоң табылыуына шатланып, Ибн Әмин илап ебәрә. Йософ уны үҙ янында ҡалырға өндәй.

Ибн Әминде ҡалдырыу өсөн, Йософ үҙенсә хәйлә ҡора. Уның йөгөнә бер алтын һауыт йәшертә лә, шул һауытыбыҙ юғалды тип, тегеләр юлға сыҡҡас ҡыуа тентетһә, һауыт Ибн Әмин йөгөнән табыла. Ул бур ҡылынып, алып ҡалына.

Шунан Йософ ағаларына үҙенең кем икәнен әйтергә тейеш була.

— Миңә ҡылған хаслығығыҙ өсөн, теләһәм, һеҙҙе үлтертеп ташларға ла ҡулымдан килә, — ти. Ағалары шыр ебәрә. Йософ әйтә:

— Мин атайым хаҡына ғына ғәфү итәм, — ти. Изге, киң күңелле әҙәм була инде Йософ. Уның уйына үс алыу тигән нәмә инеп тә сыҡмай.

Ағаларына, ҡайтып, аталарын да алып килергә ҡуша. Шунан алда Бәшир тигән хеҙмәтсеһен атаһынан һөйөнсө алырға ебәрә. Уңа күлдәген дә биреп ебәрә.

Бәшир, Йософ иҫән, тип һөйөнсө алғас, дәлил итеп ебәргән күлдәген Яҡупҡа бирһә, Яҡуп күлдәк менән йөҙөн, күҙен һөртөп алғайны, ике күҙе лә күрер булды, ти. Яҡуп пәйғәмбәр шатлана. Улдары әйләнеп ҡайтҡас, бергәләшеп Мысырға Йософ янында йәшәргә китәләр. Татыу йәшәйҙәр.

Ҡарт көнөндә Яҡуп пәйғәмбәр ни өсөн Йософонан ҡырҡ йыл буйы яҙып тороуының ғоҙорон* төшөнә. Ул, Рәхилә тигән бисәһе үлгәс, имсәктә ҡалған сабыйы Йософто имеҙер өсөн, бер ҡол ҡатын-

дың үҙ балаһын имсәгенән айырып, ситкә һатып ебәргән булған икән. Сабыйынан айырған өсөн, ҡол ҡатын Яҡупты ҡарғамай буламы, уға шул әсә кеше ҡарғышы төшкән. Ҡырҡ бөртөк күҙ йәше өсөн Хоҙай үҙен улы Йософтан ҡырҡ йылға айырылып, ҡан илап, һуҡырайып йәшәү менән язалаған. Халыҡ, әсә йәше төшмәй ҡалмай, тип юҡҡа ғына әйтмәгән инде.

Ағалары ашлыҡ алырға килгәндә, теге саҡ, Йософ Зөләйхаға өйләнгән була, ике улы үҫеп етә.

Өйләнешеүҙәре былай: Йософ тип, Зөләйха ҡартая, көн-төн уйлап, ҡарсыҡҡа әйләнә. Йософто нисек тә күрергә, бер һөйләшергә теләй. Оҙаҡ ғүмер яйын тура килтерә алмай. Йософтоң юлдарына сығып, көтөп-көтөп ҡарай.

Бер ваҡыт, Йософ ҡайҙалыр, ғәскәрен эйәртеп, ат менеп китеп барғанда, юл өҫтөндә осрата. Әбей кеше юл ситендә генә ултыра икән. Хоҙай ҡөҙрәте инде һаман, Зөләйханы һис уйламаған, онотоп бөткән Йософто шул юлдағы әбейгә ҡарарға мәжбүр иттерә. Меҫкен әбейҙе күрә лә, атын туҡтатып, Йософ һорай:

— Һин кем булаһың? Ни эшләп былай юл ситендә хәйерсе шикелле ултыраһың? — ти.

Йософ, ниһәйәт, уны күргәнгә, хәлен һорашҡанға, шатланып-хәсрәтләнеп, Зөләйха яуап бирә (Көйләп әйтеп ҡарайым әле тағы):

Зөләйха әйтер:
— Ишет, йә батшам,
Хәлем зәғиф, күҙем күрмәҫ, белгел быны,
Мысыр ғәзизе ефете Зөләйхамын —
Мин шул хәлдән был хәлгә төштөм имде.
Мин — шулмын, һине һатып алған инем,
Йөмлә малым һиңә фиҙа ҡылған инем,
Һинең ғишҡың менән хайран ҡалған инем,
Бу көн имде был хәлгә төштөм имде.

Йософ ғәжәпләнә:

— Ғишҡыңды ни менән раҫ ҡыла алаһың? — тип һорай. Зөләйха Йософтоң ҡулындағы ҡамсыһын һорап ала ла, шуға тыны менән өрөп, кире бирә. Ҡамсыны тотоуға Йософтоң ҡулы бешә.

— Тойҙоңмо инде минең ғишҡымдың ялҡынын? — ти Зөләйха.

Хоҙай ҡушҡас, ҡарсыҡ Зөләйха элеккесә йәп-йәш һылыу ҡыҙға әйләнә лә ҡуя. Шунда ғына ныҡлап күрә Зөләйханың һылыулығын Йософ. Үҙенә тиң итеп, никахлашып өйләнешәләр. Тигеҙ ғүмер итәләр.

Йософ менән Зөләйха мөхәббәтен халыҡ ғүмерлек мөхәббәт тип һанай. Ғишыҡ тотоу Йософ пәйғәмбәрҙән үк ҡалған, ти.

Эй, ҡыҙ саҡта уҡый торғайныҡ та ул йыйнаулашып көйләп. Хатта «Йософ китабы»нан фалдар аса торғайныҡ.





# ӘЛ-ҠИССА БУҘЙЕГЕТ

1а Һүҙ килде тыңлағанға әйтә торған,
Юҡ сығыр бу ялғанда[1] моңһоҙ тыуған.
Донъяға әҙәм уғлы ҡунаҡ булған[2],
Көнөндә бер-бер лафҡа етә торған.

Йән бирҙе, иман бирҙе бер вә барың,
Ҡалады,[3] үҙең үлһәң, донъя, ярың.
Донъяла бер аҙ өмөр* ҡунаҡ булған,
Барады ҡаҙған гүргә егет-ҡарың.

1б Был ялғандан бер[әү] кер тотмай үтәр,
Яҡшы ҡол үлем ғәмен уйлай үтәр.
Бер бәндә малды йыйыр, донъя һөйәр.
Ялғандан һич морадын алмай үтәр.

Бер бәндә үтәр, атайының йөҙөн күрмәй,
Бер бәндә үтәр, анадин һөткә туймай.
Бер бәндә күп мал йыйыр, донъя һөйөр,
Бер бәндә үтәр, малға күңел ҡуймай.

Бер бәндәнең ҡураһы малға тулған,
Беренән-бере күреп, ғибрәт алған,
Бер бәндәнең күңел көлөп үтәр,
Берәүенең илай-илай йөҙө һулған;

Беренән-бере күреп ғибрәт алған,
Аллабыҙ, уйлаһын тип, өлгө һалған.
Баһауи,* үләренде белмәйме һин:
Әҙәмдең күбе китеп, аҙы ҡалған.

Бер ҡолдан бер ҡол күреп ғибрәт алған,
Яҡшы ҡолға хоҙайым ғаҡыл һалған.

Баһауи, был ялғандан һин дә үтәрһең,
Үлемгә әжәл пәйдә[4] булған.

Ғәрипләрнең* ялғанда күңле һынык,
Байлар менән йөрөүгә юлы тонок.
2а Бирәүгә малға ҡулың ким ятатһаң,
Инде ҡалай булады юлы тонок?..

Ғәриплектә булады мөшкөл көнөң,
Сыкмайды күп эсендә, әйтһәң, өнөң.
Әйткән һүҙ йөрөгән юлда кем яратһын,
Инде ҡалай булды бының йүне?..[5]

## Әл-ҡисса буҙйегет китабы бу торор[6]

3а Әл-ҡисса, Ҡарасәс һылыу бер шаһзадәнең ҡыҙы ине. Сәхиб* ямал* ине. Ун биш йәшендә Буҙйегетте төшөндә күрҙе, ғашиҡ булды, көндән-көнгә йөҙө һуылды. Бер йыл ҡайғылы булып йөрөнө.
3б Һәм табиб даркарҙар* ғилаж* тапманы.[7] Икенсе йыл тағы Буҙйегетте төшөндә күрҙе. Ҡыҙ егетте итәгенән услап яуап һораны:

Төндә илап, көндөҙ — зар,
Мин йөҙөңә интизар;
Ни сәбәптән булдың яр,
Мине быйдай ҡылып зар?
Аслың әйтһәң кәрәкте.
Бер йыл булды, янармын,
Үткән көндө һанармын,
Һис ғаҡлымдан танармын,
Һүҙгә ни көн ҡанармын,
Атың әйтһәң кәрәкте.

Буҙйегеттең төшөндә сабыр
ҡыл тип әйткәне:

— Бән-сәнең, сән-бәнем,
Йәнемә төштө йәнең,
Сытарма зарлап аның,[8]
Сабыр ҡылһаң, кәрәктер.
Ғашиктар зарлап үтәр,
Тәңренән рәхмәт көтәр,
Морадҡа бер көн етәр,
Сабыр ҡылһаң, кәрәкте.
Сабыр ҡылмай, эш бөтмәҫ,
Миҙгелһеҙ арзың* етмәҫ,
Зарлау мән ҡайғың китмәҫ,
Сабыр ҡылһаң, кәрәкте.
Күнмәй булмаҫ, хаҡ һалһа,[9]

Уйын мән көлкөң ҡалһаң,[10]
Буйыңға бер дәрд[11] ҡунһа,
Эсең ҡайғыға тулһа,
Күрерһең миҙгел булһа,
Сабыр ҡылһаң, кәрәктер.
Боронғо үткән ғишыҡтай,
Ғаҡлың йыйһаң кәрәкте.
Бүтән йәргә ҡайрылмай,
Нәфсең тыйһаң кәрәкте.
Беҙҙең өсөн һәр ерҙә
Йәнең ҡыйһаң кәрәкте.
Ҡылма күңлең боҙоҡтай,
Ағарып йөр йөҙөктәй,

4а Зөләйха мән Йософтай,
Сабыр ҡылһаң кәрәкте.
Булды ғишыҡ ҡайғылай,
Күркең йортҡа йәйелде.
Ләйлә берлә Мәжнүндәй,
Сабыр ҡылһаң кәрәкте.

Әл-ҡисса, ҡыҙ сабыр ҡылды. Ата-анаһы, йорто һис ғилаж тапманы. Өсөнсө йыл тағы төшөндә күрҙе.

Замандан күп замандар үтте, тине,
Ханда тағы яңғыҙ ул бетте,[12] тине.
Яҡшы оҙаҡ дәүран* сөрмәк бармы,
Донъянан арманы мән* үтте, тине.

Бер ул тыуҙы — бадшаға, йортҡа лайыҡ,
Сауын әйтеп,* туй ҡылды илгә йәйеп.
Йортона күп яҡшылыҡ ҡылған икән,
Туй ҡылды, һәр йәндән малын һуйып.

Замандан күп замандар үтте, тине,
Тәңренән аманлығын көттө, тине.
Ете йәштән балаһы уҡыу уҡып,
Ун йәшенә, был инде етте, тине.

Йөрөптө, данан кәрне[13] уйына алмай,
Ялғанның ҡыҙығына күңел ҡуймай;
Ҡулына Ҡөрьән мән китап устап,*
Барады муллаһына, бер көн ҡалмай.

Күрмәгән, күрәйен, тип йорады икән,
Таң ҡалып, йөҙөн күргән торады икән.
Башында алтын айдар толомо[14] бар,
Айҙайынса булып йорады икән.[15]

Бер көндә ятып йоҡлап төш күрәде,
Алдында арғымаҡлы[16] ҡыҙ күрәде.
Ул[17] дағы бер бадшаның яңғыҙы икән,
Бер яңғыҙға бер яңғыҙ түш[18] булады.

Арзын* әйтеп, алдында һүҙ һорайды,
Ғашиҡ ярың эҙләһәң, ник ҡурайды;[19]
Яратҡанның ярлығы[20] шулай икән,
Беренә бере мәғкүл осрайды.
Сабыр ҡылһаң кәрәкте...

Ағарып йөр йөҙөктәй,
Зөләйха мән Йосыфтай
Сабыр ҡылһаң кәрәкте.
Булды ғишыҡ ҡайғылай,
Күркең йортҡа йәйелде.
Ләйлә берлә Мәжнүндәй
Сабыр ҡылһаң кәрәкте.

Әл-ҡисса, ҡыҙ сабыр ҡылды. Ата-анаһы, йорто һис ғилаж тапманы. Өсөнсө йыл тағы төшөндә күрҙе.

46 Ҡыҙ[ҙын] төшөндә егеткә биргән яуабы:

— Ғафилме һин, уай, егет?
Егет буйтеп* ятырмы?
Атҡа менеп, сыкмайын,
Ир улъяға батырмы?*
Мин юлыңда интизар,*
Мәйлең* булһа, эҙләй бар;
Беҙ — бер батша яңғыҙы,
Һеҙҙең өсөн булдыҡ зар.
Өс йыл булды, һыҡтаймын,
Ҡиләме, тип юҡтаймын;
Йөҙөңдө бер күрмәйем,
Ҡайтеп* сыҙап туктаймын?

Йәнең йәнгә ҡушылған,
Сын хәкиҡәт яр булһаң,
Беҙҙең өсөн зар булһаң,
Шәһәре бостан Румдан[21]
Беҙҙе эҙләһәң, табырһың.
Бостан* шәһәренең былбылы,
Сирай[22] ерҙең бер гөлө!
Дарья кисеп, тауҙы үтһәң,
Беҙҙе эҙләһәң, табырһың.
Беҙ — дарьяның гәүһәре,*
Бер булырбыҙ йәүһәре.*
Алтын-көмөш ҡулға алып,

Беҙҙе эҙләһәң, табырһын.
Беҙ — алтындан тирәкбеҙ,*
Эҙләгәнгә кәрәкбеҙ.
Юлдаштарың янға алып,
Беҙҙе эҙләһәң, табырһың.
Нурҙан өлгө алғанмын,
Тути коштай булғанмын.
Таяғыңды кулга алып,
Беҙҙе эҙләһәң, табырһың,
Ахирәтте табырһың...[23]

Ғибрәт сүзне белгәнләр,
Якын ук килгәнләр,
Коллыкд[а] кылмасаң Аллаға.

Төшөндә был кыҙ йырлап ғәйеп булды,
Егеттең күкрәгенә кайгы тулды.
Баксы менән даркарҙан дарман тапмай,
Егеттең көндән-көнгә йөҙө һулды.

5а Бер йыл булды, был егет көлмәй йөрнө,
Дәрденең* һис гилажын* белмәй йөрнө;
Кашында корҙашы бар, юлдашы бар,
Һис кайһыһын күҙенә элмәй йөрнө.

Икенсе йыл төшөндә тағы күрҙе,
Кыҙ килеп, кәҙәм* баҫып, сәләм бирҙе;
Күҙенән йәш ағыҙып, кул кушырып,
Ғарзын* әйтеп, егеткә яуап бирҙе:

Кыҙҙың төшөндә әйткән яуабы:

— Дүрт йыл булды, һыктаймын,
Киләме, тип юктаймын;
Хәбәрең юк, үҙең юк,
Сәләмнамә* һүҙең юк.

Мин йөҙөңә интизар,
Һыктай-һыктай булдым зар.
Беҙ, бер батша янғыҙы,
Һеҙҙең өсөн булдык зар.

Ата менән әсәһе
Рөхсәт бирмәҫ булырмы?
Төшөндә күргән был ярын
Килеп күрмәҫ булырмы?

Егеттең кыҙға биргән яуабы:

— Сән бер һүрәт надир* һин,
Кис кашымда хазир* һин,

Уяна килһәм, янда юҡ,
Ни хәсрәтле миҙә* һин?

Ни ерлек һин, ерең әйт,
Тыуған-үҫкән илең әйт,
Мине бындай зар ҡылма,
Аныҡ ҡылып йүнең әйт.

Илең һинең белмәһәм,
Сәғән төҙөү йөрмәһәм,[24]
Шәһәрең һинең белмәһәм,
Һине ҡайҙан табырмын?

5б Былтыр килдең ҡашыма,
Ҡайғы һалдың башыма,
Күренмәйһең күҙемә,
Һине ҡайҙан табырмын?

Егеткә ҡыҙҙың биргән яуабы:

— Атҡа менеп сыҡһаң һин,
Беҙҙе ҡабул күрһәң һин,
Ҡибла ҡарай торһаң һин,
Эҙләп беҙҙе табырһың...

Төшөндә был ҡыҙ йырлап ғәйеп булды,
Егеттең күкрәгенә ҡайғы тулды.
Бар ине бер дуҫы йәндән артыҡ,
Таң иртән барып уға ғарыз* ҡылды.

— Бер хуп һүрәт күрҙем мин,
Хайран булып йөрҙөм мин,
Маслихәтле* йән дуҫым,
Ғаҡыл тапмай йөрҙөм мин!

Ҡайғы төштө башыма,
Ғаҡыл тапмай булдым зар,
Мәғкүл күрһәң,* йән дуҫым,
Уны эҙләр уйым бар.

Китмәҫ ҡайғы төшкәндә,
Кәңәш тапҡан дуҫым һин.
Алыҫтан уй төшкәндә,
Ғаҡыл тапҡан дуҫым һин.

Бер йыл булды танғанмын,
Был ҡайғыға ҡалғанмын,
Эҙләүҙән былай уйым юҡ,
Күңелде уға һалғанмын.

Юлдашым юҡ киткәле,[25]
Дарманым юҡ еткәле,
Йән юлдашым һин инең,
Батмай йөрнөм әйткәле.

Ҡитмәҫ дәрткә юлыҡтым,
Дарманым юҡ, йән дуҫым:
Уны эҙләп үлһәмдәй,
Арманым* юҡ, йән дуҫым.

6а Дуҫтының яуабы:

— Мәғҡүл һүҙҙер, барырбыҙ,
Хаҡ яҙғанын күрербеҙ,
Беҙ — юлында ҡорбанлыҡ:
Хеҙмәт итеп торорбоҙ...

Әжәл етһә, үлербеҙ,
Үлмәһәк, беҙ килербеҙ:
Ҡол сараһы булмаҫ, ти,
Хаҡ яҙғанын күрербеҙ.

Дуҫтым, һеҙҙән ҡалмаҫмын,
Ят ярҙы эҙләп бармаҫмын,
Мин — юлыңда ҡорбанлыҡ,
Ялғансы дуҫ булмаҫмын.

Дуҫты мән был икеһе моңлашаҙы,*
Уй уйлап, ғил* табып серләшәҙе.
Был икәүҙең ғаҡылын һис кем белмәҫ.
Юлаусының яптығын* ундашаҙы.*

Дуҫтына йән юлдашы һүҙ һалаҙы:
«Ялғандан үлмәй-үтмәй кем ҡалаҙы?
Үлһәк, ярың юлында үләйек», — тип,
Шәһәрҙән табып, былар ҡошсо алаҙы...

Шәһәрҙән былар серен һис кем белмәҫ,
Алтын менән көмөштән мул алаҙы.
Ике нарға* аҙығын артып алып,
Ике ҡары,*бер егет — башсы алаҙы.

6б Арғымаҡ аттан һайлап менеп алды,
Атаһы мән әсәһе туймай ҡалды.
Юлдашы мән ҡорҙашын ҡашына алып,
Тәүәккәл тип, барын да юлға һалды...

Биш кеше, көн-төн былар йөрҙө, тине,
Шәһәрҙән шәһәр сайыл* ҡорҙо, тине;
Һәр ерҙә шәһәр бар, ил күренһә,
Атының башын уған* борҙо, тине.

Замандан күп замандар үтте, тине,
Шәһәрҙән шәһәр һорай китте, тине;
Ҡырҙағы күп шәһәрҙән ярып тапмай,
Даръя мән кәмә ҡылып[25] китте, тине.

Замандан күп замандар үтте, тине,
Даръя мән өс-дүрт айлыҡ китте, тине.
Бар икән бер ар алда* Мәймүн-шәһәр,[27]
Хоҙайым шуға дусар итте, тине.

Мәймүндең батырҙары һай-һай һалды,
Бәләгә бисаралар инде ҡалды.
Барын да бисараның тотоп алып,
Ерҙин ҡаҙган зинданга илтеп һалды.

Бисаралар зинданда тотҡон булды,
Зарланып бер Хоҙайға йөҙө һулды.
7а Ҡафырҙарҙың һис беренән яҡшылыҡ юҡ,
Быларға зинданда өс йыл тулды.

Быларҙың зинданда әйткән һүҙе:

— Бейек тауға гиз булдыҡ,
Үтеү беҙгә ҡыйындыр,
Тимер өйгә ҡамалдыҡ,
Сығыу беҙгә ҡыйындыр.
Яман юлға гиз булдыҡ,*
Ҡитеү беҙгә ҡыйындыр.

Ниҙәй илгә гиз булдыҡ, —
Йөҙөн әҙәм күрмәҫтәй!
Ниҙәй ергә гиз булдыҡ, —
Моңло әҙәм йөрмәҫтәй!

Муйынга ҡорок төшөптө,
Йолҡонсаҡ та, сыҡмаҫ ул.
Һанрау илгә гиз булдыҡ,
Ялынһаҡ та, уҡмаҫ* ул.
Рәхимһеҙ илгә гиз булдыҡ,
Илаһаң да, белмәҫ ул.
Янған утҡа гиз булдыҡ,
Ялынһаҡ та, һүнмәҫ ул.

Был бәләнән ҡотолоп,
Юл йөрөр көн булырмы?
Ата менән ананы
Бер күрер көн булырмы?

Был ни хәсрәт, ярандар?
Был ни михнәт, ярандар?

Батша башың ҡол булып,
Был ни ҡайғы, ярандар?

Былар зиндандан ҡотолған йыры:

Бисаралар, серләшеп, моңлашаҙы,*
Ҡасыуға яптыктарын ундашаҙы.*
«Был зиндандың эсендә үләбеҙ», — тип,
Ҡасыуға әмәл тапмай илашаҙы.

Сыҡтылар был зиндандан хәйлә табып,
Ҡастылар шәһәренән аттай сабып;
Дошмандан ҡотолһаҡ тип, ҡан илашып,
Төштөләр даръя эсенә бер һал табып.

Һал менән бисаралар йөрҙө, тине,
Ҡасыр яҡка һалдарын борҙо, тине.
Юлдашының бары ла унда ҡалды,
Йән юлдашын бергә алып йөрҙө, тине.

Һал менән бисаралар йөҙә бирҙе,
Хоҙайҙан, аман ҡыл, тип, күп теләйҙе.
7б Һал менән бисаралар сығып ине,
Алдынан күп каруан осрайҙы.

Күп каруандан ике әҙәм килде, тине,
Беренән бере һорап белде, тине.
Ҡараһа, үҙ иленең батшаһы икән,
Каруандың бары килеп күрҙе, тине.

Каруандың бары килеп күрешәҙе,
Беренән бере һорап белешәҙе.
«Ханыбыҙҙың юғалған яңгыҙы», — тип,
Каруандың бары инде илашаҙы.

Каруандарҙың егеткә әйткәне:

— Яңғыҙы батшабыҙҙың, нәкып* йөрөйһөң?
Һал бәйләп, даръя эсендә ағып йөрөйһөң.
Ата-анаң, һеҙ киткән һуң, зар иңрәйҙе;
Ни йомошҡа иленән сығып йөрөйһөң?

Китеп һин, ил-йортоңа сереңә әйтмәй,
Тағыңда* батшалыҡ урның көтмәй;
Ата-анаң күрмәгәле дүрт йыл булды,
Дарьяла нәкып* йөрөйһөң, иҫеңә алмай?

Буҙйегеттең яуабы:

— Күп каруан, һеҙ тыңлағыҙ, беҙ әйтәле,
Төштәге вәгәҙә ҡылган йәрҙе әйтәле.

Йәр өсөн әкә-шәшә* уйҙан китте,
Яраҡан тәҡдир итһә, беҙ ҡайтале.

Төшөмдә йәрем, йырлап, эҙлә, тине,
Өмөтөң, тапмаҫмын, тип өҙмә, тине.
Яраҡан алла беҙҙе ни ҡылһа лай,
Вәғәҙәнде, үлһәң дәй, боҙма, тине.

Шәһәрен эҙләй уның килмәк булдым,
Күрһәтһә тәңрем, йөҙөн күрмәк булдым.

Каруандарҙың егеткә әйткәне:

— Батшабыҙҙың яңғыҙы, беҙ теләйбеҙ,
Аяғыңдай баш ороп, һүҙ һорайбыҙ.
Яңғыҙ йөрөп, ярыңды табалмаҫһың,
Ҡайтканың мәғкүл икән, бер йөрөйбөҙ.[28]

8а Әкәңдең* һеҙҙең өсөн йәне ҡорбан,
Чар* тарафта шәһәрең, йортоң аман.
Үҙегеҙ бер батшаның яңғыҙы һеҙ,
Яңғыҙ йөрөп яр эҙләү заңға* яман.

Мең-мең ғәскәр һеҙгә юлдаш булыр,
Әкәгеҙ шәһәренә хәбәр һалыр;
Хоҙайың уны һеҙгә бойороҡ ҡылһа,
Ер йөҙөндә бар булһа, табып алыр.

Егеттең яуабы:

— Уай, каруан, был һүҙ мәғкүл булмаҫ, тимен,
Был һүҙҙе ғашиҡ егет алмаҫ, тимен;
Үлһәм, яр юлында үләйем дә,
Ялғандан һис кем үлмәй ҡалмаҫ, тимен.

Был серҙе дошманыма әйтмәң, каруан,
Үлһәм дә, сертемдән* ҡайтмам, каруан;
Ярыма бер вәғҙәне ҡылғандан һуң,
Ярымдың йөҙөн күрмәй, ҡайтмам, каруан.

Каруандың ҡайткан йыры:

Каруандың күп һүҙенә ҡайрылмайҙы,
Әүәлге үҙ һүҙенән айрылмайҙы;
Ахыры күп каруандан юл айырылды,
Дам инде,[29] бер-беренә бойормайҙы.
Буҙйегеткә каруан әйтеп ине,
Каруандың инде күңелен үҙе әйтәҙе:

— Бер эш башҡа төшөптө,
Йөрмәй күңелем тынмайҙы;

Ғашиҡ булған ярымды
Күрмәй күңелем тынмайҙы.
Күп ғәриплек* күрһәм дә,
Зар сәргәрдан* йөрһәм дә,
Яр юлында үлһәм дә, —
Йөрмәй күңелем тынмайҙы.
Ҡайғы йотоп ҡанманым,
Был юлымдан танманым,
Боронғолай булманым,
Йөрмәй күңелем тынмайҙы.
Яңғыҙлыҡта хаҡ — юлдаш,
Йәр юлында йән — юлдаш,
Дәрдемә дарман булмаһа,
Йөрмәй күңелем тынмайҙы.
Йәнем барҙа, барырмын,
Тере йөрһәм, ҡайтырмын,
Үлһәм, сәләм әйтермен, —
Йөрмәй күңлем тынмайҙы.
Инде, каруан, йөрөйһөҙ,

8б Әкәм* беҙҙе күрмәһә,
Дәрдкә дарман булмаһа,
Арманымды* әйтерһеҙ.
Рази булһын атабыҙ;
Һөтөн эскән анабыҙ,
Артыбыҙҙа әбнабыҙ,*
Сәләмемде әйтерһеҙ...
Быны укып күрһәгеҙ,
Хаҡ юлына йөрһәгеҙ,
Ҡолаҡ һалып торһағыҙ,
Якшы икән, тип әйтерһеҙ.

Күп каруан был йөрмәҫен белде, тине,
Алтын-көмөш, кәрәген бирҙе, тине.
Батшаның балаһы инде китте,
Тауҙан, таштан, дарьянан йөрөп үтте.
Ҡашында хеҙмәткәре — йән юлдашы,
Бер заманда шәһәргә якын етте.

Бер ситенән шәһәрҙең керҙе тине,
Алдында бер өлкән өй күрҙе, тине.
Өй эсендә бер абыҙ* ултыра икән,
Кереп өйгә, сәләмен бирҙе, тине.

Абыҙ тороп сәләмен алды, тине,
Быларҙы күреп таңға ҡалды, тине.
«Алыҫтан килгән былар бисара икән,
Ултырың», — тип, тикә* өмет* һалды, тине.

— Уай, егеттәр, юлығыҙ булһын, — тине, —
Күп улъя алдығыҙға тулһын, — тине. —
Бисаралар, йөрөүегеҙ алыҫ икән,
Бынауың бер батшаның яңғыҙы икән.
Серегеҙ, хаҡ белдерһә, беләсәкмен,
Эҙләгәнең фәҡир хан ҡыҙы икән.

Таң ҡалып, былар серен әйтте, тине:
— Кем килеп, хәбәр биреп ҡайтты? — тине. —
Юлыбыҙҙа һис әҙәм күренмәне,
Был хәбәрҙе кем һеҙгә әйтте? — тине.

9а — Хоҙайым белдергән һуң, белдем һеҙҙе,
Өс көн борон төшөмдә күрҙем һеҙҙе.
Ҡарынығыҙ инде һеҙҙең асҡан сығыр,
Йыуынығыҙ инде, тамам ҡуйып һүҙҙе.

Шәһәрҙән йәрегеҙҙе эҙләп ҡарай,
Ҡай ерҙә ғәрип булһа, шунан һорай,
Йәрегеҙ был шәһәрҙән табылмаһа,
Берәүегеҙ беҙҙең өйгә ҡайтып урай.

Шәһәргә бисаралар керҙе, тине,
Алланың ярлығына* күнде, тине.
Бер күшәнең* эсендә йөрөп ине,
Ҡырҡ ҡыҙ бара ятыр, күрҙе, тине.

Егеттән ҡыҙҙар борон күргән икән,
Күшәлә ике ғәрип йөргән икән.
Батшаның ҡыҙының күҙе төшөп,
Артынан бер аҙ ҡарап торған икән:

— Уай, ҡыҙҙар, ул гәрип кем булаҙы?
Һәр ергә ҡарап тороп әйләнәҙе.
Һөйөнсө, йәрем булһа, бирер инем,
Ул ғәрипте күргәле кем бараҙы?

Хан ҡыҙының ҡыҙҙарға йырлап әйткәне:

— Батыр ирҙәй — йөрөшө,
Батша улындай — торошо,
Күргән төштөң тураһы
Бөгөн килгән булмаһын.
Ҡылдан пәрҙә башында,
Юлдашы бар ҡашында,
Ҡайғы төшөп йәшендә.
Йәр эҙләүсе булмаһын.
Фиҙа ҡылып малдарын,
Ҡорбан ҡылып йәндәрен,

9б Барып һораң хәлдәрен,
Һүҙ һораусы булмаһын.
Төштә күргән йәребеҙ,
Уға ҡорбан барыбыҙ,
Көндөҙ-төндә зарыбыҙ,
Йәр эҙләүсе булмаһын.
Барып йөҙөн күреңдәр,
Әҙәп һаҡлап тороңдар,
Бер аҙ ҡарап тороңдар,
Ил эҙләүсе булмаһын.
Барып хәбәр алыңдар,
Йөҙөн ҡарап күреңдәр,
Ҡайғы-моңон һорандар,
Йәр эҙләүсе булмаһын.
Унан хәбәр алғанға,
Һөйөнсө хәбәр һалғанға
Алтын йөҙөк, гәүһәр таш
Һөйөнсөгә бирермен.

Хан ҡыҙы ғашиҡ йәрен белде, тине,
Ҡыҙҙарға йәрен әйтеп көлдө, [тине]
Ҡырҡ ҡыҙҙан ике ҡыҙ юлдаш алып,
Был егетте күргәле килде [тине].

Күшәнән* ҡыҙҙар эҙләп тапмай ҡалды,
Был ғәрип* ул ерҙән китеп ҡалды.
Ҡыҙҙар килеп ҡараһа, дәнәмә* юҡ,
Һәр ерҙән ҡарап тороп әйләнәҙе.

10а Ханшаға ҡыҙҙар килеп хәбәр бирҙе,
Юлаусы икән, уларың киен ҡайтты.*
Хан ҡыҙы күп ҡыҙҙарға һүҙ әйтәҙе:
— Ярым булһа, ул нинә киен ҡайтты?
Буҙйегет юлдашы мән кәңәшәҙе,
Һәр ерҙән муйын һоноп ҡарашаҙы.
Шәһәрҙән туны йыртыҡ ғәрип күрһә,
Ил-йортоноң мәнеһен* һорашаҙы.

«Ярыбыҙ бармы, юҡмы, — бер аңлале,
Айнаҡтан,* ҡыҙҙар белмәҫ, бер тыңлале;
Был шәһәрҙән ярыбыҙ табылмаһа,
Юлаусының яптығын* уңдасале».

Был ғәрип хан ҡыҙын күңелгә алды,
«Йә алла», — тип, үҙҙәрен юлға һалды.
Бер һарайҙың эсендә ут янаҙы,
Айнаҡтан* былар килеп ҡолаҡ һалды.

Күп ҡыҙҙар өй эсендә һүҙләп ятыр,
Хан ҡыҙы, йәрен юҡтап, илап ятыр;

Ғашиҡ йәрем йөҙөн бер күрһәм тип,
Хоҙайҙан налиш* ҡылып, илап ятыр.

Ҡыҙҙың өй эсендә әйткән һүҙе:

— Ете йылдан булдым зар,
Мин йөҙөңә интизар;
Ғашиҡ булған ярыма
Ҡушыр микән бер вә бар?*

Йәнең йәнгә ҡушылған,
Бер йөрөр көн булырмы?
Күкрәктәге күп ҡайғы
Ҡотолор көн булырмы?

Киләмен, тип әйтеп инең
Вәғҙәләрең ялғандай.
[Күпме] һаҡлап, килмәнең,
Бүтән ярҙы алғандай.

Алла ҡушҡан яр инең,
Ярыңа вафа* ҡылманың.
Ете йылдан өйөңдән —
Һис урыныңдан торманың.

Хан ҡыҙы илай инде, йырын бүлде,
Егеттең күкрәгенә ҡайғы тулды,
Ғашиҡ яры икәнен белгәндән һуң,
Йырын йырлап, айнаҡтан* хәбәр һалды.

Буҙйегеттең ҡыҙға яуап әйткәне:

— Уай, ярым, беҙ сығырбыҙ ғашиҡ ярым,
Ете йылдан һаҡлаған интизарың.
Эҙләгәнең беҙ булһаҡ, ғашиҡ ярым,
Һүҙемә ҡолаҡ һалың инде барың!

Дүрт йыл булды юлында йөргән ярың
Вәғҙә ҡылып, төшөңдә күргән ярың,
Эҙләгән ғашиҡ ярың килеп тормин,
Ишек ас, ысын булһа интизарың.

11а Һеҙҙе бында яратты,
Беҙҙе унда яратты.
Бер аҙ зарлап йөрһөн тип,
Арала даръя яратты.
Сүлдә йөрнөм, һыу тапмай,
[Һыуҙа йөҙҙөм, юл тапмай]:30
Күп ғәриплек күргәнмен,
Юл башлаусы бер тапмай.

Дүрт йыл булды, юлында
Хайран булып йөрөп мин;
Даръя кисеп, тау үтеп,
Күрмәгәнде күрҙем мин.

Табандарым уйылып,
Ҡулым тирем һуйылып,
Дәүләт бағым юйылып,
Зар сәргәрдан* булдым мин.

Атамды мин күрмәнем,
Анамды мин күрмәнем;
Өйҙә ғүмер һөрмәнем,
Бер һин өсөн йөрнөм мин.

Һине эҙләп йөргәнмен,
Буйың төштә күргәнмен,
Йәнем ҡорбан ҡылғанмын,
Рәхим итһәң кәрәкте.

Зәғфырандай* һулғанмын,
Өс йыл тотҡон булғанмын.
Йөҙөң күрер көн булһа,
Ни булһам да, булғанмын.

Миһман* булып килеп мин,
Хайран булып йөрөп мин,
Нурың төштә күреп мин,
Рәхим итһәң кәрәкте!

Атым минең — Буҙйегет,
Ҡашымда бар дуҫ егет —
Бер ҡайғылы ҡуш егет,
Рәхмәт әйтһәң кәрәкте.

11б Сын хәкиҡәт яр булһаң,
Өйгә керһәм кәрәкте.
Йәнем һөйгән яныйым
Йөҙөң күрһәм кәрәкте.

Ҡыҙҙың яуабы:

— Ысын микән, өтрөк* микән һүҙең һинең,
Танымаймын, ҡай ерлек һин, үҙең һинең?
Төшөмдә алла ҡушҡан ярым булһаң,
Кил, айнаҡтан күрәйем йөҙөң һинең.

Буҙйегет тура айнаҡка килде, тине,
Ҡыҙ ҡарап, егет йөҙөн күрҙе, тине.
Битендәге пәрҙәһен асып ине,
Ханша ғашиҡ ярын инде белде, [тине].

Тунын кейеп, хан ҡыҙы ҡәҙәм* баҫты,
Йүгереп, ҡыҙҙар тороп ишек асты.
Услап, алтын-көмөш ҡулына алып,
Мәрүәрид* мән мәрйендән сәсеү сәсте.

Ҡосаҡлашып күреште ғашиҡ яры,
Ҡашында ҡырҡ ҡыҙ бар, хеҙмәткәре.
Ҡыҙҙар тороп, алдында яр-яр әйтеп,*
Хан ҡыҙының табылды интизары.

Ҡыҙҙарҙың әйткән яр-яры:

— Әлхәмде сүрә Ҡөрьәндең башындалыр, яр-яр,
Пәйғәмбәрҙәр алланың ҡашындалыр, яр-яр.
Берең — мәрүәрид, берең — мәрйен, теҙелептер, яр-яр,
Берең — хандыр, берең — ханша, йәр булып һеҙ, яр-яр.

12а Берең — тутый, берең — былбыл, йәр булып һеҙ, яр-яр,
Берең — алтын, берең — көмөш, түш булып* һеҙ, яр-яр.
Берең — гөл, берең — йофар,* хуш булып һеҙ, яр-яр.
Берең — айҙыр, берең — көндөр, ҡайрылмағыҙ, яр-яр,
Заман ахыр булғансы, айрылмағыҙ, яр-яр.
Берең — гәүһәр, берең — яҡут, ярашыптыр, яр-яр,
Берең — тутый, берең — былбыл, һайрашыптыр, яр-яр.
Берең — хур ҡыҙ, берең — нур егет, бер тороғоҙ, яр-яр.
Заман ахыр булғансы, бер йөрөгөҙ, яр-яр...
Терек донъя ярашыр күп мал менән, яр-яр,
Маллыға көн ярашыр һөйгән яр мән, яр-яр.
Малы юҡтың — йәне юҡ, түшәге юҡ, яр-яр,
Йәре юҡтың — йәне юҡ, түшеге юҡ, яр-яр.
Яр-яр итмәк боронғо өлгөбөҙ бар, яр-яр,
Терелектә бер аҙ көн көлкөбөҙ[31] бар, яр-яр.

Яр-яр әйтте ҡырҡ ҡыҙ, уйнап-көлөп,
Ҡолаҡ һалды хан көнөгө,* тыштан тороп.
12б Ҡыҙҙарҙың был уйынын ишеткән һуң,
Йүнәлде ханға табан, хәбәр алып...

— Тәксир хан, ҡыҙығыҙғай барып килдем,
Бер шомлоҡ бар икән, тыңлап белдем.
Ҡырҡ ҡыҙ яр-яр әйтеп ятыр икән,
Ишеткән яманлыҡты әйтә килдем.

Был яр-ярын ишетеп, өйгә керҙем,
Туйҙарын, ҡылған эшен ҡарап торҙом.
Күп ҡыҙҙар бер туй ҡылып ятыр икән,
Ике егет эсендә — шуны күрҙем.

Ҡыҙығыҙ мән бер егет муйындашып,*
Ятыпты таҡ өҫтөндә* ҡуйындашып.

Минең әйткән һүҙемә инанмаһаң,
Ҡарағыҙ, тәксир ханым, ишек асып.

Ишетеп, хан ҡылысын ҡулына алды,
Иленә асыуланып хәбәр һалды.
Ҡүшәлә* күп һалдаттар йыйылышып,
Хан ҡыҙының таш өйөн ҡамап алды.

13а Хан тыштан асыу ҡылып аҡыраҙы,
Өйҙә ятҡан ҡыҙын саҡыраҙы.
«Өйҙә йөргән дошманды үлтерең!» — тип,
Бейҙәре тышта тороп аҡыраҙы.

Һалдаттар өй эсенә инеп килде,
Бисаралар тапманы ҡасар юлды.
Ғәрип йәндән төңөлөп, бисаралар
Алланың әмеренә муйын һондо.

Һалдаттар мән икеһе орош булды,
Бирмәне күп һалдаттар ҡасар юлды.
Бисаралар ишеккә ынтылғандай,
Аяғына йәбешәҙе һигеҙ ҡуллы.

«Йә алла!» – тип, ҡылысын ҡулына алды,
Алдына тиҙ килгәнде ҡырып һалды.
Бисаралар таш өйҙән сығып ине,
Тыштағы күп һалдаттар уртаға алды.

«Үлтерең!» — тип, хан тороп ярлыҡ ҡылды,
Тыштағы һалдаттар уртаға алды.
Бисаралар, атына менеп алып,
Йөҙ егерме кешеһен ҡырып һалды.

Буҙйегет юлдашы мән ҡасып китте,
Шәһәрҙең күршеһенән сабып үтте.
Хоҙай Тәғәлә һаҡлаһа, бәлә булмаҫ,
Баяғы абыҙына аман етте.

Тота алмай хан инде ғәжиз булды,*
Йөҙ егерме кешеһе үлеп ҡалды.
Аяғының аҫтынан бәлә сығып, —
Хоҙайым был бәләне ҡайҙан һалды?

Хандың ҡыҙына әйткән һүҙе:

13б — Уай, ҡыҙым, был ни тигән шомлоҡ? — тине,
Атайыңды инде ҡылдың моңлоҡ, — тине.
Ҡайҙан аҙып йөрөгәнгә юлдаш булып,
Шәһәрҙә кеше юҡмы шундиҡ?* — тине.
Уай, балам, иркәк* тапмай шашҡаныңмы?
Ер йөҙөндә хандарҙың улы юҡмы?

Ҡолдар мән, сының менән* аҙғаныңмы?
Был ни тигән башыма бәлә һалдың?
Бындай өлкән оятҡа ҡайҙан ҡалдың?
Йортонда шундиҡ хандар уғлы юҡмы?
Юлдан аҙып йөрөгәнгә ҡайҙан ҡалдың?

Атаһына ҡыҙының биргән яуабы:

— Ҡолағым һаңғырау булғанда,
Әйтһәң, һүҙең укмайҙы.*
Ҡандай* якшы тапһаң да,
Һис тә миңә яҡмайҙы.*
Ғаҡлым баштан киткән һуң,
Ғаҡлыңды алмаҫмын;
Был бер килгән егеттең
Һис юлынан ҡалмаҫмын.
Әкә,* башымды алһаң да,
Зинданыңа, ай, һалһаң да,
Был йәремдән китмәҫмен, —
Йөҙөн күрмәй ҡалһам да.
Беҙҙән мәғкүл* ҡыҙ табып,
Үҙ иркеңсә ҡылырһың,
Йорттан яҡшы таңлатып,*
Һөйгәнеңә бирерһең.
Был йәремдән башҡаның,
Үлһәм, йөҙөн күрмәҫмен.
Был егетте күрмәйен,
Дәрдемә юҡ дарманым.
Йөҙөн күреп үлһәм мин,
Донъяла юҡ арманым.*

Ҡыҙына асыуланып,
хандың йортон йыйғаны*

14а — Асыуланып, хан инде йортон йыйҙы,
Ҡыҙына асыуланып, эсе көйҙө.
Дошмандар тағы бында килмәһен тип,
Һәр ерҙә күҙәтсене әҙер ҡуйҙы.

— Уай, йортом, ханығыҙҙың даны! — тимен,
Шәһәрҙә дошманыбыҙ ятыр, — тимен,
Ҡайҙан килеп ҡыҙымды аҙҙырыпты,
Тик имәс* был — бер килгән жаду,* — тимен.
Ғаҡылдашып, бейҙәрем, юл табығыҙ!
Шәһәрҙән бау мән еп, ҡол табығыҙ!
Ҡарылыкта,* башыма килгән бәлә,
Кисектермәй дошмандан кик* алығыҙ!
Дошмандың алып килең киҫеп башын,
Күҙенән ағыҙығыҙ ҡанлы йәшен.

Дошмандан кисектермәй кик алығыҙ!
Ҡуймағыҙ янындағы бар юлдашын!

Асыуланып хан шулай ярлыҡ ҡылды,*
Күп ғәскәр дошманына бармаҡ булды.
Дошманыбыҙ осраһа, ҡотолмаç тип,
Шәһәргә һалдат менән ғәскәр тулды.

Егеттәрҙең яуабы:

Бисаралар абыҙҙан ғаҡыл алды:
Хат биреп, юлдашынан хәбәр һалды,
Хат эсендә үҙенең атын һалдыҡ
Юлдашы китте, үҙе өйҙә ҡалды.

14б Хат алып, йән юлдашы етеп килде,
Хат тотоп, хан алдына килеп инде;
[Хатты күргәс, хан шунда уҡ иçенә килде,][32]
Дошманының юлдашы барын белде.

Ҡул ҡушырып ханға был сәләм бирҙе.
Хатын биреп, ишектә ҡарап торҙо.
Хат эсендә: «Хан — мин», — тип яҙған икән.
Хатын уҡып, хан алып ергә орҙо.

— Уай йортом, был жады* ғуй шашҡан икән,
Ҡол икән: «Батша мин», — тип яҙған икән,
Юлдашын, башсы ҡылып,* башын алың!
Үҙенә үҙе соҡор ҡаҙған икән.

Бисараны башсы ҡылып алып барҙы,
Ҡылыстарын ҡынына һалып барҙы,
Эҙләгән дошманыбыҙ гиз булды, тип.
Ҡалдырмай батырҙарын алып барҙы.

Өйҙән ҡарап, ханзада[33] белде, тине,
Үлтергәле дошманҙар килде, тине.
Күп ғәскәрҙең тауышын ишеткән һун,
Эйәрләп арғымағын менде, тине.
Йә алла! — тип, дошманға ҡаршы йөрнө,
Ян юлдашын дошмандан йолоп алды.
15а Юлдашын күп ғәскәрҙән алып ине,
Күп ғәскәр бары инде уртаға алды.

Күп кеше, көн батҡансы, орош булды,
Соҡор ерҙең бары ла ҡанға тулды.
Хоҙай Тәғәлә һаҡлаһа, бәлә булмаç,
Йыҡты, тине, атынан өс йөҙ ҡолдо...

Ҡалған гәскәр ғажиз булып ҡайтып килде,
Өс йөҙ кеше үлгәнен әйтеп килде.

Барған кеше дошманды тотҡаны юҡ,
Хан бер шомлоктоң булғанын инде белде.

Бейҙәре хан алдындай һүҙ әйтәҙе:
15б — Орошоп был дошманды беҙ ҡайтале?
Саҡырып, кейәү ҡылып, туй туйлатып,
Үлтерһәк әмәл ҡылып, беҙ ҡайтале.

Бейҙәренең был һүҙенә бары күнде,
Күшәлә сауын әйтеп,* атҡа менде;
«Егет-ҡарың, был туйҙан ҡалмаң!» — тине,
Ханшабыҙҙың күнеле инде тынды.

Ханшаға һөйөнсөгә берәү килде:
«Ниңә айырһын хан һеҙҙе һөйгән йәрҙән?
Йәрегеҙгә, килһен тип, хәбәр һалың.
Туйығыҙға туйһын йорттоң ҡарыны.

Атҡа менеп, хан үҙе йөрмәк булды,
Туйығыҙҙың ҡыҙығына кермәк булды;
Ярлыҡ ҡылып, йортона сауын әйтеп,*
Һөйгәненә ул һеҙҙе бирмәк булды».

Ҡыҙ фәкир һүҙгә, инанаҙы,
Йәренә сәләм әйтеп һүҙ һалаҙы...[34]

[Егет, саҡырғанда, туйға килде, егеткә күп араҡы биреп, мас ҡылдылар,* юлдашы ҡыҙға хәбәр бирҙе.]

[Буҙйегет дуҫының Ҡарасәскә килеп әйткәне:]

16а — ...Күп дошмандың эсендәй
Ҡайырып алыр йәре юҡ,
Һөйәмен тип торғанда,
Айырып алыр йәре юҡ...
Ғәрип башы киҫелһә,
Һеҙҙең өсөн киҫелер.
Кәүҙәнән баш өҙөлһә,
Һеҙҙең өсөн өҙөләр.
Әйтһә, һүҙе була ине,
Бер батшаның улы ине,
Мең-мең ғәскәр атланһа,
Бары уның ҡоло ине.
Донъя милке бар ине,
Бер үҙенә зар ине,
Шундай батша табылмаҫ
Күренгәндең йәре ине.

Ҡай ерлеген әйтәйем,
Ҡанша* әйтһәм дә, табылмаҫ;
Янғыҙы ине бер хандың,

Һөйәген йортоң танымаҫ.
Мас булғанда ғәриптең
Хәлен һис кем һорамаҫ.
Күп эсендә нә ҡылһын?
Хаҡҡа* муйын һоноп та.
Муйын һонған егеттең
Үләр көнө булыпты.
Һеҙҙән сәбәп булмаһа.
16б Үләр көнө [яҡында].[35]
Өтрөк* йәрҙең дуҫты имәс,*
Мине тағы ҡустай* бар;
Беҙҙе бергә үлтерһен,
Атайың һүҙен ҡустай бар!
Ысын һөйгән йәр булһаң,
Өмөтөңдө өҙмәй бар;
Боронго үткән дуҫтай бар,
Дуҫтың һүҙен ҡустай бар.
Сын күңел мән йәр булһаң,
Йәреңде тиҙ эҙләй бар,
Дәрд* быуынға төшмәй, бар,
Ҡылыс башын киҫмәй, бар.[36]
Йәрҙә мәйлең* бар булһа,
Өмөтөңдө өҙмәй бар,
Ҡорбанлығын йыҡмай бар,
Дошманыңдан буҡмай* бар.
Һуғымдарың һуймай бар,
Йәр ҡайғыһын уйлай бар;
Эш үткән һуң, файҙа юҡ,
Найҙаларын* һуҡмай бар!
Бөгөн иҫкә алмаһаң,
Үткәндән һуң[37] туйлай бар!
Дәрд быуынға төшкән һуң,
Ҡылыс башын киҫкән һуң,
Һеҙ йәрҙе мин нитәйен,
Кәүҙәнән баш өҙгән һуң?

Ҡыҙҙың йортона барғаны

17а Ҡыҙ бахыр ишеткән һуң торҙо, тине,
Йүгереп туйға табан йөрҙө, тине.
Үлһәм, йәрҙең юлында үләйем тип,
Сәләм биреп, туй өйөнә керҙе, тине.

Ишектән кереп, күпкә сәләм бирҙе,
Күп ғәскәр тора килеп урын бирҙе.
Буҙйегет мас булыпты, иҫен белмәй,
Өтрөк* туйҙың булғанын инде белде.

Атаһы түрҙә ултыра, түбән ҡарап,
Мас егеттең булмайҙы хәлен һорап.

Ике күҙе егеттә күп ғәскәрҙең,
Башаҡ мән ҡулына хәнйәр алып.

Буҙйегет, йәре килде, танымана,
Араҡы мән шарапҡа ҡарны туйҙы.
Эше үткәнен бисара белеп алып,
Әйләнеп түңәрәккә бер ҡараны.

Ҡыҙ бахыр был шомлоҡто белде инде,
Атаһына зар иңерәп килде инде;
Йәр өсөн күп алдында теҙен бөгөп,
Башланы атаһына һүҙен инде.

Йәшен түгеп алдында ҡыҙ илайҙы,
Бер йәр өсөн ялынып зар иңрәйҙе,
Йәремдең яңғыҙ йәне ҡаламы, тип,
Моң әйтеп, күп алдында йыр йырлайҙы.

Ҡыҙҙың илап әйткәне:

— Сәләм бирҙек, аталар,
Ҡотло булһын туйығыҙ!
Күп халыҡты йыйып һеҙ,
Төҙөү[38] булһын уйығыҙ!

17б Сын күңел мән туй булһа,
Ҡуй-ҡуҙынан һуйығыҙ;
Дошман булһа арала,
Азат итеп ҡуйығыҙ!
Ғәҙел батша туй ҡылһа,
Алла өсөн уй ҡылһа,
Бай эсендә зарлыны
Азат ҡылһа кәрәк, ти.
Бөгөнгө көн — яҡшы көн,
Тоткон әҙәм бар булһа,
Ҡотолорға зар булһа,
Азат итең, яҡшылар!
Боҙоҡ булһа туйығыҙ,
Ялған булһа уйығыҙ,
Азат ҡылып яңғыҙҙы,
Беҙ фәкирҙе һуйығыҙ!
Боронғо, үткән донъяла
Кеше һуйып туй ҡылған,
Ишетмәнем, күрмәнем,
Былдай яман уй ҡылған.
Һуғым кәрәк тиһәгеҙ,
Әҙәм итен ейһәгеҙ,
Был зарлыны ҡотҡарып,
Беҙ фәкирҙе һуйығыҙ!
Күп эсендә был үҙе

Аҙҙай булған бер ғәрип,*
Алып йөргән ҡашында
Юлдашы юҡ бер ғәрип,
Серен әйтеп моңлашыр
Юлдашы юҡ бер ғәрип,
18а Ил-йортонан айрылған
Ярты йәнле бер ғәрип...
Алпа тәғәлә яҙған һуң,
Кемдәр зарлы булманы.
Күп иленән айырылһа,
Кемдәр зарлы булманы.
Мин илаймын, теләймен
Ата менән ананан,
Хан ҡаршында ултырған
Бейҙәр менән ағанан...
Аҡыллы тыуған хан әкәм
Ҡыҙының ҡәҙрен белерме?
Миһман* булып килгәнмен,
Ҡалағаным* бирерме?
Һөйгән йәрҙән айырмаҫ,
Улды атанан айырмаҫ,
Әй, йортомдоң яҡшылары,
Һеҙҙән һорап илаймын!
Был бер килгән егетте
Азат ит тип теләймен.
Уны азат ҡылһағыҙ,
Бар малымды бирәйем;
Ҡулығыҙға һыу ҡойоп,
Көнлөктәй* хеҙмәт ҡылайым!

Ҡыҙ бахыр йәренән айрылмайҙы,
Йәремде азат ит, тип, күп йығлайҙы.
Хан үҙе, түбән ҡарап, ерҙе соҡоп,
Ҡыҙының был һүҙенә ҡайрылмайҙы.

Ғаҡылһыҙҙың бары ла һанрау булды,
Ҡыҙ һүҙен ишетмәҫтәй миңрәү булды.
Атаһы мән йортонан ҡыҙ төңөлөп,
Күҙенән аҡҡан йәшкә алды тулды.

Илап-иңрәп, йәрендә ике күҙе,
Өй эсендә әйләнеп бер ҡарайҙы:
Ҡайҙа киткән бының бар юлдашы,
Күп дошмандың эсендә йән юлдашы?..

Хәлен белмәҫ буламы,
Илап ҡыҙы килгәндә
Күҙен һалмаҫ буламы?
Йорт эсендә ялғыҙны
Иркәләтмәҫ буламы?

Күп йәшәгән аталар,
Бейләр менән ағалар,
Ҡәнәш яхшы һүҙенән
Айырылмаҫ булырмы?

Әйтеп-әйтеп булмаған һуң,
ҡыҙҙың йәнә әйткәне:

— Ғаҡылһыҙға һүҙ әйтһәң,
Күкрәгенә ҡунмаҫ, ти.
Рәхимһеҙгә һүҙ әйтһәң,
Ни әйтһәң дә булмаҫ, ти.

Күҙҙәре юҡ. Хандарҙың
Һуҡыр булыр көн икән;
Ғаҡылы юҡ ҡарттарҙың
Һаңрау булыр көн икән.

Заман ахыр булғансы,
19a Асылмаһын күҙегеҙ!
Дошмандан яу булғанда,
Берекмәһен һүҙегеҙ!

Көнөгөҙ быңдай булғанда,
Хәйерһеҙгә гиз булың!
Зарлы көнгә ҡалһағыҙ,
Һаңрау йортҡа гиз булың!

Малығыҙҙы алған юҡ,
Күңелегеҙ һис ҡалған юҡ,
Атағыҙҙы үлтереп,
Муйнына ҡылыс һалған юҡ.

Найҙа,* ҡылыс янға алып,
Балта, бысаҡ ҡулға алып,
Атағыҙҙы үлтергән
Дошманығыҙ был имәс.*
Ғәйебе юҡ әҙәмдең
Ҡанын түгеү юл имәс.

Ҡыҙ бисара йортонан төңөлөптө,
Йәренә яҡынырак ул килепте.
Атаһы мән йортонан дарман тапмай,
Йә күҙенән ҡанлы йәше түгелепте.

Ҡыҙҙың егеткә әйткәне

— Әй, егет, ҡыуанма был уйынға,
Шайтан кергән ҡуйынға!
Аҡылыңды йыймаһаң,
Ҡылыс етәр муйынға.

Уай, егет, уай, мас егет!
Аҡылынды йыймаҫ егет!
Йән сығыуға етепте,
Күп эсендәй аҙ егет.
19б Буҙйегетем күҙең ас,
Әүәлдән ҡушҡан йәр килде,
Һикереп тороп ишек ас!
Ҡылыс сапмай башынды,
Зарланып йәрең килгәндәй.
Илап килгән йәреңдең
Йорто телен алмайҙы.
Ҡаты бауыр хан әкәм
Ҡыҙына күҙен һалмайҙы.

* * *

Ҡолсылыҡ ҡыл, Баһауи,
Донъяла һис кем ҡалмайды.
Вафаһы* юҡ ҡара ер
Теренең барын ялмайды.

* * *

Яр — юлдашы ишектә илап ултыр/а/,
Хоҙайҙан, аман ҡыл, тип теләп ултыр/а/,
Хан ҡыҙына рәхим буламы, тип,
Ҡыҙҙың һүҙен ишектә тыңлап ултыр/а/.

Бисара белде инде булмағанын,
Атаһы ҡыҙының һүҙен алмағанын.
Дуҫтымдың йөҙөн күрәйем тип,
Өйгә керҙе, ҡорбан ҡылып йәнен.

Дуҫтының ҡашына яҡын килде,
Ҡыҙҙан дарман булмаҫын инде белде.
Үлһәм, бергә шул ерҙә үләйек тип,
Сын йәнен дуҫты өсөн ҡорбан ҡылды.

Мас булып, дуҫты бының ҡарамайҙы,
Һис ҡайһы бының хәлен һорамайҙы.
«Дуҫтымдың ҡолағына йыр йырлайым,
Тик ултырып сығыуым ярамайҙы».

20а Буҙйегеткә дуҫтының
йырлап әйткәне:

— Бер шәһәрҙең эсендә
Бер йөргәнгә оҡшайһың.
Ҡай ерлек сән, уай, егет

Бер күргәнгә оҡшайһың.
Мин иләндә торғанмын,
Ата-ананды күргәнмен.
Сән өйөндә хан инең,
Һәр бер эшкә дан инең,
Үҙеңдәй булған ғәрипкә
Туған һымаҡ[39] дан инең.
Былбыл инең ерендә,
Сыҡмаҫ турға* төшөп сән,
Ҡош ҡотҡармаҫ ҡарсыға,
Имен юлға китеп сән,
Теләп булмаҫ дошмандан
Был хурлыҡҡа төшөп сән,
Маңлайыңдин тир ағып,
Ҡайрылмаҫҡа төшөп сән.
Тирәнек ергә барып сән —
Тиҙ торороң ҡыйын, ти;
Янған утҡа төшөп сән —
Һүндеререң ҡыйын, ти...

20б Аман булғыл, ян дуҫтым,
Инде ҡайҙа күрермен?
Боронғолай берегеп,
Инде ҡайҙа торормон?
Ҡиәмәт көн булғанда,
Күрһәм шунда күрермен.

Ҡашында йән юлдашы йыр йырлайҙы,
Түрҙә ултырған хан ҡыҙы зар иңрәйҙе,
Буҙйегет, был йырҙы ишеткән һуң,
Күҙен асып дуҫтына бер ҡарайҙы.

Күҙен асып, Буҙйегет дуҫтын күрҙе,
Ҡасыуға ҡыҙ мән егет мәғҡүл күрҙе.
Дошмандың ҡасд* ҡылырын белгән һуң,
Ишеккә йән тырмашып [был] йүгерҙе.
«Йә Алла!» — тип, атына менеп алды,
Өйҙәге күп дошмандар тоймай ҡалды.
Дуҫты мән икеһе атҡа менеп,
Найҙа* мән ҡылыстарын ҡулына алды.

Хан ҡыҙы: «Аман-иҫән барың, — тине, —
Ун көндә әҙер булһын ярың», — тине.
[Хан] быларҙың ҡасҡанын белгәндән һуң;
«Тиҙ барып, уның башын алың!» — тине.

Күп ғәскәр бер-беренә тығылаҙы,
«Беҙҙәрҙин ҡасып, ул ни ҡылаҙы?»
Өҙәнгенең уң яғын киҫкән икән,
Менәмен тип атына — йығылаҙы.

Буҙйегет юлдашы мән китеп ҡалды,
Артынан күп ғәскәр ҡыумаҡ булды.
21а Һанһыҙ ғәскәр атына менеп алып,
Артынан ҡыуып етеп, урға алды.[40]

Әл-ҡисса: бер батша бар ине, бер уғлы бар ине, аты Зәйтүн ине. Хикәйәт китабы Зәйтүн тиәр ине. Туркан иртәгеләрендә* аты Зәйтүн тиәрҙәр. Әммә китаптағы дөрөҫтөр. Хан ҡыҙын борон шуңа бирәмен тип йөрөгән икән. Зәйтүн ҡыҙға ғашиҡ икән. Ҡыҙҙың хәбәре юҡ икән. Был хәбәрҙе ишетеп, мең кеше мән Зәйтүн килгән икән. Мәғлүм булһын.

Бар ине бер батшаның уғлы, тине,
Күп ине алтын-көмөш поло* тине.
Хан уға ҡыҙын бирмәк булған икән,
Араһы бер айлыҡ[41] юл, тине.

Бер яйҙаҡлы* килде лә хәбәр алды,
Күп ғәскәр йыйып торған, алып барҙы.
Мең кеше ҡашына юлдаш ҡылып
Килгәнен күргән әҙәм таңға ҡалды.

Хан алдына килде лә сәләм бирҙе,
Хан, килгәнен хуш күреп, ғәләйкәләне.*
«Ҡәрәк көндә гиз булдың, кейәүем», — тип,
Үҙенең уң яғынан урын бирҙе.

21б Хан тороп: — Балам, инде ултыр, — тине, —
Ҡыҙымды вәғҙә ҡылдым былтыр, — тине, —
Арабыҙҙа жаду* ғуй пәйҙә булды.
Башын киҫеп, һин миңә килтер, — тине.
— Тәксир хан, рөхсәт бирһәң, мин барайым,
Башын киҫеп, һеҙгә мин килтерәйем!

Атына рөхсәт алып менде, тине,
Күп ғәскәрҙең ҡырылғанын күрҙе, тине.
Ғәскәренән биш йөҙ кеше ҡайтҡан икән,
Алдында асыу ҡылып торҙо, тине.

Күп ғәскәр: — Беҙ орошка барҙыҡ, — тине, —
Мең кеше уртабыҙға алдыҡ, — тине. —
Яртыбыҙҙы ул беҙҙең ҡырып һалды,
Көсөбөҙ беҙҙең етмәй ҡалдыҡ, — тине. —
Алдына гиз килгәнде ҡырып һалды,
Үҙе — арттан, юлдашын алға һалды.
Көсөбөҙ етмәй, унан ҡасып киттек,
Дүрт йөҙ кеше беҙҙәрҙин ятып ҡалды.

Зәйтүндең яуабы:

— Хан ҡыҙын былтыр беҙгә вәғәҙә ҡылған,
Ике хан бер-беренә фәтә* ҡылган.
Бынса илен ҡырҙырып, ханың үҙе
Беҙҙе әүәлдә саҡырмай хата ҡылған.

Күрегеҙ, һеҙгә ҡыҙыҡ күрһәтәйем,
Уҡ менән башын унын өҙә атайым!
Икеһенең берләйен башын киҫеп,
Хансагыҙға апарып күрһәтәйем!

22а Күп ғәскәр бергә инде йөрнө, тине,
Ҡыраһын бисаранын күрҙе, тине.
Буҙйегет ташҡа бер уҡ аткан икән,
Ташҡа уҡ киҙенән* батты, тине.

Был да инде бер уҡ атты, тине,
Ташҡа угы уртаһынан батты, тине.
Үҙ көсөнөң кәм икәнен белгән һуң,
Йортона, ярлыҡ әйтеп, ҡайтты, тине.

«Беҙҙән ул касты, инде килмәҫ, – тине, —
Был шәһәргә ул инде инмәҫ, — тине. —
Хансағыҙ беҙҙең берлән ҡушылган һуң,
Килһә лә эт ҡәҙәрле күрмәҫ, — тине.

Хансаң яҡшы күрмәһә күргән сыгыр.
Дога уҡып, башын унын борған сығыр.
Ханса беҙҙе күрһә, ҡорбан булыр,
Борон беҙҙе килмәҫ тип йөргән сығыр!»

Күп ғәскәр теркерәшеп касты, тине,
Үлтерҙек тип, хансаға әйтә килде.
Ҡыҙ, бахыр, терелектән өмөт өҙмәҫ,
Суйтсә дә* көндән-көнгә йөҙө һулды.

Буҙйегеттең хәле.[12]

Бисаралар яралы булған икән,
Яр — юлдашы йығылып ҡалған икән.
Күҙен асып ҡараһа, тауға килде,
Иҫе ауып ҡалғанын инде белде.
Бейек тауҙың ҡашына килеп ине,
Тауға бер аҙ төшөүгә күңел ҡылды.[13]

Ат ялына ҡул ҡарышып ҡалған икән,
Дошмандар күп яраны салған икән.
22б Ҡашына ҡарап торһа, юлдашы юҡ,
Бисара бер ерҙә үлеп ҡалған икән.

«Йән юлдашым, бисара, үлгән икән,
Күп дошман эсендә ҡалған икән.
Тере булһа, ҡашымда йөрмәҫме ине?
Күкрәгенә күп ҡайғы һалған икән».

Һәр ердә яраһы бар, ҡан ағаҙы,
«Был ерҙә үлһәм, мине кем багаҙы?»
Күп яранан үлемде уйына алып,
Ике күҙҙән ҡанлы йәш инде ағаҙы.

Бер ергә атын бәйләп төштө, тине,
Ғәзиз йәндән өмөтөн өҙҙө тине.
«Яңғыҙлыҡта янымда юлдашым юҡ», —
Башланы дуҫтын юҡтап һүҙҙе, тине.

Бузйегеттең, дуҫтын юҡтап,
һыҡтағаны:

— Туҙан баҫты тунымды,
Тупраҡ баҫты юлымды.
Ҡайғы баҫты күңлемде,
Асылыр көн булырмы?
Ғәриплеккә төшкәндә,
Дуҫтым минең килерме?
Иҫемә алып юҡтаһам,
Минең хәлем белерме?
Яңғыҙлыҡҡа төшкәндә,
Бер күрер көн булырмы?
23а Боронғолай берегеп,
Бер йөрөр көн булырмы?..

Был ҡайғылы көндәрем,
Онотолор көн булырмы?
Артымдағы дошмандан,
Ҡотолор көн булырмы?
Ҡаршы ҡарап дошманға
Йөрөр юлым булырмы?
Боронғолай берегеп,
Бер йөрөр көн булырмы?
Айырылып сән, йән дустым,
Күрер көнөм булырмы?
Эҙләйем тиһәм, дарман юҡ,
Һине ҡайҙан табайым?
Бергә үлһәк, арман юҡ,
Һине ҡайҙан табайым?
Дуҫтын юҡтап, зар ҡылып, иңрәйҙе,
«Күрәменме дуҫым?» — тип күп илайҙы.

Бейек тауҙың башында бер ҡарлуғас
Балаһына ем биреп аҫырайҙы.

Ҡарлуғас ҡарлуғаска ем бирәҙе,
Ҡарындаш ҡарындашҡа дим бирәҙе.

«Яңғыҙлыҡҡа төштө ғәрип башым,
Минең буйтеп* йөрөгәнем кем беләҙе?
Илағаным белмәйҙе атам минең,
Зарлығымды белмәйҙе анам минең.
Ғәриплеккә төшөптө ғәрип башым,
Һорарға һис кем юҡ хәлем минең».

Бар икән беҙгә былай йөрөр көндәр!
Зарланһам да, һис кем юҡ хәлем һорар.
Үҙ йәнеләй аҫыраған әкә-шәшәм,*
Булырмы тағы бер көн һеҙҙе күрер.

Ағастың башын киҫһән, төбө ҡала,
Икәүҙең бере үлһә, бере ҡала.
Яңғыҙҙың үҙе үлһә, нейһе ҡала? —
Менгән ат, кейгән тунятҡа ҡала.
Барам, дисәм, булыпты юлым тоноҡ,
Әйтәм, дисәм, ят илдә сүҙем сыныҡ.
Ни ҡылса да ирек бар, сарамыз юҡ.
Булмасты ахыр ғәриптән күңеле сыныҡ.
Тыуған ергә, әсә, өйгә төштө юҡ,
Булды ҡашымдағы йән юлдашым юҡ.
Йөрөмәс ергә очрады ғәрип башым,
Ағадыр ҡан аралаш күҙдән йәшем.

23б Был донъяның эсендә үлмәй ҡалған
Булырмы? — Уйлағандың барын алған.
Баһауиҙың башында ҡайғыһы бар,
Шуның өсөн был йырҙы табып алған.

Яҙҙым мин моңло күңелем асылһын тип,
Һәр ергә был йыр һүҙем сәселһен тип;
Донъяла төрлө-төрлө әҙәм булыр,
Ҡайғылы әҙәм күңеле баҫылһын тип.

Буҙйегеттең хоҙайға
налиш* ҡылғаны:

— Олуғларның олуғы, хоҙайым, сән,
Килеп торамын алдында гидайың* мән.
Үҙең ярҙам ҡылмаһаң беҙ ҡолоңа,
Ялғыҙлыҡҡа төшөп мән, нитәйен мән.

Уйлаймын йәнем бында ҡалырмы тип,
Моңло башым был ерҙә ҡалырмы тип.
Ҡем үлмәй ҡалыр бында яралған һуң?
Ҡурҡамын, ҡол кәфенһеҙ ҡалырмы тип.

Ходая,* тәкдирендән калырым юк,
Ярҙам эҙләп, һис кайҙа барырым юк,
Күңелемә шул бер ере моң булады:
24а Кәфен табып, гүр эсенә һалырым юк...[44]

Ун һигеҙ мең ғаләмде яратып сән,
Мәканлы мәканына таратып сән;
Хоҙайым, әмер кылһаң, һис хәлем юк,
Боролоп кашай тиһәм[45], дарманым юк.

Ходая, тәкдиреңә тәдбирем* юк,
Тура үлем осраһа, әмәлем юк...[46]
Ярлыкаһаң мин колоңдо, рәхмәтең киң,
Һинән башка һис кемдин теләрем юк.

Әүәле беҙ колондо бадша кылдың,
Колондоң затыны үҙең белдең.
Нә кылһаң да, беҙ — бәндә, сарабыҙ юк,
Ғазап кылһаң, колоңа кәһәр кылдың.

Ете көн дуҫтын тапмай эҙләп йөрҙө,
Кыҙға, йәрен табалмай, хәбәр бирҙе.
Хан кыҙы мән икеһе ғакыллашып,
Инде килһә, касыуҙы мәгкүл күрҙе.

Кыҙ әйтәҙе: «Уны тапкыл, — тиеп, —
Үлеме, тереме, уны апкил, — тиеп. —
Был шәһәрҙең эсендә бер кимпер* бар,
Йәшереп өйөнә унын апкил», — тиеп.

Юлдашы батшаһын[50] эҙләй йөрҙө,
Күп күренһә,[51] атының башын борҙо.
25а Бер түбәнең башына килеп ине,
Йән юлдашы киләҙе, уны күрҙе.

Атына менеп, дуҫтына каршы йөрҙө,
Бер-беренә йығлашып кулын бирҙе.
Бере-бере күрешеп күңел тынды,
Шәһәргә керәйек тип, атка менде.
Дуҫты, кыҙ өйөнә йәйәү килеп:
— Аман йәрең килде, — тип хәбәр бирҙе.

[Кыҙ:]

— Һөйөнсөгә теләгенең алғыл, — тине, —
Кулыңа алтын йөҙөк һалғыл! — тине. —
Кимпергә биш мең алтын бирмәк булдым,
Йәремде барып унан күрмәк булдым,
Кимпергә хәбәр биреп, вәғҙә кылдым,
Кистән барып, төндә бергә тормак булдым.

Хан ҡыҙы йән дуҫтына хәбәр ҡылды:
— Ҡимперҙең өйөнә алып барғыл, — тине. —
Бисара тәңреһенә налиш ҡылды,*
Яратҡандан башҡаны алыҫ белде.
Бисара налиш әйтеп ултыра ине,
Ҡара сысҡан алдына ҡаршы килде.

Сысҡанды был бисара тотоп алды,
Үҙендәй һәр еренә яра һалды.
Боронгонан ишеткән һүҙ бар икән,
Дәрденә был сысканды даркар* ҡылды.

24б Сысканды ибас бәйләп[47] ҡуя бирҙе,
Сысҡан, эҙләп, һәр ерҙән сүпте ейҙе.
Һәр ерҙән сысҡан сүпте эҙләй-эҙләй,
Бер сүп ейеп, сысканға шифа булды...
Бисара бер сүп ейгән икән,
Сүпте ейеп, шу ергә ыуып һалды,
Сүптән был ергә ыуып һалып,
Яраһы һау кешеләй була ҡалды.
Сысҡандың сарҡытын[48] табып алды,
Бер аҙ ейеп, яраға уҡып һалды.
Яраһының өҫтөнә һалып ине,
Яраһы һау кешеләй була ҡалды.
Хаҡ Тәғәлә таптырып дәртен яҙҙы,
Атына менеп, юлға ҡәҙәм* баҫты.
Бер көн ҡаты сабып йөрөнө, тине,
Шәһәренең ситенә инде яҡынлашты.[49]

Дуҫтының хәле

Бисара дуҫты бының ҡалған икән,
Уға ла күп яраны һалған икән.
Эсенән күп ғәскәрҙең дуҫтын тапмай,
Баяғы абыҙына барған икән.
Ете көн дустын тапмай эҙләп йөрдө,
Ҡыҙға йәрен таба алмай хәбәр ирде,
Хан ҡыҙы мән икеһе ғаҡылдашып,
Инде килһә, ҡасыуға мәғкул күрде.
Ҡыҙ әйтте: «Уны әпкил, — диде, —
Үле мәйетен, уны тапҡыл, — диде, —
Был шәһәрнең эсендә бер кәмпер бар,
Йәшереп өйөнә уны әпкил, — диде.

Юлдашы батшаһын эҙләп йөрҙө,
Күп күренһә, атының башын бордо,
Бер түбәнең башына килеп иҙе,
Яар — юлдашы киләлер, аны күрҙе.
Атына менеп, дуҫтына ҡаршы барҙы,
Берс-беренә илашып ҡулын бирҙе.

Берен-бере күрешеп, күңел тынды,
Шәһәргә керәйек дип, атына менде.
Дуҫтыһы, ҡыҙ өйөнә йәйәү килеп:
«Аман йәрең, килде», — дип, хәбәр бирҙе.
«Һөйөнсөгә теллә̌ҙе алғыл, — тине —
Ҡулыңа алтын йөҙөк һалғыл, – тине.
Ҡәмпергә биш мең алтын бирмәк булдың,
Йәремне унан барып күрмәк булдым.
Инде мында килмәгел, дошман белер,
Төҙөрһөн инде кәмпер беҙҙең юлды.
Һәр ерҙән дошман беҙгә күҙ һаладыр,
Кәмпернең өйөнә алып барғыл, — тине,
Кәмпергә хәбәр биреп, вәғәҙә ҡылдым,
Ҡисә барып төндә бергә тормаҡ булдым».

Хан ҡыҙы хан дуҫтына хәбәр ҡылды:
«Ҡәмпернең өйөнә алып барғыл, диде.
Һәр ерҙән дошман беҙгә күҙ һалаҙы.
Түҙер инде, кимпер беҙҙең юлда! — тине.

Шәһәрҙән берәү быны күрҙе, тине:
«Баяғы ҡыҙҙың йәре килде!» — тине.
Бисаралар кимпергә килгән икән,
Күргәндәр, ханға әйтәм, тиеп китте.
[Ошаҡсы] хан алдына килде, тине,
Ни йомошҡа килгәнен әйтте, тине:
— Баяғы дошманығыҙ ике егет
Ул кимперҙең өйөнә килде, — тине.

Бейҙәре хан алдына килде, тине,
Ике егет килгәнен белде, тине,
«Был дошмандан беҙ ҡайтеп* ҡотолабыҙ?» —
Йортон йыйып киңәш ҡылды, тине.

Баяғы Зәйтүн батыр бергә килде,
Кейәү булып сыҡмайҙы итергә,[52] тине.
Хан ҡыҙын аламын тип ҡыуанаҙы,
Сәләм бирһә, алаҙы ҙурға, тине.

25б — Тәксир хан, рөхсәт бирһәң, мин барайым,
Әмәл ҡылып, уны [мин] үлтерәйем!
Ул кимпер өйөнән тере тотһам,
Алдыңа һөйрәп [алып] килтерәйем!

— Уай, балам, уны үлтерһәң, ҡыҙ һинеке,
Буламын, дошман китһә, дуҫ һинеке!

Хандан рөхсәт алған һуң йөрҙө, тине,
Кимперҙең өйөнә был килде, тине.

Бер ҡуржынға тултырып алтын биреп,
Ҡимперҙе ахыр алдап орҙо,[53] тине.

— Уай, кимпер, һиңә алтын мул бирәйем,
Үлгәнсе,[54] хеҙмәткәр ҡол бирәйем.
Уларҙы ыу бирһәңиҙә үлтер, кимпер,
Өмөрөң үтмәй тороп, юл бирәйем![55]

Таң иртәнүк тороп, кимпер, аш ҡылырһың,
Биһуш* тигән дарыу алдырырһың.
Хан һиңә, быны үлтерһәң, чин бирәҙе:
Бер ҡәүм* ҡатындарға баш булырһың.

Ахыр юлдан кимпер аҙҙы, тине,
Быларға инде соҡор ҡаҙҙы, тине.
Баҙарҙан биһуш тигән дарыу алып,
Таң иртән кимпер ҡылды эште, тине.

Бисара был дарыуҙы эсеп һалды,
Юлдашы, белмәй быны, тышта ҡалды.
«Юлдашы юҡ, беренә бирҙем дарыу,
Үлтерһен!» — тип, батшаға хәбәр һалды.

Баяғы Зәйтүн үҙе килде, тине,
Ғәриптән инде кикен* алды, тине.
Таң иртән баҙарҙа үлтерәм тип,
Зинданға тимерләп һалды, тине.

Һалдаттар батшаға хәбәр һалды,
Дошмандан хандың инде күңеле тынды.
26а Ҡыҙымды мин Зәйтүнгә бирәмен тип,
Йортона: «Туй ҡылың!» — тип хәбәр һалды.

Хан ҡыҙын алам тип, [Зәйтүн] ҡыуанаҙы:
«Был ҡыҙҙы минән башҡа кем алаҙы?
Буҙйегетте зинданға һалғандан һуң,
Күңеле һыуыныр ханша[ның]», – тип уй ҡылаҙы.

Хан иртүк ярлыҡ ҡылды: «Үлтереҥ! — тип, —
Баҙарға алып барып үлтереҥ! — тип. —
Дошманымдың үлгәнен йортом белһен,
Дошман үлеп, дуҫ күңелен тындыр!» — тиеп.

Һалдаттар исел* ирҙе алып барҙы.
Баҙарға ил йыйылды уңдан-һулдан.
Бисара мас булып, аҡылы юҡ,
Әжәл инде бында дусар булды.

Юлдашы хан ҡыҙынан ҡайтып килде,
Бер шомлоҡтоң булғанын инде белде.
Ҡимперҙең асыуланып йәнен алды:

Дуҫтымдың ҡонон һинән алайым тип,
Башын сабып, киҫкеләп, эткә һалды.

Бисара дуҫтын юҡтан зар иңрәйҙе,
Гиз килеп күренгәндән бер һорайҙы.
Һәр әрҙән һорай-һорай килеп ине,
Баҙарҙа йыйылып, ил шаулайҙы.

Бер ерҙә күп халайыҡ ҡарашыптур,
Һәр ерҙән аҫыусыны һорашыптур,
Үлтереүсе бер вәзирҙең ҡулындатур,
Аҫыусы киҫеүсе мән талашыптур.[56]

Берәүе, аҫамын тип, еп алыптур.
Берәүе алмас ҡылыс ҡулға алыптыр,
Вәзир менән башҡаның бары:
«Әҙер ҡылайыҡ ярлыҡса», — тип һөйләнептур.

Дуҫтына яҡын килеп ҡәҙәм баҫты,
Нә ҡыларын белмәйҙе, ҡаты шашты.
26б Илап-иңрәп, ҡашында тороп ине,
Бер заманда бисара күҙен асты.

Аяғына ҡыршау бәйләнеләр,
Үлтереүгә урынын һайланылар.
Түңәрәгенә ҡараһа, бары дошман,
Ғәрип йән сығыуға, ҡынанылар...*

Уң янында йән дуҫты илап утырыр,
Үлтереүгә йорт бары шаулап торор,
Әжәл етһә, һис кемдән дарман булмаҫ,
Иман әйтеп, үләрен уйлап торор.

Бисара үләрен инде белде,
Дуҫтына: «Бире кил», — тип, бер ым ҡылды,
Дуҫтына ҡорбан инде йән юлдашы,
Ҡашына ул яҡынраҡ килеп торҙо.

Ауыҙын асып, дуҫтына сәләм әйтте:
«Терелек инде, дуҫтым, беҙҙән китте».
Ахыр йәндән бисара төңөлгән һуң,
Иле мән йортона сәләм әйтте.

Буҙйегеттең дуҫтына йырлағаны:

— Уай, йән дуҫтым, яҡын кил,
Арзым* һиңә әйтәйем.
Һинән башҡа дуҫтым юҡ,
Серем кемгә әйтәйем.
Ҡарсыға ҡоштоң ҡанаты
Ҡайырылыр көн булады.

Аманлашып дуҫтынан
Айырылыр көн булады.
Бер көн ҡалмаҫ дуҫтынан
Ҡайырылыр көн булады.
Һай, йән дуҫтым, яҡын кил,
Әжәл беҙгә етепте;
27а Күп дошмандың эсендә
Дарман беҙҙән китепте.
Был көндән һуң, йән дуҫтым,
Инде һеҙҙе күрмәк юҡ,
Боронғолай берегеп,
Инде бергә тормаҡ юҡ.

Был ерҙән һеҙ ҡайтығыҙ,
Йортҡа сәләм әйтегеҙ.
Моңло ҡалған атама,
Зарлы булған анама,
Яңғыҙыңдың һүҙе тип,
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.
Ҡарсыға коштай ҡундырған,
Ҡашында һөйөп ултыртҡан,
Дидарыма* туймаған,
Яңғыҙым тип уйлаған,
Моңло ҡалған атама,
Зарлы булған анама —
Ата берлән анаға
Сәләмемде әйтә күр.
Бала ананан тыумаҡ бар,
Бойороҡ булһа, тормаҡ бар.
Әжәл етмәгән әҙәмгә
Артыҡ өмөр һөрмәк бар.*
Ҡанатынан ҡайрылған,
Яңғыҙынан айрылған,
Ҡайғыһы күп анама,
Сабыр ҡыл, тип әйтә күр.
Ҡемде балам тиер ул?
Ҡемде мин тип һөйөр ул?
Беҙ иҫенә төшкәндә,
Янған утҡа көйөр ул.
27б Ҡөйгәненә гиз булһаң,
Сабыр ҡыл, тип әйтә күр.

Башымдағы бүркемде —
Моңло ҡалған атама,
Ҡулымдағы йөҙөктө
Зарлы булған анама
Үҙ ҡулыңдан биргәйһең,
Күңлен аулай йөргәйһең.
Башымдағы бүркемде

Ҡейһә лә, ул онотмаç.
Яңғыҙ уғлым килер, тип,
Ул беҙҙәрҙе көтмәһен.
Ҡулымдағы йөҙөктө
Дуç ҡулыңа һалғайһың,
Сәләме тип яңғыҙың,
Анама һин биргәйһең.
Яңғыҙым, тип илаһа,
Күңлен аулай йөргәйһең.
Беҙ икебеҙ пар инек,
Һис айырылмаç йәр инек.
Бер көн һине күрмәһәк,
Күрәйек тип зар инек...
Беҙҙең өсөн, йән дуçтым,
Күп рәнйеүҙе күрҙең һин;
Ата-ананан айырылып,
Бер мин өсөн йөрҙөң һин.

28a Илеңә һин барырһың,
Ата-анамды күрерһең.
Беҙҙән хәбәр һораһа,
Арзың* әйтеп иларһың.

Барһаң, һине күргәйләр,
Ҡашыңа килеп торғайлар.
Йыйылған күп йәмәғәт
Беҙҙән хәбәр һораһа,
Күҙе күргән юлдаштар,
Бергә йөргән моңдаштар,
Беҙҙе иçенә алғандар,
Беҙҙән мәхрүм ҡалғандар,
Беҙҙе күрмәй ҡалғандар
Беҙҙән хәбәр һораһа,
Сәләмемде әйтерһең.

Беҙҙән рәнйеү алғандар,
Беҙҙән күңел ҡалғандар
Күп эсендә бар булһа,
Рази булһын, әйтә күр...[57]
Яңғыҙ да үтәр донъянан,
Яман да үтәр донъянан;
Донъя эсендә арманда,*
Зарлы ла үтәр донъянан;
Ҡунаҡ булғас донъяла,
Ейәр дәхи бөткән һуң,
Кем уҙманы донъянан
Фәкиранә Баһауи?
Үлмәй тороп, ҡоллоҡ ҡыл,
Һин дә үтәрһең донъянан.

28б Дуҫтының яуабы:

— Айрылырың белгәнмен,
Ҡурҡа-ҡурҡа йөргәнмен;
Алла әмеренә сара юҡ,
Муйын һоноп торғанмын.
Ана һөтөн имешкән,
Йәндән татлы һөйөшкән,
Заман ахыр булғансы
Айырылмайыҡ тиешкән,
Йәндән татлы йән дуҫтым,
Йәнем ҡорбан ҡылһам да,
Ошо күптең алдында
Һеҙҙең өсөн үлһәм дәй,[58]
[Илемә мин барырмын,
Ата-анаңды күрермен,
Һинән хәбәр һалырмын,
Арзың әйтеп, илармын;

Башындағы бүркеңде —
Моңло ҡалған атаңа,
Ҡулындағы йөҙөгөң
Зарлы булған анаңа
Үҙ ҡулымдан биргәйем,
Күңелен аулай йөргәйем].

Күп дошмандың эсенән
Ҡотолмаҫтай көн булды,
Башҡа төшкән эшебеҙ
Онотолмаҫтай көн булды.

Йәндән татлы йән дуҫтым,
Күп көн бергә йөрмәнем.
Был көндән һуң ахыры
Инде һеҙҙе күрмәмен.

Һин үлһәң, мин ҡайтырмын,
Ғарзың ҡайтып әйтермен,
Атаң сыҡһа алдымдан,
Нә тип яуап әйтермен?

29а Анаң сығып алдымдан,
Ҡаиҙа, тиһә, олоном,*
Алдымда тороп зарланһа,
Нә тип яуап әйтермен?

**Шиғырсының һүҙе**

Ата менән анадан,
Малың берлә баладан

Кемде айырмаç был үлем.
Ай бисара Баһауи,
Мәдәт телә Алладан —
Һиңә дә киләр был үлем!

Буҙйегеттең үлгән ере.

Бисаралар моңлашып күп торопто,
Ғарызлашып икәүе моңлашыпты.
Баҙарҙағы йыйылған күп йәмәғәт
Быларҙың һүҙен аңлап илашыпты.

Бер заманда вәзире килде, тине,
Бисаралар үләрен белде, тине.
Һалдаттар алдында хәҙер тороп,
«Ҡылыс менән сабың!» — тип ярлыҡ ҡылды.

Үлтерергә быны [инде] бәйләнеләр,
Ҡылысын үткер ҡылып ҡайранылар.
Һалдаттар ҡылыс менән сабып ине, —
Үтмәне ҡылыс, йәнде генә ҡыйнанылар.

Вәзире: «Үткер ҡылыс килтер!» — тине, —
Кисектермәй быны тиҙ үлтер, — тине. —
Битендәге пәрҙәһен асып сабың!
Батшаның күңеле, сапһаң, тыныр», — тине.

Битендә[ге] ҡыл пәрҙәһен һуйып алды,
Яланғас муйынына ҡылыс һалды.
29б Башында алтын айҙар толомо бар,
Күргән әҙәм быларҙы таңға ҡалды.

«Тик кеше имәс,* тип уйлай инек,
Күп кеше уртаға алып һөйләй инек.
Ҡайтайыҡ, — залим батша тел алманы,
Үлтермәй бисараны ҡуй, тип инек».

Шул ерҙә Зәйтүн батыр аҡыраҙы,
Һәр беренә: «Үлтерең!» — тип саҡыраҙы.
Хан ярлығын боҙоуға хәлең бармы?
Һалдаттарға: «Сабың!» — тип аҡыраҙы.

Һалдаттар башын өҙә сабалмайҙы,
Ғилажын* үлтереүгә табалмайҙы.
Үлтерәм тип ҡыйнапты ғәзиз йәнде,
Ҡылыс һалдаттар телен бер алмайҙы.

Буҙйегеттең яуабы:

— Эй, ғәскәр, беҙгә яман һөйләмәгеҙ,
Ҡылыс итем киçер, тиеп уйламағыҙ.

Табанымдың аҫтында — алмас ҡылыс,
Алып сабың, йәнемде ҡыйнамағыҙ!

Ҡәүҙәмде һис кем минең өҙмәҫ, тимен,
Үҙ ҡылысым булмаһа, киҫмәҫ, тимен.
Йәнемде алһағыҙ, ҡыйнамай ал,
Тәҡдир ҡылһа, тәңрем боҙмаҫ, тимен.

Бисараның итеген сисеп алды,
Ҡәүҙәнән ғәрип башты өҙҙө, тине.
Алты бөкләп һалған алмас ҡылыс
Бер сапҡанда муйынын өҙҙө, тине.

30а Ғәзиз йәне ҡыйналып ергә төштө,
Айҙай йөҙө ярҡырап* ергә төштө.
Ҡашында йән юлдашы илап ултыр,
Дуҫтынан айырылып өмөт өҙҙө.

Зәйтүн батыр: «Алың башын, – тине, —
Дарға бәйләп, юғары аҫың! — тине. —
Йорт эсендә үлгәне мәғлүм булһын,
Хан, ханса күңелен баҫың!» — тине.

Ғәрип башты дарға аҫты, тине,
Йорт бары илап, унан ҡасты, тине.
Ханға, үлтерҙек, [тип] әйтеп килде,
«Ҡотолдоҡ тип дошмандан», сачу сәсте.[60]

«Туй ҡылың!» — тип, [хан] йортона ярлыҡ ҡылды,
Батшаның үлгәнен йорто белде.[61]
Ҡыҙ бахыр был эштән иҫһеҙ ғафил,*
Мал һуйып, туйын инде ҡылды,[62] тине.

Бисара, ул шәһәрҙә үлеп ҡалды,
Дуҫтыһы үлгәнен күреп ҡалды:
Дарға башты аҫҡанын күргәндән һуң,
Илай-илай бисара талып ҡалды.

Һай-һай донъя, һай донъя,
Ҡемгә вафа* ҡылдың һин?
Искәндәр[63] дик* батшаны
Үҙ ҡулыңа алдың һин...

Алып-алып туйғың юҡ,
30б Һис тә берен ҡуйғың юҡ.
Кисәге йөргән йән дуҫтым
Бөгөн дағы алдың һин...

Донъя, донъя тигәймен,
Донъя ғәмен эскәймен,

Әжәл етеп үлгәймен,
Үлсәм, кәфен кейгәймен.

### Ҡарасәс һылыуҙың һүҙе

Ҡыҙ һаҡлайҙы, юлдашы киләме, тип,
Килеп, беҙҙән бер хәбәр аламы, тип;
Ҡыҙ өйөнә юлдашы килмәгән һуң,
Ҡыҙ ҡуркты, бер шомлоҡ буламы, тип.

Кимпергә хан ҡыҙы килде, тине,
Кимпер үлеп ятыр, — күрҙе, тине.
Өйөнә илай-илай ҡайтып килде,
Бер шомлоҡтоң булғанын [инде] белде.

Барын да ҡырҡ ҡыҙҙың ҡашына алып,
Шәһәрҙән йәрен эҙләй йөрмәк булды.
Төн эсендә ҡай ерҙә тауыш булһа,
Айнаҡтан* бары килеп ҡолаҡ һалды.

Бер ергә килһә, күп йорт туй туйлайҙы,
Ошонда ни бар, тип ҡыҙ уйлайҙы.
Һәр айнаҡтың төбөндә йыр йырлайҙы,
Йәрен юҡтап, бисара зар иңрәйҙе.

### Ҡарасәс һылыуҙың айнаҡтан йырлағаны:

— Төйә килеп буздайҙы,
Бутаһы унын юҡ микән?
Бута күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ микән?

Һыйыр килеп мөңрәйҙе,
Быҙауым тип илайҙы;
Бисараның быҙауы
Был уйында юҡ микән?

Ҡуйҙар килеп мөңрәйҙе,
Ҡузыһы[64] [өсөн иңрәйҙе;
Бисараның ҡузыһы

Был уйында юҡ микән?
Йылҡы килеп кешнәйҙе,
Ҡолоном тип эҙләйҙе;
Бисараның ҡолоно
Был уйында юҡ микән?

Былбыл ҡоштар һайрайҙы,
Ҡыҙыл гөлө юҡ микән?

Ҡыҙыл йөҙлө Буҙйегет
Был уйында юҡ микән?

Айнаҡтан бисара йыр йырлайҙы,
Өй эсендә йәмәғәт йыр тыңлайҙы.
Һис әҙәм хан ҡыҙы тип уйламайҙы,
Бисара һәр кемгә бер инрәйҙе.

Күп эсендә бер әҙәм белде, тине,
Бисара хан ҡыҙы икәнен күрҙе, тине;
Бисара йәрен юҡтап йөргән икән,
Айнаҡтан йырын йырлап яуап бирҙе:

— Төйәләр килеп буздайҙы,
Бутаһы унын юҡ сығыр;
Бута күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр.

Йылҡы килеп кешнәһә,
Ҡолон унын юҡ сығыр;
Ҡолон күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр.

Һыйыр килеп мөңрәһә,
Быҙау унын юҡ сығыр;
Быҙау күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр.

Ҡуйҙар килеп мөңрәһә,
Ҡузыһы унын юҡ сығыр;
Ҡузы күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр.

Былбыл ҡоштар һайраһа,
Ҡыҙыл гөлө юҡ сығыр;
Ҡыҙыл йөҙлө Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр...

Буҙйегеттең толғаһы
Яраланғанға оҡшайҙыр,
Йәреңнән хәбәр һораһаң,
Ҡайтмаҫ ергә киткән ул.

Ишетеп был һүҙҙе ҡыҙ илап килде,
Әкәһенән* ҡыҙ башын[65] һорап килде.
«Әкәм минең аң* аулай барған икән,
Сауға* бир, әкә», — тип, инрәп килде. —

Ишетеп бән, уай, әкә,
Ау ауларға китеп сән,
Бала шонҡар атып сән,

Яҡшы күргән ҡыҙыңа
Бер сауғаны ҡыймаймы?

Тоҙаҡ ҡора ятып сән,
Бала кейек атып сән;
Атып алған аңынан
Беҙгә сауға бирмәйме?
Яҡшы күргән ҡыҙына
Бер сауғаны ҡыймаймы?
Атҡа менеп сығып сән,
Дошманыңды йығып сән,
Донъя инде киң ҡалды.
Үлмәҫ хәбәр уғып сән,
Бер көн, әкә, иларһың,
Күп мән дошман булырһың.
Эш үткән һуң файҙа юҡ,
Әкәм дәрдле* булырһың.

Уйлағаның белдем мин,
Һинең төрлө уйың бар:
Берәүгә беҙҙе бирер уйың бар,
Йорт эсендә туйың бар.

Тимер алтын булмаҫ, ти,
Баҡыр көмөш булмаҫ, ти;
Иркем бар, тип эш ҡылма,
Ҡыҙың телен алмаҫ, ти.[66]

31а Ҡейәү ҡылған Зәйтүнең,
Һыртын алтын ҡылһаң да,
Эсен гәүһәр ҡылһаң да,
Үҙ йәремдәй булмаҫ ул.

Алтынға йөнөн буяһаң,
Ҡарға шоңҡар булырмы?
Ҡанатына ҡан яҡһаң,
Шоңҡар ҡарға булырмы?
Яҡшы күргән кешеңде

Нурға ҡушып килтерһәң,
Тамам йортҡа белдерһәң,
Үҙ йәремдәй булырмы?
Ҡейәү һуйып туй ҡылдың,
Ҡыҙың телең алырмы?[67]

Буҙйегеттең һөйәген
Мең Зәйтүнгә бирмәҫмен.
Үлгән йәрем мулаһын*
Алтынлы өйгә бирмәҫмен.

Ундай йәрҙе тапһаң да,
Һис тә ҡабул күрмәҫмен.

Аҡылы юҡ әкәмдең
Ҡылған эшен ҡайтайын?
Үлгән йәрем күрмәһәм,
Тере йөрөп нитәйен?

Хан[дың] ҡыҙына биргән яуабы:

— Илама, ҡыҙым, илама —
Ил эсендә яҡшы күп:
[Бер аҙыраҡ сабыр ит,
Яҡшынан да яҡшы көт!]
Илдән илгә йөрөрмөн,
[Затлы ир-ат күрермен,
Иң яҡшыһын белермен,]
Һине уға бирермен.
Телем, балам, ҡайырмай,
Һөйгәнеңсә ҡылырмын:
Алтынлы утау* тектереп,
Хеҙмәтселәр ҡуйырмын.
Башымдағы тажымды,
Аҫтымдағы тағымды,
Ҡыҙым, сәған* бирермен.

Арғымаҡҡа менгеҙеп,
Мең ҡол, балам, бирермен.
Мең төйәгә йөк артып,
Мең көң,* балам, бирермен.

Донъя йөҙө киң, балам,
Табып алып бер яҡшы,
Һөйгәнеңә бирермен.
Мал яҡшыһын алырһың,
Һөйгәнеңә бирерһең.
Боҙма, балам, уйыңды,
Хуп төҙөрһөң буйыңды.[68]

Хандарҙан хат киләҙе,
Бары һине һөйәҙе.
31б Тутыйғоштай егеттәр,
Бары һине теләйҙе,
Һине алһам, тип илайҙы.

Саҡырып алып торғоҙоп,
Йөҙөн, балам, күргеҙеп,
Күп ҡайғырма, йән балам,
Һөйгәнеңә бирермен.

Ҡарасәс һылыуҙың һүҙе:

— Балаң күңеле ҡалғандыр,
Арбаһаң да, булмаҫ ул.
Нур егетен килтерһәң,
Уны ла ҡабул күрмәҫ ул.
Һөйәктәрем һынған һуң,
Һылаһаң да, булмаҫ ул.
Йөрәгем янып көл булды,
Һыу ҡойһаң да, һүнмәҫ ул.
Башым ергә тейгән һуң,
Күтәрһәң дә, булмаҫ ул.
Күңел ҡоштай осҡан һуң,
Ҡайтып ҡулға ҡунмаҫ ул.
Һөйгән йәрем киткән һуң,
Нә ҡылһа ла, булмаҫ ул.
Эсем боҙға тулған һуң,
Йөрәгем таш булған һуң,
Күрекләһәң [дә], иремәҫ ул...

Арғымаҡҡа менгеҙгән,
Мең ҡолоңдо нитәйен,*
Ҡол хеҙмәте үткән һуң?
Көңгә хеҙмәт ҡалдырмай,
Үҙем аҡ исем ҡылырмын.[69]
Алтынлы утау ҡылғансы
Ерҙән мула* ҡылырмын.

Башындағы тажыңды,
Аҫтындағы тағыңды
32а Ҡулыма тотоп нитәйен? —
Таҡҡа ултырыр кешем юҡ;
Мал яҡшыһын нитәйен? —
Алып менер кешем юҡ.
Илдән илде аралап
Тапҡан яҡшың нитәйен?
Үҙ тапҡаным киткән һуң,
Үҙгә йәрҙе нитәйен?

Беҙҙән һуңғы ҡыҙыңды,
Ҡыҫыр ҡалған бейәләй,
Ҡайырмаған төйәләй,
Илдән илде аралап,
Илдән яҡшы күренһә,
Алып шуға бирерһең.

Бисара ҡыҙ илай-иңрәй, һүҙе бөттө,
Атаһының ҡашынан зарлап китте.
Үлһәм, йәрем юлында үләйем тип,
Бер заманда шәһәргә яҡын етте.

Бер заман дарға аҫҡан батшы күрҙе,
Бер күрһөнөп, иҫе ауып, ергә төштө,
Иҫен йыйып, ҡанлы башты ҡулға алып,
Ҡан аралаш ағыҙҙы күҙҙән йәште.

— Хайран башың, хан башың
Ҡиҫелгәнгә оҡшайҙы,
Баһасы юҡ кәүҙәнән
Өҙөлгәнгә оҡшайҙы.

Кәүҙәң ҡанға болғанып,
Аяҡ-ҡулың солғанып,
Кәфенең юҡ, гүрең юҡ,
Ерҙә ятыр ирминең?

Ҡанға башың болғанып,
32б Буйтеп ятыр ирминең?
Ҡомға болғап башыңды,
Күҙҙән аҡҡан йәшеңде
Ергә ағыҙыр ирминең?
Гәүһәр башың, хан башың,
Алтын динайың болғанып,
Дарға аҫылыр ирминең?

Йортоңда һин хан инең,
Һәр эшеңдә дан инең.
Дошмандарың ҡулында
Быңдай булыр ирминең?

Ҡарағаттай күҙҙәрең,
Ҡыҙыл гөлдәй йөҙҙәрең,
Балдан татлы һүҙҙәрең
Бер күреүгә зар булдым.

Әйтһәм, һүҙем етмәҫте,
Ҡайғың иҫтән китмәҫте,
Алыҫ юлға китеп һин,
Саҡырһам да, килмәҫ һин.
Оҙон юлға китеп һин,
Зар ҡылһам да, белмәҫ һин.

Һеҙҙән донъя үтепте,
Мин дә артыңдан үтермен.
Һин алдымда булмаһаң,
Был донъяны нитермен?

Көн дә илап йөргәнсе,
Ҡайғың китмәҫ үлгәнсе,
Был ҡайғыны күргәнсе,
Бергә булһам кәрәкте.

## Шиғырсының һүҙе

33а Боронғолар үтепде,
Үлмәйсе, ҡайҙа китепде?
Был үлемде, Баһауи,
Уйыңа алһаң кәрәкте!

* * *

...Бисара ҡыҙ динайын* ҡулына алды,
Торҡаға* ҡанлы башты урап һалды.
Өйөнән алтын-көмөш ҡулына алып,
Ярына там* торғоҙоу уйына алды.

Ҡашына йөҙ егерме ҡолон алды,
Алтын — менән көмөштән мула* һалды.
Ҡыҙының булмаҫын[71] хан белгән һуң,
Йортона: «Йыйылың!» — тип хәбәр һалды.

Йортона: «Ҡыҙ ҡашына барың, — тине, —
Нәғып* йөрөй ҡыҙым минең, белең, — тине. —
Ҡыҙымдың бер аҙ көндө күңеле һыуыр,
Ҡыҙымдың ҡыл тигәнен ҡылың», — тине.

Күп ғәскәр ҡыҙ ҡашына килде, тине,
Там торғоҙоп булыпты күрҙе, тине.
Ҡыҙ быларҙың килгәнен яҡдырмайҙы,
Ғәскәренең бары ҡайтып йөрҙө, тине.

«Ҡыҙығыҙ там торғоҙоп булған икән,
Шәһәрҙән зәргәр* йыйып алған икән.
Был шәһәрҙә ундайын өй табылмаҫ,
Алтын менән көмөштән һалған икән».

Хан ҡыҙын күреүгә ойлаҙы,
Әсәһе, яңғыҙым тип, зарланаҙы.
Ҡашына бер-ике әҙәм юлдаш алып,
Сыҙай алмай әсәһе бер бараҙы.

Ҡыҙына яҡын килеп, билен быуҙы:
— Уай, балам, был көн һиңә ҡайҙан тыуҙы?
Хоҙай ҡушҡан йәреңдән зар иңрәтеп,
Ғаҡлы юҡ әкәңә нә ҡан яуҙы?

Ғаҡлы юҡ әкәңә әйтһәм, тел алмайҙы,
— Дошмандарҙың һүҙенән һис ҡалмайҙы!
«Ҡыҙыңды илатма!» — тип әйтеп инем,
Ҡанса әйтһәм дә, телемде тыңламайҙы.

33б Оялғандан ҡашыңа килалманым,
Атайыңдың аҡылын белалманым.
«Обалы* — әкәгә», тип зар иңрәйҙе,
Беҙҙе өйҙә, һеҙҙе бында уйламайҙы.

Ҡыҙының ҡашында йәшен түгеп,
Күкрәгендә уйлаған ғарзын* әйтте.
Ҡыҙына һөйләп, ханым моңон әйтте:
«Ҡылыпты әкәң һинең ҡорбан ғәйете».

Балаһы әсәһенә ҡарамайҙы,
Оялып, әсәһе өйгә ҡайтты.

Ҡыҙ, инде там торғоҙоп, булды, тине,
Эсенән бикләгәндәй ҡалды, тине.
Ҡашында ҡырҡ ҡыҙ менән амандашып,
Күҙ йәшенә дала ер тулды, тине.

Ҡарасәс һылыуҙың ҡыҙҙарға
һыҡтағаны:

— Яр-яр әйткән яр-ярым,
Аман булың, хуш булың!
Беҙгә үтер көн булды,
Һеҙҙән китер көн булды.

Аман инде, хуш булың,
Беҙгә үтер көн булды.
Йәр өсөн үлер көн булды,
Һеҙгә ҡалыр көн булды.

Беҙҙән рәнйеү алғандар,
Беҙҙән күңле ҡалғандар,
Уйығыҙға алғайһыҙ,
Риза булың, дуҫтарым!

Боронғолай булырһыҙ,
Һөйгән йәргә барырһыҙ.
Уйнап-көлөп йөрөрһөҙ,
Аман булың, дуҫтарым.
34а Турғайға ем табылыр,
Ауырыуға им табылыр.
Башығыҙ йәш, дуҫларым,
Беҙҙән донъя үтәлер,
Терелек инде булмаҫтыр.
Был ялғандың эшендәй,
Һис кем үлмәй ҡалмаҫтыр.
Минең өсөн иламаң,
Миндәй бер ҡыҙ табылыр,
Терегә йәр табылыр,

Үлгәнгә ер табылыр.
Минең өсөн иламаң,
Миндәй бер ҡыҙ табылыр...

Сын йәремдән ҡалғым юҡ,
Ялған йәргә барғым юҡ,
Был донъяла ҡалғым юҡ,
Аман булың, дуҫтарым.

Ҡыҙҙарҙың Ҡарасәс һылыуға
йырлағаны:

— Әүүәл, хаҡтан теләйбеҙ,
Икенсе һеҙҙән теләйбеҙ:
Бер аҙ сабыр ҡылығыҙ,
Ғарзыбыҙ* бар, һорайбыҙ.

34б Бер аҙ тере тороғоҙ,
Бер аҙ дәүран* һөрөгөҙ.
Етем булмаҫ әсәңдең
Бер ҡат йөҙөн күрегеҙ.

Юлдаштарың артындай
Ҡузыҙай сыулап ҡалмаһын,
Ата-әсәң артындай
Төн-көн иңрәп ҡалмаһын.
Алтын биҙәк киң һарай
Ергә ҡолап ҡалмаһын.

Ҡырҡ ҡыҙҙың ҡанаты,
Һеҙ булырһыҙ санаты.
Ҡанатыбыҙ ҡайырма,
Үҙеңдән беҙҙе айырма!

Һеҙҙең өсөн ил-йортоң
Бутаҙай буздан ҡалмаһын.
Донъянан өмөт өҙмәгел,
Тыуғаныңды боҙмағыл.
Тыуғандағы йәрҙәрең
Зар сәргәрҙән* ҡалмаһын!

Алтынлы утау,* гәүһәрең
Ят ҡулында ҡалмаһын.
Мәрүәрид* менән мәржаның*
Һәр кемгә улъя булмаһын.

35а Ҡайт, йәнебеҙ, ҡайтһана,
Ғарҙың йортҡа әйтһәнә.
Беҙ фәкирҙе зар ҡылмай,
Ҡайт, йәнебеҙ, ҡайтһана!

Ҡарасәс һылыуҙың һүҙе:

— Берәүгә әжәл гиз килһә,
Ни ҡылһаң да, булмаҫ ул.
Йән алыусы килгәндә,
Әйтһәң, телең алмаҫ ул.

Ҡанса йәшкә килһәң дә,
Донъяның бар дәүләте
Донъя эсендә ҡалыр ул.
Артындағы дәүләтең
Берәүгә улъя булыр ул.

Ата-анаң ҡашында
Зар иңрәп ҡалыр ул.
Йән алыусы килгәндә,
Ҡемдең телен алыр ул.[72]
Алтын биҙәк киң һорай
Берәүгә улъя булыр ул...

Атадан да китермез,
Анадан да китермез,
Әжәл килһә, әмәл юҡ,
Был донъядан китермез.
Ҡаты дәрдкә юлыҡтым,
Дарыу эсһәм дә терелмәм,
Бутасыҡтай булғанмын!
Ҡаты дәрдкә* юлыҡтым,
Дарыу эсһәм дә, терелмәм.
35б Бутасыҡтай* булғанмын,
Ем бирһәң дә, илекмәм.*

Инде әйтер һүҙем юҡ,
Һүҙем ҡалыр, үҙем — юҡ.
Әжәл етһә, торғом юҡ,
Аман булың, дуҫтарым!

Әл-кисса. Ҡарасәс һылыу Буҙйегеттең кейемдәрен күреп йырлағаны:

Алтын яҡа, кеш тундар,
Һеҙҙе кейер кешем юҡ.
Алтынлы эйәр, күк юрғам,
Һине менер кешем юҡ.

Алтын биҙәк киң һарай,
Һеҙгә керер кешем юҡ,
Барығыҙҙы нитәйен? —
Бергә йөрөр кешем юҡ.

Әкәм һеҙҙе күп күрҙе,
Улъя иткәнен йөп күрҙе.
Йәребеҙҙән айырып,
Тороуыбыҙҙы хуп күрҙе.

Айҙай улды тыуҙырып,
Көндәй ҡыҙҙы тыуҙырып,
Беҙҙән ҡалған бөйөмдө*
Алып буҡча* ҡылһын ул.

Күрекле ҡыҙҙы тыуҙырып,
Һөйгәненә бирһен ул.
36а Яуҙан алған бөйөмөн*
Алып буҡча ҡылһын ул.

Сән йәремдән ҡалғым юҡ,
Ялған йәргә барғым юҡ,
Бөйөмөмдө алмаҫты
Алып улъя ҡылһын ул.
Әкәмә әйтең һүҙемде,
Ҡанлы йәш алды күҙемде.
Әкәмә донъя киң булһын,
Ҡорбан ҡылдым үҙемде.

Донъя йәмен сөйөрһөң,
Алтын-көмөш кейерһең,
Әжәл бер көн гиз килсә,
Барын ҡуйып китерсең.
Был ялғандан файҙа юҡ.
Әжәл, үлем ҡайҙа юҡ?
Үлем килсә, файҙа юҡ,
Ҡолсолоҡ ҡыл, Баһауи.

Бисара ҡыҙ илай-илай тамға* керҙе,
Терелектән үлгәнен яҡшы күрҙе.
Там ишеген эсенән бикләгән һуң,
Үҙ эсенә үҙе был хәнйәр орҙо.

Түшәгендә Буҙйегетте ҡосаҡлайҙы,
Үҙен үҙе бысаҡ мән бысаҡлайҙы.
Сыртында ҡырҡ ҡыҙ һаҡлап утур,
Хан ҡыҙы тышҡа сыҡмай оҙаҡ[лай]ҙы.

Хан ҡыҙы йәре мән ҡушылыпты,
Ғәзиз йәне кәүҙәнән өҙөлөптө.
Атаһына йорто хәбәр әйткәндән һуң,
Ҡылғаны хан туйы боҙолопто.

36б Хан, ишетеп, йортонан илап килде,
Әсәһе битен йыртып иңрәп килде.

Тамам йорт был хәбәрҙе ишеткән һуң,
Өлкән кеше мулаға* бары килде.
Илаһа ла, эш үтеп ҡалған икән,
Ике ялғыҙ донъянан киткән икән,
Ханым: «Бындай буларын белмәнем», — тип,
Үҙ битен үҙе тырнап йыртҡан икән.

Тышта тороп, хан ҡыҙын саҡыраҙы,
Йортона: «Ишек ас!» — тип аҡыраҙы,
Ханым асыуланып батшаһына:
«Эш үткән һуң, был инде нә ҡылаҙы?»
Күп ғәскәр там ишеген боҙҙо, тине,
Битен асып күрҙеләр ҡыҙҙы, тине.
Ҡосаҡлашып ятыпты ике яңғыҙ,
Күргән һуң, өмөттәрен өҙҙө, тине.

Хан — ҡыҙының ҡашында зар иңрәйҙе,
Үҙ ҡулын үҙе тешләп йолҡколайҙы.
Ханым, батшаһына асыуланып:
«Бар шомлоҡ үҙеңдән!» — тип ҡысҡырҙы.

Хан фәҡир илай-иңрәй өйгә ҡайтты,
«Сыртынан там торғоҙ!» — тип ярлыҡ ҡылды.
«Сыҡылын* был баланың белмәнем», — тип,
Йортоноң барын йыйып үпкә итте:

— Сумбатын* күргәндән һуң ҡайтманығыҙ,
Алтын айҙар толомон әйтмәнегеҙ.
Сумбатын күргәндән һуң шомлоҡ ҡылһам,
Шунда минең муйныма иридмәнегеҙ*.

Ханымы ханға: «Мәғҡүл булдың, — тине, —
Яңғыҙыңды үлтереп тындың, — тине. —
37а Инде артында, ҡыу һаҡал, кем ҡалаҙы?
Үлә үлгәнсе яманат алдың, — тине. —
Яңғыҙ ҡыҙың үлтереп тындың, — тине, —
Мулаға йәнен алып ҡуйҙың, — тине. —
Алдыңда ҡыуанысың кем булаҙы?
Терелектә тоҡомоң юйҙың», — тине.

Бисара хан әйтәҙе: «Белмәнем, — тип, —
Үлтерергә баҙарға кермәнем, — тип.
Һаҡалын йолоп батша күп илайҙы,
«Бисараның сумбатын күрмәнем», — тип...

Ике ғашиҡ берҙәйен үлеп ҡалды,
Атаһы йортон йыйып мула һалды.
Буҙйегеттең битен ҡосоп йән дуҫты,
Дуҫты өсөн йән дуҫты талып ҡалды.

Дуҫты өсөн бисара күп илаҙы,
Хоҙайҙан, аман ҡыл, тип күп теләйҙе.
«Дуҫым миңә аманат биреп ине,
Тапшырмай үлһәм, ул үпкәләйҙе».

Егеттең йырлағаны:

— Мин ҡайтыуға уй ҡылдым,
Миһербаным* әлүидағ!*
37б Кемдең берлә йөргәймен,
Кемде дуҫтым тигәймен?
Миһербаным әлүидағ,
Кемдең берлә йөргәймен?

Һин иҫемә төшкәндәй,
Киткем килмәҫ ҡашыңдан;
Илаһам да, файҙа юҡ
Күҙҙән аҡҡан йәшемдән.

Миңә һинһеҙ эскән аш
Ҡыҙыл ҡанға оҡшайҙы.
Ҡайтай тиһәм йортома,
Ҡайғың аяҡ тышайҙы.

Күп тубынан айырылған
Ҡаҙҙай булып ҡалдым мин.
Күп иленән айырылған
Аҙҙай булып ҡалдым мин.
Бутаһы үлгән төйәләй,
Инде буҙҙай ҡалдым мин.
Ҡолоно үлгән бейәләй,
Инде кешнәй ҡалдым мин.

Йәнең Хаҡҡа [73] тапшырҙым,
Йәрең — бергә, ҡашындай;
Яңғыҙлыҡҡа илаймын,
Күп ҡайғы бар башымдай.

Үләйем тип уйлаһам,
Аманатың бар ҡуйнымдай,
Йөрөйөм тип уйлаһам,
Яңғыҙлыҡ бар муйнымдай.

Аманатың тапшырып,
Тере булһам, килермен;
38а Йәндән татлы йән дуҫтым,
Юлында мин үлермен.

Ҡотолдоғоҙ донъянан
Икәү булып берләнеп;

Юлдашынан айырылып,
Дуҫтың ҡайтты зарланып.

Дуҫтының өйгә ҡайтҡаны

Бисараның һүҙе инде бөттө, тине,
Йортоноң йүнен һорай китте, тине.
Хаҡ һаҡлаһа, бәндәгә бәлә булмаҫ,
Аман-иҫән йортона барҙы, тине.
Алдында бер-ике әҙәм күрҙе, тине,
Еткән һуң, яҡын [килеп] сәләм бирҙе.
Ике әҙәм үҙ иленең кешеһе[74] икән,
Амандашып, бергә инде йөрҙө, тине.
— Яңғыҙ егет, атыңды беҙ[ҙең] мән әйҙә,
Һинең беҙгә килгәнең булды файҙа:
Һеҙҙәрҙе эҙләп сыҡҡан күп кеше инек,
Яңғыҙ йөрөйһөң, ҡашыңдай дуҫың ҡайҙа?

Егеттең яуабы:

— Хоҙайым яңғыҙлыҡҡа һалды, — тине, —
Йән юлдашым илай-иңрәй ҡалды, — тине. —
Хоҙайым, тәҡдир етеп, алды, — тине, —
Хан дуҫымдан айырылып ҡалдым, — тине.

Икеһе был хәбәрҙе ишеткән һуң,
Шәһәргә алып быны йөрөнө, тине.
Яңғыҙ дуҫ шәһәргә кергән[дән] һуң,
Йорт, бары килеп, быны күрҙе, тине.

Башланы егет күпкә һүҙен, тине,
Ағыҙып ике күҙҙән йәшен, тине.
38б Яңғыҙын хан ишетһә, үлер, тине,
Ханға барып әйтеүгә састы,* тине.

Йыйылып, күп бейҙәр кәңәшәҙе,
Яңғыҙы батшаның, тип мондашаҙы.
Бер ахун бар икән йорт эсендәй,
Йыр менән белдереүгә уңдашаҙы.

Ахун мән йән дуҫын алып йөрөнө,
Күп бейҙәр сәләм биреп ханға килде,
Яңғыҙының йән дуҫын күреп ине,
Хан ханымы урынынан илап торҙо.

— Йән юлдашың, яңғыҙым, ҡайҙа? — тине, —
Көйөп, эсебеҙ ялҡын булды, — тине.
— Балағыҙ һөйгәне мән киен ҡалды,*
Яңғыҙың һеҙгә беҙҙән хәбәр һалды.

Балағыҙ йәре мән киен калды,*
Туй булар өйҙөң эсен сайла,* тине.
«Әкәбеҙ, беҙ барғансы, йортон йыйып,
Аямай һуйһын, тине, туйға малды».

Бисара ханымы* инанады,
Мал һуйып, йыйылғанға туй кылаҙы.
Ҡары ахун быларҙы алдына алып,
Йырлауға йырын инде уй кылаҙы.

Былары: «Ахун, йырың йырла, — тине, —
Янғыҙы хандың килер, уйла, — тине. —
Был көнгөләй туй булмаç, хан ишетһен!
Янғыҙының туйын йырлап туйла, — тине.

Хан ханымы: «Йырла, Ахун, йырла! — тине, —
Ошондай бынан һуң кайҙа? — тине. —
Ҡолдарына: — Апкилеп ат мән сапан,
Ахунға арнап уны бәйлә!» — тине.

Әл-кисса.

39а Хан алдында кары ахун йыр йырлайҙы,
Әйткәнен колак һалып күп тыңлайҙы.
Йырсының һораһағыҙ исемен инде,
Ғәлә ғаклы* бар әҙәмдәр быны аңлайҙы.

Ахун-йырсының йыры:

— Күпте күргән карыйың мин,
Бер аҙ йырҙы йырлайын.
Асмандағы турғайҙай,
Алдығыҙҙа ширләйен*.

Өй эсендә ултырған,
Ҡолак һалың, якшылар.
Был ялғандан файҙа юк,
Тәкуа* булың, якшылар,
Ҡарыйығыҙ һүҙенән
Ғибрәт алың, якшылар.

Ҡарыларҙың иçке һүҙ —
Иçкә алмай йөрмәгеҙ.
Ғалимдарҙың күҙле һүҙ —
Күңелгә алмай йөрмәгеҙ.

Егеттәрҙең ялған һүҙ —
Ен-шайтандан калған һүҙ.
Ҡарыларҙың хәйер һүҙ —
Боронғонан калған һүҙ.

Ғалимдарҙың ғәҙел һүҙ —
Бәйғәмбәрҙән ҡалған һүҙ,
Хоҙайымдың дуҫтары
Күңеленә алған һүҙ.

Дәрдебеҙгә дарман юҡ,
Ҡайғыһыҙға арман юҡ.
Дәрдкә файҙа булмаһа,
Яратҡандан[75] фарман юҡ.

39б Елгән аттан ер ҡалыр,
Тапҡан ирҙән мал ҡалыр.
Ир башына көн тыуһа,
Һөйгән йәрҙән ул ҡалыр.
Батшаларҙан тағ* ҡалыр,
Мәргәндәрҙән як* ҡалыр.
Ир башына көн тыуһа,
Донъяның бары юҡ ҡалыр.
Ғалимдарҙан хат ҡалыр,
Остаздарҙин яд* ҡалыр.
Тимерсеҙин дад* ҡалыр,
Йөргән ерҙә юл ҡалыр.
Уйлап торһаң, яҡшылар,
Был ялғандан кем ҡалыр?

Күргән ерҙә шул ҡалыр:
Ҡалғандарға улъя өсөн,
Байҙарынан поп* ҡалыр;
Хатын булһа, тол ҡалыр;
Тапкан ирҙән мал ҡалыр,
Алтын-көмөш пол ҡалыр, —
Эттәй сыулап, талашып,
Кем күренгән, шул алыр;
Өйөң булһа, буш ҡалыр,
Уйнап йөргән дуҫ ҡалыр.

Был ергә килгәндә, йорт белде, тине,
Ҡарының ҡустар* һүҙе ары, тине.
Ҡары әйтәҙе: «Ашыҡмаң, йортом», — тине,
Ҡарының ҡандай яҡшы һүҙе, тине.

Ҡары икенсе төргә төштө,
Ҡыҙарып, ике бите нурға төштө.
Хан алдында белмәгәнен аясама,[76]
Кәмин[77] сисеп алып, сурға* төштө.[78]

Тыуғанмын, тип ҡыуанма —
Тыуған үлер көн булыр.
40а Үлгән йәндең барынан
Һорау һорар көн[79] булыр.

Малым күп, тип ҡыуанма,
Малды күрмәҫ көн булыр.
Алтын менән ер тулһа,
Күҙең һалмаҫ көн булыр.
Бер үҙеңдән башҡаны
Күңелгә алмаҫ көн булыр.[80]
Телле мин, тип ҡыуанма,
Тел бәйләнер көн булыр.
Ҡылған эшең яҡмаһа,
Тамуғ әйҙәр көн булыр.
Көсөм бар, тип уйлама,
Көсөң китәр көн булыр...
Янған тамуҡ өҫтөнән
Сират үтер көн булыр,
Донъялағы ҡолдарың[а]
Күҙең һалмаҫ көн булыр.
Балам бар, тип ҡыуанма,
Бала ла ҡалыр көн булыр.
Ғалим мин, тип ҡыуанма
Тиргәү[81] алыр көн булыр.
Ҡылған эшең яҡмаһа,
«Залим һин!» — тир көн булыр.
Ҡыҙыл йөҙгә ҡыуанма,
Һуйылып ҡалыр көн булыр;
Ҡорт-ҡымырҫҡа йыйылып,
Туйынып ҡалыр көн булыр.

40б Батша мин, тип уйлаһаң,
Искәндәр мән Сөләймән[82]
Улар ҙа үткән донъянан;
Балам күп, тип уйлаһаң,
Йөҙ ҡырҡ бала атаһы
Аҙәм[83] үткән донъянан;
Малым бар, тип уйлаһаң,
Малы һеҙҙән күп сығыр
Ҡарун[84] үткән донъянан;
Көсөм бар, тип уйлаһаң,
Ҡаһарман[85] мән ул Ғәли,[86]
Улар ҙа үткән донъянан;
Сәсән мин, тип уйлаһаң,
Нисә-нисә сәсәндәр
Һөйләп үткән донъянан.
Нисә-нисә түрәләр,
Нисә-нисә яҡшылар
Илап үткән донъянан.

Хан алдында ҡары ахун йыр йырлайҙы,
Һүҙенең төбөн ханға борҙо инде.

Йырлаусы был ергә килгәнендә,
Хан бер тороп, урынына бер ултырҙы.

Хандың әйткәне:

— Ахуным, яҡшы икән йырың һинең, —
Үлем әйтеп сығаҙы кәрең һинең.
Йырыңдың өнө буйы үлем икән,
Беҙгә ҡарай тейәҙе кәрең һинең.

Йырсының яуабы:

— Тәҡсир хан, үлемде әйтмәй ни әйтәйек,
Был ерҙә әжәл етһә, мин ҡайтәйен?
41а Әҙәмдең ахыр һуңы — үлем, тигән.
Ысын әйтһәм, уны әйтмәй ни әйтәйен?...[87]

**Йырсының икенсе яуабы**

Яратҡан һуң... китәрмез
Был ялғандан* китәрмез,
Башҡа (төшә) үлер саҡ,
Илай-иңрәй китәрмез;
Әжәл дусар булған һуң,
Сарабыҙ юҡ, китәрмеҙ,
Әмер килер Алланан,
Муйын һоноп ятармыҙ.
Тәнебеҙ, сереп, күл булып,
Ҡара ергә һеңәрмез.
Илдән борон тыуған ул,
Билен брик(?) быуған ул.
Әүәл килеп Иҙел эскән,
Тәңренән буйлашҡан.
Әҙәм ирде атамыз,
Һауа ирде анамыз.
Был донъяна(н) файҙа юҡ —
Улар ҙа үткән донъянан.
Туфан һыуы ташҡанда,
Тауҙан, таштан ашҡанда,
Һәр йәнлектән алып ул,
Ҡәмә эсенә һалып ул,
Аман-иҫән ҡалып ул —
Нух (тигән) пәйғәмбәр (ҙә),
(Ул да) үткән донъянан.
Нимрут* утҡа атҡанда,
Ут эсендә ятҡанда,
41б Сын һүҙенән* танманы;
Яңғыҙ уғлы Исмәғил(де)
Бысағын йыйып алып,
Мана* тауына апарып,

Ҡорбан салған Ибраһим.
Хоҙай Тәғәләнең хәләле
Ул да үткән донъянан;
Ун ике уғыл эсендә
Тоткон итеп яткырып,
Рәхмәт итте Аллаһы —
Мысырының булды батшаһы.
Етмеш йылдың һуңында
Йөҙөн күрҙе атаһы,
Ахыры ғүмер хан булып,
Йософ үткән донъянан.

42а Ернең йөҙөн алған ул,
Төрлө шәһәр һалған ул;
Көнсығышҡа барған ул,
Көнбатышны күргән ул;
Ғәҙел торған хан ирҙе,
Ер йөҙөнә фана ирде.
Ян ул үлмәк иткәндәй,*
Ернең йөҙө боҙолоп,
Көндөң күҙе тотолоп,
Мәңге һыуын* табалмай.

Егерме туғыҙ йәшендә
Искәндәр* үткән донъянан.

Дауыт уғлы Сөләймән
Донъяла хан булған ул.
Ердүң йөҙөн алған ул,
Алтын ташҡа менеп ул,
Алғанынан осоп ул,
Мең ҡатынды ҡосоп ул;
Хоҙай тәғәлә юл биргән.

Аяғы юҡ, ҡулы юҡ,
Ялғыҙ [уға] уғыл биргән
Бала өсөн армандай*
Ер йөҙөнә хан булып,
Сөләймән дә үткән донъянан;
Нисә-нисә ер алған
Ханлар да үткән донъянан;
Шундай-шундай аяулы*
Ханлар үткән донъянан.

Ибраһим мән Исмәғил,
Зәкәриә мән Зөлҡәфил,
Ҡабил мән вә Һәбил,*
Улар ҙа үткән донъянан.

Күҙһеҙҙәрҙе күҙле иткән,
Аяҡһыҙҙы йөрөткән,
Йығылғанды торғоҙған
Әүлиәләр үткән донъянан.

Хаҡ әмере мәйеткә килер осҡон,
Аллаһы тәғәлә ғишиғылай,
Ауыҙынан ут сығарып,
Ялан аяҡ, ялан баш(ы),
42б Ике күҙҙән ағып йәше
Дейеү [булған дошманы],
Улар ҙа үткән донъянан.
Менеп кейектең артынан
Йөҙ хөшөргә килтә артынан
Алтын ташҡа ултырған,
Алтын берлә көмөшкә
Ерҙең йөҙөн тултырған,
Малдан зәкәт* бирмәне,
Хаҡ әмерен ҡылманы,
Үлем ризығын еймәне,
Мындай байлыҡ алыу мән,
Иман, ислам табалмай,
Ҡарун* [да] үткән донъянан.

Әүәле лә — Мөхәммәт,
Ахыры ла — Мөхәммәт,
Ун һигеҙ мең ғаләмдең
Зекереләй — Мөхәммәт.

Интизар-зар илап,
«Ярлыҡ*», тиеп күп теләп,
Өмөтө өсөн атаһын,
Әйталманы анаһын.
Хоҙайҙан ярлыҡ килгәндә,
Ҡорбан итеп балаһын,
Ун һигеҙ мең ғаләмде
Аның өсөн яратҡан.
Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙ —
[Ул] да үткән донъянан.

Йөҙ егерме дүрт мең пәйғәмбәр
Мөхәммәткә шиғыр яҙалыр.
Утыҙ өс мең сәхәбәләр —
Улар ҙа үткән донъянан.
Һеҙ ҙә бер көн барырһыҙ
Борон үткән балаға.

Әжәл етмәй үлмәк юҡ,
Алла әмеренән ҡалмаҡ юҡ,
Әжәл етеп үлгән һуң,
Һис кем ҡайтып килмәк юҡ.

Тәҡдир етһә, ҡалмаҡ юҡ,
Әжәл ҡуйып алмаҡ юҡ,
Әжәл етеп үлгән һуң,
Һис кем барып алмаҡ юҡ.
Байҙан ҡарыҙ* алмаҡ юҡ,
Орош-талаш ҡылмаҡ юҡ,
Ярлыға көс ҡылмаҡ юҡ,
Ананан бер туған һуң,
Һис кем үлмәй ҡалмаҡ юҡ.

...Һай-һай үлем, һай үлем,
Ата менән ананан,
Ҡарындаш берлә баланан
Кемде айырмаç был үлем?
43а Ер йөҙөнә килгәндәр,
Мин-мин, тиеп йөргәндәр,
Мең йәш ғүмер һөргәндәр —
Бары ла үткән донъянан.
Хан да үткән донъянан,
Ҡары ла үткән донъянан,
Бай ҙа үткән донъянан,
Ярлы ла үткән донъянан,
Күп тә үткән донъянан,
Аҙ ҙа үткән донъянан, —
Яман-яҡшыны айырмай,
Бары ла үткән донъянан.

Атаң һинең — ҡара ер,
Анаң һинең — ҡара ер.
Ейәр тәғәм бөткән һуң,
Барыр ерең — ҡара ер.
Торор ерең — ҡара ер,
Күрер ерең — ҡара ер.

Ҡары ахун был ергә килде, тине,
Хан шомлоҡтоң булғанын белде, тине.
Терелектең һуңында — бары үлем,
Алла әмеренә хан муйын һондо, тине.

Әйтеп йырын, был ахун тура килде,
Һүҙенең төбөн ханға бора килде.
Яҡынлатып йырын бороп ине,
Бер һүҙ инде әйтеүгә тура килде:

— Яратҡандын бары лай,
Хан, китҡәнгә оҡшайҙы.
43б Бөгөн күргән төшөмдә
Һеҙҙең дағы балаңыҙ* —
Ул да үткәнгә оҡшайҙы.

Унан һуңғы беҙҙәргә
Дағы киҙәк* еткәнгә оҡшайҙы.

Балаңа, хан, илама,
Беҙҙән борон үтте, тип,
Был донъянан китте, тип.
Улар китде атаға,
Ата берлән анаға;
Һеҙ ҙә бер көн барырһыҙ
Борон үткән балаға.

Әжәл етмәй үлмәк юҡ,
Алла әмеренән ҡалмаҡ юҡ.
Әжәл етмәй, үлмәк юҡ,
Һис кем ҡайтып китмәк юҡ;
Тәҡдир етһә, ҡалмаҡ юҡ,
Әжәл ҡуйып, алмаҡ юҡ.
Әжәл етеп үлгән һуң,
Һис кем барып алмаҡ юҡ,
Орош-талаш ҡылмаҡ юҡ.
Ярлыға күше ҡылмаҡ юҡ,
Анадан бер тыуған һуң,
Һис кем алмай ҡалмаҡ юҡ.

Хан фәкир, илаһа ла, сабыр ҡылды,
Яңғыҙының үлгәнен инде белде.
44а Ханым, уғлы үлгәнен ишеткән һуң,
Битен йыртып, зарланып, сәсен йолдо.

Күңелен аулай, ҡары ахун йыр әйтәҙе:
— Бит йыртыуың, тәҡсир ханым, нә файҙаҙы?
Был үлем — бороңғонан ҡалған үлем,
Үлмәһә барса йәндәр, ул ҡайҙаҙы?

— Әжәл етһә, әмәл юҡ,
Ҡотолоуға дарман юҡ,
Алланан килгән ярлыҡҡа
Хәбәрһеҙҙән яман юҡ.
Алла әмер иткән һуң,
Был ялғандан киткән һуң,
Һөйләһәң дә файҙа юҡ.
Битләреңде ҡан ҡылып,
Илаһаң да файҙа юҡ.
Һай үлем, һай үлем,
Ата менән ананан,
Ҡарындаш берлә баланан,
Кемде айырмаҫ бу үлем!

Йортондағы бөйөмдән*
Уйындағы бөйөмдән,
Ҡемде айырмаҫ был үлем?

Төйә ҡалыр буздашып,
Йылҡы ҡалыр кешнәшеп;
Йән айырылып сығаҙы,
44б Тәне менән хушлашып...
Әжәл бер көн килгәйҙер,
Ғәзиз таҡны алғайҙыр —
Ни ҡылһа ла ирке бар.
Хужаға ҡол күнмәйҙер —
Тағың шунда иғәнәт,
Донъяң-ерҙә аманат —
Жанны тәндин тапшырып,
Теркәү ҡылса* кирәкте.

Мал/ы/ны тикә ҡылманыз
Малны ейәрбеҙ бер көндө,
Ғәзиз башың киткән һуң,
Ҡалған малың ташҡа үлсә!

Күп малыңдан файда юҡ,
Йәнгә фидай булмайса,
Йән үлемгә еткәндә,
Һис бер сәбәп ҡылмайса.

45а Донъя — беҙгә аманат,
Алданмағыҙ, яҡшылар.
Теркәү көнө булғанда,
Зарланмағыҙ, якшылар!
Бер сәғәттә туларһыҙ,
Бер сәғәттә йыларһыҙ —
Алла әмренә күнәрһеҙ,
Ҡанса йәшкә килһәнә,
Ахыр бер көн үләрһеҙ.
Уй ҡайғыһын өймәң һеҙ,
Ялғанды күп йыймаң һеҙ,
Балам, [малым], димәң һеҙ —
Баланан, малдан файҙа юҡ.

Теркәү көнө булғанда,
Ғафил булдым димәң һеҙ.
Ҡатын ҡалһа, ир табыр;
Улың ҡалһа, мал табыр;
Ҡыҙың ҡалһа, бай* табыр;[88]
Йән үлемгә еткәндә,
Ғәрип башың ни табыр?
Менгән атың буш ҡалыр,

Ҡейгән кейемең ҡуш ҡалыр,*
Уйнап йөрөгән дуҫ ҡалыр.

45б Менгән атың буш ҡалһа,
Менергә ир табылыр;
Ҡейгән кейемең ҡуш ҡалһа,
Ҡейергә ир табылыр;
Бөгөнгө көн кемегеҙ
Иртән ергә күмелер;
Алдығыҙҙа ҡара ер,
Һине алмаҫ тимәгеҙ;
Алдыңызда, ҡараң, айыз/?/
Ни күрмәгән, беләһеҙ.
Мең уйлаһаң, халайыҡ,
Әжәл, үлем ҡайҙа юҡ —
Был ялғандан* файҙа юҡ...
Бәйтемеҙне көтәңеҙ,
Бер ай руза тотыңыҙ,
Үлем аһ, дип белеңеҙ,
Малдан зәкәт биреңеҙ.
Саҙаҡа, хәйерләреңеҙ.
Бай булһаңыз, яҡшылар,
Меңгә барып тороңоҙ.
Ни әйтәһең, яҡшылар,
Әйткән һүҙем алғайһың,
Илаусы кем булһа да,
Яҡшы фәта ҡылығыҙ.
Ханым, һүҙем борһағыҙ,
Аман-иҫән булғайһыҙ,
Алланан килгән ярлыҡҡа,
Ҡаты сабыр ҡылғайһыҙ,
Бер-ике көн ҡунаҡһыҙ,
Үҙҙәрегеҙ белгәйһеҙ,
Ҡыямат көн булғанда.
Ҡыямат көн булғанда,
Ергә халыҡ тулғанда,
Шунда-шунда барғанда,
Уғлың унда күргәйһеҙ.
Иманлы ҡол ожмахта,
Имансыҙ ҡол тамуҡта,
Ут эсендә зарланып,
Ғазап күрер көн булыр:
Иманлы ҡол ожмахта,
Һеҙгә ҡабат булмаҡта,
Ул ата менән ананы
Ҡүреп ҡушылыр көн булыр.
Балаңды унда күргәйһең,
Иманлы булһаң ожмахта.
Балаң менән йөрөгәйһең,

Төрлө-төрлө ниғмәттә,
Улым дәүрән һорарһың.
Ходай кисерһә гонаһыңны,
Киң һарайҙа торорһоң.
46а Ҡары инде йырын йырлап бөттө,
Өй эсенә йыйылып ҡатын тулды.
Ханымдың күңелен аулай килеп ине,
Балаһын юҡтап, ханым тауыш ҡылды.

Билен быуып, яңғыҙын юҡтап ине,
Ишеткәндең йөрәге талып ҡалды.
Яңғыҙын юҡтап, ханым зар инрәйҙе,
Бисара ханым өсөн күп илайҙы.

### Ханымдың балаһын юҡтап зарланғаны

— Бауырымдың параһы,*
Ике күҙем ҡараһы,
Йәнем һөйгән хан балам,
Һине ҡайҙа күргәймен?
Кемде балам тигәймен?
Һин иҫемә төшкәндә,
Нисек сыҙап йөргәймен?

Алыҫ юлға китеп сән,
Әйтмәй киттең сереңде,
Күрмәй ҡалдым йөҙөңдө.
Был ни хәсрәт, йән балам?
Һөймәй ҡалдым үҙеңде...
Был ни хәсрәт, йән балам,
Һөймәй ҡалдым йөҫөңдө.
Алыҫ юлға китеп һин,
Сәләм әйтһәм, етмәҫтер.
Йәндән татлы йән балам,
Ҡайғың эстән китмәҫтер.
Ҡарап өйҙән тапмаһам,
Һине ҡайҙан табырмын?
Һине ҡайҙан эҙҙәйем,
Кемде һин тип еҫкәйем?
Һинән башҡа, яңғыҙым,
Күҙ күрәрем юҡ ине.
Һинән башҡа беҙҙәргә
Иркәләрем юҡ ине.

46 б Яңғыҙ инең, бер инең,
Мең ҡайғыға йыр инең,
Инде ҡайтеп* йөрөйөн?
Йөҙөң ҡайҙа күрәйен?
Кемдең берлә йөрөйөң?

Ҡемдең берлә торайын?
Һин иҫемә төшкәндә,
Ҡайтып ғүмер һөрәйем?
Асыҡҡанға аш биргән,
Ғәриптәргә ҡаш биргән,[89]
Дуҫты өсөн баш биргән,
Яҡшы берлә яманды
Ҡуйыр белгән[90] яңғыҙым,
Һине ҡайҙан табайын?
47а Моңло булған әкәндең,
Зарлы булған анаңдың
Боҙоҡ булған күңелен[91]
Ҡем аулайҙы, шырағым...*
Арғымаҡ мән толпарың,
Ласын менән шоңҡарың,
Ҡарсыға мән тойғоноң,
Эйәһе юҡ булғанда,
Ҡем тотор һуң, шырағым?..

Бута ҡалды төйәһеҙ,
Йортоң ҡалды эйәһеҙ,
Әкә-шәшәң бинаһыҙ,
Эҙләп ҡайҙан табайып?

Әүәлгелә киткәндә,
Серең беҙгә әйтмәнең,
Юлда каруан күргәндә,
Ҡайт тиһә лә, ҡайтманың.
Эҙләгәнең алдында
Йөрмәҫ мине, яңғыҙым?
Мәккә барып, хаж ҡылып,
Теләп инем, яңғыҙым...
Фәрҙәнд өсөн, яңғыҙым.
Барып әйтте теләгеңде,
Моңло ҡолом, күрһәм тип.
Бер ҡунмай беҙҙе инде,
Зарлап инде булһын тип.
Ҡарылыҡта әкәндең
Инрәр көнө булды инде;
Яңғыҙ ҡалып, анаңдың
Зарлар көнө булды инде.

Икәү булһаң, шырағым,
Ҡалмаҫмине, берәүең?
Ҡем ҡулында улһаң да,
Ҡылмаҫмине һорауың?
47б Хаҡ насибә һалманы,[92]
Тоҡом беҙҙән ҡалманы;
Ҡары көндә хур булдыҡ,
Дәрдкә* дарман булманы.

Инде ҡайтеп йөрәйен?
Йөҙөн ҡайҙа күрәйен?
Яңғыҙ улдан айрылып,
Ҡем мән өмөр һөрәйен?
Арҡала һис фәтә юҡ,[93]
Алдым асыҡ, бала юҡ.
Күҙ алдымда бар булһаң,
Күрмәҫминем, олоном?!
Үлгән ерҙә бар булһам,
Үлмәҫминем, ҡолоном?!

Ят йорттарҙың эсендә
Ҡайтеп йөрнөң, шырағым?
Дошмандарың ҡулында
Ҡайтеп йөрнөң, шырағым?..
Йортоң алмай ҡашыңа,
Бәлә килде башыңа.
Ҡорбанлығың булмаҫмы инем,
Күҙҙән аҡҡан йәшенә.
Сырағымды һүндерҙең,
Дошманыңды тындырҙың.
Зарлай өмөр үтһен тип,
Әсәнде яңғыҙ ҡалдырҙың.
Был ни хәсрәт, ярандар?
Был ни ҡайғы, ярандар?
Күкрәктәге янған ут
Көндән-көнгә траңлар.

Күңлем инде тынмаҫты,
Һүнгән шыраҡ янмаҫты,
Яңғыҙымдың ҡәберен
Күрмәй күңлем тынмаҫты.

Йортом, инде атлайың,
Яңғыҙыма барайын,
Етем булмаҫ яңғыҙым,
Мулаһын бер күрәйен.
Күрһәм, күңлем һыуНырмы?
Ҡашында аҙ көн торайын.
Етем булмаҫ, ярандар,
Йырлап күңлем асайын.
Өс-дүрт китап сығарып,
Моңлоларға сәсәйен.
48а Моңло әҙәм ишетһә,
Бер аҙ күңеле баҫылыр.
Бисара Баһауи булмаһа,
Был һүҙ ҡайҙан табылыр?!

Һәр намаҙ шәм ваҡтында
Ҡәләм алдым ҡулыма.

Был һүҙҙәрҙе яҙғаныма
Тәңрем һалды уйыма:
Моңло ғибрәт алһын тип,
Үлһәм, һүҙем ҡалһын тип,
Һүҙем уҡыған әҙәмдәр
Беҙгә фәтә* бирһен тип.

Моңһоҙ — бер хаҡтыр,[94]
Һәр бәндәнең моңо бар.
Ғибрәт алмаҡ китаптан —
Шәриғәттең юлы бар.

Дәлиле юҡ был китап
Ғибрәт өсөн яҙылды.
Моңдо әҙәм ишетһә,
Ҡайғылы күлдә баҫылды[95]...

Яңғыҙмын, тип һөйләгән
Яңғыҙ ҙа үтәр донъянан,
Күҙен асып, ҡараһаң,
Күңелең китер донъянан.

Ярлымын, тип илаған,
Ярлы ла — Хаҡ бәндәһе.*
Ялдандағы һис кемгә
Малы булмаҫ юлдашы.
Ярлылыҡ — иман берлән(?) —
Пәйғәмбәрнең теләге.

Донъя, әхирәт бергә ҡыл:
Дин теләйҙе [кирәкте];
Бәндә, ярлы булһа ла,
Ҡоллоҡ һылыу кирәкте.

48а Пәйғәмбәрҙең һүҙе бер
Уны белеү кәрәкле.
Мең йыл борон байҙардан
Борон керһә кәрәкле.
Ҡолсолоҡ сауап ҡылғанда,
Алла булһын уйығыҙ.
Аҙ ғүмерҙән файҙа юҡ —
Ожмах булһын урынығыҙ.
Аҙ ғүмергә алданып,
Ҡыйналып, мал табырһыҙ,
Уға [тағын] алданып,
Хаҡ ҡоллоғон тоярһыз,
Шайтан төшһә артыңа,
Малға ҡасан туярһыҙ,
Бер-бер башын у малдың,
Артығызда ҡуярһын.

Малны йыйһаң хәрәмдән,
486 Төбөндә һәләк буларһың,
Зәкәтһеҙ мал* хәрәме
Берәүгә улъя булар ул
Ҡитапты* иҫкә алмайһың,
Ҡулаҡыңызға һалмаһаң,
Зәкәт*, фытыр* биргәндә,
Хаҡты* уйыңа алмаһаң,
Һуҡыр малың хәйергә
Биргәйнем, тип[тик] торһаң;
Күр(е)шеңә маҡтаныл,
Ауыҙыңдан һис һалмаһаң;
Йәшең йөҙгә етһә лә,
Үлемне уйға алмаһаң —
Фытырыңдан файҙа юҡ,
Малдан зәкәт бирмәһәң.
Ҡара ергә кергәнсе,
Яман юлдан ҡалмаһаң,
[Алланы] уйға алмаһаң,
Намаҙ, ураҙа булмаһаң,
Мөьминмен, тиеүҙән файҙа юҡ.

Бер көн [ергә] бараһың,
Ҡул[сылығың], апарып,
Трәзигә(?) ҡалаһың;
Трәзиҙә кем булһа,
Аны ҡайҙан алаһың?
Пәйғәмбәрләр алдында,
Оялып, хур булырһың.
Хоҙай ғәфү ҡылмаһа,
Тоҙаҡҡа табан барарһың,
Янған уттың* эсендә
Төрлө ғазап күрәһең.

Иманлы үтһәң донъянан —
Ожмах табан барырһың,
Хаҡ дидәрен* күрерһең,
Яҡшы ҡыҙлар* ҡашында,
Үлмәй дәүрән, торарһың.

### Ханымдың балаһын эҙләй барғаны

Ханымның ярлығын йорт белде, тине,
Йыйылып ғәскәр ун мең булды, тине.
Хан-ханым, ялғыҙын күрәмен, дип,
Яһанып, аттарына менде, тине.
Күп ғәскәр көн-төн, тынмай, йөрөнө, тине,
Ҡырҡ көндә шәһәргә килде, тине,
Быларҙы күреп, хан ҡурҡып имде:
«Бу ғәскәр, ҡайҙан пәйҙә булды?» — тине,

Быларға, илсе ҡылып, кеше һалды*.
Илсе килеп, быларҙан [яуап] алды.
Баяғы яңғыҙ егет әтәһе икән —
Күргән илдең* бары ла таңға ҡалды.
Хан, ҡурҡып, йорто менән атыға менде,
Ҡилгән хан алдына ҡаршы килде.

— Әжәл — Хаҡдан, сәбәбе — беҙҙән булды, —
Ғәйебен муйынын(а) алып* ғарыз ҡылды.* —
Тәҡсир, әжәле улыңдың беҙҙән булды —
Нә ҡылһаң да [ҡыл, бәндә, тип башын] һалды,
Ғафиллылыҡ менән был эште ҡылыр идуҡ,
Үкенеп, йортта, бары илап ҡалды.

Алдында бар ғәйебебеҙ — ғарыз ҡылдыҡ,*
Ат менеп, алдыңызға ҡаршы килдуҡ,
— Нә ҡылһаң да, ғәйеплебеҙ, муйын һондоҡ.
— Был тәҡдир ҡылмышылыр,
Сәбәбе уның һеҙҙән булған сығар.
Терәгең(?) әхирәттә булһын һинең,
Аллаға ҡылғанығыҙ ғийән шынар* (?).
Ҡаныңды кистем,[96] хан, — тип, атҡа менде,
Был хандың инде күңеле тынды.
Күп ғәскәр шәһәргә барып керҙе,
Буҙйегеттең мулаһына килде, тине.
Хан-ханым мулабинаға яҡын килде,
Өйгә инмәй, ханым тышта тауыш ҡылды.

Ишеген асайым тип, бер ғәп* әйтте,
Асалмай йорт бары ғажиз* булды
Ялғыҙын* юҡтап, ханым зар илайҙыр,
«Ялғыҙым, ишек ас!» — тип, зар иңрәҙе.

Мулабина зар иңрәп торҙо, тине,
Ханыма өсөн ҡайғырып, күп илайҙыр.
Ханымның илаған йыры (һыҡтауы)
Ун ай һине күтәреп,
Имсәгемде имеҙеп,
Татлы тәғәм ейҙереп,
Аҫыраған анаңмын,
Тор-тор [имде] ҡаршыда,
Анаң тора ҡаршыңда,
Зар илайҙыр башыңда.

Тормаҫ ергә китеп һин,
Торғол, балам, тороп һин,
Моңло анаңмын — күреп һин,
Хәлдәремде белеш һин.
Балам нә[һин] бер һүҙһеҙ,
Һинә килдем күркәле?*

Бит, ауыҙындан һөйгәли,
Артында кем ҡалады —
Ҡолоном кем булады?
Һине уйлап зар ҡылһам,
Күҙемә ҡан тулады.

Һай-һай, балам, һай, балам!
Кемде балам тиәрмен?
Кемдәр менән йөрөгәймен,
Йөҙөң ҡайҙа күргәймен?
Уҡыһам ине һүҙенде,
Күрһәм ине йөҙөңнө;
Илап анаң килгәндә,
Илап-инрәп торғанда;
Моңло көндө, ай, балам!
Илап анаң килгәндә,
Бер күрмәйсән, йән булам!
Бутаһы — үлгән дөйәләй,
Буҙҙай килдем, йән балам!
Ҡырыҡ көнлөк ерҙәрҙән,
Эҙләй килдем, йән балам!
Алла үҙе биргәндер,
Әжәл етеп, алғандыр,
Анаң йығлап ҡалғандыр.

Илаһа да, нә ҡылһын?
Алла үҙе бер көндө,
Әжәл етеп, алғандыр.
Анаң йығлап ҡалғандыр —
Илаһа да, нә ҡылһын?
Алла әмеренә күнгәндер,
Зарлап анаһы ҡалғандыр,
Сарыф күҙем булғанда,
Бер күренсе, йән балам!..

Балаһын юктап, ханым талып ҡалды,
Күп ғәскәр үҙ ханымдан өмөт өҙҙө.

Ханымдың илап ҡайтканы

Һай-һай...[97]



# 1. БУҘЙЕГЕТ

*(Хәлитова Хәнифә версияһы)*

Борон-борон заманда бер Ғабдулла тигән кешенең Буҙйегет исемле улы була. Ул бик матур була, уны бер күргән кеше тағы ла күрһәм ине тип йөрөй. Буҙйегеттең Ҡәмән исемле бик яҡын дуҫы була. Бер көндө Буҙйегет бик матур ҡыҙҙы төшөндә күрә. Төшөндә ҡыҙ быға ошолай һөйләгән икән, ти:

— Мин юлыңа интизар,
Ҡарай-ҡарай булдым зар.
Егет, буйға етеп һин,
Ҡалаларҙың былбылы,
Яҡшы ерҙең гөлдәре,
Йәнем йәнгә ҡушылып,
Бер йөрөр көн булырмы?
Ысын хәҡиҡәт яр булһаң,
Бергә булһаҡ беҙ икәү,
Диңгеҙ кисеп, тау үтеп,
Мине эҙлә һин, егет.
Толпар атҡа атланып,
Мине эҙлә һин, егет.

Шул ваҡыт Буҙйегет йоҡлап ятҡан еренән уянып китә. [Уянып китһә], эргәһендә ҡыҙ юҡ, аптырап ҡала. Төш икәнен белгәс тә, ул һәр ваҡыт ошо ҡыҙ тураһында уйлап йөрөй.

Икенсе йылды Буҙйегеткә ун һигеҙ йәш тула. Ул ҡыҙҙы тағы төшөндә күрә, төшөндә уға ҡыҙ ошолай ти:

— Дүрт йыл булды, һыҡтайым,
Ҡиләме тип көтәмен;
Хәбәрең юҡ, үҙең юҡ
Сәләмең юҡ, хатың юҡ, —

ти. Шул ваҡыт төштә Буҙйегет әйтә:

— Бик матур бер ҡыҙ бит һин,
Төшләремә инәһең.
Эҙләп барһам, илең әйт,
Мин иленде белмәйем,
Һине ҡайҙан табармын?
Быйыл керҙең төшөмә,
Һине ҡайҙан табам мин?
Күп ҡайғыға һалдың һин!

Төштә мыңа ҡаршы ҡыҙ:

— Атың менеп сығарһың,
Мине ҡабул күрһәң һин, —

ти. Буҙйегет уянып китә, ҡыҙ янында булмай. Егет бик ҡайғыра, ашамай, эсмәй. Дуҫы Кәмән янына китә. Килә лә дуҫына әйтә, шулай төштә бер ҡыҙ күрҙем, ти. Һөйләй:

— Төштә бер ҡыҙ күрәмен,
Хайран ҡалып йөрөймөн,
Ҡайғы төштө башыма,
Аҡыл тапмай йөрөймөн.
Ҡабул күрһәң, йән дуҫым,
Сәфәр сығыр уйым бар.
Һинән башҡа дуҫым юҡ,
Серҙе сисер кешем юҡ.
Уны эҙләп үлһәм дә,
Риза булам, йән дуҫым.

Дуҫы Кәмән был һүҙҙе ишеткәс:

— Ҡабул күрәм, барабыҙ,
Ни күрһәк тә, күрербеҙ.
Мин юлдашың булырмын,
Хеҙмәт итеп йөрөрмөн,
Һинән айырылып ҡалмам,
Икәү бергә булырбыҙ.
Мин бит һинең юлыңда
Ялғансы дуҫ булмамын, —

ти. Буҙйегет иптәшенән былдай яҡшы һүҙҙәрҙе ишеткәс, бик шатлана. Былар, бик күп аҙыҡ алып, бер кемгә лә әйтмәйенсә, дөйәгә атланып, төштә күргән ҡыҙҙы эҙләргә сығып китәләр. Күп ерҙәрҙе үтеп бара торғас, дейеү бәрейҙәренең ауылына барып сығалар. Үтеп барғанда быларҙы дейеү бәрейҙәре тотоп ала. Өс йыл тотҡон булып яталар. Бер көндө былар ҡасып китәләр. Күп тә тормай, быларҙы тағы дейеү бәрейҙәре тота. Яңынан аяҡ-ҡулдарын сылбырлап, зинданға бикләйҙәр.

Буҙйегет бер көндө ошолай тип йырлап ултыра:

— Бейек тауға тап булдыҡ,
Тимер өйгә һалындыҡ,
Сыҡмаҡ беҙгә ҡайҙа ул,
Ниндәй илгә тап булдыҡ,
Был бәләнән ҡотолоп
Юл йөрөр көн булырмы?
Атам менән инәмде
Бер күрер көн булырмы?

Был илдән дүрт йылдан һуң, бер диңгеҙ буйына төшөп, кәмә менән ҡасып китәләр. Күп көндәр баралар, быларға ҡаршы күп кәмәле кешеләр осрай. Былар, беҙҙе тағы тоторға киләләр икән, тип, бик ҡурҡалар. Кәмәләре менән ҡара-ҡаршы килеп туҡтайҙар. Был кешеләр Буҙйегеттең ауылдаштары икән, сауҙа итеп йөрөйҙәр.

Буҙйегет үҙенең ҡайҙа барғанын һөйләп бирә. Теге кешеләр: «Ҡайт, төштә күргән ҡыҙ артынан йөрөйҙәрме ни?» — тип, бик асыуланалар. Буҙйегет ризалашмағас, уға бик күп аҙыҡ бирәләр. Китер сакта Буҙйегет былай ти:

— Хуш инде һеҙ, каруандар,
Һау-сәләмәт ҡайтығыҙ;
Ата-инәмде күрһәгеҙ,
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.
Бер эш башҡа төшкәстән,
Йөрөмәй күңел түҙмәйҙер.
Күп ҡайғылар күрҙек беҙ,
Илап-илап йөрөнөк беҙ.
Ҡайтып, каруан, йөрһәгеҙ,
Ауылдарҙы күрһәгеҙ,
Ата-инәмде күрһәгеҙ,
Бик күп сәләм әйтегеҙ!

Күп көндәр баралар, бара торғас, былар ҡыҙ йәшәгән ергә барып етәләр. Был бик ҙур ҡала була. Иң остағы өйгә инеп сәләм бирәләр, үҙҙәренең башынан ниҙәр үткәнде өйҙәге бер ҡартҡа һөйләп бирәләр. Былар икәү был ҡалала ай ярым йөрөйҙәр, бер кешене лә танымайҙар. Буҙйегеттең эҙләгән ҡыҙы Сәхипъямал була. Шуға бер егет барып әйтә: «Мин бер бик матур егет күрҙем», — ти. Был һүҙҙе ишеткәс, Сәхипъямал үҙенең ҡырҡ ҡыҙын эҙләргә ебәрә.

— Тиҙ артынан барығыҙ,
Беҙҙән сәләм һалығыҙ,
Ата-инәһенән айырылып,
Беҙҙе эҙләгән булмаһын.[98]
Барып йөҙөн күрегеҙ,
Ҡайҙағы? — тип һорағыҙ;
Әгәр уны тапһағыҙ,
Беҙгә алып килегеҙ, —

тип, ҡыҙҙарын сығарып ебәрә.

Буҙйегет был ҡалала күп йөрөй, ләкин таба алмай. Бер көндө иртәнсәк төш күреп уяна. Төшөндә быға бер ҡарт: «Сәхипьямал был ҡалала, һин табырһың», — ти. Буҙйегет төшөн иптәше Кәмәнгә һөйләй. Былар тағы ла ҡыҙҙы эҙләргә китәләр. Шул ваҡыт теге ҡырҡ ҡыҙға тап булалар ҙа уларҙың артынан эйәрәләр. Ҡыҙҙар бер өйгә инеп китә, ә Буҙйегет тышта тороп ҡала. Ҡырҡ ҡыҙ инеп, Сәхипъямалға Буҙйегетте тапмағанлыҡтарын әйтә. Сәхипъямал тәҙрә янына килеп ултыра ла ошолай тип йырлай башлай:

— Ете йылдар булдым зар,
Илап-илап интизар.
Йәнем йәнгә ҡушылып,
Бер йөрөр көн булырмы?
Күкрәктәге ҡайғынан

Ҡотолор көн булырмы?
Ҡиләм тигән вәғҙәләр
Һинең булды бит ялған!
Бынан көтөп килмәнең,
Бүтән ярҙы алдыңмы?

Буҙйегет урам яҡта Сәхипъямалдың әйткән һүҙҙәрен ишетеп тора. Был тауышҡа ҡаршы ул да тыштан тауыш бирә:

— Мин бит һиңә ҡараным.[99]
Һине күптән таба инем,
Диңгеҙҙәргә тап булдым,
Дошмандарға тап булдым.
Сүлдә йөрөнөм һыу тапмай,
Һыуҙа йөрөнөм юл тапмай.[100]
Дүрт йыл тулды киткәнгә,
Хайран ҡалып йөрөнөм мин,
Күп хәсрәттәр күрҙем мин.
Ата-инәмдән айырылып
Һине эҙләп йөрөнөм мин.
Тауҙан-таштан үтеп мин,
Һине эҙләп килдем мин.
Ярҙы күрер көн булһа,
Мораҙыма етәрмен.
Минең менән бергәләп
Ҡаршымда бар бер егет.
Ысын һөйгән яр булһаң,
Мине өйгә кертерһен:
Йәндәй һөйгән ярымды,
Мин күрергә ашҡынам! —

ти. Шул ваҡыт Буҙйегетте өйгә алып инәләр. Сәхипъямал менән Буҙйегет бергә ҡауышалар. Бик шатланышалар. Буҙйегеттәр бында бик шатланып бер аҙна торалар. Гармундар тартып, музыкалар ҡысҡырталар. Шул ваҡыт: « Сәхипъямал янына егеттәр кергән», — тип, ҡыҙҙың атаһы Таймас ханға барып әйтәләр. Ул арала Буҙйегет тә сығып китә. Таймас хан бик күп кешеләр менән ҡыҙы янына килә, ҡыҙына бик асыулана: «Алай егеттәр индермә!» — ти. Сәхипъямал уның был һүҙенә ҡаршы:

— Ҡолағым һаңғырау булғандыр,
Әйткән һүҙҙе ишетмәй.
Башта аҡыл бар саҡта,
Һеҙҙән аҡыл һорамам;
Буҙйегеткә бармаһам,
Донъяла мин йөрөмәм! —

ти. Таймас хан ҡыҙын бик өгөтләй, ләкин ҡыҙы бөтәһенә лә ҡаршы килә. Шул ваҡыт хан: «Был минең ҡыҙымды бик аҙҙырып бөткән икән, үлтерергә кәрәк уны!» — ти. Буҙйегет бер тау ҡырына барып

ята ла дуҫы Кәмән артынан Таймас ханға хат ебәрә. «Таймас хан, мин һинең ҡыҙыңды күп йылдарҙан бирле алырға йөрөйөм, һин шуға ризамы?» — ти. Был хатты Кәмән ханға илтеп бирә, хан алып уҡый ҙа йыртып ташлай. «Хат килтереүсе был кешене хәҙер үк үлтерегеҙ!» — ти. Хандың бер иң яҡын туғаны була, ул: «Һин, хан, яңылышаһың, — ти. — Илсегә үлем юҡ, ул кеше эше артынан йөрөй, — ти. — Әгәр ҙә үлтерергә теләйһең икән, һин Буҙйегеттең үҙен үлтерт», — ти. Шулай итеп, Кәмән ҡотолоп китә.

Хан Буҙйегеттең артынан биш мең баһадир, ун биш мең һалдат сығара. Былар Буҙйегет менән һуғышалар. Буҙйегет бер үҙе биш мең баһадирҙы, ун биш мең һалдатты үлтереп, өйөп ҡуя. Был эшкә хан бик аптырай, нисек тә булһа, Буҙйегетте үлтерергә бер хәйлә ҡора. Бөтә ҡалаға ошондай һүҙ иғлан итә: «Мин ҡыҙымды Буҙйегеткә бирәм, туй була», — ти. Ә хан үҙе, йөҙ баһадир йыйып, туйҙа Буҙйегетте иҫертеп үлтерергә була. Сәхипъямал [атаһының мәкерен белмәйенсә] бик шатлана. Ул үҙенең өйөндә әҙерләнеп тора. Буҙйегет иптәше Кәмән менән туйға килә. Кәмән тышта ҡала. Буҙйегет туйҙа бик күп бал эсә, иҫерә. Кәмән өйгә инһә, Буҙйегеттең иҫереп иҙәндә ятҡанын күрә, ә өйҙәге кешеләрҙең бөтәһенең дә ҡулдарында хәнйәр була. Кәмән Сәхипъямал янына йүгерә. Килә лә:

— Хан туйынан килдем мин,
Хандың уйын белдем мин,
Боҙоҡтор уның уйы:
Ҡоралдары янында,
Ҡыуанышып торалар;
Өйгә дошман тулғандыр,
Күп эсендә бер яңғыҙ
Әжәл көтөп яталыр.
Вәғәҙәләрең бар булһа,
Буҙйегеткә яр булһаң,
Бер ҡашыҡтай ҡаныңды
Ҡорбан итергә кәрәк.
Аралап алыр кеше юҡ,
Быны белергә кәрәк, —

ти. Сәхипъямал был һүҙҙе ишетеп, кейемдәрен дә кейенмәйенсә йүгерә. Туй булған ергә бара, бөтә халыҡ быға урын биреп тора. Шул ваҡыт Кәмән Сәхипъямалға әйтә:

— Күп дошмандар эсендә
Хәлһеҙләнеп ятҡанын
Хәҙер үҙең күрәһең!

Сәхипъямал туйҙағы халыҡтарға ҡарап:

— Сәләм бирҙем, аталар,
Ҡотло булһын туйығыҙ.
Күп халыҡтарҙы йыйып,
Дөрөҫ түгел уйығыҙ.

Дошман өсөн туй булһа,
Азат итеп ҡуйығыҙ.
Бар эсенән айырған,
Үҙ йортонан аҙашҡан,
Туйға булған ярлыны
Азат итеп ҡуйығыҙ.
Ата-инәнән айырған
Күҙе йәшле Буҙйегет —
Алып килгән ҡаршында
Юлдашы юҡ был ғәрип,
Һүҙҙәр әйтеп һөйләшергә
Иптәше юҡ был ғәрип.
Әйткән һүҙгә күнһәгеҙ,
Һорағанды бирһәгеҙ,
Кәңәш ҡылып халыҡҡа
Һүҙҙе ҡабул күрһәгеҙ,
Күп ишеткән аталар,
Ана менән ағалар,
Кәңәш ҡылып ҡарағыҙ,
Минең һүҙҙе тыңлағыҙ! —

ти. Туйға йыйналған халыҡ бер һүҙ өндәшмәй, ата-инәһе лә өндәшмәй. Сәхипъямал тағы ла әйтә башлай:

— Аҡылһыҙға һүҙ әйтһәң, —
Күкрәгенә ҡунмайҙыр.
Ата-инәмә һүҙ әйттем,
Уны ла ҡабул күрмәйҙәр, —

ти. Ата-инәһе бер һүҙ ҙә әйтмәй. Иҫереп ятҡан Буҙйегет янына килә лә Сәхипъямал шулай ти:

— Хан туйҙары була тип,
Ҡыуанма һин был туйға,
Дошман кергән ҡуйынға,
Ҡылыс етәр муйынға!
Эй егет һин, әй егет,
Күп эсендә бер егет!
Ай Буҙйегет, күҙеңде ас,
Һикереп тороп ишек ас!

Буҙйегетте Сәхипъямал алдында үлтерергә батырсылыҡ ҡыла алмайҙар, Сәхипъямал сығып китмәй. Тышта Кәмән был һүҙҙәрҙе ишетеп өйгә инә. Кәмәндең туйҙағы халыҡҡа бик асыуы килә. Ошолай тип һөйләй башлай:

— Атағыҙҙы үлтереп,
Инәгеҙҙе үлтереп,
Ҡатынығыҙҙы алған юҡ,
Малығыҙҙы алған юҡ.

Балта, бысаҡ ҡулығыҙҙа,
Нишләп бында тораһыҙ?
Дошман яуы килгәндә,
Берекмәһен һүҙегеҙ!
Аҡылы юҡ хандарҙың,
Улар бөгөн тилергән! —

ти ҙә, Буҙйегет ятҡан ергә килеп, уға әйтә:

— Мин илемә ҡайтырмын,
Ата-инәмде күрермен.
Һин илеңдә сағында,
Икәү бергә йөрөнөк,
Һин илеңдә шәп инең,
Һәр бер эшкә дан инең!
Игеҙ тыуған балалай,
Йөрөгән саҡтар бар ине;
Бер сәғәт тә ҡаршыңдан
Сыҡмаҫ көндәр бар ине.
Боронғолай дуҫлашып
Инде ҡайҙа йөрөрмөн?

Шулай ти ҙә был тышҡа сыға. Буҙйегет касһа, ҡыуырға әҙерләп ҡуйған аттарҙың өҙәңгеләрен ҡырҡып, Буҙйегеткә бер яҡшы атты әҙерләп ҡуя. Сәхипъямал Буҙйегеттең башына һалҡын һыу ҡоя, Буҙйегет күҙен аса. Сәхипъямал ишеккә табан күрһәтә. Буҙйегет тышҡа йүгереп сыға ла дуҫы әҙерләп ҡуйған атты менеп ҡасып китә. Уның артынан ҡыуырға тип сыҡһалар, береһе лә атын менә алмай, йығылып төшөп тик торалар. Шунан былар аттарын яңынан эйәрләп, ҡыуа сығалар. Буҙйегет һуғыша башлай. Хандың өс мең баһадирын үлтерә, үҙе етмеш ерҙән яралана. Хан быға бик ҡурҡа, хәҙер тотоу менән үлтерергә булалар. Буҙйегет бер бик матур урман араһына барып ята. Үҙенең тыуған ауылы, һөйгән ҡыҙы Сәхипъямал һәм иптәше Кәмән иҫенә төшә, бик ҡайғырып бер бәйет әйтә:

— Янғыҙлыкка төштө минең башым,
Минең былай йөрөгәнемде кем белә?
Ҡайҙалыҡты белмәйҙер атам минең,
Ҙур ҡайғыға төшөп минең яңғыҙ башым.
Һорарға кешем юҡ хәлде минең.
Ағастың башын киҫһәң, төбө ҡала;
Икәүҙең береһе үлһә, бере ҡала.
Яңғыҙҙың үҙе үлһә, нейе ҡала? —
Менгән аты, кейгән кейеме дауға ҡала.
Тыуған илем, атам-инәм иҫкә төштө,
Ҡан аралаш аҡты инде күҙҙән йәшем.
Туҙан баҫкан юлымды,
Ҡайғы баҫкан күнелде,
Асылыр көн булырмы?

Яңғыҙлыҡҡа төшөп мин,
Дуҫты күреп буламы?
Сәхипъямал менән икәү
Ҡауышыр көн булырмы?
Ҡайғы-хәсрәттән ҡотолоп,
Бер йөрөр көн булырмы?
Ҡаршы килгән дошмандарҙы
Бер ҡырыр көн булырмы?

Шулай итеп, ул был урманда ун көн ятып терелә лә, тағы ла ҡыҙҙың торған ҡалаһына китә. Буҙйегеттең дуҫы Ҡәмән Сәхипъямал янына барып йөрөгән. Һөйләшкәндә, Сәхипъямал: «Буҙйегетте фәлән ҡарсыҡтың өйөнә алып барырһың да өсәүләп ҡасырбыҙ», — тигән. Ҡәмән ҡалала Буҙйегетте барып таба, Сәхипъямал әйткән ҡарсыҡтың өйөнә алып бара, шунан ҡыҙҙы алып килә. Сәхипъямал көн һайын Буҙйегет янына килеп йөрөй башлаған. Быны бер кеше белеп ҡала ла ҡыҙҙың атаһына килеп әйтә.

— Ҡыҙың көн һайын фәлән ҡарсыҡтың өйөнә бара, — ти. Батша был ҡарсыҡты саҡыртып ала ла:

— Һинең өйөңдә Буҙйегет бармы? — ти. Ҡарсыҡ:

— Юҡ, — ти. Хан:

— Әгәр ҙә Буҙйегетте миңә тотторһаң, һиңә бик күп мал бирәм. Ошо ҡалалағы бөтә ҡарсыҡтарға башлыҡ итеп ҡуям, — ти. Ҡарсыҡ:

— Буҙйегет миндә, — ти. Хан бик күп баһадирҙар ебәреп, ҡарсыҡтың өйөнән Буҙйегетте тоттора. Уны, аяҡ-ҡулдарын бәйләп, баҙар уртаһына алып баралар, шунда үлтерергә булалар.

Дуҫы Ҡәмән Буҙйегет янына бара, ул баҙар уртаһында аяҡ-ҡулы бәйле килеш ятҡан була. Буҙйегет иптәше Ҡәмәнде күреү менән уны саҡырып ала ла ошолай тип әйтә башлай:

— Эй яҡын дуҫ, бире кил,
Һүҙҙе һиңә әйтәмен.
Әжәл килде башыма,
Мин ни хәлдәр итәйем!
Һинән башҡа дуҫым юҡ,
Һүҙҙе кемгә әйтәйем?!
Әй яҡын дуҫ, яҡын дуҫ,
Был илдән һин ҡайтырһың.
Ҡайғыла ҡалған атама,
Зарҙа ҡалған анама,
Яңғыҙ балаң һүҙе тип,
Бик күп сәләм әйтерһең.
Ҡайғыла булған анама
Сәләмемде әйтә күр!
Ҡанатынан ҡайырылған,
Балаһынан айырылған,
Ҡайғыһы күп анама
Сәләмемде әйтә күр!

Башымдағы бүркемде
Һин атама бирә күр!
Яңғыҙ балам килә тип,
Атам мине көтмәһен.
Бармаҡтағы йөҙөктө
Анам ҡулына бирерһең.
Минең өсөн юлында
Күңелен аулап йөрөрһөң.
Ҡайғылы анамды күргәстен,
Сабыр ҡыл, тип әйтерһең.
Ай, яҡын дуҫ, яҡын дуҫ,
Минең өсөн йөрөп һин,
Күп ҡайғылар күрҙең һин.
Ата-анаңдан айырылып,
Минең өсөн йөрөп һин,
Ҙур ҡайғыға төштөң һин.
Тыуған илгә ҡайтҡастын,
Ата-анамды күрерһең;
Балам юҡ тип илаһа,
Сабыр ит, тип әйтерһең.
Ауылдаштар янына
Ҡайтыу менән килерҙәр,
Бөтә күргән халыҡҡа
Беҙҙән сәләм әйтерһең.
Беҙҙе күрмәй ҡалғандар
Беҙҙең өйгә барырҙар.
Ата-анамды күрерҙәр,
Беҙҙең өсөн иларҙар.
Айырылыуҙы мин белдем,
Ҡурҡа, ҡурҡа йөрөнөм.
Сәхипъямал яр өсөн
Был нужаны мин күрҙем.
Хуш бул инде, хуш, дуҫым,
Минең аҡтыҡ һулышым!

Дуҫы Ҡәмән был һүҙгә ҡаршы ошолай ти:

— Эй Буҙйегет, Буҙйегет,
Беҙ кесенән дуҫ инек.
Инде айырылыу көн етте,
Хуш бул инде һин, егет.
Анаң сыҡһа ҡаршыма,
Ни тип яуап бирермен.
Эй яҡын дуҫ, яҡын дуҫ,
Һинең өсөн үлһәм дә,
Күп дошмандың эсенән
Ҡотолоп сығып булманы.
Яндан татлы ян дуҫым,
Бик күп бергә йөрөнөк.

Тулы йөҙөндө күрмәнем,
Былай булырын белмәнем.
Яуыз убыр ҡарсыҡтың
Былай булырын белмәнем,
Ҡулымдағы хәнйәр менән
Барып янын алманым.

Хандың бер кеше үлтереүсе кешеһе була. Шул килә лә, халыҡ уртаһында яткан Буҙйегеткә хәнйәре менән сәнсә. Буҙйегеттең бер ерен дә яраламай. Ошо рәүешле уға бик күп сәнсә — хәнйәр үтмәй. Буҙйегет: «Минең итек табанында алмас хәнйәрем бар, шуның менән үлтерегеҙ», — ти. Олтанын аҡтарып, алмас хәнйәрен алып, шуның менән сәнсеп үлтерәләр. Халыҡ илай, Буҙйегеттең дуҫы Ҡәмән дә бик илай, шунан ошондай бер бәйет әйтә:

— Һай, һай донъя, һай донъя,
Ҡемгә вафа* ҡалдың һин?
Бик ҙур булған хандарҙы
Үҙ ҡуйнына алдың һин.
Алып-алып туймайһың,
Ҡисә йөрөгән дуҫымды
Бөгөн айырып алдың һин!

Буҙйегеттең өҫтөндәге кейемен һалдырһалар, ул бик матур була. Үлтергәнгә халыҡ бик үкенә, ханды бик һүгәләр. Зәйтүн халыҡты, үкенмәгеҙ, тип өндәп йөрөй. Хан үҙенең ҡыҙын уға бирергә теләй, ҡыҙы уны тиңһенмәй.

Сәхипъямал Буҙйегетте эҙләп йөрөй, таба алмай, урамда бер егеттән һорай:

— Дөйә килеп буҙлаһа,
Балаһы уның бар микән?
Дөйә кеүек[101] Буҙйегет
Был туйҙарҙа бар микән?
Ҡуйҙар килеп ҡысҡырһа,
Балаһы уның бар микән?
Былбыл килеп һайраһа,
Ҡыҙыл гөлдәр бар микән?
Ҡыҙыл йөҙлө Буҙйегет
Был илдәрҙә бар микән?

Егет уға яуап бирә:

— Былбыл килеп һайраһа,
Ҡыҙыл гөлдәр юҡ сығар.
Ҡыҙыл йөҙлө Буҙйегет
Был илдәрҙә юҡ инде.
Ҡарағайлы ҡара урман
Үҫмәҫ ергә киткән ул.

Ғүмер буйы эҙләһәң дә,
Етмәҫ ергә киткән ул.

Сәхипъямал был һүҙҙе ишетеү менән Буҙйегеттең үлгәнлеген белеп, бик илап, атаһы янына ҡайта. Атаһына ошолай ти:

— Ишеттем мин, эй ата,
Ау ауларға китеп һин,
Морадыңа етеп һин,
Ҡыҙыл ҡандар эсендә
Бала шоңҡар аттың һин;
Беҙ ҡаршыңа килгәндә,
Беҙгә ҡаршы сыҡтың һин;
Тау башына менеп ятып,
Бала кейек аттың һин.
Донъя һиңә киң ҡалды, —
Бер көн, атам, иларһың,
Япраҡтай һулырһың.
Уйлағанды белдем мин,
Һинең уйың шул ине:
Буҙйегетте үлтертеп,
Эт Зәйтүнде килтертеп,
Тәхетеңә ултыртып,
Йорт эсеңдә туй ҡылып,
Мине бирмәк уй ине!

Һинең шундай уйыңды
Әллә ҡасан белдем мин,
Һинең һөйгән эт Зәйтүн,
Һыртын алтын итһәң дә,
Эсен баҡыр итһәң дә, —
Буҙйегеттәй булмаҫ ул!
Тотош алтын итһәң дә,
Зәйтүн кейәү булмаҫ ул.
Буҙйегеттең һөйәген
Мең Зәйтүнгә бирмәмен.
Буҙйегеттең аҡылын
Алтын өйгә бирмәмен.
Буҙйегетем булмағас,
Был донъяла йөрмәҫмен!

Хан:

— Илама, балам, илама,
Илдә якшы табылыр.
Илдә якшы күп була,
Мин шуларға бирермен;
Башымдағы тажымды,
Ҡыҙым, һиңә бирермен;

Аҫтымдағы тәхетемде,
Ҡыҙым, һиңә бирермен;
Арғымаҡтай аттарҙы,
Ҡыҙым, һиңә бирермен;
Донъя йөҙө киң, балам,
Һөйгәненә бирермен.
Тутыйғоштай егеттәр
Бар ҙа һине теләйҙәр.

Сәхипъямал атаһына бик үпкәләп:

— Буҙйегетем үлгәстен,
Нишләһәң дә булмайҙыр:
Эсем боҙға тулғандыр,
Йөрәгем таштай булғандыр.
Башындағы тажыңды
Алып кейер кешем юҡ;
Аҫтыңдағы тәхетеңә
Менеп ултырыр кешем юҡ;
Ат яҡшыңды нишләтәйем? —
Алып менер кешем юҡ;
Тун яҡшыңды нишләтәйем? —
Алып кейер кешем юҡ.
Беҙҙән һуңғы ҡыҙыңды
Яратҡанға бирерһең.

Сәхипъямал Буҙйегетте эҙләп таба, уны дарға аҫып ҡуйған булалар. Уны күреп, һамаҡлай-һамаҡлай илай:

— Һинең башың, эй башың
Киҫелгәнгә оҡшайҙыр:
Гәүҙәң ята болғанып,
Аяҡ-ҡулың солғанып.
Ҡара ҡоштай күҙҙәрең,
Ҡыҙыл гөлдәй йөҙҙәрең,
[Һулығанға оҡшайҙыр.]
Был ҡаланы һин егет
Бер күрергә зар булдың.
Был донъянан киттең һин,
Һеҙҙән донъя үтте инде.
Мин дә артыңдан китәмен,
Һин алдымда йөрмәгәс,
Мин дә ерҙә йөрмәймен, —

ти ҙә өйөнә ҡайта. Ҡайта ла егетте тотторған ҡарсыкты саҡыртып ала: « Әйт әле, һин нишләп Буҙйегетте тотторҙоң? — ти. — Хәҙер үҙеңде үлтерәм», — ти. Ҡарсыҡ бик ҡурҡа, ҡалтырай. Сәхипъямал: «Юҡ, мин һине үлтермәйем; әгәр ерҙә торһам, үлтерер инем, — ти. — Мин дә Буҙйегет артынан китәм», — тип, ҡарсыҡты сығарып ебәрә.

Сәхипъямал Буҙйегеттең башын алып ҡайта ла бер бик яҡшы һарай һалдырта. Унда Буҙйегетте күмәләр. Сәхипъямал иптәштәрен саҡырып ала ла ошолай ти:

— Эй, дуҫтарым, дуҫтарым,
Һеҙ хуш булып ҡалығыҙ!
Инде һеҙҙе күрмәмен,
Һау булығыҙ, дуҫтарым!

Шул ваҡыт бер ҡыҙ бының янына килә лә:

— Эй, йән дуҫым, йән дуҫым,
Бер аҙ бергә йөрө инде!
Күп ҡыҙҙарҙы айырма,
Илай-илай ҡалмаһын, — ти.

Сәхипъямал:

— Донъя һеҙгә ҡала инде,
Шатланышып йәшәгеҙ!
Тор тиһәң дә, тормаймын,
Ҙур ҡайғыға төштөм мин,
Инде әйтер һүҙем юҡ,
Һүҙем ҡалыр, үҙем юҡ.
Хуш булығыҙ, дуҫтарым! —

ти ҙә, кейемдәре янына килеп, тағы ошолай тип әйтә:

— Алтын яҡа, хуш туным,
Һеҙҙе кейер кеше юҡ.
Алтын эйәр, был юрға,
Һине менер кеше юҡ.
Алтын биҙәк, киң һарай,
Һиндә торор кеше юҡ.
Атам мине күп итте,*
Теләгемде алманы.
Башҡа ҡыҙы булдыниһә,
Эт Зәйтүнгә бирһен ул!

Шул ваҡыт Кәмән, бик ҡайғылы йөҙ менән килеп инеп, ошолай ти:

— Был ҡалала йөрөнөм мин,
Айырылырҙы белдем мин.
Күргән төшөм алдымда,
Дуҫым ҡалды артымда.
Хуш булығыҙ, дуҫтарым!

Сәхипъямал үҙенең барлыҡ кейемдәрен, нәмәләрен ҡалалағы ярлы халыҡҡа тарата. Халыҡты йыя ла ошолай ти:

— Беҙ донъянан китәбеҙ,
Һеҙ донъяла ҡалаһыҙ;
Беҙ, ямандар, үтәбеҙ,
Һеҙ, яҡшылар, ҡалаһыҙ.
Мораҙыңа етегеҙ!
Артта ҡалды һүҙҙәрем,
Хәсрәтләнде йөҙҙәрем.
Буҙйегеттең артындан
Инде мин дә китәмен, —

тип әйтә лә, Буҙйегеттең һарайына инеп, уны ҡосаҡлап, үҙен үҙе үлтерә. Сәхипъямалдың үлеүен ишетеү менән, халыҡ бик ҙур ҡайғыға төшә, ханды бик әрләйҙәр. Ата-анаһы ла Сәхипъямал ҡайғыһынан үлә. Ҡәмән дә Буҙйегеттең ауылына хат яҙа. Ҡәмән Буҙйегет янына инеп, үҙен үҙе үлтерә. Буҙйегеттең аталары килеп, улар ҙа улдарының ҡайғыһынан үләләр. Хикәйәт тә ошонда бөттө.

## 2. БУҘЙЕГЕТ

*(Хәбирова Шәрғиә варианты)*

Бер Муллатия шәһәрендә Таһмаҫ тигән хан йәшәгән. Уның Хафиза исемле ҡыҙы булған. Шуңа «артыҡ матур» тигән исем менән Сәхипъямал тигән исем ҡушҡандар. Ҡырҡ ҡыҙ Сәхипъямалдың күңелен асып торған. Сәхипъямал шул ҡырҡ ҡыҙ менән бергә атаһы һалып биргән ҙур бер йортта йәшәгән.

Ун һигеҙ йәшендә Сәхипъямал бер төш күрә. Төшөндә ул ҡырҡ ҡыҙ алдында баҫып тора, улар алдына ике егет килеп баҫа.

— Һеҙ ҡайҙан? — тип һорай ҡыҙҙар.

— Беҙ Бәһеҙәт* шәһәренән. Мин Бәһеҙәт шәһәренән Ғәбдулла солтан улы — Буҙйегет булам, — ти егеттәрҙең береһе. Икенсеһе:

— Мин Ҡәмән булам. Вәзир малайымын.

Сәхипъямал был күргән төшөн бер кемгә лә һөйләмәй. Ул шул уҡ төшөн өс йыл йәнәш күрә. Тик өсөнсө күргәнендә генә, шул төшөн ҡырҡ ҡыҙға һөйләй:

— Мине ҙур бер ҡала солтанының улы хайран килтерә, — ти.

Өс йыл йәнәш Сәхипъямал менән бер үк ваҡытта Буҙйегет тә төш күргән була. Төшөнә Сәхипъямал керә. Өсөнсө тапҡыр күргәндә төшөн Ҡәмәнгә һөйләй һәм:

— Шул ҡыҙ артынан сәфәр сығаһым килә, — ти. —

Ярҙам итһәң, йән дуҫтым,
Сәфәр сығыр уйым бар.

Сәхипьямал һылыуҙы
Эҙләп табыр яйым бар.

Уға ҡаршы Ҡәмән былай тип назым әйтә:

— Әй, йән дуҫтым, йән дуҫтым,
Сереӊ миӊә әйт, дуҫтым!
Тәкдир булһа, үлгәйбеҙ,
Ни күрһәк тә, күрербеҙ,
Ярҙам итеп йөрөрбөҙ.
Бүленеп һинән, ҡалмамын,
Башҡаға, бар, тимәҫмен
Һин — яратыр йән дуҫым,
Ялғансы дуҫ булмамын.

Шунан былар аҙыҡ әҙерләп, дүрт дөйә, дүрт кеше алып юлға сығып китәләр. Бер аҙ барғас, иге-сиге булмаған диӊгеҙгә осрайҙар. Егеттәрҙен береһе лә йөҙә белмәй, ти. Улар дөйәләрен кәмәгә алмаштырып, кәмә менән китәләр.

Диӊгеҙ уртаһында Маймыл утрауы бар икән. Уларҙы маймылдар һырып алып, шул утрауға алып ҡайталар. Был утрауҙа улар өс йыл йәшәй. Өс йылдан һуӊ Буҙйегет менән Ҡәмән сығып ҡаса. Һал эшләп, һал менән ағалар. Ике көн аҡкас, күрәләр: уларға ҡаршы бер кәмә килә. Улар былар янына килеп еткәс: «Әйҙә, беҙҙеӊ кәмәгә ултырығыҙ, хәҙер батаһығыҙ бит», — тиҙәр. «Беҙ икебеҙ бер кәмәгә ултырабыҙ, беҙгә айырым кәмә бирегеҙ», — тиҙәр. Улар уйлайҙар, былар беҙҙе тоторға килгәндәр икән, тип. Быларҙы айырым бер кәмәгә ултырталар. Ә был кешеләр уларҙы эҙләүселәр икән.

Һыуҙан сыҡкас, былар Буҙйегет менән Ҡәмәнгә ат биреп, юл өйрәтеп, үҙҙәре артабан китәләр.

Буҙйегет менән Ҡәмән ҡалаға килеп, аҡыллы ғына булып, ҡыҙ эҙләп йөрөйҙәр. Халыҡ уларҙы бик яратып, ҡыҙҙар торған йортка барып Сәхипъямалға әйтәләр: «Шәһәрҙә ике егет йөрөй. Бик хуп егеттәр, бик ғалимгә оҡшайҙар. Әллә һинеӊ хәбәрләшкән кешеӊ бармы?» — тип.

Сәхипъямал уларға яуап бирмәй, ҡырҡ ҡыҙға ҡарап наҙым әйткән:

— Бер хуп егет кереп, ти,
Шәһәребеҙҙә йөрөй, ти,
Эй, дуҫтарым, дуҫтарым,
Эҙләп тапмаҡ кәрәк, ти.
Андин хәбәр алғанға,
Һөйөнсө хәбәр алғанға,
Алтын йөҙөк, гәүһәр ҡаш
Һөйөнсөгә бирәмен.
Ҡырыҡ ҡыҙҙыӊ эсендә
Шуны артыҡ күрәрмен,
Хәбәр алыӊ, дуҫтарым,
Тиҙ артынан барығыҙ,

Хәбәр һалың, дуҫтарым,
Әгәр беҙҙе һораһа,
Бире алып килегеҙ.

Ҡыҙҙар китәләр, улар менән үҙе лә ҡасып китә.

Ҡырҡ көн эҙләйҙәр, ти. Бер ҙә таба алмайҙар, ти. Табырҙар ине, кыҙ гел ҡырҡ ҡыҙ уртаһында йөрөгән, йөҙөнә селтәр ҡаплаған булған. Егеттәр уны танымағандар.

Бер көн бер ҡырҡ йәштәр самаһы кеше: «Һеҙ ҡырҡ ҡыҙ йәшәгән йорт тирәһендә генә тороғоҙ, улар хәҙер ҡайталар», — тигән.

Шунан былар шул йорт тирәһендә торғанда, йортка ҡырҡ ҡыҙ кайтып кереп китәләр. Сәхипъямал керҙе лә йылай-йылай назым әйтергә тотонҙо, ти. Ул үҙе сазын уйнай, үҙе йылай-йылай былай тип назым әйтте, ти:

— Ете йылдар булдым зар,
Мин юлыңда интизар,
Миһырбаным уафа зар*,
Шәфкәт һеҙҙән кәрәк, ти.
Киләм тигән вәғәҙән
Һинең булды ялғандай,
Мынса саҡлап* килмәнең,
Бүтән йәрне алғандай.
Алла ҡушҡан йәр инең,
Йәреңә уафа ҡылманың,
Ете йыллыҡ йәр инең,
Урыныңда һис торманың.

Тышта торған егеттәр Сәхипъямалдың назым әйткәнен ишетеп торҙолар. Ҡыҙ назым әйтеп бөткәс, Буҙйегет былай тип назым әйтә:

— Һине унда яратты,
Мине мында яратты.
Һине миңә ҡаратты,
Мине һиңә ҡаратты,
Тик табармын ҡайҙандыр —
Арала даръя яратты.
Юлда йөрөнөм һыу тапмай,
Һыуҙа йөрөнөм юл тапмай,
Ҡырҡ биш көн мин йөрөнөм,
Ауыҙыма аш ҡапмай;
Табандарым уйылып,
Ҡул тиреләре һуйылып,
Һинең өсөн йөрөнөм мин,
Йөҙөмә һары ҡойолоп,
Янып һөйгән йәр булһаң,
Өйөңә керһәң кәрәк, ти.
Янып һөйгән йәремдең
Йөҙөн күрмәк кәрәк, ти.

Шунан ҡырҡ ҡыҙҙың бер нисәһе аш-һыу әҙерләй, бер нисәһе быларҙы ҡаршы сығып алырға әҙерләнә, ә бер нисәһе егеттәрҙе маҡтап назым әйтергә әҙерләнә.

Ҡыҙҙар йүгереп сығып егеттәрҙе алып инәләр. Ҡәмәнде лә бик ҡәҙер итәләр. Бер нисә ҡыҙ былай тип назым әйтә:

— Берең — алтын, берең — көмөш
Теҙелеп һеҙ, яр-яр!
Берең — айҙыр, берең — көндөр,
Ҡушылып һеҙ, яр-яр!
Һеҙ — Шаһизада, беҙ — хеҙмәтсе,
Малны алмас, яр-яр!
Берен — апа, берең — еҙнә,
Илсә алмас, яр-яр!
Йәре юҡтың — йәне юҡ,
Ҡәҙере юҡтың — кәре юҡ, яр-яр!
Заман ахыры булғансы,
Айырылмағыҙ, яр-яр!
Ошо фани донъяда
Күп йәшәгеҙ, яр-яр!

Тышта ҡарауылда торған шымсы өйҙә булғандарҙың барыһын да күреп торҙо, ти. Ул тиҙ генә барып, был турала батшаға хәбәр итә. Батша барса ғәскәре, вәзире менән ҡыҙҙар торған был йортто тиҙ генә ҡамап ала. Бик ҡаты һуғыш була. Был ике егет береһе менән дә ҡаршы һугышмаған, береһенә лә теймәгән, гел генә ҡасып (ялтанып) йөрөгән. Шулай имен ҡотолоп ҡалған. Ә батша ғәскәре? Ҡемдең кемгә асыуы булған, һылтауы сыҡҡанда, шулар бер-береһен үлтереп бөткән. Бөтәһе 1183 кеше үлә. Һуғыш бөткәс, ҡыҙҙар егеттәрҙе эҙләп сыға. Үлгәндәр араһында егеттәр булмағас, шатланышып ҡайтып китәләр.

Был хәлдәрҙең барыһын да Таһмаҫ хан һәм уның ҡатыны күреп тора.

Шунан Ҡәмән уларға иптәше исеменән хат яҙып бирә: « Мин — Бәһеҙәт шәһәренән Ғабдулла солтан улы Буҙйегет. Өс йыл төшөбөҙҙә күрештек. Хәҙер ете йыл булып китте».

Таһмаҫ хан вәзиренә биреп хатты уҡыта ла әйтә:

— Тиҙ шунын башып сабып өҙөгөҙ.

Шул саҡ бер вәзир әйтә:

— Туҡта, ханым-солтаным, улай итмә. Был йомошсо: илсегә — үлем юҡ. Аңа, үлтерһәң, тегеһен үлтер.

— Кәрәк булһа, уныһын да үлтерербеҙ! — ти хан. Буҙйегетте алып китәләр.

Ҡәмән ҡайтып китә лә, йәшеренергә урын әҙерләп, Буҙйегетте лә ҡасырып алып ҡайта.

Буҙйегеттең йәшеренеп ятҡанын белеп ҡалалар. Батша, ҡарсыҡтарҙы йыйып, әйтә:

— Минең дошманымды бер ҡарсыҡ йәшереп һаҡлай. Әгәр ул миңә уларҙы тотторһа, көн дә мең тәңкә акса биреп торам, әгәр тоттормаһа, мең ғазап менән үҙен үлтерәм, — тигән.

Егеттәрҙе фатирҙа тотҡан ҡарсыҡ, үлемдән ҡурҡып:

— Миңә барығыҙ, — тип әйтеп ҡайта. Шул көндө үк ҡарсыҡ артынан килеп, Буҙйегетте алып китәләр.

Уны төрмәгә ябалар. Икенсе көндө Ҡәмән, Буҙйегетте эҙләп, карсыкҡа килә. Килһә, ул юҡ. Шунан Буҙйегетте эҙләп китә. Өсөнсө төрмәнән Ҡәмән уны эҙләп таба. Буҙйегет төрмәнән назым әйтә:

— Эй, йән дуҫтым, яҡын кил,
Һүҙем һиңә әйтәйем.
Әжәл етте был башыма —
Батша әмерен үтәйем.
Алла әмере — ҡайта алмам.
Һеҙ илдәргә ҡайтһағыҙ,
Атам, анамды күрһәгеҙ,
Беҙҙе юклап илаһа,
Беҙҙән, сәләм, тейәрһеҙ.
Ҡулымдағы йөҙөгөмдө
Үҙ ҡулыңа салайсән.
Моңло анамды күргәндә,
Беҙҙе иҫкә алғайсән.
Башымдағы бүрек минең —
Моңло булған атамға,
Үҙ ҡулыңдан биргәйһә,
Күцелен алдап йөрөгәйһен,
Иҫке тиеп йыртмаһын.
Яңғыҙ улым килә, тиеп
Атам беҙҙе көтмәһен.

Буҙйегеттең назымын тыңлап бөткәс, Ҡәмән назым әйтә:

— Эй, йән дуҫтым, йән дуҫтым,
Яндан татлы, йән дуҫтым,
Күп көн бергә йөрөшмәнек,
Туя йөҙөң күрмәнем.
Ҡафыр ҡара ҡарсыҡны
Ҡылыс менән орманым.
Мин илдәргә ҡайтҡанда,
Атаң сыҡһа каршыма,
Ни күҙ менән күргәймән,
Ни тип яуап биргәймән?

Шул сак эйәрсәндәре менән бер вәзир килеп инеп, Буҙйегетте язалай башлай. Бик нык хитлайҙар, ә ул һаман үлмәй. Шунан Буҙйегет әйтте, ти:

— Эй, баһадирҙар, әллә ҡылысығыҙ үтмәйме? Үҙемдең итегемдә үҙ ҡылысым бар. Шуның менән сабығыҙ, — ти.

Тиҙ генә уның итегенең олтанынан ҡылысын алалар ҙа сабып үлтерәләр. Йәнтәслим итергә үҙенең ҡылысын көткән икән. Үлтергәс, язалаусылар егеттең битен асып ҡараған. Ҡараһалар — бөтәһе лә хайран ҡалып илашкандар. Ә сапҡан кеше:

— Ике кешелек егетте әрәм иткәм* бит! Мин уның бер бармағына ла тормайым бит, — тип илай, ти. Ә Таһмаҫ хан үлтерергә генә риза булмай, Буҙйегетте сәстәренән дарға аҫып ҡуйырға ҡуша.

Егетте сәстәренән дарға аҫып ҡуялар. Ҡәмән үтеп барғанда, дарҙа аҫыулы торған иптәше Буҙйегетте күреп, һуштан яҙып, бик оҙаҡ ята.

Ә был сакта хан йортонда туй бара. Сәхипъямал килеп назым әйтә:

— Дөйә килеп буҙҙаһа,
Бутаһы аның бар микән?
Бута күҙле Буҙйегетем
Был уйында бар микән?
Һыйыр килеп мөңрәһә,
Быҙауы аның бар микән?
Бисара быҙау Буҙйегет
Был уйында бар микән?
Былбыл килеп һайраһа,
Ҡыҙыл гөлдәр бар микән?
Ҡыҙыл күҙле Буҙйегет
Был уйында бар микән?

Ҡыҙ шулай тип йырлап бөткәс, ҡырҡ биш йәштәр самаһындағы бер кеше уға назым әйтә:

— Дөйә килеп буҙҙаһа
Бутаһы уның юҡ сығыр —
Бута күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр;
Һыйыр килеп мөңрәһә,
Быҙауы уның юҡ сығыр —
Бисара быҙау Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр;
Былбыл килеп һайраһа,
Ҡыҙыл гөлдәр юҡ сығыр —
Ҡыҙыл күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр;
Буҙҙаған дөйә бутаһы,
Буҙҙаған дөйә бутаһы
Бүре алғанға оҡшайҙыр —
Буҙйегетең донъянан
Хәйер алғанға оҡшайҙыр;
Әжәл алып киткәйҙер,
Морадына еткәйҙер,

Донъяның киң дәүләте
Тол ҡалғанға оҡшайҙыр.

Бынан һуң ҡыҙ, егеттең үлгән икәнен белеп, тиҙ генә ҡайтып, ҡырҡ ҡыҙын ала ла атаһы ҡаршына килеп назым әйтә:

— Ишетеп мин әй, ата,
Ау ауларға китеп, һин,
Бала көтөп ятып, һин,
Бала шоңҡар атып һин,
Тоҙаҡ көйөп ҡороп, һин,
Бала кейек атып һин,
[Морадыңа еттеңме?
Донъяңды киңәйттеңме?
Уны әжәл алды, тип,
Донъя иркен ҡалды, тип,
Ултыраңмы ҡыуанып,
Миңә ят мән йыуанып?]
Тимер алтын булмаҫ, ти,
Баҡыр көмөш булмаҫ, ти.
Һинең һөйгән Зәйтүнең
Миңә кейәү булмаҫ, ти.
Буҙйегетте үлтереп,
Алтын тәхеткә ултырып,
Өйгә дошман тултырып,
Минең туйым булмаҫ, ти.
Буҙйегеттең ҡәберен
Алтын өйгә бирмәмен.
Буҙйегеттең һөйәген
Мең Зәйтүнгә бирмәмен.
Мең Зәйтүнде килтерһәң дә,
Береһен ҡабул ҡылмаҫмын.

Атаһының әйткәне:

— Йылама, балам, йылама,
Илдә яҡшы күп булыр,
Илдән илгә йөрөрмөн;
Илдә яҡшы күренһә,
Һине шуңа бирермен,
Саҡырып алып торғоҙоп,
Йөҙөн һиңә күргәҙеп,
Һүҙеңә ҡолаҡ һалып,
Ризалығыңды алып.
Йылама, әй, йән, балам,
Һөйгәнеңә бирермен.

Сәхипъямалдың әйткәне:

— Айҙан улды тыуҙырып,
Ҡөндән ҡыҙҙы тыуҙырып,
Минән һуңғы ҡыҙыңды

Эт Зәйтүнгә бирерһең,
Айғырҙан сапҡан бейәләй,
Ҡайғырмаған дөйәләй,
Минән һуңғы ҡыҙыңды
Һөйгәнеңә бирерһең*.
Һин тапҡан йәр кәрәкмәй,
Үҙ тапҡаным булмағас,
[Буҙйегетем булмағас,]
Шуның мән ҡауышмағас.

Атаһының әйткәне:

— Йылама, балам, йылама,
Аҫтымдағы тәхетемде,
Ҡыҙым, һиңә бирермен,
Башымдағы тажымды,
Ҡыҙым, һиңә бирермен.
Алтын һарай төҙөтөп,
Көмөш менән биҙәтеп,
Аны ла һиңә бирермен.
Йылама, балам, йылама,
Ирегеңсә ҡылырмын, — ти.

Ҡыҙҙар сығып китәләр. Сәхипъямал һуштан яҙа. Егерме ҡыҙ дарҙан Буҙйегетте төшөрә. Егермеһе Сәхипъямалды күтәреп баралар. Бер аҙҙан икеһен дә төшөрөп ергә һалалар. Бер аҙ яткас, Сәхипъямал аңына килә һәм, тубыктарына егеттең башын һалып, биттәрендәге ҡандарын, бысраҡтарын күҙ йәше менән йыуа ла кулъяулығы менән һөртөп ҡуя. Һәм ошолай тип пазым әйтә:

— Хайран башың, хан башың
Ҡиҫелгәнгә оҡшайҙыр.
Баһаһы юҡ кәүҙәңдән
Йән киткәнгә оҡшайҙыр.
Ҡомға болғап сәсеңде,
Ҡанға болғап башыңды,
Күҙҙән сыҡкан йәшеңде,
Ергә ашыр ирме инең?
Ҡыҙыл гөлдәй йөҙҙәрең,
Бал-шәкәрҙәй һүҙҙәрең
Бер күрергә зар булдым.
Әйтһәм, һүҙем бөтмәҫ, ти.
Күрһәм, күҙем етмәҫ, ти,
Үҙ юлыма төшөп мин,
Саҡырһам да, килмәҫтәй.
Инде әйтер һүҙем юҡ,
Һүҙем ҡалыр, үҙе юҡ.
Донъя баҡый булһа ла,
Бер үлгәс, терелмәк юҡ.
Яныл көйөп йөрөгәнсе,

Был хәсрәтте күргәнсе,
Ҡайғың бөтмәҫ, тигәнсе,
Бергә булмаҡ кәрәк, ти.

Шулай тип йырлап бөтә лә, биш ҡыҙҙы эйәртеп, ҡалаға китә. Унан ул ҡәбер ҡаҙытырға кешеләр килтерә.

Сәхипъямал ҡәберҙе ҙур бер ялан уртаһына ҡаҙытты, ти. Ә ул ҡәбер өҫтөнә алтын, көмөш, яҡуттар менән биҙәп йорт һалдылар, ти. Егеттең ҡәберен бик матурлайҙар, егеткә яҡшы кейемдәрен кейҙереп һалалар, тирә-яғына ут ҡуялар. Ҡәбер өлгөргәс, ҡыҙ ҡырҡ ҡыҙға назым әйтә:

— Эй, дуҫтарым, дуҫтарым,
Йәндән татлы дуҫтарым,
Инде мин дә китәмен,
Хуш булығыҙ, дуҫтарым!

Ҡырҡ ҡыҙ араһынан бер ҡыҙ уға ҡаршы былай тип назым әйтә:

— Ҡайт, аппағым, ҡайтһана,
Был уйыңдан ҡайтһана!
Алтын биҙәк киң һарай
Ерҙә ҡоро ҡалмаһын,
Ҡырҡ ҡыҙыңдың ҡанаты —
Ер йөҙөнөң һанаты
Алтын эйәр, Буҙ юрға
Буҙҙай-буҙҙай ҡалмаһын!
Алтын яҡа, хуш туннар
Һис кемгә насип булмаһын!

Ҡәмән дә был ваҡытта шунда була. Хәҙер ул назым әйтә:

— Күргән төшөң алдыңда,
Ҡәрең ҡалған артыңда.
Тау башынан осҡанда,
Ҡуныр ерең юҡ инде,
Был донъяла меҫкен булып,
Торор ерең юҡ инде.
Әлбиҙәк, әлбиҙәк*, хуш бул,
Миһырбаным, әлбиҙәк, хуш бул!

Шунан Сәхипъямал бысаҡ ала ла, йүгереп инеп китеп, алтын һарай эсендә үҙен үҙе үлтерә. Ҡыҙ үлгәс, Ҡәмән дә үлергә була. Ләкин ул үлмәй, сөнки ул Буҙйегеттең әйткән хәбәрҙәрен ҡайтып әйтергә тейеш була.

Ҡәмән ҡырҡ көнлөк юлды ике көндә ҡайтып етә.

Ҡәмән атаһына ҡайтып әйтә:

— Буҙйегет үлде, мин дә үләйем тигәйнем, үлмәнем. Уның атаһына ни тип хәбәр итәйем? — Шулай тип кәнәш һораған. Атаһы:

— Береһенә лә бер нәмә лә әйтмә, арыған кеше булып ят та ҡуй. Үҙебеҙ хәл итербеҙ, — ти. Бәктәр, хандар, вәзирҙәр ҙә шулай кәңәш итәләр һәм Ғабдулла солтанға (Буҙйегеттең атаһына) былай тип әйтәләр. Ҡәмәндең атаһы:

— Ғабдулла солтан, мәрхәбә! Һинең улың иртәгә туй менән ҡайта икән. Бер шәһәрҙә Сәхипъямал атлы ҡыҙ бар икән. Шуны үҙе менән бергә алып ҡайта икән, ә минең улымды хәбәр итергә алданыраҡ ҡайтарған икән, — ти.

Был хәбәрҙе ишеткәс, Ғабдулла солтан табын әҙерләргә ҡуша. Бер өҫтәлгә тик аш-һыу, икенсеһенә — музыка ҡоралдары, өсөнсөһөнә — бал ҡуйғандар. Шул саҡ бер ҡарт йырлай:

— Ғибрәт алың, егеттәр!
Был донъяла файҙа юҡ:
Ҡыҙыл йөҙөңә ҡыуанһаң,
Һулып ҡалыр көн булыр;
Ҡорт-ҡырмыҫҡа һырып алып,
Тетеп һалыр көн булыр;
Балам бар, тип маҡтанма,
Баланан ҡалыр көн булыр;
Янған тамуҡ өҫтөнән,
Зыяраттан үтәр көн булыр;
Яҡшы күргән балаңды
Күңелгә алмаҫ көн булыр;
Малым бар, тип маҡтанма,
Маллы һинән күп булыр;
Алтын тәхеткә ултырып,
Алтын һарай эстәрен
Көмөш менән буятып,
Йәшәгән көн ҡалыр бер —
Әжәлең килеп алыр бер.
Малдан зәкәт бирмәгән* —
Үлерен дә белмәгән
Ҡарун* да үткән донъянан.
Балам бар, тип, маҡтанма,
Биш йөҙ бала атаһы
Хәҙрәт булған бәйғәмбәр —
Алар ҙа үткән донъянан.
Дауыт* улы Сөләймән*
Донъяға баш булған ул,
Был донъяның эсендә
Яңғыҙ батша булған ул.
Шоңҡар булып осҡан ул,
Мең ҡатынын ҡосҡан ул,
Хоҙай тәғәлә юл биргән.
Бер бот, бер ҡул, бер күҙе юҡ
Аңа яңғыҙ ул биргән.
Бала өсөн зар булып,
Сөләймән дә үткән донъянан.

Елгән аттан ел ҡалыр,
Тапҡан ирҙән мал ҡалыр,
Ҡатын булһа, тол ҡалыр,
Эттәй шаулап, талашып,
Бай булһа ла, кем дә алыр...

Шулай тип йырлағас, батша уйлай: «Был бабай бер ҙә шатлыҡ тураһында йырламай. Ахырыһы, улыбыҙ үлгәндер», — тип. Шунан илаша башлағандар, ти. Шунан бабай быларҙы йыуатып, өгөтләп йырлай:

— Балаңа, хан, илама,
Ҡала торған хәл бар, — ти.

Батша (хан) ҡатыны халыҡтан рөхсәт һорай һәм назым әйтә:

— Эй, бәгеремдең пәрәһе,
Ике күҙемдең ҡараһы,
Янып һөйгән, йән балам.
Һөймәй ҡалдым йөҙөңдө,
Йыраҡ ергә киткәндә,
Әйтмәй киттең һүҙеңде.
Күрмәй ҡалдым, йән балам,
Һөймәй ҡалдым үҙеңде.
Буталы дөйә буҙҙаһа,
Иҫкә шунда төшөрһөң,
Дөйә килеп бутаһын сисһә,
Иҫкә шунда төшөрһөң,
Ҡуйлар килеп иңрәһә,
Иҫкә шунда төшөрһөң,
Һыйыр килеп мөңрәһә,
Иҫкә шунда төшөрһөң.
Ҡарап ул өйҙән тапмаһам
Һине ҡайҙан табармын?
Кемде һин тип һөйөрмөн,
Һинән башҡа, йән балам?
Үҙең яңғыҙ, бер инең,
Минең һөйгән йән инең,
Буҙйегетем, тигәндә,
Анам әйткән, тир инең.
Алдым асыҡ — балам юҡ,
Артымда һис балам юҡ,
Күҙ алдымда бар булһан,
Күрмәҫ тә инем, ҡолоном,
Үлгән дә ерҙә бар булһам,
Үлмәҫ тә инем, ҡолоном.
Бына хәсрәт, ярандар,
Бына ҡайғы, ярандар,
Күңелем минең тыңлайҙыр.
Яңғыҙымдың кәберен күрмәй,
Күңелем минең тынмаҫтыр.

Халыҡтар уға яуап итеп:

— Күрһәтербеҙ, — тинеләр, ти.

Юллыҡ аҙыҡ, 5000 ғәскәр алып сәфәр киттеләр, ти. Ҡырҡ көнлөк юлдың утыҙ көнөн үткәс, Буҙйегетте үлтерткән батша уларға ҡаршы ҡылыс тотоп килә, ти:

— Эй, Ғабдулла солтан, беҙ хата эшләнек. Ҡәрәк булһа, минә башымды өҙә сап, — тигән. Ғабдулла солтан:

— Юҡ, беҙ һуғышырға килмәнек. Беҙ улыбыҙҙың ҡәберен күрергә килдек. Әгәр яман булһа, алып ҡайтабыҙ, яҡшы булһа, ҡалыр. Шунан былар ҙы ҡәбер һарайына алып китәләр. Инәһе ҡәбер һарайын күргәс, аттан тәгәрәп төштө, ти, һарайҙың матурлығына хайран ҡалып. Һарай эргәһенә килеп, һарайҙы ҡосаҡлап назым әйтә:

— Эй, йән балам, йән балам,
Йәндән татлы, йән балам,
Күрмәймүсән, йән балам,
Белмәймүсән, йән балам,
Анаң килгән күргәйен,
Йылай, иңрәй тора ул,
Бутаһы юҡ дөйәләй,
Буҙҙай килдем, йән балам,
Ҡырыҡ көнлөк юлдарҙан
Эҙләй килдем, йән балам,
Моңлай килгән анаңдың
Йөҙөн күрсе, йән балам.
Хәлемде бер генә һораһана,
Йәндән татлы, йән балам...

Шулай йырлап бөткәс, һарай ишеге асылып китте, ти, кереп киттеләр, ти. Баҫҡыстан төшөп ҡараһалар: ҡәбер янып тора, тирәһендә ҡоштар һайрай, сылтырап шишмә ағып ята, айырым кешеләр ҡарауыллайҙар, ти. Ғабдулла солтан һәм уның ҡатыны һарайҙан бик риза булып сығалар. Ҡорбан салып, ун көн тороп китәләр.

Хәҙер унда алтмыш ҡәбер бар, ти. Ҡырҡ ҡыҙ ҙа, сабыусылар ҙа, тоттороусылар за, ҡарсыҡ та үлгән, ти. Уларҙы ла шунда күмгәндәр, ти.

Былар, ҡайтҡанда, мындағы батшаны ҡунаҡҡа саҡыралар. Ләкин ул риза булмай, сөнки ул уның улын үлтергәс, уңа ҡунаҡҡа барһа, был гонаһ булыр, ти.

Шулай, Ғабдулла солтандар ҡайтып китәләр. Уларҙы оҙатҡас, Ҡәмән кире килеп, һарайға кереп үлә.

Шулай итеп, өсөһө лә бер ҡәберҙә ятып ҡалдылар, ти. Буҙйегеттең атаһы, ҡайтҡас, батшалыҡты алмай, бер ҡарауылсы ҡарт булып йөрөп, үлеп китте, ти. Әсәһе лә шулай үлеп китте, ти.





Был — Зөләйха, мәликзадә, Таймус ҡыҙы,
Тулған айҙай балҡып тора уның йөҙө,
Ожмахтағы хур ҡыҙына оҡшар имде.

*(«Ҡиссаи Йософ»)*



Йософ уға ҡамсыһын урап тотторҙо,
Ҡатын ҡамсыға бер өрөп кире бирҙе,
Ҡамсыға ут тоҡанмышын Йософ күрҙе,
Уты Йософтоң ҡулын көйҙөрөр имде.

*(«Ҡиссаи Йософ»)*



Битендә[ге] ҡыл пәрҙәһен һуйып алды,
Ялангас муйынына ҡылыс һалды.
Башында алтын айҙар толомо бар,
Күргән әҙәм быларҙы танға ҡалды.

*(«Әл-ҡисса Бүҙйегет»)*



Әл-кисса, Ҡарасәс һылыу бер шаһзадәнең ҡыҙы ине... Ун биш йәшендә Буҙйегетте төшөндә күрҙе, ғашиҡ булды.

*(«Әл-кисса Буҙйегет»)*



Былар шулай бер-береһенә ғишыҡ тотоп йөрөгәндә хандың ҡоло Ҡара Ғәрәп күреп ҡала ла барып ошаҡлай. Хандың бойороғо менән Таһирҙы тотоп алалар ҙа, һандыҡҡа һалып, Шат йылғаһына ағыҙып ебәрәләр.

*(«Таһир менән Зөһрә»)*



Гөл батшаның ҡыҙҙары һыу буйына уйынға сыҡҡандар икән, һандыҡты күреп ҡалалар ҙа, туктатып, ярга сығаралар. Асып караһалар — эсендә бик матур егет ята...

*(«Таһир менән Зөһрә»)*



Батша... бик күп караптар яһатып, өс йөҙләп кеше менән улын сығарып ебәрә. Бик ҙур карапка ултырып, Сәйфелмөлөк менән Сәғит алдан китә. Күп диңгеҙҙәр үтәләр, күп ерҙәрҙә йөрөйҙәр...

*(«Сәйфелмөлөк»)*



Бара торғас, быларға маймылдар осрай. Маймылдар икеһен дә тоталар... Шул тиклем йәмһеҙ: баштары — эт, аяҡтары әҙәм быларҙың...

*(«Сәйфелмөлөк»)*

## 3. БУЗИКЕТ

*(Биишева Бүләкбикә варианты)*

Борон-борон заманда, Мөләтийә тигән шәһәрҙә Таһылмас тигән хан йәшәгән. Таһылмас хандың Сәхипъямал тигән ҡыҙы булған. Сәхипъямал атаһының һарайында ҡырҡ ҡыҙ менән йөрөгән. Ҡырҡ ҡыҙ Сәхипъямалды ҡарап йөрөткән.

Икенсе бер илдә Бәғдәт шәһәрендә Абдулла тигән хан йәшәгән. Абдулла хандың Бузикет исемле улы була.

Абдулла ханға хеҙмәт итеүсе вәзир булған, ә ошо вәзирҙең Бузикет менән бер көндә, бер сәғәттә тыуған Гуман исемле улы була. Шуның өсөн Абдулла хан үҙ улы Бузикет менән Гуманды дуҫ булыштыра. Иҫ белгәндән алып, Гуман менән Бузикет бергә уйнап, бергә үҫәләр. Улар икеһе лә мыҡты кәүҙәле, төҫкә матур, батыр булып үҫәләр. Бузикет, ун биш йәштәргә еткәс, бер төш күрә. Төшөндә уға бер ҡыҙ күренә. Ҡыҙ аңлашылмаған һүҙҙәр әйтеп юғала. Бузикет уянғас, ҡыҙҙың матурлығына һоҡланып, күргән төшөн уйлап ултырғанда, Гуман килеп инә. Гуман: «Ни эшләп уйланып ултыраһың? Нимә тураһында?» — тип һорай, ләкин Бузикет әйтмәй.

Бер нисә ай үткәс, ошо төш Бузикеткә ҡабат күренә. Быныһында инде ҡыҙ Бузикеткә көйләп шиғыр әйтә:

— Былтыр килдең ҡаршыма,
Быйыл килдең ҡаршыма.
Ҡиләм тигән вәғәҙәң
Һинең булды ялғандай,
Бүтән йәрҙе алғандай.

Бузикет ҡыҙға ҡаршы бер һүҙ ҙә әйтә алмай. Уянғас, ҡыҙҙың әйткән һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп, ҡыҙ тураһында уйлай башлай. Көндән-көн Бузикет һарғая башлай. Гуман, быны күреп, дуҫынан ҡабат һорай. Бузикет, булдыра алмағас, дуҫына ни күргәнен һөйләп бирә һәм бер кемгә лә әйтмәҫкә ҡуша. Гуман: «Төштә күргәнгә ҡайғырма», — тип йыуатһа ла, Бузикет ҡарамай. Булдыра алмағас, Гуман уға: «Инде күрһәң, һин унан ҡайҙа торғанын һора. Бәлки, эҙләп табырбыҙ», — тип дуҫын йыуата. Шулай итеп, Бузикет был төштө тағы ла күрә. Ҡыҙ әлеге йырын тағы Бузикеткә әйтә:

— Былтыр килдең ҡаршыма,
Быйыл килдең ҡаршыма.
Ҡиләм тигән вәғәҙәң
Һинең булды ялғандай,
Бүтән йәрҙе алғандай.

Бузикет ҡыҙға ҡаршы ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

— Барыбер ваҡыт булған юҡ,
Яусы көнө тулған юҡ.
Таһир менән Зөһрәләй,

Сабыр ҡылһаң кирәктәй,
Былтыр килдең ҡаршыма,
Быйыл килдең ҡаршыма.
Күп ҡайғыға һалдың һин,
Бында ғәйеп булдың һин.
Эҙләй барһаң, илеңдә әйт:
Ҡайҙа илең, табырмын
Мин — алтындай тирәктәй,
Гәүһәр булһам, кирәктәй.

Бузикеттең был һүҙҙәренән һуң Сәхипъямал уға, ниндәй илдә икәнен әйтмәһә лә, «Эҙләп сыҡһаң, табырһың» тигән ышаныслы һүҙ әйтә.

Бузикет уянғас, дуҫына ни күргәнен һөйләп бирә һәм дуҫынан ризалыҡ алып, икәү бергә юлға сығырға әҙерләнәләр. Был турала ул атаһына бер һүҙ ҙә әйтмәй. Бузикет менән Гуман, Абдулла хандан йәшереп, ҡырҡ дөйә менән әйберҙәр алып, юлға сығып китә.

Бер аҙ юлды үткәс, Бузикет менән Гуманды мәймүн халыҡтары тотоп алып, бикләп ҡуя. Улар кеше ашаған булалар. Шуның өсөн Гуман менән Бузикетте, һимертеп һуйырға, яҡшы ашаталар.

Мәймүн халҡының башлығының ҡыҙы була, ул ҡыҙ тотолған бер кешене ҡарап торған үҙенә кейәүлеккә. Был ҡыҙҙың күҙе Бузикеткә төшә, шуның өсөн дә уларҙы һуймай торалар. Мәймүн халыҡтары тас йөн тәнле, йәмһеҙ була. Бузикет үҙе һөйгән ҡыҙҙы онота алмай, мәймүн ҡыҙына ҡарамай.

Бер ай торғас, улар мәймүндәр ҡулынан ҡасып китәләр. Уларҙың ҡасыуы юҡҡа сыға: ҡабат тотолалар. Бынан һуң улар өс ай биклә торалар.

Бузикет менән Гуман тағы ҡасалар. Диңгеҙгә килеп, кәмә яһап, һыуҙан китәләр. Уларҙың ҡаршыһына карап килә. Ҡарап яҡынлашҡас, Гуман менән Бузикет ҡайғырып илаша башлайҙар. Улар: «Инде тотһалар, ҡотолоу юҡ», — тип уйлайҙар. Ә был карап Бузикеттең атаһының карабы була. Улар (ундағы кешеләр) Бузикет менән Гуманды кире әйләнеп ҡайтырға өгөтләйҙәр, ләкин булдыра алмайҙар. Булдыра алмағас, уларға кейем, аҙыҡ биреп, оҙон юлға оҙаталар.

Бара торғас, Бузикет менән Гуман Сәхипъямал торған шәһәргә барып етәләр. Шәһәрханда йәшәгән бер әбейгә квартираға инәләр һәм ошо ҡаланан Сәхипъямал торған һарайҙы эҙләйҙәр. Бузикет менән Гуман ошо ҡала эсенән ҡыҙҙың торған ерен бер ай эҙләйҙәр, таба алмайҙар. Берҙән-бер көн ҡала эсенән эҙләй торғас, арыйҙар һәм бер өйҙөң янында хәл алып ултырһалар, өйҙән бер йыр ишетәләр. Был йыр Сәхипъямалдың йыры. Ул иптәштәренә үҙенең көйләп, йырлап төшөн һөйләп торған булған:

— Икәү ҡош булып осҡайныҡ —
Көндөң ҡояшын ҡапланыҡ;
Өсәү булып осҡайныҡ —
Ҡуңырға ер тапманыҡ.

Дуҫтым артымдан ҡала тип,
Хуш тунымды һаҡланым.

Сәхипъямал: «Бузикет килде!» — тип һөйөнсө алған кешегә, үҙенең алтын яғалы хуш тунын һаҡлап торған булған. Был йырҙы ишеткәс, Бузикет быға ҡаршы ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

— Мине унда яратты,
Һине бында яратты.
Тиҙ табырмын ҡайҙандыр
[Арала даръя яратты],
Алты даръя һыуынан,
Юлда йөрөнөм һыу тапмай,
Һыуҙа йөрөнөм юл тапмай,
Аяҡтарым уйылып,
Ҡул тирҙәрем* һуйылып.
Һине күрер көн булһа,
Ни булһа ла, булырмын.
Минең атым — Бузикет,
Ҡаршымда бар дуҫ егет.
Һин хәҡиҡәт йәр булһаң,
Беҙҙе өйгә индерһәң...

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Сәхипъямал Бузикет икәнен таный һәм өйөнә индерәләр ҙә, ҡырҡ ҡыҙ ике егет менән шатланышып үҙ-ара туй яһайҙар. Ҡыҙҙар егетте индергәндә вәзир күреп ҡалып, Сәхипъямалдың атаһына был турала хәбәр ебәрә. Таһылмас хандың ҡыҙын бирергә үҙе күҙләп йөрөгән Зәйтүн тигән егете була. Шуның өсөн, был хәбәрҙе ишеткәс, бик асыулана. Бузикет менән Гуманды һарайҙарынан ҡыуып сығарырға ҡуша. Бузикет менән Гуманды ҡыуып сығарғас, Таһылмас хан ҡыҙын йыуатырға килә һәм ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

— Боҙма, бала, уйымды,
Хандарҙан хат киләләр,
Тутыйҡоштай егеттәр
Һине алам тип йөрөйҙәр.
Саҡырып алыр торғоҙоп,
Йөҙөн һинә күрһәтеп,
Һөйгәненә бирермен.

Сәхипъямал атаһына ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

— Һыртын алтын ҡылһаң да —
Эсен гәүһәр ҡылһаң да,
Бузикеттәй булмаҫтай.
Ҡанаттарын киҫһәң дә,
Шоңҡар ҡарға булмаҫтай —
Зәйтүн кейәү булмаҫтай.
Бузикеттең бүлмәһен

Алтын өйгә бирмәмен.
Бузикеттең һөйәген
Мең Зәйтүнгә бирмәмен.
Балаң күңле ҡалғандыр
Алдаһаң да, булмаҫтай,
Хур егетен килтерһәң дә,
Балаң күңеле булмаҫтай.

Таһылмас хан ҡыҙының риза булмағанын белеп, уны былай тип алдай:

— Ярай, мин риза, бирәм: [Бузикетың менән] туй яһайбыҙ, — тип ҡыҙын йыуатҡан була. Ә үҙе эстән туй ваҡытында кешеләр менән бер яҡлы булып, Бузикетте эсереп, иҫертеп, һуйырға була.

Бына көткән көн килеп етә. Бөтә кеше туй күрергә Таһылмас хандың һарайына йыйыла. Туйҙы үткәреү өсөн, ир-егетте бер ергә, ҡатын-ҡыҙҙы икенсе ергә ултырталар. Йыйылышҡан ерҙә Бузикет менән Гуман да була.

Таһылмас хан үҙ кешеләрен йыйып, туй ваҡытында Бузикетте иҫертеп үлтерергә ҡуша.

Туй башлана. Шул ваҡытта Таһылмас хан, кейәүен һыйлаған булып, эсереп иҫертә лә, кешеләренә үлтерергә ҡуша. Бузикет ҡырҡ ерҙән яралана, ләкин үлмәй. Ни өсөн тигәндә, Бузикет Йосоп пәйғәмбәрҙең доғаһын укып йөрөгән булған, шуға күрә уны бер ниндәй ҙә ҡылыс-бысаҡ менән үлтереп булмаған. Унын үҙенең етегә бөкләнгән ҡылысы булған, ә ул аяғына кейгән итегенең олтораҡ аҫтында һаҡланған булған, ти. Бузикет хәлһеҙләнеп иҙәнгә йығыла, ә шунда булған кешеләр, Бузикет үлде тип, рәхәтләнеп, көлөшөп, ашарға ултыра. Шул ваҡытта бер егет Бузикет тураһында хәбәр итергә ҡыҙҙар янына китә. Барып ингәс тә, Сәхипъямал уны күреп ҡала ла былай тип һүҙ башлай:

— Һыйыр килеп мөңрәһә,
Быҙауы уның бармы икән?
Бузлы күҙле Бузикет,
Был уйында бармы икән?
Ҡуйҙар килеп ҡуйлаһа,
Ҡуҙыһы уның бармы икән?
Ҡуҙлы күҙле Бузикет,
Был уйында бармы икән?
Дөйә килеп буҙлаһа,
Бутаһы уның бармы икән?
Бута күҙле Бузикет,
Был уйында бармы икән?
Былбыл ҡоштар һайраһа,
Ҡыҙыл гөлдәр бармы икән?
Ҡыҙыл гөлдәй Бузикет,
Был уйында бармы икән?

Егет Сәхипъямалдың был һүҙҙәрен ишеткәс, былай тип яуап бирә:

— Һыйыр килеп мөңрәһә,
Быҙауы уның юҡ сыҒыр.
Бузлы күҙле Бузикет
Был уйында юҡ сыҒыр.
Ҡуйҙар килеп ҡуйлаһа,
Ҡуҙыһы уның юҡ сыҒыр;
Ҡуҙый күҙле Бузикет
Был уйында юҡ сыҒыр.
Дөйә килеп бузлаһа,
Бутаһы уның юҡ сыҒыр.
Бута күҙле Бузикет
Был уйында юҡ сыҒыр.
Былбыл ҡоштар һайраһа,
Ҡыҙыл гөлдәр юҡ сыҒыр.
Ҡыҙыл гөлдәй Бузикет,
Был уйында юҡ сыҒыр.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Сәхипъямал еләненең бер еңен кейә, икенсеһен кеймәйенсә, йүгерә-атлап, кешеләр йыйылып ултырҒан мәжлескә килеп инә һәм иҙәндә ятҡан Бузикетте күрә лә атаһына былай тип өндәшә:

— Белдем, атай, уйыңды,
Уйың һинең шул икән:
Бузикетте үлтереп,
Буҙҙай тунды килтереп,
Майҙан, аяк йыйҙырып*,
Һиндәй яман уй ҡылҒан.
Ниндәй яҡшы көндәрҙә,
Ҡеше һуйып туй ҡылҒан.
Ишетмәнем, белмәнем,
Бындай яман уй ҡылҒан.

Атаһына ошо һүҙҙәрҙе әйткәс, бер стакан һыу алып, Бузикеттең битенә бөркә һәм былай ти:

— Әй, Бузикет, күҙеңде ас,
Һикереп тороп, ишек ас.
Алла ҡушҡан йәреңде,
Ҡылыс сапмаҫ муйыныңды
[Был мәшхәрҙән алып ҡас].
Әй, Бузикет, Бузикет,
Ҡүп эсендә аҙ егет,
Йән сыҒырҒа еткәндәй,
Аҡылың юҡмы, егет?
Шайтан керһә ҡуйыныңа,
Ҡылыс етәр муйыныңа.

Сәхипъямал өс тапҡыр һыу бөрккәс, Бузикет тороп тышҡа сыға. Гуман Бузикеттең атын әҙерләп ҡуйған булған. Ул атҡа атлана ла ҡаса. Зәйтүн (Таһылмас хандың үҙе күҙләп йөрөгән кейәүе) үҙе менән йөҙ кеше алып, Бузикетте үлтерергә артынан сыға. Уларҙың әҙерләп ҡуйған аттарының өҙәнгеләренең бауын Гуман өҙөп ҡуйған икән. Шуның өсөн, аттарын ҡарап, ҡыуған Бузикеттән артта ҡала.

Зәйтүн үҙ кешеләре менән Бузикеттең артынан ҡыуып етеп килгәндә, Бузикет уларҙы күреп ергә уҡ ата. Уның атҡан уғының яртыһы ергә инә. Был уҡты ул, дошмандарға үҙенең көсөн күрһәтер өсөн, атҡан булған. Бузикеттең уҡ атҡанын күреп, Зәйтүн дә, үҙенең көсөн һынап, уғын атһа, уның да уғының яртыһы ергә инә. Зәйтүн быны күреп: «Икебеҙҙең дә көсөбөҙ бер — минең йөҙ кешем артыҡ, уны үлтерә алабыҙ», — тип шатланып ҡыуып барғанда, Бузикет икенсе тапҡыр уғын атып ебәрә. Был саҡ уның уғы бөтөнләйгә ергә инеп китә. Зәйтүн дә, быны күреп, уғын ата. Атһа — уғы яртыһынан уҙмай. Шул саҡ ул, кешеләрен туҡтатып, былай ти: «Минең көсөм Бузикеттең көсөнән ҡайтыш. Шулай булғас, беҙ уны үлтерә алмайбыҙ. Ҡире ҡайтып, ҡыуып етә алманыҡ тип әйтәйек», — ти. Кешеләре риза булып, кире ҡайтып китәләр.

Бузикет хәлһеҙләнеп барып йығыла. Бер аҙҙан һуң күҙен асһа, бик матур йәшеллек, ағаслыҡта, емештәр араһында ятҡанын күрә. Торайым тиһә, тәндәре һыҙлай — тора алмай. Бузикет ете көн, ете төн ята. Һигеҙенсе көн торһа, ул тәнендә ҡырҡ яра булғанын һиҙә. Был яраны нисегерәк бөтөрөргә белмәй уйланып ултырған Бузикет алдынан йүгереп үтеп барған сысҡанды күреп ҡала ла, тотоп алып, ул ни эшләр икән тип, ҡырҡ ерҙән яралай ҙа, нисек төҙәлер икән тип, аяғынан еп бәйләп ҡарап тора. Ҡырҡ ерҙән яраланған сысҡан, ерҙән ҡара тупраҡ ҡаҙып алып, уға ятып аунаҡлай ҙа, койолған имән япраҡтарын йыйып алып, өҫтөнә яба ла ете көн, ете төн ята. Һигеҙенсе көн сысҡан, ырғып тороп, яраланған урынын ялай ҙа, бауҙы өҙөп, үҙ юлына китә. Быны ҡарап ултырған Бузикет, ерҙең ҡара тупрағын сығарып яраһына һала ла имән япраҡтарын өҫтөнә яба. Шунан һуң сысҡан кеүек ете көн, ете төн ятҡандан һуң, Бузикет үҙенең тәнендә һыҙлауы баҫылғанын һиҙә лә тороп ҡарай һәм йөрөй башлай. Бузикет үҙенең ҡайҙа килеп сыҡҡанын да белмәй, ҡаланан китеп иптәштәрен юғалтып, ҡайғыра һәм ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

— Ҡарлуғас ҡарлуғасҡа ем бирәлер.
Минең былай йөрөгәнде кем беләлер?
Зарланһам да, белмәйҙер атайым,
Зарланһам да, белмәйҙер әсәйем,
Ҡотолмаҫ илгә осраны ғәрип башым.
Юҡ булды ҡаршымдағы дуҫ-юлдашым.

Бузикет яраһын төҙәтеп, үҙ иптәшен эҙләп, юлға сыға. Ҡала ситендә көтөп йөрөгән Гуман ат менән килгән кешене күреп, уға ҡаршы бара: ул Бузикет булып сыға. Бер-береһен күрмәй бер нисә ай торғанлыҡтан, бер-береһен танығас, ике дуҫ ҡосаҡлашып, бер-береһе менән иҫәнләшеп, бер аҙ һөйләшкәндән һуң, ҡала ситендә

Гуман әҙерләп ҡуйған фатирға баралар. Унда бер әбей генә йәшәгән булған. Бузикетте Таһылмас хандан йәшереп, шул өйҙә булған ҙур һандыҡҡа һалып ҡуялар.

Ҡис булғас, Гуман Сәхипъямалға хәбәр ебәрә. Ҡыуаныслы хәбәрҙе ишеткән Сәхипъямал шунда уҡ килеп етә. Бузикет менән Сәхипъямал йәшерен рәүештә бер нисә көн һөйләшкәндән һуң, Бузикеттең иленә китергә әҙерләнәләр. Берҙән-бер көн Сәхипъямалдың өйҙән сығып киткәнен вәзир, күреп ҡалып, атаһына уны барып әйтә. Таһылмас ебәргән шымсылар Сәхипъямалдың артынан ҡарап барып, уны ҡайһы өйгә инеп киткәнен күрәләр ҙә, тәҙрәнән ҡарап, Бузикеттең бында икәнен беләләр. Икенсе көнөнә көндөҙ әбейҙе Таһылмас хан үҙенең янына саҡырта. Әбей килгәс, хан ҡыҙының ни өсөн барып йөрөгәнен һораһа — әбей әйтмәй ҙә ҡуя. Таһылмас: «Әйт, үҙемдең ярты байлығымды, ни һораһаң, шуны бирәм», — тигәс кенә, әбей әйтә. Шул ваҡыт хан әбейгә иҫ китерә торған дарыу биреп, Бузикеткә еҫкәтергә ҡуша. Бузикет, кеше күрмәһен өсөн, ҙур һандыҡта йоҙаҡлы ятҡан булған. Ә Таһылмас, әбейгә шул һандыҡ ярығынан ғына еҫте ебәреп, Бузикеттең иҫен китәреп ҡуйырға ҡуша. Ҡис уны һандығы менән өйҙән алып сығып, үлтермәксе булалар. Әбей:

— Гуман менән Сәхипъямал һораһа, ни әйтәйем? — тигәс, Таһылмас:

— «Мин өйҙә юҡта алып киткәндәр», тип яуап бир, — тигән.

Шулай итеп, һүҙҙе нығытып, хан кешеләре үҙ юлдарында булалар. Әбей өйгә ҡайтып, Таһылмас биргән дарыуҙы һандыҡ ярығы аша Бузикеткә еҫкәтеп, иҫен китәрә. Ҡараңғы төшөү менән Бузикетте килеп алып китәләр. Көн дә йыйылып ултырған иптәштәре менән Сәхипъямал килеп ингәс тә, һандыҡтың юҡлығын күреп, әбейгә ташлана. Әбей үҙен аҡлар өсөн:

— Мин белмәнем, мин юҡта алып киткәндәр, — тиһә лә, Сәхипъямал уға ышанмай. Уны зинданға бикләп ҡуя:

— Мин һине, Бузикет табылмайынса, зиндандан сығармайым, — ти.

Бынан һуң Гуман, Сәхипъямал һәм уның ҡырҡ иптәше ҡала буйлап Бузикетте эҙләп сығып китәләр.

Бузикетте бер урманға алып барып, һандыҡтан сығарып, үҙҙәренең ҡылысы менән сабалар. Ул ҡылыс Бузикетте үлтермәй, яралай ғына. Йәне ҡыйналған егет хәле бөтөп ергә йығыла һәм үҙенең итек олтороғы аҫтында етегә бөкләнгән ҡылысы барлығын әйтә: «Бына шул ҡылыс менән генә муйынға сапһағыҙ, мин үлермен», — ти. Шунан һуң Зәйтүн, Бузикеттең олтораҡ аҫтынан етегә бөкләнгән ҡылысын алып, башын өҙгәнсе саба. Башы өҙөлгән, ҡанға буялған Бузикеттең кәүҙәһе шул ерҙә ятып ҡала. Зәйтүн кешеләре менән ҡайтып китә. Өйҙән йәндәй күргән дуҫын эҙләп сыҡҡан Гуман менән Сәхипъямал үҙ иптәштәре менән ағас араһында ятҡан Бузикеттең кәүҙәһен табып алалар. Бузикеттең кәүҙәһен күргән Сәхипъямал ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

— Ҡанға болғап башыңды,
Ҡомға болғап сәсеңде,

Ерҙә ятыр ирме һин?
[Ир тигәс тә ир инең.]

Шунан абайлап ҡарай ҙа, һүҙен дауам итә:

— Башы юҡ кәүҙәһенең
Йән киткәнгә оҡшайҙыр...
Алтын яға, хуш тундар,
Һине кейер кеше юҡ;
Алтын эйәр буҙ юрға,
Һине менәр кеше юҡ;
Алтын биҙәк киң һарай,
Һиңә инәр кеше юҡ;
Атама әйтең һүҙемде:
Хәсрәт алды үҙемде.
Атам мине күп күрҙе,*
Бузикетем үлтерҙе.
[Инәмә әйтең һүҙемде:
Хәсрәт алды йөҙөмдө.]
Айҙан улан тыуҙырып,
Көндән ҡыҙҙы тыуҙырып,
Һөйгәненә бирһен ул.*
Донъя атама киң ҡалыр
[Кейәү үҙенә тиң табыр,
Минән тороп ҡалған һуң,]
Үле хәбәрем алған ул.

Был һүҙҙәрҙе тыңлап торған ҡыҙҙар, Сәхипъямалды йыуатыр өсөн, ошо һүҙҙәрҙе әйтәләр:

— Ҡайт, иптәш, ҡайт өйөңә
Бер аҙ ғына йәшә һине,
Алтын биҙәк киң һарай
Ерҙә ҡоро ҡалмаһын*.
Ҡайт, иптәш, ҡайт өйөңә
Күп ҡыҙҙарҙы илатма!

Бузикеттең үлгән хәбәрен ишетеп сыҡҡан Таһылмас, илап торған ҡыҙын күреп, йыуатыр өсөн, ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

— Алтын биҙәк киң һарай,
Ҡыҙым, һиңә бирермен.
Алтын эйәр, буҙ юрға,
Ҡыҙым, һиңә бирермен.
Алтмыш йөккә йөк артып
Ҡырҡ кәнизәк* бирермен.

Сәхипъямал атаһына ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

— Балаң күңеле ҡалғандыр,
Алдаһаң да, булмаҫтай.

Йөрәгем таш булғандыр,
Һыуға һалһаң да, булмаҫтай.
Алтын эйәр буҙ юрға
Инде миңә кәрәкмәй,
Алтмыш йөк, ҡырҡ кәнизәк
Көнө хәҙер үткәндер.
Булырын быныҡ белмәнем,
Булырын быныҡ белгәндә,
Ҡафыр ҡарар ҡортканы
Ҡылыс менән орманым.

Сәхипъямал Бузикеттең башын алып, кәүҙәһенә ҡушып, һалып куя һәм ул ятҡан ергә ҙур итеп һарай һалдыра. Бузикеттең кәүҙәһен быяла ситлек менән ураттыра һәм баш осондағы ташына был егет ни өсөн үлгәнен яҙҙыра. Сәхипъямал Бузикеткә һарай һалдырғанда, атаһының бер әйберенә лә теймәй, үҙ әйберҙәрен һатып, үҙенең йыйған аҡсаһына үҙ көсө менән төҙөй.

Был һарайҙың ишеге үҙе асылып, үҙе ябылған була. Һарай төҙөлөп бөткәс, Бузикетте күрергә бөтә ҡала халҡы килгән һәм улар, шундай матур, батыр егеттең бер ҙә ваҡытһыҙ үлеп ҡалыуына үкенеп, уны йәлләп, илап сыҡкан булғандар, ти.

Сәхипъямал зинданға бикләп ҡуйған әбейҙе сығара һәм уға: «Мин йәремде үлгәс таптым. Ул үлгәс, мин дә йәшәмәйем, шуның өсөн һиңә теймәйем. Йәшә, ләкин ғүмерең, минең ғүмерем кеүек, зарланып үтһен», — ти ҙә әбейҙе ебәрә.

Сәхипъямал Бузикеткә төҙөлгән һарай эсенә инә лә, Бузикеттең кәбере янына барып, уға оҙаҡ ҡарап тора. Шунан һуң ҡылыс алып, үҙен үҙе үлтерә. Сәхипъямалдың ҡырҡ иптәше шунда уҡ килеп етә. Иптәшенең үлгәнен күреп, илашалар һәм уны Бузикет янына һалалар. Иптәштәре лә үҙ-үҙҙәрен үлтереп, ошо һарай эсендә ятып ҡалалар. Гуман, дуҫының хәбәрҙәрен әйтер өсөн, иленә ҡайтырға әҙерләнә һәм, Бузикет ҡәбере янына килеп, ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

— Мин ҡайтырға уйланым
Һинән хәбәр илтергә.
Анаң сыҡһа алдыма,
Ни тип яуап бирермен?
Ханым сыҡһа ҡаршыма,
Ни күҙ менән күрермен,
Ни тип яуап бирермен?

Гуман ҡайтып китә. Әллә нисә йылдар күрмәгән әсәһе, Гуманды күреү менән, ҡосаҡлап ала. Гуман ҡайтканды күреп, Абдулла ханға хәбәр ебәрәләр. Гуман әсәләренә ни булғанын һөйләп биргәс, Абдулла ханға ни тип әйтергә лә белмәйҙәр. Шул ваҡыт атаһы Гуманды ошо шәһәрҙә торған ҡари муллаға ебәрә. Гуман ҡари муллаға һөйләгәс, ул былай ти: «Һин барып һөйөнсө ал». «Бузикет йәмәғәте менән ҡайтып килә. Мине алдан һөйөнсө алырға ебәрҙе», тип әйт, — ти. — Шунан һуң ул үҙенең һарайына бөтә булған ке-

шеләрҙе саҡырыр. Мин шунда үҙем һүҙ башлармын». Гуман, ҡарттың һүҙен тыңлағас, Абдулла ханға барып әйтә. Абдулла хан, ҡыуанып, бөтә булған халыҡты йыйырға һәм Бузикетте ҡаршы алырға ҡуша. Бөтә булған халыҡ йыйылғас, ҡари мулла һүҙҙе башлай.

— Күпте күргән ҡаримын,
Бер аҙ йырҙы йырлаймын.
Ҡариҙарҙа иҫке һүҙ,
Иҫкә алмай йөрөмәгеҙ.
Яҡшыларҙан ят ҡалыр,
Ямандарҙан ат ҡалыр,
Тапҡан ирҙән мал ҡалыр.
Бала ананан тыумаҡ бар,
Ана әмерен белмәк бар,
Ҡаза килһә бәндәгә,
Һис бер әмәл ҡылмаҡ юҡ.
Балаңа хан илама,
Беҙҙән борон* китте, тип.
Улар китте атаға,
Ата менән анаға.
Иманды ҡол — ожмахта,
Иманһыҙ ҡол — тузахта.*
Ҡиәмәт көн булганда,
Ергә халыҡ тулғанда,
Балаңды шунда күрерһең.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Бузикеттең әсәһе Абдулла ханға: «Һин һора әле, ни эшләп ул ике һүҙҙең береһендә «юҡ» тигән һүҙҙе әйтә, әллә беҙҙең Бузикет үлгәнме?» Шунда Абдулла аңлай, бөтә булған халыҡ илашып, таралышып бөтә.

Бер нисә көндәр үткәс, Бузикет янына барырға әҙерләнәләр. Йыйынып, Абдулла хан йәмәғәте менән һәм Гуман Бузикет янына китәләр. Әсәһе, илай-илай барып, юлда ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

— Туғыҙ ай һине күтәреп,
Имсәк һөтө имеҙеп,
Татлы аштар ашатып,
Аҫыраған анаңмын.
Нисә көнлөк ерҙәрҙән
Эҙләй килдем, йән балам.
Килдем һине күрергә,
Бит, ауыҙыңды һөйөргә.

Килеп етеп, Бузикеттең ҡәберен һәм уға һалынған һарайҙы күрәләр. Шул ваҡыт Таһылмас хан үҙ ҡыҙы менән Бузикет үлеүгә үҙе ғәйепле икәнен әйтә. Һәм үҙен шуның өсөн үлтерергә ҡуша, ләкин Абдулла хан үлтермәй. Ул: «Теге донъяла үҙең яуап бирерһең», — тип, Таһылмасты ебәрә.

Бузикеттең етегә бөкләнгән ҡылысын Абдулла хан Таһылмастан үҙенә ала. Бузикет ҡәбере янында хушлашып торғанда, Гуман,

ıуҫы булмағас, якты донъяла йәшәүҙең бер йәме лә юҡ, тип, үҙен үҙе үлтерә. Шул урында Гуманды ла Бузикет янына ҡуйып, ҡайтып киттәләр.

Шулай итеп, бер Бузикет үлгән өсөн Гуман дуҫы, Сәхипъямал һәм уның ҡырҡ иптәше үҙ-үҙҙәрен үлтергәндәр, ти.



# 4. БУҘЙЕГЕТ

*(Мырҙабаева Ғилмиһан варианты)*

Хикәйәт ителмештер, Малтия шәһәрендә бер хан бар ине, исеме Таһимас ине. Йорто үиләйте бик күп ине. Уның бер ҡыҙы бар ине, уның исеме Хәфизә [ине]. Төҫө аҡ, ҡара ҡашлы, оҙон сәсле, бик матур төҫтө ине. Атаһы бик ҙур бер һарайҙа һис бер кемгә күрһәтмәй аҫрар ине. Ҡасан ун биш йәш булганда, ул [ҡыҙ] бер төш күрҙе. Төшөндә өйөнә бер егет килде, бер кеше никах [ҡылғанды күрҙе]. Егеттең йөҙөнә хайран ҡалдылар халыҡтар. Ҡыҙ шул сәғәт уянып китһә, янында һис кем юҡ ине. Ул сүрәттен [йәғни төштә күргән егет һынының] ғишҡы ҡуҙы эсир итте, тәҡәтһеҙ булды.

Икенсе йыл дәхи ҙә бер төш күрҙе, шул йылғы килгән егетте йәнә күрҙе. Өсөнсө йыл ҡыҙ егетте йәнә төшөндә күрҙе, ғашиҡ булып, тәҡәтһеҙ булды. Һис бер сәғәт сабыры ҡалманы, эҙләй барһам икән, юлында ҡорбан булһам икән, тип йөрөгәнендә төшөндә егет: «Сабыр ҡыл», — тип, әйткән бер шиғыр (әйтте).

— Ҡушылыр көн булған юҡ,
Сабыр ҡыл һин әле[гә].
Беҙ әҙербеҙ барырға,
Шәһәр илке[?] йөрөргә,
Алла әмере булһа ла,
Илдәреңде күрергә,
Беҙ илеңә барыусы,
Илдәреңде күреүсе.
Ләйлә менән Мәжнүндәй,
Сабыр ҡылһаң кәрәкте,
Сабыр ҡылмай эш һөймәҫ,
Моратына тиҙ етмәҫ,
Зөләйха менән Йософтай,
Сабыр ҡылыу кәрәкле.
Барыр ваҡыт булһа, юҡ,
Нисә[мә] көн тулған юҡ.

Таһир менән Зөһрәләй,
Сабыр ҡалыу кәрәкле.

Ҡыҙҙың(да) ғишҡы көндән-көн арта барҙы, был хәлде уның ҡырҡ дуҫ ҡыҙы белә ине, уларға әйтте ҡыҙ:

— Буҙйегеттең исемен онота алмайым, шәһәргә Буҙйегет исемле егет килһә, минән һөйөнсө һорап, нимә һораһалар ҙа, бирер инем, — тигән. Ҡыҙҙың ата-әсәһе ҡыҙына әйтер ине:

— Ниндәй хәсрәтең бар, йәки ниндәй ауырыуың бар? — тип. Белемселәр килделәр. Һис бер һорауҙан файҙа тапманылар.

* * *

Бәғдәт ҡалаһында Ғабдулла исемле бер хан бар ине, Ғабдрахман — улы ине. Ул Ғабдулла хандың бер яңғыҙ ғына улы бар ине. Исеме Буҙйегет ине. Шундай оло сифатлы күркәм ине. Уны күргән кеше, тағы бер күрһәм ине, тип йөрөгән. Үҙе аҡыллы егет булған. Ғабдулла хандың бер вәзире булған. Аның исеме Табил булған. Табилдың Киман исемле улы булған. Ул Буҙйегет менән бергә тыуған, бер-береһен нык яратҡандар (дуҫ булғандар), береһенән-береһе бер сәғәт тә айырылышып йөрөмәгәндәр.

Бер ваҡыт Буҙйегет, йоҡлағанда, бер төш күрҙе, төшөндә бик матур һынлы бер ҡыҙ күрҙе. Буҙйегет ул ваҡытта ун ете йәштә ине. Ҡыҙ ҡулында былбыл, һандуғас һайрата, янында ҡырҡ дуҫ ҡыҙы бар ине. Буҙйегет, быны күреп, хайран ҡалды. Ҡыҙ матур шат тауыш менән егеткә бер шиғыр әйтте:

— Аҡыллымы һин, йән егет,
Егет үҫеп етәрме?
Мин юлыңда инде
Малың булһа, малым бар,
Өс йыл булды һыҡтайым,
Киләме, тип, йоҡлайым,
Аҡыллы һин, йәш егет,
Егет үҫеп етәрме?
Шәһәр Боҫтан былбылы,
Һайрар ерең бер генә,
Йәнең йәнгә ҡушылып,
[Тәнең тәнгә ҡушылып].
Сын хәкиҡәт йәр булһаң*,
Даръя кисеп, тау үтеп,
Беҙҙе эҙләү кәрәкле.
Кил — даръяның гәүһәре,
Мин — Ирәмдең* гәүһәре.
Мин адандай(?) тирәкмен,
Гәүһәр булһам, кирәкмен,
Ҡанаты көмөш өйәр(?) алмамын.
Ҡабул итһәң, кәрәклен.
Күктә торған йондоҙмон,

Һыуҙа йөҙгән ҡондоҙмон,
Хаҡтан белем алғанмын,* —
Нурҙан өлөш алғанмын.
Таяғыңды ҡулыңа алып*,
Мине эҙләү кәрәкле.

Буҙйегет уяныл китһә, янында ҡыҙ булмаған. Бер йылда зәгфрәндәй корсайҙы,* ата-әсәһе һораһа ла, әйтмәне. Ун һигеҙ йәше тулыуға, Буҙйегет тағы төш күрҙе. Төшөндә элекке күргән ҡыҙ, тағы килеп, зарланып, илап бер шиғыр әйтте:

— Дүрт йыл булды һыҡтайым,
Ҡиләме, тип, йоҡлайым.
Хәбәрең юҡ, үҙен юҡ,
Сәләмнамә һүҙен юҡ.
Минең юлым интизар,
Һыҡтай-һыҡтай булдым зар...

Буҙйегет яуабы:

— Бер хуп сүрәт нәҙерһең*,
Ҡис булғанда әҙерһең.
Ни хәсрәтең моҙарсың,
Нисек һинең ерең, әйт,
Эҙләй барһам, ерең әйт,
Һинең илде белмәйем,
Илең ҡайҙан табырмын,
Былтыр килдең яныма,
Быйыл килдең яныма,
Ҡайғы һалдың йәнемә,
Бында ғәйеп булдың һин,
Һине ҡайҙан табырһың,
Ерең әйтеү кәрәкле.

Ҡыҙ (Хәфизә) яуабы:

— Атка менеп сыкһаң һин,
Дарья кисеп, тауҙар ашып,
Әйткән һүҙең үтә һин.
Мине ҡабул итһәң һин,
Төштә ҡушкан Аллабыҙ,
Көндөҙ беҙҙе ҡушмаймы,
Донъя беҙҙән үтмәйме?
Тиҙ эҙләүең кәрәкле...

Буҙйегет уяныл китһә, янында ҡыҙы булмағанлыктан, тәкәт тота алмаған, аш-һыу эсә алмаған, эҙләргә уй ҡылды. Дуҫы Ҡиман менән кәңәшләшеп, бер кемгә лә белгертмәй, Ҡимандан рөхсәт һорап, бер шиғыр әйтте:

— Бер матур ҡыҙ күрҙем мин,
Хайран ҡалып торҙом мин,
Мәрхәмәтле йән дуҫым,
Аҡыл тотмай торҙом мин,
Ҡайғы төштө башыма,
Аҡыл тотмай, булдым зар.
Ҡабул итһәң, йән дуҫым,
Сәфәр сығар уйым бар,
Ҡитмәҫ ҡайғы төшкәндә,
Аҡыл бирсе, йән дуҫым,
Бер йыл булды янғаным,
Был ҡайғыға ҡалғаным,
Һинән урлар уйым юҡ,
Күңелем уға һалғанмын,
Юлдашым юҡ әйтергә,
Дарманым юҡ китәргә,
Йән юлдашым һин инең,
Ҡыймай йөрөнөм әйтергә,
Ҡитмәҫ бәләгә юлыҡайым,
Дарманым юҡ, йән дуҫым,
Уны эҙләп үлһәм дә,
Дарманым юҡ, йән дуҫым.

Дуҫы Ҡиман, Буҙйегет өсөн илап, ҡайғырып, ошо шиғырҙы әйтте:

— Ҡабул һүҙҙер: барырбыҙ,
Хаҡ яҙғанын табырбыҙ.
Беҙ — юлында ҡорбанлыҡ —
Хеҙмәт итеп йөрөрбөҙ.
Тәкдир яҙһа Аллабыҙ,
Сараһы юҡ бәндәнең.
Дуҫҡа ҡайғы төшкәндә,
Үлһә кәрәк йән дуҫы.
Тәкдир булһа, үләрбеҙ,
Хаҡ яҙғанын күрәрбеҙ.
Һинән бүленеп ҡалмамын,
Башҡаса барын әйтмәмен,
Мин — юлында ҡорбанлыҡ,
Ялғансы дуҫ булмаҫмын.

Дуҫынан бындай шәфкәтле һүҙҙе ишеткәс, Буҙйегет бик ҡыуанды һәм икеһе, ике хеҙмәткәр алып, ике дөйә алтын-көмөш, аҙыҡ алып, бер кемгә белгертмәй, тәүәккәлләп көньяҡҡа таба киттеләр. Юлда (Буҙйегет) ныҡ йығылып илап ошоно әйтте:

— Башты биргән Аллабыҙ,
Ризыҡ бирһә кәрәкле;
Тән яраткан Аллабыҙ,
Һаулыҡ бирһә кәрәкле;

Йән яраткан Аллабыҙ
Үҙе һаҡлаһын бәндәһен;
Ҡайһы ерҙә булһа ла,
Ирек бирһә кәрәкле;
Аҡыл биргән Аллабыҙ
Сәбәп бирһә кәрәкле;
Аҡыл биргән Аллабыҙ
Ҡеүәт бирһә кәрәкле;
Беҙ юҡ инек — бар ҡылған,
Тән яратҡан, йән биргән.

Тәүәккәл ҡылдым Аллаға,
Юл башлаусы үҙең һин;
Һәр бер төрлө бәләнән,
Йән һаҡлаусы үҙең һин.

Улар мәймүн* шәһәренә килеп етәләр. Уларҙы шунда уҡ тотоп алалар, ләкин күпме генә үтенеп һораһалар ҙа, уларҙы бынан ебәрмәнеләр. Батшалары китергә рөхсәт итмәне. Бында былар өс йыл тотҡон булдылар.

Бер ваҡыт дөйәләрен, алтын-көмөштәрен, бөтә кәрәк нәмәләрен ташлап, һал эшләп, диңгеҙгә төшөп ҡастылар. Балхун шәһәренә килеп, кәмә эшләтеп, тағы ла артабан киттеләр. Өс йыл үткәс, быларҙы мәймүн кешеләре, тагы ҡыуып етеп, тотоп алып ҡайттылар.

Күпме ялынып, рөхсәт һораһалар ҙа, уларҙы бынан ебәрмәйҙәр. Мәймүн батшаһы Буҙйегет кеүек әҙәм заты икән. Быларҙы шуға күрә ебәрмәй тотто — үҙ енесем икән тип. Әгәр батша үҙе үлһә, әҙәм затынан һайлап ҡуйғандар. Мәймүн әҙәмдәре, үҙҙәренән һайлап ҡуйһалар ҙа, бер ҙә тереклек итеп йәшәй алмағандар. Шуның өсөн, Буҙйегеттәрҙе ҡасмаһын өсөн, зинданға бикләп, ҡарауылсы ҡуйҙырған. Буҙйегет үҙ хәленән килмәгәс, Хаҡ тәғәләгә илап, бер бәйет әйтте:

— Бейек тауға тош булдыҡ*,
Үтмәк беҙгә ҡайҙа инде?
Тимер өйгә ҡамалдыҡ,
Сыҡмаҡ беҙгә ҡайҙа инде?
Ниндәй илгә тош булдыҡ
Йөҙөн әҙәм күргеһеҙ?
Башыма ҡурҡыу төшкәндә,
Өҙгөләнһәм дә, булмаç ине
Ҡафыр илгә тош булдыҡ,
Йыуанһам да, булмаç та;
Ғәмһеҙлеккә тош булдыҡ,
Илаһам да, булмаç та
Был бәләнән ҡотолоп
Юл йөрөр көн булармы?
Атам менән әсәмде
Бер күрер көн булмаçмы?

Улар өс йылдан һуң ҡасып ҡотолалар кәмәгә ултырып. Шунда Буҙйегет, Хаҡ тәғәләгә һығынып, бер шиғыр әйткән:

— Аллаға баш һалманым,
Үҙем зарлы булғанмын.
Үҙем зарлы ҡолоң да,
Ҡешеһеҙ, беҙгә дарман юҡ —
Үҙең һаҡла, Илаһым!
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Ошбу ҡанлы дарьянан,
Үҙең һаҡла, Илаһым!
Артыбыҙҙа дошман бар,
Алдыбыҙҙа дошман бар.
Беҙгә ҡаршы дошман бар,
Ғәриптәрең [беҙҙәрҙе]
Үҙең һаҡла, Илаһым!

Быларҙың (ҡасҡындар) алдына бер кәмә ҡаршы килде. Был ғәрип меҫкендәр бик ҡурҡтылар, беҙ бахырҙарҙы тағы тоттолар инде, тип. Был ике кәмә бер-береһенә осраштылар, күрҙеләр. Былар Бәғдәт шәһәренең сәүҙәләре икән. Былар танышып, илашып, күрештеләр. Ҡаруан хужаһы (башлығы) өгөт-нәсихәт ҡылды: «Ҡайтығыҙ. Төштә күргән ҡыҙға ғашиҡ булмаһағыҙ, бүтән ҡыҙ бөткәнме», — тине.

Тыңламанылар. Аҙаҡ килеп рөхсәт бирәләр. Ҡаруан хужаһы быларға кейем, аҙыҡ, алтын-көмөш биреп, риза булды. Буҙйегет, каруан айырылғанда, ата-әсәһенә былай тине:

— Хуш булығыҙ каруандар,
Һау-сәләмәт етегеҙ.
Имен-аман етегеҙ ҙә
Ата-инәмде күрегеҙ,
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.
Бер эш башҡа төшкәндер,
Йөрөмәй, күңелем тынмайҙыр,
Моһор мәхбун(?) шәһәрҙе
Күрмәй, күнелем тынмайҙыр.
Күп хәсрәттәр күрҙек беҙ,
Зарлы булып йөрөйбөҙ.
Ҡайсым тотһам, ҡайсым юҡ,
Был юлымдан ҡалырым юҡ.
Әмер ҡылып Аллабыҙ,
Тере булһаҡ, ҡайтырбыҙ.

Тере булһам, ҡайтырмын,
Үлһәм, сәләм әйтегеҙ.
Ҡайтып, каруан йөрөмәһә,
Атам беҙҙе күрмәһә,
Күп ғәйебемде кисереп,

Риза булһын атабыҙ,
Бәхил кылһын әсәбеҙ.

Был юлдан [мин] килмәмен,
Килһәм, [әгәр] үләмен.
Бәхил булығыҙ, дуҫтарым,
Хак яҙғанын күрермен.
Һау булығыҙ, дуҫтарым,
Хуш булығыҙ, дуҫтарым.

Каруан хужаһы, кайтып, Бәғдәт шәһәренә әйтә.

* * *

Былар кырк көн йөрөп, Малтия шәһәренә килделәр. Бер егеттең өйө бар икән, яңғыҙ ғына торған, сәләм биреп инделәр. Был ике мосафир нимә өсөн йөрөүҙәрен һөйләп аңлаткандар. Ғәбит (өй хужаһы) был ике мосафирҙы йәлләп иланы.

Буҙйегет Малтия шәһәрендә ике ай, хайран башын хур итеп,* эҙләнс, бер кем быларҙы белмәне.

— Шәһәрҙә бер хуп сүрәте (матур һынлы, мөһабәт) егет күрҙем, — тип бер егет кыҙға (Хафиза) һөйләп һөйөнсөләргә китте. Кыҙ, быны ишетеп, кырк кыҙына былай тине:

— Күргән төштөң тураһы,
Был көн килгән булмаһын.
Тиҙ артынан барығыҙ,
Беҙҙән сәләм кылығыҙ,
Мөһөр баным булмаһын,
Тиҙ кунакка алығыҙ,
Калпағы бар башында*,
Яман юлдаш* кашында,
Бәғдәт шәһәренең былбылы
Хәбәр килгән булмаһын.
Көнсығыштан булғандар
Юртак атка менгәндәр,
Ата-әсәһенән айырылып,
Беҙҙе эҙләй булмаһын,
Фида кылғандыр йәнен,
Корбан кылғандыр малын,
Бәғдәт шәһәренең солтаны,
Буҙйегет ул булмаһын*.

Барып йөҙөн күрегеҙ,
«Кай ерҙән?» — тип һорағыҙ,
Әҙәп менән торогоҙ.
Беҙҙән хәбәр һораһа,
Бында алып килегеҙ.
Унан хәбәр алғанға,

Һөйөнсөгә хәбәр һалғанса,
Алтын йөҙөк, гәүһәр таш,
Һөйөнсөгә бирермен;
Ҡырҡ ҡыҙымдың эсендә,
Уны яҡын күрермен,
Хәбәр итегеҙ, дуҫтарым!

Ҡырҡ ҡыҙ Малтия шәһәрендә бик оҙаҡ йөрөп эҙләнеләр, ләкин таба алманылар. Күҙҙәренә бер кем дә күренмәне. Буҙйегет был ваҡытта Хаҡ тәғәләгә (илап) бер мөнәжәт әйтте лә ятып йоҡланы. Төшөндә бер аҡ һаҡаллы кеше:

— Эй бисара, һин был шәһәрҙән китмә, (һөйгәнеңде) табырһың, — тине.

Буҙйегет йөрөп, Киман дуҫына күргән төшөн әйтеп бирҙе:

— Бөгөн бер төш күрҙем мин,
Йәрҙең йөҙөн күрҙем мин:
Осоп тауға ҡундым мин,
Икәү булып ҡундым мин,
Өсәү булып үҫтем мин,
Көндөҙ* күҙен ҡапланым,
Ҡемеремә(?) ер тапманым,
Йәрем артында ҡалып мин,
Күктән уны һаҡланым.

Төштө дуҫына һөйләп, иртә таңдан ашамай, эсмәй, сәхрәләрҙән (ҡыҙҙы) эҙләп йөрөнөләр. Ул көн ҡыҙ, ҡырҡ ҡыҙы менән шәһәрҙән (Буҙйегетте) эҙләп йөрөнө, ләкин тапманы. Ахшам ваҡытында ҡыҙҙар һарайға ҡайттылар. Буҙйегет һарайҙың тышында ҡалды, уны күрмәнеләр. Хан ҡыҙы һарайында илап былай тине:

— Ете йылдар булдым зар,
Мин юлыңда интизар.
Йәнең йәнгә ҡушылып,
Бер йөрөр көн булманы?
Киләм тигән вәғәҙәң
Һинең булды ялғандай.
Мынса(?) һаҡлап*, килмәнең,
Бүтән йәрҙе алғандай.
Йөрәгеңде вафа ҡылманың* —
Ете йылдар өйөндән,
Урыныңдан торманың.

Буҙйегет һарайҙың тышында быны тыңлап ултырҙы. Ҡыҙ уның ултырғанын белмәй ине. Егет күтәренке тауыш менән былай тине:

— Һине бында яратты*,
Мине унда яратты,
Һине миңә ҡаратты,
Мине һиңә ҡаратты.

Тиҙ табыуым ҡайҙалыр —
Арала даръя яралтты.
Сүлдә йөрөнөм, һыу тапмай,
Һыуҙа йөрөнөм, юл тапмай.
Дүрт йыл булдым юлында.
Хайран булып йөрөнөм [мин],
Күп хәсрәттәр күрҙем мин:
Табандарым уйылып,
Тәндәрем дә ҡыйылып,
Сәхрәләрҙә йөрөнөм мин.
Атамды ла күрмәнем,
Әсәмде лә күрмәнем,
Һис бер кем менән йөрөмәнем*,
Һине эҙләп йөрөнөм,
Йәнем ҡорбан ҡылырмын,
Ни булһа ла, булырмын,
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Нурыңды төштә күреп мин,
Хайран булып йөрөп мин,
Йөҙөң күрер көн булһа,
Ата-инәмдән китеп мин,
[Һине эҙләп килдем мин].
Исемем минең — Буҙйегет,
Янымда бар дуҫ егет,
Һин хәҡиҡәт йәр булһаң,
Өйгә кереү кәрәкле,
Йәнем һөйгән йәремдең
Йөҙөн күреү кәрәкле.

Һарайҙың эсендәге ҡыҙҙар, быны ишетеп, йүгерешеп тышҡа сыҡтылар һәм Буҙйегетте өйгә алып инделәр. Ҡосаҡлашып күрештеләр. Ҡыҙҙар:

— Быларҙың мораҙы хасил булды! — тип, ынйы-мәрйен һиптеләр.

— Һеҙҙе лә күрер көн булыр икән! — тип саҙаҡалар бирҙеләр. Қиманды, ҡыҙҙар ҡәҙер-хөрмәт менән:

— Еҙнәмдең дуҫы, — тинеләр. — Был көн беҙҙең шатлыҡ көнөбөҙ, — тип, ике йәрҙән рөхсәт һорап, «Йәр-йәр» әйттеләр:

— Пәйғәмбәрҙәр Алланың ҡашындалыр, йәр-йәр,
Берең — ынйы, берең — мәрйен,
Теҙелеп һеҙ, йәр-йәр;
Берең — яҡут, берең — гәүһәр,
Ҡушылып йәр-йәр;
Берең — хандыр, берең — ханса,
Ҡуш булып һеҙ, йәр-йәр;
Берең — былбыл, берең — тутый,
Йәр булып һеҙ, йәр-йәр;
Берең — алтын, берең — көмөш,

Ҡуш булып һеҙ, йәр-йәр;
Берең — масаһ,* берең — динар,*
Ҡуш булып һеҙ, йәр-йәр;
Берең — көндөр, берең — айҙар,
Ҡушылып һеҙ, йәр-йәр;
Заман ахры булғансы,
Айырылмағыҙ, йәр-йәр;
Берең — тутый, берең — былбыл,
Пар йөрөгөҙ, йәр-йәр;
Берең — хурҙыр,* берең — нурҙыр,
Пар йөрөгөҙ, йәр-йәр;
Заман ахры булғансы,
Айырылмағыҙ, йәр-йәр;
Һеҙ — шаһзада, беҙ — хөрмәткәр*,
Машалла, йәр-йәр;
Берең — апай, берең — еҙнә,
Машалла, йәр-йәр;
Йәре юҡтың — йәне юк,
Түшәге юҡ, йәр-йәр!

Быларҙың эсендә һарайҙы ҡарай торған бер кеше бар ине, ул ханға килеп һүҙмә-һүҙ күргәндәрен һөйләп бирҙе. Хан, был хәбәрҙе ишетеп, бик асыуланды, бөтә вәзирҙәрен йыйып, ҡыҙ һарайын ҡамап алды. Ҡыҙҙың һарайына инеп:

— Был ниндәй ярамаған эш ҡылдың? Бер йөрөгән берәҙәк менән беҙгә хурлыҡ килтерҙең! Һинә бында оло вәзирҙәр шаһзадалар юҡмы ни? — ти. Һәм:

— Үлтерегеҙ былар ҙы! — тип бойороҡ бирҙе. Дошмандар:

— Ҡолдар, ҡасың! — тине. Башҡа һүҙ әйтеп торманы. Сөнки ҡыҙын ярата ине.

Буҙйегет өҫтөнә тимер кейем кейгән, башына ҡылдан үрелгән пәрҙә кейеп, йөҙөн бер кемгә лә күрһәтмәй йөрөр ине. Киман өйҙән сығып ҡасты. Һигеҙ кеше өйгә инде. Буҙйегет былар ҙы үлтерҙе, халыҡ араһынан өй артына сығып, осраған берен бәреп үлтереп, атына менеп сапты. Артынан ҡыуа башланылар. Буҙйегет бер йөҙ егерме һигеҙ кешене үлтереп ҡасып ҡотолдо.

Көндөҙ Буҙйегет сәхрәләрҙә йөрөр ине, кис булғас, һөйгәнен эҙләр ине. Өс көн бер-береһен күрмәнеләр. Киман көн һайын килеп ҡыҙ менән һөйләште, кешеләр уны таныманылар.

Ҡыҙ (Хәфизә) янына килеп, ата-әсәһе:

— Ни булды һинә? Үҙенде ҡәҙерһеҙ итеп, беҙҙе оятлы итеп былдай эште ник ҡылдың? Һиңә күпме шаһзадаларҙан [яусылар] килде. Үҙенең теләгәненә барыр, тип, уларға ла бирмәнек. Һинә бер аҙғынға барырға яраймы ни? — тинеләр.

Ҡыҙ:

Ҡолағым һаңғырау булғандыр —
Әйткән һүҙең үтмәҫ тә:
Донъя халҡын килтерһәң дә,

Һис беренә бармаҫмын.
Аҡылым баштан китһә лә,
Һеҙҙән аҡыл алмаҫмын,
Беҙҙән артыҡ ҡыҙ табып*,
Теләгәнеңә бирерһең.
Йортоңа кеше йыйҙырып,
Һөйгәнеңә* бирерһең.
Тыуарға беҙ — бәхил йән,
Үлергә беҙ — бәхил йән,
Буҙйегетем булмаһа,
Һис кем йөҙөң күрмәмен,
Әгәр йөрөп, күрмәһәм,
Тере лә булып йөрөмәҫмен, —

тип әйткән. Ата менән әсәһе:

— Был аҙғын егет ҡыҙыбыҙҙы [тамам] аҙҙырған, быны, һүҙһеҙ, үлтерер кәрәк, — тинеләр. Хан вәзирҙәрен йыйып:

— Беҙҙең бер йөҙ егерме һигеҙ кешене үлтерҙе, бик баһадир күренә, уи биш кеше алып уны үлтереп килегеҙ, — тине.

Буҙйегет сәхрәлә йәшәне, ашарына юҡ. Дуҫы Кимандың Таһимас ханға илселеккә ебәрҙе, аҙыҡ һорар өсөн: «Был ерҙең олоһо, әссәләмәғәләйкүм, солтан улы! Сәләмәт булығыҙ! Күп йылдарҙан бирле барган юлығыҙҙан барығыҙ. Һеҙ-хөрмәтле изге кеше, беҙҙең хәлебеҙ шулдыр. Беҙ фәҡир һеҙҙең Аллаһы тәғәлә ғашиҡ итеүсе. Һеҙҙең риза булыуығыҙ (кәрәктер). Шунһыҙ был донъяла файҙа юҡтыр. Ҡәҙеребеҙҙе белегеҙ. Беҙ — Бәғдәттең солтаны Буҙйегет, Ғабдулла хан улы!»

Таһимас хан, был хатты уҡып, бик асыуланды:

— Был ниндәй хурлыҡ! Үлтерегеҙ тиҙерәк! — тине. Аранан бер вәзир:

— Илсегә — үлем юҡ! Ҡуй, быныһын үлтермәйек, — тине.

Ҡимандың артынан төшәләр. Буҙйегет, был хан илсенән кем икәнлегемде белгәс, риза булғандыр, тип атына менеп, Ҡимандың алдына килде. Ике арала һуғыш китте [якты көн], ҡараңғы төн булды. Ҡиман яраланды, әммә тора ҡалды. Ике йөҙ ҙә һикһән өс кеше үлгән. Хан хайран ҡалды.

Ҡиман көн дә [сығып] ҡыҙ менән һөйләшеп йөрөнө. Шәһәр халҡы быны ла белде. Буҙйегетте белеп, ханға хәбәр итәләр икән.

— Инде һуғыш менән үлтереп булманы. Хәйлә менән үлтерергә кәрәк, — тип бойороҡ бирҙе. — Баһадир еғет икән, күпме батырҙарымды әрәм итте!

Хан бөтә шәһәр халҡын йыйҙырта һәм:

— Ҡыҙымды Буҙйегеткә бирергә ризамын, — ти. Бик күп кеше йыйыла, барабан, һорнай, ҡурай тартып, буҙа, шарап әсетеп, туйға әҙерләнәләр. Буҙйегетте алып килделәр. Әсәһе ҡыҙы янына килде:

— Инде һине һөйгәнеңә бирәбеҙ, унан артыҡ кейәү табылмаҫ, — тине. Ҡыҙ бик ҡыуанды:

— Теләгәнем ҡабул булды, — тине. Әсәһенең һүҙенә ышанып, сәсен ынйы, мәрйен менән тарап үрҙе.

— Инде кейәү булдың, — тип Буҙйегеткә буҙа-шарап эсерә башлайҙар. Һәр береһенең артында ҡылыс, хәнйәр, балта, бысаҡ ята. Буҙйегетте иҫертәләр. Был саҡ дуҫы Ҡиман, туйға ҡыуанып, тыштa йөрөй. Өйгә ингәс, туйҙың ысын туй түгеллеген, ә кеше үлтереү өсөн булғанын күрә. Дуҫы күҙен дә асырлыҡ түгел.

Ҡиман хан ҡыҙына йүгереп килә. Хәфизә ҡырҡ ҡыҙ менән сәсен тарап тора ине. Ҡиман:

— Хан туйына килдем мин,
Хандың уйын белдем мин,
Хандың йөҙө һыуыҡтыр.
Нияздары* янында,
Боҙоҡ икән туйҙары,
Ҡылыстары ҡынында.
Ҡарауылдар алдында,
Ҡыуанышып, ҡарашҡан
Дошмандары бар унда.
Алла ҡушыуы булмаһа,
Өйгә дошман тулгандыр,
Күп эсендә яңгыҙға
Әжәл көнө булғандыр.
Ғәреште иҫкә алмаһаң,
Был өйөңдә сығыр йән.
Вәғәҙәңдә бар булһаң,
Буҙйегеткә йәр булһаң,
Дуҫың өсөн йәнеңде,
Бер ҡашыҡтай ҡаныңды
Ҡорбан итеү кәрәкле.
Айырып алыр кеше юҡ,
Быны белеү кәрәкле.
Һәр дошмандың эсендә
Муйын һоноп ятҡандыр.
Муйын һонған егеттең
Былар көнө булғандыр*,
Сәбәп һеҙҙә булмаһа,
Үлер көнө булғандыр, —

тип әйткән. Ҡыҙ, Ҡимандың был һүҙҙәрен ишеткәс, шунда уҡ, бер еңен кейеп, бер енен киймәйенсә, мәжлескә килеп кергән һәм Буҙйегеттең хәле бик мөшкөл икәнен күргән. Ҡыҙҙы аяҡ өҫтө тороп ҡаршы алалар. Хәфизә, илап, былай ти:

— Сәләм бирҙем, аталар,
Ҡотло булһын туйығыҙ!
Күп халыҡты йыйып һеҙ,
Дөрөҫ булһын уйығыҙ.
Алла өсөн туй булһа,
Ҡуй күҙендәй һөйөгөҙ;
Дошман өсөн туй булһа,

Азат итеп ҡуйығыҙ;
Ғәҙел батша туй ҡылһа,
Алла өсөн уй ҡылһа,
Бай эсендә ярлыны,
Үҙ йортонан аҙашҡан,
Йортта булган зарлыны
Азат ҡылыу кәрәкле.
Ҡотолорға зар булһа,
Азат ҡылығыҙ, яҡшылар,
Һуғым кәрәк, тиһәләр,
Әҙәм итеп ҡуймағыҙ,
Тотҡондарҙы ҡотҡарып,
Мал һуйығыҙ, яҡшылар:
Бындай яҡшы көндәрҙе,
Кеше һуйып, туй ҡылғанын
Ишетмәнем, күрмәнем;
Бындай яман уй ҡылғанды;
Күп эсендә бер үҙе
Азат булған был ғәрип;
Күп тубынан аҙашҡан
Ҡыуҙай булган был ғәрип*.
Ата-инәнән айырылған,
Күҙе ҡанлы был ғәрип,
Алып килгән ҡашында
Юлдашы юҡ был гәрип.
Серен әйтеп һөйләшер,
Серҙәше юҡ был ғәрип.
Хаҡ Тәғәлә яҙган һун,
Кемдәр йәрле булманы?!
Туп тубынан айырылһа,
Кемдәр зарлы булманы?!
Мин илайым.
Теләйем
Атам менән әсәнән,
Хан ҡашында (янында) ултырған,
Энем менән ағанан,
Әйткән һүҙгә ағанан,
Әйткән һүҙгә күнһәгеҙ,
Һорағаным бирһәгеҙ,
Кәңәш ҡылығыҙ, яҡшылар!
Һүҙемде ҡабул итегеҙ,
Хәлле булһаң да, атай,
Хан ҡәҙерен белмәйһең;
Миһман* булып бер килгән,
Хан ҡәҙерен белмәйһең,
Был иләндә йорто булһа,
Һине тәхеттән айырмаç,
Йәнде аҡтан айырмаç,
Был йорттарҙың байҙарҙы,

Хәсрәтле бер ғәриптең
Хәлен белмәҫ булырмы?
Йорт эсендә яңғыҙы,
Иҫереккә мәс булмаҫмы?
Күп йәшәгән аталар,
Эне менән ағалар,
Кәңәш ҡылған оҙондан,
Ҡайырылмаҫ көн булырмы.

Йыйылған халыҡтар береһе лә ханға яуап бирмәй тик ултыра. Ҡыҙ илаһа ла, һүҙен ҡабул итмәйҙәр. Ҡыҙ тағы ла халыҡҡа әйтә башлай:

— Аллаһыҙға һүҙ әйтһәң,
Күкрәгенә ҡунмаҫ, ти;
Рәхимһеҙгә һүҙ әйтһәң,
Ни ҡылһаң да, булмаҫ, ти...

Был һүҙҙәрҙе әйтеп, зар-зар иланы — бер кем яуап бирмәне. Буҙйегеткә ҡараны: ул күҙен асырлыҡ хәлдә түгел, көс-хәл менән йоҡламай ултыра. Хәфизә Буҙйегеткә лә әйтеп ҡарай:

— Шаһ туйы була, тиеп,
Ҡыуанмаң был уйынға;
Шайтан керһә ҡуйынға,
Ҡылыс етер муйынға;
Эй, Буҙйегет, мас егет,
Күп эсендә аҙ егет.
Йәне сығырга етешкән,
Аҡылы юҡмы — иҫерек.
Эй, мас егет*, күҙең ас,
Һикереп тороп ишек ас,
Алла ҡушҡан йәр инең,
Ҡас, инде, ҡас, ҡас, ҡас!

Йыйылған халыҡ ҡыҙҙың һүҙенә ҡараманы. Ҡыҙ өйҙән сыҡмай, Буҙйегеттең дуҫы Киман быны ишетеп тыңлап тора. Өйгә ингәндә, Буҙйегеттең хәле тағы ла насар ине. Йөрәге түҙмәй Киман, йыйылған халыҡҡа:

— Малығыҙҙы алған юҡ,
Күңелһеҙлек ҡылған юҡ,
Һәм балағыҙ үлтереп,
Ҡотоғоҙҙо алған юҡ.
Аталарҙы үлтереп,
Малығыҙҙы алған юҡ,
Нияз ҡылыс янға алып,
Балта, бысаҡ ҡулға алып,
Атағыҙҙы үлтергән,
Дошманығыҙ был булмаҫ,

Заман ахры булғансы,
Асылмаҫмы күҙегеҙ?
Дошман яуы килгәндә,
Бирелмәһен һүҙегеҙ.
Хәтере юҡ хандарың —
Һуҡыр булған көн икән,
Аҡылы юҡ хандарың —
Һаңғырау булған көн икән,
Заман ахры булғансы,
Асылмаһын күҙегеҙ!
Дошман яуы килгәндә,
Бирелмәһен һүҙегеҙ.
Көнөбөҙ бындай булғанда,
Хәйерһеҙ илгә тош булдыҡ,
Эй, мас егет, мас егет,
Сән илеңдә торғанда,
Ата-инәңде күргәндә,
Һин илеңә торғанда,
Һин илеңдә хан инең,
Һәр бер эшкә дан инең,
Былбыл инең йортоңда,
Булмаҫ ергә төшөп һин,
Ҡош ҡоткармаҫ ҡарсыға,
Ояһына төшөп һин,
Уны белеп булмаҫ та,
Уны белеп булмаҫ та,
Бик хурлыҡҡа төштөң һин,
Маңлайыңдан тир ағып,
Тәрән ергә төштөң һин,
Тиҙ тороуың ҡайҙа инде.
Янған утҡа төштөң һин,
Һүндереүең ҡайҙа шул?
Бер сәғәттә яныңдан,
Сыҡмаҫ көндәр бар ине,
Аман... был...
Инде ҡайҙа күрермен,
Боронғолай бергәләп,
Инде ҡайҙа йөрөрбөҙ,
Ҡиәмәт көнө булғанда,
Күрһәм, шунда күрермен.

Ҡиман, зар-зар илап, сыҙай алмай, тышҡа сыҡты. Нимә булһа ла, булһын тип, тыштағы аттарҙың ауыҙлыҡтарын алды, эйәрен әйләндереп, өҙәңгеләренең бауҙарын ҡырҡты. Үҙе бер атты эйәрләп әҙерләп ҡуйҙы, [Буҙйегет] әгәр сыҡһа, ҡасыр өсөн.

Ҡыҙ сыҡманы, йыйылған халыҡ, ҡыҙҙың күҙенә баҡманы. Хан бер яуап бирмәне, ҡыҙын бик ярата ине. Әммә Буҙйегетте үлтереү ине уның уйы. Шул ваҡыт Буҙйегеткә иҫ кергәндәй булды, ҡыҙ уның

өҫтөнә, боҙло һыу ҡойҙо. Буҙйегет сәсәп күҙен асты, ҡыҙ инеккә ымланы:

— Сығып ҡас! — тип. Буҙйегет һикереп тороп тышҡа сыҡты, дуҫы әҙерләп ҡуйған атҡа менеп ҡасты.

— Ҡыуығыҙ артынан! — тип бойороҡ бирҙе хан. Бөтә халыҡ әҙер аттарына менеп ҡыуарға булһалар, берене лә менә алмай аҙапланалар, менәләр ҙә ауып төшәләр, менәләр ҙә ауып төшәләр.

Биш йөҙ кеше, атына менеп, Буҙйегет артынан китте, ике арала һугыш китте. Буҙйегет өс йөҙ кешене үлтерҙе, үҙе күп яралы булды. Киман шәһәргә китеп ҡотолдо. Ике йөҙ кеше ҡасты, хандың вәғәҙәләшеп йөрөгән бер вәзире бар ине, исеме Зәйтүн, ул ике йөҙ кешене алып тағы ла ҡыуырға төштө, ул да көслө баһадир ине.

Буҙйегет юлда ҡасып килгәндә, бер ҙур ташҡа уҡ атты, уҡтың ярты өлөшө ташҡа батты, ярты өлөшө батманы. Зәйтүн ташҡа уҡ атты, унын уғы ярты өлөш батты һәм уйланы был егет минен менән бер төрлө көслө икән, был ике йөҙ кеше артыҡ икән, тип, уны еңәсәкмен, тип туҡтамай ҡыуҙы. Буҙйегет тағын ташҡа уҡ атты, уғы бөтөнләй батты. Зәйтүн дә угын атты — уғы баяғыса батты. Һәм ул хәйлә ҡорҙо. Ул беҙҙе ҡырып рисуай итеп, һәләк итеп бөтә тип, шәһәргә кире әйләнеп ҡайтты. Әгәр ҡулыбыҙға төшһә, үлтерәсәкбеҙ, тип ант иттеләр. Буҙйегет ике төн йөрөп арып, хәле бөтөп, бер ергә йығылды. Етмеш ерҙән яраһы бар ине, яраһы яман һыҙлай ине. Йығылган ере баҙ ине, әҙәм заты йөрөмәҫ ер, юлында йылан-саян тулып йөрөй. Йәненән өмөт өҙөп, ҡарап ултырҙы. Бер ҡарлуғас балаһына ем ташып йөрөй ине, быны күреп, ата-инәһе дуҫы һәм йәре иҫенә төшөп, бер бәйет әйтте:

— Ҡарлуғас ҡарлуғасҡа ем бирәлер,
Ҡарындаш ҡарындашҡа дим бирәлер;
Янғыҙлыкка төшөп моңло башым,
Минең бөткәнемде кем беләлер.
Ҡыйналғаным белмәне атам минең,
Зарланһам да, белмәне атам минең,
Ғәриплеккә төшөп янғыҙ башым,
Һорарға бер кеше юҡ хәлем минең.
Көндәребеҙ булған икән үҫеп, буй етеп,
Һис бер кемем юҡ, зарланһам да, хәлем бөтөп.
Үҙ йәнендәй ҡәҙерләп йөрөткән атам-инәм,
Һеҙҙе бер күрер көн булырмы икән?
Ағастың башын ҡырҡһаң, төбө ҡалыр,
Икенең бере үлһә, бере ҡалыр,
Янғыҙҙың үҙе үлһә нимә ҡалыр —
Менер аты, кейгән кейеме яуға ҡалыр.
Әйтәм тиһәм, был илдә һүҙем һыныҡ,
Булмаҫ, ахыры, ғәриплектән күңелем тоноп,
Алла нимә ҡылһа ла, сарам юҡ.
Ҡотолмаҫ ергә осраны ғәзиз башым,
Юҡ булды янымдағы йән юлдашым,
Тыуған ер, атам-әсәм иҫкә төштө,

Аҡты ҡан аралаш күҙ йәшем,
Туҙан баҫты юлымды,
Ҡайғы баҫты күңелемде,
Асылыр көн булырмы?
Яңғыҙлыҡҡа төшөп мин,
Дуҫты күрер көн булырмы?

Сәхипжамал* ғәзизем,
Ҡушылыр көн булырмы?
Ғәриплеккә төшөп мин,
Бер йөрөр көн булырмы?
Тоғро йөрөһәм дошманға,
Йөрөһәм, юлым уңырмы?
Был хәсрәтле көндәрем,
Онотолор көн булырмы?
Боронғолай ҡушылып,
Бер йөрөр көн булырмы?

Буҙйегет хаҡ тәғәләгә мөнәжәт ҡылды,

Уйланып, йәнемде бында алма, тип:
Моңло башым был ерҙә ҡалма, тип,
Кем үлмәккә яратҡанһың һин, тип;
Ҡурҡамын, гүр кәфенһеҙ ҡалам, тип,
Хоҙай тәңренән ҡалырым юк, тип;
Ярҙам итмәһәң, бер ҡайҙа бараһым юҡ,
Күңелемдә был ерҙәре моң булды,
Кәфенләп, гүр эсенә һалыусы юҡ.
Ун һигеҙ мең ғалимды яратып һин,
Илдән илгә [уларҙы] тараттың һин;
Күкрәк ҡанлы, күҙ йәшем юк,
Йөрөһөн тип — яр тапҡыл,
Хоҙай әмеренән һис ҡалғым юҡ,
Ҡасырға боролоп, һис дарманым юҡ,
Дәхи ергә Хоҙай тәҡдирем юк,
Тора үлем һис бер әмәлем юҡ.
Там* эсендә корттарға ем бирәһен,
Ерҙәге дәртлеләр аҡыл бирәһен,
Теләйем тәки ятайым тип,
Мин байғош бәхетһеҙҙе кем һаҡлаһын, тип,
Һинән башҡа һис бер кемгә иларым юҡ,
Хәлем нисек буларын беләһем юҡ,
Ҡәһәр рәхим итһәң, Ҡадир Алла,
Һинән башҡа һис кемдән теләрем юҡ.

Хаҡ Тәғәлә мөнәжәтен ҡабул итте, Буҙйегет башын юғары күтәреп ҡараны, янында бер баҙ күрҙе. Ул баҙға барҙы, эсендә былбылһандуғастар һайрай ине, аҙыҡ та бар ине. Буҙйегет туйғансы ашаны. Бер сыҫҡанды яралап бысаҡ менән бер еп алып, ҡойроғона еп тағып башын ҡулына бәйләне, ҡыуып ебәрҙе. Сүпте алып яралы

урынына һыҙған икән, сыскандың яраһы шәбәйгән. Буҙйегет уйланы: «Был Аллаһы Тәғәлә эше икән», — тип, сысканға ишара бирҙе. Һәм Буҙйегет сүпте яраһына һыҙҙы — ул да яраһынан шәбәйҙе. Ул баҙ эсендә ун биш көн ятты һәм һау-сәләмәт булды тағы ла. Шунан Малтия шәһәренә китте.

Ҡиман Буҙйегеттең электән осрашыу урыны бар ине. Һәм ул шунда бара. Ҡиман был ваҡытта ҡыҙ менән осрашып торҙолар. Хәфизә: «Буҙйегет әгәр ҙә килһә, Ҡари ҡортҡа килһен», — тине. Ҡиман, ризыҡ алып, шул йортҡа килгән. Күрешеп, бер-береһенең һаулығына ҡыуанышып, илашалар.

Ҡари ҡортҡа ҡыҙға барып һөйөнсө һорай. Ҡыҙ ҡыуаныcынан Ҡари ҡортҡаға алтын яғалы тун бирә. Ҡыҙ килеп Буҙйегет менән осраша, һәм улар ҡасырға һүҙ ҡуйышалар.

Ҡортҡа Буҙйегетте көндөҙ оло һандыҡта тота, кис тороп йөрөргә рөхсәт итә. Ҡыҙҙың был йортҡа килеп йөрөгәнен ханға барып әйтәләр. Хан ҡортҡаны саҡырып ала:

— Һинең өйөңә минең ҡыҙ нимә өсөн барҙы? — тип һорай. Ҡортҡа йәшерә, әйтмәй:

— Әгәр ҙә әйтһәм, һине бөтә шәһәрҙең ҡортҡаларына баш итеп ҡуям, йыл һайын алтын-көмөш биреп торормон, — тине. Ә ҡортҡа быға ҡыуанып риза була һәм Буҙйегеттең ҡайҙалығын әйтә. Дошмандар килеп өйҙән Буҙйегеткә тимер бығау һалып, зинданға бикләйҙәр. Ҡыҙ был хәлде белмәй һәм тағы ла ҡортҡаға килә. Ҡортҡа ялғанлай:

— Дошмандары ҡыуып алып киткән, — тип. — Ҡайҙа киткәнен белмәйем, — тип. Ҡыҙ был ҡортҡаны зинданға бикләй:

— Әгәр һүҙең дөрөҫ булып, тере ҡалһа, ебәрермен. Тотолһа, һине азат итмәм, — ти.

Буҙйегетте тотҡас, ханға килеп әйтәләр. Хан:

— Иртәгә баҙарға башын(алып) барып аҫығыҙ, бөтә халыҡ белһен. Ҡыҙымды бирергә әҙәм барҙыр. Уны дошманға бирмәм, — ти.

— Дошмандан ҡотолғанға, дан туйын яһарбыҙ. Ике туй бергә булыр, — ти. (Иҫкәрмә: Ул заманда кешеләр ҡылдан үрелгән пәрҙә кейеп йөрөгәндәр.)

Буҙйегет иҫенә килгәндә, аяҡ-ҡулы бығаулы ине. Ары-бире тибрәлде — булманы. Бер Алланан ярҙам булмағас, бәндәнән ярҙам буламы һуң?..

Буҙйегетте дуҫы Ҡиман ҡарап эҙләп йөрөнө, бына баҙар эсенә килде һәм күрҙе: Буҙйегет бығаулы, уға үлемдән башҡа бер сара ла ҡалмаған ине. Ҡиман зар илап дуҫы янына килә. Хандың бер вәзире бар ине, шаһзадаларҙы ул үлтерә ине. Ул был ваҡыт килеп етмәгән ине. Буҙйегет дуҫы Ҡиманды янына саҡырып алды, зарлап илап, былай тине:

— Эй, йән дуҫым, яҡын кил,  
Һүҙем һиңә әйтәйем:  
Әжәл килде был башҡа,  
Алла әмеренә ҡайтайым.  
Һинән башҡа дуҫым юҡ,

Серем кемгә әйтәйем,
Ҡарсыға ҡоштоң ҡанаты,
Ҡайрылыр көн булғандыр,
Имандашым, ҡауышып,
Аймылышыр көн булғандыр.
Эй, йән дуҫым, йән дуҫым,
Әжәл беҙгә еткәндер,
Инде һине күрмәк юҡ,
Был ерҙән һин ҡайтырһың.
Боронғолай егет булып,
Инде бергә йөрөмәк юҡ,
Моңло ҡалған атама,
Зарлы булған инәмә,
Яңғыҙ улы һүҙе тип,
Сәләмемде әйтә күр.
Моңло булған инәмә,
Сәләмемде әйтә күр.
Бала унан тыумаҡ юҡ,
Алла әмерен белмәк юҡ,
Әжәл етһә бәндәгә,
Донъя баҡый булмаҡ юҡ.
Ҡанатынан ҡайрылған,
Яңғыҙынан* айрылған,
Ҡайғыға күп атама,
Сабыр ҡыл, тип әйтә күр,
Кемде балам тиер ул,
Кемде мин тип һөйөр ул?
Мин иҫенә төшкәндә,
Янған утка керәр ул.
Көйгәненә тап булһаң,
Сабыр ҡыл, тип әйтә күр.
Башымдағы бүркемде
Моңло булған атама
Үҙ ҡулындан бирсе һин,
Күңелен аулап* йөрө һин,
Кейһә әгәр, көтмәһен,
Яңғыҙ улым килер, тип.
Атам беҙҙе көтмәһен,
Ҡайғылы йәш түкмәһен.
Ҡулымдағы йөҙөгөмдө алып һин,
Дуҫым, ҡулыңа һалсы һин.
Моңло инәмде күргәндә,
Беҙҙе иҫкә алғанда,
Яңғыҙым, тип илаһа,
Күңелен аулап йөрө һин;
Әгәр инәм бойорһа,
Миндәй булып йөрө һин,
Һөйгән дуҫым, йән дуҫым,
Минең өсөн йөрө һин.

Күп михнәттәр күреп һин,
Ата-инәнән айырылып,
Минең юлсым булдың һин;
Йәш ваҡыттан бергә йөрөп,
Был көндәргә тап булдың.
Һин иленә барғанда,
Ата-инәм күргәндә,
Барһаң кеше күрергә,
Ҡашыңа килеп тулырҙар.
Йыйылған күп әҙәмдәр,
Белгән хәбәр ҡорорҙар,
Күҙе күргән юлдаштар,
Бергә тыуған ҡәрҙәштәр,
Бергә йөрөгән дуҫтарым,
Беҙҙе иҫкә алырҙар,
Беҙҙән мәхрүм ҡалғандар,
Беҙҙе юҡһынып һораһа,
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.
Беҙҙән рәнйеү алғандар,
Беҙҙән яман күргәндәр,
Күп эсендә бар булһа,
Риза бул тип әйтерһең.
Беҙҙең өйгә барырһың,
Ата-инәмде күрерһең.
Беҙҙең өсөн илаһа,
Күңел алып йөрө һин,
Айырылыуҙы белмәнем,
Ҡурҡа-ҡурҡа йөрөмәнем,
Сәхипжамал йәр өсөн,
Муйын һоноп йөрөгәнмен.
Әхирәт көнө булғансы,
Инде һине күрмәк юҡ,
Уйнап-көлөп йөрөмәк юҡ,
Сын яратҡан йән дуҫым,
Донъяла торор хәлем юҡ...

Киман Буҙйегеттән быларҙы ишеткәс, иҫһеҙ булды. Ул, һушына килгәндән һуң, Буҙйегеткә яҡын килеп, былай тине:

— Эй, Буҙйегет, Буҙйегет,
Бәләкәстән дуҫ егет,
Инде айырылыр көн булды,
Хуш, бәхил бул, дуҫ егет.
Инә һөйөп иш иткән,
[Һөйә-һөйә кеше иткән,]
Заман ахры булғансы,
Айырылышыу ошо икән.
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .

Мин өйөмә ҡайтҡанда,
Инән сыҡһа алдыма.
Ҡайҙа, тиһә, ҡолоном,
Ни тел менән һөйләрмен,
Ни күҙ менән күрермен,
Ни тип яуап бирермен?
Ата менән инәнән
Кемде айырмаç был үлем?
Эне менән ағанан
Кемде айырмаç был үлем?
Маллы менән ярлынан,
Кемде айырмаç был үлем?
Эй, дуçым, һин йән дуçым,
Йәнем ҡорбан итһәм дә,
Һинең өсөн үлһәм дә,
Күп дошмандың эсендә
Ҡотолмаçтай көс булды,
Йәнең йәнгә ҡушылган,
Йәнемдән татлы йән дуçым;
Күп көн бергә йөрөнөм мин,
Йөҙөң туя күрмәнем.
Быңдай булырын белмәнем.
Быңдай булырын белгәндә,
Кафыр ҡоло ҡортҡаны,
Ҡылыс менән бәрмәнем.
Бәхил булғыл, йән дуçым,
Инде һинән төңөлмәм.
Кемде дуçым итермен?
Кемең менән йөрөрмөн?
Йәнем ҡорбан, йән дуçым,
Күрһәм шунда күрермен,
[Ҡасан гүргә керермен]...

Шул ерҙә вәзирҙәр килеп етеп, иман-шаҡылын уҡып, ҡылыс менән Буҙйегетҡә сабалар. Ҡылыс үтмәй, әлегә бөтә тәне ауырта егеттең. Буҙйегет инде үҙенең ҡотола алмаçын белә:

— Эй, баһадирҙар, үлтерһәгеҙ, йәнемде ҡыймай, үлтерегеҙ. Итегемдең олтанында үҙемдең алмас ҡылысым бар. Шунын менән үлтерегеҙ, — ти.

Һалдаттар шул ваҡыт унын ҡылысын алалар. Унда Зәйтүн дә була. Ул:

— Үлтерегеҙ! Үлтергән хаҡҡа мең алтын бирәм, — ти.

Буҙйегетте бер сабыуҙа үлтерәләр. Һис бер рәхимлек күрһәтеүсе булмай. Ҡылыс үтмәүҙең сәбәбе шул ине. Буҙйегет һәр ваҡыт Хызыр Ильяс ғәлиәссәләм доғаһын уҡып йөрөнө. Ҡылысын табан аçтына алтыға бөкләп йөрөгән. Әжәлгә үҙ ҡылысы сәбәп була.

Киман, биттәрен сапсып, ах-вах килеп илап, иçһеҙ тәгәрәй. Һушына килгәс, ул былай ти:

— Һай, донъя, [һин], һай, донъя,
Ҡемде вафат ҡылдың һин.
Искәндәрҙәй батшаны,*
Үҙ ҡуйынына алдың һин,
Уны дәхи* алдың һин,
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Алып-алып, туйғаның юҡ,
Һис кемде алмай ҡалғаның юҡ.
Ҡисә йөрөгән йән дуҫым,
Уны айырып алдың һин,
Рәхим шәфәғәт (шәфҡәт) һиндә юҡ,
Шундай оло хандарҙы
Үҙ ҡуйынына алдың һин.

Буҙйегеттең башында был ваҡыт ҡылдан пәрҙәһе бар ине. Пәрҙәне һүтеп алғас, оҙон толомло сәсе таралып китә. Сәсе алтын буяулы, маңлай сәсе мәрйен ҡушып үрелгән була. Халыҡ уның һылыулығына хайран ҡала, үлтереүсе вәзир иҫтән яҙа. Зәйтүн:

— Үлгән кеше үлде инде, кәүҙәһен дарға аҫығыҙ, — тип бойора.

Үлтергән кеше һәм йыйылған кеше шаулаша башлай:

— Уны үлтергәнсе, беҙҙе үлтермәне бит!

— Ай, азамат ир булған!..

— Ҡасан да бер үлем!..

— Бер үлем инде!..

Ҡис, һорнай, ҡарнай уйнатып, байрам итәләр. Хан әмере буйынса төрлө уйындар була.

* * *

Буҙйегеттең үлгәнен белмәй, ҡыҙ шәһәрҙә биҫтәләрҙән эҙләп йөрөй һөйгәнен. Бер ерҙән дә уны таба алмай ул. Ҡырҡ ҡыҙы менән бер туй барған ергә бара Хәфизә һәм:

— Буҙйегет бындамы? — тип һорай һәм һүҙен дауам итеп:

— Дөйә килеп буҙланы,
Бутаһы* уның бармы икән?
Бута күҙле Буҙйегет
Был уйында бар микән?
Ҡуйҙар килеп мөңрәне,
Балаһы уның бар микән?
Ҡуҙый* күҙле Буҙейгет
Был уйында бар микән?
Һыйыр килеп мөңрәне,
Быҙауы уның бар микән?
Былбыл ҡоштар һайрарға
Ҡыҙыл гөлдәр бар микән?
Ҡыҙыл йөҙлө Буҙйегет,
Был уйында бар микән? —

гине. Мәжлестәгеләр араһынан бер егет, Хәфизәне танып, уға былай тип яуаплай:

— Дөйә килеп буҙлаһа,
Бутаһы унын юҡ, сибәр.
Бута күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ, сибәр.
Һыйыр килеп мөңрәһә,
Быҙауы унын юҡ, сибәр.
Быҙау күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ, сибәр.
Ҡуйҙар килеп мөңрәһә,
Ҡуҙыйы унын юҡ, сибәр.
Ҡуҙый* күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ, сибәр.
Былбыл ҡоштар һайрарға,
Ҡыҙыл гөлдәр юҡ, сибәр.
Ҡыҙыл йөҙлө Буҙйегет
Был уйында юҡ, сибәр.
Ҡарағайлы ҡара урман
Үҫмәҫ ергә киткән ул.
Ғүмерең буйы көтһәң дә,
Килмәҫ ергә киткән ул.
Буҙлаған дөйә бутаһын
Бүре алғанға оҡшаны.
Буҙйегеттең яҙмышы
Хәйер алғанға оҡшаны,
Донъялағы иң дуҫы
Тол ҡалғанға оҡшаны.

Ҡыҙ, егеттән был һүҙҙәрҙе ишеткәндән һуң, Буҙйегеттең үлтерелгәнен аңлап, зар-зар илап, атаһы янына килә һәм:

— Ишеттем мин, эй ата,
Ах-вахтарға илтеп һин,
Мораҙыңа еттең һин,
Ҡалын таш ҡала эсендә
Бала шоңҡар атып һин,
Беҙ алдыңа килгәндә,
Бәндә салыуың етмәне,
Тоҙаҡ ҡороп яттың һин,
Бала кейек аттың һин,*
Мораҙына батып һин
Беҙ алдыңа килгәндә,
Беҙгә салыусы етмәне.
Атҡа менеп, атам, һин,
Дошманыңды салып һин —
Донъя һинә киң ҡалды,
Үлмәҫ хәбәр уҡып һин.

Бер көн, атам, иларһың,
Күп ҡайғылы буларһың.
Эш үткән һуң, файҙа юҡ,
Япраҡтай һулырһың.
Уйлағаның белдем мин:
Уйың һинең шул икән,
Буҙйегетте үлтереп,
Алтын тәхеткә ултырып,
Мөстән аяҡ тултырып,*
Был Зәйтүнде килтереп,
Йорт эсендә туйың бар,
Һинең ниндәй уйың бар?
Тимер алтын булмаҫ та,
Баҡыр көмөш булмаҫ та,
Һинең һөйгән Зәйтүнең,
Һынын алтын итһәң дә,
[Берәү түгел, мең Зәйтүн,
Килтерһәң дә, иш итмәм,
Буҙйегеткә тиң итмәм], —

ти. Хан халыҡ оҫталарын йыйып, ҡыҙына бик шәп итеп һарай төҙөргә әмер бирә. Хәфизә шул матур һарайға ҡарап ҡайғыһын онотор, тип уйлай ул. Бер йөҙ ҙә ҡырҡ оҫта килеп, бер йөҙ ҡырҡ һигеҙ көндә һарайҙы эшләп тә бөтәләр. Һарай алтын менән нағышланған, семәрләп эшләнгән була. Һәм уның эсендә былбыл ҡоштар һайраған, көҙгөләй ялтырап торған күле булған. Былдай һарай бер ерҙә лә булмай. Былар [Хәфизәне] йыуатыр, тип уйлаған хан. Оҫталарға ла күп итеп алтын-көмөш биргән. Ә Хәфизә, зар-зар илап, үҙенең һарайына килә. Киман унда диуана булып, башын түбән ҡуйып илап ҡайғыра.

Хәфизә ҡырҡ ҡыҙына ҡарап былай тигән:

— Йәр-йәр иткән йәрҙәрем,
Иҫән булһаң, хушлармын,
Бергә үтәр көн булды,
Һеҙҙән китәр көн булды.
Инде беҙҙе күрмәк юҡ,
Айырылмай, йөрөмәк юҡ,
Донъя фани булһа ла,
Терелеп, йәнә үлмәк юҡ.
Беҙгә барыр көн булды,
Һеҙгә ҡалыр көн булды.
Яман, яҡшы белмәнем,
Беҙҙән рәнйеү алғандыр,
Фатиха уҡып йөрөгөҙ.
Торғанға йәр табылыр,*
Ауырыуға им табылыр,
Һағыныуҙан — юҡ, дуҫларым.
Һеҙгә лә көн табылыр.

Боронғолай булырһығыҙ,
Уйнап-көлөп йөрөрһөгөҙ,
Теләгәнегеҙ алдығыҙға,
Алла мәхрүм ҡылалмаç,
Беҙҙән донъя үтептер,
Инде тереклек юҡтыр —
Әжәлдән һис кем ҡалмайҙыр.
Минең өсөн иламағыҙ,
Миндәй бер ҡыҙ табылыр,
Терегә йәр табылыр,
Килә тиһәм дә, килмәçте,
Зар ҡылһам да, булмаçты.
Беҙҙәргә заман булған юҡ,
Хәкиҡәт йәр булған юҡ.
Күрәсәгең күреhегеҙ,
Һеҙҙең балларығыҙ алдығыҙҙа,
Уйнап-көлөп йөрөрһөгөҙ,
Башығыҙ йәш, дуçтарым,
Иçән булың, дуçтарым,
Аман булың, дуçтарым!

Хәфизәгә яуап итеп ҡырҡ ҡыҙҙың араһынан берәүһе былай тигән:

— Әүәл, Хаҡтан теләйем,*
Икенсе, һиңә илайым:
Йән-йән дуçым, йән дуçым,
Бер аҙ тере торһана,
Күп ҡыҙҙарың эсенә,
Ҡайт, йәнем, ҡайтһана!
Юлдаштарың — зарлы итмә,
[Ҡуҙыйҙарын юғалткан]
Ҡуйҙай булып ҡалмаһын,
Алтын биҙәк — аҡ һарай,
Ерҙә ҡоро ҡалмаһын,*
Ҡырк ҡыҙың ҡалайта,
Ер йөҙөндә ҡалғас та?
Буҙлай-буҙлай ҡалмаһын,
Донъянан өмөт өҙмәгеҙ,
Төйәгеңде боҙмағыҙ,
Төшөндәге йәрҙәрҙең
Зар серендән булмаһын,
Алтын, көмөш [барсаһы]
Ят ҡулына ҡалмаһын.

Ҡайт, йәнем, ҡайтһана,
Һәр кемгә өмөт булһана!

Хәфизә яуап итеп тағы бер шиғыр әйткән:

— Берәү әжәлегеҙ булһа,
Ни ҡылһан да, булмаçтыр.

Донъяның киң дулаты,*
Донъяның эсендә ҡала ул.
Ҡалырым ағаң ҡашында,
Илаһа ла, булмаҫтыр.
Атам, инәм ҡашында,
Илаһа ла, булмаҫтыр.
Донъяның киң дулаты,
Һәр кемгә өлөш булыр ул.
Үлмәккә хәйлә булмаҫтыр,
Алтын-биҙәк киң һарай
Бераүгә өлөш булыр ул.
[Бәндә ни ҙә ҡылалмаҫ]
Үлемгә хәйлә булмаҫ.

Атанан да киткәнмен,
Инәнән дә киткәнмен.
Ҡаты дәрткә* юлыҡтым,
Терел, тиһәгеҙ ҙә, терелмәм.
Ҡолонсаҡтай булғанмын,
Ем бирһәң дә, әүрәмәм,
Инде әйтер һүҙем юҡ,
Һүҙем ҡалыр, үҙем юҡ,
Хуш булығыҙ, хуштарым,
Бәхил булың, дуҫтарым.

Хәфизә кейә торған кейемдәрен ҡулына алып бәхилләшкән:

— Алтын яға, хуш туным,*
Һине кейер кешем юҡ.
Алтын әйәр буҙ юрғам,*
Һиңә менәр кешем юҡ.
Алтын биҙәк киң һарай,
Һиңә керәр кешем юҡ.
Инәм беҙҙе күп күрҙе,*
Үлмәҫ икән, тип белде.
Айҙан ул тыуҙырып,
Көндән ҡыҙ тыуҙырып,
Хан Зәйтүнгә бирһен ул.

Киман диуана булып ята. Ҡыҙҙың бындай һүҙҙәрен ишеткәс, былай тип яуаплай:

— Айырылырың белдем мин,
Мөһөрбаным олораҡ,
Ете көндәр булдым зар.
Инде бағланышыр телдәрең,
Күп теләгәнең ҡылмайынса,
Үтте һинең көндәрең.
Йәнең йәннәт эсендә,
Мөһөрбаным олораҡ.

Тау башынан осканда,
Дуҫты калды артында,
Мөһөрбаным олорак,
Йәрең йәннәт эсендә.

Хәфизә меҫкендәрҙе, етемдәрҙе йыйҙырып алып алтын, көмөштәрен, булған хазиналарын, хәйер итеп уларға таратып бирә лә шулай ти:

— Һау булығыҙ, дуҫларым,
Беҙҙән донъя үткәндер.
Донъя һеҙгә калаҙыр,
Иҫән булығыҙ, дуҫтарым.
Беҙ — ямандар үтербеҙ,
Әхирәткә етербеҙ.
Һеҙ — якшылар, калығыҙ,
Мораҙына етегеҙ.
Һеҙ калаһыҙ, дуҫтарым,
Атама әйтегеҙ һүҙемде.
Хәсрәт алды үҙемде.
Донъя атама киң калды —
Корбан кылдым үҙемде.
Сын йәремдән калғым юк,
Бүтән йәргә барғым юк,
Был үлемдән калғым юк,
Иҫән булғыҙ, дуҫтарым.

Хәфизә, был бәйетте әйткәндән һуң, алмас бысағын алып, кәбер һарайына инә. Эстән ишеген бикләй һәм Буҙйегеттең мәйетен косаклап, үҙ-үҙен мәйет кыла.

Йыйылған халык, был хәлде күреп, зар-зар илаша. Кемдер был турала Таһимас ханға барып әйтә. Таһимас хан: «Эш үткәс, файҙа юк», — ти. Буҙйегет менән Хәфизәнең кәүҙәһенән һын эшләй һәм үҙенсә кайғырған була.

Хан кыҙы үлгәс кырк кыҙ ҙа бер юлы донъянан китәләр. Уларҙы ла бер урынга күмәләр.

Киман, был хәлде күреп: «Ике дуҫымдан да калдым, үләйем», — тип уйлай һәм капыл дуҫының сәләм-аманат әйтеүе иҫенә килеп төшә. «Яман дуҫ булмам, ысын дуҫ булам», — тип, Бәғдәт шәһәренә кайтып китә. Кайтыр алдынан Буҙйегеттең кәберен косаклап:

— Мин кайтырға уй кылдым,
Мөһөрбаным олорак.
Кеме менән йөрөрмөн,
Кеме дуҫым итермен?
Мөһөрбаным олорак,
Һин иҫемә төшкәндә,
Киткем килмәй янындан,
Илаһам да, файҙа юк,
Күҙҙән аккан йәшемдән.

Ҡайғы менән эскән аш,
Ҡыҙыл ҡанға оҡшайҙыр.
Ҡайтайым тиһәм йортома,
Ҡайғым баштан ашҡандыр.
Күп тубынан айырылған,
Ҡаҙҙай булып ҡалғанмын,
Инәһе үлгән балалай,
Буҙҙай-буҙҙай ҡалдым мин.
Йәнем Хаҡҡа тапшырҙым,
Йәрең бергә — ҡашында.
Яңғыҙлыҡта ҡалып мин,
Юлдашым юҡ ҡаршымда,
Янған донъя эсендә,
Ҡушылыр көн булырмы?
Гүр эсендә берәр көн,
Бергә ятыр көн булырмы, —

тигән. Киман, зар-зар илап, ҡырҡ алты көндә Малтия шәһәренән Бәғдәт шәһәренә ҡайтып китә. Уның ҡайтҡанын ишетеп, бөтә кешеләр Буҙйегеттең хәлен һорашалар. Киман хәлде һөйләп бирә. Ҡайғылы хәбәр ишеткәс, бик ҡайғыра халыҡ. Ҡайғылы хәбәрҙе ханға нисек әйтергә лә белмәйҙәр. Был эш бер вәзиргә ҡушыла. Ә хан был саҡ мең кешелек ғәскәрен Буҙйегетте эҙләргә ебәрә. Әммә улар Буҙйегетһеҙ ҡайта. Ғабдулла хан, Кимандың яңғыҙ ҡайтҡанын ишеткәс, ҡайғыра башлай һәм был һайланған вәзир сығып:

— Был оло көндөр, ханым, иламағыҙ. Буҙйегет һау, сәләмәт. Таһимас хандың ҡыҙын алған, үҙе шунда батша хәҙер. Һеҙгә Киман аша сәләм әйткән, туй яһап, байрам итергә ҡушҡан, — тигән. Хан был һүҙҙәргә ышанып, ҡуйҙар һуйҙырған, буҙа, шарап әҙерләткән, һорнай вә карнай уйнатылған. Туйҙа ҡари* ҡарт әкрен тауыш менән йырлай башлай:

— Күпте күргән ҡарт инем,
Бер аҙ йырҙар йырлайым.
Ҡолаҡ һалығыҙ, яҡшылар!
Был донъяла файҙа юҡ,
Ғибрәт алығыҙ, егеттәр:
Ҡариҙарҙың һүҙен
Күңеленә алың, егеттәр,
Яҡшыларҙың һүҙенә
Ҡолағына алың, егеттәр.
Ҡариҙарҙа — иҫке һүҙ —
Иҫкә алмай, йөрөмәгеҙ;
Ғалимдар әйткән һүҙ,
Күңелгә алмай, йөрөмәгеҙ;
Ҡариҙарҙың йыры — һүҙ —
Ен-шайтанды ҡырған һүҙ;
Ҡариҙарҙың йыры-һүҙ —
Пәйғәмбәрҙән ҡалған һүҙ.

Көсөм бар, тип ҡыуанма —
Көсөң китәр көн булыр;
Янған тамуҡ эсенә
Сиратҡа әйҙәр көн булыр.
Балам бар, тип ҡыуанма,
Баланан ҡалыр көн булыр;
Ҡиәмәт көн — ҡаты көн —
Яҡшы күргән баланы
Күңелгә алмаҫ көн булыр;
Малым бар, тип ҡыуанма —
Малың китер көн булыр;
Ҡыҙыл йөҙгә ҡыуанма —
Һулып ҡалыр көн булыр;
Ҡорт-ҡырмыҫҡа йыйылып,
Тәнең талар көн булыр;
Батшамын, тип уйлаһаң,
Искәнйәр* һәм Сөләймән,*
Улар[ҙа] үткән донъянан;
Балам бар, тип, уйлаһаң,
[Баланан ҡалыр көн булыр];
Малы һинән күп булған,
Ҡаруан[да]* үткән донъянан;
Көслөмөн, тип уйлаһаң,
Көсөң китер көн булыр;
Ҡәһәрмән мән Ғәли,*
Улар ҙа үткән донъянан;
Түрәмен, тип уйлаһаң,
Нисә һеҙҙәй түрәләр
Илап үткән донъянан;
Ҡариҙарҙың йыры-һүҙ —
Пәйғәмбәрҙән ҡалған һүҙ,
Хоҙайымдың дуҫтары,
Күңелгә алып йөрөгән һүҙ;
Елгән аттан ел ҡалыр,
Тапҡан ирҙән мал ҡалыр;
Батшаларҙан тағ* ҡалыр,
Йөрөгәндәрҙән юл ҡалыр;
Ир башына эш төшһә,
Донъя бары юҡ булыр;
Ғалимдарҙан хат ҡалыр,
[Атлыларҙан ат ҡалыр];
Уйлап торһаң, егеттәр,
Был донъяла кем ҡалыр?
Ҡатын үлһә, тол ҡалыр,
Байҙан кейгән тун ҡалыр,
Эттәй, шаулап, талашып,
Кем өлгөр шул алыр.

Ҡари бабай үлем йырын йырлай*:

— Тыуғанмын, тип, ҡыуанма,
Тыуһаң, үлгән көн булыр;
Үлгән кемең артынан
Һорау килер көн булыр;
Бер үҙеңдән баш ҡылып,
Иҫкә алмаҫ көн булыр;
Теллемен тип ҡыуанма,
Телеңде бәйләр көн булыр;

Ошо ергә еткәс, хан илай башлаған. Ҡари бабай өсөнсө йырын һамаҡлай:

— Яраланһаң, шымырбыҙ,
Был донъянан китербеҙ,
Илай-илай, үтербеҙ,
Был донъянан китербеҙ;
Сарабыҙ юҡ, шымырбыҙ,
Әмер килһә Алланан
[Ҡиблаға күҙ атырбыҙ];
Муйын һоноп, ятырбыҙ
Тәнебеҙ, сереп, күл булыр,
[Ана шундай көн булыр].

Ҡари, ханымға ҡарап, былай, ти:

— Ханым, һүҙем шул һиңә:
Аман-иҫән йөрөгөҙ,
Алланан әмер килгәндә,
Сабырһыҙҙан насар юҡ —
Бигерәк сабыр ҡылығыҙ!
Бер-ике көн ҡунаҡбыҙ,*
Үҙең уны беләһең.
Ҡиәмәт көн булғанда,
Шунда һеҙ ҙә барғанда,
Улыбыҙҙы күргәндә,
Ҡауышып, күрешерһегеҙ...

Йыйылған халыҡтар барыһы ла, сыҙай алмай, йәшкә күмелә. Ә Буҙйегеттең әсәһе балаһын юкһынып былай тип [һыҡтаны, ти]:

— Бауырымдың пәрәһе,
Ике күҙем ҡараһы.
Йәнем һөйгән, йән балам,
Һөймәй ҡалдым йөҙөңдө.
Һине ҡайҙа күрермен,
Кемде балам итермен?
Һин иҫемә төшкәндә,
Нисек түҙеп йөрөрмөн?

Оҙон юлға киткәндә,
Әйтмәй киттең һүҙенде —
Күрмәй ҡалдым йөҙөндө,
Был хәсрәттән, йән балам,
Һөймәй ҡалдым күҙеңде.
Алыҫ юлға киттең һин,
Сәләм әйтһәм, ишетмәнең.
Буталы дөйә буҙлаһа,
Иҫкә шунда төшәһең,
Дөйә килеп бутаһын
[Эҙләгәндә, нишләрмен],
Иҫкә шунда төшәрһең.
Ҡарап өйҙән, тапмаһам,
Һине ҡайҙан табырмын,
Кемде һиндәй һөйәрмен?
Һинән башҡа, йән балам,
Күҙ күреүем юҡ инде.
Йәнем һөйгән, йән балам,
Айырылғаным, юҡ инде,
Иркәләүем юҡ инде.
Үҙең яңғыҙ бала инең
Алдым асыҡ — балам юҡ,
Күҙ алдымда бар булһа,
Үлмәҫ ине ҡолоном,
Үлгән еренә бармаһам,
Яңғыҙымдың ҡәберен
Күрмәй, күңелем булмаҫ та...

Ханым көн-төн иланы, аш-һыу эсмәне. Хан да нык ҡайғырған. Ахыры, ун мең кеше әҙерләп, ул үҙенең урынына бер яҡшы, ышаныслы вәзирен ҡалдыра ла Малтия яғына сығып китә. Улар юлда утыҙ алты көн, утыҙ алты төн тороп, Малтияға барып етәләр. Таһимас хан Ғабдулла хандың килеүен ишетә һәм, уға ҡаршы килеп, түбәнселек менән сәләм бирә.

— Әй, хан, тәҡдир — Алланан, сәбәп — беҙҙән булғандыр. Ни ҡылһағыҙ ҙа, ирек һеҙҙә, — ти. Таһимас хан ҡылысын да ҡынынан һурып сығарып һала.

— Тәҡдир — Алланан, сәбәп — һеҙҙән булһа, файҙа юҡ, эш үткән инде. Мәхшәр көнөндә Алла үҙе яза бирһен һиңә! — ти Ғабдулла хан.

Буҙйегеттең әсәһе ун ай буйы улының ҡәбере янынан китмәне.

— Ун ай һине күтәреп,
Имсәгемде имеҙеп,
Татлы аштар ашатып,
Аҫыраған әсәң мин,
Әсәң килде ҡаршыңа,
Күрмәҫ ергә кереп һин,
Торсо, балам, торһаңсы,

Моңло килгән әсәндең
Бер генә йөҙөн күрһәңсе,
Хәлемде бер генә һораһаңсы.
Һине килдем күрергә,
Бит-ауыҙынды һөйәргә.
Артыңда кем ҡалалыр,
Ҡолоном кем булалыр?
Һине эҙләп зарланһам,
Ҡан күҙемә тулалыр,
Һай-һай, балам, һай балам,
Ҡемде, балам, тиермен,
Ҡемдәр менән йөрөрмөн,
Йөҙөң ҡайҙа күрермен?
Уҡыһам ине һүҙеңде,
Күрһәм ине йөҙөңдө,
Зарлы әсәң килгәндә,
Илап-һыҡтап торғанда,
Күрһәтһәңсе йөҙөңдө,
Әйтһәңсе бер һүҙеңде.
Моңло булған, эй балам,
Илап әсәң килгәндә.
Тормайһыңмы, йән балам,
Күрмәйһеңме, йән балам?
Эҙләп килдем, йән балам,
Ҡырҡ көнлөк ерҙәрҙән,
Алыҫ-алыҫ илдәрҙән.
Торсо, балам, торһаңсы,
Йөҙөңдө бер күрһәмсе!

Был ерҙә бөтәһе алтмыш ҡәбер булған. Әсәнең ҡайғылы һүҙҙәренән бөтә ер геүләп, иңрәп торған. Хан менән ханымдың ҡайғыһы ҙур булһа ла, Ҡари ҡарт тағы ла йырлай башлаған бында:

— Балаңа, хан, илама,
Беҙҙән элек китте, тип.
Улар китте атаға,
Ата менән анаға.
Әжәл етмәй, үлем юҡ,
Алла әмерен белмәк юҡ.
Әжәл етмәй, үлем юҡ,
Һис кем барып алмаҡ юҡ;
Инәнән бер тыуғанһың,
Һис кем үлмәй ҡалмаҡ юҡ;
Ҡатын ҡалһа, ир табыр,
Бала ҡалһа, мал табыр,
Малһыҙ ҡалһа, ер табыр,
Йән үлемгә киткәндә,
Ғәрип башың ни табыр?
Үҙе буйы ер табыр...
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .

Ишекте боҙоп, эскә инәләр: унда ҡыҙ Буҙйегетте ҡосаҡлаған (хәлдә күрәләр). Йөҙҙәре йоҡоға киткәндәге һымаҡ күренә. Ғабдулла түҙмәй, уларҙы ҡосаҡлап илай. Көн аяҙ булһа ла, был ваҡыт күк күкрәй, ер һелкенә. Халыҡ ҡурҡышып тышҡа атыла. Һәм улар сығып бөтөүе булды — ишек ҡаты итеп ябылды, ти. Кешеләр ул кәберҙе ҡабат боҙмаҫҡа булалар. Ә ханым Аллаға үпкәләп иланы, ти:

— Һай-һай, донъя, һай, донъя,
Яңғыҙыңда ҡайғы юҡ,
Алып-алып, туйғаның юҡ,
Аяуың юҡ ярлыны,
Һайлауың юҡ зарлыны;
Юлдашынан айырып,
Ата-инәнән айырып,
Алып-алып туйғаның юҡ;
Ҡара ерге алып һин,
Рәхимең юҡ, әй, донъя!

Ғабдулла хан, үҙ иленә ҡайтып, бер кемгә лә насарлыҡ күрһәтмәй, йәшәүендә булды. Ә Ҡиман дуҫы янында ҡала:

— Таш ҡапҡаны ябып һин,
Айыраңмы, йән дуҫым,
Дуҫың килде күрергә,
Ғүмергә бергә йөрөргә,
Ишегең ас, йән дуҫым,
Мин әҙермен керергә.
Һеҙ икәүһеҙ — мин яңғыҙ,
Хеҙмәтеңә йөрөргә,
Аҡ йөҙөңдө күрергә,
Хәл-әхүәл белергә,
Бер туғандай ҡәрҙәшмен,
Йәнем һөйгән юлдашым,
Хәсрәт көндә моңдашым,
Донъяла беҙ бар инек,
Бик мөһөрбан йән инек,
Йәнем ҡайт, йән дуҫым,
Бергә йөрөр йән инек...

# 1. ТАҺИР МЕНӘН ЗӨҺРӘ

*(Теләкәева Рәхилә варианты)*

Элекке заманда бер хан йәшәгән. Уның бер ҙә балаһы булмай. Бының бер ышаныслы вәзире лә бар икән. Уныһының да балаһы юҡ икән.

Бер саҡ хан йортона үткенсе бер теләксе килә. Изге теләк теләп ала ла был әйтә:

— Хандың да, вәзирҙең дә балалары булыр. Хандыҡы — ҡыҙ, вәзирҙеке малай булыр. Шул ҡыҙҙы ана шул вәзирҙең малайына бирерһегеҙ. Шулай итһәгеҙ, ул балалар бәхетле булыр, — ти.

Көндәр үтә, туғыҙ ай етә. Ике өйҙә ике бала донъяға килә: береһе ҡыҙ, береһе ир бала. Хандың ҡыҙына Зөһрә тип, вәзирҙең улына Таһир тип исем ҡушалар.

Балалар бергә үҫәләр, бергә йөрөйҙәр, бергә уйнайҙар. Шулай ун берләргә етәләр. Ун өскә сыҡҡанда, быларҙың икеһенең дә күңелендә ғишыҡ уты тоҡанып китә. Таһир — Зөһрәне, Зөһрә Таһирҙы ярата башлай.

Вәзир улы — Таһирҙыр,
Һәммә эшкә маһирҙыр,
Бер күреүҙән Зөһрәне,
Ғишыҡ илә янырҙыр.

Таһир әйтте Зөһрәгә:

— Сәни сәүәм[1] үлгәнсе,
Ризыҡ бөтөп, тәҡдир етеп,
Ҡара гүргә кергәнсе.

Зөһрәдер хандың ҡыҙы,
Айҙай һылыуҙыр йөҙө.
Ғишыҡ уты берлә тулды
Таһирға әйткән һүҙе.

Зөһрә әйтте Таһирға:

— Ғашиҡ булдым ғүмергә,
Насип булһын икебеҙгә
Гүргә бергә керергә.

Былар шулай бер-береһенә ғишыҡ тотоп йөрөгәндә хандың ҡоло Ҡара Ғәрәп күреп ҡала ла барып ошаҡлай. Хандың бойороғо менән Таһирҙы тотоп алалар ҙа, һандыҡҡа һалып, Шат йылғаһына ағыҙып ебәрәләр,.

Һандыҡ ағып китә. Әй китә, әй китә, күп көндәр, айҙар үтә. Бер саҡ Гөл батша еренә барып сыға. Гөл батшаның ҡыҙҙары һыу буйына уйынға сыҡҡандар икән, һандыҡты күреп ҡалалар ҙа, туҡтатып, ярға сығаралар. Асып ҡараһалар — эсендә бик матур егет ята. Береһе әйтә:

— Минеке!

Икенсе әйтә:

— Минеке!

Өсөнсөһө әйтә:

— Минеке! Мин башлап күрҙем, — ти. Шунан былар егеткә йыр менән һүҙ башлайҙар.

— Шат һыуҙары тәрәнме икән,
Тәрән ере билдәнме икән,
Был ҡәҙәрле сибәр егет
Ҡайһы илдәрҙән килгән икән?!

Шат һыуҙары ағын икән,
Ағын ере типһәң икән,
Матур егет, сибәр егет,
Исемеңде әйтһәң икән.

Таһирҙың әйткәне:

— Таһир булыр бәнем атым,
Вәзир булыр бәнем атам,
Яуыз хандың әмере илә
Һандыҡ төпләрендә ятам.

Яуыз хандың әмере илә,
Йәшләй михнәт сигеп йөргән,
Уны күргән, быны күргән,
Күп илдәрҙе гиҙеп йөргән
Таһир атлы егет булам,
Таһир атлы егет булам.

Ҡыҙҙарҙың әйткәне:

— Йәшләй михнәт сигеп йөргән,
Таһир атлы егет булһаң,
Уны күргән, быны күргән,

Күпте күргән егет булһаң —
Үҙ илеңә ҡайтма кире,
Әгәр беҙҙе яҡын күрһәң,
Беҙҙең илде матур күрһәң,
Һүҙебеҙҙе яҡын итһәң,
Үҙебеҙҙе яҡын итһәң.

Таһирҙың әйткәне:

— Атам-әсәм ҡалды минең,
Тыуған ерем ҡалды минең,
Тыуған үҫкән ерләремдә
Йән Зөһ(е)рәм ҡалды минең.
Ҡайтаһым бар илдәремә,
Уйнап үҫкән ерҙәремә —
Зөһ(ө)рәмдең ғишҡы иләә
Һары сыҡты йөҙҙәремә.

Ҡайтаһым бар илдәремә,
Тыуған үҫкән ерләремә,
Зөһ(ө)рәмде һөйөр өсөн,
Ҡыҫып нескә билләренән.

Шулай итеп, Таһир былар янында ҡалмай, үҙ иленә ҡайтып китә.

Ҡөтөүсе кейеме кейеп, ул, күҙ яҙҙырып ҡына, Зөһрәне саҡыртып ала.

Былар икәүләп ҡасырға булалар. Сығып китәр сәғәттәре еткәндә генә, әлеге Ҡара Ғәрәп күреп ҡала. Таһирҙы танып алып, тағы барып ошаҡлай. Тағы тоттора. Таһирҙы ҡабат зинданға ябалар.

Таһирға хөкөмдө хан үҙе сығара.

— Майҙанға сығып, халыҡ алдында өс йыр йырлаһын. Йырында Зөһрәнең исемен әйтмәһә, ҡотолдорам. Әгәр ҙә мәгәр Зөһрәнең исеме әйтелһә, шунда уҡ башын сабып өҙҙөрәм, — ти хан.

Халыҡ йыйыла. Таһирҙы майҙанға алып сығалар. Таһир халыҡ алдында йырлай башлай. Берҙе йырлай, икене йырлай был. Өсөнсөһөндә, Зөһрәнең исемен ҡушмай булдыра алмай. Таһирҙың ауыҙынан «Зөһрә» тигән исем ишетелеүе була — [киләә] килеп быныҥ башын өҙә сабып тә ташлайҙар.

«Таһир үлгәндән һуң, минә донъя бөттө», — тип, Зөһрә үҙен [үҙе] сәнсеп үлтерә.

Уларҙың икеһен йәнәшә күмәләр.

Ҡәберҙәренән ике гөл ҡалҡып сыға, уралып-уралып үҫеп китә ул гөлдәр.



## 2. ТАҺИР МЕНӘН ЗӨҺРӘ

*(Булатов Зәкәриә варианты)*

Борон-борон заманда Үләрхан менән Үлмәҫхан исемле ике хан йәшәгән. Бик яҡын дуҫтар булғандар. Шулай көндәрҙән бер көн уңышһыҙ һунарҙан ҡайтып килгәндә, ҡыуаҡ артынан бер [ғоманлы] ҡуян сығып ҡасҡан. Һунарсылар, һин ат та, мин ат, тип торғансы, ҡуян күҙҙән дә юғалған, ти. Шунан Үләрхан:

— Ярай, атмағанбыҙ! Хәйерле булһын. Өйҙә ҡатындарыбыҙ ғоманлы ҡалғайны, ҡайтайыҡ, — тип ҡуйған, ти.

Ҡайтһалар, Үләрхандың улы булып, Үлмәҫхандың ҡыҙы донъяға килеп торған. Малайға Таһир тип ҡыҙға Зөһрә тип исем ҡушып, ҙур байрам яһап, былярҙан ҡолаҡ тешләттереп, шул турала Ҡөрьән ситенә яҙып ҡуйғандар.

Яҡшы, инде ҡоҙалар булышырбыҙ, тип йәшәп ятҡанда, Үләрхан үлгән дә киткән. Етем ҡалған Таһир Зөһрә менән мәҙрәсәгә йөрөй башлаған икән. Шулай бер ваҡыт Ҡөрьән ситенән Таһир бәләкәй ваҡытында Зөһрәнең ҡолағын тешләүе тураһында белеп ҡалған. Шуны белгәс, был балалар, бер-береһен яҡын күреп, йөрөй башлағандар, ти. Уларҙың дуҫлыҡтарын һиҙеп ҡалған уҡытыусы Үлмәҫханға барып:

— Ханым, Таһир теге серҙе белде бит, — тип әйткән, ти.

Шунан Үлмәҫхан етем балаға, затһыҙ кешегә, ҡыҙын бирмәҫ өсөн, яҡындары менән ултырып тороп хәйлә ҡора башлаған. Уйлай торғас, хәйләне тапҡандар былар. Үлмәҫхан, ҙур ғына һандыҡ эшләтеп, ике баланы ла саҡырып килтергән дә:

— Ҡыҙым, кереп ҡара әле, һыяһың микән? — тигән. Зөһрә, кереп ҡараһа, һыя икән. Шунан хан:

— Улым Таһир, һин дә кереп ҡара инде, — ти икән.

Таһир һандыҡҡа керһә, тегене сей тирегә төрөп, һандыҡты шап иттереп ябып та ҡуйғандар, ти. Ул да булмай, хандың ҡушыуы буйынса, һандыҡты ағыҙып та ебәргәндәр. Һандыҡ эсенән Таһирҙың:

— Һыуҙар аға аҡма менән,
Әйләнмәгә баҡма менән
[Юҡ ғәйепте таҡма менән
Мине һинән айырҙылар].
Һине минән айырғандар,
[Ҡанатыбыҙ ҡайырғандар
Илашырҙар бер саҡ зар-зар],
Мәңге кералмай ожмахҡа, —

тигән һүҙҙәре генә ишетелеп ҡалған, ти.

Был шулай ағып бара икән, яр буйында йәшәгән бер тегермәнсенең өс ҡыҙы йыраҡтан бер ҡараҫҡының ағып килгәнен күреп ҡалған. Күргәндәр ҙә, йүгереп барып, аталарына хәбәр иткәндәр. Тегермәнсе:

— Тышҡынаһы оло ҡыҙыма, уртаһы — уртансы ҡыҙыма, эстәгеһе — кесе ҡыҙыма, — тигән.

һандыкты тотоп алып, ярға тартып сығарһалар, оло кыҙына — һандык, уртансыһына — сей тире, кесе кыҙына Таһир тейгән. Былар ни, бик матур йәшәп алып киткәндәр, бер кыҙҙары ла донъяға килгән.

Тегендә, Таһир киткәндән башлап, Зөһрә ай кибәһен көн кибеп, юкка сығып барғанда, бер карт:

— Йә, кыҙым, һөйлә һүҙеңде, Таһирҙы табышайым. Ни тип әйтергә? — тигәс, Зөһрә:

— Бабай, Таһирҙың үҙен алып кайта алмаһаң, такыяһын булһа ла алып кайтырға тырыш. Юлда ошолай:

«Елбер-елбер елләр иҫә,
Елләр менән еләк бешә.
Биктаһирҙың юклығына,
Янзөһ(ө)рә хайран итә», тип көйләп бар, — тип

оҙатып калған.

Карт, шулай һамаклап йөрөй торғас, бер кара урманда кырк каракка тап булған, ти.

— Инде, уландар, мине ебәрегеҙ, кайтып барышлай кырк беренсе юлдашығыҙ мин булырмын, — тигәс кенә, ебәргәндәр, ти, быны.

Карт, шулай һамаклап, донъя гиҙеп йөрөй торғас, Таһир йәшәгән ерҙе килеп тапкан. Таһирҙы тапкан да Зөһрәнең һағынып һарғайыуын әйткән, бынан нисек кайтырға юлды өйрәткән:

— Улым, юлда кырк бер каракка осрарһың, үҙең менән кырк бер сапан ал, бөтәһен дә таратып бирерһең, мин алмам, мине шунан танырһың, — тигән дә карт кайтыр юлына китеп тә барған.

Таһир кайтып, бабаһы, кыҙы эргәһенә кереп:

— Атым минен елмеш, имеш,
Камсым һабы көмөш, имеш,
Янзөһрәнән хәбәр килмеш
[Шуға мин илемә елмеш], —

тип хәбәр итеп, үҙенең кайтасағы турaһында әйткән. Шул вакытта катыны кыҙына инәлер асыуланып һуккан икән. Таһир:

— Кыҙ балаға һукмағыҙ,
[Һукканға булыр яҙык],
(Кыҙ баланың биле нәҙек).
Кыҙ баланы һурып үпһән,
Кырк көнлөк булыр аҙык, —

тигән дә донъяһын калдырып кайтып киткән.

Таһир юлда, карт өйрәткәнсә эшләп, каракларҙан котолоп үтеп киткән. Зөһрә кырына кайтып кергәс, иркен тын алайым тип, башын тәҙрәнән сығарған икән, Үлмәҫхандың һаксылары тегенең башын сабып өҙгәндәр. Быны күреп калған Зөһрә лә үҙен үҙе үлтергән. Шулай итеп, былар кауышып донъя көтә алмағандар, ти.

# 3. ТАҺИР МЕНӘН ЗӨҺРӘ

*(Ғарифуллин Сабирйән варианты)*

Борон, хандар-батшалар заманында, булған был ғибрәт фажиғә.

Таһир менән Зөһрә исемле бер егет менән бер ҡыҙ йәшәгән. Зөһрә — батша ҡыҙы, Таһир етем үҫкән. Икеһе лә бик һылыу булған, ун ике йыл бергә уҡығандар бер китаптан. Бер-береһен бик яҡын күргәндәр, гел бергә булғандар. Таһир — Зөһрәне, Зөһрә Таһирҙы яратҡан. Тик ҡыҙҙың атаһы, батша ҫулғас ни, риза түгел икән быға.

Атаһынан бигерәк әсәһе ҡаршы.

— Бер етемәккә ҡыҙ биреү — үҙе оят! — тип кенә тора, ти уныһы.

Шунан ни, нишләһендәр былар, аптырайҙар инде. Таһирҙың апаһы булған икән, ул да әйтеп ҡарай:

— Эй, энем, батша ҡыҙы шикелле бүтән ҡыҙ табылмаҫ тип беләһеңме ни һин. Ал күңелеңде шунан! — ти икән апаһы.

— Апай, унан башҡа бүтәнде аласаҡ түгелмен, — ти Таһир.

Таһирҙың һәр ваҡыт Зөһрәне күреп тораһы килә. Апаһының күлдәген кейә лә Зөһрә ҡырына китә. Зөһрәне ҡараусы ҡыҙҙар ҙа бар инде, шунда барып йөрөй. Бергәләп уйнайҙар, шиғыр әйтешәләр.

Шулай йөрөй торғас, батша һиҙеп ҡалғандыр инде, бер ваҡыт Таһирҙы үҙ янына саҡыртып ала ла:

— Өс шиғыр әйт, тик береһенә лә Зөһрәнең исемен ҡушма, — ти.

Таһир шиғыр әйтә, икеһендә ҡушмай, ә өсөнсөһөндә ҡуша бит... Булдыра алмағандыр инде ҡушмайынса, ғашиҡ булғас ни.

Шунан батша, сей һыйыр тиреһенә урап, Шат һыуына ағыҙып ебәрергә ҡуша. Таһир, ҡурайым ҡалмаһын тип, үтенеп, ҡурайын һорап ала.

Шиғырҙар әйтеп, ҡурайын тартып ағып китә был хәҙер. Ағып бара, ағып бара, Гөл бадишаһына барып етә. Шул саҡ һыу ингән ике ҡыҙ ҡурай тауышын ишетеп ҡала. Әлән-йөлән ҡарана торғас, бер нәмә ағып килеүен күрәләр былар. Нисек етте шулай, ярға тартып сығаралар. Һыуҙа шешенеп, бүртенеп киткән тирене сисеп ебәрһәләр, ни күҙҙәре менән күрһендәр һыу һөлөгө шикелле егет килеп сыға. Хәҙер ҡыҙҙар талаша. «Шыбаға тотошайыҡ», — тип, өйгә алып ҡайталар.

Таһир бер ҡыҙға ла ҡарамай, тик ҡасыуҙы ғына уйлай.

Батшаның һарайы бейек таш ҡойма менән уратып алынған. Таһир бер ҙур ғына ташты арҡан осона бәйләй ҙә ҡойма аша ырғыта, шунан арҡанға үрмәләп, икенсе яҡҡа үҙе сыға. Тая был бынан.

Шул китеүҙән китә лә китә. Ҡараңғы төн, бер кем күрмәй. Бер күпергә барып етһә, ҡырҡ ҡараҡ баҫып тора. Нишләргә? Таһир быларға үҙенең ғишҡын һөйләй:

— Ай — миңә көндөҙҙөр,
Юл — миңә төп-төҙҙөр.[2]
Ебәрегеҙ, ҡырыҡ ҡәрендәш,
Сәүгән йәрем яңғыҙҙыр.

Шунан тегеләрҙең утыҙ туғыҙы әйтә:

— Ашайыҡ быны, — ти. Берәүһе:

— Беҙгә бер ҡабым да теймәй бит унан, китһен үҙ юлына! — ти. Ҡотола Таһир былардан. Ҡайтып етә лә апаһына ҡысҡыра:

— Эй, апай, һөйөнсө, мин ҡайттым! — ти.

— Шунда ғына ҡалһаң, ни була?! — ти апаһы.

— Мин Зөһрәгә барам, — ти Таһир. Түҙмәй инде бының йөрәге, Зөһрәгә ашҡына.

Зөһрә, Таһир киткәс, атаһына үпкәләп, ҡырҡ юл сатлығына йорт һалдырып, шунда йәшәй икән. Таһир шунда китә. Килһә, йорто һарап бейек бының, тәҙрә сиртеп кенә саҡырырлыҡ түгел. Егет йырлай:

— Мин килдем сәхәр ваҡытында,
Зөһрә ята тәхетендә.
Һөрәнләнем — уянманы,
Уяныр әле бәхетемдән.

Зөһрә:

— Бер һөрәнләнең, уяндым,
Уң яғыма таяндым.
Һин икәнде белмәнем,
Ҡарасонаҡтыр, тип уйланым.[3]

Зөһрәне шул Ҡарасонаҡҡа бирергә итәләр икән.

Таһир дилбегә менән үрмәләп менә лә тәҙрә аша керә. Икеһе лә бик шатлана, уйнап-көлөп, бергә йәшәйҙәр.

Зөһрәгә ике ҡыҙ аш ташый икән. Әлек аш артып ҡалып, кире алып китер булғандар; хәҙер икәү булғас, ашап бөтәләр. Зөһрә таҙарып, һимереп китә. Ҡәйефе лә бик шәп. Таһир ҡурай тарта, Зөһрә бейей.

Дөңкөлдөгө сыға икеһе илле кеше ҡәҙәре. Тауыштан ҡыҙҙары ла һиҙенә бының. Таһир килгәндер, тип уйлайҙар. Ҡарасонаҡ та, ишетеп ҡалып, батшаға барып әйтә. Кире килә һалып, ҡарауыллап тора. Батша ғәскәр ебәрә. Таһир һуғыша, әммә бер үҙе күпме ҡаршы тора алһын инде; тоталар быны. Таһирға ҡылыс менән сабып ҡарайҙар — ҡылыс ҡырҡмай.

Шунан Таһир әйтә:

— Шулай, көн еткәс, бер нейәҫтә лә эшләп булмай. Мәгеҙ, минең алмас ҡылысымды. Ул үҙ ауырлығы менән генә киҫеп төшөрә, — ти.

Алмас ҡылысты алып, шуның менән башын сабып өҙәләр, яуыздар!..

Был хәлдән һуң Зөһрә ауырып китә. Төрлө сараһын күрәләр, табиптәр килтереп ҡарайҙар — һис ниндәй дауа килешмәй быға.

Аптырайҙар инде. Шунан ғалимдар әйтә: «Әгәр Таһирҙың итен ашатмаһаң, Зөһрә йүнәлмәй», — тиҙәр. Таһирҙың бот итен ҡырҡып алып килтерәләр ҙә, ҡыуырып, Зөһрәгә еҫкәткәйнеләр, ҡыҙ күҙен асып, телгә килде, ти:

— Даһыр-доһор баҙарҙар,
Даһырҙашып китерҙәр.
Баҙарында ит бөтһә,
Таһир итен бирерҙәр, — ти.[1]

Һикереп тороп ултыра ла:

— Юҡ, ашамайым Таһир итен! — ти.

Зөһрәгә иҫ керҙе, тип шатланырға ла өлгөрмәнеләр, ҡыҙ атаһының бысағын алды ла бөтәһенең күҙ алдында үҙен үҙе салды ла ташланы, ти. Ҡарасонаҡ:

— Зөһрә үлгәс, мин дә йәшәмәйем, — тип, иҙән ҡыра торған бысаҡ менән муйынын ышҡый башлаһа, бер ҙә ҡырҡа алмай икән. Шулай ике көн үләлмәйенсә яткан ул йүнһеҙ!

Батша Зөһрәне, Ҡарасонаҡ менән ҡушлап, Шат йылғаһының ярына күмдерткән. Ә Таһирҙы — икенсе яҡка. Таһир ҡәберенән дә, Зөһрә ҡәберенән дә ике тирәк үҫеп сыҡкан. Ә Ҡарасонаҡ ҡәберендә ялбырҙап дегәнәк үҫкән.

Бына хикмәт: буйға зифа тирәктәр, әйтерһең ҡушылырға теләп, йылға аша бер-береһенә үрелгәндәр. Ҡарасонаҡ, бында ла ирек бирмәйенсә, дегәнәк булып араларына баҫкан...

Ана шулай үҙһүҙле батша, ярлыға бирмәйем тип, һөлөк кеүек егетте лә, үҙенең берҙән-бер ҡыҙын да харап иткән.



## 4. ТАҺИР МЕНӘН ЗӨҺРӘ

*(Усманова Хәнифә варианты)*

Зөһрә менән Таһир бишектә саҡта уҡ бер-береһенә никахта булғандар. «Улар никахлы», — тип, аталарының һайыҫкан тиреһенән тегелгән тундарының яғаһына яҙып ҡуйғандар. (Таһир менән Зөһрә икеһе ике яҡта булған. Нариндаръя, Амударъяларҙы үтергә кәрәк булған.) Сабый саҡта Таһир быны белмәгән.

Уҡый башлағас, Таһир гел бер ҡыҙ менән уйнаған. Шунда әйткәндәр:

— Ул бит һинең ҡыҙың түгел. Һинең ҡыҙың Зөһрә бит! — тигәндәр. Таһир инәһенә:

— Һин ниңә әйтмәнең миңә? Үҙегеҙ бит туҫтаҡ эсешкәнһегеҙ. Минең йәрәшкән ҡыҙым бар икән дә! — тигән, үпкәләп.

— Әй, балам, атайыңдар [туҫтаҡ эсешкәйне лә, торараҡ үҙараһы] ер бәхәсенән бит, бик йыраҡ күсеп киттек. Зөһрә шунда ҡалды. Уның артынан бараһы булма! [Барһаң да, файҙаһы булмаҫ, — тине, ти, әсәһе.]

— Юҡ, инәй, мин Зөһрәне табам, — тигән улы. Киткән эҙләп.

Бер тауға һарай һалдырып, кешегә, көнгә күрһәтмәй тота икән атаһы Зөһрәне.

Унда бер Ҡарағол тигән алама шайтан вәсвәсә булған.* Ҡарағол, Зөһрәне алам тип, бөтә ғүмерен, күңелен биргән. Зөһрәне күрәм тип өҙгөләнгән. Күрә алмаған. Зөһрәне бик күптәр күрергә тырышҡан. Әммә Зөһрәне атаһы күрһәтмәгән.

Зөһрәне эҙләргә китерен белгәс, Таһирҙы һандыҡҡа бикләгәндәр. Дошмандар һандыкты күҙҙең яуын алырҙай матур буятып, һағыҙлап япкандар. Шунан Нарыҙ диңгеҙенә ағыҙғандар. Айҙар, көндәр буйы һандыҡ ҙур даръяларҙан аҡҡан.

Бер бабайҙы илсе итеп Таһирҙың артынан ебәрәләр: һандыҡты ҡайҙа тотоп алырҙар икән, шуны аңдымаға.

Шиғыр әйтеп, Күк һыу менән дә, Ҡара урман менән дә, Тау-таш менән дә әйтешеп, һорашып китеп бара, ти:

— Фәлән ерҙән һандыҡ аҡты,
Китте икән ҡайҙа саҡлы?
Күрмәнеңме Күк һыуым?
— Минән үтте, ары китте, — тигән, ти, Күк һыу.
— Фәлән ерҙән, фәлән ерҙән
Эҙләп киләм, эҙләп киләм:
Һандыҡ аҡты, һандыҡ аҡты
Китте икән ҡайҙа саҡлы?
— Минән үтте, ары аҡты
Мин түгел шул уға һаҡҡы, —

тигән, ти, Ҡара урман.

— Фәлән-фәлән ерҙәрҙән,
Фәлән тигән илдәрҙән
Һиңә төбәп килгәнмен,
Һиңә һорау биргәнмен:
Ағып китте һандығым —
Ҡыуа төштөм яңғыҙым.
Күрмәнеңме Тау-ташым,
Күҙ өҫтөндәге ҡашым,
Аҡты һандығым, аҡты,
Ҡайҙарға барып һаҡты?

Тап ошо мәлдә бер ҡыҙ һыу буйына ҡыйғас* йыйырға барған. Ҡараһа — һандыҡ ағып бара. Ҡыҙҙа ҡыйғас ҡайғыһы киткән, йүгереп ҡайтып киткән. Ҡайтҡас, әйткән: «Бик матур һандыҡ күрҙем, тота алманым», — тигән. Был ҡыҙ Ҡарабатшаның Бөҙрәхыял исем-

ге кыҙы булған. Ул бик үтенгәс, атаһы, сапкын саптырып, теге һандыкты кыуып етеп, тотоп әпкилергә кушкан. Сапкын сапкан, һандыкты тоткан. Тоткан да апкайткан.

Шул мәлдә теге бабайҙың һорауына Тау-таш былай тип яуап биргән:

— Тау-таш, тимә — күҙе бар,
Әйтәм тиһә, һүҙе бар.
Ары барма, бире бар,
Ары барһаң, кире бар:
Карабатша иле бар,
Дауылһыҙ ҙа еле бар.
Шунда булыр һандығың,
Шунда уны табырһың,
Шунда уны тоттолар,
Эсендә хазина бар.

Тоткас, кыҙға асырға рөхсәт итмәгәндәр. Батшаның кулына кергән һандык. Батша аскыс ярата. Бер аскыс та тура килмәй. Шулай ҙа берәүһе менән аса. Асһалар, нур балкыған. Алтын икән, тип уйлаһалар, был бер һап-һары егет кеше, ти. Шунан атаһы әйткән:

— Һин үҙең тапкан өлөш, кыҙым, мин һине был егет менән никахлайым, балам, — тигән.

Таһирға бер аҙҙан һуш кергән. Теге кыҙ был матур егетте үбәм тиһә, ул:

— Һин — миңә нәмәрхам,* мине Зөһрә көтә! — тигән.

— Юк, атайым беҙҙе никахланы, — тигән кыҙ.

Нихәл итһен, Таһир Карабатшаның Бөҙрәхыялы менән кауыша.

Айҙар үтә, йылдар үтә. Бөҙрәхыял менән теләр — теләмәҫ кенә йәшәй Таһир.

Намаҙ укырға мәсеткә барғанында, бер бабай кыҙҙың атаһынан:

— Ни эшләп һинең кейәүеңдең йөҙө һаргая? — тип һораған. Шунан Таһирҙың үҙенән һораған:

— Ниңә һарғаяһың? Кыҙ матур, тәрбиәле, һәйбәт бит, — тигән. Таһир:

— Илем-көнөмдө һағынам, кайткым килә! — тигән.

Падишаға әйтәләр:

— Күмәкләп акса йыяйык та был баланы кайтарайык. Иленкөнөн күреп килһен,* — тиҙәр.

Быгаса бер кыҙҙары тыуған булған. Кайныһы риза булған кайтарырға. Катыны иренә еңел-елпе генә ашамлыктар бешерә икән. Янында кыҙы йүгереп йөрөгән. Тик тормағас, тегенең башына «тук» иттереп уклау менән һуккан икән, Таһир:

— Һукма! — тигән. —

Кыҙ бала нәҙек булыр,
Һукма башына, яҙык булыр.

Маңлайынан һурып үпһәң,
Алты айлыҡ аҙыҡ булыр, —

тип, нәсихәт әйткән.

Таһирға менеп китергә дөлдөлдәр килтерәләр. Таһир барыһы менән дә хушлашҡан. Бабайҙар доға ҡылғандар, фатиха биргәндәр:

— Юлы изге булһын, — тигәндәр.

Таһир Бөҙрәхыялға әйткән:

— Һеҙ ҡалырһыҙ илегеҙҙә,
Ебәк урап билегеҙгә.
Алты айҙан ҡайтмаһам,
Ихтыяры үҙегеҙгә.

Бөҙрәхыял Таһирҙы бик яратҡан.

Таһир дөлдөлгә менеп күп ерҙәр үтә. Элек ҡырҡ ҡараҡ йөрөгән икән. Шулар осраған. Атына, үҙенә, аҡсаһына ҡыҙығып, йыҡҡандар икән Таһирҙы һуйырға, Таһир әйткән:

— Туҡтағыҙ, ағайҙар!
Мин киләмен көндөҙҙин,
Ҡараңғы төн йондоҙҙин.
Үлтермәгеҙ, ағайҙар,
Минең Зөһрәм яңғыҙҙин!

Тегеләр шәйләп алғандар:

— Ә-һә, был шул падишаһтың кейәүе булырға тейеш, үлтермәйек, — тигәндәр.

Бара торғас, Таһир Зөһрәнең һарайы барлығын да белгән. Вәғәҙәгә шулай тоғро булған элек кешеләр. Таһир тәҙрәһе янына барған да:

— Зөһ-рәү! Зөһ-рәү! — тип әйтә икән. Зөһрә уяна биреп кенә ҡуя икән. Ҡарағол тигән әҙәмдән ҡасырып, батша ҡыҙын ун ике кәнизәге менән шунда йәшәтә икән. Уйыны ла, көлкөһө лә, тормошо ла шунда, ти. Таһир былай ти:

— Мин киләмен ғәһетемдә*
Ҡараңғы сәхәр ваҡытында.
Мин бер әйттем, уянманың,
Уянырһың ваҡытында.

Зөһрә:

— Һин бер әйттең, уяндым,
Уңлы-һуллы таяндым.
Һин икәнде белмәнем,
Ҡарағол тип инандым.

Шунан байтаҡ һөйләшкәс, аңлашҡас, Зөһрә, тәҙрәнән ебәк төшөрөп, Таһирҙы бүлмәһенә ала. Үҙендә бер нисә ай аҫраған уны. Үҙҙәре ҡауышһа ла, туй яһап, әҙәмгә белдерә алмағандар —

дошмандар күп булған. Таһирҙы һыу буйына саҡырып, үлтергәндәр. Таһир шул ваҡыт:

— Әй, татарҙар, татарҙар,
Барыһы ла мылтыҡ атарҙар.
Баҙарҙарҙа иттәр бөтһә,
Таһир итен һатарҙар, —

тип әйтеп өлгөргән, ти.

Таһирҙың кәүҙәһе янында Зөһрә өс көн илап ҡуна.

## 5. ТАҺИР ҺӘМ ЗӨҺРӘ

*(Хажиева Миңнеямал версияһы)*

Бер батша менән вәзир булған. Икеһенең дә бик оҙаҡ балалары булмаған. Икеһе лә ырым яраткан. Шунан бер саҡ юлда һүҙ ҡуйышҡандар: батшаның ҡыҙы булһа — Зөһрә тип ҡушып, вәзирҙең малайы булһа — Таһир тип ҡушып, икеһен ҡауыштырырға. Шулай булып сыҡҡан инде. Бер үк көндө батшаның ҡыҙы, вәзирҙең улы тыуа. Һөйләшелгәнсә, береһенә — Зөһрә тип, икенсеһенә Таһир тип ат ҡуйып, ҡырҡтары сығыуға, ҡолаҡтарын тешләтеп, бишек туйы үткәргәндәр.

Балалар икеһе бергә үҫкән. Ике йәштәре тулғанда, бер-береһен күрмәһәләр, илай торғандар ине, ти.

Биш-алты йәштәрендә муллаға уҡытырға биргәндәр. Бер-береһен, ҡәрендәш, тип йөрөгәндәр, ти. Икеһе лә шул ҡәҙәре аҡыллы булғандар, уларға мулла менән хәҙрәт ғажиз ҡалыр булған. Ун йәшкә еткәс, тәүҙә Зөһрәнең мөхәббәте Таһирға төшә. Ул мөхәббәт шул ҡәҙәре көслө була, бер төндө Зөһрә, һис бер форсат тапмай:

— Һин бит минең туғаным, — тип, Таһирҙы ауыҙынан үбеп ала. Таһир уны был ҡылығы өсөн бик ҡаты шелтәләгән:

— Әй, оятһыҙ ҡыҙ, мин бит һинең ҡәрҙәшең! Ни эшләп улай ҡылыҡ итәһен?! — тигән. Быңа үпкәләп, Зөһрә бер аҙ муллаға айырым йөрөгән. Әммә Зөһрәнең шул ҡәҙәре мөхәббәте артты, ти, намыҫын тота алманы, ти. Ҡатын-ҡыҙҙың алдан бит инде ғүмергә һөйөүе. Пәйғәмбәрҙәр заманында уҡ шулай булған. Тәүҙә ҡатын-ҡыҙ ярата бит инде ул. Зөһрәнең мөхәббәте бик көслө булған. Ул хаҡ тәғәләгә ялуарған:

— Минең мөхәббәтемде Таһирға ла бир! — тигән. —

Мәрүәрҙиҡәр рәхимә*,
Ҡөҙрәтең киң, Хоҙайа,

Мин — бисара колоңа,
Рәхим кылһан, Хоҙайа.
Таһир жаным хәсрәтен,
Бар килыпсың, Хоҙайа!
Асыҡ йөҙөм күрмәгә
Зар килыпсың, Хоҙайа!
Ғишыҡ утым — Таһиржан,
Күрһәң икән, Хоҙайа!
Мөхәббәтем бар икән,
Бирһәң икән, Хоҙайа!
Ғишкым сиҙеп күрмәһә,
Ҡәҙиремде белмәҫ, ти.
Ғашиҡларҙың һүҙенә,
Ҡолағына элмәҫтер, ти.

Хоҙай Тәғәлә Зөһрәнең доғаһын ҡабул ҡылып, Таһир ҙа заһи булды*, ти. Зөһрәгә көндән-көн һүҙҙәр әйтмәгә башланы, ти. Зөһрә, Таһирҙың мөхәббәте төшкәнен белгәс, уға нияз ҡылып әйтте*, ти:

— Бар ғәләмгә мәғлүмдер:
Егеттәрҙең ҡәлбе бер.
Ҡыҙ тәүләп егет һөйһә,
Уны уйлап, гел көйһә,
Егет алмаҫ ҡәлбенә,
Кермәҫ ул ҡыҙ хәленә.
Тәүләп егет ятаһа,
Бер күрергә йән атһа,
Кергәндәй итеп утка,
Табалмаҫ ҡаршы сара,
Мәжнүн булыр бисара.

Ғишҡы ҡатылығынан, Таһирҙың йөрәге урынында утырмаҫ булды, ти.

Зөһрәнең үҙенә башка һарайы булған, унда шишмә булған. Зөһрә бик йыш шул шишмәгә барыр булған. Унда баҡса булган. Бер заман Таһир илә Зөһрә баҡсаға кереп, бер-береһенә мөхәббәттәрен ғәриз ҡылып*, күп шиғырҙар һөйләшеп, бәғзе тарафы һарайга килгәндәр. Зөһрә:

— Мең-мең маһир жан,
Ҡара күҙем Таһиржан.
Якма фәкәт утына,
Аҫыл күҙем Таһиржан

(Бер һүҙҙә булайыҡ, ярат мине тигән һүҙ. — *Х. М.)*
Таһир әйтә:

— Күңелем йәр иткәнһең,
Күҙҙәрем зар иткәнһең.

Мөһөрөң килеп хәлемә,
Ҡайҙа сара иткәнең.

Зөһрә әйтә икән:

— Таһиржаным-солтаным,
Жаным ҡилсаң, ҡорбаның.
Үлһәм ғишҡым юлында,
Шулдыр һиңә ҡорбаным.

Шунда Зөһрә менән Таһир бер-береһе менән һөйләшеп ҡалдылар, уларҙың мөхәббәтендә береһенең дә һис кәмселек юҡ: икеһененке лә — бер, ти. Ә айырылганда, бер-береһененң күҙҙәренә йәш килде, ти. Зөһрә әйтә:

— Ал киткән һинең буйыңа,
Хайран ҡалып туйғансы.
Аҡылым хайран булғандыр,
Тыңлап һүҙең туйғансы.

Таһир:

— Ырҡан утым* тау икән,
Ул тауымды зар иткән.
Бер ҡушылмаҡ һуңында,
Бер айырылмаҡ бар икән.

Шунан улар бер-береһе менән ҡосаҡлашып илашҡандар. Әммә ни өсөн илашҡандарын белмәнеләр, ти. Һәм белмәҫ инеләр, ти.

Улар икеһе лә ун биш йәшкә еткәндәр. Йәштәре артҡан һайын, мөхәббәттәре лә арта барҙы, ти.

Падишахтың ғәрәп ҡоло, хәсис мәлғүн быларҙы күреп, тиҙ заман, быларҙан йәшеренеп, әүәле баҡсаға кереп, бер ҡуйы япраҡлы ағастың башына менеп ултырып күҙәтә, ти. Был мәлғүн ғәрәп күреп барыһын да, иренен тешләп, ханымға йүгереп барып әйткән, баян ҡылған*. Ғәрәп ҡыҙҙың ата-әсәһенә әйтә:

— Шәхси ханым һеҙҙәргә,
Мин бер һүҙем әйтәйем.
Бер һүҙемде һеҙҙәрҙән,
Аят һаҡлап ҡайтайым.
Уттар кеүек һүҙемдер,
Ҡолаҡ һалып ҡызыңыз.
Аямын мин үҙеңде,
Йәндәй күргән ҡыҙыңды,
Хөрмәтләгән Таһирың
Аҙҙырыптай ҡыҙыңды.
Тәксир*, ҡыҙың аҙыптай,
Тоғро юлдан яҙыптай.
Тоғро тигән Таһирың,
Яман уйлар һалыптай.

Күңелегеҙгә ятһа ла,
Алтын һарай баҡсала
Күп аҙғынлыҡ бар икән,
Таһир менән ҡалһа ла.
Булмаҫ инем һинә ҡол,
Бер аҙ сабыр иттек беҙ.

Ханым* ғәрәптең мындай һүҙҙәрен ишеткәс, асыуланып, шул заман ханға барып ғәрәптән ишеткәнен бер-бер нәҡел әйләде.*

— Ышанмаһағыҙ, ғәрәпте хозырыуығыҙға* саҡыртып һорағыҙ, — тине. Хан шул заман ғәрәп мәлғүнде саҡыртып:

— Тиҙ күргәнеңде әйт! — тине. Ғәрәп күргәнен бәрәбә әйтте,* ти, баян әйләде. Андин соң хан бер фекергә төшөп, ҡыҙымды Таһирға бирһәң кәрәк, тиеп, үҙ язаһын эҙләргә сығып китте.

— Бер уй ҡылһам кирәктер, — ти, —
Йортом йыйһам кирәктер, — ти, —
Ҡыҙым ҡушым Таһирға,
Туйын ҡылһам кирәктер, — ти, —
Алтын һарай төҙәтеп,
Гәүһәр — яҡут биҙәтеп,
Уйынсылар уйнатып
Туйын ҡылһам кирәктер;
Алтын өйләр һалдырып.
Йортом йыйһам кирәктер;
Торған атлас йәйҙереп,
Туйын ҡылһам кирәктер.
Арап-шарап ҡайнатып,
Гәүһәр менән биҙәтеп,
Бәһлүәндәр һайлатып,
Туйын ҡылһам кирәктер;
Мең арғымаҡ яратып,
Шәһәрзадалар алдыртып,
Уйынсылар һоратып,
Туйын ҡылһам кирәктер;
Алтын тирәк үҫтереп,
Аҫыл ҡоштар ҡундырып,
Гәүһәр кесә һындырып,
Туйын ҡылһам кирәктер;
Һеҙҙе [күңел астырып],
Ынжы-жүжмә сәстереп,
Йөк-йөк өйөм арттырып,
Туйын ҡылһам кирәктер, — ти.

Ә ҡатыны риза түгел:

— Өйөңә күңелем һалмаҫмын,
Һүҙеңә ҡолаҡ һалмаҫмын,
Мондай туйлар ҡылғаныңа
Төпкәрс [разый] булмаҫмын.

Ханнар башы булһаң да,
Ҡыҙың яйын белмәйһең,
Улы солтан булһа ла,
Ҡыҙың уйын белмәйһең.
Боронғо үткән ханнарҙан,
Талиғашиҡ* балларҙан
Ҡейәү булған бар микән,
Таһир ише яннардан.
Аза арттырған яңғыҙым,
Күҙ өҫтөндә бер ҡыҙың.
Вәзир затҡа бирәме
Ҡарап торған бер ҡыҙын.
Ханзадалар килмәйме?
Ете ожмах түрендән
Хур егетләр килмәйме?
Ишеткән йән ҡолаҡтан
Бар ҙа ғашиҡ тота ине,
Ҡөҙрәтенән ҡурҡып,
Серен эстә тота ине.
Был ҡыҙындың ғишҡынан
Бары ҙа ҡан тота ине (?).
Был ни тигән хурлыҡтыр:
Вәзир затҡа ҡыҙ биргән
Ишетмәнем, күрмәнем,
Ҡыҙым биреп Таһирға,
Ханым булып йөрөмәмен.

Хан ханымдан мындай һүҙҙәрҙе ишетеп, ханым күңеле юҡлығын белде. Уға ҡарап әйтте ти:

— Мин, үҙемдең күҙем менән күрмәйсә, был ғәрәптең һүҙенә инанмаймын. Әйткән һүҙем бар бит, туй итәргә кәрәк, — тигән батша.

Туйым ҡылһам кәрәктер,
Йәндәй күргән ҡыҙымдың,
Туйын күрһәң кәрәктер.

Ул туйға әҙерләнә, ә ҡатыны:

— Һинең шундай затыңдың
Вәзир-затҡа ҡыҙ биргәнен
Ишетмәнем-күрмәнем.
Вәзир затҡа ҡыҙ биреп,
Ханым булып йөрөмәмен, —

ти. Ул, сихыр яһатып, ҡайтара. Сәфәрҙән ҡайтыуға, батша шәрбәт яһап эсә икән. Шуңа ҡатыны сихыр һалған. Батша шунда уҡ:

— Сығарығыҙ Таһирҙы Зөһрә янынан! — тигән, шунан батша быларҙы айырған.

Ә быға тиклем Таһирҙың да, Зөһрәнең дә төшөнә кергән, ти: һарайҙы ҡамалап, йәнәһе, эттәр килә икән айырырға. Таһирҙы ризыҡ биреп, кәмәлә Шат һыуына ағыҙғандар.

Шат һыуында өс ҡыҙ булған, солтан ҡыҙҙары. Зөһрә уларға хат яҙып ебәргән булған: «Минең Таһиржанды һандыкка һалып ебәрҙеләр. Ҙур һыуҙан самалап [тотоп] алығыҙ», — тигән. Тегеләр егерме биш ҡыҙ йыя. Ебәк таҫмалар менән, сылбырлар менән киләләр торорға. Һандыҡ сәүкә кеүек кенә икән. Уртансы ҡыҙ кергән дә киткән [һыуға]. Сылбыр тағып, һандыҡты тартып сығарған. Шунан һандыҡты асып ҡараһалар — Таһирҙың гүзәллегенә иҫтәре киткән. Хәҙер быны Зөһрә янына ебәрмәҫкә булғандар.

Таһир өсөһөнән дә шиғыр әйттерә [:«Миңә шиғыр уҡығыҙ]. Шиғырығыҙ Зөһрәнеке кеүек булһа, алам», — тигән. Тегеләр шиғыр уҡып ҡарайҙар, тик береһе лә Зөһрәнекенә еткерә алмай икән.

Ә Зөһрәне был саҡта икенсе батшалыҡ кешеһенә бирәләр икән. Таһир, теге өс ҡыҙҙы йоҡлатып, ҡаса. Бер һыбай осрап, таң атыуға Таһирҙы Зөһрә һарайына илтеп еткерә. Таһирҙы апаһы ҡосаҡлап ала:

— Зөһрәне икенсе кешегә бирҙеләр, барып йөрөмә инде, — ти. Таһир:

— Ҡатын-ҡыҙ кейеме бирегеҙ, — ти. Бирәләр. Шуны кейеп һарайға килә. Унда туй. Зөһрә һиҙә Таһирҙың килгәнен. Тиҙ арала халыҡты тарата.

Әлеге шишмәгә төшкәндәр. Батшаға теге мәлғүн ғәрәп йәнә барып ошаҡлай.

Ғәрәп килеп әйткәс, батша Таһирға ҡаршы ғәскәр ебәрҙе, ти. Ул ғәскәрен күреп, Таһир илә Зөһрәгә хәбәр бирҙеләр, ти. Был һүҙҙәрҙе ишетеп, йәндәре баштарына сәсрәне. Таһир — Зөһрәгә, Зөһрә Таһирға ҡарашып торҙолар ҙа (Таһирҙың өҫтөндә ҡатындар кейеме, ти, шул. Уға сәбәпле һис тә бер һуғыш ҡоралы юҡ ҡулында. Зөһрәгә ҡайырылып ҡарап): «Эй, хәҡиҡәт йәрем*, һинең һүҙеңдә тотмаһым бит», — тип бик үкенде. Зөһрәнең йөҙөнә ҡарап, зар-зар йырлап, бер наҙым аяны*, ти.

— Ауыҙлашып — үбешеп,
Күп уйнаныҡ икәүи.
Һеҙҙәй ханым ҡыҙыйһы,
Күҙең һалмаҫ булырмы?
Хыянатсы ҡолоны
Яза ҡылмаҫ булырмы?
Миһырбаным, хуш инде,
Шәһәрйәнем, хуш инде.

Ҡосаҡлашты икәүи,
Ҡуйынышты икәүи.

Зөһрә ҡыл һымаҡ ҡылыс ала. Икешәр йөҙ, өсәр йөҙ һалдатты ҡыра ла ырғыта, ҡыра ла ырғыта икән. Ике рәт ике йөҙ — өс йөҙ халыҡты ҡырып ырғытҡан. Ҡалғандары:

— Беҙ анын янына бара алмайбыҙ, – тип, кире ҡайтҡандар.

— Һин уны үлтермә, ул бит батша(?). Һеҙгә әллә нинди заман килер, үлтертмә! — тигәндәр. Батша риза булған:

— Урман янына барһын да, Зөһрәне лә ҡушмаһын, үҙен дә ҡушмаһын — өс йыр йырлаһын! — тигән.

Таһир ике йыр йырлай. Аралағы бер ҡатын әйткән:

— Ана Зөһрәнең нуры! — тигән. Тәҙрәне асып ебәргән ынгайы, Зөһрәнең мөхәббәте, нур булып, сыуалып төшә икән. Таһир, яңылышып, Зөһрәнең исемен йырға ҡуша — батша Таһирҙы үлтерергә әмер биргән:

— Ҡаны ергә һеңһен! — тигән. Таһир:

— Миңә ваҡыт бирегеҙ, намаҙ уҡыйым! — тигән. Шунда үҙе: «Эй, Хоҙайым, ошбу сәғәттә дошман ҡулынан үлмәһәм ине, рухымны нык әйлә!» — тип әйткән дә — үлгән.

Таһирҙың үлемен Зөһрәгә ҡайтып әйткәндәр. Зөһрә һушһыҙ йығылған. Бер аҙҙан ул Таһирҙың кәүҙәһен күрһәтеүҙе талап итә. Зөһрәнең ата-инәһе лә килгән. Үкенәләр икән, ти.

— Таһирҙың битенән ит алып ҡаптырырға кәрәк, — тиҙәр, Зөһрәнең һушын ҡайтарыу өсөн.

Арала бер ҡатын, гөл һыуы эсереп, Зөһрәне һушына килтерә лә был хаҡта әйтә:

— Таһир итен ашай күрмә! — ти.

Таһирҙың итен алып китәләр. Зөһрә:

— Эй, Хоҙайым, ошбу сәғәттә минен дә рухымды ҡый! Әйҙә, икебеҙҙең йәнебеҙ бер булһын, бергә үлһен! — тип, Таһирын ҡосаҡлап илаған. Шул ваҡыт Хоҙай уның йәнен алған, икеһен дә шәһит иткән. Батшаның шымсыһы, ара болғатып йөрөүсе Таһирҙың кәүҙәһен барып ҡарайым тиһә, Зөһрәнең дә үле кәүҙәһе ята икән. «Мине батша барыбер йә аттыра, йә аҫтыра!» — тигән дә, үҙен үҙе үлтергән. Батша быларҙың өсөһөн дә күмергә ҡушҡан. Зөһрәнең ҡәберенән ҡыҙыл гөл, Таһирҙың ҡәберенән аҡ гөл сыға икән. Ә уртала ятҡан ара боҙоусының ҡәберенән дегәнәк сыға икән. Уны көн дә сабып алалар ти, көн дә сығып, ике гөлдө айыра икән.



## 6. ЗАНТАҺИР МЕНӘН ЗӘНЗӨҺӨРӘ

*(Ишбирҙина Нәсиха варианты)*

Борон-борон заманда ике күрше йәшәгән. Береһенең исеме — Күсәрбай, икенсеһенең исеме Күсмәҫбай булған. Бер ваҡыт икеһенең дә бисәһе ауырлы булып етешкән саҡта, был күршеләр һунарға китергә булалар. Ҡатындарына улар: «Әгәр малай тыуһа — ҡыйыҡ башына ян менән уҡ, ҡыҙ булһа — орсоҡ сәнсегеҙ», — тип әйтеп китәләр.

һунарҙа байтаҡ йөрөп, ҡайтып килһәләр, Күсәрбай йортоноң ҡыйығында — ян менән уҡ, ә Күсмәсбай йортонда орсоҡ тора, ти.

Улар ҡайтҡас, ҡыҙға — Зәнзөһөрә, уланға Зантаһир исемен бирәләр ҙә Ҡөрьәнгә: «Хәләл ефет булырҙар», — тип яҙып ҡуялар.

Балалар үҫә. [Ҡөрьәндәге яҙыуҙы уҡып, йәрәштерелгән булыуҙарын белеп], бер-береһен күреп йөрөйҙәр ҙә яратыша башлайҙар. Ләкин ике күрше бер саҡ асыуланышып китәләр. Шуға ҡарамай, егет менән ҡыҙ яратышыуҙарын дауам итә, осрашып тора. Быны һиҙеп ҡалған аталары, туғанлашмаҫ өсөн, егетте һандыҡҡа һалып, һыуға ағыҙып ебәрәләр ҙә ҡыҙҙы бейек тауҙағы зинданға бикләп ҡуялар.

Егет ағып китә-китә, икенсе ауылға барып етә. Унда бер байҙың ике ҡыҙы һыу төшөп йөрөгән була. Ҡыҙҙар, һандыҡты алып ҡайтып, асырға булалар. Ләкин аса алмайҙар. Шунда бер әбей сыңғыҙ тигән үлән табып, һандыҡты асалар. Ни күҙҙәре менән күрһендәр — һандыҡтың эсенән бер бите — ай, бер бите көн егет килеп сыға. Йә, бер заман ҡыҙҙар был егет өсөн талаша башлайҙар. Егеткә бай кесе ҡыҙын биргән, ти.

Берҙән-бер көндө егет ҡайны ҡартының Еԓьетмәҫ ерән аты менән ҡамсы биреүен, тыуған иленә ҡайтып килергә рөхсәт итеүен һораған, ти.

Ҡайныһы бик үк ебәргеһе килмәгән, ти. Шунан улар араһында шундай әйтеш булып ала:

— Алдыңда ике тау торор, таҡ-таҡ итеп төкөшөп торор.

Уны нисек үтерһең, кейәү?

— Һыҡырып-көйләп үтермен, ҡайным.

— Алдыңда ҡара урман ҡалҡыр, уны нисек үтерһең, кейәү?

— Елә-сабып үтермен, ҡайным, моратыма етермен, ҡайным.

— Алдыңда ете диңгеҙ ятыр, ярын ялмап.

Ҡайнағандай, ярһып ятыр, уны нисек үтерһең, кейәү?

— Урап сабып үтермен, ҡайным, кисермен, ҡайным.

Шунан һуң ҡайныһы ризалыҡ биргән, Зантаһир юлға сыҡҡан, ти.

Ә егеттең тыуған илендә Зәнзөһөрәне Ҡарағол тигән кешегә икенсе бисәлеккә бирергә әҙерләнеп йөрөгән булалар.

Ҡарағол ҡыҙҙы ҡарауыллап ҡына йөрөй. Ҡыҙ илап-илап йоҡлап киткән. Бер ваҡыт уянып китһә, ҡоштар һайрай, һыу аға, тирә-яҡта ҡояш нурҙары балҡый. Был нисек инде? Баҡтиһәң, Зантаһир Еԓьетмәҫ ерән ат менән елып килгән дә, Зәнзөһөрәне күреп, янына осоп ингән. Зәнзөһөрәне күреп, шатлығынан, тиҙ генә сығып китә алмаған.

Төн булған. Кешеләр был эште һиҙеп ҡалғандар. Ишекте асып инһәләр, Зәнзөһөрә менән Зантаһир ҡосаҡлашып йоҡлап яталар, ти. Зәнзөһөрәне, һөйрәп сығарып, атаһына ебәрергә, ә Зантаһирҙы сабып үлтерергә булалар, ти.

— Зәнзөһөрәне минең хәләл ефетем итеп яҙҙығыҙ түгелме, ҡайным? — тип һораған, — ти, Зантаһир.

— Ни ырылдайһың?! — тип кенә, яуап биргән ти, Зәнзөһөрәнең атаһы.

— Зәнзөһөрәгә ҡорбанмын, — тип ятҡас, егеттең башын өҙә сабалар. Ҡарағолдоң бисәһе башын, ҠараҒол кәүҙәһен алып, Зәнзөһөрәгә индереп ташлап китәләр.

Ҡыҙ илап, алтын ҡомғанлы һыу менән йыуып, егеттең кәүҙәһе менән башын ипләп һалып, эргәһендә һаҡлап ултыра торғас, ятып йоклап китте, ти. Бер аҙ ятҡас, Зантаһир ырғып килеп торҙо, ти. Зантаһирҙың ҡайҙалығын һиҙенгән ат тәҙрә төбөндә йөрөгән була. Егет менән ҡыҙ, атка атланып, ҡасып китә. Уларҙы бик оҙак таба алмайҙар.

Үс алыуҙы маҡсат итеп ҡуйған Ҡарағолдоң бисәһе берҙән-бер көндө бер турғайҙы тотоп йолҡа башлай:

— Зөһөрә ҡайҙа? Әйт, ҡайҙа? Әйт, — тип,

— Сук тирәк, — тип кенә әйтә лә үлә [турғай].

Ҡешеләр егет менән ҡыҙҙы эҙләп, Суктирәк тигән ергә киткәндәр, уларҙы шунда тапҡандар, ти.

Ҡешеләр ҡулына төшмәҫ өсөн, Зантаһир менән Зәнзөһөрә берен бере сәнсеп үлтергәндәр, ти.

Икеһен ике ҡәбергә күмергә уйлаһалар, һөйәктәре бергә ята ла ҡуя, ти. Быларҙы диңгеҙҙең ике ярына күмәләр, ләкин улар диңгеҙ уртаһына ағас булып йәнәш кенә үҫеп сыҡҡандар, ти.



# 1. СӘЙФЕЛМӨЛӨК

*(Рысаева Миңзифа версияһы)*

Элекке замандарҙа бер батша булған. Аты — Рәбиғелмөлөк[1]. Был батшаның балаһы булмаған, бик ҡайғырған. Батша нисә көндәр йылап ғүмерен үткәргән. Ярандары быны күргәндәр ҙә:

— Эй, бадишаһыбыҙ, һин ғүмереңде былай заяға үткәрмә, күп ерҙәрҙән өгөт-нәсихәттәр ал, күп ғалимдарҙы янына йый, бәлки, һиңә бер дарман бирерҙәр, — тигәндәр.

Батша уйлаған-уйлаған да күп ғалимдарҙы, күп ярандарҙы янына йыйып, өгөт-нәсихәт һораған. Ярандары әйткән:

— Эй, бадишаһ, һинән генә ҡалмаған бит, һин башҡа бер йәмәғәт ал, бәлки балаң булыр, — тигәндәр.

Был батша икенсе бер батшаға[2] хат яҙған: «Эй, бадишаһ, — тигән, — минең шундай-шундай үтенесем бар: һин миңә ҡыҙыңды асбаблап, мал менән ебәр. Мин өйләнергә уйлайым», — тигән.

Теге батша хатты алып уҡығас: «Була!» — тигән. Ярандарын әҙерләп, ҡыҙын хөрмәтләп, күп мал менән был батшаға ебәргән.

Ул ҡыҙҙың исеме Йәмилә булған. Ярар, был батша никахланған. Күп тә үтмәгән, был ҡатын бер ир бала килтергән донъяға. Батшаның бар ҡыуанысы шул балала булған. Хәҙер ул баланың исемен Сәйфелмөлөк тип ҡушҡандар.

Был батшаның янында бик ҙур вәзире булған. Шул вәзирҙең дә икенсе көндө бер ир балаһы тыуған. Аның атын Сәғит ҡушалар. Былар, Сәйфелмөлөк менән Сәғит, икеһе бергә аяҡҡа баҫып, гел бергә уйнап, бергә үҫеп, иптәш-шәректәш булалар. Былар күп һөнәрҙәргә өйрәнәләр, бергәләп һунарға йөрөйҙәр. Ярар, шулай үҫәләр былар. Хәҙер ун ете йәштәренә килеп етәләр. Батша быларға бер һарай һалып бирә икеһенә. Һәр көн шул һарайҙа булалар.

Берҙән-бер көндө, батша тәхетендә ултырып йоҡоға яткас, быны бер ауаз менән саҡырып сығаралар. Батша сығып ҡараһа, ни күҙе

менән күрһен — ике ҡара ҡол тора бының ҡаршыһында. Береһе бер ат етәкләгән, береһе бер йөҙөк менән тун тотҡан. Батшаға әйтәләр:

— Һиңә бүләк килтерҙек, — тиҙәр.

— Ниндәй бүләк?

— Ниндәй бүләк икәнен үҙең белерһең, — тиҙәр ҙә, икеһе лә шунда уҡ ғәйеп була. Батша атты кертеп һарайына бәйләй, тунды һандыҡҡа һала, йөҙөгөн бармағына кейә.

Ярар. Бер көн үтә, ике көн үтә. «Хәҙер быны мин, — ти, — ике балаға тапшырайым. Атты вәзирҙең улына бирәйем, минең улым атҡа мохтаж түгел. Тун менән йөҙөктө улыма бирәйем», — ти. Хәҙер быларҙың икеһен дә саҡыртып, батша янына килтертә. Былар киләләр.

— Атай, ниңә саҡырҙың? — ти Сәйфелмөлөк.

— Бына, улым, мин төндә бер хәлгә тарыным. Төндә ике ҡара ҡол, таныманым, ҡараңғы ине, ат тотторҙолар ҡулыма, тун менән йөҙөк бирҙеләр, — ти. — Атты дуҫың Сәғиткә тапшырам. Ә һин тун менән йөҙөктө кей, — ти.

Былар, икеһе лә ҡыуанып, алып сығалар. Хәҙер, ярар, Сәғит ат менән бик хайран ҡала. Йөҙөк бик матур була, ҡашында Сөләймән батшаның[3] исеме яҙылған. Хәҙер, ярар, тунды егет алып кейә, аныһыны ҡарамай. Бер көндө, йөрөп ҡайтып, тунды элеп ҡуйһа, ни күҙе менән күрһен: тундың ең төбөндә бер һүрәт бар. Шул ҡәҙәре матур ҡыҙ һүрәте! Тәкәтһеҙ матур ҡыҙ теге! Иҫе китә Сәйфелмөлөктөн. «Был ниндәй хәл?!» — ти.

Ә һүрәттең аҫтына ошондай ғына яҙыу яҙылған: «Аты — Бәҙиғолъямал бине Шаһбал, мәкамы — Ирәм бағы».[4] Был ҡыҙҙың исеме — Бәҙиғолъямал, атаһы — Шаһбал батша, ә йәшәгән ере — Ирәм бағы тигән ҡала, тип яҙылған. Башҡа бер һүҙ ҙә юҡ.

Сәйфелмөлөк ашауҙан яҙа, эсеүҙән ҡала. Көндән-көн һарғая, кибә. Хәҙер Сәғит менән уйнарға ла күңеле төшмәй. Көн илай, төн илай, ҡапланып ятып илай. Батша аптырай:

— Был балаға ниндәй рәнйеү тейҙе икән, ниндәй хәл булды икән? — ти. Күп ғалимдарҙы йыйып, улына дауа һорай.

Ҡараусылар әйтәләр:

— Бына һис бер ерҙә дауа юҡ, бының күңеленә ғишыҡ эҫәре кергән, — тиҙәр.

— Ҡайҙан икән ул ғишыҡ? — тип һорап ҡарай, берәү ҙә белмәй. Хәҙер Сәғитте саҡырта.

— Һин ысын иптәше, дуҫы бит, барып һора, ниндәй ғишыҡ икән, шуны белеп кил! — ти.

Сәғит килеп, шул ҡәҙәре һорап ҡарай — юҡ, әйтмәй Сәйфелмөлөк. Ҡайғырыуын белә. Һары кәбеҫтә булып һарғая Сәйфелмөлөк. Һүрәт ҡыҙҙы эҙләргә бының күңеле абҙаҡ була.

Шунан бер көндө Сәғит хәнйәрен ала ла һарайға Сәйфелмөлөк янына барып керә:

— Һин — минең иптәшем, серенде әйт. Әгәр әйтмәһәң, ошо ерҙә мин һине сәнсәм! — ти.

Сәйфелмөлөк бик ҡурҡыуға ҡала. «Ай-һай, был эште ҡыла күрмәһен», — тип уйлай. Шунан Сәйфелмөлөк һандыҡтан тунды ала ла теге һүрәтте күрһәтә.

— Ошо һүрәттәге ҡыҙҙы табып күрмәһәм, мин донъяла йәшәмәйем, — ти.

— Ай-һай, бик ауыр хәлгә юлыҡҡанһың. Быны Рәбиғелмөлөк батшаға һөйләмәй хәлем юҡ, — ти Сәғит.

Сәғит иртән тора, батшаның ҡаршыһына бара.

— Йә, бадишаһ, мин был хәлдең дусарын белдем, — ти.

— Йә, һөйлә! — ти батша.

— Һин биргән тунда бер ҡыҙ һүрәте бар икән. Сәйфелмөлөк дуҫым шул һүрәтте күреп ғашиҡ булған. Тәҡәт тотарға дарманы юҡ, — ти Сәғит.

Хәҙер батша ғәжәпкә ҡала. Күп кешеләрҙе йыйҙыра. Улар әйтә:

— Һин ҙур батша бит. Күп итеп кәмә яһат, һыу менән төрлө яҡтарға кешеләр ебәр. Ул батшаның ҡайҙа икәнен белеп ҡайтырҙар, — тиҙәр.

Батша күп оҫталар йыя. Күп кәмәләр яһата. Йөҙ кешене сағырып, кәмәләргә беркетә. Ашамлыҡтар, эсемлектәр ҡуя.

— Һеҙ бер ай юл йөрөп ҡайтығыҙ! — тип, теге яҙыуҙы тоттора.

Һәр береһе һүрәт аҫтына яҙылған яҙыуҙы тотоп, Ирәм бағын эҙләп китәләр кәмә менән. Былар бик күп вилайәттәргә баралар. Күп батшаларға юлығалар. Батшалар: «Юҡ, был хәбәрҙе беҙ бер ерҙән дә ишеткәнебеҙ юҡ», — тиҙәр. Ҡайҙа ғына барһалар ҙа, хәбәр тапмайҙар. Быларҙың ҡайһылары бер ай самаһы, ике ай самаһы, ҡайһылары өс ай самаһы йөрөп ҡайталар. Береһенән бер хәбәр юҡ. Хәҙер яңынан Сәйфелмөлөк биһуш* була. Тәҡәт тотарға аҡылы ҡалмай.

— Эй, атайым, рөхсәт ит, миңә күп халыҡтар бир, күп караптар яһат. Сәғит дуҫымды эйәртеп, мин үҙем эҙләргә сығам, — ти. Батша риза булмай:

— Мин ғүмеремдә күргән бер баламдан яҙар хәлем юҡ, — ти.

— Юҡ, рөхсәтеңде бир, атай. Бирмәһәң, мин ашамайым да, эсмәйем дә, йәшәмәйем дә, — ти Сәйфелмөлөк, ныҡыша.

Шунан Сәйфелмөлөк тунды ҡулына ала, йөҙөктө кейә. Батша нишләһен инде, күп караптар яһатып, өс йөҙләп кеше менән улын сығарып ебәрә. Бик ҙур карапҡа ултырып, Сәйфелмөлөк менән Сәғит алдан китә. Күп диңгеҙҙәр үтәләр, күп ерҙәрҙә йөрөйҙәр. Быларҙың аҙыҡтары ла әҙәйә хәҙер.

Бер заман, ни күҙең менән күрәһең, дауыл сыға. Караптар, кәмәләр берәм-берәм һыу төбөнә китәләр. Күп халыҡ һыуға бата. Сәйфелмөлөк менән Сәғит бер унлап кеше менән генә кәмәләрҙә тороп ҡала. Хәҙер быларҙы һыу әйләндерә. Шул ҡәҙәре әйләндерә, шул ҡәҙәре әйләндерә дәрйә! Былар, тәҡәтһеҙ, нисә көндәр һыу өҫтөндә әйләнәләр. Әйләнә торғас, Сәйфелмөлөк бик арып, йоҡоға тала. Йоҡоһонда бер бабай килә — төшөнә керә бының.

— Эй, улым, һинең ҡулыңда Сөләймән йөҙөгө бар бит, — ти. — Ул йөҙөк булғас, һин һыуҙа батмайһың. Шул йөҙөгөңдө һин һыуға тыҡ, — ти.

Сәйфелмөлөк кинәт кенә уянып китә йоҡоһонан. Ҡулындағы йөҙөгөн һыуға тыҡҡайны — һыу, борғоп-борғоп, кәмәләрҙе өйрөлтөп-өйрөлтөп, диңгеҙ ситенә илтеп сығара.

Былар — ун кеше, Сәйфелмөлөк, Сәғит — юл менән китәләр. Кәмәләрен ташлайҙар хәҙер. Теге ҡыҙҙы эҙләйҙәр. Юҡ бер урында ла, күпме һорашып ҡараһалар ҙа — һис кем белмәй.

— Беҙ былдай хәлде күргәнебеҙ юҡ, ундай батшаны белмәйбеҙ — тиҙәр.

Тағы китәләр былар. Китәләр, китәләр, бара торғас, быларҙы йәнкеләр[5] тотоп ала. Тотоп алып китәләр быларҙы. Әй-й-й, көслө булалар был йәнкеләр! Ун икеһен дә елкәләренә һалып алып китәләр. Быларҙы алып барып батшаларына бирәләр. Батшалары әҙәм ите ашаусы була. Быларҙы һимертергә һала. Ун кешене — бер ергә, Сәғит менән Сәйфелмөлөк бик күркәм була, уларҙы йәлләп, икеһен бер төрмәгә яба. Теге ун кешегә емеште илтеп түгәләр, ас булғас, тегәләр ашай. Уныһы ла һимерә. Быларҙың һәр көндө береһен һуйып, батша вәзирҙәре менән ашай.

Хәҙер был ун кеше тамам бөттө. Сәғит менән Сәйфелмөлөк кенә ҡалды. Батшаның быларға ҡулы бармай бер ҙә. Ҡулы барыр ине, Сәйфелмөлөктөң ҡулында йөҙөгө бар. Сәйфелмөлөк шул ҡәҙәре һорашып ҡарай батшанан: «Шундай хәл юҡмы?» — тип. Сәйфелмөлөктәр: «Беҙ шундай эш менән йөрөйбөҙ, беҙҙе ҡотҡарһана», — тип үтенеп һорайҙар. Батша ҡотҡармай.

Икеһе бер бүлмәлә бик күп илағандан һуң, Аллаһы Тәғәләгә күп хикәйәттәр уҡый[6] Сәйфелмөлөк. Шунан бер ҡатын һүрәтендә бер әҙәм пәйҙә булып, ишекте аса. Тегенең ишекте асыуы була — былар сығалар.

Батша һарайының эргәһендә ҙур ғына кәмә була. Былар шул кәмәгә ултырып, кәмә менән китәләр. Төрмәлә бирелгән тәғәмдәрҙе үҙҙәре менән алалар. Бик оҙаҡ баралар, гел һыу менән баралар. Шунан диңгеҙ ситенә етеп, ҡоро ергә сығалар. Бара торғас, быларға маймылдар осрай. Маймылдар икеһен дә тоталар. Ул маймылдар шул ҡәҙәре ҡеүәтле булалар, быларҙың икеһен дә күтәреп алып китәләр. Илтеп батшаларына тапшыралар. Батшалары быларҙың әҙәмдән булған. Улар һәр ваҡыт батшалары үлһә, әҙәм нәҫеленән ҡуялар икән. Әҙәм нәҫеленән ҡуйған был маймылдар батшаһы быларҙы күреп илай:

— Ах, былар ҙа минең кеүек әсирлеккә төшкән икән, — ти. Батша илай-илай ҙа Сәйфелмөлөктән хәл-әхүәлдәрен һораша. Сәйфелмөлөк һөйләй:

— Бына шулай күп малдарҙан яҙып, күп кешеләрем харап булып, бына шулай йөрөйөм, — ти.

Батша әйтә:

— Минең янда ҡалығыҙ, — ти. — Иптәшең вәзир булыр, үҙең минең ҡыҙымды никахларһың, — ти. Шулай булһа ғына, был маймылдарҙан ҡотолаһың; улай итмәһәң, һине барыбер иҫән ҡалдырмайҙар, — ти батша.

Хәҙер ул ҡыҙҙы нисек алһын?! Ул ҡыҙҙы күрһәң, шул тиклем йәмһеҙ: башы эт, аяктары әҙәм бының. Батшаның ҡатыны шундай булғас, ҡыҙы ла шуға окшап тыуған. Ә батша үҙе әҙәм нәҫеленән.

Нишләһен инде! Никахлап, батша быны ҡыҙы менән ябырға була. Инде был ҡыҙ, мин һиңә әйтәйем:

Ҡалын кирбес менән йөҙөн ағарта,
Ҡыҙыл кирбес менән йөҙөн ағарта.

Был ҡыҙ, миңә ҡараһын тип, кирбесте аҡбурға буяп йөҙөнә ышҡый. Шул ҡәҙәре йәмһеҙ! Сәйфелмөлөк быны күргән көйгә, эттән ҡасҡан ҡуян кеүек һикереп ҡаса. Ҡыҙ атаһына хәбәр итә: «Мине тиңһенмәй, быны тот, һуй, аша», — ти.

Батша вәзирҙәр ебәрә. Нишләһен инде, Сәйфелмөлөк риза була. Һаман тороп яталар, Сәйфелмөлөк бик күп мөнәжәттәр уҡый, бик илай. Сәғит бының янында юҡ хәҙер. Уның ҡайҙа булғанын да белмәй. Батша быңа бик асыулана, ҡыҙына яҡын килмәгәс. Бер ай самаһы был ҡыҙ менән яфа сигеп торғандан һуң, Сәйфелмөлөк, үҙ башын үҙе ҡотҡарып, бер төндө диңгеҙгә төшөп китә. Сәғит тороп ҡала, күрмәй ҡайҙа икәнен.

Китте хәҙер. Ҡулында йөҙөк булғас, һыуға ла батмай, аска ла үлмәй, бер ере лә интекмәй. Күп мәртәбә һыуҙар менән китеп, быны таба алмайҙар, тота алмайҙар хәҙер. Был бер утрауға барып сыға кәмәһе менән. Ул утрауҙа емештәр! Ул ҡоштар һайрай! Шул ҡәҙәре оло утрау, яҡшы ер! Бындағы емештәр донъяла бер ерҙә лә үҫмәгән була. Утрауҙа ул бер ай ята, хәл керә. Хәҙер көсәйә.

Шунан кәмәһе менән утрауҙың икенсе яғына китә. Күп бара торғастан, бер ерҙән дә сығырға урын юҡ, бер ерҙән дә хәбәр алырға юл юҡ, диңгеҙ бик киң, бик күп ерҙәрҙе алған була. Күп бара торғас, диңгеҙ уртаһында бер ҙу-у-у-р ағас үҫкәнде күрә был. Кәмәһен бороп шул ағас төбөнә бара. Шул ағас төбөнә кәмәһен бәйләп, үҙе ағастың башына менеп ултыра. Ултыра-а, бер ерҙән бер шәһәр күрмәй, фәкәт диңгеҙ, ап-аҡ һыу. Ағас башында күп ултыра, тунын өҫтөнән һаман һалмай, үҙе менән йөрөй һүрәт, ә йөҙөк — бармаҡта.

Күп ултыра торғас, бер төн уртаһында, ағастың башына би-и-к ҙур бер ҡош килеп ҡуна. Ғәләмәт ҙур! Боттары әҙәм бото йыуанлығы. Был әйтә: «Ни булһа ла булыр, был ҡоштоң ике ботона тотонайым, — ти. — Был ҡәҙәре кеүәтле ҡош, бәлки, мине күтәрер," — ти. Ҡош йоклай, ҡунаҡлаған көйөнсә, Сәйфелмөлөк ҡоштоң аяғына сырмалып тотона. Ҡош был тотонған көйөнә ҡурҡып уянып осоп китә, мин һиңә әйтәйем! Әй-й, Сәйфелмөлөк һалынып бара, төшмәй. Төшәр ине, йөҙөк төшөрмәй. Хәҙер был ҡош бер һыу ситендәге ағаска ҡуна. Бер ағаска ҡунғандан һуң, Сәйфелмөлөк ҡоштан ыскынып, ағаска тотоноп, түбән төшөп, яр ҡырына ултыра. Ҡош яңынан осоп китә. Хәҙер был ярҙан менергә бер ҙә, бер ҙә аҡыл юҡ. Шул ҡәҙәре бейек яр, әҙәм менерлек түгел. Ун бармағының тырнағы төшөп бөтә, ҡыҙыл иткә ҡала. Бының тештәренә, ауыҙына балсыҡ, ҡом тула. Нисек тә тырмашып, теге ярҙың өҫтөнә менә. Менеп

...раһа, ни күҙе менән күрһен — шул ҡәҙәре тигеҙлек, шул ҡәҙәре ...р ялан. Бик асыға был хәҙер. Шунан ҡарап тора-тора ла:

— Ҡош та осмаҫ,
Ҡол да йөрөмәҫ
Был йыһанда, — ти.

Хәҙер бер аҙ ял итеп ултыра ла китә. Китһә, быға бер юлбарыҫ ...аршы килә. Шул ҡәҙәре оло, быны ашарға-йоторға килә.

— Бар ине бер тәбер* теше билендә,
Төшөргән ине йәнкиҙәр илендә.
Тәбер тешене алып, урә торҙо,
Ҡылыс менән уның башына орҙо, — ти.

Кинәттән ҡылысын алып был юлбарыҫҡа ынтылып сапҡайны, юлбарыҫтың башы өҙөлдө лә төштө, ти.

Хәҙер, ярар, был юлбарыҫтың тиреһен тунаны. Ите бик һимеҙ булды бының. Быны бешереп, ҡурып, бер аҙ тамаҡланды. Әҙерәк ит киҫәктәре лә алды, ризыҡҡа тип.

Китте тағы. Инде бара — гел тигеҙлек тә тигеҙлек. Бер ерҙә бер тау юҡ. Бер урман юҡ. Бер йорт юҡ. Бер шәһәр юҡ. Бик күп ерҙәр барғандан һуң ҡараһа, бер ялтырап торған йорт күрә. Япа-яңғыҙ.

— Ах! — ти. — Ни күрһәм дә күрәйем, быға барайым, — ти.

Бара был йортҡа. Шул ҡәҙәре биҙәлгән йорт. Уҡанан да алтындан ҡойолған йорт был. «Был — дейеү йорто», — тип яҙылған. Поҙаҡ менән йоҙаҡлағандар ишеген. Бер ерҙән дә керергә урын юҡ. Хәҙер теге ҡылысы менән йоҙаҡты бәреп вата. Өйгә керә. Керһә, был яҡта — алтын, был яҡта — көмөш. Йәненә нәҫтә кәрәк! Был йорттоң эсендә лә, тышында ла бер әҙәм юҡ. Эй йөрөй был, эй йөрөй. Бүлмәләрҙә күп йөрөй торғас, бер бүлмәгә барып керә, оло йорттоң бүлмәһенә. Ә унда бер бишек аҫылынып тора. Уҡанан ҡоролоп ҡуйылған. Кинәттән һикереп, был бишекте шартлатып өҙөп ала ла өҫтөрәп тышҡа алып сыға. Беререндә кеше сығыр урын юҡ, мисәтләнгән була бишек. Сығара да дейеүҙең ишек төбөнә ҡуя. Шунан был бишек эсенән бер тауыш килә.

— Ниндәй зат һин, әҙәмдәнме, бәрейҙәнме? Ниңә минә ҡағылаһың? — ти.

Эсен асып ҡараһа, бер матур ҡыҙ. Был ҡыҙҙың исеме беләгенә яҙылып ҡуйылған. Бының исеме Мәликә була. Бәҙиғолъямал булмай — теге һүрәт түгел. Шул ҡәҙәре матур ҡыҙ! Хәҙер был ҡыҙ тороп ултыра, Сәйфелмөлөк баҫып тора. Былар бер аҙ һуш йыйғандан һуң, ҡыҙ быға өндәшә.

— Ниндәй зат һин? — ти. — Ниндәй әҙәм? Был дейеүҙен йортона ни башың менән килеп керҙең? — ти. — Һин кем, әҙәмдәнме, бәрейҙәнме, дейеүҙәнме? — ти.

Сәйфелмөлөк быны, үҙ телендә булғас, иҫе китеп, һушы китеп йығыла, был ҡыҙҙы күреп.

Әҙерәк ятҡандан һуң тора был. Хәҙер Мәликә тигән ҡыҙ ҙа тороп ултыра. Был да янына ултыра. Былар һөйләшәләр. Сәйфелмө-

ләк башынан үткән бөтә хәлдәрҙе был ҡыҙға һөйләй. Ҡыҙ тыңлай. Хәҙер Мәликә әйтә:

— Эй-й әҙәм заты, — ти, — бына мин дейеү ҡулына дусар булдым, — ти. — Был дейеү әле бер көн йөрөнө, — ти. — Өс көн, өс төн йөрөгәс, минең яныма ҡайтып, мине тәрбиәләй, — ти. —

Тәнемдән тотмай ул, күлдәктән үргә.
Ҡулымдан тотмайҙыр һәм еңдән үргә.

Иллә миңә теймәй, — ти. — Был дейеү ҡулына төшкәнемә — бына ун бер йыл, — ти. — Ун бер йәшемдә килгән инем. Хәҙер мин егерме ике йәштә, — ти.

Шунан былар һөйләшәләр, илашалар. Сәйфелмөлөк әйтә:

— Һин асылыңды һөйлә инде, — ти. — Ҡайҙан килдең? Ниҙәр күрҙең? Мин һиңә һөйләп бөттөм, һин дә һөйлә, — ти.

Мәликә һөйләй.

— Хәҙер минең асылымды һөйләһәм, бик оҙаҡ, — ти. — Дейеү ҡайтып етмәһен, ҡайтһа, икебеҙҙе лә харап итә, — ти. — Хәҙер бер генә көн ҡалды, — ти.

Сәйфелмөлөк әйтә:

— Ҡыҫҡа ғына булһа ла, тиҙ һөйлә миңә, — ти. — Ҡайҙа тыуҙың? Ҡайҙа үҫтең? Ниҙәр күрҙең? Нисек дейеүгә килеп төшкәндәреңде тиҙ генә һөйлә, — ти.

Мәликә ҡыҙ башлай:

— Мин, — ти, — бер батшаның ҡыҙы, — ти. — Мин бер генә бала булғанмын. Инәйем мине баҡсала тыуҙырған. Шул тыуҙырған көндө өйөрмә менән бер бәрей ҡатыны инәйем янына килеп төшкән, — ти. — Тәхет менән, — ти. — Инәйем мине табып, имеҙеп ултыра икән, был бәрей ҡатыны бер ағас төбөнә барып, бер ҡыҙ бала тыуҙырған. Шунан, балаһын тыуҙырғандан һуң, балаһын күтәреп, минең инәйем янына килгән. Инәйемә әйткән:

— Эй, әҙәми зат, ҡатын, мин бәрей ҡатыны, мин дә бер ҡыҙ бала тыуҙырҙым. Һинең балаң кем? — тип һораған.

Инәйем әйткән:

— Минең дә балам ҡыҙ бала, — тип әйткән, ти.

— Алай булғас, — тип әйткән бәрей ҡатыны, — мин Ирән бағы еренән туйға китеп бара инем. Балам тыуыр ваҡыт еткәс, мине ошо ағас төбөнә төшөрөп киттеләр. Мине ҡайтышлай алып китәләр, улар туйға китте, — тип әйткән, ти. — Ҡайҙа әле, һинең ҡыҙың ниндәй? Бына минең ҡыҙым, — тип, үҙенең ҡыҙын күрһәткән.

Ҡыҙының йөҙөнән нур балҡып торған, ти. Ә мин дә бик кәм булмағанмын бит. Шунан инәйемә әйткән:

— Эй, ҡатын, минең баламды һин имеҙ. Һинең балаңды мин имеҙәйем. Былар имсәктәш булһындар. Былар бергә үҫһендәр. Бергә йөрөһөндәр. Мин ҡыҙымды һәр ваҡыт һинең ҡыҙың янына тәхет менән осроп алып килеп торормон. Мин — бәрей батшаһының ҡатыны, — тигән. Инәйем ғәжәпкә ҡалған. Ҡурҡып та ҡуйған, ҡурҡмаған да, был ҡатынды күреп, — ти ҡыҙ.

Хәҙер, ярай, былар вәғәҙәләшкәндәр. Инәйем хайран булып, был катынға күп тәрбиәләр ҡылған. Былар икеһе лә беҙҙе һөйөп, беҙҙе имеҙешкәндәр берәм-берәм. Хәҙер күп тә үтмәгән, бәрей батшаһы әйләнеп килеп, йәмәғәтен был баҡсанан алып киткән.

Мәликә һөйләй, Сәйфелмөлөк аҡылдан яҙып тыңлай.

Ә Мәликә әйтә Сәйфелмөлөккә:

— Күп һөйләштек, тиҙ бөтөрөргә тейешбеҙ, хәҙер дейеү ҡайға, — ти. Ярар, шулай ти ҙә Мәликә дауам итә:

— Өс йәшебеҙ тулыуға, теге бәрей ҡатыны беҙгә ҡыҙын алып килгән. Инәйем әйткән ҡатынға:

— Мин ҡыҙыма «Мәликә» ҡуштым, ә һин ҡыҙыңа ни исемле ҡуштың, дуҫым? — тип һораған.

— Минең ҡыҙымдың исеме Бәҙиғолъямал, — тип әйткән теге ҡатын.

Хәҙер беҙ өс йәшебеҙҙә, теҙҙәребеҙҙе терәп, бер-беребеҙ менән ҡурсаҡлы уйнаған кеүек ултырғанбыҙ. Бәрей батшаһының ҡатыны ҡыҙын бер тәүлек тотҡандан һуң, тағын алып ҡайтып киткән, мин яңғыҙ ҡалғанмын. Хәҙер теге баланы мин инәйемдән таптырам икән:

— Инәй, минең иптәшем ҡайҙа? — тип һорайым, ти.

Ә теге ҡатын әйтеп киткән. «Ике йылдан һуң алып килеп күрһәтермен», тип.

Хәҙер был ике йылды инәйем тәҡәтһеҙ көтөп торған. Мин дә онотмайым, ти. Хәҙер тағын инәһе ҡыҙын алып килде, ти. Шул ҡәҙәре матур, ти! Беҙ икәү тағын уйнайбыҙ, ти. Биш йәшкә еткәс, арыу ғына уйнағанбыҙ инде. Инәйҙәр өйҙә хайран ҡылалар, ти. Беҙгә ҡарап туймайҙар. Инде ҡыуанышалар, «ҡыҙҙарыбыҙ үҫә», тип. Шунан инәйемә әйтә, ти:

— Мин хәҙер тағын биш йылһыҙ килә алмам, — тип әйтә, ти. — Былар ун йәшкә еткәндә, быларҙы тағы ҡауыштырып, уйнатырбыҙ, — тип әйтә, ти.

Инәйем риза булып ҡала. Мин ғашиҡ булып, тәҡәтһеҙ көтәм, ти, дуҫымды.

Биш йыл үтеп тә китте, ти. Мин ун йәшкә еттем. Ә Бәҙиғольямалдың инәһе дауыл менән, тәхет менән килеп төшөп, беҙҙе тағын уйнарға ҡуйҙылар. Өйҙә үҙҙәре хайран ҡалып, ҡунаҡтар менән тәғәм ейеп ултыралар. Ә беҙ тышта уйнайбыҙ. Хәҙер беҙ уйнаған ваҡытта, ни күҙең менән күрәһең, бер ҡаты өйөрмә сыҡты. Бәҙиғолъямал бәрей ҡыҙы булғас, теше батмаған, дейеү мине осороп алып китте. Инәйҙәр, ах-вах килеп, ҡулдарын тотоп тороп ҡалдылар, ти.

Дейеү мине ошо өйгә алып килеп, беркетеп ҡуйғанға бына ун бер йыл инде. Мин ун бер йәшемдә бында килеп төштөм. Хәҙер дейеү ҡулында дусар булып ятам. Ә үҙе шул ҡәҙәре мине тәрбиәләй. Нәҫтә өсөн аҫырағанын белмәйем. Дейеүҙең телен өйрәндем хәҙер. Һөйләй, ҡайтҡас, мине наҙлай, ашата-эсерә, кейендерә.

— Ниндәй тәғәмдәр кәрәк? — тип һорай. — Ниндәй кейемдәр кейәһең килә? — тип һорай.

Өс көн йөрөп кайткас, шулай итеп һорай ҙа, киткәндә тағы ла шунда элеп, сығып китә.

— Хәҙер дейеүҙең кайтырға вакыты етте, — ти Мәликә, — Йә, әҙәм заты, һин ғәйеп бул, юғиһә һине бер минут тотмаç, — ти.

Ә Сәйфелмөлөк әйтә:

— Тукта, минең бер әйтәһе һүҙем бар. Һин сак кына тыңла, — ти. — Әҙәмдәрҙең йәнен Ғазраил ала бит, дейеүҙәрҙең йәнен кем ала икән? — ти. Кыҙ:

— Улар бик кеүәтле. Уларҙың бит нисә башы бар! — ти.

Хәҙер кыҙ менән егет һәйбәтләп һөйләшәләр. Сәйфелмөлөк бишекте урынына элә. Элеккесә итеп бер ерен дә белгертмәй, әүәлгесә куя. Ә икенсе бер алтын йоҙакты аçтан тартып алып, ишекте әүәлгесә бикләй. Аскысын, кем белһен, хоҙа белһен, кая куйғанын. Хәҙер Сәйфелмөлөк би-и-к йыраккка китә.

Дейеү кайтып килә, мин һиңә әйтәйем, ер тетрәтеп, дауыл уйнатып, яман, әй! Дейеү кайтып килеп керә. Мәликә яғына үтә. Ишекте аса. Бер ҙә йоҙакты абайламай. Хәҙер дейеү кайтып керә, Мәликәгә әйтә:

— Ах, бында бит әҙәм еçе килә! — ти.

— Эй-й-й, — ти, Мәликә әйтә, — һуң үҙең әҙәмдәр ашап кайтаһың да, шул ит тәнеңә һеңә бит, — ти. — Бында ниндәй әҙәм килһен инде. Үҙең әйтәһең бит: «Бында кош та осмай, кол да йөрөмәй», — тип. — Мин бит һинең кулыңда ун бер йыл дусар булып ятам. Берәр әҙәм заты күргәнең бармы? Нәçтә һөйләйһең һин? — ти. — Кит, һөйләмә! — ти Мәликә.

Хәҙер, ярар, Мәликәне ашата, эсерә, кейендерә. Мәликә бының менән, үҙенең мораҙы булмаçмы тип, бик ихлас һөйләшә. Дейеүгә әйтә:

— Эй-й, мине караған иптәшем! — ти. — Һинән бер һөаль* һорамаксы булам, — ти.

Дейеү әйтә:

— Быгаса һораманың, нишләп бөгөн һорайһың? — ти.

Был дейеү әҙерәк шикләнеп тә куя. Мәликә кыҙ:

— Әҙәмдәрҙең йәнен Ғазраил ала,
Дейеүҙәрҙең йәнен, белмим, кем ала? —

тип, дейеүгә көй менән әйтеп күрһәтә. Дейеүҙең бик асыуы килә. Хатта муйын тамырҙары кабара.

— Ниндәй һорау был, ниндәй һорау был? — ти. — Быны ни яктан һораның? — ти.

— Эй-й-й, — ти, Мәликә әйтә, — үҙем һорайым инде, — ти. — «Беҙҙең йәндәрҙе Ғазраил ала», — тип атайым, инәйем әйтә торғайны. Ун йәштә булғас, аңлайым бит инде. Укыным да. Әле һинең яныңда торғас, нисек икәнен беләһем килә, — ти.

— Һи-и-и-и, — ти, дейеү әйтә, — минең йәнемә бер кемдең дә көсө етмәй!

Сөләймән үлде, дейеүҙәр ҡотолдо,
Уның алдында күп ғоссә* йотолдо.
Сөләймән үлгәс, иркенлек тыуҙы.
Уның йөҙөгө беҙҙе күп ҡырҙы.

Сөләймәндән һуң беҙ иркенләп киттек. Беҙҙең йәндә бер кеше лә алалмай хәҙер, — ти. — Минең йәнем — ошо йорттоң ҡырындағы диңгеҙ төбөндә, ҡыҙыл һандыҡ эсендә бер күгәрсен, — ти. — Һандыҡ тегермән ташы менән баҫтырып ҡуйылған. Ә мин үҙем — дейеүҙәрҙең батшаһы, — ти. — Минә бер кемдең дә көсө етмәй, — ти. —

Ул һандыҡты кем тапһын,
Ул күгәрсенде кем салһын?!

Мәликә ҡыҙ бик бойоға. Шатлыҡтары эсенә һыймағайны, ҡайғылары хәҙер башына сыҡты.

— Ярар, улай икән, — ти. — Һорайым инде сөаль итеп. Рәхмәт һөйләүенә, — ти.

Дейеү тағы ла эшенә китә, өс көнгә.

Хәҙер, ярар, сығып китә был, бишекте беркетеп. Сәйфөлмөлөк йөрөп килеп, тағы Мәликә янына инә.

— И-и-и! — Мәликә әйтә, — һораным, — ти. — Ҡайҙа минә бынан ҡотолорға! Минең башым ошонда серей инде, — ти. — Мин һиңә хәҙер һөйләнем инде хәл-әхүәлде. Һин Бәҙиғолъямалды табырһың, ти. Минең әхирәтем ул, ти. Минең атайыма барып юлыҡһаң, һин Бәҙиғолъямалды табырһың. Минең атайыма ғына юлыҡ, һин йөрө, һин эҙлә. Ә мин дейеү ҡулынан ҡотола алмам, — ти.

Хәҙер былар ултырып илашалар. Илашалар ҙа Сәйфелмөлөк Мәликәгә әйтә:

— Туҡта әле, дуҫым, мин һиңә бер яҡшы һүҙ әйтәйем әле.

Сөләймән йөҙөгө миндә хәҙер ирүр,
Ғинайәт* ҡилғусы бер ҡадир* ирүр.

Сөләймән батшаның йөҙөгө минең бармағымда бит, — ти. — Һис ҡайғырма, мин һине дейеүҙән коткарам. Иллә һин минең хәжәтемдә үтәрһең ҡайтҡас, — ти. — Ҡайталһаҡ, — ти. — Мин һине дейеүҙән алып китәм, — ти.

Мәликәнең иҫе китә:

— Ай-һай, икебеҙ ҙә дусар булабыҙ дейеүгә, беҙ юғалабыҙ хәҙер дейеү ҡулында, — ти. — Һин юк уйҙарҙы уйлама. Минең әйткән һүҙҙәремде тотоп, минең атайыма кит, — ти.

— Юҡ, һине бында ҡалдырмайым, — ти Сәйфелмөлөк.

Хәҙер торғоҙа Мәликәне, алып сыға тышҡа. Алтын-көмөшөн байтаҡ ҡына тултыралар былар дейеүҙең. Ашамлыҡтар ҙа күп алалар. Былар өй ҡырындағы диңгеҙ ярына баралар. Сәйфелмөлөк бармағындағы йөҙөктө һалып, тиҙ генә һыуға тыҡҡайны — ғобор-ғобор тегермән ташы төшөп ҡалып, һандыҡ килеп тә сыҡты өҫкә. Ҡыҙыл һандыҡ йоҙаҡлы. Йоҙаҡты бәреп ватты. Тиҙ генә күгәрсен-

де, ҡулын тығып, тотоп алып, кеҫәһендәге бәкеһе менән күгәрсенде салып та ебәрҙе, күктән ҡандар яуа ла башланы! Дейеү ҡайтып килеп етә икән, йәне ҡуҙғалғас. Өйөнән йыраҡ та түгел, дейеү дөп итеп йығылып төштө күктән. Былар кәмәгә ултырып, һыу менән киттеләр. Шунда яр буйында дейеүҙең кәмәһе лә булған инде. Киттеләр-киттеләр, күп шөкөрҙәр иттеләр, күп мөнәжәттәр уҡыны Сәйфелмөлөк. Киттеләр былар, дейеүҙең йорто ҡалды. Дейеү йығылып, үлеп ҡалды.

Хәҙер Сәйфелмөлөк, бик арыған булғас, бик ҡурҡыуҙан ҡотолған булғас, йоҡоға китте. Кәмә эсендә. Мәликә һаман ултырып килә. Ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, һыуҙан бер нәмә килә. Ауыҙы бының өй кереп китерлек йәнлек. Ебәрә, эй, һыуҙы сәсеп, әллә ҡайҙан һыу кәмәгә килеп бәрелә. Тулҡын бәрелә.

Ҡотолдоҡ дейеүҙән — был ни бәләлер?
Уянды йәнә ул шаһ баһадир.

Мәликә әйтә:

— Эй, ярарым, тор әле. Бына бер йәнлек килә, беҙҙе хәҙер кәмәбеҙ менән йота бит! — ти.

Тәбер төшөнө алып үрә торҙо,
Ҡылыс менән унығ башына орҙо.
Киҫелде башы, шидрин төпкә төштө,
Унығ тәлбиде мәгәр күккә осто.

Йәғни башы һыу төбөнә китте, йәне һауаға осто ул йәнлектең.

Ҡотолдолар былар, киттеләр. Баралар, китеп баралар, күү-ү-п ерҙәр баралар былар. Быларҙың ашамлыҡтары яндарында етерлек, алтын-көмөш тә күп яндарында. Хәҙер былар бара торғас, күү-п караптар килгәнен күрҙеләр йыраҡтан. Һыу менән күү-п пароходтар килә. Сәйфелмөлөк:

— Нишләйбеҙ? — ти. Күп мөнәжәттәр әйтте, тегеләр килеп етмәҫтән борон. Былар кәмәләрен һыу ситенәрәк табан сығарып, тегеләрҙе көтәләр хәҙер. Ергә төштөләр. Ергә төшөп, диңгеҙ ҡырында караптарҙы көтөп торалар.

Килеп еттеләр былар. Былар барыһы ла — әҙәмдәр, әҙәм заттары. Хәҙер һөйләштеләр, һораштылар. Мәликәнең аталарын һорайҙар, шулай-шулай. Былар арттағы кәмәләр килеп еткәнен өндәшмәй генә көтәләр. Килеп етһәләр — Мәликәнең ауылынан килгән кешеләр. Эй-й-й-й, былар, һыуҙан сығып, Мәликәне ҡосаҡлап, илашып-илашып:

— Беҙ бик күп килдек һыу менән, — тиҙәр. — Һеҙ әкренләп беҙҙең арттан ҡайтығыҙ, беҙ Мәликәнең атаһынан һөйөнсөгә алдан китәбеҙ.

Хәҙер былар арттан баралар, тегеләр — алдан батшаға китәләр. Был батшаның исеме Тажылмөлөк була. Хәҙер былар ҡайталар, әйтәләр. Батша менән ҡатыны, быны ишеткәстән, йүгерә-йүгерә барып әүмәләнеп-әүмәләнеп тәгәрәп, һушһыҙ булалар! Һыу һибеп һуштарына килтерәләр.

Арттан кәмәләр ҡайта. Хәҙер Мәликә менән Сәйфелмөлөк тә килеп етә. Кәмәнән сығалар. Эй-й-й, Мәликәнең йөҙө ҡояш кеүек! Ул Сәйфелмөлөк шул ҡәҙәре матур! Батшаның бөтә халҡы хайран булып, һушһыҙ булып, быларҙы ҡаршылай. Хәҙер батшаға килеп, Сәйфелмөлөк Мәликәне атаһына тапшыра. Мәликә һөйләй барыһын да. Йыйын йыя батша. Сәйфелмөлөк үҙ хәлен һөйләй. Мәликә, һөйләп бөткәндән һуң, ошоно әйтә:

— Тәкәббер ҡылмағыҙлар —
Һөттән аҡмын.
Тассауир ҡилмағыҙлар —
Һыуҙан паҡмын, — ти.

Ун бер йыл дейеү ҡырында торһам да, мин һөттән аҡ, һыуҙан пак, ҡыҙ хөкөмөндәмен һаман.

— Үҙ үҙем — үҙемдә,
Үҙ фекерем — үҙемдә, — ти. —

Шул ҡәҙәре дейеү мине яҡланы, — ти.

Халыҡтар ике көн, өс көн тыңлайҙар быларҙы. Сәйфелмөлөк тә үҙ хәлен һөйләй быларға. Сәгитте, бүтән иптәштәрен һөйләп илай быларға.

Хәҙер, ярар, батша быға тәхетен бирә. Сәйфелмөлөк тәхеткә менеп ултыра.

Хәҙер Мәликә инәһенә әйтә:

— Инәй, Бәҙиғолъямал әхирәтем киләме? — ти.

— Килә, балам, йыл һайын килеп, хәлеңде һорашып, бер-ике тәүлек тороп китә. Инәһе лә килә, — ти.

Эй-й-й, Сәйфелмөлөктөң иҫе китте, һушы бөттө хәҙер. Мәликә әйтә:

— Килер көнө етәме, инәй? — ти.

— Етә, балам, вәғәҙә көнө күп ҡалманы, — ти. — Һине килеп тикшереп, «Берәй ерҙән хәбәр юҡмы?» тип һорап тора. Уның атаһы — батша, шул ҡәҙәре бәрейҙәрҙән эҙләтеп ҡарай, ти, юҡ, бер ерҙән дә һинең еҫеңде һиҙмәйҙәр, тапмайҙар, ти.

Хәҙер, ярар, Бәҙиғолъямалдың килер көнө етте. Туҙан-тупраҡ менән осоп, тәхет менән Бәҙиғолъямал килеп төштө. Мәликә күренмәй тора. Инәһе быны ҡаршы ала. Һәйбәтләп тәрбиәләй. Бәҙиғолъямалдың инәһе әйтә:

— Берәй тәүлек торһон ҡыҙым, – ти! — Һинең күңеләнде әүрәтһен, минең ҡыҙым менән һинең ҡайғыларың баҫылһын, — тип ҡалдырып китә.

— Ҡыҙым, бына шул көн килеп еткәс, килеп алырмын, — тип, ҡыҙына вәғәҙә ҡуйып китә.

Бәҙиғолъямал Мәликәнең инәһе янында ултырып ҡала. Инде илашалар, инде һөйләшәләр! Бәҙиғолъямалға Мәликә күренергә ҡурҡа, һушһыҙ булыр ҙа, бер-бер хәл булыр, тип.

— Мәликәнең хәбәре бар бит әле, — ти инәһе әйтә, — бер яктан ишетеп торабыҙ, — ти. — Бәлки, ҡайтмаҫмы... — ти. Бәҙиғолъямал әйтә:

— Ниндәй хәбәр ул? — ти.

— Һөйләмәй торам әле. Әҙерәк хәл йый, әҙерәк аҡыл ал, — ти.

Хәҙер былар йоҡларға яталар. Мәликә әкрен генә Бәҙиғолъямал янына кереп, ҡуйынына инеп ҡосаҡлап, Бәҙиғолъямалды уята төндә. Көндөҙ күҙе менән күрһә, бәлки, һушынан яҙыр, тип ҡурҡа. Бәҙиғолъямал һиҫкәнеп уянып китә, һикереп тороп китә.

— Был ниндәй хәл? Минең яныма кем килде? — тип ҡысҡырып ебәрә. Мәликә әйтә:

— Эй, дуҫым, мин ҡайттым! Хафаланма, мин — Мәликәң! — ти.

Эй-й-й, төндә ҡараңғыла былар һушһыҙ тәгәрәп, һарайҙың иҙәнен бер итеп әйләнәләр. Ҡосаҡлашалар, көлөшәләр, зыҡ ҡубалар.

— Ниндәй хәлдәр менән ҡайтҡаныңды ҡасан һөйләйһең? — ти Бәҙиғолъямал. Мәликә әйтә:

— Ашыҡма! — ти. — Саҡ ҡына рәтләнәйек, бер-беребеҙҙе көндөҙ күрәйек. Мин һиңә нисек ҡайтҡанымды берәм-берәм һөйләрмен. Һин тыңлап ҡына торорһоң, — ти. — Тик һин минең һөйләгән һүҙемде ҡабул итерһеңме? — ти. Бәҙиғолъямал әйтә:

— Ҡабул итерҙәй булһа, итермен; итмәҫтәй булһа, мин әле алдан вәғәҙә ҡуймайым, — ти.

Ярар, таң ата. Былар хәҙер көндөҙ күрешәләр. Былар тағын һушһыҙ булып тәгәрәйҙәр. Мәликәнең инәһе күп итеп аштар әҙерләй. Сәйфелмөлөк — тәхеттә. Уға әкрен генә хәбәр бирәләр. Бәҙиғолъямалдың килеүен әйтәләр. Ул сабыр ҡыла.

Ашаған-эскәндән һуң, Бәҙиғолъямал әйтә:

— Миңә бөтә хәлеңде аңлат хәҙер. Нисек ҡайттың, нисек төштөн дейеүгә — барыһын да һөйлә, мин тыңлайым, — ти.

Хәҙер былар бер аулаҡ бүлмәгә инеп ултыралар. Мәликә әйтә:

— Эй, дуҫым, минең хәлемде, минең түҙемде мәгбут* күрһәң, мин һинең өсөн йәнем фиҙа, һөйләйем, — ти. Бәҙиғолъямал әйтә:

— Минең дә йәнем фиҙа. Мин һине күрмәгәнгә нисә йыл бит хәҙер. Һарғайҙым, әрнейем, илайым, төштәремдә һине күрәм, ҡауышам, — ти. — Әллә, бәлки, ҡауышырмын, тип ҙур өмөттә булдым, — ти. Мәликә һөйләй:

— Бына шулай, — ти, — дейеү ҡулында ун беренсе йылға сыҡтым. Дейеү мине шул ҡәҙәре тәрбиәләй. Шәлемдән, күлдәктән башҡа тәнемә ҡулын тейҙермәне, ҡулымдан бына ошо еңемдән башҡа тотманы. Шул ҡәҙәре мине наҙлап тәрбиәләне. Миңә ҡарап көлөргә лә ояла ине. Берҙән-бер көндө ята инем, бер әҙәм заты килеп керҙе. Килеп керҙе лә минең элеп ҡуйған тәхет бишегемде шартлатып өҙөп алып, тышҡа алып сыҡты. Минең йөрәк ҡупты.

«Эй! — тимен, миңә дейеү зыян килтермәгәйне, миңә зыян килер көн ошо икән!» — тим.

Сығарып ҡуйҙы, миңә тауыш бирҙе. Мин ғәжәпкә ҡалдым: минең һүҙемсә — бының һүҙе! Эйе, шау минең телемсә!

Аптыраным. Пәрҙәмде асып ебәрһәм, бер хур егете янымда баҫып тора! Һушым, ғаҡылым китеп, күп заман һушһыҙ булып торҙом. Ул миңә һаман бағып торҙо. Мине һәйбәтләп тәрбиәләп ятҡан еремдән торғоҙоп ултыртты ла:

— Ҡурҡма, мин әҙәм заты, — тине. — Һис ҡурҡма. Хәл-әхүәлдәрҙе һорашайыҡ, белешәйек, — тип әйтте.

Мин аҡылымды йыя алмайым, ни өсөн йыя алмайым? Ун бер йыл буйына мин бит әҙәм заты күрмәгән, аҡылым башыма килмәй, бер аҙ ултырҙым. Хәҙер мин әйттем:

— Һин әхүәлеңде иң тәү һөйлә, унан мин һөйләйем, — тинем.

Ул тыуғандан алып минең янга килгәнсе бөтә күргәндәрен һөйләне. Мин тыңланым. Шунан мин һөйләнем: нисек-нисек мин тыуғанмын, нисек-нисек һинең менән имсәктәш булғанбыҙ. Нисек шул баҡсала бергә йөрөгәнбеҙ. Ун йәштәребеҙгә хәтлем дуҫ булып йөрөгәнбеҙ, уйнағанбыҙ, көлгәнбеҙ. Нисек һин тороп ҡалып, мине дейеү осороп алып киткәнен — барыһын да һөйләнем. Фәҡәт һинең исемеңде һораны ул, һүҙҙе бүлдереп. Мин әйттем. Ул һушһыҙ булып тәгәрәне. Мин торам ҡурҡып, дейеү ҡайтыр тип. Бер аҙ ятҡандан һуң, мин уға йомшаҡ ҡулдарым менән нисек тә булһа хәл кертергә тырыштым, ултырттым. Ултырҙы. Бер аҙ ултырҙы ла, унан һушына килгәс, һикереп баҫты. Шул егет мине алып ҡайтып, атайыма тапшырҙы. Уның исеме — Сәйфелмөлөк, Рәбиғолмөлөк батшаның улы. Минең атайым, мине алып ҡайтҡан өсөн, уға тәхетен бирҙе, әле ул тәхеттә ултыра. Әгәр ҙә мөмкин булһа, әхирәтемдуҫым, һин уны күрер инең, — ти Мәликә.

— Юҡ, мин нишләп әҙәм затын күрәйем? — Мин бәрей ҡыҙы бит, — ти, Бәҙиғолъямал әйтә. — Мин күрмәйем уны, миңә уны һөйләмә. Миңә ул егетте һөйләмә, үҙеңдең ни хәтлегеңде һөйлә! Миңә ул егеттең төшөн дә аңғартма. Мин уны күреп, тегеләй-былай булһам, минән ауыл ҡыҙҙары «Те-фф-е-ү!» тип көлөрҙәр. Юҡ, уны һөйләмә! — ти.

Хәҙер был бер ҙә яҡын килмәй. Һөйләтмәй Сәйфелмөлөктө. Тик үҙе турында, Мәликәнең нисек йөрөүе турында һөйләргә ҡуша. Хәҙер Мәликәнең инәһе бик ҡайғыра:

— Ай-һай, нишләйбеҙ хәҙер? Ул яҡын килмәһә, күрмәһә, ул егет нишләр инде? — ти. Хәҙер Мәликәнең инәһе Бәҙиғолъямалды өгөтләй:

— Эй, ҡыҙым, — ти, — минең ҡыҙыма юлдаш булып ҡайтҡан егетте һин бер генә күр әле күҙең менән. Уға бөтә ауыл халҡы зармоң ғашиҡ, — ти.

— Ниңә күрәйем мин уны? Һөйләмәгеҙ миңә уны, әҙәм затын! — ти.

Бәрейҙәргә бәшәр* лайыҡ буламы,
Осар ҡошҡа кеше ғашиҡ буламы, — ти.

Мин бит бәрей, мин — осар ҡош. Ә ул — әҙәми зат. Беҙ уттан яратылған, улар — тупраҡтан. Һөйләмәгеҙ миңә ул кешене, — ти.

Мәликә менән инәһе бик ҡайғыға ҡала. Хәҙер Бәҙиғолъямалға һүҙ ҡушырға былар бик ҡурҡалар. Ярар, хәҙер өс көн үтте. Инәһенең килер вәғәҙәһе лә етеп килә Бәҙиғолъямалдың.

Мәликә би-и-и-ик илай, бик илай. Бының күҙ йәшен күреп, Бәҙиғолъямалдың эсе көйә. Ни өсөн көйә? Теге егеткә күренмәгән өсөн Мәликәнең илағанын һиҙә. Бер көндө былар бер хилүәттә* ҡуналар Мәликә менән. Бәҙиғолъямал әйтә: «Туҡта әле, — ти, — был йоҡланы, инәһе йоҡланы, халыҡтар йоҡланы. Батша булған булһа, ул егет, бәлки, йоҡламағандыр. Мин уны сығып күҙәтәйем әле», — ти. Бәҙиғолъямалдың күңеленә ошо уй төшә. Хәҙер был әкрен генә тора, тышҡа сыға. Сәйфелмөлөктең, күп ярандар йыйып, кәңәш үткәргән ваҡыты була тәхетендә. Халыҡтары тарала, Сәйфелмөлөк ҡала, тәхетендә ултыра, йоҡламай. Йоҡлар ине, уның йөрәгендә ут. Кү-ү-ү-п назымдар уҡып ултыра Сәйфелмөлөк тәхетендә. Бәҙиғолъямал сыға ла әкрен генә бының ултырған тәхетенең пәрҙәһенән ҡарай. Күрә быны. Был бик матур, матур булһа ла, быны һаман оҡшатмай.

— Был бит әҙәм, быны ҡарап, мин бит бәрей, — ти. — Был ниндәй уй уйлаған, был ниндәй әҙәм? — ти. Шулай тип уйлап торғанда, бының күңелендә әҙерәк ғишыҡ әҫәре тыуа. Хәҙер был китмәй, һарай янында ултыра. «Туҡта, бәлки, был тышҡа сыҡмаҫмы? — ти. Бынарҙан бер мәсьәлә, һөаль алышып ҡарармын», — ти. Хәҙер был ишек төбөндә ултыра.

Сәйфелмөлөк күп мөнәжәттәр уҡығандан һуң, тышҡа сыға. Сыҡһа, өй ҡырында бер әҙәм. Хәҙер Сәйфелмөлөк:

— Был кем? Нишләйһең бында? Ни эш менән килдең? Нәҫтән бар бында? — ти.

Батша булғас, тикшерергә кәрәк бит инде. Өндәшмәгәс, барып ҡулын һуҙғайны, был ут булып сәселде. Сәйфелмөлөк ғәжәпкә ҡалды! Был ниндәй хәл! Тора, тора баҫып һаман. Ут, бер аҙ торғас, тағы әҙәмгә әүерелде.

Сәйфелмөлөк әкрен генә, йыраҡтан ғына, иләп кенә, хәл-әхүәлде һорай. Шунан Бәҙиғолъямал:

— Һин, әҙәм заты, һин ниндәй уйҙа? — ти. — Һин ниндәй хәлгә дусар булдың, нәҫтә уйланың һин? Беҙ бит бәрей, ә һин — әҙәм заты! Нишләп һин былай мине юллап йөрөйһөң! Мин һиңә тиң түгел, ҡул түгел. Һин был уйҙан ҡайт. Һинең үҙ фекерен үҙеңдә булһын — минең үҙ фекерем үҙемдә булһын. Һин миңә теймә, миңә ҡағылма, — ти.

Хәҙер Сәйфелмөлөктөң һүҙҙәре бының йөрәгенә кереп урынлаша. Бәҙиғолъямал Сәйфелмөлөккә яҡын килә. Былар күрешәләр, ҡул тотошоп. Ҡыҙ әйтә:

— Ярай, күрештек, мин Мәликә янына керәм. Һин үҙ тәхетеңә мен, айырылышайыҡ әлегә, — ти. Бәҙиғолъямал инеп, Мәликәнең янына ята.

Сәйфелмөлөк, ул төндө ҡайҙа йоҡо, йоҡламай. Таң аттыра алмай. Хәҙер Мәликә уянып китә. «У-у-ф-ф!» — ти. Ни өсөн уф ти? Бәҙиғолъямал Сәйфелмөлөктө күрмәгәнгә ҡайғыра.

Хәҙер Бәҙиғолъямал, Мәликә янына инеп яткас, бер ҙә йоклامай. Йоклай алмай: бының күнелендә бик оло кайғы урынлашты. Бик кыйынлыкка төштө был. «Эй-й-й-й, ниндәй хәл был! Инәйем килһә, ни йөҙөм менән күренермен, ни тип әйтермен», — ти. Хәҙер былар — Мәликә лә уяна, Мәликәнең инәһе лә уяна. Аш кертә былар янына. Мәликә әйтә:

— Минең йоком йоко түгел инде, дуҫым. Минең бит әйткән һүҙемде һин тыңламайһың, — ти. — Минең йөрәктә ут бит минең, — ти. — Нишләп һин бер аҙ вәғәҙә куйып, бер аҙ күренмәйһең минең апкайткан юлдашыма? Күренеп кенә кара һин! — ти.

Бәҙиғолъямал артка ғына карап ултыра, төнгө хәлдәрен Мәликәгә белгертмәй. Хәҙер ашайҙар, эсәләр. Бәҙиғолъямал иҙәнгә төшөп баҫа ла:

— Эй, дуҫым, алып кайткан дуҫынды килтер әле, булмаһа күреп калайым, — ти.

Мәликә һушһыҙ була, тәгәрәп китә был һүҙҙе ишетеп. Мәликәнең инәһенең кулындағы сынаяғы төшөп китә. Былар икеһе лә һушһыҙ булып, был һүҙгә би-и-к шатланалар! Хәҙер былар бер аҙҙан хәл йыйып, Мәликә хәбәр ебәрә Сәйфелмөлөккә. Бәҙиғолъямал һәйбәтләнеп биҙәнә, кейенә. Тәндәрен, баштарын, күлдәктәрен һыпырғылап әҙерләнә. Хәҙер Сәйфелмөлөк килеп керә. Өйҙөң эсе нур кеүек яктыра, мин һиңә әйтәйем. Бәҙиғолъямал быға карап ғашик була. Яңынан ғишкы арта. Былар күрешәләр. Мәликә тағы ла һушы китеп тәгәрәй, был хәлде күреп. Былар хәҙер табын әҙерләп, Мәликәнең инәһе, быларҙың өсөһөн бер өҫтәлгә ултыртып, тәғәмлектәр килтерә. Былар ашайҙар-эсәләр. Сәйфелмөлөк Бәҙиғолъямалдан күҙен алмай, Бәҙиғолъямал Сәйфелмөлөктән күҙен алмай. Бәҙиғолъямал әйтә:

— Ярар, минең күңелем һинә беркетелде. Һин Мәликәне кайтарған хакка, мин һиңә ғашик булдым, — ти. — Мин һинең менән булам, кайғырма, — ти. Сәйфелмөлөктөң барып аркаһынан һыпыра. — Бар эшеңә тотон, сык, — ти.

Сәйфелмөлөк сығып китә. Белмәйем, кайҙа баҫып баралыр, кайҙа баҫып барғанын белмәй. Барып эшенә тотона. Бәҙиғолъямал Мәликә менән тороп кала.

Хәҙер Бәҙиғолъямалдың инәһенең килер көнө етте алырға. Бәҙиголъямал әйтә:

— Инәйемә ни йөҙ менән был һүҙҙе әйтәйем, ни йөҙ менән күренәйем инде? — ти. — Инәйемдән оло атайымдың әсәһе бар унда. Шәһәрбаныу, — ти. — Уға инәйем нисек һүҙ тишер, ни йөҙ менән күренербеҙ, кайткас, — ти. Мәликә әйтә:

— Хафаланма. Һис бер һинең һүҙеңдән улар сыкмаҫтар, — ти.

Хәҙер дауыл-тәхет менән Бәҙиғолъямалдың инәһе килеп төшә. Бәҙиғолъямалды ауыр бер хәлдә күрә был.

— Йә, кыҙым, әллә ауырыу тейҙеме һиңә? Бутәнсәләнгәнһең, — ти.

— Юк, инәй, бер ауырыу ҙа теймәне. Мәликәне күргән нейемдән күп уйҙар уйлап, күп кыуаныстарҙан ошолай булдым, — ти.

Ярар, хәҙер аш килтерә Мәликәнең инәһе. Ашайҙар-эсәләр. Бәҙиғолъямал, нисек һүҙ тишергә, ғәжәпкә ҡала. Ҡайтып китәһе килмәй иленә. Сәйфелмөлөк янынан китәһе килмәй.

— Эй, инәй, һин килгәс тә минең хәлемде белдең, — ти. — Мин бер хәлгә уғраштым* бит, — ти.

— Эй, бәпкәйем, ниндәй хәл ул?

— Бына, инәйем, Мәликәне килтергән юлдашы, — ти, — миңә алты йәшемдән минең һүрәтемде күреп ғашиҡ булған, ти. Ул мине эҙләп, к-ү-ү-ү-п кешеләрҙең башын харап иткән, ти, күп кәмәләр менән. Бер батшаның улы булған. Күп ҡыйынлыҡтарға осраған. Күп шәһәрҙәр кискән, мине эҙләгән, һораған, минең исемемде бер ерҙән дә ишетмәгән. Күп йөрөй торғас, дейеү апкиткән Мәликәнең һарайына барып юлыҡҡан. Һарайға кереп, Мәликәне тапҡан. Мәликә минең хәлемде уға һөйләгән. Ул, шул хәҙәре уҫал дейеүҙең башына етеп, Мәликәне дейеүҙән ҡотҡарып, атаһына килтереп тапшырған. Атаһы уға тәхетен биргән, бөгөнгө көндө ул егет тәхеттә, инәй, — ти. — Мин уға ғашиҡ булдым, минең һис сарам юҡ. Минең менән шул Сәйфелмөлөк тигән егетте алып ҡайтһаң ғына ҡайтам, юғиһә, мин унын янынан китмәйем, — ти. Инәһе хайранға ҡала. Ҡапҡан тәгәмен йотмай.

— Эй, балам, ниндәй уйҙарға баттың, ниндәй хәлдәргә мине төшөрҙөң? — ти. — Беҙ өләсәйеңә нисек күренербеҙ? Нисек атайыңа был һүҙҙе тишербеҙ? Йә, нишләйбеҙ хәҙер? — ти.

— Инәй, ҡайғырма. Бында бер хикмәт бар. Беҙ бер ваҡытта ла юғалмабыҙ. Әйҙә, Сәйфелмөлөктө ҡалдырмайыҡ. Ин тәүҙә ҡартинәйгә күрһәтәйек. Ул күргән көйгә, һушы китер. Унан ҡартинәй әкрен генә атайыма һөйләр, — ти. — Шулай итеп, беҙҙең эш көйләнер, инәй, ҡайғырма, — ти.

Былар, Сәйфелмөлөктө алып, хәҙер осалар Ирәм бағына. Ҡайтып төшәләр Ирәмбағ шәһәренә. Батша тәхеттә була, Бәҙиғолъямалдың атаһы. Быларҙың баҡсалары бик ҙур. Ҡоштар һайрап, алмалар-емештәр бешеп ултырған була. Инәһе әйтә, Бәҙиғолъямалға барып:

— Эй, балам, был кешене ошонда ғына ҡуйып торайыҡ. Кинәттән алып кермәйек, — ти. — Ҡартинәйең дә күрһә был кеше менән ҡайтып кергәнебеҙҙе, бер ҙә күңеленә һыйҙырмаҫ. Әкренләп кенә ҡартинәйеңә иң тәү һөйләрбеҙ. Унан атайыңа ул әйтер, — ти. — Был әлегә бында ҡалып торһон, баҡсала, — ти.

Сәйфелмөлөктө баҡсаға ҡуйып, Бәҙиғолъямал менән инәһе Шәһәрбаныу ҡарсыҡ янына керәләр. Икәүләп, теге әбейгә аңлаталар. Әбей:

— Бик хуш, — ти. — Ваҡыт еткәс, алма бер өҙөлөп төшә ул, ваҡыт еткәндер балаға, — ти. — Һис ҡайғырма. Мин барып, әкренләп улыма аңлатайым, — тип, ҡарсыҡ Шаһбал батшаның тәхетенә китә.

Ә былар Сәйфелмөлөктөң янына тип, сыҡһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр — Сәйфелмөлөк юҡ. Тегеләй ҙә йүгерәләр, былай ҙа йүгерәләр, баҡсаны бер итеп йөрөйҙәр — Сәйфелмөлөк юҡ баҡсала. Бәҙиғолъямал һушһыҙ булып тәгәрәй.

Шәһәрбаныу әбей Шаһбал батшаға был һүҙҙәрҙе һөйләй. Шаһбал батша тыңлай. Бик күңеленә хуш килә, инәһе һөйләгәс. «Ярар, алып ҡайтҡан кешеһен күреп ҡарайыҡ әле», — ти Шаһбал батша. Тәхетенән төшә. Шәһәрбаныу әбей менән былар баҡсаға киләләр. Баҡсаға килһәләр, Бәҙиғолъямал һушһыҙ тәгәрәп ята. Инәһе янында ултыра.

— Был ни хәл? — ти Шаһбал батша.

— Бына шулай, — ти. — Алып килгән кешебеҙҙе кинәттән күрһәтмәйек, бәлкем, ҡурҡыу булыр, бәлкем, асыуын килер, тип ҡалдырып кергәйнек, бына шунда. Инде сыҡһаҡ — юҡ ул әҙәм! — ти. — Ул Мәликәне алып ҡайтҡан, дейеүҙән ҡотҡарган. Тәхетен биргән Мәликәнең атаһы. Әле тәхеттән ҡуптарып алып, һиңә күрһәтергә алып ҡайтҡайныҡ. Нишләйбеҙ? Беҙҙең,ҡыҙ гашиҡ уға. Беҙҙен ҡыҙыбыҙҙы эҙләп, ун йыл йөрөгән, — ти. Шаһбал батша әйтә:

— Ах һеҙ! Ах һеҙ! — ти. — Нишләп ундай кешене бында ҡуйып керҙегеҙ? Ул бит дейеүҙәрҙе харап итеп алып ҡайтҡан, уны бөгөнгө көндә эҙләйҙәр, был әҙәмде, — ти. — Мин уларҙың эҙләгәнен һиҙҙем, ә һеҙ уны ҡалдырып кергәнһегеҙ. Уны дейеүҙәр алып киткән. Уны хәҙер тапмайбыҙ, йә, нишләйбеҙ хәҙер? — ти. Шаһбал батша баҫып торған еренән хайран була.

Хәҙер күп халыҡтарҙы янына саҡыртып йыя. Сәйфелмөлөктө эҙләргә күп ерҙәргә бәрейҙәр сыгара. Былар эҙләйҙәр-эҙләйҙәр — бер ерҙән дә бер нәҫтә еҫ һиҙмәйҙәр.

Ә бер бәрей бер дейеүҙе күрә. Бер ағас төбөндә бер дейеү ята, ауырып. Шуның янына килә Шаһбал батшаның илсеһе:

— Һин кем? — ти.

— Мин дейеү, — ти.

— Нишләп ятаһың?

— Бына беҙҙе Әсүәт батша сығарып ебәрҙе. Әсүәт батшаның бер вәзирен бер әҙәм заты үлтереп, Мәликә ҡыҙҙы алып ҡасҡан. Шул кешене эҙләйбеҙ. Ул кешенең тиреһен таҫма-таҫма телергә беҙгә хәнйәр бирҙе. Бүтәндәр эҙләй, минең эсем ауыртып, был агас төбөнә төшөп ултырҙым, — ти. — Бына шул хәбәр минән һиңә, — ти.

Был хәбәрҙе ишеткәс, Шаһбал батшага теге бәрей ҡайтып әйтә, һөйләй. Сәйфелмөлөктө Әсүәт батшаның оло вәзире килеп таба баҡсанан.

Беҙҙең Әсүәтте үлтергән быға оҡшаш,
Мәликә ҡыҙҙы килтергән быға оҡшаш, —

тип, Сәйфелмөлөктө күтәреп алып китә, батшаһына илтеп бирә.

Сәйфелмөлөктө бер һандыҡҡа тын сығарлыҡ ҡына урын ҡуйып, һыу кермәҫлек кенә итеп дәрйә төбөнә ҡуялар. Өҫтөнән таш менән баҫтырып ҡуялар.

Сәйфелмөлөк тотҡонға төштө хәҙер. Батша хәҙер: «Быны, ҡырҡ көн һыу төбөндә торһон, зәгәфыран булһын,* унан алып сыгып сылырбыҙ», — тип вәғәҙә ҡуя.

Шаһбал батша был хәбәрҙе ишеткәс, бөтә шәһәр халҡын йыя, һуғышҡа барырға был дейеүгә, һуғыш асарға. Теге ауырыу дейеүҙе нисек тә тергеҙеп, рәтләп, батшаһына хәбәр ебәрә. Дейеү ҡайтҡас әйтә:

— Беҙгә яу килә хәҙер, — ти. — Алып ҡайтҡан кешебеҙҙе алырға, — ти.

Батша әҙерләнә, дейеү батшаһы. Ҡү-ү-ү-п халыҡтар, бәрей халыҡтары, былар ға ҡаршы торалар. Былар һуғышалар, ҡан дәрйәләре аға. Дәрйәләр ҡыҙыл ҡан була. Шул ҡәҙәре һуғышалар, был яҡтан да ҡырыла, теге яҡтан да ҡырыла. Батша ғәжәпкә ҡала. Хәҙер Шаһбал батша үҙе шунда була.

— Бирегеҙ кешебеҙҙе! — тип ҡарай. Юҡ, өндәшмәй теге батша. Шунан Шаһбал батша әйтә:

— Тотоп килтерегеҙ дейеү батшаһын! Хәҙер тиреһен таҫма-таҫма телеп әйттерәм! — ти.

Хәҙер бының бәрейҙәре барып, емереп, шәһәренә инәләр, тәхетенә етәләр. Дейеү батшаһын өҫтөрәп төшөрөп, Шаһбал батшаның ҡаршыһына килтерәләр. Теге дейеү батшаһы былай ти:

— Сығарып бирәм инде кешегеҙҙе,
Алығыҙ менән ошбу эшегеҙҙе,

Сабыр итегеҙ, минә теймәгеҙ, кешегеҙҙе бирәм хәҙер, — ти. — Даръя төбөндә ул, — ти.

Хәҙер даръянан алалар быны. Сәйфелмөлөк би-и-и-к һарғайған була, ҡырҡ көн ятҡан, бик ауыр хәлдә була. Хәҙер дейеү батшаһы әйтә:

— Саҡ ҡына сабыр итегеҙ, кешегеҙгә хәл керһен, — ти. Сәйфелмөлөктө алып сығып тәрбиәләй, ашата, эсерә, йыуындыра, яҡшы кейемдәр кейендерә. Яҡшы итеп кейендереп, Сәйфелмөлөктө Шаһбал батшаның ҡулына илтеп тоттора. Хәҙер былар вәғәҙәләшепберләшеп, батша менән дуҫлашып, Сәйфелмөлөктө алып ҡайтып китәләр.

Шулай итеп, ике арала һуғыш булып, Сәйфелмөлөктө эҙләп табып, Шаһбал батша алып ҡайта. Бәҙиғолъямал ҡаршы сыға. Ҡыуанышалар, күрешәләр. Икенсе көндө үк Шаһбал батша тәхете менән осоп барып, тегендәге Мәликәне, атаһын-инәһен туйға алып килергә булалар. Бер-ике аҙна ял иткәндән һуң, шул уйҙа булалар. Хәҙер Сәйфелмөлөккә әйтә:

— Һин әҙерәк йөрөп кер, тирә-яҡты йөрөп күр, — ти. — Хәҙер ҡотолдоң, һиңә берәү ҙә теймәҫ, — ти.

Сәйфелмөлөк бер көндө ауға сығып китә. Ауға бик оҫта була. Ауҙа йөрөп ята ине, бер ерҙә бер әҙәмде бәрей өҫтөрәп алып килә. Үҙҙәре һөйләнәләр:

— Ғәриптән* күңеле һыныҡ донъяла юҡ,
Йыһан эсендә ғәриптән ғәмдала* юҡ.

Сәйфелмөлөк был ғәрипте ҡотҡарырға бара.

— Кем был? — тип һорай.

— Бына бер ҡаскын, — тиҙәр.

Ҡара әҙәм була был әҙәм. Йөҙө-бите күренмәй бының, кейемдәре йыртылған була. Сәйфелмөлөк әйтә теге бәрейҙәргә:

— Бер ергә ҡуйып тороғоҙ. Мин ауға барам, ҡайтҡанда, кереп ҡарармын, — ти. — Ниндәй тотҡон икән ул? — ти.

Хәҙер ауға китә. Бер аҙ ҡош-ҡорт ата ла ҡайта. Тегенең янына килә. Был кешене алып сығып ҡараһа, ни күҙе менән күрһен — Сәғит дуҫы! Сәйфелмөлөктән айырылып ҡалған көйгә ку-у-у-п яфалар күреп, ошо бәрейҙәрҙең ҡулына эләккән икән. Сәйфелмөлөк менән Сәғит икеһе лә һушһыҙ булалар. Йыуындыра, кейендерә быны. Шаһбал батшаға алып ҡайта.

— Минең дә дуҫым табылды, — ти.

Шаһбал батша менән быны тәрбиәләйҙәр, кейендерәләр, йыуындыралар. Инде тәрбиәләйҙәр! Шулай бер аҙна ғүмер үтә. Хәҙер Мәликәнең аталарына хәбәр китә туйға килергә. Тегенән Мәликәнең атаһы, инәһе, Мәликә туйға киләләр. Шаһбал батша күп итеп туйҙар үткәрә хәҙер, халыҡтарҙы тәрбиәләй. Һуғышта ҡалғандарҙың балаларына пенсиялар тәғәйенләй, аталары үлгәндәренә ку-у-у-п хөрмәттәр күрһәтә.[7] Шулай итә торғас, Сәйфелмөлөк менән Бәҙиғолъямал ҡауышаһы көн етә. Сәйфелмөлөк Мәликәнең атаһына әйтә:

— Миндә бер тәҡдим бар, — ти. — Һин был тәҡдимде ҡабул итерһеңме икән? — ти.

Батша әйтә:

— Һөйлә, ниндәй һүҙҙәр бит, — ти.

— Мәликәне минең Сәғит дуҫыма бирәһеңме? Улар ҙа ишле-ҡушлы булһындар икеһе, — ти. — Беҙҙең Бәҙиғолъямал менән ҡурешергә бер көн генә ҡалған. Һин дә Сәгитте алып ҡайтып китеп, Мәликә менән ҡауыштыр, — ти.

Мәликә шат рази була*, Сәғит тә рази була. Сәғит бик матурланып китә. Матур була. Хәҙер Мәликәнең инәһе, атаһы, Мәликә, Сәғит ҡайтып китәләр. Сәйфелмөлөк менән Бәҙиғолъямал күрешеп ҡалалар. Ике ғашиҡ күрешәләр. Күктә ай менән ҡояш уйнаша, шул хәҙәре* былар ҡауышалар!

Хәҙер ярар, ҡайтып, тегендә Сәйфелмөлөк менән Бәҙиғолъямалдың килгәнен көтөп, туй яһамай көтөп тора Тажылмөлөк батша. Ҡыҙ никахланырға риза була. Сәғитте алып ҡайтып бер хилүәт ергә ҡуя. Би-и-и-и-к яҡшы кейемдәр кейҙерә. Яҡшы тәғәмдәр бирҙерә, кейәү итергә була. Мәликәгә күренмәй әле. Шулай итеп көтәләр. Бәҙиғолъямал менән Сәйфелмөлөк, ҡатыны менән Шаһбал батша — былар дүртеһе бергә дауыл-тәхет менән килеп төшәләр. Мәликәгә туй үткәрәләр.

Хәҙер Шаһбал батша, ҡатыны, Сәйфелмөлөк, Бәҙиғолъямал тағын Ирәмбағ шәһәренә ҡайтҡас, бер көндө Шаһбал батша Бәҙиғолъямал менән Сәйфелмөлөктө янына саҡыра ла:

— Һеҙгә бер һүҙем бар, балалар, һеҙ ҡабул күрегеҙ минең һүҙемде, — ти.

— Атай, һөйлә, — тиҙәр.

— Мин һеҙгә бына ризалыҡ бирәм, һин, кейәү, минең ҡыҙымды алдың. Бәлки, атаң иҫәндер, ун йыл эсендә ғүмере бөтмәһә, атайыңинәйең үлмәгәндер, — ти. — Минең енел тәхетемә ултырып, минең ҡыҙым менән атайыңа ҡайтаһың. Минең шундай уйым, — ти. — Һин миңә ул түгел, ә кейәү, һин — атаңа ул, иҫән сағында, атаңды ҡайтып күр. Минең ҡыҙымды алып ҡайт, — ти. — Минең ҡыҙым уға олтораҡ булһын. Мин ризамын, хатта ҡыҙым итәге менән иҙән һеперһен. Бына минән рөхсәт шулай, — ти.

Былар быны хуш күрәләр: Бәҙиғолъямал да риза була, Сәйфелмөлөк тә.

— Сәғит менән Мәликәне лә алып китәбеҙ. Уның атаһы — атайымдың вәзире, бәлки, иҫәндәрҙер. Беҙ дүртебеҙ ҙә китәйек, — тейҙәр.

Хәҙер Шаһбал батша тәхет әҙерләй. Былар ҙың дүртеһен дә — икеһен бер тәхеткә, икеһен бер тәхеткә ултыртып — осора. Былар аталарының шәһәренә барып төшәләр. Быларға ҡанат ҡуйыла. Былар бер ергә, самолет төшкән кеүекмә инде, барып төшәләр. Ҡара болот булып — өйөрмә булып барып төшкәндәрен ауыл халҡы күреп, Рәбиғелмөлөк батшаға хәбәр бирәләр:

— Илебеҙгә бер афәт төштө, ниндәй хәл икән? — тиҙәр.

Батша бөтә халыҡты йыйып, тегеләр янына бара. Барһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр — Сәйфелмөлөк менән Бәҙиғолъямал, Сәғит менән Мәликә баҫып торалар — дүрт әҙәм. Тәхет кире осоп ҡайтып китә. Быларҙы күреү менән шәһәр халҡы, Рәбиғелмөлөк үҙе, ҡатыны — барыһы ла ергә йығылалар. «Был ниндәй хәл?..» Аптырайҙар. Сәйфелмөлөктөң атаһы-инәһе, Сәғиттең атаһы-инәһе быларҙы барып ҡосаҡлайҙар. Сәйфелмөлөк менән Бәҙиғолъямалдың шул ҡәҙәре нурҙар уйнай йөҙҙәрендә!

Ҡайтҡас, батша тәхетенә үҙенең улын ултырта. Бәҙиғолъямал уларға шул ҡәҙәре хеҙмәт итә. Һәр ваҡыт Шаһбал батша килеп быларҙың хәлен белеп тора. Мәликә Сәғиткә шул ҡәҙәре яҡшы иптәш була. Вәзирҙең ҡатыны, батшаның вәзире Мәликә менән Сәғитте, ҡаршыларында берҙән-бер улдарын күреп, һөйөнөп бөтә алмайҙар. Һәр береһе ғашиҡ-ғаширәттә ғүмерҙәрен үткәреп, былар донъяла йәшәп ҡалалар.



## 2. БӘДЕГӨЛЪЯМАЛ МЕНӘН СӘЙФЕЛМӨЛӨК

*(Бикбулатов Рәхимйән версияһы)*

Борон-борон заманда бер батша булған. Уның бик күп бүлмәләре бар икән. Үҙе ҡырға киткәндә, батша асҡыстарын кесе улына бирә икән, ә бер бүлмәнекен бирмәй торған булған. Малай

үҫеп егет була. Берҙән-бер көндө, атаһы сығып китер алдынан, бойоғоп ҡына уға ҡарай.

— Ник бойоҡһон, улым? — ти атаһы.

— Бөтә бүлмәләреңдең асҡысын бирәһең, ә берәүһе һәр саҡ йоҙаҡлы, шуныһын бирмәйһең, — ти егет.

Атаһы асҡыс сығарып бирә:

— Мә, тик ул бүлмәгә кермә, — ти.

Атаһы киткәс, Сәйфелмөлөк, бүлмәгә инеп, ундағы оло һандыҡты аса. Аҫһа, йылмайып ҡына һүрәттән бер ҡыҙ ҡарай. Сәйфелмөлөк уға шунда уҡ ғашиҡ була. Атаһы, ҡайтҡас, быны һиҙә:

— Ах, улым, бүлмәгә кергәнһең бит, — ти.

Сәйфелмөлөк ашауынан яҙа, йоҡоларын йоҡламай, бөткәндән-бөтә бара.

— Атай, был һүрәтте минә бир, мин уны эҙләйем, — ти.

Батша уға ун ике һалдат, Сәғит исемле бер серҙәш биреп, юлға сығара.

Баралар, баралар, диңгеҙгә етәләр. Унда карап эшләтеп, диңгеҙгә төшәләр. Йөҙә торғас, аҙашып, ниндәйҙер утрауға барып сығалар. Бик асыҡҡан булалар. Шунда бер фил балаһы осрай. Уны тотоп алып, утта өтөп ашап, ял итергә яталар. Ҡайһы берҙәре ашамай, Сәйфелмөлөк тә бер ҡабым да ҡабып ҡарамай.

Ял иткәндә фил килеп сыға, тегеләрҙең ауыҙын еҫкәп ҡарай. Кем ашаған, шуны тапап үлтереп китә. Иртән ҡараһалар, һигеҙ һалдат үле ята. Былар алты кеше ҡасалар.

Утрауҙа аҙашып йөрөй торғас, былар әллә ниндәй эт башлы, һыйыр аяҡлы кешеләр янына барып сығалар. Тегеләр, быларҙы уратып алып, батшаларына алып киләләр. Батшалары быларҙы бер йортҡа ябып ҡуйырға ҡуша.

Сәйфелмөлөккә атаһы, Сөләймән пәйғәмбәрҙең йөҙөгөн биреп: «Һаҡла, файҙаһы тейер» — тип әйтеп ебәргән була.

Бер ваҡыт быларҙы һыйлай башлайҙар.

— Ашама, һаҡлан, — ти Сәйфелмөлөк иптәшенә.

Өс ай ваҡыт үтә. Бер көндө быларҙың маңлайҙарына сиртеп ҡарай башлайҙар. Һимерҙерәктәрен тотоп ашайҙар. Шул ваҡыт батшаның бер ҡыҙы Сәйфелмөлөккә ғашиҡ була.

— Һин мине ал, ҡотҡарам, — ти. «Үлгәнсе, алайым, яйы табылыр әле», — тип уйлай ҙа Сәйфелмөлөк:

— Иптәшемде лә ҡотҡарһаң, алам, — ти.

Ҡыҙ икеһен дә ҡотҡарып, үҙе Сәйфелмөлөккә ҡатынлыҡҡа сыға. Сәйфелмөлөк илауҙан бушамай, күңеленән теге һүрәттәге ҡыҙҙы һағына. Сәғиттең дә ҡайҙа икәнен белмәй.

Бер йыл үтә. Бер саҡ ҡалаға сығалар. Сыҡһалар, халыҡ өйкөмләшеп кемдәндер көлә. Сәйфелмөлөк ипләберәк ҡараһа, Сәғитте туҡмап, унан көлөп булашалар икән. Сәйфелмөлөк батшаға әйтеп, Сәғитте ҡотҡара. Шул саҡ ул бер аҡыллы әбей барлығын ишетә. Уға кәңәшкә барып, бөтә серен һөйләй.

— Хәҙер көҙ, китергә була, — ти әбей, — кистәрен улар боҙ ҡырына байрамға йыйылалар, унда ҡырҡ дүмһә* бар. Дүмһәләрҙе

һыуға тәгәрәтеп бөтөрөгөҙ ҙә үҙегеҙ боҙҙан боҙға һикереп ҡасығыҙ, — ти әбей.

Сәйфелмөлөк байрам көнө етеүен көтә, көнө еткәс, кисен бөтә дүмһәләрҙе һыуға төшөрөп, боҙҙан-боҙға һикереп ҡаса. Уны ҡыуып киләләр ҙә, дүмһәләр булмағас, боҙға төшөргә ҡурҡып, ярҙа ҡарап ҡалалар.

Сәйфелмөлөк, бара торғас, бер утрауға килеп сыға. Был утрау бер дейеү тарафынан сәскә менән ырымланып ҡуйылған булған. Ҡем дә кем сәскәгә тейә, шунда уҡ үлә икән. Сәйфелмөлөк һаҡлана, бер нәмәгә лә теймәй, баҡсала йөрөй торғас, бер йорт күрә. Инһә, унда зиннәтле карауатта ап-аҡҡа төрөнгән берәү ята. Егет уны асып ебәрә. Мәликә исемле матур ҡыҙ, ти, был. Егет ҡыҙҙы уятып ҡарай, уята алмай. Егеттең күҙе баш осондағы дүрт ҡырлы зиннәтле таҡтаға төшә. Ул таҡтаны ала. Алһа, ҡыҙ килеп тора.

— Эй, егет, һин ниндәй заттан?

— Әҙәм затынан.

— Мин дә.

Улар һөйләшәләр. Сәйфелмөлөк үҙенең ни эҙләүен әйтә.

— Мин ул ҡыҙҙы беләм, — ти Мәликә.

Шул ваҡыт дейеү килә. Егет йәшенә, ә ҡыҙ урынына ята.

Дейеү, ҡыҙҙы уятып, бер-ике көн өйҙә тора ла тағы сығып китә.

— Һораш әле, дейеүеңдең йәне ҡайҙа икән? — ти егет ҡыҙға.

Дейеү икенсе тапҡыр ҡайта. Ҡыҙ, иркәләп кенә:

— Әҙәм йәне үҙендә, ә дейеү йәне ҡайҙа була ул? — тип һорай.

— Ә-ә, һинең мине үлтергең киләме?

— Юҡсы! Дейеү һынлы дейеүҙе нисек үлтермәк кәрәк!

— Минең йәнем — диңгеҙ төбөндәге дүрт күгәрсенле ситлек. Сөләймән йөҙөгөн йөрөткән кеше генә мине үлтерә ала, — ти ҙә дейеү тағы сығып китә.

Сәйфелмөлөк, ҡыҙҙы алып, һыу буйына бара ла йөҙөктө диңгеҙгә ташлай:

— Дейеүҙең йәнен сығар, — ти.

Йөҙөк ситлекте алып сыға. Егеттең күгәрсенде үлтереүе була, дейеү килеп етеп йығылып та китә. Ҡыҙ менән егет һалға ултырып йөҙөп китәләр.

Бер ваҡыт һыу эйәһе килеп сыға. Был саҡта Сәйфелмөлөк башын Мәликә тубығына һалып йоҡлап ятҡан була. Уянып китә лә балта менән тегенең башын саба ла өҙә.

— Әй, Мәликә, һәләк була яҙҙыҡ бит, ниңә алдан уятманың? — ти.

Һалда йөҙөп килә торғас, улар Мәликәнең атаһына килеп етәләр.

«Ҡем дә кем минең Мәликәне таба, шуға ҡыҙымды бирәм», — тип хәбәр тараткан була ҡыҙҙың атаһы.

Беренсе кеше осрап, ҡыҙҙан:

— Ҡем булаһың? — тип һорай.

— Мәликә, — тигәс, теге кеше ҡыҙҙы етәкләп ала ла батша һарайына йүгерә. Атаһы ҡыҙын иҫән-һау күреп бик шатлана.

— Туй яһайбыҙ, туй! — ти.

— Атай, бында эш башкаса, сабыр ит, — ти Мәликә. Шунан бөтә хәлде теүәл итеп һөйләп бирә.

Бер ваҡыт Бәдегөлъямал тигән бик һылыу ен ҡыҙы, Мәликәнең табылғанын ишетеп, уны күрергә килә. шунда ен ҡыҙы Сәйфелмөлөктө күрә, Мәликә серҙе аса.

— Ул егет һине эҙләп килгән, бар һин уға, — ти.

— Ул әҙәм затынан бит, нисек барайым?

Көн үтә, ай үтә. Тора-бара Бәдегөлъямал үҙе лә егеткә ғашиҡ була.

Бер мәлде дейеүҙәр, дейеү батшаһын үлтергән кешене эҙләп, ендәр араһына килеп сығалар. Аңғармаҫтан ғына Сәйфелмөлөктө эләктереп осороп алып китәләр ҙә, һандыҡҡа һалып, һыу аҫтына төшөрәләр.

Мәликә лә, ендәр ҙә егетте эҙләй башлайҙар. Сәйфелмөлөктө күреп ҡалған бер ен:

— Уны дейеүҙәр алып китте, — тип әйтеп һала.

— Ни эшләргә?

— Әйҙәгеҙ, һуғыш асабыҙ.

Китә һуғыш. Алыша, көс һынаша торғас, ендәр дейеүҙең бер башын сабып өҙәләр ҙә уның үҙенә:

— Егетте бирмәһәң, энә менән тунайбыҙ, — тиҙәр.

— Ҡотҡарығыҙ, табып бирәм, — ти дейеү.

Ул һандыҡты алып сыға. Сәйфелмөлөк бик ябыҡҡан була, уны алып ҡайтып тәрбиәләйҙәр. Һуңынан Бәдегөлъямал менән икеһенә шаулатып туй үткәрәләр.

Күп тә үтмәй, иптәшен юллап, Сәгит тә килеп етә. Уга Мәликәне бирәләр.

Бер аҙ торғас, Сәйфелмөлөк өйгә ҡайтыу тураһында һөйләй башлай.

— Мин унда ерһенмәм бит, — ти Бәдегөлъямал.

— Юҡ, ерһенерһең, — ти Сәйфелмөлөк.

Алдан хәбәр итеп, улар ҡайтып төшәләр.

Егеттең атаһы улының ҡайтыуына ла, килененә лә бөгөн дә шатланып бөтә алмай, ти, әле.



## 3. СӘЙФЕЛМӨЛӨК

*(Моратова Шәфиға варианты)*

Борон-борон заманда бер батша йәшәгән. Уның Сәйфелмөлөк исемле улы булған. Сәйфелмөлөк һунарға һәр ваҡыт бер үҙе йөрөр булған. Бер көндө ул эңер төшкәнсе йөрөгән, бер йәнлек тә ата алмаған. Ҡапыл тиҫкәре яҡтан әсе ел сыҡҡан, урман шаулаған, күк

күкрәп, йәшен йәшнәп, ямғыр ҡоя башлаған. Сәйфелмөлөк ҡайтыу яғына боролған. Шул саҡ унын ҡаршыһына әҙәмгә лә, хайуанға ла оҡшамаған һыңар мөгөҙлө бер йән эйәһе килеп сыҡҡан. Өҫтөндә йыртыҡ ҡара тун, ти. Сәйфелмөлөк ҡурҡыуға төшкән, шулай ҙа, был йәнде атырға тип, уғын төҙәй башлаған. Шул ваҡыт теге, телгә килеп:

— Егет, һин минә атма: минә уҡ үтмәй, һыу һеңмәй, ут та мине яндырмай, — тигән. — Өҫтөндәге кейемеңде минә һыпырып бир, алмашҡа минең тунды алырһың, — тигән. Сәйфелмөлөк затлы кейемдәрен иҫке тунға алмаштырғыһы килмәгән. Теге йән оҙаҡ көтөп тормаған, егеттең бөтә кейемдәрен һалдырып алған да үҙенең ҡара ялбыр тунын ҡалдырып киткән.

Сәйфелмөлөк, ҡайтайым тиһә, бер урында өйөрөлөп тик йөрөй икән. Шулай аҙашып йөрөй торғас, бер ут күреп ҡалып, ут янына киткән.

— Йоҡларға индерегеҙ әле, — тип тәҙрә шаҡыған. Өйҙөң хужаһы, егеттең йыртыҡ тунын күргәс, был йә берәй ҡаҫҡындыр тип уйлап, ишекте ныҕыраҡ бикләп ҡуйған. Үҙенең батша улы булыуын, уны талап, йыртыҡ тун кейҙереп китеүҙәрен һөйләгәс, хужа уны өйгә индергән. Был урман ҡарауылсыһы икән.

Сәй эсеп, Сәйфелмөлөк йоҡларға ятҡан. Тик ул һис тә йоҡлап китә алмаған: күҙен йомһа, күҙ алдына йыртыҡ туны менән теге нәмә килеп баҫҡан. Шулай яфаланып ята торғас, төн уртаһы еткән. Урман ҡарауылсыһының әтәсе лә ҡысҡырып ебәргән. Шул мәлде Сәйфелмөлөктөң күҙе ҡаршыһында эленеп торған теге ялбыр ҡара тунға төшкән. Ҡараһа, ни күҙе менән күрһен: әлеге ялбыр тунда бик матур ҡыҙ һүрәте тора, ти. Һүрәттәге ҡыҙ тирә-яҡҡа нур сәсеп бөтә өйҙө ялтыратҡан да юғалған. Сәйфелмөлөк һүрәт ҡыҙҙы күпме генә күрергә тырышып ҡараһа ла, тунда ҡыҙ яңынан күренмәгән. Егет төнө буйы керпек тә ҡаҡмай сыҡҡан. Күҙен йомһа, күҙ алдында әлеге ҡыҙ һүрәте генә торған.

Иртәгеһен урман ҡарауылсыһы егеткә юл өйрәтеп ҡайтарып ебәргән. Батша улының бер табышһыҙ, иҫке тун кейеп ҡайтып кереүенә аптыраған. Сәйфелмөлөк башынан үткән хәлдең бөтәһен дә атаһына һөйләгән, тик тунда күренгән һүрәт ҡыҙҙы әйтмәгән. Шул көндән башлап Сәйфелмөлөк ашамаған-эсмәгән, уйнамаған-көлмәгән, һөнәргә лә ҡабат сыҡмаған. Төндәрен ул йоҡлай алмаған.

Атаһы әлеге тунды соланға элдереп ҡуйған икән. Сәйфелмөлөк, төн уртаһы еткәс тә, сығып юғала торған булған. Батша улын күҙәтергә булған. Улының соланға инеп ултырғанын белгәс, кире кереп йоҡларға ятҡан. Икенсе төндө батша, улынан алда барып, соланға кереп бикләнгән. Төн уртаһы еткәс, соланға Сәйфелмөлөк килеп ингән. Әтәс ҡысҡырғас та, тунда ҡыҙ һүрәте хасил булған. Батша эштең асылын аңлаған, улының һарғайыуына сәбәпсе тундағы һүрәт икәнен төшөнгән.

Берҙән-бер көндө ул, сихырсыға барып, сихыр ҡайтарырға уйлаған.

— Өс тау, өс диңгеҙ аша үтеп кенә сихыр ҡайтарыусыға барып була, — тигәндәр уға.

Батша вәзирҙәре, өс көн, өс төн барып, өс тау, өс диңгеҙ аша үтеп, сихырсыны эҙләп тапҡандар. Эштең нимәлә икәнен ҡарсыҡҡа һөйләп биргәндәр. Ҡарсыҡ уларға:

— Ул ҡыҙ донъяла бар. Ул ендәр батшаһы Күк ҡарғаның иң кесе, ун икенсе ҡыҙы. Мин уға алып барыу юлын өйрәтә алмайым. Уны минең уртансы апайым белә. Уға ете диңгеҙ аша үтеп кенә барып була, — тип әйтеп ҡайтарған.

Сәйфелмөлөктөң ҡыҙҙан башҡа тора алмаясағын белгәс, батша улына караптар, кешеләр биреп, бәхетле юл теләп, илап-илап, алыҫ юлға оҙатҡан.

Юлда барғанда, дауыл ҡубып, караптар ватылып бөткән, ә ярандары үлеп ҡалғандар.

Карап таҡтаһына тотонop ҡалган Сәйфелмөлөктө дауыл утрауға сығарып ташлай. Был утрауҙа ҡырағай кешеләр йәшәгән була. Улар Сәйфелмөлөктө үҙҙәренең атамандарына килтереп бирәләр. Атамандың еткән ҡыҙы Сәйфелмөлөккә ғашиҡ була, был турала атаһына әйтә. Атаман Сәйфелмөлөккә:

— Йә һин минең ҡыҙыма кейәү булаһың, йә, кешеләремә биреп, мин һине теткеләтеп ташлайым, — ти. Сәйфелмөлөк атамандың ҡыҙына өйләнергә риза булмай. Бер көндө ул ҡасып китә, ете ай тулды тигәндә, сихырсы ҡарсыҡтың уртансы апаһын эҙләп таба. Сихырсының уртансы апаһы:

— Бик ҡурҡыныслы юлға сыҡҡанһың. Унда барған кешеләр береһе лә кире ҡайта алмай. Дейеү батша кешеләрҙе теткеләп ташлай. Унда барыу юлын минең оло апайым белә. Мин һиңә алтын балдаҡ бирәм. Оло апайым был балдаҡтың ниңә кәрәклеген аңлатыр, — тип сихырсы ҡарсыҡ оло апаһына юл өйрәтеп ебәрә.

Туғыҙ диңгеҙ, туғыҙ тау аша үтеп, Сәйфелмөлөк сихырсының оло апаһын эҙләп таба. Сихырсы ҡарсыҡ егеткә дейеү батшаға барыу юлын өйрәтә.

— Дейеү батшаһының ун ике ҡыҙы булыр. Улар һәр көн иртән, ун ике аҡҡош булып, ҙур күл буйына осоп килерҙәр. Күлдең уртаһында ҡуйы ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланған утрау булыр. Ун икеһе лә осоп килерҙәр ҙә, сисенеп, һыуға сумырҙар. Ун бере — бер урынға, ун икенсеһе икенсе урынға сисенер. Һин уларҙың сисенгәнен ҡарап тор ҙа ун икенсе ҡыҙҙың кейемдәрен алып йый. Тик һин, уны күреп, һуштан яҙмаҫ өсөн, кәнфит ҡап, ә ҡыҙ һине яратһын өсөн һеңлем биргән балдаҡты уның урта бармағына кейҙер, — ти.

Егет, бик оҙон юл үтеп, һыуҙы эҙләп таба. Иртән аҡҡоштарҙың осоп килгәнен күҙәтә башлай. Тап ҡарсыҡ һөйләгәнсә, ун ике аҡҡош осоп килә. Сисенәләр, ҡыҙ сүрәтенә инәләр ҙә һыуға сумалар. Иң кесе һеңлеләре юғарыраҡ сисенә, һыуға ла һуңыраҡ сума. Шуны ғына көтөп торған Сәйфелмөлөк ҡыҙҙың әйберҙәрен ала ла ҡыуаҡ артына ҡаса. Бер аҙҙан һуң ҡыҙҙар һыуҙан сығалар ҙа: «Фу-фу, әҙәм еҫе килә», — тип, тиҙ-тиҙ генә кейенеп, осоп китәләр. Ә ун икенсе ҡыҙ, кейеме булмағас, аҡҡошҡа әүерелә алмай, илап тороп ҡала. Шунан ул кейемен йыйған кешене эҙләй башлай.

— Әгәр ҡатын-ҡыҙ булһаң, мәңгегә ҡыҙ булырмын, әгәр ир-егет булһаң, мәңгелек йәр булырмын, тик, зинһар, кейемдәремде бир, — ти ҡыҙ.

«Мәңгелек йәр булырмын» тигәнде ишетеү менән егет ҡыҙҙың кейемдәрен бирә, балдаҡты кейҙерә лә ни өсөн килгәнен һөйләп бирә. Сәйфелмөлөк ҡыҙға оҡшай, тик ул, алып ҡайтһа, дейеү Сәйфелмөлөктө ашаясағын әйтә. Ҡыҙ атаһына ҡарағанда ла оҫта сихырсы була. Уйлап тора торғас, ул, егетте энә итеп, ҡауырһыны араһына ҡыҫтырып алып ҡайта. Ҡыҙы ҡайтып инеү менән дейеү:

— Фу-фу, әҙәм еҫе сыға, — ти.

Ҡыҙ егетте ниндәй генә һүрәткә индерһә лә, сихырсы атаһынан һис ҡотола алмай. Егетте әҙәм һүрәтенә баҫтырырға була. Егет дейеүгә нисек килгәнен һөйләп бирә.

— Ярай, улай булғас, һин өс һынауҙы үтәһәң, ҡыҙ һинеке булыр, — ти дейеү. — Беренсеһе: энә күҙенә уҡтан атып тейҙер ҙә күҙен миңә килтер.

Ҡыҙ өйрәтеүе буйынса, егет энә күҙенә ата, һынып ҡалған күҙҙе дейеүгә килтерә.

— Икенсеһе: минең йортта торған ҡара айғырға атланып, сабышҡа сыҡ, — ти дейеү. Ҡыҙ егеткә:

— Йортта торған ҡара айғыр атайым үҙе булыр, ул йүгән кейҙергәнсе генә һине тыңлар, ә һуңынан күтәреп һуғып үлтерер. Йүгәнләгәндә айғырҙың һул күҙен соҡоп ал, — ти.

Икенсе көндө егет ҡара айғырҙы йүгәнләп эйәрләй ҙә, күҙен соҡоп алып, ат сабышында беренсе килә. Шунан ул айғырҙың күҙен дейеүгә килтерә. Ҡараһа, дейеүҙең һул күҙе юҡ. Дейеү егеткә:

— Егет икәнһең. Тағы бер шартты үтә. Минең ун ике ҡыҙым араһынан иң кесе ҡыҙымды танып ал, — ти. Ҡыҙ уға:

— Беҙ бөтәбеҙ ҙә бер төрлө кейемдән, бер төҫлө булырбыҙ. Һин беҙҙең йөҙөбөҙгә ҡарама, ҡулыбыҙға ҡара. Минең йөҙөгөмдөң ҡашы булмаҫ: атайым күрмәгәндә, мин уны әйләндереп ҡуйырмын, — ти.

Егет, ҡыҙ өйрәтеүе буйынса, иң кесе ҡыҙҙы күрһәтә. Дейеүгә иң яратҡан ҡыҙынан айырылыуы ҡыйын була. Ул егетте яптырып ҡуя ла икенсе көндө ашарға уйлай. Ҡыҙ, быны һиҙеп ҡалып, егетте туҙанға әйләндерә, шунан тишектән алып сығып ҡаса. Сыҡҡас, үҙенең бүлмәһе ишеге алдына өс урынға төкөрөп китә. Иртән ҡыҙҙы сәй эсергә саҡыралар. Беренсе төкөрөк:

— Кейенәм әле, — тип яуап бирә. Икенсе тапҡыр апаһы килә.

— Аяғыма кейәм, — тип яуап бирә икенсе төкөрөк. Өсөнсө тапҡыр атаһы килә:

— Хәҙер барырмын, — тип ҡала өсөнсө төкөрөк. Күпме генә көтһәләр ҙә ҡыҙ килмәй. Килеп ҡараһалар, бер нәмә лә юҡ.

Дейеү ҡаҫҡалаҡты алып килергә тип ғәскәр сығара. Ғәскәр ҡыуып етә башлағас, ҡыҙ тараҡ ташлай — ҡуйы урман хасил була, ғәскәр урманды үткән арала улар байтаҡ ҡына юл үтәләр. Ғәскәр ҡуйы урмандан үтеп сыға ла тағы ҡыуа башлай. Ҡыҙ арттарына таҫтамал ташлай — ташҡын киң даръя барлыҡҡа килә. Ғәскәр, даръяны сығып, ҡыҙ менән егетте тағы ҡыуа башлай. Ҡыҙ быны

күреп ҡала ла, үҙе һандуғас була, егетте ағас итеп үҫтерә. Ғәскәр эҙләй-эҙләй, таба алмай, ҡайтып китә.

Дейеүгә юлда нимә күрһәләр, шуны һөйләп бирәләр. Дейеү бик асыулана, ағас менән һандуғастың егет менән ҡыҙ булыуын әйтә.

Ғәскәр яңынан ҡыҙ менән егетте эҙләргә сыға, ә был ваҡытта ҡыҙ менән егет үҙ юлдарын дауам итәләр. Улар, тағы ла ғәскәр килеүен күргәс, һарыҡ көтөүе менән көтөүсе ҡарт һүрәтенә инәләр. Ҡыҙ менән егетте таба алмай, ғәскәр яңынан ҡайта.

Өсөнсө ҡабат дейеү батша үҙе сығып китә. Атаһының килгәнен күргәс, ҡыҙ үҙе сиркәү сүрәтенә инә, ә егетте сиркәү ҡарауылсыһы итә. Дейеү быларҙы ҡыҙ менән егет тип уйламай, ҡайтып китә. Ҡайтып өс көн торғас ҡына, уның уйына сиркәү менән ҡарауылсы килеп төшә. Ул яңынан юлға сыға, тик хәҙер сиркәү урынына елдәр иҫкән.

Өс көн тигәндә Сәйфелмөлөк кәләше менән үҙ батшалығына ҡайтып инә. Ҡайтһа, атаһы үлгән, был илдә батша таба алмайҙар, ти. Сәйфелмөлөк батша була, улар гөрләтеп туй яһайҙар. Хәҙер ҙә йәшәйҙәр, ти. Ә дейеү ҡыҙы менән кейәүен һаман таба алмай, эҙләп йөрөй, ти.



*ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВ*

# ҠИССА ВӘ ДАСТАНДАРЫБЫҘ

Халыҡта жанрҙы билдәләү тәңгәлендә быуаттар үлсәме менән һыналған тәжрибә һаҡланып килә. Ул, мәҫәлән, йырҙы — йыр, ти, мәҡәлде — мәҡәл, таҡмаҡты — таҡмаҡ, ти. Шуның менән бергә жанр атамаларын бутаған осраҡтар ҙа бар. Мәҫәлән, йыр тураһында һүҙ барһа ла: «Ярай, көйләп тормайым, бәйетен генә әйтәм», йә «Ҡобайырын ғына һамаҡлайым да ҡуяйым», — тигәнде ишеткән бар. Шуны иҫтән сығарып, ҡайһы саҡта, жанрҙың тәбиғәте менән иҫәпләшеп тормаҫтан, теге йәки был әҫәрҙе информатор ниндәй жанр атамаһы менән тамғалаһа, шул көйөнсә теркәп, хатта, йыйынтыҡтарға ла шулай биргән осраҡтар бар. Шул сәбәптән «Таштуғай» риүәйәте һаман да — легенда, «Ҡинйәкәй» ҡобайыры берсә «Ҡинйәкәй бәйете», берсә «Ҡинйәкәй мөнәжәте» тип, «Йәнтүрә хикәйәһе», хәтирә булыуына ҡарамаҫтан, риүәйәт тип баҫтырылып килә. «Буҙйегет» тигән эпик әҫәр менән дә хәл шулай тора. Баҫма версияһының «Ҡиссаи Буҙйегет» тип аталыуы арҡаһында, ул һаман ҡисса исемлегендә йөрөй. Жанр тәбиғәте буйынса романтик, пафосы йәһәтенән нәсихәти, йөкмәткеһе яғынан дини булған эпик сюжетлы әҫәрҙәргә ҡисса тип әйтәләр. Уларҙың геройы — әүлиә, әнбиәләр затынан. Ни тиклем ауыр һынауҙарға дусар ителгәндә лә, маҡсатына ирешеү юлында ла, илаһи ҡөҙрәттән көс ала. Урта быуаттарҙа Ваһап ибне Мөнәббиһ, Ибне Ғәбдулла тигән ғәрәп әҙиптәре, торараҡ Урта Азияла Насретдин Рабғуҙи яҙған ислам изгеләре хаҡындағы «Ҡиссасил — әл-әнбиә»ләре ана шундай ҡаһармандарҙы данлай. Йыйнаҡ ҡына етмеш ике ҡиссала Рабғузи, мәҫәлән, «Тәүрат» менән «Ҡөрьән Кәрим» сюжеттарына таянып, атабыҙ Әҙәм ғәлиәссәләм менән инәбеҙ һауанан башлап, Нух, Муса, Ғайса, Лут, Сөләймән, Дауыт, Йософ һ. б. пәйғәмбәрҙәр тормошонан фәһемле ваҡиғаларҙы нәсихәти бәйән итә. Ул заттарҙың һәр береһе ниндәйҙер мөғжизәүи һәләткә эйә. Сөләймән пәйғәмбәр, мәҫәлән, шул тиклем зирәк була, хатта ки ҡош-ҡорт телен дә аңлай. Нух

пәйғәмбәр иһә, Аллаһы тәғәлә тарафынан Туфан һыуы ҡалҡасағы хаҡында алдан әшкәртелеүе һөҙөмтәһендә, һәр төрлө йән эйәһенән берәр парҙы үҙенең кәмәһенә тейәп, уларҙы орлоҡ өсөн һаҡлап алып ҡала. Ана шундай хәлдәр һәм изгеләр хаҡында бәйән итеүсе, бөтәһенең дә Хаҡ тәғәлә ихтыярынан килеүен, «күргәҙмәле» итеп, раҫлаусы сәсмә йә теҙмә телмәр рәүешендә бәйән итеүсе эпик әҫәрҙәрҙе *ҡисса* тип йөрөтөр булғандар ҙа инде.

«Ҡөрьән-Кәрим», «Тәүрат» сюжеттарына һәр заманда ла яҙма әҫәрҙәр ҙә ижад ителә торған булған. Әйткәндәй, пәйғәмбәрҙәр тарихын яҙғанға, XIII—XIV быуаттар тирәһендә йәшәгән Насретдин Рабғузиҙы үзбәктәр үҙҙәренең әҙибе тип иҫәпләй.[1] XIV—XV быуаттар тирәһендә үзбәк иленде «Ҡөрьән»дәге һәм Рабғузиҙың китабындағы «Йософ» ҡиссаһы сюжетына «Йософ менән Зөләйха» тигән поэма тыуа. Совет осоро тикшеренеүселәре уның авторы Дүрбәк булған, тип раҫларға тырышалар. Әммә хәҙерге көндә уның авторлығы бәхәсле тигән фекер ҙә әйтелә. Авторы Дүрбәкме, кем, был урында уныһы мөһим түгел. Мөһиме шул. Дүрбәктеке тип иҫәпләнгән поэма мәғлүм булғансы, Йософ сюжетына донъяла төрлө телдә йөҙ илленән ашыу әҫәр ижад ителгән булған. Фирҙәүси (X б.), Ҡол Ғәли (XIII б.), Рабғузи (XIII—XV б.) яҙған әҫәрҙәр ҙә шулар иҫәбенә керә.

«Йософ менән Зөләйха», йә «Ҡиссаи Йософ»тоң жанрын билдәләү мәсьәләһенә ҡағылып, Ғ. Хөсәйенов уның «дөйөм хикәйәләүҙе белдергән, кескәй хикәйәне аңлатҡан дини фантастик» йә булмаһа «күберәк тарихи-героик һәм мажаралы романтик (дөрөҫөрәге, романик; — Ә. С.) характерҙағы» әҫәрҙәргә ҡарата ҡулланылыусан *«ҡисса»* термины менән билдәләнгән жанр ҡыҫаһына һыйып бөтмәүен иҫәпкә алып, уны, *«дастанлыҡ традицияларын үҙенә туплаған* поэтик ҡисса» тип атай[2]. Ундай әҫәрҙәрҙе йә *ҡисса*, йә *дастан*, йә *романтик поэма* тигән өс атама менән йөрөтөүҙе инкар итә. Автор хаҡлы булғанға оҡшаған. Ни өсөн тигәндә, әйтелгәненсә, дини легенда, легенда, әйтелгәнсә, мосолман донъяһында ҡисса тип йөрөтөлә. Ә Ҡол Ғәли үҙенә мәғлүм «Ҡөрьән-Кәрим» сюжетын көнсығыш фольклорының традицион эпик йөкмәткеле (бында уның героик, романик йә лирик булыуы-булмауы мөһим дә түгел) поэтик жанр булған дастандар ҡалыбына күсергән икәне бәхәсһеҙ. Сөнки ҡырҡ биш йыллап Урта Азияла, анығыраҡ әйткәндә, Хәрәзмдә йәшәгән дәүерендә, «уғыҙ, ҡарлуҡ, уйғыр тел элементтары менән ныҡ уҡмашҡан төрки тел вариантын ныҡ» үҙләштергән.[3] Бынан иһә, шул телдәрҙә дастан ижад итеү традицияһы сәскә атҡан төбәктә оҙон-оҙаҡ ғүмер һөрөп тә, шул традиция менән ҡыҙыҡһынмауы мөмкин түгел тигән һығымтаға килергә генә ҡала.

---

[1] История узбекской литературы. В 2-х томах. — Ташкент: Фан, 1987. — Т. 1. С древнейших времен до XVI в. — С. 121—126.

[2] Хөсәйенов Ғ. Б. Быуаттар тауышы: Башҡорт әҙәбиәте тарихы, теорияһы һәм тарихи поэтика буйынса очерктар. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр. (артабан: БКН), 1984. — 40-сы б.

[3] Шунда уҡ. — 3-сө б.

Хәҙерге тикшеренеү, һәр хәлдә, совет осоронда ғилми эҙләнеүҙәр алып барыусылар, Йософтоң төшө һәм Яҡуп пәйғәмбәр ғаиләһендә шул арҡала тыуған ыҙғышҡа социаль, сәйәси төҫ бирергә тырышыусан. Улар, шуның менән автор, Аҡһаҡ Тимер үлгәндән һуң, уның уландарының тәхет өсөн ыҙғышҡанына ишара яһай. Һәр хәлдә Дүрбәктеке тип иҫәпләнгән поэма хаҡында шундай фекер әйтелер булды. Ә бит уның әҫәренең дә, сюжеттың төп йырҙаһы, асылда, Ҡол Ғәли поэмаһыныҡын хәтерләтә, ә уныҡы — «Ҡөрьән-Кәрим»декен, йәғни Яҡуп пәйғәмбәр улы Йософ пәйғәмбәрҙең тәржемәи хәлен эмоциональ итеп еткереүгә хеҙмәт итә. Был һүҙҙәр поэма авторҙарының әҙәби ижад һәләтен кәмһетергә теләгәндән әйтелмәй. Ул яғы бәхәсһеҙ. Ҡайһы берәүҙәр ни тиклем поэмалағы дини-фантастикаға бер «төргәк» (оболочка) вазифаһын ғына йөкмәтеп, бик тә тормошсан һәм социаль йөкмәткеле итеп күрергә һәм шулай интепретацияларға теләмәһендәр, дини поэма — дини поэма булып ҡала. Төп нөсхәнән күсерек яһап, артабан күсеректән күсеректәр үрсетә торғас, поэма нисек кенә атала башламаһын, улар араһында төп геройҙың пәйғәмбәрлегенә баҫым яһаусы «Ҡыйссәи Йософ Ғәләйһи әс-сәләм», «Китаб Йософ Бәләйһи әс-сәләм», «Китаб Йософ пәйғәмбәр ғәләйһи әс-сәләм» кеүек күсеректәренең осрауы, Ҡол Ғәли иһә үҙе *пәйғәмбәр* тигән фарсы, *нәби* тигән ғәрәп һүҙен, шул уҡ мәғәнәләге *сәүчә* тигән саф төрки һүҙе менән алмаштырып, әҫәрҙең төп нөсхәһен *«Йософ сәүчә ҡиссаһы»* тип кенә исемләгән булған.[1] Был да әле әйтелгәнде ҡеүәтләй. Яҙылыу осорон иҫәпкә алғанда, шунһыҙ мөмкин дә булмаған. Халыҡ әле мифологик фекерләүҙән арынып бөтмәгән көйөнсә, исламса фекерләү нығына башлағанда, авторҙары ла уларҙан азат булмаған шарттарҙа дини сюжет башҡаса интерпретацияланһа, аңлашылып та етмәҫ ине.

Ә инде «Буҙйегет», «Сәйфелмөлөк»ише әҫәрҙәр ғәрәптең данлыҡлы «Мең дә бер кисә»һе рухында, әммә «Ләйлә менән Мәжнүн», «Фәрхәд менән Ширин» ише шәреҡ өсөн традицион мөхәббәт дастандары өлгөһөндә ижад ителгәндәр. Был әҫәрҙәр ер тормошон, шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙе сағылдыра, мөхәббәт идеалына дан йырлай. Шулай донъяуи башланғыс өҫтөнлөк алыуына ҡарамаҫтан, уларҙа ла, ҡисса традицияһы буйынса, Хаҡ яҙмышының барыһынан көслө булыуы, Хаҡтың ихтыярынан тыш бер ни ҙә бойомға ашмауы раҫлана. Дөрөҫ, «Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһындағы кеүек, Алла ихтыярын бәндәгә еткереүсе фәрештәләр, пәйғәмбәр ғәлиәссәләмдәр уларҙа сығыш яһамай. Әммә, сәхнәләге ваҡиғалар режиссер ихтыярына буйһонған хәлдә генә үҫешкәндәй, уларҙың рухы һиҙелеп тора. Етмеш ерҙән яраланған Буҙйегет Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәте менән тиҙ арала һауыға, Сәйфелмөлөккә ҡыйын саҡта Сөләймән пәйғәмбәр рухы ярҙамға килә. Әммә ундай күренештәр, мотивтар ҡәҙимге ҡасандыр тылсымлы (тылсымлы-героик, батыр-

---

[1] Булгаков Р. М. «Кисса-и-Йусеф» Али: Сведения различных списков о поэме и ее авторе //Поэма «Ҡыссаи Йусуф Кул Гали. — Уфа, 1988. — С. 60.

ҙар хаҡындағы йә башкөллө тылсымлы) әкиәттәргә хас булған, торараҡ, классик дастандарҙа бер аҙ ислам фантастикаһына яраҡлаштырылған мөғжизәлек башланғысы һымаҡ ҡына аңлашыла башлаған.

Был мәҡәләлә китапҡа ингән ҡисса һәм дастандарҙың фольклорға, айырата әйткәндә, башҡорт халыҡ ижадына мөнәсәбәтенә ҡағылышлы күҙәтеүҙәр менән уртаҡлашыу күҙ уңында тотолдо.

## 1. «Йософ менән Зөләйха» сюжетының фольклор менән мөнәсәбәте

«Йософ менән Зөләйха» әҫәренең халыҡҡа яҡшы мәғлүм булыуы хаҡында һүҙ алып барғанда, ғалимдар уның тик ҡулъяҙма аша таралыуына ғына иғтибар итеүсән. «Төрки телендә (иҫке төрки теле күҙ уңында тотола, әлбиттә. — Ә. С.) «Йософ вә Зөләйха» ҡиссаһы тәү башлап Ҡол Ғәли тарафынан XIII быуатта яҙылған һәм, 1839 йылда баҫылып сыҡҡанға тиклем, ҡулъяҙма формаһында киң таралған», — тип яҙа, мәҫәлән, Н. Т. Зарипов.[1] Ошондайыраҡ фекер Ғ. Б. Хөсәйеновтың «Быуаттар тауышы» тигән мәғлүм китабында ла әйтелгәйне.[2] Шуның менән бергә, күсеректәрҙән тыш, халыҡ араһында «һөйләмә новелла-хикәйәте, әкиәт варианттары һаман табыла тороуы»[3] билдәләнә. Сөнки «Зирәктәр, тотошлай ятлап алып, үҙенә генә хас көйгә һалып, көйләгән һәм тыңлаусыларҙы арбаған, ә ишеткән-тыңлағандар әлеге ҡиссаны, үҙҙәренсә ябайлаштырып, үҙгәртеп тә ебәргеләгән. Шулай... төрлө яҡтарҙа йөкмәткеһе ҡиссаныҡына оҡшаш тиҫтәләрсә варианттар (*версиялар ҙа*, тип өҫтәр инем. — Ә. С.) тыуған».[4]

«Йософ менән Зөләйха» («Иосиф Прекрасный») сюжеты әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, бынан дүрт мең йылдар әүәл Ике йылға араһын ил итеп торған ассирийҙарға, вавилондарға уҡ мәғлүм булып, артабан б. э. т. VIII—V быуаттарҙа — йәһүдтәрҙең «Ветхий завет»ына, торараҡ «Тәүрат»ына, «Ҡөрьән-Кәрим»гә иһә беҙҙең эраның VII быуатында ғына ун икенсе сүрә сифатында теркәлгән, Фирҙәүси, Ҡол Ғәли, Дүрбәк, «Ҡиссас әл-әнбиә»не төҙөүселәрҙән тыш, фарсы телендә ижад итеүсе Фирҙәүсиҙе (X б.), Ансариҙы

---

[1] Зарипов Н. Т. Башҡорт халыҡ эпосына бер ҡараш //Башҡорт халыҡ ижады (артабан: БХИ): Эпос. 3-сө китап /Төҙ., инеш мәк. һәм аңлатмалар авт. Н. Т. Зарипов. — Өфө: БКН, 1981. — 34-се б.

[2] Хөсәйенов Ғ. Б. Ҡол Ғәли. «Ҡиссаи Йософ» //Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. 1-се том: Урта быуаттар осоро. — Өфө: БКН, 1990—99.— 127-се б.

[3] Фәсиев Ф. С. Кол Галинең «Кыйссаи Йосыф» поэмасы //Кол Гали. Кыйссаи Йосыф: Йосыф турында Кыйса /Транскрипцияны әзерләүче, кереш мәкаләне, искәрмә һәм аңлатмаларны, кулъязмаларның тасвирламасын язучы Ф. С. Фәсиев. — Казан: Татарстан кит. нәшр., 1983. — 7-се б.

[4] Шәрипова З. Я. Аҫылдарҙан аҫыл ҡомартҡы. //Ҡол Ғәли. Ҡиссаи Йософ /Төркисәнән хәҙерге башҡорт әҙәби теленә ҡайтарыусыһы һәм баҫманы әҙерләүсеһе З. Я. Шәрипова. — Өфө: Китап, 1993. — 7-се б.

(XI б.), Йәмиҙе (Жәми, XV б.), грузин Шота Руставелиҙы (XII—XIII б.), үзбәк шағирҙары Хәмзә (XIV б.) менән Дүрбәкте (XV б.), әзри Физулиҙы (XVI б.), төрөкмән Ғәндәлипте (XVIII б.), аламан Томас Манды (XX б.), латыш Ян Райнисты (XX б.), төрөк Назым Хикмәтте (XX б.) һәм тағы байтактарҙы үҙ интерпретацияларында яңынан-яңы вариант һәм версиялар тыуҙырыуға рухландырған.

Мәсьәләнең был яғына тикшеренеүселәр әүәл-әүәлдән иғтибар итә килә. Мәҫәлән, «Йософ» сюжетына беренсе булып «Йософ менән Зөләйха» тип исемләнгән поэтик әҫәр ижад иткән, Мысыр ғәзизенең (батшаһынын) бығаса гел аҙғынлыҡ символы итеп күрһәтелгән ҡатыны урынына матурлыҡ символы иҫәпләнер Зөләйха йөҙөндә, киреһенсә, ысын мөхәббәт менән һөйә белгән ғашиҡ ҡатынҡыҙ затын һүрәтләгән Әбелҡасим Фирҙәүсинең төп герой образын интерпретациялауы фәһемле. Шул уҡ ваҡытта шағир Йософто һәр яҡтан камһетелгән, иректән мәхрүм ителгән, ситтә ғазап сигеүгә дусар булған зат итеп күрһәткән. Был хәлгә уҙған быуаттың тәүге яртыһында уҡ уның ижадын махсус тикшергән Е. Э. Бертельс иғтибар иткән. Шул турала хәбәр итеп, татар ғалимы Ш. Ш. Абилев үҙ сиратында: «Иҙел буйы шағиры ла» (йәғни Ҡол Ғәли ҙә. — Ә. С) «Ҡиссаи Йософ»то яҙған осорҙа, йәғни монгол яуҙары алдынан, Болғар иле Европала көслө дәүләттәрҙең береһенә әүерелә. Ҡол Ғәли тарафынан беренсе планға көслө, аҡыллы идарасы образы ҡуйылыуы шул осор ысынбарлығының сағылышы булып тора... Дәүләтте берләштереүгә ынтылған көслө, ғәҙел хөкөмдар идеяһы ул ваҡытта алдынғы идея була», — тип яҙғайны.[1] Бәхәс юҡ, һүҙ барған әҫәргә нәҡ шул идея һалынған. Әммә шағир поэмаһының нисәнсе фасылының ҡайһы төшөндә һәм нисек итеп шул идея, авторҙың үҙ һүҙҙәрен файҙаланып әйткәндә, тап «XII—XIII быуат баштарындағы» тап «Болғар дәүләтенең социаль хәләтенә тура»[2] килтерелә, уныһы сер булып ҡала: дәлил юҡ. Асылында, бында рустың *«Игорь полкы хаҡында һүҙ»* тигән мәшһүр яҙма ҡомартҡыһы хаҡында Карл Маркс әйткән һәм заманында хрестоматик афоризм хеҙмәтен үтәгән «Суть поэмы — призыв русских князей к единению как раз перед нашествием монгольских полчищ» тигән һүҙҙәрен, тартып-һуҙып, «Ҡиссаи Йософ»ҡа, ә «Ҡиссаи Йософ»то тик Болғар мәнфәғәтенә генә яраҡлаштырырға тырышыу һәм шуға бәйле башҡа маҡсаттар — күп кеүек асыҡ. Әммә был урында беҙҙең өсөн мөһиме шул: Е. Э. Бертельстың Ш. Ш. Абилов һылтанған фекере лә, уның үҙе әйткәне лә — «Йософ» сюжетының халыҡ араһында телдән таралып, шул сәбәптән, төрлөсә интерпретацияланып, төрлө версиялар һәм варианттар хасил итеүе ҡотолғоһоҙ булыуын иҫбатлау менән бер.

---

[1] Абилов Ш. Ш., Хисамов Н. Ш. Ҡыйссаи Йосыф //Татар әдәбияты тарихы: Алты томда. — Ҡазан: ТКН, 1984. — 1-се том.: Урта гасырлар дәвере. — 130—131 б. (Бертельс Е. Э. Фердовси и его творчество //Фердовси. — Л., 1934. — С. 116—117. Әле күрһәтелгән хеҙмәт буйынса).

[2] Абилов Ш. Ш., Хисамов Н. Ш. — 131 б.

Был йөмләнән башҡорт халҡының эпик мираҫын монографик юҫыҡта өйрәнеүгә нигеҙ һалған хөрмәтле остазыбыҙ Ҡирәй Мәргән әйтеп ҡалдырған бер фекер иғтибарға лайыҡ. Дөрөҫ, ул «Йософ менән Зөләйха» сюжетының фольклорлығын махсус тикшермәгән, әммә «был поэмаға (бында Ҡол Ғәлиҙең әҫәре күҙ уңында тотола. — Ә. С.) *нигеҙ булып ятҡан легенда сюжетының* төрлө сығанаҡтарҙағы, *төрлө варианттарын* (минең курсив. — Ә. С.) ҡарап сығыу... беҙҙең бурысҡа инмәй»,[1] тип әйткәненән генә лә ғалимдың шулай ҙа «Ҡиссаи Йософ»тоң, фольклорға таяныл ижад ителеүен таныуы яҡшы аңлашыла.

Төрки донъяһында Ҡол Ғәли яҙған поэманың күсеректәре киң таралыуын билдәләгәнгә тиклем, Н. Т. Зарипов та: «Йософ — Зөләйха», «Таһир — Зөһрә», «Буҙйегет» сюжеттары башта халыҡ ижадында тыуғандар. Аҙаҡ айырым шағирҙар тарафынан эшкәртелеп, ҡиссалар баҫылып сыҡҡан, яңынан-яңы әҫәрҙәр — романтик поэмалар, драмалар, хатта романдар яҙылған»[2], — тип яҙған ине. Бынан «Йософ менән Зөләйха» сюжетының төрлө-төрлө вариант, версияларының халыҡ араһында киң мәғлүм булыуына яҙма сығанаҡтар өҫтәмә стимул хеҙмәтен генә атҡарған, тигән һығымтаға килергә була. Әммә шуныһы үкенесле: Н. Т. Зарипов үҙенең фекерен бер ни менән дә, бер нисек тә дәлилләп тормаған.

Ҡол Ғәли поэмаһының фольклор менән уртаҡлығы йә фольклорға тартымлылығы хаҡында һүҙ алып барғанда, тикшеренеүселәр, ғөмүмән, дөйөм фекер йөрөтөү менән генә сикләнеүсәндәр. Татар ғалимы Ф. С. Фәсиев, Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ»ы «үҙенең *төп сифаты буйынса, ғөмүмхалыҡ эпосы* характерын һәм функцияһын алған», ти. Бының сәбәбен ул әҫәрҙең «бер үк ваҡытта традицион мифологик сюжет мөмкинлек биргән ҡәҙәр ерле фольклор — эпос элементтары менән байытылып, тәбиғи-реалистик һәм демократик рухлы мотивировкалар» менән дә һуғарылыуҙа күрә.[3] «Ерле фольклор, эпос элементтары», тигәндә, автор тик татар халҡының ауыҙ-тел ижадын, һәм ошо халыҡ йәшәгән ерҙәрҙе генә күҙ уңында тота. Сөнки ул «Ҡиссаи Йософ» поэмаһы фәҡәт «Болғар Ҡазан ерҙәрендә *ижад ителә башлаған, шунда тамамланған, ...шунда публикаға сығарылған»,* (курсив минеке. — Ә. С.) — тип иҫәпләй.[4] Академик Ғ. Б. Хөсәйенов иһә, Фәсиев кеүек үк, бик үк аргументлап тормаҫтан, Ҡол Ғәли поэмаһының сығышын башҡорт фольклоры менән бәйләй. «Ҡиссаның эпик сюжеты, ҡапма-ҡаршы төркөмдәрҙән торған ҡаһармандары, ҡайһы бер поэтик үҙенсәлектәре буйынса башҡорт халҡының боронғо «Урал батыр», «Заятүләк менән Һыуһылыу» кеүек ҡобайырҙарының эпик традициялары менән шаҡтай уртаҡ икәнен дә самалап була»[5], — ти. (Әйткәндәй, ул

---

[1] Ҡирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — Өфө: БКН, 1961. — 280-се б.

[2] Зарипов Н. Т. Башҡорт халыҡ эпосына бер ҡараш. — 33-сө б.

[3] Фәсиев Ф. С. Ҡол Галинең «Ҡыйссаи Йосыф» поэмасы. — 14-се б.

[4] Фәсиев Ф. С. Ҡол Галинең «Ҡыйссаи Йосыф» поэмасы. — 22-се бит.

[4] Хөсәйенов Ғ. Б. Быуаттар тауышы. — 40-сы б.

Ф. С. Фәсиев 1983 йылда иғлан иткән мәғлүмәткә лә бер мөһим төҙәтмә индергәйне. Татар ғалимы иҫәпләп сығарыуынса, шул йылғаса «Ҡиссаи Йософ»тоң 161 ҡулъяҙмаһы мәғлүм булған. Шуларҙың икәүһе Германияла — Дрезден менән Берлинда һаҡлана икән. Ғ. Б. Хөсәйеновтың тарихи сығанаҡтар буйынса асыҡлауынса, ҡалғандарының алтмышлабы башҡорт ауылдарында табылған.)

Әлегәсә әйтелгәндәрҙән, логик фекерләү юлы менән гено булһа ла, шуны аныҡ фараз итеп була: тимәк, «Йософ» сюжеты үҙенең оҙон-оҙаҡҡа һуҙылған ғүмере эсендә фольклор менән икеләтә бәйләнешкә дусар була: берҙән, тыумышынан уҡ, вавилон, ассирийҙарҙың балсыҡ «китап»тарына сыйып яҙылғанға тиклем үк, аҙаҡ та шул халыҡтарҙың теленән төшмәһә, икенсенән, яҙма сығанаҡтар уның яңы мөхиттә, был осраҡта төрки мөхитендә, яңынан ауыҙ-тел репертуарына күсеүенә, шул сәбәптән яңы вариант, версиялары үрсеүенә булышҡан.

Йософ менән Зөләйха хаҡында һүҙ сыҡҡанда, тикшеренеүселәр, ғәҙәттә, уларҙы мөхәббәт юлында үҙ-үҙҙәрен ҡорбан итеүсе Изольда менән Тристан (немец әҙәбиәтенән), Ләйлә менән Мәжнүнде, Хөсрәү менән Ширин йәки Фәрһәд менән Ширин (Көнсығыш әҙәбиәтенән), Ромео һәм Джульетта (инглиз әҙәбиәтенән) ише классик ғашиҡтар образына йәнәш ҡуялар. Ш. Ш. Абилов та шулай итә. Әммә, минеңсә, был бик үк уңышлы сағыштырыу түгел. Кireһенсә, Йософ менән Зөләйха образының шул ишле-ишле классик ғашиҡтар образынан айырмаһына иғтибар итеү дөрөҫ булыр ине. Ни өсөн тигәндә, тегеләрҙә ҡауышыу бәхетенә ирешә алмаған ғашиҡтарҙың һәр икеһенең дә мөхәббәте аныҡ асыла. Бынnetwork — бер. Икенсеһенән, уларҙың һәр икеһенең дә ғүмере фәжиғәле өҙөлә. Ә Ҡол Ғәлиҙең әҫәрендә лә, фольклорлашҡан версия һәм варианттарында ла мөхәббәт хисе тәңгәлендә Зөләйха ғына баҙлап яна, ә Йософ үҙ хистәренә баш була белгән, хатта үтә тотанаҡлы ир-ат заты итеп күрһәтелә. Поэмала мөхәббәт темаһының асылышы хаҡында һүҙ алып барғанда, Ш. Ш. Абиловтың да, Ф. С. Фәсиевтың да тик Зөләйха образын үҙәккә ҡуйыуы ла осраҡлы түгелдер.[1]

Миңә ҡалһа, «әлегә ҡәҙәр, төрки әҙәбиәттәрендә Йософ-Зөләйха сюжетына яҙылған башҡа әҫәрҙәр схемаһын механик рәүештә Ҡол Ғәли поэмаһына ла күсереп, уның тематик нигеҙен егет-ҡыҙ мөхәббәте рәүешендә билдәләү хөкөм һөрҙө», тип Фирҙәуси, Дүрбәк әҫәрҙәрендәге кеүек бында ла «мөхәббәт һыҙығы сюжеттың ярҙамсы элементы ғына» булыуын, сюжет нигеҙендә «ата — ул мөхәббәте» ятыуын шуға тоғролоҡ идеяһының төп лейтмотив икәнен әйтеүе менән татар ғалимы Н. Ш. Хисамов хаҡлы.[2]

«Ҡиссаи Йософ»тоң йәки, ғөмүмән, уға нигеҙ булған «Ҡөрьән-Кәрим» сюжетының фольклор менән мөнәсәбәте хаҡында һүҙ сыкһа, ғәҙәттә, мәсьәлә бер яҡлы ҡарала башлай. Әйтәйек, үзбәктәр

---

[1] Абилов Ш. Ш., Хисамов Н. Ш. Күрһәтелгән хеҙмәт. — 132—133-сө б.; Фәсиев Ф. С. Ҡол Ғалинең «Ҡыйссаи Йосыф» поэмасы. — 8—14-се б.

[2] Хисамов Н. Ш. Күрһәтелгән хеҙмәт. — 141—143-сө б.

уның образдарының Фәрхәд менән Ширин, Ләйлә менән Мәжнүн ише дастан геройҙары образы кеүек быуаттарҙан быуаттарға күсә барыуын ғына тәкрарлай.[1] Ш. Ш. Абилов, Ф. С. Фәсиев кеүек татар коллегаларыбыҙ иһә уның татар фольклорына, әҙәбиәтенә йоғонтоһо тирәһендә уралыңҡырай.[2]

Н. Ш. Хисамовтың күҙәтеүҙәрендә иһә «Йософ китабы»ның турапан-тура фольклор менән мөнәсәбәте мәсьәләһенә ҡағылышлы фекерҙәр бар. Һүҙҙе ошо юҫыҡҡа күсергәндә, был автор иң әүәл күлдәк образына (дөрөҫөрәге, *«Улы атаһына күлдәген ебәрә»* мотивына) туҡтала. Әммә ул да был образдың (мотивтың) Муса Йәлил шиғырҙарында урын алыуын констатациялауҙан ары уҙмай. Ә инде уның «халыҡ ижадына ауаздаш» «традицион һүрәт» булыуы милли фольклор миҫалында нигеҙләнмәй. Ғөмүмән, Ҡол Ғәли поэмаһының (сюжет короуҙа, стилендә) фольклорлылығы: тылсымлы әкиәт, эпос тәжрибәһенә хас үҙенсәлектәр (эпик идеаллаштырыу, төрки затлы ир-аттың толом йөрөтөүе, Йософтон оло йәнле булыуы, Зөләйха образындағы, ул төҙөткән «йәннәти» йорттоң һүрәтләнешендәге эпик башланғыстар һәм гонаһ эш ҡылыу — яза мотивы) хаҡында һүҙ йөрөткәндә, Н. Ш. Хисамов, Себер татарҙарының «Аҡ күбек» эпосында төп ҡаһармандың аты-ние менән ҡәбергә кереүе менән Якуп пәйғәмбәрҙең фәрештәләр әҙерләгән ҡәбергә төшөүе араһындағы оҡшашлыҡ, Зөләйханың «йәннәти» йортонда «төрки дастандарындағы (?) нәҫел ағасы тасуиры» булыуы менән Ҡазан татарҙарының сигеү сәнғәтендә элегәсә һаҡланыусы *нәҫел ағасы* мотивы араһындағы оҡшашлыҡ кеүек миҫалдарын иҫәпкә алмағанда, үҙе әйткәнде татарҙың бай милли фольклоры өлгөләре менән раҫлар урынға нигеҙҙә дөйөм төрки йә ҡыпсаҡ, йә оғуздарҙың дастандарына йә рус фольклорсыһы В. Я. Пропптың «Морфология сказки» (Л., 1928), «Исторические корни волшебной сказки» (Л., 1948) тигән хеҙмәттәренә һылтаныу менән генә ҡәнәғәтләнә.[3]

«Йософ ҡиссаһы» һәм фольклор проблемаһының милли юҫыҡта ҡаралышы тәңгәлендә Ҡирәй Мәргәндең күҙәтеүҙәре айырылыңҡырап тора. Дөрөҫ, ул башта «Йософ менән Зөләйха» сюжетының «халыҡ ижады ерлегендә күренеп ҡалған ҡайһы бер варианттарын ҡарарға» өмөтләндерһә лә, бер генә, әммә конкрет текст, 1960 йылда Ырымбур өлкәһендә Вахитов Зиннәтулланан үҙе яҙып алған вариант буйынса фекер йөрөтөү менән сикләнә. Ғалимдың күҙәтеүҙәренең күп өлөшөн ошо варианттан мул ғына алынған цитаталар һәм йөкмәтке һөйләү биләгән. Фольклор менән бәйләнешлелек ҡайһы бер цитаталарға аңлатмаларҙа ғына әйтелгән. Мәҫәлән, ул «Батшаның төшөн юрау» мотивының З. Вахитов вариантында бирелешен тулы килеш килтерә:

---

[1] История узбекской литературы. Т. 1. — С. 167.

[2] Абилов Ш. Ш., Хисамов Н. Ш. Күрһәтелгән хеҙмәт. — ВО—141-се б.; Фәсиев Ф. С. Күрһәтелгән хеҙмәт. — 18—41-че б.

[3] Абилов Ш. Ш., Хисамов Н. Ш. Күрһәтелгән хеҙмәт. — 143—149-сы б.

«Бөгәсә мин төш күрҙем,
Төшөмдә ҡыҙыл ут күрҙем,
Ут яғалай шеш күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем,
Һимеҙ һыйыр бер күрҙем,
Һигеҙ һыйыр бер күрҙем,
Арыҡ һыйыр бер күрҙем,
Ул ни булыр, ярандар?» —

тип, батша төшөп һөйләп, шуны вәзирҙәренән юратырға теләй. Әммә маҡсатына ирешә алмағас, зинданда ятҡан Йософтан юрата. Ә ул былай ти:

«Төшөңдә ҡыҙыл ут күрһәң,
Шәһрәтең булыр, бадишам;
Ут яғалай шеш күрһәң,
Илең артыр, бадишам;
Шеш башында ит күрһәң —
Малың артыр, бадишам;
Һимеҙ һыйыр тигәнең —
Туҡлыҡ килер, бадишам;
Һигеҙ һыйыр тигәнен —
Һигеҙ йылға һуҙылыр;
Арыҡ һыйыр тигәнең —
Аслыҡ килер, бадишам;
Һигеҙ һыйыр тигәнең —
Һигеҙ йылға һуҙылыр».

Кирәй Мәргән, тәрәнгә төшөп тормаҫтан, төштөң дөрөҫ юрауының «традицион алымдар» ярҙамында бирелеүен генә билдәләгән.[1] Тимәк, был осраҡта ла авторҙың бары фактты констатациялауына ғына юлығабыҙ. Ә фольклорға хас традициялылыҡ ниҙә күренә, уныһы асыҡланмай ҡала.

Төш һөйләү һәм уны юрауҙың «традицион алымдар» менән бирелеүе хаҡында һүҙ алып барғанда, Кирәй Мәргән беренсе нәүбәттә «Аҡһаҡ ҡола» эпосында өйөр айғыры менән бейәләрҙең әйтеше менән «Иҙел йорт» ҡобайырындағы «Әй төш күрҙем, төш күрҙем», тип башланған 16-шар юллыҡ строфаларҙан торған әйтеште күҙ уңында тотоуына иманым камил. Ни өсөн тигәндә, үҙенең монографияһының «Аҡһаҡ ҡола» тигән бүлегендә Аҡһаҡ ҡоланың:

«Бөгәсә мин төш күрҙем,
Ҡанъяғалай шеш күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем,
Ул ни булыр, ҡуҙактар», —

тип, төш һөйләүен, бейәләрҙең ул төштө:

---

[1] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — 281—282-се б.

Бөгәсә һин төш күрһәң,
Ҡанъяғалай шеш күрһәң,
Шеш башында ит күрһәң,
Үҙ башыңа, ҡарт ҡуҙаҡ![1] —

тип юрауҙарын килтереп, был төш һөйләү һәм уны юрау рәүешенең «башҡа эпик әҫәрҙәрҙә йыш осрай торған традицион алымдар»[2] икәнен билдәләй. Тик тегендә ошо хаҡта әйтелмәүе генә үкенесле. Әле лә үҙе күҙ уңындараҡ тотҡан «традицион алымдың» «эпик әҫәрҙәрҙә йыш осрауын» бүтән миҫалдар менән дәлилләп тормаған. Шулай ҙа уның «Аҡһаҡ ҡола» эпосының беҙгә мәғлүм вариант, версияларының һәр береһендә лә тотороҡло һаҡланыуы өҫтөнә «Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһының З. Вахитовтан яҙып алынған текстында ла, бер ни тиклем үҙгәрештәр менән «Иҙел йорт» ҡобайырында ла ҡабатланыуы, уның һүҙен ярайһы ғына ҡеүәтләй. Иң ахырҙа аталған әҫәрҙә һүҙ барған алымдың төш һөйләүгә ҡағылышлы өлөшө бына нисек бирелә:

Әй төш күрҙем, төш күрҙем,
Әй төш күрҙем, төш күрҙем,
Төшөмдә ҡыҙыл ут күрҙем;
Төшөмдә ҡыҙыл ут күрҙем,
Ут яғалай шеш күрҙем,
Ут яғалай шеш күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем;
Йыйырылған ҡойҡаһы,
Йыйырылған ҡойҡаһы;
Ҡарайып киткән соңҡаһы,
Ҡарайып киткән соңҡаһы
Имәнесле баш күрҙем,
Имәнесле баш күрҙем,
Баш күрҙем, ау, баш күрҙем...[3]

Әгәр «Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһының З. Вахитов версияһында төштөң юралышында төштә күрелгән һәр әйберҙең мәғәнәһе (яуабы) асыла барһа, әле килтерелгән миҫалда, «Аҡһаҡ ҡола» эпосындағы һымаҡ, төштөң юралышындағы, хәбәр үткән замандағы шарт һөйкәлешенә әйләндерелеп («Әй төш күрһәң, төш күрһәң...»), төш һөйләү тексы баштан-аяҡ ҡабатланып, иң ахырҙа: «Үҙ башыңа, ҡарт убыр!» — тип, шул шарттың алда ғәмәлләшәсәк һөҙөмтәһе әйтелә.

---

[1] Шунда уҡ. — 181—182-се б.; БХИ. 3-сө том. Эпос /Төҙ. Ә. М. Сөләймәнов; Инеш мәҡ. — М. М. Сәғитовтыҡы; Аңлатмалар — М. М. Сәғитов менән Ә. М. Сөләймәновтыҡы; Һүҙ ахыры — Ә. М. Сөләймәнов менән Р. Ф. Рәжәповтыҡы; Яуаплы мөхәрр. Ғ. Б. Хөсәйенов. — Өфө: Китап, 1995. — 223-сө б.

[2] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — 181-се б.

[3] БХИ: Эпос. 3-сө кит. — 43-сө б.

Ҡиссаның З. Вахитов версияһы буйынса, Йософтоң:

Ана ҡоштоң ояһынан,
Ун бер бала осоп барҙы,
Унауы кире осоп ҡайтты,
Бере ҡырҙа ятып ҡалды,
Ағалары уны баҙға
Хөсөтләк илә һалдылар,
Үтеп барған юлаусылар
Баланы төшөп алдылар,[1] —

тип, ярым аллегорик, ярым тура мәғәнәлә әйтеп, үҙен йот йылы Мысырға килгән ағаларына таныттыуын Кирәй Мәргән «халыҡ ижады ерлегенән бик алыҫ» торған анахронизм күренеше тип атаған. Һәм быға шәкерт, наурузсылар сәбәпсе булыуы ихтималын фараз иткән.[2] Һүҙ барған варианттың ахырында нәсихәти һамаҡ әйтелеүе менән шул һамаҡтың үҙенең:

«Шуның берлә тамам булды,
Нури илгә жиһан тулды,
Тыңлағандар һабаҡ алды,
Һөйләгәнгә хәйер һалды» —

тигән юлдар менән тамамланыуын да, йәғни тамамланыштың саҙаҡа һорау рәүешендә булыуын да, ғалим наурузсылар поэзияһы традицияһы менән бәйләй һәм: «Наурузсылар үҙҙәренең һәр бер сығышын аҡса һорау менән тамамлай торған булгандар»,[3] — тип йөпләп ҡуя. Ә бында әкиәтсенең үҙ әкиәтен, әжергә ишаралап:

Әкиәтем китте, таш йөкләп,
Үҙем киттем, аш йөкмәп;

Әкиәтем ошо урында тамам:
Бар сағында — бай(ы)рам.
Юҡ сағында ай(ы)ран[4]

тибындағы традицион тамамланыш менән ослауын иҫтә тотһа, һис тә улай тимәҫ ине. Тимәк, бында «Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһында әкиәт тамамланышының файҙаланылышын билдәләргә мөмкин. Тик шундай иҫкәрмә менән: әкиәттә әжергә ишара ғына яһала, йәғни әкиәтселәр тамамланышта кинәйә менән генә эш итә, ә ҡиссасы — «асыҡ текст» менән.

Якуп пәйғәмбәр үлмәҫ элек үк, фәрештәләр уға ҡәбер ҡаҙыуы хаҡында әйтелгәнен, һәм пәйғәмбәрҙең шул әҙер ҡәбергә кереүен

---

[1] БХИ: Эпос. 3-сө кит. — 43-сө бит.
[2] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомарткылары. — 283-сө б.
[3] Шунда уҡ. — 284-се б.
[4] БХИ: Әкиәттәр. 1-се кит. /Төҙ. М. Х. Минһажетдинов, Ә. И. Харисов. — Өфө: БКН, 1976. — 162-се, 282-се б.

татар ғалимы Н. Ш. Хисамовтың «Аҡ күбек» тигән эпостың геройы аты-исеме менән ҡәбергә ингәне менән сағыштырып, улар араһында оҡшашлыҡ табыуы хаҡында әйтеп үткәйнек инде. Ҡиссаның Илеш районында табылған күсерегендә лә *«Яҡуп улмаҫ элек уҡ, фәрештәләр уға ҡәбер ҡаҙа»* мотивы тоторокло һаҡланған. Яҡуп уларҙы шул шөғөлдәре өҫтөндә күргәс, улар уға:

«Тәңребеҙ дуҫына (йәғни, Яҡуп пәйғәмбәргә. — Ә. С)
әжәл яҡынайҙы,
Уның өсөн ҡәбер ҡаҙып йөрөйбөҙ имде, —

тиҙәр, көнәлгәре уға гүр әҙерләүҙәрен аңлатып. Әммә гүргә Яҡуптың үҙ аяғы менән инеүе хаҡында унда (шулай уҡ Ҡазан баҫмаһында ла) бер һүҙ ҙә юҡ, киреһенсә, уның мәйетен фәрештәләр тәрбиәләүе, Йософтоң ҡайғырыуы ғына хәбәр ителә.

Иғтибарҙы йәлеп иткәне шул: Яҡуптың үлере алдан уҡ мәғлүм була, шуға ла ҡәбере алдан уҡ әҙерләнә, һәм бына ошо ике мәғлүмәт нәфислек тәбиғәте, идеяһы, милли ерлекле булыуы йәһәтенән ҡиссанан бөтөнләй айырылып торған «Аҡһаҡ ҡола» иртәгендәге *«бай улына әжәле етеүенең көнәлгәре хәбәр ителгәне»* һәм *«бай улы улмаҫ элек (көнәлгәре) уның ҡырҡы уткәрелгәне»* тигән ике мотивты хәтерләтә. Яҡуптың үлерен ҡиссала Йософ юрай:

«Яҡуп Нәби Ҡәнғәнгә табан юл алды,
Ғәзиз Йософ, илай-илай, тороп ҡалды,
Вәзир хеҙмәтселәренә хәбәр һалды:
*«Яҡуп сәүче беҙҙе ташлап китер имде».*

«Аҡһаҡ ҡола» иртәгендә бай улының үлерен, әллә кем түгел, кәләше юрай. Әбдразаҡов Миңнебулат варианты буйынса, бай улы үҙе әйтмешләй бөтәһен дә алдан белеүсәнлегенә барып, кәләше уға былай ти:

«И, бай улы, бай улы,
Ҡайтып еткел, бай улы!
Антың еткән башыңа,
Ҡайтып еткел, бай улы!
Ҡырҡ ялды (йылҡы. — Ә. С.) һуйғандар,
Ҡырҡың уҡытып яталар!»

Байтимерова Нәзифә варианты буйынса, ошондай уҡ прогнозлау ҡыҙҙың егет күргән төштө юрауы кеүек аңлатыла:

«Эй, бай улы, бай улы,
Ике манат күл күрһәң —
Атаң-әсәң дәүләте;
Ике аҡ ҡубыр күрһәң —
Атаң-әсәң булыр ул;
Яңғыҙ ҡубыр бер күрһәң —
Мин меҫкенден башы ул.

Антың еткән башыңа,
Ҡырҡ тыу бейә һуйғандар,
Ҡырҡын уҡытып яталар,
Тиҙерәк ҡайт, бай улы!»

Башҡорт эпосы бай улының әжәле етеүен шулай төш юрау рәүешендә хәбәр итеү менән генә сикләнмәй. Бындай мәғлүмәтте лә теркәй: «Егет ҡайтып китте, ти. Ҡайтып етеүенә ҡырҡ көн үтеп тә китте, ти. Ә ауылда уның ҡәбере ҡаҙыулы, ти».[1] Был һүҙҙәр ҡиссалағы «Фәрештәләр гүрҙе ҡаҙып әҙерләнеләр, еҫле май һибеп, ебәктәр түшәнеләр» тигән юлдар менән ауаздаш. Был ауаздашлыҡ та ниндәйҙер заманда ике әҫәр өсөн дә уртаҡ сығанаҡ — мотив булыуы ихтималына ишара.

Ғөмүмән, Көнсығыш фольклоры һәм әҙәбиәте өсөн традицион булған төш күреү мотивына «Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһында ла, башҡорт фольклорында ла мөһим эстетик вазифа йөкмәтелә.

Төш алымы әле һүҙ барған ҡиссала, мәҫәлән, алыҫ киләсәкте лә, яҡынын да алдан иҫкәртеү, тимәк, сюжеттың ниндәй юҫыҡтан үҫеп, нимәгә өлгәшерен көнәлгәре әшкәртеү сараһы рәүешендә ҡулланыла. Йософҡа төшөндә ун бер йондоҙҙоң сәждә ҡылыуы — уның пәйғәмбәр булырын, ағайҙарының уны танырын; Динәнең, ун ҡорт (бүре) Йософто ҡапҡан икән, тип күреүе — ағаларының Йософто юҡ итергә маташыуын; Зөләйханың — төшө ҡасан да уның Йософ менән ҡауышасағын, Малик Дуғырҙыҡы — Йософ арҡаһында, уның ғәжәп тиҙ байыясағын, зиндандағылар төшө — уларҙың, Мысыр малигыныҡы — ил-көн яҙмышы нисек булырын көнәлгәре аңғарта...

Әҫәрҙең төп геройы Йософ яҙмышында, тимәк, сюжеттың үҫешендә, хәл иткес роль уйнаған төшкә туҡталайыҡ.

Балаһының ауыҙынан ишетеп, ул төштөң йөкмәткеһен белгән Якуп уны бер кемгә лә һөйләмәҫкә ҡуша. Ҡуша ғына түгел, һөйләүҙе тыя.

Вә ләкин аманат әйтәйемме, улан:
Был төшөндө һис бер кемгә һөйләп ҡуйма.
Башҡалар һиңә кенә тотмаһын, һаҡлан —
Әҙәмигә шайтан дошман булыр имде.

Сюжеттың «Ҡөрьән-Кәрим»дәге версияһы буйынса, Якуп былай тип әйтә була: «Эй, улыҡайым! Күргәнеңде [ир] туғандарыңа һөйләй күрмә, улар һиңә ҡаршы хәйлә ҡорорҙар. Ҡеше өсөн шайтан асыҡ дошман бит!» (12-се сүрәнең 5-се аяты). «Ҡөрьән-Кәрим»дең татарса сыҡҡан тәфсирендә икенсе һөйләм «Әгәр аларға сөйләсәң, хөседләнеп, сине һәләк итәр өчен, хәйлә кылырлар» тигән һүҙҙәрҙән башлана (Ҡоръән тәфсире. — Ҡазан, 1993. — 245-се б.). Тимәк, изге китап та, Ҡол Ғәли ҙә сюжеттың экспозицияһында уҡ, хатта ки Йософтоң ағайҙары менән, уҡыусыны йәки тыңлаусыны, күҙләш-

[1] БХИ. 3-сө том. Эпос. — 250-се б.

тергәндәй итеп, таныштыра башлағанға тиклем үк, улар хаҡында, күҙҙәре артында (урыҫ был урында, заочно, тип әйтер ине) бик үк, юк, бөтөнләй маҡтаулы булмаған мәғлүмәт бирә һалып өлгөрә. Һәр хәлдә, Яҡуп пәйғәмбәрҙең Йософҡа әйткән һүҙҙәренән өлкән улдарына унын шикләнеп ҡарауы, ә уларынын хөсөткә бирелергә һәләтле икәне һәйбәт аңлашыла. Был һүҙҙәр башҡа кеше ауыҙынан әйттерелһә, бында «һәйбәт» тигәнем артыҡ булып тойолор ине. Әммә әле һүҙ, әллә кемдең түгел, пәйғәмбәрҙең әйткәне хаҡында бара. Шуға ла унын шикләнеүенең нигеҙле булыу-булмауы хаҡында һүҙ ҡуҙғатыу яҙыҡлыҡ булыр ине. Йософтоң өлкән ағалары хаҡында Яҡуп ауыҙынан алған тәүге төшөнсәбеҙ мәсьәләһен артабан ҡуйыртып тормаҫтан, төштөң сер булып ҡалыу-ҡалмауына әйләнеп ҡатайыҡ,

Тормош логикаһы шулай: серҙе ике кеше белә икән, шул икәүҙең береһе аша ул — өсөнсөһөнә, дүртенсеһенә, башҡаһына күсә һәм сер булыуҙан туҡтай. Ҡиссала аталы-уллы серҙе асмаҫҡа һүҙ ҡуйыша: береһе тыя, икенсеһе һүҙ бирә. Шулай булғас, ул ҡайҙан тишеп сығып, ғәмгә нисек етергә тейеш? Бына ошо мәсьәләне хәл итеү өсөн, йәнә бер персонаж индерелә. Ҡол Ғәлиҙең версияһы буйынса, ул — Яҡуптың үгәй ҡыҙы, халыҡ телендәгеләрендә иһә — йә үгәй ҡыҙ, йә аҫрау ҡыҙ. Бына кем теге серҙе Йософтоң ағаларына еткерә (бындай персонаж индерелмәгән сүрәттә, төштө һөйләүҙе һәм унын нисек юралыуын ағайҙарҙан берәү ишетеп ҡала). Беҙҙең өсөн был урында шуныһы мөһим: Ҡол Ғәли ошаҡсы ролен әллә кемгә түгел, ә мотлаҡ үгәй ҡыҙға йөкмәтә. Фольклор эстетикаһынын эске ҡанундары, традицион һәм баштан уҡ әҙер образ булараҡ хәтерҙә урын алыусан күренештәр хаҡында бер ни тиклем хәбәрҙар кешегә мәғлүмдер ки: әгәр ҙә мәгәр сюжетта берәй персонаждын яны ҡатынынын эйәрсән ҡыҙы (тимәк, теге персонаж өсөн үгәй) ҡыҙ була икән, ул мотлаҡ үгәй атаһынын үҙ балалары менән ыҙғышыуына, ғаиләнең бәлә-ҡазаға тарыуына сәбәпсе була. Халыҡ-ара әкиәт күрһәткестәрендә АТ 403 В (Алмаштырылған ҡатын), АТ 485 А (Үгәй әсә менән үгәй ҡыҙ), АТ 480 (Үгәй ҡыҙ мунсала) тибындағы сюжеттарға ҡоролған «Күкен», «Йомғаҡ», «Ишәле менән Һоябикә» тигән башҡорт әкиәттәрендә, мәҫәлән, эйәрсән ҡыҙ, үҙ әсәһе[1] менән бер ауыҙҙан, бер һүҙҙән булып, үгәй атаһынын ҡыҙы төрлө бәләләргә юлығыуҙа ҙур роль уйнай. Әкиәттәрҙә атай кешенең үгәй ҡыҙы аткарған роле буйынса унын үҙ ҡыҙынан һис тә ҡалышмай. Шулай булмай, улар һәр саҡ сагыштырма юҫыҡта һәр саҡ йәнәш, әммә контраслаштырып һүрәтләнә.[2] Ҡол Ғәлиҙең поэмаһында иһә эйәрсән ҡыҙ эпизодик персонаж вазифаһын ғына атҡара: ваҡиғаның башында ғына, унда ла бер тапҡыр ғына күренеп ҡала, шул арала үҙенә йөкмәтелгән бер генә, әммә берәгәй вазифаһын атҡарып та

---

[1] Ат — The Types of the Folktale. A. Classification and Biblioqraphy Anti Aarnes Vezeichnis der Marchentypen (FF 3) Translated and Enlarqed by S. Thompson. — Helsinki, 1961 (FFC 184)

[2] БХИ: Әкиәттәр. 1-се кит. — №№ 72, 74, 76.

өлгөрә. Унын бөтә вазифаhы — Йософтоң төшөн һәм унын юралышын ҡалған ағайҙарға еткереүҙән ғибәрәт. Был персонажға шағир, ана шул вазифаhын атҡарғанға тиклем дә, шунан аҙаҡ та туҡталып тормай. Әкиәттәрҙәге эйәрсән ҡыҙҙан айырмалы рәүештә ҡиссалағыhы сюжеттың экспозицияhында һәм унда ла бары бер генә мәртәбә ҡыла үҙенең эшен. Әммә атҡарып өлгөргән шул ғына вазифаhынын ҡоҫоро тотош сюжеттың артабанғы үҫешенә төшә: персонаждарҙың өр-яңынан төркөмләнеүенә, яңынан баһаланышына, шул сәбәптән көтөлмәгән бәрелештәр тыуыуына сәбәпсе була. Тимәк, Ҡол Ғәли үҙ уҡыусыларының әле фольклорса фекерләүен, традицион образ, эйәрсән ҡыҙ образ хаҡында хәбәрҙар булыуын иҫәпкә алып эш итә, исламса фекерләүҙе үҙләштерһә лә, үҙенең дә шул традицион фекерләүҙән арынмауы тураһында һөйләй.

Ҡиссаның телдән таралған вариант һәм версияларында ла шул бер ошаҡ етә — ағайҙары Йософҡа теш ҡайрай ҙа башлай. Әммә халыҡта *«ишеткәнде һөйләү — яҙыҡ, күргәнеңде һөйлә»* тигән һүҙ бар. Ғәҙәттә, әкиәт геройы был һүҙҙе, үҙенең мутлығын йәшереү өсөн, файҙалана. Һәр хәлдә АТ 1562 С* (Һаран ҡарт) тибындағы халыҡ-ара сюжетҡа ҡоролған «Ҡунай менән Ҡупай» «Һаран ҡарт» тигән юмористик әкиәттәрҙең геройы көлдөрөк жанрын хәтерләткән туҙға яҙмаҫ хикәйәтен шул һүҙҙәрҙе иҫкә алыуҙан башлай: йәнәһе, юҡ-бар һөйләмәй.[1] Ҡиссала халыҡтың яҙылмаған ҡануны әһәмиәтендәге әлеге һүҙҙәр телгә алынмай алыныуға, әммә өлкән ағайҙар-ҙың үгәй ҡыҙ һүҙенә реакцияhынан уларҙың тап шуны иҫтә тотоуҙары аңлашыла. Ҡинйәгә ни тиклем агрессив ҡарай башламаhындар, телдән таралған вариант, версияларҙан айырмалы рәүештә, Йософ сюжетының Ҡол Ғәли версияhында ағайҙар, ошаҡсы үгәй һүҙен тикшереп ҡарауҙы муафиҡ күреп, тәүсығанаҡҡа, йәғни, Йософтоң үҙенә мөрәжәғәт итә.

Шулай итеп, беҙ традицион үҙенсәлекле фольклорлылыҡ алымының Ҡол Ғәли тарафынан үҙенсәлекле файҙаланышы менән осрашабыҙ. «Үҙенсәлекле», тигәндә, нимә күҙ уңында тотола һуң? Беренсенән, юмористик әкиәттә комик эффект тыуҙырыу сараhы рәүешендә ҡулланылған ҡанун әһәмиәтендәге һүҙ бында объективлыҡ сараhына әүерелдерелә: хикәйәләүгә лә ул объективлыҡ төҫө бирә, агрессив ниәтле булыуҙарына ҡарамаҫтан, оло ағайҙарҙың бөтөнләй үк объективлыҡ тойғоhон юғалтмауҙары тураһында ла һөйләй. Алғараҡ китә бирeп, шуны ла билдәләп үтеү кәрәктер: әгәр ҙә мәгәр шундай тойғонан бөтөнләйгә азат булһалар, Йософ менән һуңғы осрашҡандарында, ҡасандыр уны рәнйетеп, унын алдында гонаһлы булыуҙарын таныրға ҡыйыулыҡтары етмәҫ ине.

Йософтоң төшөнә мөнәсәбәт мәсьәләһен күҙәтеүҙе артабан дауам итәйек. Ағайҙары Йософтан: «Ни төш күрҙең? Беҙгә лә белдер инде!» — тип һорау менән генә сикләнмәй, һорауҙарына үтенес,

---

[1] БХИ: Әкиәттәр. 4-се кит. /Төҙ., инеш мәк. авт. Ә. М. Сөләймәнов; Аңлатмалар Л. Г. Бараг менән Ә. М. Сөләймоновтыҡы; Яуаплы мөхәрр. С. Ә. Галин. — Өфө: БКН, 1981.

ялбарыу төҫө биреп, шуға уны ышандырыу өсөн, күҙ йәштәрен түгеп, «түбәнселек менән генә үтенәләр» (22-се б.). Йәғни улар, объективлыҡ тойғоһон юғалтмауҙан тыш, оҫта ғына психологтар ролен дә инә ала. Күҙ йәштәре уларға үҙ үтенестәрен психологик яҡтан тәьҫирлерәк итергә мөмкинлек бирә. Һәм һөҙөмтә үҙен оҙаҡ көттөрмәй — герой «ни ҡылырға?» тигән проблема алдында ҡала: бер яҡтан, атай һүҙен боҙорға ярамай, икенсе яҡтан, бер-икәүһе булһа, бер хәл — ун бере лә, етмәһә, илашып тороп, түбәнселек менән ялынып торған ағайҙарын алдауы ла уңайһыҙ. Сөнки, үҙе «ялғанды әйтергә бер ҙә теле бармаҫ» булғанға, тегеләрҙең ялғанлау ихтималын күҙ алдына ла килтерә алмай. Быныһы һүҙһеҙ ҙә аңлашыла. Шуға күрә Ҡол Ғәли, эйәрсән, йәки үгәй ҡыҙ образын деталләп һүрәтләп тормайынса ғына, әҙер хәлендә генә ҡиссаға индергән һымаҡ, был юлы ла сәйнәп ҡаптырыу «алымынан» баш тарта. Унын ҡарауы, психологик көсөргәнешлекте ҡуйырта ғына бирә. Сер бе-лергә тырышҡан ағалары, «эй ҡәҙерлем»дән генә һалдырып, һаман ныҡыша ла ныҡыша. Ун бер йәшлек балаға бындай ҡыҫымға түҙеүе, еңел түгел, әлбиттә. Һәм малай ысҡына:

Туғандары хәтерен Йософ һаҡланы,
Өндәшмәне, ни тиергә һүҙ тапманы.
Тогро ине, алдарға теле барманы —
Сараһыҙҙан барыһын һөйләне имде (22-се б.).

Шулай итеп, Йософ, әйтерһең дә, ата һүҙенә тогролоҡ менән туғандар күңеле — ағай-эне хәтере тигән икенсе төшөнсәне бизмәнләп тора-тора ла һуңғыһын тосораҡ тип таба. Был сиселеш — Шекспир драмаһындағы «йә-йәки», «икенең-бере» дилеммаһы алдында баҫҡан Гамлеттың хәлен хәтерләтә. Тик ҡиссала был дилемма «әхләҡи һайлам» (моральный выбор) юҫығына күсерелә.

Ҡарамаҡҡа, Йософтоң башына төшөр бөтә бәлә-ҡазаға унын туғандары хәтерен һаҡлауы сәбәпсе булып сыға. Пәйғәмбәр булыуына ҡарамаҫтан, йәшерәк сағында Яҡуптың бер хилаф эш ҡылғанлығы асыҡланғансы, әҫәр менән тәүләп танышыусыла, ысынлап та, тап ошо фекер нығына. Әммә көтмәгәндә мәсьәләнең икенсе яғы яҡтыртылыш ала. Яҡуп бер ҡол ҡатынды, унын үҙенең имсәк балаһынан айырып, Йософто имеҙергә мәжбүр иткән икән. Сөнки ул, тыуғас та, әсәһенән етем ҡалған була. Һөҙөмтәлә, Йософ кисергән бар ыҙалар ҙа, Яҡуптың һуҡырайып ҡалыуы ла — бөтәһе лә шул ҡатындың рәнйеүе төшөүенән, башҡа бер ниҙән түгел тигән фекер тыуа. Тимәк, ҡиссаның нәсихәти пафосы, бер яҡтан, һинекеме ул кемдеке — мөһим түгел, әсә кешене рәнйетеү — оло гонаһ тигән идеяны күңелгә һеңдереүгә тәғәйенләнһә, икенсе яҡтан, атай гонаһы унын үҙенә генә түгел, нәҫел-нәсәбенә лә төшөр булыр, тип иҫкәрткәндәй итә.

Шулай иҭеп, Йософтоң бәләгә тарыуы икеләтә нигеҙләнә әҫәрҙә. Һәм шул нигеҙләнеештә шундай үкенес кинәйәләнә. Йософ юҡҡа ағалары күңелен күрә, Яҡуп юҡҡа ҡол ҡатынды рәнйетә. Әммә «шул ике ҡатлы нигеҙләү» айсбергтың бары күҙгә күренмәле өлөшө

генә, ә аҫҡы өлөшө — донъя мифологияһына, әкиәттәренә, эпостарға хас мотив — тыйылғанды тотмау, тыйылған эште ҡылыу икәненә лә төшөнәһең артабан.

Классик әкиәттәрҙә, ифрат та батырҙар тураһындағыларында һәм улар менән уртаҡ сифаттарға эйә булган эпостарҙа тыйыу мотивы булдымы, артабан тыйылғанды эшләү (тыйыуһыҙланыу, тыйыуҙы инҡар итеү) мотивы килә. Ана шул сюжеттың кинәт етеҙ старт алыуына этәреш биреүсе механизм, детонатор хеҙмәтен үтәй ҙә. «Әрмәнде тун» тигән тылсымлы әкиәттә (АТ 402: Әрмәнде ҡыҙ — батша ҡыҙы +АТ 400: Юғалған ҡатынды эҙләү), мәҫәлән, кәләшенең тыйыуына ҡарамай, егет унын әрмәнде тунын яға: йәнәһе лә, уны гел матур хәлендә күргеһе килә (сөнки, шул тунды кейһә, кәләше әрмәндегә әүрелә) һәм шуның артынса язаһын да ала: «Был яғына һин — минеке түгел, мин — һинеке түгел», — тип кәләше күгәрсен ҡиәфәтенә инә лә осоп сыға ла китә — уның тылсымы менән төҙөлгән һокланғыс йорт-йыһаз юҡҡа сыға».[1] «Һыу ҡыҙы», «Ҡотлобикә менән Ҡотлояр», «Йылан батыр» ише әкиәттәрҙә лә, тыйылған эште ҡылғаны өсөн, герой бәхетенән ҡолаҡ ҡаға.[2] Был законсылыҡ тормош-көнкүреш әкиәттәрендә лә күҙәтелә. «Фәүкинур» тигән новеллистик әкиәттә батша: «Мин өйҙә саҡта минең исемдән бер ниндәй ҙә бойороҡ бирмә. Әгәр инде бойороҡ бирә ҡалһаң, мин һине айырырмын», — тип иҫкәртеүенә ҡарамаҫтан, ул өйҙә юҡта, кәләше ыҙғышыусы ике кешегә хөкөм сығара, һәм ире уны айыра. Дөрөҫ, йәш ҡатын, зирәклеге арҡаһында, айырыу ниәтенән иренең кире дүнеүенә ирешә.[3] Әммә уныһы — икенсе мәсьәлә. Был урында *«тыйыу — тыйылған эште ҡылыу — яза»* сылбырының ғәмәлләшеүе мөһим. «Урал батыр» эпосының Ғәбит Аргынбаев версияһында Йәнбирҙе ҡарт:

Ҡапырсаҡҡа тутырған
Ҡандан ауыҙ тартығыҙ![4] —

тип, тыйһа ла, Шүлгән уны ауыҙ итә һәм атаһынан туҡмала. Исмәғил Рәхмәтуллин версияһы буйынса, шундай уҡ тыйыуҙы, юха ҡотҡоһона бирелеп, боҙоуы арҡаһында, әүермәнгә әүрелә.[5]

Һәр тыйыу — үҙенә күрә аманат. Әммә фольклор әҫәрҙәре был хикмәтте ҡабат-ҡабат хәтергә төшөрөүҙе артыҡ һанай. Сөнки һәр фекер, һәр образ, һәр мотив — тотош әҫәр тыңлаусынан йә уҡыусынан үҙ халҡының милли фольклоры, этнографияһы буйынса ла билдәле бер мәғлүмәттәр системаһы хаҡында хәбәрҙар булыуҙы талап итә. Ә әҙәбиәт иһә, ғәҙәттә, аңлатма биреүҙе, асыҡлыҡ индереүҙе кәрәк тип таба. Ҡол Ғәлиҙең ҡиссаһы ла шуға миҫал. Шағир Яҡуптың Йософтан төшөн ағайҙарына һөйләмәҫкә ҡушыуын хәбәр

[1] БХИ: Әкиәттәр. 1-се кит. — № 69.
[2] Шунда уҡ. — №№ 85, 86.
[3] БХИ: Әкиәттәр. 4-се кит. — 55—56-сы б.
[4] БХИ. 3-сө кит. Эпос. — 29-сы б.
[5] Шунда уҡ. — 128-се б.

итеү менән сикләнмәй, күреп үтеүебеҙсә: «Вә ләкин әйтәйемсе, улан», — тип, унын үҙенән үк шул тыйыу һүҙенең — изге һүҙ, аманат, икәнен дә әйттереүҙе фарыз иҫәпләй...

Тимәк, ата һүҙен тотмауы, унын тыйыуын инҡар итеүе менән Йософ аманатҡа хыянат иткән. Ә халыҡтың яҙылмаған әхлаҡ ҡануны ла, инанысы ла, аманатҡа хыянат — яҙыҡ эш, оло гонаһ, тип белә. Тимәк, бындай гонаһ эйәһе ниндәй язаға лайыҡ, әхирәтте көтмәҫтән, донъялыҡта үк шул язаға дусар ителергә тейеш.

Йәнә бер нәмә. Йола буйынса, инаныс ҡушыуынса, төштө бер кем дә теләһә кемгә һөйләргә тейеш түгел. Тик изге күңелле кеше генә белергә тейеш уны һәм тик изгелеккә генә юрарға тейеш. Был йәһәттән ҡарағанда ла, ағаларына төшөн һөйләүе менән Йософ хилаф эш ҡыла. Сөнки тәү осрашыуҙа уҡ, Йософтоң ағалары беҙҙең күҙ алдына һис кенә лә изге күңелле түгел, киреһенсә, ҡара эсле кешеләр булып килеп баҫҡандай итә. Артабан үҙ-үҙҙәрен тотоштары менән улар, тәүге осрашҡанда, үҙҙәре уятҡан шул фекерҙе нығыта төшәләр генә.

Бына шулай Йософтоң бер тыйыуҙы тотмауы — икеләтә, өсләтә тыйыуҙы боҙоуға килтерә. Шулай итеп, тыйыу һәм тыйыуҙы боҙоу мотивтары өсләтелә. Тиктәҫкә генә түгел был. Бының менән Йософ кисерәсәк бәләләрҙең хәттин ашасағы әшкәртелә булыр. Һәм ул бәләләр көттөрмәй, Яҡуптар күҙҙән юғалыу менән, башлана.

Шуныһы иғтибарҙы тарта. Башына төшөр бәлә-ҡаза, һынауҙар Йософҡа тәүҙә үҙ йөҙө, асылы менән күренмәй. Башта уны, үҙе эскерһеҙ кешене, ағайҙары эскерһеҙ мөнәсәбәткә ымһындыра, шунан, тешен ыржайтып, һемәйтә. Һемәйеү үкенеүгә, ғазапҡа сәбәпсе була. Аталары алдында ағалары һин дә мин, Йософ өсөн өҙөлөп торған кешеләй, ҡылана.

Улар әйтте: «Йософто беҙ нык һаҡларбыҙ,
Ҡәрҙәшебеҙҙе ҡорт ауыҙына бирмәбеҙ,
Ғаләм ҡорттарын ҡарарбыҙ, үлтерербеҙ,
Валлаһи, Йософ өсөн!» — тиерҙәр имде. ( 24-се б.)

Хатта ки уға юл аҙағы, һыу алып, ҡул остарынан төшөрмәҫ кешеләр булып ҡыланып, өйҙән сыҡҡанда, күтәреп кенә китәләр. Әммә түбә артына етеп, аталары күҙҙәренән юғалыу менән, уны эткеләп-төрткөләп, сәсенән тартҡылап, туҡмап, ул һуйырҙан был һуйырҙан булалар, икмәген эткә бирәләр, һыуын түгәләр, үҙен иһә йылан-саянлы ҡоҙоҡҡа аталар. Ҡаруансы Малик Дуғыр күренгәс, бәлки, ул ҡотҡарыр әле, тип өмөтләнәһең. Әммә был өмөт тә аҡланмай. Дөрөҫ, Малик Дуғыр Йософто ҡоҙоҡтан сығарта. Әммә, икеләтә, өсләтә, юҡ, унан да артығыраҡ итеп, был изгелегенең хаҡын сығара, ҡотҡарыусының да хаҡын сығара. Беренсенән, Яҡуп пәйғәмбәрҙең өлкән улдарынан уны «уғры вә ялғансы, өҫтәүенә ҡасҡын» тигән яманаты сыҡҡан ҡол рәүешендә һатып ала. Икенсенән, шул ун бер ағай һүҙе буйынса, Йософто бәйләнгән (телдән таралған вариант һәм версиялар буйынса, бығауланған) хәлдә дөйәгә атландырта, хеҙмәтселәренән рәнйеттерә. Өсөнсөнән, унын

матурлығы менән кәсеп итә: уны күрергә килгән һәр кемдән алтынлата аҡса йыя, ахырҙа уны тотош ҡаҙнаға торошло хазинаға алмаштыра. Ә Зөләйха, ҡол итеп һатып алыуына ҡарамаҫтан, Йософто улылай күреп тәрбиәләй, хатта уға мөхәббәтен иғлан итә, әммә аҙаҡ уны зинданға тығa.

Шулай итеп, *«ағайҙар күңелен күреү»* мотивы менән Яҡуптың *«ҡол ҡатынды рәнйеткәне, шуның ҡоһоро улына төшкәне»* мотивы сюжетҡа этәреш биреүсе *«тыйыу һәм тыйылғанды боҙоу»* мотивына ҡарата икенсел, өсөнсөл роль генә аткара, шул төп мотивтың тышҡы ҡабы, битлеге вазифаһын ғына аткара. Бынан тыш улар әҫәрҙең дөйөм нәсихәти пафосына ла өлөш индерә.

Ә ни өсөн өлкән ағайҙар күмәкләшеп кинйәне эҙәрләй һуң әле?

«Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһының телдән яҙып алынған варианттарында ағайҙарының Йософто эҙәрләүенә, гәҙәттә, атай кешенең кинйә улын уғата нығ яратыуы сәбәпсе итеп күрһәтелә. Зиннәтулла Вахитов, Заһир Закиров, Нәғимә Вәлиевалар ҙан яҙып алынғанында, мәҫәлән, шулай. Ғилми архивта һаҡланған «Йосоп» тигән вариантта (уны 1982 йылда Балаҡатай районы Яңыбай ауылында 1893 йылғы Кәлимуллин Ғәйфулланан Берйән Байымов яҙып алған): «Атаһы уны (Йософто — Ә. С.) бик нығ яратҡан. Әммә ике ағаһы бынан көнләшеп, гел генә йәберләп торғандар», — тиелә.[1] Ағайҙарының Йософҡа көнләшеүенә ул күргән төш һәм шул төштөң юралышы — сүп өҫтөнә сүмәлә һымаҡ ҡына аңлатыла.

Телдән яҙып алынған варианттарҙан, һәр хәлдә, уларҙың беҙгә мәғлүмдәренән айырмалы рәүештә, Ҡол Ғәли версияһында ағайҙары менән Йософ араһындағы конфликт ҡатмарлаштырылып бирелә. Ҡатмарлаштырылыуы шул конфликттың тотош комплекс алыуында күренә. Әгәр яҙма вариант һәм версияларҙа йә төш һәм уның юралышы, йә Йософто атай кешенең нығ яратыуы ағаларының уны эҙәрләүенә, ахырҙа ҡоҙоҡҡа һелтәп китеүҙәренә сәбәп итеп күрһәтелһә, Ҡол Ғәлиҙең поэмаһында ағайҙарҙың шундай юлға баҫыуҙарына шул ике сәбәп бер булып этәреш яһай.

Шул ике сәбәпкә тос ҡына йәнә бер сәбәп тә өҫтәлә. Хәйер, ул сәбәп ҡиссаның бүтән вариант һәм версияларында ла төҫмөрләнә. Тик ул асыҡ әйтелмәй генә. Гөлнур Хөсәйенова 1989 йылда Дәүләкән районының Дүртөйлө ауылында Күсемханова Динә Аллаяр ҡыҙынан (1926 йылғы) яҙып алған вариантта Яҡуп пәйғәмбәрҙең ун ике малайының кесеһе Йософ атлы улы булыуы әйтелгәндән һуң: «Йософто ағалары урманға алып китәләр, һунарға барабыҙ, тип», — тигән мәғлүмәт бирелә. Шул уҡ райондағы Иҫке Хөсәйен ауылы Сәғәҙәтгәрәев Кинйәбай Шәңгәрәй улынан (1930) Фәнүзә Нәҙершина яҙып алғанында ла ағалары Йософҡа асыуланыуға асыулана, тик «һунарға йөрөгәндә» асыулана. Ә был мөнәсәбәттең сәбәбе билдәһеҙ ҡала. Информатор: «Ағалары нимәгәлер асыуланып, Йософто каруансыларға һатып китәләр», — тип, тура һуҡтыра. Шуға күрә

---

[1] Телдән таралған вариант һәм версияларҙың сығанаҡтары ҡисса һәм дастандар томының аңлатмаһында бирелгән.

уларҙың Йософто үлемгә хөкөм итеүҙәре, йәки һуңғы варианттағы һымаҡ, һатып ебәреүҙәре тота килеп ҡабул ителгән ҡарар төҫөн ала. Шул арҡала Йософтоң ағайҙары баштан уҡ агрессив холоҡло, аяуһыҙ бәндәләр булған тигән фекер тыуҙыра. Әммә, әгәр мәсьәләгә этнография күҙлегенән ҡараһаҡ, уның әрсәһе асыҡлана төшөр. Яҡуп пәйғәмбәрҙең ғаиләһендә Йософ — кинйә малай. Бына ҡайҙа йәшерелгән конфликттың төп сере. Кинйә булыу факты үҙе уҡ — ағаларының уны күрә алмауының, ҡыйырһытыуының һәм эҙәрләүенең төп сәбәпсеһе... Сөнки минорат йолаһы буйынса, атай мөлкәтенә кинйә ул ғына дәғүә итә ала.[1]

Ҡиссаның телдән таралған вариант һәм версияларынан айырмалы рәүештә, Ҡол Ғәли үҙенең версияһында, тыйыу һүҙе — аманат икәнен дә аңлатҡан һымаҡ уҡ, атай нигеҙе, мөлкәт һәм уларға кинйәнең хоҡуғы мәсьәләһен туранан-тура хәтергә төшөрә. Йософтоң төшө һәм уның изгелеккә юралыуы хаҡында кеше аша ишеткәс, һәм шуны кинйәнең үҙенән раҫлаттырғас, ун бер ағай ана нимә ти:

«Әйҙә, барып, атабыҙға баш орайыҡ,
Йософто атабыҙҙан һорап алайыҡ,
Алып китеп, берәй төрлө эш ҡылайыҡ:
Үлтерәйек тә йыраҡҡа бырғатайыҡ.

Атабыҙ уны беҙҙән дә артыҡ һөйә,
Уның йөҙөн күрмәһә лә, янып көйә,
*Мираҫ инселәһә, уға беҙҙән артыҡ бирә,* —
Уны, ысынлап, нығыраҡ һөйә имде».

Ҡол Ғәлиҙән айырмалы рәүештә, конфликт төбөндә мираҫятыуына бөтөнләй ҙә ым-ишара яһамаған варианттарҙа ошо өсөнсө сәбәпте көсәйтеп ебәрер йәнә бер фактор бирелеүсән.

Ҡиссаның телдән яҙып алынған күп кенә варианттарында Йософ, «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосындағы Заятүләк һымаҡ, Яҡуп пәйғәмбәрҙең икенсе ҡатынынан тыуған бала тигәнгә баҫым яһала.

Рәхилә Теләкәева, Мәһәҙиев Ғәли, Әлфиә Ҡарсыҡ, Агишев Ғибадулла һ. б. версияһы буйынса, Заятүләк күп уланлы икәүҙең ҡәрҙәшенең яңғыҙ улы була.[2] Рәхилә Теләкәева, мәҫәлән, үҙенең версияһын былай башлаған:

«Борон Албырбай тигән берәүҙең булған бер улы, Алтынбайҙың булған алты улы, Етембайҙың ете улы.

Алтынбайҙың алты улы
Алты ала атлы икән;
Етембайҙың ете улы
Ете көрән атлы икән, ти;

---

[1] Бикбулатов Н. В., Фатыхова Ф. Ф. Семейный быт башкир XIX — XX вв. — М.: Наука, 1991. — С. 145.

[2] БХИ. 3-сө том. Эпос. — 200-се, 205-се, 362—363-сө б.

Албырбайҙың яңғыҙ улы
Ялбыр йолҡош атлы икән, ти;
Алтынбайҙың алты улы
Алты һунар ҡошло икән;
Етембайҙың ете улы
Һигеҙ һуна ҡошло икән, ти;
Алтынбайҙың алты улы
Алтыһы ла затлы икән;
Етембайҙың ете улы —
Етәүһе лә етеүле;
Албырбайҙың яңғыҙ улы
Заятүләк атлы икән.[1]

Биктимер Вәлиуллин, М. Ғафури, В. Даль[2] һәм тағы бер нисә кешенең версиялары буйынса, Заятүләк — кинйә ул. Уларҙа ла конфликт ағайҙары менән Заятүләк араһында ла тыуа һәм, дөйөм алғанда, «Йософ менән Зөләйха» сюжетындағыса, нигеҙләнә. Яҡуп Йософто ятраткан кеүек, Заятүләкте лә атаһы Сәмәрхан нык ярата. Вәлиуллин Биктимер версияһы буйынса, тәүге һунарҙа өлгәшкән уңыштары өсөн уға «аҫыл таштар менән биҙәлгән ҡәмәр бүләк итә», икенсе юлайы — уғы менән ян бирә,[3] ә инде ат бәйгеһендә өс көнлөк юлды ҡойто дүнәнендә бер көндә үткәне өсөн — «еңеүсе булып, батыр нарыкланып» ҡала...[4] М. Ғафури ташҡа баҫтырған версия буйынса ла «Заятүләк, шул замандағы хан балалары ни эш менән мәшғүл булһа, нимә менән шөһрәт тапһа, ул да шулар кеүек тәрбиә алып, һәр эштә һәр кемдән өҫтөн булды. Йәғни ул замандың һөнәрҙәренән булған ат сабыштырыу, уҡ атыу, найҙалар (һөңгө) тотоу, көрәшеү кеүек нәмәләрҙең һәр береһендә Заятүләк беренсе булып һанала ине. Сикһеҙ ҙур һәм киң далаларҙа ҡош сөйөп, ҡош типтереү, был юлда оҫталыҡ менән данлы булыу ҙур һөнәрҙәрҙән һанала ине»[5]. Күрәһегеҙ, атаһы Заятүләкте бушҡа ғына яратмай. Нимәгә тотонһа ла, ошо малайы уның уңышҡа өлгәшер булған. Ана ни өсөн ярата уны атаһы (бында, ғөмүмән, кинйә баланың иркә булыуын да иҫтән сығармау зарур). Бынығы — мәсьәләнең тик бер яғы ғына. Икенсе яғы иһә шунан ғибәрәт: Заятүләк ана шулай үтә һәләтле булғаны өсөн, оло ағайҙар тарафынан эҙәрләнә лә инде. Сөнки уның фонында үҙҙәренең эшкинмәгәнлеге үтәнән-үтә күренә. Уларҙы шул хурландыра, уларҙы шул көнләштерә. Хурланып, уға көнләшәләр. Аталарының икенсе ҡатынынан тыуған, йәғни бары имсәктәш булмағаны өсөн, уға насар һунар ҡошо — аҡ ябалаҡ ҡына бирәләр. Ә ат һайлағанда, Заятүләккә «баҡтаһын ул ҡойоп бөтмәгән күк дүнән ҡараған».[6] Шулай булһа ла, һунарға сыҡһалар:

---

[1] Шунда уҡ. — 200-се б.
[2] Шунда уҡ. — 178-се, 187-се, 359-сы б.
[3] Шунда уҡ. — 179-сы б.
[4] Шунда уҡ. — 180-се б.
[5] Шунда уҡ. — 187-се б.
[6] Шунда уҡ. — 178-се б.

Сәмәрхандың алты улы
Алты сыскан алды, ти;
Заятүләк атлы улы
Ауыҙы ҡанлы бүре алды, ти,
Алпан-толпан атлаған
Һоро айыу алды, ти,
Күк яғалап йөрөгән,
Һылыу ҡыҙҙай биҙәнгән
Ҡолағы миңле төлкө алды, ти.[2]

Әммә Заятүләктең уңышына көнләшеү — уның менән ағалары араһындағы конфликттың тышҡы яғы ғына. Эскеһе — Заятүләктең икенсе ҡатындан тыуыу өҫтөнә, кинйә ул булыуында, тимәк, минорат йолаһы буйынса, Йософ кеүек үк, киләсәктә атай милкенә, атай нигеҙенә эйә булыу хоҡуғы барлығында. Дөрөҫ, «Ҡиссаи Йософ»тан айырмалы рәүештә, Заятүләктең кинйә ул булыуы башта уҡ әйтелһә лә, атай нигеҙенә хоҡуғы мәсьәләһе ҡабырғаһы менән ҡуйылмай. Әммә әҫәрҙең эске логикаһы шул һығымтаға килтерә.

Айырым вариант һәм версияларын (мәҫәлән, 1989 йылда Г.Р. Хөсәйенова менән Ф. А. Нәҙершиналар Дәүләкән районында яҙып алғандарҙы) иҫәпкә алмағанда, Ҡол Ғәлиҙең поэмаһында, «Заятүләк менән Һыуһылыу» иртәгенән айырмалы рәүештә, атай нигеҙе, атай мөлкәте мәсьәләһе туранан-тура әйтелһә лә, кинйә малай булған Йософтоң икенсе әсәнән булыуы хаҡындағы мәғлүмәт кисектереп кенә бирелә. Быны иһә шағирҙың индивидуаль ижад емеше булған поэманың сираттағы художестволы табышы тип баһаларға кәрәктер. Тап ана шул художестволы табыш әҫәр сюжетының сиселешенә бер ни тиклем көтөлмәгәнлек эффекты өҫтәй. Конфликттың төйөнләнеү мәсьәләһендә уҡыусы ла, тыңлаусы ла тәүҙә бер нәмәгә ымһындырыла, шунан — икенсеһенә, тағы — өсөнсөһөнә... Конфликтҡа Йософтоң туғандар күңелен атай һүҙенән өҫтөн ҡуйыуы сәбәпсе тигән фекергә ирешкәс икәс, уға (конфликтҡа) аманатҡа — хыянат та сәбәпсе икәне асыҡлана, һәм, күп тә тормай, мәсьәләнең сиселеше ул түгел икәнено төшөнәһең. «Тыйыуҙы боҙоу». Бына нимә төп сәбәпсе, тигән фекергә киләһең. Шул фекерҙә нығынып өлгөрҙөм, тигәндә генә, бөтә хикмәт Йософтоң — улай-былай ғына малай түгел, кинйә ул булыуында икәне аңлашыла. Һәм: «Эш шуның менән генә бөтмәне әле», — тигәндәй, тап ана шул саҡта ғына Йософтоң икенсе әсәнән тыуған бала икәне мәғлүм була. «Кинйә булыуы етмәгән! Мә, һиңә — сүп өҫтөнә сүмәлә!» — тип ҡабул итәһең был мәғлүмәтте. Һүҙ ыңғайында ғына ыҫҡындырылыуына ҡарағанда, бик үк әһәмиәтле тойолмаған шул мәғлүмәттә, асылда, ағалары менән Йософ араһындағы конфликттың икеләтә ҡатмарлашыуына сәбәп итерлек фактор йәшеренгән. Әҫәрҙең вариант һәм версияларында Йософтоң, кинйә ул статусына эйә малай булыу өҫтөнә, икенсе әсәнән тыуған бала икәне баш-

---

[1] Шунда уҡ. — 179-сы б.

та уҡ әшкәртелгән сүрәттә, йола хоҡуғы менән яҡшы таныш һәм шуға күрә кинйә ир балаһың йортта (ғаиләлә) ниндәй хоҡуҡтары барлығын һәйбәт белгән кешелә «Ағалары, күмәкләшеп тороп, ниңә һуң Йософто тота килеп эҙерләй икән?» тигәнерәк һорау тыумай. Ҡиссаның сюжет конфликты бына шулай әллә нисәмә төйөндән төйөрөм генә төйнәлә. Ғилми телгә күсерһәк, был урында комплекслы йәки тотош системанан торған конфликт төйөнө тураһында һүҙ алып барырға булыр ине.

«Ҡиссаи Йософ» һәм уның телдәге варианттарының мәғлүм булғандарының бөтәһендә лә конфликт бермә-бер Йософ менән икенсе әсәнән тыуған уның ағайҙары араһында тыуа: тимәк, был мотив бик тә тотороҡло. Ә «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосындағы конфликт, ҡайһы бер версиялары буйынса — Заятүләк менән уның кәсептәштәре (һунар буйынса юлдаштары) араһында тыуа, ә икенселәре буйынса, ун бер (дөрөҫөрәге ун) ағаһының уның менән ыҙғышы рәүешен ала. Тәүгеһендә Заятүләк — кәсеп буйынса ойошоусы ваҡытлы коллектив ағзаһы, икенсеһендә лә кәсептең әһәмиәте бар: Заятүләк ағайҙары менән һунарға йөрөй. Әммә был осраҡта ул туғанлыҡ буйынса ойошҡан коллектив ағзаһы. Шуға күрә уны сителтеү был осраҡта — икеләтә сителтеү: коллектив хисенән генә түгел, туғанлыҡ тойғоһо бәйләнешенән дә сителтеү.

Ихтимал, һуңғы мотив, «Бер туған ағалары Заятүләкте эҙәрләй» мотивы уға нигеҙ булған *«әсә — башҡа, ата — бер туғандар»* мотивы «Заятүләк менән Һыуһылыу» иртәгенә Йософ сюжеты йоғонтоһонда килеп ингәндер. Ошо йөмләнән Заятүләкте диндар итеп күрһәтеү, ҡыйын мәлдә уға доға, Хыҙыр Ильяс ярҙамға килеүе, Хаҡ Тәғәлә ихтыяры тураһындағы мотивтар ҡыҙыҡлы.[1]

Әйткәндәй, Ҡол Ғәли поэмаһында ла Яҡуп пәйғәмбәрҙең ике ҡатыны булыуын һәйбәт төшөндөрмәле итеп бер деталь бирелә. Бында мин уға «бар ине Яҡуптың бер үгәй ҡыҙы» тигән һүҙҙәрҙе күҙ уңында тотам. Был һүҙҙәрҙән Яҡуп пәйғәмбәрҙең яңы ҡатынының эйәрсән ҡыҙы булғанын аңлайбыҙ. Ә бына уға тиклем нисә ҡатыны булған, ҡайһы улы ҡайһыныһынан тыуған, әллә Фәнүзә Нәҙершина Дәүләкән районында яҙып алған варианттағы һымаҡ, тәүге ике ҡатыны ла үлгәнме, Иблеәмин менән Йософ Яҡуптың үлгән икенсе ҡатынының балаларымы, улары аңлашылмай. Әҫәрҙең финалына яҡынлашҡансы (Иблеәмин менән булған мажараға тиклем) Ҡол Ғәли был мәсьәләне асыҡ ҡалдыра. Мәсьәләнең ахырғаса асыҡ ҡалдырылыуы ҡиссаны уҡыусыны ла, тыңлаусыны ла ҡыҙыҡһындыра (был урында урыҫ, интриговать, тип әйтер ине) һәм шул көтөлмәгәнлек эффектын көсәйтә.

Поэмала мәсьәлә бына нисек сиселә. Икенсе тапҡыр Мысырға килгәндәрендә, Йософтоң ун ағаһы уның үтенесе буйынса, кесе ағаһын да, йәғни Иблеәминде лә (телдән таралған вариант һәм версияларҙа ул, ғәҙәттә, телдең орфоэпик законсылығына яраҡлаштырылып Ибнеәмин тип кенә исемләнә) килтерә. Шуныһын да хәтергә

---

[1] БХИ. 3-сө том. Эпос. — 189-сы, 196-сы, 368—384-се, 388—393-сө б.

төшөрәйем. Ун бер йәшендә күргән төшө, атаһы юрағанға юш килеп, Мысыр мәмләкәтенен тәңреһе, йәғни батшаһы булыуға өлгәшкән Йософ үҙенең кем икәнен әлегә туғандарынан йәшереп йөрөгән сағы. Ҡәнғән ҡунаҡтары, йәғни бер туған ағалары, менән хушлашыр алдынан ғына, Йософ алтын һауытын килтерә. Ә ул һауыт ниндәй булған? Ҡыҙыҡһыныусыларҙың ошондай һорауы тыуырын белгәндәй, Ҡол Ғәли уны шулай тасуирлай:

Ул һауыт ҡыҙыл алтындан эшләнгән,
Гәүһәр-яҡут менән матурлап биҙәлгән.
Дүрт йөҙ мең алтын хаҡҡа баһаланған,
Шул ҡәҙәр ҡиммәтле бер хазина имде...

Юлга сыккан ҡәнғәндәрҙе ҡыуып етеп:
Йософ әйтер: «Тоҙ-икмәк һанламанығыҙ,
Ни сәбәптән миңә хөрмәт ҡылманығыҙ.
Дүрт йөҙ алтынлыҡ һауытты урланығыҙ,
[Бик] Бошоноп, үпкә һүҙҙәр әйтер имде...

Тап бына шул саҡ сиселә лә инде әлеге мәсьәлә. Мысыр тиклем мысырҙың, тирә-яҡта дан тотҡан бай мәмләкәттең, әллә кеме түгел, тәңреһе, шундай оло шик белдереп, уғрылыҡта ғәйепләгәс, ҡәнғәндәр нимә эшләргә тейеш? БДУ фондындағы айырым вариантта Рауил атлы агаһы һөрәнләргә уҡталып ҡарай, әммә Йософ, унын был һөнәрен белгәнлектән (ә ул һөрәнләһә, тауышынан ғәскәр тиклем ғәскәрҙәр ҡолап бөтөр булган), үҙенең улынан унын арҡаһын һыйпатып өлгөрә: һөҙөмтәлә, ағаһынын тауышы сыҡмай ҙа ҡуя.

Ҡол Ғәли версияһында һөрәнсе роле Йәһүҙәгә йөкмәтелгән. Ул да баяғы сәбәп арҡаһында өнһөҙ ҡала. Абдуллина вариантында, һөрәнсе өнһөҙ ҡалгас, үҙҙәрен уратып алған Мысыр ғәскәренә ҡаршы ҡәнғәндәр һугыш аса, әммә, еңелеп, күмәге бергә төрмәгә юлыға. Ә уға тиклем «бурлығы фаш ителгән» кесе ағайҙы ла, унын бүренән ашалған ҡустыһын да, йәгни Йософто ла, уғры ине, тип, яманларға өлгөрә өлкән ағайҙар. Ул икәүҙең имсәктәш, тегеләренең икенсе әсәнән икәне башта уҡ әйтелгән булһа, әле өлкән ағайҙар әйткәне мәглүмәт, буш ҡыуыҡ шартлауы кеүек, әллә ни эффект тыуҙырмаҫ ине. Ә инде яңы саҡ:

Унан улар (агайҙар — Ә. С.) Йософҡа яуап бирҙе:
«Был угландын береһе лә,
Имсәктең икенсе һынары ла (йәғни Йософ та. — Ә. С.) яуыз ине,
Ул ҡәрендәше лә унын уғры ине,
Икеһенең дә әсәһе Рәхилә ине, —

тип әйтеүе әлеге («...ҡәнғәндәр нимә эшләргә тейеш?» тигән) һорауга яуап бирә лә ҡуя (урыҫ был урында «ставить точку над «и» тигән фразеологизмды ҡулланыр ине).

Ҡиссалагы был эпизод алдан уйнап ҡаралған инсценировканы хәтерләтә, әлбиттә. Ни өсөн тигәндә, Йософ менән Ибне Йәмин көнәлгәре һүҙ беркетешеп ҡуйган була. Инициатива, әлбиттә, Йо-

софтан сыға. Быраса әйтелгәненсә, кесе ағаһын алдан иҫкәртеп, юрый унын йөгөнә йәшерә Йософ теге ҡиммәтле һауытты. Унын төп маҡсаты, урлыкта ғәйепләү һылтауы менән, кесе ағаһын үҙ янына алып ҡалыу була.

Бындай хәйлә Йософтоҡ башына ҡайҙан килгән, әллә Ябраил фәрештә әшкәрткәнме, тигәндә, телдән яҙып алынған варианттарҙың информаторҙары, үҙ-ара һүҙ ҡуйышҡандай, был хаҡта бер һүҙ ҙә өндәшмәй, Ҡол Ғәлиҙә иһә яуап бар. Һәр хәлдә, Йософтоң ошо хәйләһе менән танышҡас та, шул хәтергә килә. Дүрт йәшенә тиклем имеҙеп үҫтергән һөт анаһы Йософто бигерәк тә нык һөйгән була. Якуп пәйғәмбәр кинйәһен кире һорағас (йәнәһе, етәр, имсәк ташлатырға ваҡыт) был дас (хеҙмәтсе) баланы ебәрмәҫкә хәйлә ҡора башлаған. Үҙенән тыуған сабыйҙы имеҙеү бәхетенән мәхрүм ителгән ҡатындын психологияһын аңлауы ҡыйын түгел. Үҙе ҡанынан яралып, туғыҙ айҙа тулғандырып, тулғаҡтарын кисереп, үҙе ҡорһағында йөрөтөп, үҙе тыуҙырған сабый булмаһа ла, үҙенең күкрәк һөтөн имеҙеп, үҙе тәрбиәләгән, шул сәбәптән эҫенеп өлгөргән Йософто Якупҡа ҡапылғара ғына ҡайтарып биреү — унын өсөн йәнен бүлеп биргән менән бер булыр ине. Ни тимә, үҙ сабыйын имеҙеү бәхетенән мәхрүм ителеүе арҡаһында, бар хәсрәтен ошо малай менән баҫҡан бит ул. Бына шул сәбәптән Йософтоң һөт анаһы бер хәйлә ҡора. Атаһы Йософто алырға булғас, малайҙың «биленә алтын оскорон (аҡкысын. — Ә. С.) аҫып ебәрә лә аҙаҡ: «Атам Исхаҡтан ҡалған бүләк имде», — тип, килеп бәләләшкән кеше булып ҡылана. Алтын осҡорон Йософта «таба» һәм малайҙы йәнә ике йылға үҙендә ҡалдыра: йәнәһә лә, урлығы өсөн язаһын бирә. Тимәк, кесе ағаһын урлыҡта ғәйепләгән кеше булып, уны башҡа ағайҙарынан айырып алып ҡалыуы менән (йәнәһе лә, шул яҙыҡлығы өсөн хөкөмгә тарттырырға итә) Йософ бер ниндәй ҙә яңылыҡ асмаған, бары бала сағында һөт анаһы файҙаланған хәйлә алымын яңы шарттарҙа, еренә еткереп, «ижади» файҙалана ғына, һәм ниәте ниәткә етә: ул үҙ моратына ирешә. Шуның менән ҡисса «изгелек ерҙә ятып ҡалмай» тигән хәҡиҡәтте йәнә бер раҫлауға ирешә. «Нисек инде?» — тигәндә. Ағайҙары Йософто, аяу белмәй, үлтерергә уҡталғанда, «Рауил төртөп» йығып, «сәсен тартып», ерҙә һөйрәгәндә, «башҡалары, яуызланып, унан артыҡ, ҡыуа-ҡыуа төрлөсә туҡмағанда», шул Йәһүҙә әйтер:

«Эшегеҙ дөрөҫ булмаҫ,
Ҡәрҙәш ҡәрҙәште бер ваҡытта үлтермәҫ,
Ундай эшкә Тәңренән рәхмәт булмаҫ,
Иң яҡшыһы — тәүбә ҡылып, төңөлөү имде.
Тәңренән ҡурҡайыҡ, яуыз ғәмәл ҡылмайыҡ,
Әхирәттә гонаһлы булып ҡалмайыҡ,
Ожмах биреп, тамуҡты һатып алмайыҡ,
Тамуҡ эстәренә мәңгегә төшмәйек имде!» (34-се б.).

Бер дини риүәйәттән миҫал да килтерә Йәһүҙә. Илаһи фарман буйынса, Ибраһим пәйғәмбәр яраткан улы Исмәғилде һуйырға

итһә, үткерҙән үткерерәк бысағы уға үтмәй ҙә ҡуя. «Тәүрат», ислам хаҡында әҙ генә мәғлүмәте булған һәр кемсәнәгә таныш ошо легенданы өлкән ағаларының хәтеренә төшөрә Йәһүҙә. Бына шулай, Алланы ла, тамуҡты ла, Ибраһим пәйғәмбәр менән Исмәғилде лә, аталары Яҡупты ла ағаларының иҫенә төшөрөп, яҙмышы ҡыл өҫтөндә торған Йософто төрлөсә ҡурсалап алып ҡалырға маташа. Үкенескә ҡаршы, шул изге маҡсатын тулылығында ғәмәлгә ашыра алмай: кесе туғанын үлтерергә теш ҡайраған ағайҙарын шул үтә лә яуыз уйҙарынан кире дүндерә — уны ҡоҙоҡҡа ташларға күндерә. Әммә Мысыр атлы икмәкле дәүләт батшаһы булып алған Йософ өсөн кесе ағаһының шул изге ынтылышы, изге ниәте лә мөһим. Унан Йософ: «Өйләнденме, йә, ҡәрҙәшем, уғыл-ҡыҙҙарың үҫәләрме?» — тип һораған сағында, кесе ағаһы:

«Ун ике уғыл бирҙе миңә хоҙай,
Һәр беренә һәр төрлө исем шундай:
Барыһы ла ҡайғыға ишара имде», —

тип һанап китә: Диңгеҙ, Бүре, Ҡайғы, Ҡан, Гүр, Дәрт, [Мә] Гәр[ә], Арыҫлан, Фәрит, Ғәриб, Хәсрәт, Ҡол. Сөнки ул, Йософ ҡайғыһынан диңгеҙ ярында күҙ йәшен күп түккән; ҡанлы күлдәген тотоп, хәсрәт йотоп, бүре аулап, анттар биргән; гүрстанда күп илаған, дәртлеләрҙән дәртлеләргә йөрөгән, мәғәрә, таш араларынан эҙләгән, арыҫландарҙы ла туҡтатып һорашҡан; ҡолдар күрһә, күңелдәрен аскан (Фәрит — ирекһеҙ); ғәрип күрһә, ҡушылып илаған; хәсрәтлеләрҙе күрһә, йәлләп, күҙ йәшен түккән; ҡолдарға миһырбанлыҡ ҡылған.

Берәй персонаждың үҙ яҙмышын балалары исемендә сағылдырыуы — фольклор өсөн айырым художестволы алым ул. Бындай алым, микросюжет (мотив) рәүешендә, әкиәттәрҙә лә осрай. Мәҫәлән, башҡорттоң «Ғәжәп исемдәр» тигән новеллистик әкиәтендә, ҡыҙының аҡыллы һүҙен һанламай, уны урманға алып барып ташлаған батша шул ҡыҙҙан тыуған ейәндәренең Нәиҙем (ни инем, кем инем), Нәүлды (ни булды), Нәүлсаҡ (ни буласаҡ, ни булыр) тип, исемләнеүенә ғәжәп итә. Баҡтиһәң, шул исемдәр ярҙамында ҡыҙы үҙенең тормошо, яҙмышы хаҡында уйланыуын, уйлап йәшәүсән ҡатын икәнен әйткән дә биргән, имеш. Ошо әкиәт күҙлегенән ҡарағанда, Ибне Йәмин уландарының ғәжәп исемдәре менән ни әйтмәксе булды икән? Күпме ғүмер үтһә лә, ул Йософ ҡустыһын һаман да юҡһынып йәшәүен, уның өсөн хәсрәтләнеүен, уны яратыуын, шул арҡала башҡаларға миһырбанлы булыуын уландарының исемдәре менән үк әйтеп биргән. Тимәк, уландарын күргән һайын, уларҙың исемдәрен әйткән һайын, Йософто хәтерләргә теләгән, шуға ирешкән.

Балалар — киләсәк заман кешеләре. Тимәк, Йософ ҡайғыһы, Ибне Йәмин үҙе үлгән сүрәттә лә, уландары аша киләсәккә күсәсәк... «Буйы зифа, матур үҙе, ...айҙай яҡты, күркле йөҙө, ...асыҡ теле, йомшаҡ һүҙе» булыу өҫтөнә, «аҡылы теүәл, теле матур, һүҙе татлы, шәфҡәтле һәм мәрхәмәтле» Йософ, туралап әйтелмәһә лә, ағаһының был сифаттарын да иҫәпкә ала, әлбиттә.

Бында йәнә уларҙың бер имсәктәш булыуының да әһәмиәте юҡ түгел. Ҡиссаның телдән таралған вариант, версияларынан айырмалы рәүештә, Ҡол Ғәлиҙең, ошо маҡсатҡа ирешеү менән сикләнмәйенсә, Йософ һәм Ибне Йәминдең бер имсәктәш булыуы хаҡында тап ошо мәлдә мәғлүмәт биреүе — маҡсат өҫтөнә маҡсатты (сверхзадачаны) художестволы хәл итеүгә өлгәшеүе ул. Ана шул үҙе, көтмәгәндә-нитмәгәндә, новеллистик көтөлмәгәнлек эффекты тыуҙыра. Эстетика күҙлегенән ҡарағанда, ошондай һөҙөмтәгә ирешеүе — үҙе үк шағирҙың ижади оҫталығы. Ә бындай һөҙөмтәгә ирешеүҙең сере уның халыҡ ижады алымын, оҫта итеп, ижади файҙалана белеүендә.

Атай мөлкәтенә дәгүә итеүсе кинйә малай булыу өҫтөнә, икенсе әсәнән дә булыуын белгәс, конфликт сәбәбе атап әйтелмәгән сүрәттә лә: «Йософто ағалары ни өсөн эҙәрләй һуң?» — тип һорарға урын ҡалмай. Тик, бының өсөн уҡыусынан йә тыңлаусынан әлеге лә баяғы, йола буйынса, кинйә улдың ниндәй хоҡуҡҡа эйә булыуы хаҡында хәбәрҙарлыҡ ҡына талап ителә. Ә инде Яҡуптың нисәнсе бисәһенән Йософ тыуыуы тураһында мәғлүмәт бирелмәүе, кинйәнең хоҡуҡтары хаҡындағы хәбәрҙар булған сүрәттә лә, ул эффектты бирмәй.

«Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһының сюжеты, нисәгә төрләнеп вариантлашмаһын, уларҙың беҙгә мәглүмдәренең күпселегендә *«төш күреү», «төш юрау»* мотивы тотороҡло һаҡлана. Ул мотивтарҙың телгә алынмауын осраҡлы рәүештә булған хәл тип ҡарарға кәрәктер. Тимәк, был ике мотивҡа ҡиссала ҙур әһәмиәт бирелә.

Ҡисса сюжетының үҙе, төрлө версиялар хасил итеп, үҙ нәүбәтендә улары вариантлашҡан һымаҡ, «төш күреү», «төш юрау» мотивтары ла вариантлашырға мөмкин. Мәҫәлән, Байрамғолова Хәҙисә варианты буйынса, төшөндә, Йософ — Ай менән ун бер йондоҙ ғына, Нәғимов Махъян һөйләгәне буйынса (Миәкә районы Боғҙан ауылында Гөлнур һәм Зәйтүнә Йәгәфәровалар яҙып алғанында //БДУ БӘҠ ФФ, 98. — 250-се б.) ун бер йондоҙҙо һәм Ай менән Көндө (Ҡояшты) күрә; Ноғманова Ғәзизә (ҒА 3; оп. 92/ 9), Ғайсин Бәхтегәрәй (Ырымбур өлкәһе Новосергеевка ауылы, Ғүмәр ауылы //БДУ, БӘК, 84. — 72-се б.) ише информаторҙар әйтеүенсә — ун бер йә ун ике йондоҙ, Ай менән Ҡояш Йософҡа сәждә ҡыла. Мәләүез районы Ерек ауылында Насирова Фатиманан 1975 йылды Рәмилә Иҫәнғолова менән Миләүшә Ҡолмөхәмәтова яҙып алған вариант буйынса, ун ике йондоҙ Айға сәждә ҡыла. «Йософ пәйғәмбәр» тип исемләп яҙып алынып, БДУ фондында (Төрлө йылдар. — 240—246-сы б.) һаҡланған бер вариантында Йософ: «Тулған Ай менән тыуған Көн, ун бер йондоҙ төшө-мөшрә сәждә ҡылды. Ай, итәгемдән инеп, енемдән сыҡты», – ти; Дәүләкән районында Фәнүзә Нәҙершина тарафынан Суфыя Абдулханованан яҙып алынғанында төшөндә күргәнде Йософ шулай бәйән ҡыла: «Бер ағас үҫте. Шунын ун ике ботағы ла үгәй әсәйҙә ҡалды» (ә үҙ әсәһе үлгән була). Мәсетле районы Һөләймән ауылы Бәҙретдинова Мәхмүзә Йософтоң төшөн тағы ҡатмарлаштырып ебәрә. «Ун бер йондоҙ күрҙем. Ай менән Ҡояш енемдән сыҡты. Ун бер йондоҙ сәждә ҡалды. Ағайҙарым ме-

нән ун ике ағас ултырттык. Минеке япрак ярҙы, емеш бирҙе. Ағайымдарҙыкы япрак та ярманы, емеш тә бирмәне», — ти Йософ атаһына. Ҡол Ғәли поэмаһы Йософтоң төшө йәһәтенән вариант һәм версияларының күптәре менән тап килә:

Нурлы Ҡояш, тулған Ай һәм ун бер йондоҙ,
Сәждә ҡылдылар төшөмдә минә төп-төҙ.
Төшөмдә шулай күрҙем һис бер ялғанһыҙ,
Йә, атайым, төшөмдө һин юра имде.

Күренеүенсә, Ҡол Ғәли поэмаһындағыға ҡарағанда Йософтоң төшөн телдә тулырак та, йөкмәткелерәк тә итеп биргән варианттар осрай. Әммә уның юралышы телдә лә, Ҡол Ғәлиҙә лә нигеҙҙә бер иш. Шуға күрә Ҡол Ғәлигә һылтаныу менән сикләнәмен:

Бар ғәләмгә һинең исемең, мәшһүр булыр,
Мәшриҡ, мәғриб балалары һине белер,
Ҡиәмәткә ҡәҙәр исемең мәңге ҡалыр.
Хәлил зәбәх дәүләте күренер имде.
Пәйғәмбәрлек рисаләте аласаҡһың,
Һәм мәмләкәт эйәһе лә буласаҡһың.

Төшөндә күрелгән һәм юралған төш — киләсәктә ни күререндe, нимәгә ирешерендe, нимәгә шаһит булырынды, ниҙе юғалтырынды көнәлгәре күреү ул. Тимәк, ул, пунктир рәүешендәрәк кенә булһа ла, тәҡдирен хаҡында көнәлгәре хәбәрҙарлыҡҡа ирештереүсе илаһи күренеш. Ә бында уны пәйғәмбәр — илаһтың ерҙәге илсеһе үҙе юрай. Ул, Хаҡ яҙмышынан, Тәңре тәҡдиренән уҙмыш юҡ, ти.

Шулай итеп, *«тыйыу»* һәм *«тыйыуҙы инҡар итеү»* мотивтарынан этәреш алған сюжет, космос карабының икенсе быуыны эшкә егелә башлағаны һымаҡ, төштә билдәләнгән тәҡдирҙән яңы көс ала. Шуға ла ағайҙарҙың Йософто үлтерергә маташыуы барып сыҡмай. Сөнки ул маташыу, асылда, Дон Кихоттың ел тирмән менән алышҡаны кеүек, тәҡдир менән көс һынашып ҡарауҙары ғына була. Дон Кихот шунда уҡ хур була. Сөнки уның шул тырышлығының мәғәнәһе юҡ. Ә Йософтоң ағайҙары, байтаҡ заманалар үткәс кенә (ул арала бала-сағалы булырға өлгөрәләр, Яҡуп пәйғәмбәр һуҡырлыҡ дәүерен тултыра, йәғни тәңре ҡушҡанса, етмеш йыл буйы күҙҙән яҙып ултырғандан һуң, Хаҡ тәғәләнең ҡөҙрәте менән, яңынан күрә башлай) үҙҙәрен хурлыҡҡа ҡалыуын танырға мәжбүр була. Йософтоң тылсымлы һауыт-сағы (хәҙерге магнитофон һымаҡ), ҡөҙрәт менән, тауыш биреп, «уларҙың барлыҡ ҡылғанын» һөйләп бирә. Шунан Йософ: «Бәйләгеҙ күҙҙәрен! Алтын ағаска аҫығыҙ!» — тип бойорғас, был фармандың юрый ғына бирелеүен баштарына ла килтермәй һәм:

Әйтерҙәр: «Һин беҙҙе, олуғ мәлик, азат ит,
Атабыҙ Исраил хаҡына хөрмәт ит,
Зинһар, бер меҫкен Яҡупҡа күрһәт шәфҡәт!
Үҙебеҙҙең ғәйепте таныныҡ имде,» —

тип, ялынып, ялбаралар. Телгә алыныуына ҡарамаҫтан, мөлкәт, кинйә ул хоҡуғы проблемаһы Ҡол Ғәлиҙә (ул проблеманың барлығы ситләтеп кенә аңлатылған варианттарҙы әйтеп тә тораһы түгел) артҡы планға сыға һәм сюжетты *«күҙгә күренеп ук хәрәкәтләндереүсе» көс вазифаһын үтәй. Ә «тыйыу»* һәм *«тыйыуҙы тотмау»* мотивтарына тәү этәргес көс, геройҙы һәр саҡ һәр яҡтан һынау вазифаһын атҡарыу бурысы ғына тороп ҡала. Шул һынауҙар Яҡуп пәйғәмбәр юрағандарға («Пәйғәмбәрлек рисаләте» алыуға, «мәмләкәт эйәһе» булыуға) ни тиклем хаҡлы икәнен нигеҙләү өсөн кәрәк.

Атаһының тубығына башын һалып наҙланып ҡына үҫеп килгән Йософтоң яҙмышына ауыр һынауҙар төшөрө атаһы күргән төш аша ла иҫкәртелә. Өлкән улдары үҙҙәрен Йософ хаҡында бик тә ҡайғыртыусан ағайҙар тип күрһәтергә теләп: «Фәһеме артһын, күңелдәре күтәрелһен, Төрлө ерҙәр, ауыр һыуҙар — барыһын күрһен, Сәхрәләрҙә төрлө гөлдән сәскә тирһен», — тигән булып торһалар ҙа шиген белдереп, Яҡуп ул шиген төшө менән йөпләй:

> Яҡуп әйтте: «Төндә бер төш күргәйнем,
> Төшөмдә, имеш, ун бер бәрәс көтә инем,
> Һаҡлай алманым, береһен шунда юғалттым,
> Ҡулымдан бүреләр алып китер имде.

Ҡол Ғәлиҙә шулай. Ә ҡалған варианттар, геройҙың артабан ни күререн унһыҙ ҙа аңлашыла, тигән кеүек, өҫтәлмә *«төш күреү»* мотивын индереп тормаған.

«Йософ менән Зөләйха» сюжетының Ҡол Ғәли ижад иткән версияһында, йәнле репертуарҙан теркәлгән версияларында һәм шул версия варианттарында, ғөмүмән, фольклор, айырата әйткәндә, башҡорт халыҡ ижады менән оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡтар барлығы — бәхәсһеҙ. Улай ғына ла түгел, хатта был сюжеттың үҙенә бәйле инаныстар, фольклор хасил булған. «Халыҡ тарафынан Зөләйха менән Йософтоң гишҡы өмөтһөҙ сирҙәрҙән арындырыр, күңелдәргә йән өрөр ғәжәп дауа, тормошҡа йәшәү сәме өҫтәр хикмәтле өлгө һымаҡ ҡабул ителгән».[1] Башҡорттарҙа Йософ китабы менән юрау йолаһы ла булған. Бөйөк Ватан һуғышы дәүерендә, мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙ кистәрен бер урынға йыйылып, тоҫмал менән «Йософ менән Зөләйха» китабының берәй битен асыр булған. «Әгәр ошо биттә Йософ менән Зөләйханың айырылышыуы тураһында һүҙ барһа, киләсәктә, осрашырға яҙмаған, тип, инде лә уларҙың осрашҡан, ҡауышҡан сағына тап килһәләр, киләсәктә осрашыу насип икән әле, тип, әйткәндәр».[2]

Бындайыраҡ йола һәм инаныстар татарҙар араһында ла таралған булған. «Йософ китабы» буйынса юрағандар, уны фал ки-

---

[1] Шәрипова З. Я. Аҫылдарҙан аҫыл ҡомартҡы. — 8-се бит.

[2] БХИ. 1-се том. Йола фольклоры. /Материалды һайлаусылар, төҙ., аңлатма биреүселәр, инеш мәк. авт. Ә. М. Сөләймәнов, Р. Ә. Солтангәрәева. — Өфө: Китап, 1995. — 153-сө бит.

табы итеп тотонғандар, ҡыҙ оҙатҡанда, һандыҡ төбөнә, аҡ һөлгөгә төрөп, ошо китапты һалыр булғандар.[1]

Никах туйында килен ҡаршылап, «Яр-яр» әйткәндә, башҡорт ҡыҙҙары:

Йософ менән Зөләйха
Йәр инеләр, яр-яр!
Бер-береһен күрмәгә
Зар инеләр яр-яр!

Төштә күреп Йософто,
Ғашиҡ Зөләйха, яр-яр!
Ғишыҡ тотоп, ҡауышыу
Шунан ҡалған, яр-яр! —

тип йырлар булған.

Ҡиссаның милли фольклор менән мөнәсәбәтенең бер генә ағымлы түгел, бына шулай ике яҡҡа ағымлы икәненә башҡорт филологияһында тәүләп Ғ. Б. Хөсәйенов иғтибар иткәйне. Аныға шул: «Йософ китабы» рухында бәйеттәр, йырҙар ижад ителеп, Йософ менән Зөләйха мөхәббәтенең үрнәк итеп күрһәтелеүен билдәләгәйне.

Һауаларҙа йондоҙ, ай, ни саҡлы,
Саҡрымдары уның хисаплы.
Йософто(ла) Зөләйха нисек һөйгән
Мин һөйәмен һеҙҙәрҙе шул саҡлы.[2]

«Йософ китабы»н «яҡын күргәнгә, ул» татар халҡының да «йырҙарында урын алған»:

Ике егет печән чаба —
Биек тауның итәген;
Бик сагынсаң, бик саргайсаң,
Укы «Йосыф китабы»н.[3]

«Йософ менән Зөләйха»ға бәйле риүәйәт, легендалар ҙа тыуып торған. Шуларҙың береүһенә башлап Әхнәф Харисов иғтибар иттергәйне. Бында иһә мин уның З. Я. Шәрипова (Йәғәфәрова) бәйән иткән ҡыҫҡаса йөкмәткеһен теркәү менән генә сикләнәм: *«Имеш, бер башҡорт тарханының еткән ҡыҙы, үтә холоҡһоҙланып, бер кемде лә һанға һуҡмай икән. Ҡыҙының яҙмышына ҡайғырған тарханға бер ҡарт хажи кәңәш бирә: «Мысырға кеше ебәртеп, бер ғәжәйеп китап алдырт», — ти. Ата кеше ни эшләһен — Ырыҫбай атлы мулланы алыҫ сәфәргә оҙата. Ырыҫбай китап һаҡлаған ерҙе табыуын таба, тик хужалары китапты һис биреп ебәрмәйҙәр икән. Зирәк мулла көндөҙ уҡый ҙа төндә йәшеренеп кенә*

---

[1] Абилов Ш. Ш. Хисамов Н. Ш. — 116-чы б.

[2] Хөсәйенов Ғ. Б. Ҡол Ғәли. «Ҡиссаи Йософ» — 125-се б.

[3] Абилов Ш. Ш. Күрһәтелгән хеҙмәт. — 117-се б.

*ятлаҒанын яҙып ҡуя. Күсереген тамамлап, имен-аман алып ҡайтып, ҡыҙҒа тотторҒан был. Ҡыҙ йотлоғоп бер тынала уҡып сыҒа ла татлы йоҡоҒа тала, төшөндә матур егет күреп, уҒа мөкиббән китеп Ғашиҡ була. Шулай итеп, мөҒжизәле китап ҡартайып барҒан тарханды ла, ҡыҙын да, уларҙың ырыуҙаштарын да сикһеҙ хисләндергән, күңелдәрен иреткән, барыһын да бәхетле иткән».*[1] Был әҫәрҙең тексы риүәйәттәр, легендалар томында ла ҡайта-ҡайта баҫыла килде («Аңлатмалар»ҙы ҡарағыҙ).

«Йософ менән Зөләйха» сюжетының Ҡол Ғәли поэмаһында һәм телдән таралҒан версия һәм варианттарында фольклор менән бәйләнеше мәсьәләһенә был күҙәтеүҙәрҙең артабанғы биттәрендә лә, ҡыры сыҡҡан сүрәттә, яйы килгән һайын әйтелер әле. Әлегә иһә уларҙың фольклор менән мөнәсәбәте мәсьәләһе хаҡында Ф. С. Фәсиев әфәнде әйткән бер фекергә асыҡлыҡ индереү менән ослап тормаҡсымын. Баштараҡ әйтелгәнсә, ул Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ»оноң *«ерле фольклор — эпос элементтары менән»* байытылыуын билдәләгән. «Ерле» тигәндә, ғалимдың тик татар мөхитен генә күҙ уңында тотоуы хаҡында ла әйтелгән ине. Үкенескә ҡаршы, былдай бер яҡлылыҡты башҡалар ҙа ҡабатлай тора. Миҫалға Илсөйәр Закированың хеҙмәтен килтерергә булыр ине.[2]

Ҡөнсығыш фольклорында һәм яҙма сығанаҡтарҙа *«Үгәй әсә үгәй улына Ғашиҡ була»* мотивы йыш осрай. Халыҡ-ара әкиәт сюжеттары типтары күрһәткестәрендә ул АТ 875Д* *(«Үгәй әсә үгәй улына Ғәйеп ташлай»)** тамғаһы менән тамғаланған был сюжет килеп сығышы менән грекетың Ипполит хаҡындағы мифы һәм «Тәүрат»тағы сибәр Иосиф (Иосиф Прекрасный) хаҡындағы легендаға барып тоташа. Ул шулай ук тарихи әһәмиәткә эйә булған сығанаҡтарға теркәлгән риүәйәттәрҙә лә күҙәтелә. Риүәйәт буйынса «Ҡабуснамә» авторы Ҡей-кәүестең йәш ҡатыны сибәр Сүдәбе үҙенең үгәй улы булған Сийәүешкә үлеп ғашиҡ була (XI быуат). Үгәй егет уның менән енси бәйләнешкә инеүҙән баш тартҡас, яһил ҡатын, үҙенең өҫтөндәге күлдәкте үҙе теткеләп, ғауға күтәрә: йәнәһе лә, Сийәүеш уға йәбешергә иткән. Мәшһүр Әбүлғәзенең «Төрөкмән шәһәрендә» әйтелеүенсә, Боғрахандың йәш ҡатыны ла үҙенең үгәй улын аҙҙырырға маташып ҡарай. Мәкерлек барып сыҡмаҫтай булғас, аҫрауҙарынан егеттең итеген урлата ла, яңы ғына яуған ҡар өҫтөндә шуның эҙен һалдырттыра. Эҙҙәр, ҡатындың теләге буйынса, уның тирмәһе менән егеттеке араһында ҡалдырыла. Шунан инде уға, ошоно «дәлил» итеп үгәй улын ғәйепләп, унан уртаҡлашылмаған хисе өсөн үс алырға ғына ҡала: ул үгәй әсәһен түшәк бүлешергә күндереп маташҡан, йәнәһе. Әммә ике осраҡта ла мәкерлек фаш ителә.

---

[1] Башҡорт халҡынын әҙәби мираҫы: XVIII—XIX быуаттар. — Өфө: БКН. 1965. — 200—201-се б.

[2] Шәрипова З. Я. Аҫылдарҙан аҫыл ҡомартҡы. — 7-се б.

[3] Закирова И. Г. Болгар чоры халык ижаты: Филол. фәннәре канд... диссертация /Гыйльми жит. проф. Ф. И. Урманчеев. — Казан: ТФА ТӘСИ, 2000. — 8-че б.

Көнсығышта ошо мотивҡа нигеҙләнгән әкиәттәр ҙә күп. Уларҙың береһе, «Синбаднамә» тигәне, «Мен дә бер кисә» (V—VI быуаттар) аша киң таралған (566—578-се төн). Уның тәржемәләре, әшкәртмәләре һанһыҙ. Шулар араһынан Зия ад-Дин Нахшабиҙың «Тутыйнамә»һендәге *«Батша ҡатыны, ете вәзир һәм ҡыҙ арҡаһында егет өҫтөнә ябырылған хәсрәт тураһындағы әкиәт»* (8-се төн) үҙенсәлекле. XIX быуатта Ҡәйүм Насыри (1825—1905) тарафынан төрөк теленән тәржемә ителеп, башҡорттар менән татарҙар араһында китап рәүешендә лә, телдән дә «Ҡырҡ вәзир» ҡиссаһы таралған.[1] Башҡорттар араһында *«Үгәй әсәнең үгәй улына ғашиҡ булғаны»* мотивына нигеҙләнгән «Һалдат менән батша ҡатыны», СУС 983*: «Ҡош һарайы»),[2] «Үгәй әсә менән үгәй ул, батша менән ҡырҡ вәзир» (АТ 875 Д*: «Ғәйепһеҙгә рәнйетелгән батша улы менән уны яҡлаусы аҡыл эйәләре» кеүек новеллистик әкиәттәр таралыуына ошондай сығанаҡтар менән танышлыҡ ярҙам итеүе лә ихтимал. Әкиәттәрҙә батша ҡатынының мөхәббәтен һалдат та, үгәй улы ла ҡабул итмәй.

Тәүгеһе шул турала бәйән итә. Батша һалдаттарға тикшереү үткәргәндә, матур һалдатты күреп, уға батшабикәнең күҙе төшә һәм, Йософто, ҡол баҙарында күреп, төшө буйынса таныған Зөләйха һымаҡ, тәҡәт итә алмай, ҡолап уҡ китә. Шуны, йомош-юлға тотоноп, үҙенә яҡынайтҡас, уның менән түшәк уртаҡлашмаҡ була. Батшама хыянат итмәйем тип, егет баш тарта. Яманаты сығыуҙан ҡурҡып, ҡатын уны яманлай, хатта уға үлем язаһы бирҙертергә теләй.

Икенсе әкиәт буйынса, батшаның яңы алған йәш ҡатыны үгәй улына ғашиҡ була ла уны үҙенеке итмәк була: «Һиңә һүҙем бар. Минән ишет тә, үҙеңдә тот. Үҙең беләһең, атайың ҡарт. Уны күңелем хушһынмай. Күңелем һиндә генә. Хәҙер итәгемдән инеп, иҙеүемдән сыҡ», — ти, йәғни ул да түшәк уртаҡлашырға тәҡдим итә. Ҡатын ҡосаҡлай башлағас, малай һелтәнә — тегенең мороно ҡанай. Ҡатын бәлә һала һәм батшаға, улың миңә ҡул һалырға итте, тип алдай — малай зинданға юлыға.[3]

Ошо уҡ сюжет «Ҡаҙҙар ни тиҙәр?» әкиәтендә аҡыллы ҡыҙ ауыҙынан һөйләттерелә. Унда нәфсеһенә баш була алмаған батша ҡатыны әле генә, үҙе яратам да яратам, тип йән атҡан хеҙмәтсеһен, эротик тәҡдименә ҡушылмағаны өсөн генә, язаға тарттыра. Ә «Һалдат менән батша ҡатыны», «Үгәй әсә менән үгәй ул, батша менән ҡырҡ вәзир» әкиәтендә уға үҙ ғәйебен бындай юл менән йәшерергә

---

[1] Кор-оглы Х. Г. Взаимосвязи эпосов народов Средней Азии, Ирана и Азербайджана. — М.: Наука, 1983. — С. 120—124; Сөләймәнов Ә. М. Әкиәттә хәҡиҡәт: Башҡорт халыҡ көнкүреш әкиәттәренең жанр составы, сюжет төрлөлөгө, тормош ерлеге. — Өфө: Китап, 1997. — 77-се б.; — Казан, 1908.

[2] СУС — Сравнительный указатель сюжетов: Восточнославянская сказка /Сост. Л. Г. Бараг, И. П. Березовский, К. П. Кабашников, Н. В. Новиков. — Л., 1975.

[3] БХИ: Әкиәттәр. 4-се кит. — №№ 75, 76.

лә, уртаҡлашмаған хис-тойғоһо өсөн үс алырға ла тура килмәй. Тәүгеһендә хөкөм алдына баҫкан һалдат, донъяла ҡыу ағас менән ҡатындар күп, тип, бисә һүҙе менән эш иткән ирҙәрҙе бисәгә иҫәпләүен әйтеүе; икенсеһендә ҡырҡ вәзирҙең ҡырҡ көн буйы батшаны албырғатырлыҡ экиәт һөйләүе арҡаһында, эш ғәйепһеҙҙәрҙе яҙалап, гонаһлы булыуға тиклем барып етмәй, ә аҙғын ҡатын үҙ яҙаһын ала. Шуның менән экиәт ғаилә тоғролоғо проблемаһын әхләҡи нормалар күҙлегенән художестволы хәл итеүгә өлгәшә.

*«Үгәй әсә үгәй улына ғашиҡ була»* мотивы бына шулай фольклорҙа төрлөгә түкмәсә, әммә төп моменттары тотороҡло ҡала. «Йософ менән Зөләйха» сюжетының ҡайһы версияһын һәм шул версияларҙың ҡайһы вариантын алма, унда ошо мотив шулай уҡ тотороҡло һаҡлана, ике һүҙ менән әйткәндә, ул шундай формала урын ала: батша ҡатыны Зөләйха, бала сағында төшөндә күреп, үлеп ғашиҡ булған егетте, йәғни, Йософто, бер ҡол йөҙөндә таный ҙа уны һатып ала, һәм уға үлеп ғашиҡ булып, махсус төҙөткән йәннәттәй һарайына саҡырып, үҙе менән түшәк уртаҡлашырға тәҡдим итә. Йософ, уны — әсәй, батшаны атай сифатында ҡабул итеүенә һылтанып, баш тартып, ҡаса башлағас, артынан йәбешеп күлдәгенең итәген йырта. Был хәлде күреүсе (ғәҙәттә, ул теле асылмаған бала була) дөрөҫтө һөйләүе арҡаһында, батша ҡатынының егетте яҙаға тарттырырға тырышыуы бушҡа сыға. Шулай ҙа аҙаҡ Йософ зинданға юлыға.

Мәғлүм булыуынса, Мәлик Дуғыр Йософто үҙе ауырлығы хазинаға һата, «Ҡолдо (йә әсирҙе) үҙ ауырлығындағы алтынға һатыу» мотивы «Мең дә бер кисә» (863—893-сө төн) сюжетына нигеҙләнгән экиәттәрҙә, шул иҫәптән башҡорт экиәттәрендә лә осрай. Мәҫәлән, «Рәссам менән батша ҡыҙы» тигән новеллистик экиәттә байының малы менән сауҙа итеүсе егет әсирлеккә юлыҡҡан батша ҡыҙын уның үҙе ауырлығына тиң алтынға һатып ала.[1] Әгәр Йософто уның үҙенә бәрәбәр алтынға һатып алған Зөләйха ахырҙа килеп, үҙенә иш итһә, байтаҡ мажараларҙан һуң рәссам егет тә шуға ирешә.

Экиәт эстетикаһының эске законсылығы шулай. Әгәр ҙә мәгәр егет — ҡыҙҙы, ҡыҙ — егетте берәй ҡыйынлыҡтан (тотҡонлоҡтан йә үлемгә дусар ителгән еренән) ҡотҡара икән, ахырҙа улар ҡауышмай ҡалмай. «Ҡамыр батыр» (Ат 303: Ике ағай), «Юлдыбай батыр» (АТ 707: Мөғжизәүи балалар + АТ 315: Тоғролоҡһоҙ әсә) иште батырҙар тураһындағы һәм тылсымлы героик экиәт геройҙары үҙҙәре дейеүҙән ҡотҡарған ҡыҙҙы кәләш итә.[2] «Кәримдең башынан үткәндәр» (АТ —: Яҡынса 301 Д*: Батша ҡыҙын әсирлектән ҡотҡарыу +860В: Кеше ҡатынын карапта алып ҡасыу)*, «Фатиманың ҡотҡарылыуы» (*855 В*: Кәнизәкте ҡотҡарыу) кеүек новеллистик

---

[1] БХИ: Экиәттәр. 4-се кит. — 152-се б.

[2] БХИ: Экиәттәр. 3-сө кит. /Төҙ. Н. Т. Зарипов, М. Х. Минһажетдинов; Инеш мәҡ. Н. Т. Зариповтыҡы; Аңлатмалар Л. Г. Бараг менән Н. Т. Зариповтыҡы. — Өфө: БКН, 1978. — № 10. 2-се кит. /Төҙ. М. Х. Минһажетдинов, Э. И. Харисов; Аңлатмалар Л. Г. Бараг менән М. Х. Минһажетдиновтыҡы; Яуаплы мөхәрр. Н. Т. Зарипов. — Өфө: БКН, 1979. — № 44.

экиәттәрҙә лә әсирлектәге ҡыҙҙы ҡотҡарған егет ахырҙа уның менән кауыша.[1] Ә «Ҡараганда батша менән ҡыҙ батыр» батырҙар тураһындағы экиәттә (АТ — ...) батыр ҡыҙ үҙе ҡотҡарған егеткә кейәүгә сыға.[2] Ошондай экиәттәр контексында ҡараганда һәм уларҙың эске логикаһын иҫәпкә алғанда, Зөләйханың Йософто ҡоллоҡтан, рәссам егеттең батша ҡыҙын әсирлектән ҡотҡарыуынан уларҙың да киләсәктә ҡотҡарылыусылары менән мотлаҡ ҡауышырға тейеш икәне аңлашыла. Һәм шулай булып сыға ла. Айырма бары шуға ҡайтып ҡала: беренсенән, теге экиәттәрҙең төп ҡаһарманы — ҡорал менән яулаған һөҙөмтәгә, һунғылары байлыҡ ярҙамында ирешә, икенсенән, төрлө өҫтәлмә мажаралар тыуыуы арҡаһында, ҡауышыу сәғәте кисектерелә генә.

Ҡайһы бер татар ғалимдары уйлағанса, Ҡол Ғәли тик татар фольклоры традицияларына ғына таянмаған, башҡорт ғалимдары әйткәнсә, башҡорт фольклоры башланғыстарын ғына файҙаланыу менән генә лә сикләнмәгән, ә тегеһенең дә (дөрөҫөрәге, болғарының да), бынының да йоғонтоһон кисергән. Халыҡ-ара киң билдәле *«Үгәй әсә үгәй улына ғашиҡ була»* мотивының ҡиссала *«Хужабикә үҙ ҡолона ғашиҡ була»* планында үҙләштерелеүенән күренеүенсә лә, шул ике сығанаҡты файҙаланыу менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, донъя фольклоры, айырыуса Көнсығыш халыҡтары ижады йоғонтоһон да кисергән. Быға, Тажетдин Ялсығол әл-Башҡордиҙың «Тәуарихы Болғарийа» тигән хеҙмәте геуаһлауынса, башҡорттоң әйле ырыуынан булған Ҡол Ғәлиҙең ҡырҡ биш йыл буйына Урта Азия, Болғар тарафтарында ғүмер кисереүе сәбәпсе булғандыр.

Ҡайҙа йөрөһә лә халыҡ массаһынан айырылмаған шәхестең әҫәренә ҡарата «фольклор йоғонтоһон кисергән», «уны үҙләштергән» ише билдәләмәләр бик үк дөрөҫ тә булмаҫ. Сөнки халыҡ әле фольклорса фекерләүҙән арынып бөтмәгән заманда үҙен халыҡ вәкиле тип белгән шағирҙың бындай типтағы фекерләүҙән азат булыуы икеле. Икенсе яҡтан, үҙе ғүмер баҡый мөдәрислек иткән, шәкерттәренә шәриғәт шартын, ислам ҡанундарын күндереүсе, «Ҡөрьән-Кәрим» идеяларын ғәмәлгә ашырыусы кеше булараҡ, Ҡол Ғәли исламса ла фекерләгән. Дөрөҫөрәге, фекерләүҙең шул ике тибының да мәшһүр бер эйәһе булған. Ни өсөн тигәндә, Ҡол Ғәли үҙенең тыуған халҡы ла әле мифологик төшөнсәләр ярҙамында фольклорса фекерләүҙән арынып бөтә алмаған, исламса фекерләүҙе үҙләштерә башлаған дәүерҙә йәшәгән шағир булған. Шулай булғас, ҡиссаның телдән яҙып алынған версия һәм варианттарында Тәңре ихтыярына, Хаҡ яҙмышына, Алланың үҙ илселәре фәрештәләр аша кеше яҙмышы менән идара итеүенә инаныу сағылған сүрәттә лә, фольклор башланғыстарының аныҡ күҙәтелеүе бер ҙә осраҡлы түгел.

---

[1] БХИ: Әкиәттәр, 4-се кит. — №№ 55, 58.

* Һандан алда торған йондоҙсоҡ экиәт күрһәткестәрендә был сюжет тибының иҫәпкә алынмауын аңлата булыр.

[2] БХИ: Экиәттәр. 3-сө кит. — № 26.

## 2. «Бууҙйегет» дастанында башҡорт фольклорының поэтик жанрҙарының файҙаланылышы

«Буҙйегет» дастаны ла фольклорҙың төрлө-төрлө жанр формаларын үҙ эсенә алған, әйтерһең, ул үҙе үк шуларҙан туҡылған. Саф фольклор күҙлегенән ҡарағанда, был йәһәттән айырыуса Өфө варианты нык айырылып тора. Әлегәсә телгә алынған фольклор башланғыстарынан (эпостарға хас билдәләрҙән, алғыш, ҡарғыш, ырым (төш), мөнәжәт (налим уҡыу), «яр-яр» итеү һ. б.) тыш, унда бала йыуатыу, һыҡтау, бәхилләшеү, васыят, мәҡәл, әйтем, ҡобайыр жанрҙарына хас башланғыстар бар. Улар ҙа үҙ тәңгәлендә дөйөм сюжетҡа йөкмәтелгән бурысты ихлас атҡарыша.

«Буҙйегет» дастанының Өфө вариантын ҡағыҙға теркәүсе, Ҡарасәс һылыуҙы кәләш итеп алыу ниәтенән бар этлеккә лә барыусы Зәйтүн атлы хан менән таныштырыр алдынан шундай иҫкәрмә биргән: «Әл-ҡисса: бер батша бар ине, бер улы бар ине, аты Зәйтүн ине. Хикәйәт китабы Зәйтүн, тиәр ине. Турхан **иртәгеләрендә** аты Зәйтүн, тиәрҙәр. Әммә китаптағы дөрөҫтөр. Хан ҡыҙын борон шуға бирәмен, тип йөрөгән икән...»

Был иҫкәрмәлә беҙҙең иғтибарҙы тартҡаны шул: хикәйәт геройы булған Зәйтүн «иртәгәләрҙә» лә шул уҡ исем менән йөрөтөлгән. «Шуға күрә был дастанға ла шул исем менән индерелде», тип әйтергә уйлағандыр Өфө вариантын теркәүсе. Тимәк, «Буҙйегет» дастаны, хикәйәт рәүешендә китаптарға теркәлеүҙән тыш, *«иртәгәләр»* формаһында ла йәшәгән. Был иһә — уның бер түгел, әллә нисә вариантта (юҡҡа ғына «иртәгә» һүҙе күплектә ҡулланылмай) осраған замандар булған, тип әйткәнгә бәрәбәр. Ә *иртәгә* йәки *иртәк* халыҡ эпосының йәшәү формаларының береһе буларак, ҡобайыр рәүешендәге теҙмә телмәрҙең сәсмә телмәр менән аралашып килеүенән хасил була. «Буҙйегет» ҡиссаһының телдән таралған варианттарында формаль яҡтан ошо үҙенсәлек һаҡлана. Уларҙағы бөтә шиғри юлдарҙы ҡобайыр ҡалыбына тура килә тип булмай, шулай ҙа саф ҡобайырҙар осраштырғылай. Айырыуса әйтеш рәүешендә башҡарылған түбәндәге ҡобайыр, төрлөсә үҙгәрештәр кисерһә лә, нигеҙҙә, тотороҡло һаҡлана.

Дөйә килеп буҙҙаһа,
Бутаһы аның бар микән?
Бута күҙле Буҙйегетем
Был уйында бар микән?

Ялған туйҙа Сәхипъямалдың шулай тип башлаған һүҙенә бер ир:

Дөйә килеп буҙҙаһа,
Бутаһы уның юҡ сығыр,
Бута күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр, —

тип яуап бирә (Ш. Хәбирова варианты).

Ҡобайыр формаһы айырыуса Өфө вариантында киң ҡулланыла. Быға тиклем уратма йөкмәткеле, йәғни тел аҫтына тел йәшереүгә ҡоролған, теҙемдәр хаҡында һүҙ булғайны инде. Аңа шул теҙемдәр тулыһы менән ҡобайыр жанры талаптарына яуап бирә. Әйткәндәй, ҡобайыр — сәсәндәр жанры. Шуға күрә әле генә телгә алған телмәр формаһында сәсәндең телгә алыныуы ла күп нәмә хаҡында һөйләй булыр. Бына бер миҫал:

Батша мин, тип уйлаһаң,
Искәндәр мән Сөләймән —
Улар ҙа үткән донъянан;
Балам күп тип уйлаһаң,
Йөҙ ҡырҡ бала атаһы
Ғәҙәм дә үткән донъянан.
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Сәсән мин, тип уйлаһаң,
Нисә-нисә сәсәндәр
Һөйләп үткән донъянан...

*(Өфө варианты.)*

Ҡарасәс (Сәхипъямал) Буҙйегете менән ҡауышҡанда, яр-яр, тиеп, яр һалғанда ла, ҡобайыр, әйтеш алымы иғтибарға ташлана:

Терек донъя ярашыр, күп мал менән яр-яр,
Маллыға көн ярашыр, һөйгән яр менән, яр-яр;
Малы юҡтың — йәре юҡ, түшәге юҡ, яр-яр.
Йәре юҡтың — йәне юҡ, түшәге юҡ яр-яр. *(Өфө варианты.)*

Өфө вариантының башланып китеше үк башҡорттоң мәғлүм ҡобайыр менән ауаздаш. Ауаздаш, тимәк, мәғәнәүи яҡтан шул ҡобайырҙы хәтерләтә. Һүҙҙәр теҙеме, фразалар төҙөлөшө һәм үлсәм икенсе, әлбиттә. Был да үҙенә күрә «ижади» алым. Ғәҙәттә, башҡа әҫәрҙән фекер күсергәндә (һәм сәлдергәндә, әлбиттә), авторҙар әле лә шулай итә, урыҫса әйткәндә, перефразировка менән шөғөлләнә, шуны оригиналь әҫәр итеп танытырға тырыша. Асылда хоҡуҡи телгә күсергәндә «ижади» плагиатлыҡ менән шөғөлләнә. Был — хәҙер. Ә элек? Элек тә бындай алым ҡулланылмаған тип кем әйтер? Эпостарҙа, ҡобайырҙарҙа, йырҙарҙа, бәйеттәрҙә һ. б., уларҙың текстарында ғына түгел, көйҙәрендә лә осрай торған уртаҡ урындар ҡайҙан килә? Шунан. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, Өфө варианты шулай башлана:

Һүҙ килде тыңлағанға әйтә торған,
Юҡ сығыр был яланда моңһоҙ туған.
Донъяла әҙәм уғлан ҡунаҡ булған,
Көнөндә бер-бер лафҡа етә торған.

Сағыштырығыҙ, башҡорттоң «Бейек тауҙың үлгәне» ҡобайыры бына нисек башлана:

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт,
Минең әйткән һүҙҙәрем —
Боронғонан аманат.
Итһәгеҙ уға хыянат,
Һеҙгә булыр яманат.[1]

Уның «Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем, Илгә әшкәр итәйем» тип башланған варианты ла бар.

«Ишет быны ҡартыңдан» ҡобайыры иһә «Әйт, тиһәгеҙ» тигәнгә тиклем бындай теҙемдән тора:

Ишет быны ҡартыңдан,
Һүҙ булмаһын артымдан.
Белгәнемде әйтмәһәм,
Йортҡа әшкәр итмәһәм,
Илдең күңеле ҡалыр, тим,
Илдең хәтере ҡалыр, тим...[2]

Дастандың башланышы ла, ҡобайырҙарҙыҡы ла тыңлаусының иғтибарын көйләүгә йүнәлтелгән. Тегендә лә, быларында ла баштан уҡ нәсихәти башланғыс ярылып ята.

Ялған туй мәлендә килеп инеп, Ҡарасәс дә үҙенең ҡарғыш һүҙен ҡобайыр рәүешендә әйтә. Унын ҡобайырының тәүге юлдары мәҡәлдәр комплексынан, әйтемдәрҙән ойошҡан теҙем хасил итә.

Ғаҡылһыҙға һүҙ әйтһәң,
Күкрәгенә ҡунмаç, ти;
Рәхимһеҙгә һүҙ әйтһәң,
Ни әйтһәң дә, булмаç, ти.

Күҙҙәре юҡ хандарҙың
Һуҡыр булыр көн икән,
Ғаҡылы юҡ ҡарттарҙың
Һаңрау булыр көн икән.

*(Өфө варианты.)*

Һыҡтау, аталышынан уҡ аңлашылыуынса, ҡобайырҙан бик йыраҡ торған жанр. Әммә «Буҙйегет» ҡиссаһының Өфө вариантында Ҡарасәс һылыуҙың һыҡтауы формаһы менән генә түгел, йөкмәткеһе менән дә ҡобайырҙы хәтерләтә биреп ҡуя.

Һыҡтау, ғәҙәттә, тере кешеләй күреп, мәрхүмгә мөрәжәғәт итеү рәүешендәге монологтан тора. Бына нисек башлай үҙенең һыҡтауын Ҡарасәс:

[1] БХИ: Эпос. 3-сө кит. — 164-се б.
[2] Шунда уҡ.

Хайран башың, хан башың
Ҡиҫелгәнгә оҡшайҙы,
Баһаһы юҡ кәүҙәнән
Өҙөлгәгә оҡшайҙы.

Кәүҙән ҡанға болғаныл,
Аяҡ-ҡулың солғаныл,
Кәфенең юҡ, гүрең юҡ,
Ерҙә ятыр ирминең?

Йортоңда һин хан инең,
Һәр эшеңдә дан инең.
Дошмандарының ҡулында
Быңдай булыр ирминең?

«Ерҙә ятыр ирминең?», «Дарға аҫылыр ирминең?» , «Быңдай булыр ирминең?» кеүек дүртенсе юлды хасил итеүсе һорау һөйләмдәр «Ерҙә ятмаҫ ир ине», «Дарға аҫылмаҫ ир ине», «Быңдай булмаҫ ир ине» тигәнде раҫлай һәм «Сүкем батыр» ҡобайырындағы «Сүкем батыр ине», «Салауат батыр» тигәндәге «Салауат батыр ир ине, Менгән аты кир ине» тигән юлдарҙы хәтерләтә.[1] Шуға күрә лә был вариантта Буҙйегет тап шундай халыҡ батырҙары юғарылығынан баһалана, тип әйтеп була. Әммә ул батырлыҡтарҙы маҡтауҙы маҡсат итмәгән. Һыҡтау өсөн ул турала әйтеү — иң мөһиме түгел. Киреһенсә, шундай күркәм ирҙең үлеп әрәм булыуы айканлы ҡайғы белдереү, йәш түгә-түгә, зарланыу. Быңдай саҡта, әлбиттә, үлгән кешегә мөнәсәбәт асыҡ әйтелә:

Ҡарағаттай күҙҙәрең,
Ҡыҙыл гөлдәй йөҙҙәрең,
Балдан татлы һүҙҙәрең
Бер күрергә зар булдым.

Ҡиссаның сюжеты талап иткәнсә, Ҡарасәс үҙенең һыҡтауында, һөйгән йәрен юғалтҡас, артабан ни ҡыласағын да әйтеп ҡуя. Уның ни ҡыласағы сюжеттың сиселешендә мәғлүм була. Ә һыҡтауында ҡыҙ ошо аҙымға ни өсөн барырға ҡарар ҡылғанына көнәлек уҡ аңлатма биргәндәй була. Буҙйегете янына көн дә килеп илап йөрөгәнсе, ғүмерҙе бөтмәҫ ҡайғыны кисергәнсе, гүрҙә булһа ла, уның менән ҡауышыуҙы артыҡ күреүен әйтә.

Көн дә килеп илап йөрөгәнсе,
Ҡайғың китмәҫ үлгәнсе,
Был ҡайғыны күргәнсе,
Бергә булһам кәрәкте.

«Буҙйегет» ҡиссаһының Өфө варианты Буҙйегеттең әсәһе әйткән һыҡтау менән тамамлана. Жанр — бер. Уны башҡарыуға сәбәп —

---

[1] БХИ: Эпос. 3-сө кит. — 70-се, 124-се б.

бер. Ҡайғы — бер. Әммә ике һыҡтауҙың йөкмәткеһе ике төрлө. Ҡарасәстең һыҡтауы тик ике йәш йөрәк араһындағы хистәр уртаҡлығынан сыға. Ваҡыт инләнеше йәһәтенән тоҡос. Ҡыҙ егетте етс генә йыл, унда ла төшө аша ғына белә. Ҡыҫҡа ваҡытлы, әммә бәхетле осрашыуҙары, Буҙйегеттең хан ялсылары менән алышы ғына уның хыялдағы булмышын тулыландырырға мөмкинлек бирә. Унан килеп ҡыҙ уға үҙенең генә мөнәсәбәтен белдерә, уны юғалтыуҙы бары үҙенең генә оло ҡайғыһы тип белә.

Әсәнең һыҡтауы, йөкмәткеһе йәһәтенән дә, ваҡыт һәм арауыҡ инләнеше яғынан да, киңерәк. Шуныһын әйтергә кәрәк, дастанда Буҙйегеттең әсәһе ике тапҡыр һыҡтай: улының һәләк булыуын ишеткәндә һәм ҡәбергә зыярат ҡылғанда. Тәүге һыҡтауын:

Бауырымдың парәһе —
Ике күҙем ҡараһы,
Йәнем һөйгән хан балам, ·
Һине ҡайҙан күргәймен? —

тип башлай ҙа әйтмәй-нитмәй алыҫ юлға сыҡҡан өсөн, улына үпкәһен, шул сәбәптән һөймәй ҡалыуына үкенесен, хәҙер кемгә ҡарап һөйөнөргә белмәүен белдерә. Балаһының, исмаһам, икәү булмауына, тоҡомо ҡалмауына үкенә. Әсәһенең тәүге һыҡтауынан ҡиссаның төп тексында телгә алынған мәғлүмәттәрҙе лә белеп була. Буҙйегет «Асыҡҡанға аш биргән, Ғәриптәргә ҡаш биргән, Дуҫты өсөн баш биргән, Яҡшы берлә яманды» таный белгән егет булған. Саф башҡорт һунарсылары һәм эпостарыбыҙ ҡаһармандары Заятүләк, Һәүбән, Ҡуҙыйкүрпәстәр һымаҡ ҡош сөйөп, һунар итергә лә яратҡан икән:

Арғымаҡ мән толпарың,
Ласын менән шоңҡарың,
Ҡарсыға менән тойғоноң,
Эйәһе юҡ булғанда,
Кем тотор һуң, шырағым, —

ти Буҙйегеттең әсәһе.

Үҙенең һыҡтауында әсә Буҙйегеттең атаһының хәлен дә, улының дошмандарын да телгә ала: тәүгеһе әсә кеүек үк ауыр ҡайғы кисерһә («Ҡарылыҡҡа әкәңдең иңрәр көнө булды инде», йәғни атаңдың ҡартайған көнөнә етерлек ҡайғыһы булды инде), улын үлтергәс, дошмандары тынысланғандыр инде тип фараз итә. «Шырағымды (сырағымды. — Ә. С.) һүндерҙең, дошманыңды тындырҙың», — ти үлгән Буҙйегеткә.

Хәсрәтле әсә лә һыҡтаныуының ахырында ниндәй ҡарар ҡылғанын белдерә:

Йортом, инде атлайым,
Янғыҙыма (улыма. — Ә. С.) барайым.
Етем булмаҫ янғыҙым,
Мулаһын (ҡәберен. — Ә. С.) бер күрәйем.

Буҙйегеттең ҡәберенә килгәс иһә әсәнең һыҡтауы бөтөнләй икенсе мотивҡа ҡоролғандай була. Һүҙҙе ул ун ай (Б. Бикишева варианттынса, туғыҙ ай) күтәреп, имсәген имеҙеп, татлы ризыҡ ашатып, һөйөп үстереүенән башлай ҙа, шул балаһының үҙенә мөрәжәғәт итеп, зарын түгә:

Шәшәң (әсәң. — Ә. С.) тора ҡаршында,
Зар илайҙыр башында.
Күрмәҫ ергә китеп сән,
Торгол, балам, торһана!

Хәсрәтле әсәнең хәле ул килтергән сағыштырыу ҙа, ситләтеп, әммә аныҡ әйтеп бирелгән.

Бутаһы үлгән төйәләй,
Буҙҙай килдем, йән балам,
Ҡырҡ көнлөк киң юлда
Эҙләй килдем, йән балам...

Ҡарасәс һылыуҙың атаһы, ни тиклем ҡыҙыу ҡанлы, яуыз холоҡло, аяуһыҙ ҡаты ҡуллы булмаһын, уға ла бала һөйөү, бала ҡыуандырыу, уға ҡарап, һөйөнөү, йыуаныу тойғоһо хас. Һәр бер ата кеүек, ул да балаһын бәхетле итергә теләй. Әммә шул бәхет тигәнде ҡыҙы бер төрлө, ул икенсе төрлө аңлай. Ҡыҙы йән һөйгәне менән ҡауышыуҙа күрә бәхетте, ә хан — уны үҙе кеүек хан затлы кеше менән ҡауыштырыуҙа. Үҙенең шул үлсәменән сығып, Зәйтүн хан йөҙөндә кейәүлеккә кандидат та әҙерләп ҡуйған. Шуға күрә ниндәйҙер бер билдәһеҙ егет менән ҡыҙының ҡауышыуы уның енен ҡыҙҙыра: ул нисек була инде ул, йәнәһе. Ошо урында, таяҡты тотҡан ерҙән һындырғансы, кеше һүҙе — кеше һүҙе инде ул, кем икән ул егет, тип белешәһе ине лә Буҙйегет хаҡында. Булмай. Шул арҡала ҡайта-ҡайта орош һалып, менәрләгән яугирының һәләк булыуына сәбәпсе булған. Буҙйегеттең атаһы алдында Алла ҡушҡан тәҡдиргә һылтанып, гәфү үтенерлек кимәлгә төшһә лә, эш уҙған була шул: Буҙйегеттең дә башына ул етә. Ошо урында Буҙйегеттең ҡылдан үрелгән пәрҙәһен тағы иҫкә төшөрөргә тура килә. Хан икеләтә һуҡыр булып сыға. Берҙән, ҡыҙының кем менән осрашыуы уға билдәһеҙ булһа, икенсенән, Буҙйегеттең пәрҙә кейеүе, икенсе төрлө әйткәндә, ни өсөн шулай йөрөүе менән ҡыҙыҡһынмауы, өсөн был егетте икеләтә билдәһеҙ итә. Бына шул хан, үҙенең һүҙен һүҙ итәм тигәнсә, әллә нисәмә ҡорбанға, шул иҫәптән ҡыҙының һәләкәтенә лә сәбәпсе булған хан, нескә хискә лә эйә. Буҙйегетте язалатҡас, үпкәһен әйткән Ҡарасәсте хәс тә сабыйҙы йыуатҡандай йыуата:

Илама, ҡыҙым, илама,
Ил эсендә яҡшы күп,
Илдән илгә йөрөрмөн,
Затлы ир-ат күрермен,
Илдә яҡшы табылһа,
Һине уға бирермен.

Башымдағы тажымды,
Аҫтымдағы тағымды,
Ҡыҙым саңа бирермен...

Бына шулай яңғыҙ хан бала йыуатыу фольклоры алымын еткән ҡыҙын йыуатыуға ҡулайлаштыра. Хан йыуатыуы — ханса инде. Етмәһә, ҡыҙы тәтәйҙәр, ҡуян-аттар, башҡаһын вәғәҙә итер йәштән үткән. Әммә атаһы вәғәҙә иткән алтын эсле һарай ҙа, таж да, тәхет тә ҡыҙға хәжәт түгел. Шулай итеп, бала йыуатыу һамағының стилләштерелгән был өлгөһө йәнә бер мәртәбә ҡыҙ менән атаһының бәхет хаҡындағы фекерҙәренең килешмәҫлек рәүештә ҡапма-ҡаршылыҡта булыуы асыла.

Башҡорт фольклор ғилемендә бәхилләшеү һүҙе айырым жанр итеп күрһәтелмәгән. Әммә билдәле бер ҡалыпҡа ҡоролоп, билдәле бер мәлдә, кеше ғүмеренең ахырында ғына әйтелә торған һүҙ ул. «Буҙйегет» дастанында ла бәхилләшеү өлгөләре бар. Ҡарасәс үҙенең ҡырҡ ҡыҙы менән генә бәхилләшә:

Аман инде, хуш булың,
Беҙгә үтер көн булды.
Йәр өсөн үлер көн булды,
Һеҙгә ҡалыр көн булды.

Беҙҙән рәнйеү алғандар,
Беҙҙән күңел ҡалғандар.
Уйығыҙға алғайһыҙ,
Риза булып, дуҫтарым!

Боронғолай булығыҙ,
Һөйгән йәргә барығыҙ,
Уйнап-көлөп йөрөгөҙ,
Аман булып, дуҫтарым.

Бәхилләшеү жанры талап иткәнсә, бында тәнҡит тә, шелтә лә әйтелмәй. Тере ҡалыусыларға изге теләктәр генә теләнә, яҙыҡлыҡтар өсөн тәүбә килтерелә. Ҡарасәс жанрҙың ошо талаптарын ерен еткереп әйтә. Ә ни өсөн ата-әсәһе менән түгел, ҡырҡ ҡыҙы менән генә бәхилләшә тигәндә, сөнки ошо ҡыланышы ярҙамында уҡ Буҙйегетенә барыуына уларҙың арҡыры төшмәүенә ризалығы булмауын, уның үлеүенә сәбәпсе булғандары өсөн бәхиллектән дә яҙҙырыуын әйтергә теләгән.

Буҙйегет тә йән дуҫы менән һуңғы осрашыуында ата-әсәһенә сәләм күндерергә аманат әйтеү менән бер рәттән, дөрөҫөрәге, шуның һуңында үҙенән рәнйеү алғандар, күңеле ҡалған кешеләрҙең риза булып ҡалыуын теләй. Шуның менән ул да үҙен был донъянан рухи пакланып китеүен ҡайғыртыусы кеше итеп күрһәтә.

Шулай итеп, «Буҙйегет» дастанында исламғаса булған тәртип, йолалар, орнаменталь хәлдәге мифологик фекерләү башланғыстары, ислам тәғлимәте иләге аша үткәрелеп, уға яраҡлаштырылып, дөйөм сюжеттың үҫешенә үҙ өлөшөн индерә. Саф исламса башлан-

ыстар иһә күпселектә орнаменталь вазифа үтәүҙе үтеп, сюжет үстерелешендә хәл иткес роль уйнай. Шуның менән бергә байтаҡ архаик күренештәр үҙҙәренең халыҡсанлығын һаҡлап ҡалған. Сөнки һәм шуның өсөн дә улар башҡорттарҙың фекерләүенә, донъяға ҡарашына хуш килгән. Һәр хәлдә, ят кеүек ҡабул ителмәй. Шул иһә яҙма эпос өлгөһө булған «Буҙйегет» дастанының башҡорттар араһында ла телдән таралып, яңы милли ерлектә яңысараҡ фольклорлашыуына сәбәп булғандыр.

### 3. «Таһир менән Зөһрә»дастаны һәм «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәге араһындағы алыш-биреш: оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡтар

Әгәр Ғәйниямал инәй билдәләгән оҡшашлыҡтарҙы ул әйткән эҙмә-эҙлелектә ҡараһаҡ, шуны асыҡларға булыр ине. Мәғлүм булыуынса, «Йософ ҡиссаһы»ның (йәки «Йософ менән Зөләйха» дастанының) беҙгә таныш вариант, версияларында ла, ҡауышҡанға тиклем, Йософҡа ла, Зөләйхаға ла баштарынан күп һынауҙар кисерергә тура килә. Ҡала (йәки ил) хакимының ҡатыны булған Зөләйха һымаҡ уҡ, «Таһир менән Зөһрә» дастанының Хажиева Миңнеямал вариантында, егетте башлап ҡыҙ үҙе ярата. «Ул мөхәббәт шул ҡәҙәре көслө була, бер төндә Зөһрә, һис бер форсат тапмай.., Таһирҙы ауыҙынан үбеп ала». Таһирҙың: «Эй, оятһыҙ ҡыҙ, мин бит һинең ҡәрҙәшең! Ни эшләп улай ҡылыҡ итәһең?!», — тип Зөһрәнең хистәрен тәүҙә уртаҡлашмауы, уларҙы инҡар итеүе Зөләйха тәҡдим иткән мөхәббәтенән башта Йософтоң баш тартыуын хәтерләтә. (Бында «инҡар итеү», «баш тартыу»ҙың сәбәбен аңлатып тормайбыҙ). Ахырҙа, Йософ Зөләйханың хисен ҡабул иткән кеүек, көндәр үтә килә, Таһирҙа ла Зөһрәгә мөхәббәт уты тоҡана. Хажиева Миңнеямал версияһы тулыһынса тиерлек дастандың төрөк версияһын ҡабатлай.[1] Ихтимал, информатор ҡасандыр яҙма аша тап шул төрөк сыганағы менән таныш булғандыр. Ҡайһы бер урындары төшөп ҡалып, осо-оска ялғанып ҡырамаған был тексты яҙып алыуусы, Р. Ә. Солтангәрәеваның иҫкәртеүенсә, Хажиева, «Таһир менән Зөһрә»не яҙма буйынса һөйләгән.

Мәғлүм булыуынса, Зөләйха, Йософто үҙенә ҡаратыу өсөн, ярҙам һорап, Хоҙай Тәгәләгә ялбара (1975 йылда Мәләүез районы Ерек ауылы Насирова Фатиманан (1906) яҙып алынған вариант), Зөһрә лә ошо алымга мөрәжәғәт итә. Икеһе лә ыңғай һөҙөмтәгә ирешә. Әммә ҡасан? Бына шул ваҡыт тигән нәмә эстетик категория кимәленә күтәрелеп, сюжеттың сиселешендә хәл иткес роль уйнай ҙа инде. «Таһир менән Зөһрә» дастанында героиня һөйгәне менән тиҙ аңлаша. Ана шул ваҡыт һуҙымының ҡыҫҡалығы был ике йәш йөрәктең драматик һынауҙарға дусар ителеүенә, ахырҙа уларҙың

---

[1] Тахир и Зухра. //Эмрах и Сельви и другие турецкие народные повести. /Сост., предисл. и примеч. Х. Г. Короглы. — М.: Наука, 1979. — С. 208—258.

трагедияһына сәбәпсе була. Ә «Йософ менән Зөләйха»ла? Унда Зөләйха бары финалда ғына Йософ менән аңлашыуға ирешә. Был уға бөтә сабырлығы өсөн Хаҡ тәғәләнән килгән бүләк була. Тимәк, ике сюжеттағы оҡшашлыҡ, Зөһрәнең Таһир менән, Зөләйханың Йософ менән мөхәббәттә аңлашыуында, шул һөҙөмтәгә килтергән алым кимәлендә генә күҙәтелә һәм... шуның менән тамамлана ла ҡуя. Ә айырма иһә — Ер менән Күк араһы тиклем. Зөләйха йән һөйгәне менән бары финалда ғына аңлаша, Зөһрә иһә сюжет үҫешенең иң ҡыҙған мәлендә үк өлгәшә бындай һөҙөмтәгә. Бындай бәхеткә, Зөләйха, күп һынауҙар аша үткәс кенә, ирешә. Зөһрә һуң? Ул, киреһенсә — ауыр һынауҙар алдында торғанда ғына. Ә Артабан? Артабан иһә мөхәббәт коллизияһы шундай юҫыҡҡа күсерелә. Йософтоң йөрәген яулауы була — Зөләйха бөтә михнәттән ҡотола, хатта бәлтерәгән әбей хәленән илаһи ҡөҙрәт ярҙамында Йософ менән тәү осрашҡандағы сибәрлеге кире ҡайта. Шул уҡ ҡөҙрәт ярҙамында ҡыҙ хәлендә ҡала. Йәшлектәге хисен гүмер буйы түкмәй-сәсмәй һаҡлауы әҫәрҙә шул саҡтағы физиологик булмышына кире ҡайтыу рәүешендә генә шулай образлаштырыла.

Инде Зөһрәнең хәленә килһәк, ни күрәбеҙ? Уның өсөн мөхәббәт коллизияһының сиселеше ҡатмарлаша. Таһир менән икәү-ара аңлашыуы уларҙы йәмғиәт тәртибе һәм атай хоҡуғы тигән йола ҡанунынәге менән аңлашылмаусылыҡҡа килтерә. Йәғни, Зөләйханан айырмалы рәүештә, Зөһрәнең һөйгән егетенең йөрәген яулауы, уны, киреһенсә, ауыр һынауҙарға дусар итә. Тегендә мөхәббәт-михнәттән ҡотолоуға, бында иһә — михнәткә юлығыуға сәбәпсе була. Үҙенең социаль статусын (йә атаһыҙ үҫеүен, йә вәзир улы ғына булыуын) иҫәпкә алмайынса, хан тиклем хан ҡыҙына үрелеүе өсөн, һандыҡҡа һалып, Таһирҙы һыуға ағыҙалар. Был иһә михнәттең башы ғына, Зөһрә менән Таһир мөхәббәтен кисергән тәүге һынау ғына була. Икенсеһе лә көттөрмәй. Шат һыуынан һандыҡты тотоп алған ҡыҙҙар, ундағы Таһирҙы күреп шатланыша. Эш шуға тиклем барып етә. Таһир уларҙың береһен алырға мәжбүр ителә. Был момент, сүп өҫтөнә сүмәлә, тигәндәй, Зөһрә өсөн тағы бер һынау була. Тик ул — инде ҡәҙимге һынау ғына түгел, иң-иң яҙаға тиң, ауыр һынау. Бының шулай икәне шунда күренә: дастандың айырым вариант, версияларында әйтелеүенсә, Таһирының һыуға ағыҙылыуын хәбәр итеп, тимәк, уны ҡотҡарыу сараһын күреүҙәрен үтенеп, Зөһрә икенсе батшалыҡ батшаһының ҡыҙҙарына хат яҙа. Мәсетле районы Һөләймән ауылынан 82 йәшлек Бәҙретдинова Мәхмүҙәнән Тәзкирә Хажиева яҙып алған версия буйынса, Зөһрә былай тип яҙа була: «Минең яратҡан ғына егетемде Шат һыуына һалып ағыҙҙылар». Әммә ҡыҙҙарҙа, кеше ҡайғыһы түгел, икенсе уй. Юҡҡа улар:

Килеп ҡыҙлар үҫәлек,
Шат һыуына төшәлек,
Дәртле Таһир киләләр,
Дарманына ирешәләр, —

тип йырламаҫ ине. Ә Хажиева Минлеямал варианты буйынса, Зөһрә: «Минең Таһиржәнде һандыҡҡа һалып ебәрҙеләр. Ҙур һыуҙан самалап (тотоп) алығыҙ», — тип үтенесен асыҡ яҙа солтан ҡыҙҙарына. Уртансы ҡыҙ тотоп алып, һандыҡты асҡас, «Таһирҙың гүзәллегенә иҫтәре киткән. Хәҙер быны Зөһрә янына ебәрмәҫкә булғандар». Йәғни, был вариант буйынса, солтан ҡыҙҙарының кеше йәрен һалдырып алыуҙары тура әйтелә.

Таһиржанының ят ҡуйынына инеүен Зөһрәнең ецел кисермәүен асыр өсөн, дастандың төрлө версия һәм варианттарында башҡа алымдар ҙа ҡулланыла. 1984 йылда Туймазы районы Собханғол (Смак) ауылында 1918 йылғы Ғүмәрова Ғәзизә Хәлфетдин ҡыҙынан Розалиә Солтангәрәева яҙып алған версия буйынса, мәҫәлән, «Таһир фәлән-фәлән батшалыҡта икән» тигән хәбәр килеп ишетелеүе була, «Зөһрә үҙенең Ҡараҡол тигән хеҙмәтсеһен атаһының Елъестмәҫ атына ултыртып» ебәреп, уны үҙ янына алдырта һала.

Зөһрә өсөн өсөнсө һынау, һынауҙың да һынауы — Таһиры илгә ҡайтып инеп, инде ҡауыштыҡ тигәндә генә, уны мәңгелеккә юғалтыуы була.

Тәүрат, Ҡөрьән, дастан геройҙары булған Зөләйха менән Йософтоң яҙмышы, әйтелгәненсә, Абыҙгилдина Ғәйниямал инәй уйлағандан бөтөнләй башҡаса хәл ителә: улар, үҙ әжәлдәре еткәнсе, балағағалы булып, бәхет эсендә йәшәй. Һуңғы осрашыуҙары быны шулай ғүмерлеккә бергә булыу өсөн осрашыу була.

Сифат яғынан төрлө кимәлдә һәм функциональ яҡтан төрлө һөҙөмтәле булыуҙарына ҡарамаҫтан, Зөләйха менән Зөһрә араһындағы тағы бер оҡшашлыҡҡа иғтибар иттерге килә. Ә ул шунан ғибәрәт. Үҙе башлап күҙ атҡан, күңел түренән урын тапҡан егетте ҡаратыу, унда мөхәббәт уты ҡабындырыу өсөн, Зөһрә лә, Зөләйха ла илаһи көстөң ҡөҙрәтенә таяна: Аллаһы Тәғәлә. ҡартайып, әбей булған Зөләйхаға, билдәләп үтелгәненсә, Йософҡа ғашиҡ булған сағында булмышын йөҙ проценты менән кире ҡайтара. Уның яңынан ҡыҙ ителеүен дә үҙ эсенә ала. Һәм Йософта уға ҡарата һүнмәҫ, һүрелмәҫ мөхәббәт уяна ла ҡуя.

Зөләйха һымаҡ уҡ, башлап мөхәббәт үҙе белдергәндә, егет тарафынан шул ҡайнар хисе кире ҡағылғас, Зөһрә: «Минең мөхәббәтемде Таһирға ла бир!» — тип Аллаға ялбара. Ялбара-ялбара, шундай теләк теләй:

«Мәрүәрҙиҡар рәхимә,*
Ҡөҙрәтең киң, Хоҙайа,
Мин — бисара ҡолоңа
Рәхим ҡылһаң, Хоҙайа!
Таһиржаным хәсрәтен,
Бар ҡилыпсаң, Хоҙайа!
Асыҡ йөҙөм күрмәгә
Зар ҡилыпсаң, Хоҙайа!
Ғишыҡ утым — Таһиржан,
Күрһәң икән, Хоҙайа!»

Абыҙгилдина Ғәйниямалдың Таһир менән Зөһрә яҙмышын Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу яҙмышына оҡшатыуына килһәк, шуны билдәләргә булыр ине: был оҡшашлыҡ иң әүәл сюжет һәм мотивтар кимәлендә күҙәтелә. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың ата-әсәһе кеүек үк,[1] Таһир менән Зөһрәнең ата-әсәһе башта бала бәхете күреүҙән мәхрүм була. «Бер батша менән вәзир булған. Икеһенең дә бик оҙаҡ балалары булмаған», — тиелә «Таһир менән Зөһрә» дастанының Хажиева Миңнеямал вариантында. Теләкәева Рәхилә вариантында ла ошо уҡ мәғлүмәт ҡабатлана: «Элекке заманда бер хан йәшәгән. Уның бер ҙә балаһы булмай. Бының бер ышаныслы вәзире бар икән. Уныһының да балаһы юҡ икән».

Бала һөйөүҙән мәхрүм ике ирҙең атай булыу ҡыуанысын күреү бәхетенә ирешәсәктәре ике әҫәрҙең дә варианттарында күрәҙәлек, ырымдар аша көнәлгәре аңғартыла (прогнозлана). «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосынан Селәүсинова варианты буйынса, Күсейхан менән Күсмәйхандың балалары тыуыры төш юрау рәүешендә алдан аңғартыла: хандарҙың тәүгеһе — аҡ күгәрсен, икенсеһе күк күгәрсен күреүен төш юраусы, береһенең — улы, икенсеһенең ҡыҙы тыуасаҡ, тип аңлата. Таһир менән Зөһрәнең тыуыуы — Теләкәева Рәхилә вариантында үткенсе теләксенең теләге ҡабул булыуы, тип аңлатыла.

Көтөп алынған балаларҙың донъяға яралырын йәнлек ярҙамында әшкәртеү алымы тәңгәлендә лә мәғәнәүи тап килеш күҙәтелә һүҙ барған ике әҫәрҙә. 1960 йылда Ырымбур өлкәһендәге Ҡотләмбәт ауылында 67 йәшлек Әбүбәкирова Нәзифәнән, шунда уҡ Ҡайыпҡол ауылында 68 йәшлек Әбдрәзәков Миңлебулаттан Ниғмәт Шоҡаров яҙып алған вариант буйынса, хандар һунарҙа саҡта йортта ҡалған бисәләренең бала табыуы ике дуҫҡа ҡуян осрауы аша ла әшкәртелә.[2] «Таһир менән Зөһрә»нең Булатов Зәкәриә һөйләгән вариантында атай булғылары килгән ике һунарсы алдында пәйҙә булған ҡуян быуаҙ була. Һунарсылап йөрөүсе был ике хан үҙ араһы, «Һин ат та мин ат», тип торғансы, ҡуян күҙҙән дә юғалған, ти. Шунан ни Үләрхан: «Ярай, атмағанбыҙ, хәйерле булһын!» — тигән.

Үҙҙәре йортта юҡта, ҡатындары бала табыуын символик мәғәнәгә эйә булған алым менән әшкәртеү тәңгәлендә лә уртаҡлыҡ күҙәтелә. 1962 йылда Арғаяш районының Иҫке Субыл ауылында 72 йәшлек Ғәлимова Ғәйшәнән һәм шунда уҡ Байғаҙы тигән ауылда 68 йәшлек Шиҙапов Шәрәфетдиндән Ниғмәт Шоңкаров яҙып алған варианттарҙа һунарҙан ҡайтыусы ике дуҫ, үҙҙәре юҡта, йорттарында ҡыҙ йә ир бала тыуыуын күренер урынға орсоҡ йә уҡ ҡаҙап ҡуйылыуынан белә».[3] «Таһир менән Зөһрә» эпосының Иш-

---

[1] 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеевка р-ны Мерәҫ ауылында 65 йәшлек Силәүсинованан — Кирәй Мәргән; 1961 йылда Һамар өлкәһе Алексеев р-ны Моратша ауылында 35 йәшлек Фазлиәхмәтов Ҡорманғәленән Мөхтәр Сәғитов яҙып алған варианттар шуға миҫал. Ҡар.: ҒА, ф. 3. оп 21/3. — 135—141-се, оп. 21/6. — 141—145-се б.

[2] ҒА, ф. 3: оп. 21/3. — 146-сы б., 150-се б.

[3] ҒА, ф. 3: оп. 21/8. — 21-се, 34-се б.

бирҙина Нәсиха яҙҙырған варианты ошо мотивты үҙенсә ҡабатлай. Ике күрше, һунарға киткәндәрендә, ҡатындарына: «Әгәр малай тыуһа, ҡыйыҡ башына — ян менән уҡ, ҡыҙ булһа — орсоҡ сәнсегеҙ», — тиҙәр. Һәм, йорттарына ҡайтып инмәҫ элек үк, шул символдарға ҡарап, тәүгеһенең — ҡыҙы, икенсеһенең улы донъяға килеүен беләләр. Орсоҡ менән уҡ образы ике осраҡта ла ҡәҙимге эпостарға (мәҫәлән, ҡырғыҙҙың «Манас»ында һәм «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының Т. С. Беляев версияһында) хас бер персонажды, шартлы рәүештә «Бала тыуыр саҡта ситкә киткән атайҙан һөйөнсө алыу» тип аталмалы тотош бер тематик мотивты һәм шуның ғәмәлләшеүе рәүешендәге һүрәтләнә торған эпизодты алмаштыра. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосында балалары тыумаҫ элек үк, аталары ҡоҙалашырға һүҙ ҡуйышып ҡуя. Таһир менән Зөһрәнең аталары ла шулай итә. Әле тыуып та өлгөрмәгән, улай ғына ла түгел, тыуымға ла килмәгән балаларҙың яҙмышын бәйләү хаҡында вәғәҙәләшеү — үҙе ырым. Атай булыу бәхетен татығылары килгән ике уҙаман шуның менән көтөп алынған балаларының имен-аман тыуырын гарантиялаған, өмөткә өмөт ялғаған. Хажиева Миңлеямал вариантының башында уҡ: «Икеһенең дә (батшаның да, вәзирҙең дә. — Ә. С.) бик оҙаҡ балалары булмаған, икеһе лә ырым яратҡан. Шунан бер саҡ юлда һүҙ ҡуйышҡандар: батшаның ҡыҙы булһа — Зөһрә тип ҡушып, вәзирҙең малайы булһа — Таһир тип ҡушып, икеһен ҡауыштырырға», — тип, бушҡа ғына әйтелмәгәндер.

Мәғлүмдер ки, башҡорттоң туй йолаһы, башҡа халыҡтарҙыҡы менән сағыштырғанда, иң ҡатмарлыларынан иҫәпләнә. Ике ырыуҙа (ике нәҫелдә) бер мәлдә тыуған ир бала менән ҡыҙ баланың ата-әсәһе, дуҫлыҡтарын, ҡан-ҡәрҙәшлек еҫтәре менән ныгытырға теләгән осраҡта, сабыйҙарына ҡырҡ көн тулғас, исем ҡушыу йолаһын атҡарғанда уҡ, уларҙы йәрәштерер булған: ир баланан ҡыҙ баланың ҡолағын «тешләттергәндәр», киң бишеккә икеһен бергә йәнәш һалып, теләктәр әйткәндәр, туҫтаҡ күтәреп, ҡымыҙ эскәндәр.[1]

Теше сыҡмаған сүрәттә лә, ҡыҙ баланың ҡолағын ир баланан «тешләтеү» — әлбиттә, ысын тешләүҙе имитациялау ғына. Әммә йоланың атҡарылышы күп осраҡта тап ана шул имитацияны ысынға алыуға нигеҙләнә. Шуға күрә лә «ҡолаҡ тешләтеү» — ҡолаҡҡа инәү һалыу, ҡыҙҙы инселәү менән бер булған. Ындай инселәү йолаһы киләсәктә башҡа ир заттарының был ҡыҙға йоғоноуын иҫкәртергә тейеш сара иҫәпләнгән. Бынан тыш, төрлө демонологик ҡара көстәрҙән ҡурсалау (обереҙ) хеҙмәтен дә үтәгән булһа кәрәк. Ҡуҙыйкүрпәстән Маянһылыуҙы инселәткән кеүек, ошо уҡ йоланы, йәғни бишек туйы йолаһын атҡарып, Таһир менән Зөһрәне лә йәрәштерәләр. Усманова Хәнифә вариантында әйтелеүенсә, сабый-

---

[1] Буранғолов М. Сәсән аманаты: Халыҡ ижады һәм ижадсылар тураһында, туй йолалары, боронғо йырҙар һәм легендалар, ҡобайырҙар /Төҙ., баш һүҙ авт., яуаплы мөхәрр. Б. С. Байымов. — Өфө: Китап, 1995. — 217—219-сы б.

ҙарҙын аталары туҫтаҡ эсешәләр. Ике ҡоҙаның бер туҫтаҡтан аҡ эсеүе — икеһенең дә уртаҡ ниәттә булыуын аңлатҡан. «Зөлхизә» риүәйәтендәге Ҡушмөхәмәт, ошондай уҡ йоланы атҡарып, ҡоҙалашырға һүҙ биреп тә, егеттең атаһы үлгәс: «Атайың үлде — уртаҡ айырылды»,[1] — тип, бушҡа ғына әйтмәйҙер. Аҡ ризыҡты (ҡымыҙҙы) уртаҡлашыу ҡауышыусы балаларға ырыҫ, аҡ киләсәк теләүҙе лә, тимәк ҡоҙалашҡан ике яҡҡа ла уртаҡ бәхет, тиң бәхет көҫәүҙе лә аңлатҡан. *Төшөнгәнһегеҙҙер, бөтәһе лә, ерепә еткерелеп, башҡортса* атҡарылған бишек туйы.

Ошо ваҡиғаны мәғлүмәт йәһәтенән хәтергә бикләү менән генә сикләнмәй Таһир менән Зөһрәнең ата-әсәһе, яҙма менән дә нығытып ҡуя. Таһир менән Зөһрәнең йәрәштерелеүе, йәғни бишек туйы атҡарылыуы хаҡында, Булатов Зәкәриә варианты буйынса, «Ҡөрьән» биттәренең ситенә, Усманова Хәнифәнекендә «аталарының һайыҫҡан тиреһенән(?) тегелгән тундарының яғаһына яҙып ҡуйғандар». Ихтимал, яҙыу мәҙәниәтен үҙләштергәс, ысынлап та, бишек туйы атҡарылыуын шулай документлаштырыу ихтыяжы тыуғандыр. Яңы дәүерҙә никахтың ЗАГС-та рәсми рәүештә теркәү ҙә, ҡолаҡ тешләтеү йолаһын фотоға төшөрөп алыу осраҡтары ла шуны ҡеүәтләй. Беҙҙең өсөн айырыуса һуңғыһы мөһим. Сөнки донъя хәлен белеп булмай бит: ҡолаҡ тешләтеп тороп йәрәштерелгән балалар ир еткәнсе, кем бар ҙа, кем юҡ. Ана бит, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосында әйтелеүенсә, малайҙың атаһы иртә гүр эйәһе булыу сәбәпле, ҡыҙҙың ата-әсәһе, атаһыҙ ир еткән егет менән туғанлашыуҙы үҙҙәре өсөн хилаф эш күреп, ситкә күсенеп китеп, эҙ йәшерә.

«Таһир менән Зөһрә» дастанының геройы ла атанан иртә етем ҡала. Маянһылыуҙың атаһы кеүек үк, Зөһрәнең атаһы ла баштағы килешеүҙе боҙа: бишек туйы уҙғарып ҡыҙының ҡолағын тешләтелеүен тиҙ «онота». Булатов Зәкәриә, Усманова Хәнифә варианттарындағы кеүек, был йоланың, изге урынға яҙылып документлаштырылыуы менән дә иҫәпләшмәй.

Тап бына шул өс мотив — балалар тыумаҫ элек үк, уларҙы йәрәштерергә һүҙ ҡуйышыу, бишек туйы уҙғарыу һәм ҡыҙ атаһының килешеүҙе боҙоуы сюжеттың артабанғы үҫешен тәьмин итә лә инде. Ҡарамаҡҡа, был өс мотив үҙ-ара ваҡыт һәм логик эҙмә-эҙлелектә генә түгел, сәбәп-һөҙөмтә бәйләнеше ярҙамында бер-береһенә тағылышып килә. Әммә, асылында иһә, улай уҡ түгел. Дөрөҫ, тәүге икәүһендә, ысынлап та, әле әйтелгән эҙмә-эҙлелек ҡағиҙәһе еренә еткерелеп бойомға аша. Ә һуңғыһына — уныһы, тегеләренә, дөрөҫөрәге, икенсеһенә — сәбәп-һөҙөмтә бәйләнешендә түгел, ә һылтау ярҙамында ғына тағыла: атаһыҙ егеткә, йәнәһе, ҡыҙ биреү яҙыҡ. Быныһы һылтауҙың «күҙгә күренеп торған» өлөшө генә. Бынан тыш күҙгә күренмәгән өлөшө лә бар. Дөрөҫ, ике эпоста ла был хаҡта бер һүҙ ҙә, хатта ым-ишара ла юҡ. Әммә халҡыбыҙҙың туй

---

[1] Башҡорт халыҡ ижады: 2-се том. Риүәйәттәр, легендалар /Төҙ., инеш мәҡ., һәм аңлатмалар авт. Ф. А. Надершина: Яуаплы мөхәрр. Кирәй Мәргән, Ә. М. Сөләймәнов. — Өфө: Китап, 1996. — 302-се б.

полаһын белгән кешенең күҙенә һылтауҙың ана шул күҙгә күренмәгән өлөшө лә «эләгә». Хикмәт шунда. Беренсенән, һәр кемгә лә бишек туйы, унан һуң малай — ат менерлек (йәгни ат тәрбиәләп, ат менән үҙаллы эш итерлек) йәшкә, ҡыҙ көйәнтә күтәрерлек (йәгни һыу ташырлыҡ, ул-был йорт эштәрен үҙ аллы башҡарырлыҡ) йәшкә еткәс, үткәрелеүсән «Һырға туй»ҙы атҡарыу бер кемгә лә мәжбүри һәм фарыз түгел. Шулай уҡ шундай туй үткәндәрҙең аҙаҡ, бәлиғ булғас, *никах* туйы атҡарып, ҡауышыуҙары ла фарыз түгел. Сөнки, үҫә килә, йәштәрҙең кемененңдер ауырыуға һабышыуы йә холоҡ-фигеле — икенсеһенә оҡшамауы ихтимал. Әле һүҙ барған ике эпоста ла ҡыҙҙың атаһы шул фарыз түгел мөмкинлекте лә файҙалана булыр.

Тимәк, ике эпоста ла ҡыҙҙың атаһы, «бер һылтауҙан — ике һылтау» принцибына таяна. Ана шул бер һылтауға икенсеһе ҡушылыуы уға егет менән араны алыҫлаштырыуға килтерә. Дөрөҫ, Маянһылыуҙың ҡасып-боҫоп ҡына эҙ юғалтырға маташҡан атаһынан айырмалы рәүештә, Зөһрәнең атаһы ҡайҙалыр тайыу хаҡында уйлап та бирмәй, үҙ биләмәһендә ҡала. Әммә, ике осраҡта ла араулыҡ һәм ваҡыт төшөнсәләренә ҙур өмөт баглана: йәнәһе, арала алыҫ юлдар йәнәһе, егет тә онотор ҡыҙҙы. Хикмәт шунда: әгәр Маянһылыуҙың атаһы Ҡуҙыйкүрпәс менән араһы алыҫлашыуын пространство-араулыҡ менән һыҙыҡ өҫтөнә алыу маҡсатында, унан үҙе алыҫлашһа, Зөһрәнең атаһы, Таһир менән араһын алыҫлаштырыу өсөн, егетте үҙенән йыраҡайта: әйтеп үтелгәнсә, сей тирегә урап, һандыҡҡа һалып, Шат һыуына ағыҙа.

Тимәк, Зөһрәнең атаһынын Таһирҙы ағыҙып ебәреүе, Маянһылыуҙың атаһының күсеп китеүе, ваҡиғаларҙың тасуирланышы, унда ҡатнашыусыларҙың төрлөлөгө, шул ситуацияларҙың йөкмәткеһе йәһәтенән бер-береһенән нығ айырылһалар ҙа, сюжет үҫешендәге мәғәнәүи функциялары йәһәтенән оҡшаша. Мәғәнәүи яғы шул: әҫәрҙең экспозицияһы өмөтләндергәненсә, асылында, ҡайныкейәү мөнәсәбәтенә иңергә тейеш кешеләрҙең араһы күсмә мәғәнәлә лә, тура мәғәнәлә лә алыҫлаша. Функциональ яғы шул: ике эпоста ла ҡыҙ атаһының «бер һылтауҙан ике һылтау» принцибына таянып эш итеүе һөҙөмтәһендә, элекке дуҫының улы менән ара алыҫлаштырыуы сюжеттың, артабан экспозиция «вәғәҙә иткән» (прогнозлаған) һыҙыҡтан тайпылып, көтөлмәгән бөгөлөштәр, киҫкен боролоштар яһай-яһай, йылдам үҫеп китеүенә стимул тыуҙыра. Был да ике эпосты бер-береһенә яҡынайта һәм хатта оҡшаш итә.

Һүҙ барған ике эпоста бер-береһенә яҡын һәм оҡшаш итеүгә шул да сәбәп: уларҙың икеһенең дә финалы бер төрлө. Ҡуҙыйкүрпәс үлтерелгәс — Маянһылыу ҙа, Таһир үлтерелгәс — Зөһрә лә үҙ-үҙенә ҡул һала. Икеһе лә шуның менән һөйгән егеттәренән башҡа был донъяла йәшәүҙән мәғәнә тапмауҙарын, тимәк, мөхәббәттәренә тоғро булыуҙарын иҫбатлай.

Ике осраҡта ла егет менән ҡыҙҙы бер-береһенән башҡа ерләһәләр ҙә, уларҙың ҡәберҙәренән үҫеп сыҡҡан гөлдәр (тирәктәр) бер-береһенә үрелеп, үлгәс булһа ла, ҡауышыуҙарын символлаштыра. *«Ғашиҡтар ҡәберенән үҫеп сыҡҡан (йәки унда ултыртылған)*

*ағастар үрелешеп үҫә»* мотивы халыҡ-ара әкиәт сюжеттары күрһәткестәрендә АТ 970 һаны менән тамғаланған. Уның әҙәби ҡомартҡыларҙа, төрөк, ҡытай, япон, венгр әкиәттәрендә осрауы асыҡланған.[1]

Шулай итеп, был фажиғәле финалға, асылда, ҡыҙ атаһының «бер һылтауҙы — ике һылтау» принцибы буйынса эш итеүе сәбәпсе. Маянһылыуҙың атаһының ҡасып-боҫоп ҡына ситкә күсеп китеп, эҙ йәшерергә маташыуы — атаһыҙ егетте кейәү итергә теләмәүен өнһөҙ ҡыскырып әйтеүенә бәрәбәр. Унан айырмалы рәүештә, Зөһрәнең ата-әсәһе Таһирҙы ни өсөн уны ағыҙып ебәреүҙәрен үҙҙәре үк аңлата. «Бер етемәккә ҡыҙ биреү — үҙе оят!» — тип Зөһрәнең әсәһе дастандың Ғарифуллин Сабирйән вариантында. Хажиева Миңнеямал вариантында иһә иренә ул былай ти:

Был ни тигән хурлыҡтыр,
Был ни тигән ҙурлыҡтыр.
Вәзир — затҡа ҡыҙ биргән —
Был ни тигән хурлыҡтыр.
Вәзир — затҡа ҡыҙ биргән
Ишетмәнем, күрмәнем,
Ҡыҙҙы биреп Таһирға,
Ханым[2] булып йөрөмәмен...

Атаһыҙ егеткә ҡыҙ биреүҙе түбәнселек иҫәпләүен ҡыҙҙың ата-әсәһе ҡыланыштары ярҙамында өнһөҙ әйтәме, һүҙ менән әйтеүҙәрен өнһөҙ иллюстрациялаймы, бөтәһенең дә асылы бер: килешеүҙе, вәғәҙәләшеүҙе ҡыҙ яғы өҙә. Килешеү, вәғәҙәләшеү ни ҙә ант ни. Ә ант — магик көскә эйә булган һүҙ. Шуға уны күҙәтмәү, инҡар итеү йә тотмау — оло яуызлыҡ. Антты боҙҙоңмо, инаныу буйынса антың башыңа етә. Һүҙ барган ике эпоста ла, асылда, ошо мәҡәл ғәмәлләшә. Тимәк, антты боҙоу — оло яҙыҡлыҡ, гонаһ эш. Ә гонаһ өсөн яза гонаһ эйәһенең үҙенә төшә, үҙенә төшмәһә, балаһына төшә. Боронғо инаныуҫа хас ошо логика «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙа ла, «Таһир менән Зөһрә» лә лә күҙәтелә: ант әһәмиәтендәге вәғәҙәне боҙоу — ҡыҙ атаһының үҙ башына түгел, уның гонаһһыҙ балаһына төшә. Тимәк, ул күрә зыянды. Атай кешенең гонаһы бына шулай, яй хәрәкәткә килтерелеүсе мина һымаҡ, финалда уның ҡыҙының һәләкәткә юлығыуы хаҡында алдан уҡ «хәстәрлек» күрә башлай.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәгенә хас үҙенсәлектәрҙең «Таһир менән Зөһрә» дастанында ла күҙәтелеүе тора-бара һуңғыһының башҡа компоненттар кимәлендә лә тәүгеһенә яҡынайыуына килтергән.

Ҡуҙыйкүрпәс йәрәшелгән ҡыҙы булыуын белмәй үҫә. Сөнки әсәһе быны сер итеп тота. Варианттарҙа Таһир менән дә шулай була. Айырма шунда ғына: үҫмер йәшенә еткәс, Ҡуҙыйкүрпәс үтә көслө

[1] БХИ: Әкиәттәр. 4-се кит. — 369-сы б. (№ 57).
[2] Ханым — хан ҡатыны.

була. Шул аркала йә бер әбейҙең яңғыҙ улын имгәтә (Ғ. Сәлим версияһы), йә еңгәһенең күнәгеп үтә ата (БДУ БӘК ФФ. төрлө йылдар). Шул сакта ғына Ҡуҙыйкүрпәс үҙенән сер йәшереүҙәрен белә. Сөнки әбей: «Бер йүнле егет булһаң, һинең кәләшең буласак кыҙың да ташлап китмәҫ ине», — тип шелтәләй уны. Еңгәһе лә шундайырак һүҙ әйтеп ташлай. Артабан, улар котортканса, егеткә әсәһенән курмас кыҙҙыртып, унан серҙең әрсәһен һорашырга ғына кала.

«Таһир менән Зөһрә» дастанынан Булатов Зәкәриә варианты буйынса, мәҙрәсәгә йөрөй башлагас, «шулай бер вакыт «Ҡөрьән» ситенән Таһир бәләкәй вакытында Зөһрәнең колагын тешләүе турaһында белеп калған». Таһирҙың Зөһрә менән сабый сакта, колак тешләтеп тороп, йәрәштерелеүенең сер итеп һаклаыуы был вариантта өҫтәлмә рәүештә тағы бер тапкыр асыклана. «Ҡөрьән» ситендәге яҙыуҙа, быгаса үҙҙәренән йәшереп, сер итеп тотолған мәғлүмәткә эйә булғас, был балалар «бер-береһен якын күреп йөрөй башлағандар, ти. Уларҙың дуҫлыктарын һиҙеп калған укытыусы» кыҙҙың атаһына: «Ханым, Таһир теге серҙе белде бит әле», — тип ошаклай. Усманова Хәнифә варианты ла Таһирҙың Зөһрә менән йәрәшелеүенең сер итеп тотолоуын аңлата. «Укый башлағас, Таһир гел бер кыҙ менән уйнаған. Шунда әйткәндәр: «Ул бит һинең кыҙың түгел, һинең кыҙың — Зөһрә бит», — тигәндәр.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосы күҙлегенән (кимәленән) карағанда, ошо эпизодтан һуң Таһирҙың әсәһе менән аңлашыуы, дөрөҫөрәге, ситтән белгән серҙе асыклатыуы хакында мәглүмәт бирелергә тейеш ине. Сөнки: «А» тигәс, «Б», — тип тә әйтеп куйыу — фарыз. Шунһыҙ логика боҙола. Ә был осрактың логикаһы шуны талап итә: « Егет сабый сағында йәрәшелгән кыҙы булыуы хакындагы серҙе аса» тигән мотив, һуңғы әйтелгән мәғлүмәт булганда ғына, бөтә тулылығына ирешә. Усманова Хәнифә ошо законсылыкты нескә тойған. Зөһрә менән йәрәштерелгән булыуын сит кешеләрҙән белеп кайткас: «Таһир инәһенә: «Һин ниңә әйтмәнең миңә? Үҙегеҙ бит туҫтак эсешкәнһегеҙ. Минең йәрәшкән кыҙым бар икән дә! — тигән үпкәләп». Ошондай һүҙҙәрҙән һуң килгән әсә яуабы *«Егет сабый сағында йәрәшелгән кыҙы булыуы хакындағы серҙе аса»* мотивын тулыландырып та куя һәм, бының менән генә сикләнеп калмай, булғас — булһын, тигәндәй, «Әсә улын йәрәшелгән кыҙы артынан китмәҫкә киңәтә» мотивын да үҙ эсенә ала. «Әй, балам, — ти әсәһе Таһирға, — атайыңдар туҫтак эсешкәйне лә, торарак үҙ-ара ер бәхәсенән бит, бик йырак күсеп киттек Зөһрә шунда калды. Уның артынан бараһы булма!»

Шулай итеп, был ике мотив композицион урыны, мәғәнәһе һәм идея-эстетик вазифаһы йәһәтенән, төкмә-төк булмаһа ла, йәнә «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәгендәгесә. Хатта уга тап килә. Уның карауы, «Таһир менән Зөһрә» дастанының Ишбирҙина Нәсиха әбейҙән яҙып алынған варианты был бушлыкты тулыландыра. Әммә бик үҙенсәлекле был тулыландырылыш. Мәғлүм булыуынса, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәгенең Ғәлимов Сәләм тарафынан теркәлгән версияһы буйынса, сабый сағында йәрәштерелгән алымсағын күреп белмәҫтән үк, шул кыҙға үлеп ғашик булған егет

уны эҙләп китергә булғас, әсәһе ҡаршы төшә. Яңғыҙ улын яман ергә ебәрмәү ниәтенән:

«Өйөр ҙә өйөр малын ҡалыр,
Уны нисек итерһең, балам?
Нисек итерһең, балам?
Осһоҙ ҙа башһыҙ урман булыр,
Уны нисек итерһең, балам?
Нисек итерһең, балам?
Икһеҙ ҙә сикһеҙ диңгеҙ булыр,
Уны нисек кисерһең, балам?
Уны нисек кисерһең, балам?
«Ете ҡабым, ете йотам» бүре килер,
Унан нисек ҡасырһың, балам?
Нисек ҡасырһың, балам?» —

тип, әйтемләп-әйтемләп тороп, киҫәтеп тә, иҫкәртеп тә ҡарай. Әммә Ҡуҙыйкүрпәс йылҡыларының үрсерен, урман аша үткәндә — атаһының айбалтаһы, диңгеҙ осраһа көмөш көҙгөһө, бүренән ҡотолорға күк толпары (йәғни Аҡбуҙаты) ярҙам итерен әйтеп, юлға сыға.

Билдәле булыуынса, «Таһир менән Зөһрә»лә ҡыҙҙың атаһы, ситкә күсенеп, эҙ йәшереп тормай. Тимәк, *«ғашиҡ егет әсәһен тыңламай, юлға сыға»* мотивына был әҫәрҙә ерлек булмаҫҡа тейеш. Әммә ике эпоста ла төп геройҙарҙың яҙмыштары тәңгәлендә оҡшашлыҡ ассоциатив рәүештә күҙәтелеүе «Таһир менән Зөһрә» дастанында ла был мотивҡа урын табырға мәжбүр иткән бәғзе һүҙ оҫталарын. Ишбирҙина Нәсихә әбей тап ошо законсылыҡҡа таянған. Дастандың ул һөйләгән варианты Таһир бикләнгән һандыҡты тотоп алған ике ҡыҙының кесеһен бай уға бирә. Ҡайныһының Елъетмәҫ ерән атында тыуған иленә ҡайтып килергә (асылда Зөһрәһе артынан китергә) рөхсәт һорағас, шул икәү араһында шундай әйтеш булып ала:

— Алдыңда ике тау торор,
Таҡ-тоҡ итеп төкөшөп торор

(Одиссейҙың юлында осраған төкөшөүсе ике ҡаямы ни. — Ә. С.),

— Һыҡрап-көйләп үтермен, ҡайным,
Барыр ергә барып етермен, ҡайным.
— Алдыңда ҡара урман ҡалҡыр,
Бүреһе булыр күҙе ялтыр.
Уны нисек үтерһең, кейәү?
— Елә-саба үтермен, ҡайным,
Моратыма етермен, ҡайным.
— Алдыңда ете диңгеҙ ятыр,
Ярын ялмап, ҡайнағандай, ярһып ятыр.
Уны нисек кисерһең һуң, әйтсе, кейәү?
— Урап сабып үтермен, мин, ҡайным,
Кисер ерен кисермен, мин, ҡайным!

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәгә һәм «Таһир менән Зөһрә» дастаны араһындағы оҡшашлыҡтар, тема, мотив, яҙмыштар

уртаҡлығы менән генә сикләнеп ҡалмай, сюжетты хасил итеүсе характер типтарының иҫәбе-хисабында ла, хатта уларҙың исемдәренең уртаҡлығында ла күҙәтелә. Дөрөҫөрәге, һуңғыһы тәүгеләре тыуҙырған ассоциация һөҙөмтәһенән ғибәрәт. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосында төп сюжет һыҙығын хасил итеүҙә биш персонаж — егет менән ҡыҙ, уларҙың ата-әсәһе һәм мөхәббәт өсмөйөшө тыуыуына сәбәпсе булған Ҡолтортаҙ (Ҡара ғәрәп) ҡатнаша. «Таһир менән Зөһрә» дастанында ла шулай.

Ике әҫәрҙә лә егеттең әсәһе эпизодик роль генә атҡара: улы сит кешеләрҙән белгән сергә асыҡлыҡ ҡына индерә (шуны дублировать итә генә) һәм ҡыҙ артынан китмәҫкә киҫәтә. Һәм... китте, бөттө.

Ҡыҙ әсәһенең роленә килгәндә, шуға иғтибар итмәү мөмкин түгел: «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәгендә уның буйға ҡалғанлығы, ҡыҙ табыуы хаҡында ғына әйтелә. «Таһир менән Зөһрә» дастанының да күпселек варианттарында (һәр хәлдә, беҙгә мәғлүм ун биш варианттың ун өсөндә[1]) эш шулай тора, йәштәрҙең никахлашыуына уның атаһының ҡаршы булыуына ғына баҫым яһала. «Таһир менән Зөһрә» дастанының ҡайһы бер варианттарында ҡыҙҙың әсәһе лә күренә биреп ҡуя. Ғарифуллин Сабирйән, Хажиева Миңнеямал варианттарында, мәҫәлән, ул Зөһрәне стем егеткә биреүҙе яҙыҡ эш итеп иҫәпләп, уларҙың ҡауышыуына ҡаршы булыуы менән генә хәтерҙә ҡала. Тимәк, дастандың башҡорт версияһында Зөһрәнең әсәһенең роленә әһәмиәт бирмәү тоторокло хәл. Шулай итеп, ике әҫәр ҙә — иртәк тә, дастан да — әүҙем персонаждар һаны тәңгәлен дә тиң тиңгәрелә.

Тарихи яҡтан ҡарағанда, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәген ҡыпсаҡ төркиҙәре, ә «Таһир менән Зөһрә» дастанын уларға сиктәш Урта Азия уғыҙдары ижад иткән. Әммә мотивтар, сюжет һыҙығы, шул сюжетты хәрәкәткә килтереүсе төп персонаждар тибындағы һәм айырыуса трагик яҙмышлы ике ғашиҡ образы тәңгәлендәге оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡтар һуңғыһының тәүгеһе популяр булған мөхиткә, шул иҫәптән башҡорт халҡының эпик репертуарына еңел ерегеп китеүенә булышлыҡ иткән булһа кәрәк.

Ана шулай оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡтар тыуҙырган ассоциация һүҙ барған ике эпоста ҡайһы бер персонаждарҙың аҙаш булып китеүенә лә сәбәп булған «Таһир менән Зөһрә» дастанының Ишбирҙина Нәсиха яҙҙырған вариантында сабый саҡтарында йәрәштерелгән ике ғашиҡтың атаһы «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәгенең Ғ. Сәләм версияһындағы, һәм шуның 1930, 1960 йылдарҙа яҙып алынган[2] варианттарындағыса, Күсәрхан менән Күсмәҫхан

---

[1] Теләкәева Рәхилә, Булатов Зәкәриә, Усманова Хәнифә, Ишбирҙина Нәсиха, Дәүләтбаева Вәзирә, Ноғаманова Ғәзизә, Абыҙгилдина Ғәйниямал, Ғүмәрова Ғәзизә, Бәҙретдинова Тәзкирә варианттары //ҒА: ф. 3 оп. 231/3. — 157—160-сы б. оп. 21/5. — 13—15-се б.; оп. 92—10. — 25—28-се б.; БДУ БӘҠ ФФ. 25. — 123—131-се б.; ҒА; оп. 92/9. 169-сы б.: 169—170-се б.; БДУ БӘҠ ФФ, 7. — 199—200-се б. h б.

[2] ҒА; ф. 3, оп. 32/31. — 44—45-се б., оп. 21/3. — 135—141-се, 141—144-се, 146—149-сы.; оп. 21/6. — 40—44 се б. h. б.

тип исемләнә. Таһир менән Зөһрәнең осрашыуҙарын аңдып, аҙаҡ ҡыҙҙың атаһына ошаҡлап, үҙе уға кейәү булырға теләүсенең Ҡарағол йә Ҡарағәрәп тип аталышы ла «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосындағы ҡара эсле ошаҡсынығы менән тап килтерелгән осраҡтар бар.[1] Мәҫәлән, 1961 йылда Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Ҡадир ауылында 36 йәшлек Ноғоманова Рәзифә менән 31 йәшлек Галина Нурыянан — Фәнүзә Нәҙершина, 1962 йылда Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡотос ауылында Юлыев Шәрәфиҙән — М. Янбухтина,[2] 1971 йылда Ейәнсура районы Байдәүләт ауылында 1896 йылғы Сәйфуллин Абдулланан Сәриә Миржанова (уның шәхси фонды) яҙып алған варианттарҙа ул — Ҡарағол, 1930 йылда кем тарафынандыр яҙып алынғанында[3] — Ҡарағәрәп тип исемләнгән.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының 1961 йылда Һамар өлкәһе Алексеев районы Моратша ауылында 35 йәшлек Фазлиәхмәтов Ҡорманғәленән Мөхтәр Сәғитов яҙып алған һәм «Таһир менән Зөһрә» дастанының Хажиева Миңнеямал варианттарынан сығып фекер йөрөткәндә, Ҡара ғәрәптең ҡушамат булыуы аңлашыла. Ни өсөн тигәндә, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу һәм Таһир менән Зөһрә араһына инергә маташыусы мәкер зат бында «ғәрәп» тип кенә аталған. Тимәк, ике эпоста ла был заттың күпселектә Ҡарағол тип исемләнеүе бушҡа түгел. Күрәһең, быныһы уның ысын исеме рәүешендә ҡабул ителер булған.

«Таһир менән Зөһрә» дастанының «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәгенә оҡшашлыҡтары, ауаздашлыҡтары һәм шул үҙенсәлектәрҙең һуңғыһы өсөн башҡорт еренә ерегеп китеүенә сәбәпсе булыуы шул турала ла уйландыра. Мәғлүмдер ки, этнос (ырыу, ҡәбилә, халыҡ) икенсе урынға күсенеп, шунда төйәкләнә ҡалһа, тояҡлы һәм тояҡһыҙ малы менән бергә тәүтөйәктәге ер-һыу атамаларын, шул иҫәптән яҙлау, йәйләү, көҙләү, ҡышлауҙарға (ыҙмаларға) тағылғандарын да, ауыҙ-тел, музыкаль, уйын, йола фольклорын да үҙе менән алып китер булған. Яңы ергә боронғо ата-бабалар төйәгенә хас атамаларҙы (тауына — элекке төйәгендәге тау исемдәрен, һыуына — һыу исемдәрен) таға. Шул иһә ата-бабалар төйәгенә хас йырҙарҙың да яңы ергә ерегеүенә булышҡан. Ә был иһә боронғо төйәкте һағыныу тойғоһон еңеләйткән.

Уныһы шулай. Ә бына тәүтөйәккә төбө-тамыры менән береккән легенда, риүәйәттәрҙе, айырыуса шул тасуирланған ваҡиғалары ваҡыт оҙайлылығы йәһәтенән дә, арауыҡ (пространство) яғынан да киң ҡоласлы булғандарын, тимәк, эпик ҡомартҡыларҙы, мал-мөнаят, йыр-таҡмаҡ һәм уйын, йола фольклорынан айырмалы рәүештә, бер урындан икенсе урынға еңел генә күсереп булмаған. Теге йә был этностың фольклорында бөгөн үҙҙәре йәшәгән төйәккә ереккән

---

[1] ҒА, ф. 3, оп. 21/8. — 35—39-сы б.; БДУ БӘҠ ФФ, 1963 йылғы яҙмалар, 1-се киҫәк. — 75—79-сы б.

[2] ҒА, ф. 3, оп. 32/31. — 44—45-се б.

[3] ҒА, ф. 3., оп. 32—31. — 44—45-се б.

эпик ҡомартҡы булмауы бына шуның менән дә аңлатыла. Ә был әйтелгәндән шул да яҡшы аңлашыла. Әгәр ки этнос әлеге мәлдә йәшәгән ергә ерекмәгән эпик ҡомартҡылар осраштыра икән, улар, асылда, йә яҙма, йә баҫма рәүештә икенсе этник репертуарҙан килеп ингән әҫәрҙәр хисабына инә булыр.

Икенсе этник репертуарҙан айырым кешеләр отоп алып ҡайтып һөйләгән эпик әҫәрҙәр ҙә осрарға мөмкин. Ләкин эпостағы ваҡиғалар барған географик урын, уларҙа ҡатнашҡан, шул ергә ереккән этностар үҙ булмау сәбәпле, ундай әҫәрҙәр яңы милли репертуарға ерегеп китә алмай. Быға һәр бер этностың фекерләү тибы менән башҡаларының фекерләү тибы, эстетик, этик ҡараштарының, этнографик үҙенсәлектәренең тап килмәүе лә тос өлөш индерә. Шул факторҙар менән иҫәпләшмәйенсә, ҡасандыр уртаҡ яҙма телдә теркәлеп, бөгөн һин йәшәгән территорияла осраҡлы рәүештә генә ҡулыңа килеп юлыҡҡан йә икенсе этник мөхиттән, баҫмаларҙан отоп алғанды ғына һөйләүсенән яҙып алынған текстарҙы «был беҙҙең дә эпос» тип, үҙ телеңдә баҫтыра башлау — йомшаҡ ҡына әйткәндә, бер ниндәй ҙә ғилми этика сиктәренә һыймай торған күренеш, тип баһаланырға һәм шелтәләнергә тейеш. Бынан сығып, эпостың этник ерлеге, теге йәки был әҫәрҙең билдәле бер этник төркөмгә ҡарау-ҡарамауы хаҡында етди фекер йөрөтөләргә тейешлеге аңлашыла. Юғарыла әйтелгәндәр — теге йәки был этник мөхиттә тыуған эпик ҡомартҡы башҡа этник мөхиткә бөтөнләй яраҡлаша алмай тигән һүҙ түгел. Алайыҡ «Алпамыша менән Барсынһылыу» эпосын. Үзбәктәр уны үҙҙәренең милли эпик ҡомартҡыһы тип белә. Быға дәлилдәре лә етәһе. Иң әүәл уларҙа мәғлүм версияның варианттарында тик үзбәк иленә хас топонимдар, этнонимдар осрай. Эпостың үзбәк версияһында ваҡиғалар Һыр даръяһының түбәнге ағымы менән *Арал диңгеҙе* тирәһендә бара. *Һыр ярындағы Сығнаҡ ҡалаһы* янындағы *Барсын кәшәнәһе (Күк кәшәнә), Барчинет, Байсын* тигән борошго ҡалаларҙан ҡалған емеректәр, ҡасандыр шарлап аҡҡан *Барчин даръяһы* (хәҙер уның ҡоро үҙәне генә һаҡлана), башҡаһы — ана шул ваҡиғаларҙың өнһөҙ шаһиттары ул. Үзбәктең «Алпамыша» эпосының мәшһүр дастаны Фазыл Юлдашевтан яҙып алынған версияһында Үзбәкстандағы Аҡһыу, Бабахан, Зил, Күк-ҡамыш, Мураз-теле тигән ер-һыу атамалары ун алты быуынлы Күк Ҡонград (Кунград) ҡәбиләһе телгә алына.[1] Шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙың эпик репертуарына ла был эпостың ныҡ ерегеүе сер түгел.

Беҙ «Алпамыша»ның Урта Азиянан үҙләштерелеүен таныйбыҙ. Быға шул да дәлил: уның беҙгә мәғлүм версияһы варианттарында, саф башҡорт эпостарынан айырмалы рәүештә, халҡыбыҙ әле төйәк иткән географик арауыҡҡа хас урын исемдәре телгә алынмай. Урта Азияға хастары, онотолоп, хәтерҙән юйылып бөткән. Әммә уның

---

[1] Мирзаев Т. Узбекские народные дастаны и героический эпос «Алпамыш» //Алпомиш/ Сост. и подготовка текста Т. Мирзаева. — Ташкент: Фан, 1999. — С. 31, 67—422.

башҡорт версияһында ошо этносҡа ғына хас ҡайһы бер ваҡыраҡ этник төркөмдәрҙең атамаларына аҙаш хан исемдәре осрай. Мәғлүм булыуынса, борон этноним — кеше исеменә, кеше исеме этнонимға әүерелгән осраҡтар булған. Мәҫәлән, Башҡорт хан, Үзбәк хан менән, Урта Азия, Ҡаҙағстан халыҡтары *истәк, һарт* тип йөрөткән халыҡтарҙың башҡорт, үзбәк, аталышын шулай аңлаталар.[1] « Алпамыша менән Барсынһылыу» эпосының башҡорт версияһы варианттарында осраған Әйләр, Бүләр тигән хандарҙың исемдәре менән шул исемдәргә аҙаш башҡорт ырыуҙары этнонимы араһында ла шундай уҡ бәйләнеш булыуы ихтимал.

Тағы шуны өҫтәп әйтергә генә ҡала. Байтаҡ башҡорт ырыу, ҡәбиләләренең (мәҫәлән, Бөрйән, Үҫәргән, Түңгәүер, Әйле, Мең, Ҡырғыҙ һ. б.) тамырҙары Урта Азияға барып тоташа.[2] «Алпамыша» эпосының башҡорттар араһында таралыуына шул ҡәүемдәр хәтере ҙур роль уйнаған, әлбиттә. «Ә былай раҫлау *«эпос кеүек киң ҡоласлы әҫәрҙе мал-мөлкәт менән бергә күсереү мөмкин түгел» тигән тезисығыҙға ҡаршы килә бит»,* — тип әйтер ҡайһы бер оппонентым. Һәр бер ҡағиҙә, закон хатта конституцияның да иҫкәрмәһе булған кеүек, ул әйткәнемдең дә иҫкәрмәһе бар һәм ул иҫкәрмә — бер түгел, икәү: беренсеһе «Алпамыша менән Барсынһылыу»ҙың башҡорт версияһында урындағы һәм Биләр, Бәйләр тигән башҡорт ҡәүемдәренең этнонимдары телгә алыныуы булһа, икенсеһе — Урал тигән башҡорт илендә тегендә лә, бында ла ҡеүәтле титандар затынан булған, ағастарҙы аша баҫып ҡына йөрөмәле, ҡынйырағына тулған ҡомдо ҡаҡҡан урында ике тау, итеге үксәһенә йәбешеп ҡатҡан тупраҡ ҡубып төшкән урында ла, ерләнгән урынында ла тау барлыҡҡа килмәле алып-алпамышаларға бәйле топонимдарҙың, шуларға аңлатма биреүсе легендаларҙың күплеге «Алпамыша» эпосының ошо ергә ерегеүенә килтергән булһа кәрәк.

---

[1] Бикбулатов Н. В. Башкиры. -- Уфа: Изд-во УНЦ РАН, 1995. — С. 8—9.

[2] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа: Этнический состав, история расселения. — М.: Наука, 1974. — С. 129—138, 197—206, 306, 361; Башҡорт халҡын барлыҡҡа килтереүсе ырыуҙарҙың байтағы Урта Азия һәм хәҙерге Ҡаҙағстан киңлектәрен, бигерәк тә Арал диңгеҙе һәм Һыр-Дарья тирәләрен, шунан көньяҡтараҡ ятҡан ерҙәрҙе биләгәндәр. Ғәрәп авторҙары Гардизи, Сәләм эт-Тәржемәни, Масудиҙарҙың (IX б.) күҙәтеүҙәренә таяныр, Н. В. Бикбулатов хатта IX быуат урталарында төркиҙәрҙең хәрби-сәйәси берләшмәләре башында Башгырд (Башкирд) тигән уҙаман тороуын билдәләй (Ҡар.: Бикбулатов Н. В. Башкиры: Краткий этноисторический справочник. — Уфа: Изд-во УНЦ РАН, 1995. -- С. 5—6, 8—9). Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының байтаҡ өлөшөн тәшкил иткән ете ырыулы Әй ҡәбиләһенең (әйҙәр, күҙәйҙәр, мырҙалар, дыуандар, ҡошсолар, һыҙғылар, өпәйҙәрҙән) күпселегенең сығышы ярым ай тамғалы уғыҙлар менән бәйле. Үзбәк, төрөкмән, ҡаҙаҡ араһында бөгөн булһын әйлеләр менән уртаҡ этнонимлы ҡәүемдәр осрай (Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. — С. 197—219; Йәнгузин Р. З. Башҡорт ырыуҙары: Ҡыҫҡаса тарихи-этнографик очерктар. — Өфө: Китап, 1998. — 73—76-сы б.

Әле әйтелгәндәр күҙлегенән «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының башҡорт версияһына урап ҡайтһаҡ, шуны билдәләй алабыҙ. Т. С. Беляев интерпретацияһындағы (асылда, рус мәҙәниәте рухында тәрбиәләнеп, русса фекерләгән һәм батшасыл (царистик) карашта нык торған рус интеллегенты ҡулы менән өр-яңынан эшкәртелгән) версияһын иҫәпкә алмағанда, уның башҡорт ерендә тыуыуын дәлилләрлек билдәләр табыуы ситен. Әгәр ошо әҫәр «Таһир менән Зөһрә»нен башҡортлашкан версияһы барлыкка килеүенә булышһа, уның үҙенең башҡорт эпик ҡомарткылары репертуарында үҙ булып китеүенә мөхәббәт темаһын алға һөрөүсе «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡара юрға», ише саф башҡорт сығышлы эпик әҫәрҙәр ерлек һәм өлгө хеҙмәтен үтәүе ихтимал.

Бынан тыш тағы шуны ла иҫәпкә алыу зарур. Башҡортта элек-электән *«һөйөшкәндәрҙең ҡауыша алмауы»* мотивына нигеҙләнгән риүәйәттәр бик популяр булған. Һәр хәлдә, «Таштуғай», «Һуңғы йыр», «Зөлхизә», «Уралбай», «Көнһылыу» иште риүәйәттәрҙең төрлө версияларҙа һәм варианттарҙа килеп етеүе шуға дәлил. Уларҙың барыһы ла трагик сиселешле. Йә ике йәш йөрәкте айыралар — үтерелеп үлтерәләр, ҡыҙҙы ятка бирәләр. Шул ике ҡайғынан ҡыҙ үҙ үҙенең гүмерен сикләй («Зөлхизә» йырының «Башҡорт халыҡ ижады: «Йырҙар» томының 1-се китабындағы вариант,[1] «Таштуғай» риүәйәтенең Мөхәмәтша сәсән Буранголов версияһы),[2] йә уларҙың икеһен дә үлтерәләр («Көнһылыу»), йә улар айырым йәшәүҙән бергә үлеүҙе артыҡ күрәләр («Һуңғы йыр» риүәйәтендәге Байрамбикәнең ҡыҙы Гөлйемеш менән Кәрим һәм «Уралбай»ҙағы Уралбай менән Айһылыуҙың яҙмышы»).[3] Ә инде «Зөлхизә» йырының Мөхәмәтша сәсән Буранғолов версияһы күп яҡтан туранан-тура «Таһир менән Зөһрә» дастанын хәтерләтә. Ҡушмөхәмәт менән Ишмөхәмәт — ике дуҫ — ике һунарсы, дастандағы хан менән вәзир һымаҡ һәм «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәгендәге ике аусы кеүек, бер мәлде буйға ҡалған ҡатындары бала килтереп, берећенең — ул, икенсеһенең ҡыҙ булһа, коҙалашырға һүҙ ҡуйыша. Юраҡандары юш килгәс, балаларының ҡолаҡтарын тешләнтереп, *туҫтаҡ күтәреп* тороп, *бишек туйы*, унан *һырға туйы* үткәрәләр. Әммә Ишмөхәмәт үлгәс, Ҡушмөхәмәт уның улы Вәлигә: *«Атайың үлде, уртаҡ айырылды»*, — тип, ҡыҙы Зөлхизәне уға биреүҙән баш тарта.

Артабан риүәйәт сюжеты аймылыша. Ҡыҙҙы Йәнтәй байға бирәләр, Вәли, ҡаскын булып йөрөгәненда, Зөлхизәнең йәйләүенә килеп, йыр сығарып йырлай, унан үлтерелә. Зөлхизә диуанаға һабыша. Ихтимал, риүәйәттең был версияһының формалашыуына дастандың да, иртәктең дә йоғонтоһо булғандыр. Әммә шуныһы хаҡ булғанға оҡшай. «Таһир менән Зөһрә» дастанының уғыҙ төркиҙә-

---

[1] БХИ: Йырҙар. 1-се китап /Төҙ., баш һүҙ, аңлатмалар яҙыусы С. Ә. Галин; Яуаплы мөхәрр. К. Ә. Әхмәтйәнов. — Өфө: БКН, 1974. — 368-се б.
[2] БХИ: Риүәйәттәр, легендалар. — № 343.
[3] Шунда уҡ — № 287—290.

ренән ҡыпсаҡ затлы башҡорттарҙың милли репертуарына килеп инеп, йөй ҡалдырмай, ерегеүенә, уның өсөн яңы «тупраҡ» булған башҡорт мөхитендә *«һөйөшкәндәрҙең ҡауыша алмауы»* тигән мотивлы риүәйәттәрҙең әүәл-әүәлдән популярлығы ла ныҡ булышлыҡ иткән, тип уйларға кәрәктер.

«Таһир менән Зөһрә» дастанының башҡорт халҡының эпик репертуарында үҙ булып китеүенең сәбәбе әле әйтелгәндәр менән генә сикләнә тип уйларға ярамай, әлбиттә. Унан тыш болғар, татар мәҙәниәтенең йоғонтоһо ла әҙ булмаған. Һәр хәлдә, XV быуат баштарында уҡ «Таһир менән Зөһрә»нең болғар версияһы «Бабахан дастаны» тигән исем аҫтында таралып өлгөргән була. «Йософ менән Зөләйха» , «Буҙйегет» дастандары менән бер рәттән «Таһир менән Зөһрә» әҫәренең башҡорттар араһында элек-электән билдәле булыуын М. В. Лоссиевский, В. Филоненко, М. Өмөтбаев, Д. Юлтый, Ғ. Вилдановтар ҙа телгә алған.[1] Бындай таныштыҡҡа 1879 йылда Ә. Уразаев тигән бер уҡымышлының «ошбу хикәйәт гәжәибәне ғоҫманлы тәуарихларындан күреп, жиңелерәк телемез нуғай вә ҡаҙаҡ лөғәтенсә»[2] баҫтырыуын, байтаҡ ырыуҙарыбыҙҙың сығышы Урта Азия менән бәйле булыуы ла (йәғни бер ниндәй үртәкәлек итеүселәрһеҙ ҙә (посредникһыҙ), туранан-тура ла) был әҫәрҙең башҡорт мөхитенә килеп инеүенә мөмкинлек биргәндер.

«Таһир менән Зөһрә» дастанының башҡорт версияһы варианттарын тикшергәндә, Ҡирәй Мәргән дә ундағы «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ға оҡшашлыҡҡа иғтибар иткән. Әммә уларҙың оҡшашлығын ул әҫәрҙең башланышындағы *«Тыуасаҡ балаларҙы никахландырыу»* мотивы менән финалда, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу кеүек үк, «Таһир менән Зөһрәне икеһен йәнәшә» ерләүҙәренә, «икеһенең дә ҡәберенән гөл ҡалҡып» сығып, «бер-береһенә үрелеп үҫеп» китеүенә генә ҡайтарып ҡалдыра.[3] Шулай ҙа унда бик мөһим күҙәтеү бар. Тәләксенең, буласаҡ балалар ҡауыштырылмаһа, уларҙың бәхетһеҙ булырын иҫкәртеүен күҙ унында тотоп, Ҡирәй Мәргән шулай тип яҙған: «Билдәле булыуынса, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» ҙа тап шулай башлана. Тик унда беҙ тыуасак балаларҙың аталары ролендә ике бер тиң образ (Ҡарабай менән Һарыбай, Күсәр менән Күсмәҫ йәки Күсәй менән Күсмәй) күргәйнек. Бында («Таһир менән Зөһрә»лә. — Ә. С.) улар социаль яҡтан айырылғандар (береһе — хан, икенсеһе — уның вәзире). «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» сюжетында тыуасаҡ балаларҙы никахландырыу кәрәклеге йәмғиәт үҫеше талап иткән бурысҡа (ике ырыуҙы ҡушыуға, эреләштереүгә) буйһонған. Ә «Таһир менән Зөһрә»лә ул социаль тигеҙһеҙлекте асыу идеяһын сағылдыра».[4] Шуның менән

---

[1] Ҡирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1961. — 276—277-се б.; Харисов Ә. И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы: XVIII—XIX быуаттар. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1965. — 190—191-се б.

[2] Ҡирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — 285-се б.

[3] Шунда уҡ. — 285-се б.

[4] Шунда уҡ. — 286-сы, 289-сы б.

автор тәүгеһендә боронғораҡ ихтыяж, ишле ғаилә короуға ынтылыш сағылған, тимәксе.

Хөрмәтле остазымдың был фекере бик мөһим. Әммә, уның менән килешкән сүрәттә лә, кес кенә асыклыҡ индерге килә. Хикмәт шунда, Ҡирәй Мәргән дастандың мәглүм варианттарының барыһын да иҫәпкә ала алмаған. Шул сәбәптән был әҫәрҙең дә ҡайһы бер варианттарында Таһир менән Зөһрәнең аталарының йәмғиәттәге статусы бер иш итеп күрһәтелеүен билдәләргә форсаты булмаған. Ул иғтибар үҙәгенә ҡуйған. Теләкәева Рәхилә вариантында, ысынлап та, социаль статустары буйынса ике ҡоҙа тиң түгел: Зөһрәнең атаһы — хан, Таһирҙыҡы — вәзир. Ғарифуллин Сабирйән яҙҙырғанында ҡыҙ атаһы — батша, егеттеке хаҡында — ләм-мим: ул баштан уҡ етем тип таныштырыла. Ә Булатов Зәкәриәнекенсә — икеһе лә хан. Усманова Хәнифәнән яҙып алынғанында иһә, ике атайҙың да социаль хәле бер иш, тик, икәү-ара ыҙгыш арҡаһында, Таһирҙың атаһы ғаиләһе менән ситкә күсә. Әҫәрҙә егеттең Зөһрәнән ситтә атайһыҙ үҫеүе хаҡында әйтелеүенә ҡарағанда, ул шунда үлеп ҡала.

Дастан версиялары һәм варианттары башланыштарының ошондай төрләнегән шулай аңлатырға булалыр. Күрәһең, Урта Азиянан Уралға иртәрәк, һәр хәлдә, эпик традиция сәскә атҡан мәлдә күсеп, шунда төйәк тапҡан ҡәүемдәргә «эйәреп килгән» дастан ерле эпостар йоғонтоһонда яңыртылып, ҡабул ителгән һәм уларға яраҡлаштырылган.

Конкрет алғанда, тема, идея, баштағы ике мотив (тыуасаҡ балаларҙы йәрәштереү хаҡында һүҙ ҡуйышыу, бишек туйы үткәреү) менән финалдағы мотивтың (ике ҡәберҙәге ике гөлдөн йә агастың үрелеп үҫеүе) уртаҡлығы арҡаһында, «Таһир менән Зөһрә» һәм «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» әҫәрҙәрендә төп геройҙарҙың аталарының социаль статусы үҙенән-үҙе тигеҙләштерелергә мөмкин. Заманалар алышына килә башҡорт мөхитендә *«хан»* менән *«вәзир»* төшөнсәләре архаизмға әүерелә башлауы ла уларҙың шулай бирелешенә (трактовкаланыуына) йоғонто яһауы ихтимал. Уралга һуңыраҡ дәүерҙәрҙә күсенгән ҡәүемдәр хәтерендә иһә геройҙарҙың аталарының социаль статусы дастандың төп йортондағысараҡ һаҡлангандыр, быга йәмғиәттә социаль ҡаршылыҡтар көсәйеүе лә булышмай ҡалмағандыр.

## 4. Дастандың әкиәткә тартҡаны

«Сәйфелмөлөк» йәки «Сәйфелмөлөк менән Бәҙеғолъямал» дастанының тылсымлы әкиәт сюжеты үҙәненә төшөп, ахырынаса шунан сыҡмайынса, үҫеш алган версияһы, тигәндә, әҫәрҙең Моратова Шәфиғанан яҙып алынған варианты күҙ уңында тотола. Быға тиклем, эпостың әкиәтләшкән варианты булыуы ихтимал тигән ҡарашҡа яраҡлаштырып, уны тылсымлы әкиәттәр йыйынтыҡтарына индерер булдылар. Әммә ул тап шул «әкиәтләшкәне» өсөн дастандың үҙенсәлекле версияһы тип ҡаралырға тейеш.

«Сәйфелмөлөк» дастанының Моратова Шәфиға версияһы тема, идея кимәлендә тулыһынса тәүге версия һәм уның вариантына оҡшаш. Хатта сюжетты хасил итеүсе мотивтарының да байтағы, дөйөм алғанда, тәүгеләренекенә тап килә. Бында ла Сәйфелмөлөк үҙ күҙҙәре менән күреп белмәгән ҡыҙға, уның уйынса ғына ла үлеп ғашиҡ була. Шулай булмаһа: «Күҙең йомһа, күҙ алдында әлеге ҡыҙ һүрәте генә торған», — тип әйтелмәҫ ине. Шуға ла, тәүге версияла, уның вариантынан айырмалы рәүештә, тәүҙә үк ҡыҙға Сәйфелмөлөктөң атаһы эҙләү һалыу-һалмауы хаҡында бер ниндәй мәғлүмәт биреп тормаҫтан, тураһын һуктырып, егеттең юлға сығыуы хәбәр ителеүе идея йәһәтенән дә, художество яғынан да аҡлана. Сөнки тап шулай әҫәрҙе композиция йәһәтенән ыҡсымлатыу ваҡиғалар үҫешенең етеҙләнеүе, үҙен ғашиҡ иткән ҡыҙҙы табырға геройҙың ашҡыныуы эффектын тыуҙыра. Бына шулай ғишыҡ утында яныуының психологик торошо хаҡында өнһөҙ, һүҙһеҙ ҙә төшөнсә бирелә: Сәйфелмөлөк, теге ҡыҙҙы күрмәйенсә, тәҡәт итә алмай — башҡаса әмәле ҡалмай уның. Юлда ҡарап ҡыйрауы арҡаһында, ҡырағай кешеләргә юлығыуы, теге варианттарҙағы һымаҡ, егеттең түҙемлегенә генә түгел, тойғоларына ла һынау кеүек ҡабул ителә. Сәйфелмөлөктөң ҡырағайҙар батшаһы ҡыҙының мөхәббәтенән баш тартыуы — әшәкелектән ерәнеүе һөҙөмтәһе генә түгел, матурлыҡ идеалына тоғролоғона дәлиле. Уның өсөн яратмаған, етмәһә, ҡырағай ҡыҙ менән хис уртаҡлашыу һәм түшәк бүлешеү — динғеҙҙә, дауылға эләгеп, ҡарап ҡыйралыуынан да, әсирлектән дә яман. Шуға ла беренсе мөмкинлек булыу менән Сәйфелмөлөк ҡасып ҡотолоу сараһын күрә.

Рысаева Миңзифа версияһындағы һымаҡ уҡ, был версияла Сәйфелмөлөк иң ахырҙа һунарҙа сағында «әҙәмгә лә, хайуанға ла оҡшамаған һыңар мөгөҙлө йән эйәһе» кейҙереп киткән иҫке тунда әтәс ҡыскырған мәлдә генә күренә торған һүрәттәге ҡыҙҙы табып, әҙәми затҡа ят йыныстан булыуына ҡарамаҫтан (ә ул эҙләгән һылыу ҡыҙ был версияла дейеүҙең кинйә ҡыҙы булып сыға), уны ҡыйынлыҡтар менән ҡулға төшөрөп, иленә алып ҡайта. Әммә башҡа варианттарға тап килеш үтә шартлы. Шартлы шуның өсөн, сөнки тап *«Егет үҙ күҙҙәре менән күреп белмәгән ҡыҙға, ситтән тороп, ғашиҡ була»* тигән мотивтан һуң дастан сюжетының артабанғы үҫеше был версияны тылсымлы әкиәт сюжеты юҫығына күсерә лә инде. Бында хәл иткес ролде әкиәт сюжеттары күрһәткестәрендә АТ 313 тип тамғаланған *«Мөғжизәүи ҡасыу»* сюжеты уйнай. Әммә тылсымлы әкиәткә тартым деталь һәм күренештәр уға тиклем үк эстетик вазифаһын атҡарырға тотона. *«Һүрәт сеансы»*ның төнгө әтәс ҡыскырған мәлдә генә башланыуы, Сәйфелмөлөктөң атаһының вәзирҙәре аша сихырсыға мөрәжәғәт итеүе — шуға миҫал.

Халыҡ инанысы буйынса, сихырсы — насар зат. Ә был осраҡта уның ошо тәғәйенләнеше аҡланмай. Күрәһең, информатор был урында күрәҙәсене күҙ уңында тотҡан. Сөнки дастандың был версияһына индерелгән ул зат сихыр-маҙар менән булашып тормай. Киреһенсә, Сәйфелмөлөктө һарыларға һабышырға мәжбүр иткән серле ҡыҙҙы күҙ уңында тотоп: «Ул ҡыҙ донъяла бар. Ул сиңдәр бат-

шаһы Күк ҡарғаның иң кесе ҡыҙы, уи икенсе ҡыҙы», — тип, йәғни дөрөҫ итеп күрәҙәлек ҡыла. Шул уҡ ваҡытта был һәләтенең сикһеҙ түгел икәнен дә таный. «Мин уға алып барыу юлын өйрәтә алмайым», — тигәне шуны күрһәтә лә инде.

Шулай итеп, Сәйфелмөләгөнөң ашап-эсеүҙән дә, уйнап-көлөүҙән дә яҙып, һунарға йөрөүҙән ҡалып, «төнгө һүрәт сеансы» менән мауығыуын атаһының сихыр гәләмәте, тип уйлап, сихыр ҡайтарырға теләүе — бушҡа тырышыу булып ҡына ҡала.

Ә инде дастандың һүҙ барған версияһында «сихырсы» тип нарыҡланған заттың, Күк ҡарға биләмәһенә барыу юлын күҙ уңында тотоп: «Уны минең апайым ғына белә. Уға (апайына. — Ә. С.) ете диңгеҙ аша үтеп кенә барып була», — тигәне уны тылсымлы әкиәт геройына юл өйрәтеүсе изгелекле кеше статусына күтәрә. Быға са ҡыҙ һүрәтен күрһәтеүсе тун, уны кейергә мәжбүр итеүсе зат, ҡыҙ һүрәтенең төнгө әтәс ҡысҡырған мәлдә генә «тун-экранда» пәйҙә булыуы, сихырсы тип нарыҡланған, асылда, күрәҙәсе булып сыҡҡан кешенең — өс тау, өс диңгеҙ аръяғында, ә уның уртансы апаһының ете диңгеҙ аръяғында йәшәүе тураһындағы мәғлүмәттәр арҡаһында, ҡуйыртыла башлаған фантастик башлангыстар янында күрәҙәсенең изгелекле юл күрһәтеүсе вазифаһын да үҙенә алыуы дастандың тылсымлы әкиәт үҙәненә әүҙем генә шыуыша башлауын күрһәтә лә инде.

Күрәҙәсенең уртансы апайына барыу юлы билдәле булыуы Сәйфелмөлөктөң юлға сығыуына, тимәк, сюжет йомғағының әлеге тылсымлы әкиәт үҙәне буйлап алға тәгәрәүенә стимул тыуҙыра. Артабан уга икенсеһе, өсөнсөһө өҫтәлә. Шулай, күп быуынлы ракетаның беренсе быуыны икенсеһенә, икенсе быуыны өсөнсөһөнә этәреш биргән һымаҡ, мотивҡа — мотив, эпизодҡа — эпизод ялғана — сюжет үҫеүен дауам итә. Дауылда карап ҡыйрауы арҡаһында, Сәйфелмөлөктөң ҡырағай кешеләргә юлығып, уларҙың батшаһының ҡыҙы менән ҡауышыуҙан ҡасыуы уның уртансы сихырсы (дөрөҫөрәге, күрәҙәсе) менән осрашыуын тиҙләтә. Әммә был осрашыу, егет көткәнсә, үҙе эҙләгән ҡыҙ менән тура ғына күрешеү минуттары етеүен аңлатмай.

Әкиәт үҙәненә бер төшкәс, кемдең санаһына ултырһаң, шуның йырын йырла, тигән кеүек, дастандың был версияһының сюжеты ахырғаса, тылсымлы әкиәт сюжетының үҫеү законсылығына буйһондорола. Ә уның асылы баҫкыслап-баҫкыслап, композицион өсләтеүҙән ғибәрәт. Ике күрәҙәсене үткәс, Сәйфелмөлөктөң өсөнсөһөнә, тегеләренең өлкәненә юлығырға тейеш булыуы, баҫкыстан баҫкысҡа баҫҡан һымаҡ, сиратлап ҡына көнәлгәре әшкәртелә бара. Тылсымлы әкиәттең эске законсылығы талап иткәнсә, апайҙан апайға күскәндә, геройға «ышаныс ҡағыҙы» вазифаһын атҡара торған берәй әйбер бирелергә тейеш. Беренсе күрәҙәсе, информаторҙың иғтибарһыҙлығы арҡаһындамылыр, нисек, был йоланы үтәмәй. Уның ҡарауы, Сәйфелмөлөк икенсе күрәҙәсе менән осрашҡанда, был кәмселек иҫәпкә алына: уртансы апай, олоһона юл өйрәткәндә, уға тапшырыу өсөн, балдаҡ бирә. Тап ана шул балдаҡ үҙенә күрә танытма, пароль, ышаныс ҡағыҙы вазифаһын үтәй.

Композицион өсләтеү апайҙарҙың араһындағы арауыҡ үлсәменең арта барыуы менән дә һыҙыҡ өҫтөнә алына. Кесе күрәҙәсе өс тау, өс диңгеҙ аръяғында йәшәһә, икенсеһенең — ете диңгеҙ аръяғында, өсөнсөһө — туғыҙ диңгеҙ, туғыҙ тау аръяғында йәшәүе хаҡында айырым-асыҡ итеп әйтелеүе — арауыҡтың киңәйә барыуын һыҙыҡ өҫтөнә алыу менән бер. Тимәк, әҫәрҙә арауыҡтың киңәйеүенә мөһим художество бурысы йөкмәтелә. Дастандың әле һүҙ барған версияһында был алым — Сәйфелмөләктөң әллә ни хәтлем киң арауыҡты үҙләштереүен күрһәтеү — һүрәте буйынса үҙенә ғашиҡ булырға мәжбүр иткән ҡыҙҙы егеттең етди яратыуын, шуға ла уны тырышып эҙләүен төшөндөрөүгә хеҙмәт итә.

Геройҙы бер ярҙамсының икенсе ярҙамсыға, уныһының өсөнсөһөнә ебәреүсе айырым мотив рәүешендә тылсымлы әкиәттәрҙә йыш осраусан. «Һонтай егете» тигән тылсымлы әкиәттә Янһары тигән егеттең ен-бәрейҙәр менән эш итә белеүсе ҡатыны иренә батша ҡушҡан әҙәм үтәгеһеҙ бурыстарҙы атҡарырға булыша: таң атҡансы иген сәсеп, урып, йыйыштыра; батша урмандан ун һыйыр килтерергә ҡушһа — ун айыу килтерә. Ә бар менән юҡты табырға кәрәк булғас, ҡатыны яҙған хатты тотоп, ҡайны ҡартҡа барып, был эште уның ярҙамы менән атҡара.[1] «Таҙҙың төшө» тигән әкиәттә батша ҡыҙы, кәңәш һорап, тәүҙә ҡала ситендәге күрәҙәсе ҡарсыҡҡа, унан донъя ситендәге утрауҙа йәшәгән алтын сәсле сихырсыға ла бара.[2] Сәйфелмөләктөң дә күрәҙәсенән күрәҙәсегә йөрөүе шуларҙы хәтерләтә.

Өсөнсө күрәҙәсенең Сәйфелмөләккә әйткәне кимәленән ҡарағанда, ни тиклем генә егет үҙе күреп белмәгән ҡыҙҙы тәкәтһеҙ ятратмаһын, барыбер үҙ аллы эш итеүҙән йыраҡыраҡ тора. Быныһы ла — тылсымлы әкиәттәргә хас билдә. Уларҙа герой ярҙамсыға һәм тылсымға таянып эш итеүсән. Ошо күҙлектән ҡарағанда, «Сәйфелмөләк» дастанының тылсымлы әкиәт юлын ҡыуыусы версияһында герой өсөн күрәҙәсе өс апай, сюжеттың өс быуыны буйынса, сират нәүбәтләп берәм-берәм генә программа төҙөп тороусы хеҙмәтен үтәй.

Сәйфелмөләктөң, ҡыҙ менән осрашып, уны үҙенә ҡаратыуға ирешеүе — өлкән менән күрәҙәсе әйткән «Программа»ны еренә еткереп үтәүе һөҙөмтәһе генә. «Дейеү батшаның ун ике ҡыҙы булыр. Улар һәр көн иртән, ун ике аҡҡош булып, ҙур күл буйына осоп килерҙәр. Күлдең уртаһында ҡуйы ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланған утрау булыр. Ун икеһе лә осоп килерҙәр ҙә, сисенеп һыуға сумырҙар. Ун бере — бер урынға, ун икенсеһе икенсе урынға сисенер. Һин уларҙың сисенгәнен ҡарап тор ҙа ун икенсе ҡыҙҙың кейемдәрен алып йый. Тик һин, уны күреп, һуштан яҙмаҫ өсөн, кәнфит ҡап(?), ә ҡыҙ һине ятһын өсөн, һеңлем биргән балдаҡты уның урта бар-

---

[1] БХИ: Әкиәттәр. 1-се кит. — № 94.

[2] БХИ: Әкиәттәр. 2-се кит. /Төҙ. М. Х. Минһажетдинов, Ә. И. Харисов; Аңлатмалар Л. Г. Бараг менән М. Х. Минһажетдиновтыҡы; Яуаплы мөхәрр. Н. Т. Зарипов. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1976. — № 35.

мағына кейҙер». Бына шундай кәңәш бирә өлкән сихырсы. Йәғни дастан сюжетының әкиәт күрһәткестәрендә *«Мөғжизәүи касыу»* тип нарыкланып, шартлы рәүештә, АТ 313 А тамғаһы менән билдәләнгән «Ала карға», «Батша, егет, аждаһа»[1] тигән башкорт әкиәттәренә хас сюжет такырлаған үҙән буйлап үҫеш алыуы прогнозлана. Һәм шул ғәмәлгә лә аша. Ун бер кыҙ күлдән сығыу менән: «Фу-фу, әҙәм еҫе килә», — тиешеп, тиҙ генә аккош тундарын кейеп, осоп китә. Ун икенсеһе, кейемен эҙләп таба алмағас: «Әгәр катын-кыҙ булһаң, мәңгегә кыҙ булырмын, әгәр ир-зат булһаң, мәңгегә йәр булырмын, тик, зинһар, кейемемде бир», — тип әйтергә мәжбүр була.

Кыҙҙы кулға төшөргәс тә, дастандың башка вариантында, Сәйфелмөлөк өсөн һынауҙар туктамай. Рысаева Миңзифа версияһынан мәғлүм булыуынса, Бәҙеғолъямалдың картәсәһе улын, Шаһбал батшаны кыҙының әҙәми зат менән никахлашыуына каршы килмәҫкә өгөтләгәнсе, Сәйфелмөлөктө дейеүҙәр алып та каса. Бикбулатов Рәхимйәндән яҙып алынған вариантта ла шулай була. Дастан логикаһына хас булған өҫтәлмә кыйынлык Моратова Шәфиға версияһында ла күҙәтелә. Был версияла ул хатта әкиәттәрҙәгесә мул бирелә. Ун икенсе кыҙҙы үҙенә никахлаштырыу өсөн, Сәйфелмөлөк дейеү затлы кайныһы куйған өс шартты еренә еткереп үтәй: әнә күҙәүенә ук ата, кара айғырға (асылда, шундай киәфәткә ингән дейеү-кайныһына) атланып, сабышка сыға, уның бер иш ун ике кыҙы араһынан иң кесеһен таныуға өлгәшә.

Әкиәт логикаһы буйынса, герой өс һынау үтергә тейеш булһа, дастан ошо урында «үҙаллылык» күрһәткәндәй итә. Беренсенән, быға тиклем дә өс һынау үткән Сәйфелмөлөк, әле әйткәндән аңлашылыуынса, йәнә өс һынауға дусар ителә. Икенсенән, өс шарт та үтәлһә, шарт куйыусы, әкиәт законсылығы буйынса, геройға ул дәғүә иткәнде бирергә тейеш булһа ла, дастан версияһындағы ен батшаһы был законсылык менән дә иҫәпләшмәй: ун икенсе кыҙын — Сәйфелмөлөккә етәкләтеп кенә ебәрәһе урынға, уларҙың икеһен дә эҙәрләй башлай. Шул рәүештә мөғжизәле баҫтырыш китә. Дейеү гәскәр ебәрһә лә, үҙе баҫтырһа ла, кыҙ, таҫтамал һелтәп, дарья барлыкка килтерә, шунан үҙен дә, егетен дә төрлө сүрәткә индереп (көтөүсе, сиркәү, ағас, һарык көтөүе, сиркәү караууылсыһы итеп), икеһен дә кыуғынан коткара. Сағыштырып карайык. «Ала карға» әкиәтендә кыуғын кыуа башлағас, кыҙ егетте — көтөүсегә, үҙен һарыкка, ә атаһы кыуа башлағас, үҙен — әбейгә, ирен бабайға әүерелдерә. Атаһы «әбей»ҙе тоторға иткәс, кыҙ карсыға булып оса, унан — балык, алтын балдак, тары бөртөгө, бөркөт киәфәтенә инә. Атаһы бөркөт булып баҫтыра. Унан калһа, суртанга, әтәскә әүерелеп, эҙәрләй. «Батша, егет, аждаһа» әкиәтендә лә касыш-баҫтырыш ошондай ук тәртиптә бара.

Шулай итеп, «Сәйфелмөлөк» дастанының Рысаева Миңзифанан яҙып алынған версияһында герой өҫтөнә төшкән һынауҙар, һүрәтен күреп, ул ғашик булған кыҙ менән осрашканға тиклем, нигеҙҙә хәл

---

[1] БХИ: Әкиәттәр. 1-се кит. — №№ 54, 55.

ителеп, аҙаҡ өҫтәлмә рәүештә бары бер тапҡыр ғына ҡабатланһа, һуңғыһында ул саманан ашып китә. Быға ҡыҙҙың атаһы ҡуйған шарттарҙы үтәүҙә тасуирланған эпизод һүрәтләнгәндән һуң, дастан сюжетының кинәт АТ 313 — *«Мөғжизәүи ҡасыш (баҫтырыш)»* тибындағы тылсымлы әкиәт сюжеты менән контаминациялаяныуы сәбәпсе булған. Уның ҡарауы, тылсымлы әкиәт үҙәгенән кире сыға алмаһа ла, һуңғы версия *композицион яҡтан, еп тартҡан* кеүек эҙмә-эҙлекле булыуы менән айырылып тора. Ә Рысаева Миңзифа версияһы хаҡында быны әйтеүе ҡыйын.

Әҫәрҙең композицияһын ҡатмарлаштырырға тырышыу уның башланышында уҡ күҙгә ташлана. Унда Рабиғелмөлөк батшаның бала бәхете күрә алмай яфаланыуы, ярандарының кәңәше буйынса, яңынан никахланғас ҡына, Сәйфелмөлөк тигән улы донъяға килеүе бәйән ителә.

Икенсенән, һүҙ барған версияла ҡушма сюжет алымы ла ҡулланыла. Сәйфелмөлөк менән танышҡас, ун бер йылын дейеү әсирлегендә үткәргән Мәликә уға үҙенең башынан үткәндәрҙе, шуға бәйләп, күп михнәттәр кисереп, геройыбыҙ эҙләп йөрөгән Бәҙеғолъ-ямалдың тәржемәи хәлен бәйән итеп ташлай. Шулай итеп, төп сюжет үҫтерелеше кинәт туҡталып, ҡушма сюжетҡа юл асыла. Артабан иһә туҡтап ҡалған төп сюжет менән ҡушма сюжет бергә ҡушылып, бер бөтөндө тәшкил итә. Был үҙгәреш иһә нигеҙҙә, Сәйфелмөлөктөң ҡотортоуы буйынса, Мәликәнең дейеүҙән уның йәне ҡайҙа һаҡланыуын белешеүҙән башлана.

Рысаева Миңзифа версияһының композицион яҡтан йәнә бер үҙенсәлеге шунда: тыңлаусы йә уҡыусы танышып үткән эпизодтар, атап әйткәндә, Сәйфелмөлөк менән Мәликә танышҡандан алып, дейеүҙе үлтереп, ҡыҙҙың иленә ҡайтып етеп, егет тәхеткә ултырғанға тиклемге ваҡиғалар унда өр-яңынан бәйән ителә. Был алым Мәликә менән Бәҙеғолъямалдың осрашыуын тасуирлағанда ҡулланыла.

«Сәйфелмөлөк» дастанының тарихына ҡағылышлы ҡайһы бер мәғлүмәттәргә туҡталғанда, был әҫәрҙең сығышы «Мең дә бер кисә»гә барып тоташыуы хаҡында ла әйтелгәйне. Хәҙер инде шуны ла, һүҙ барған дастан хаҡындағы күҙәтеүҙәребеҙҙе лә тотошлайы менән иҫәпкә алып, быға тиклем ҡуйылған һәм ярайһы ҡуйыртылған бер мәсьәләгә — *«Егет үҙ күҙҙәре менән күреп белмәгән һылыу ҡыҙға ситтән тороп ғашиҡ була»* тигән тематик мотивка ҡоролған дастан һәм иртәктәрҙең геройы мифик-демонологик заттан булған ҡыҙҙы ни өсөн кәләш итеп алыуға өлгәшә, ә ул әҙәми зат ҡыҙы булғанда сюжет ни өсөн ғашиҡтарҙың фажиғәһе менән сиселә?» тигән һорауға яңынан әйләнеп ҡайтырға форсат бар. Ул һорауға өҫтәлмә рәүештә шулай тип яуап бирергә булалыр, моғайын. Мәғлүм булыуынса, әкиәттәргә һәр сак бәхетле тамамланыш хас: ниҙелер юғалтҡан юғалғанын таба, кәләшһеҙ кәләш ала, айырылғандар яңынан ҡауыша, фәҡир байыға, аҡылы ярҙамында зирәк кеше үҙенән көслө заттарҙы еңә, яуыҙлыҡ юҡ ителә, изгелек тантана итә. Күрәһең, хикмәт «Сәйфелмөлөк» дастанында геройҙың йә — ен, йә — бәрей, йә дейеү ҡыҙына, уның үҙен күрмәҫтән үк, ғашиҡ

булыуында ғына түгел, ә был әҫәрҙең, башта әйтелгәненсә, әкиәттән яралыуындалыр, шулай хасил булғанға ла, унда тылсым мөғжизәһенә ҙур роль йөкмәтелеүендәлер (был хаҡта алдан әйтелгәйне инде). Шуға ла, әллә ни хәтлем михнәт сигеп эҙләй торғас, әкиәттең эске закондылығы логикаһы буйынса, Сәйфелмөлөк үҙенә үлеп ғашиҡ булырға мәжбүр иткән ят заттың ҡыҙын алыуға өлгәшә. Мифик-демонологик ҡыҙҙы кәләш итеп алыу бары фантастик уйҙырмалы әҫәрҙәрҙә генә булыуы ихтимал. Быға башҡорттоң бүре затлы ара, ырыуҙарының килеп сығышы хаҡындағы этногенетик һәм этнонимик характерҙағы мифологик легендалары ла миҫал була ала.

Үҙенең килеп сығышы йәһәтенән үк әкиәт менән тамырҙаш булыуы арҡаһында, ҡарап үтелгән версияларынан күренеүенсә, дастан әкиәттәргә (новеллистиғына ла, тылсымлыһына ла) хас мотив һәм сюжеттарҙы иркен ҡулланған. Мораҡтова Шәфиға версияһы шул мөмкинлекте ифрат та иркен файҙаланған.

Ғөмүмән, «Сәйфелмөлөк» дастаны күләм йәһәтенән (һәр хәлдә, беҙгә мәғлүм варианты, версиялары) йыйнаҡ булыуына ҡарамаҫтан, уның сюжеты бер нисә тематик мотив һәм үҙ аллы сюжеттар берегеүенән хасил булған.

* * *

Бына шулай, сығышы менән башҡорт иленә мөнәсәбәте булмаған кисса, дастандар ҙа тыуымыштарынан уҡ үҙҙәренә генә хас үҙенсәлектәрен һаҡлаған, «үтескә алынған» сюжеттар икәнлеге таныулы булған сүрәттә лә, милли эпик репертуарыбыҙға ерегә алған. Быға уларҙың ислам рухы менән һуғарылыуҙары ғына сәбәпсе булмаған.

Шуға күрә лә «Йософ киссаһы», «Буҙйегет», «Таһир менән Зөһрә», «Сәйфелмөлөк» кеүек дастандарҙың фольклорлылығы хаҡында һүҙ йөрөткәндә, уларҙың теге йәки был халыҡтың милли эпик репертуарында осрауынан сығып ҡына, шул төңгәлдәге окшашлыҡтар менән уртаҡлыҡтарҙы, әле яһалғаи тулы булмаған күҙәтеүҙәрҙән дә күренеүенсә, тик милли фольклорға ғына бәйләп ҡалдырыу методологик яҡтан да, логика йәһәтенән дә дөрөҫ булмаҫ ине.



## АҢЛАТМАЛАР

Башта китаптағы текска ҡағылған мәғлүмәттәр (әҫәрҙең ҡасан, ҡайҙа, кем тарафынан яҙып алыныуы, тәү башлап ҡайҙа баҫылыуы һ. б.) бирелә. Унан һуң, бүтән версиялары, варианттары хаҡында әйтелә; айырым мотивтарға, күренештәргә, деталдәргә ҡарата иҫкәрмәләр яһала; һәр варианттың идея-эстетик һәм поэтик үҙенсәлектәрен тикшеренеүселәргә еткереү маҡсатында, текстологик сағыштырыуҙар үткәрелә, айырымлыҡтары күрһәтелә.

Әҫәрҙәрҙе яҙып алыусыларҙың текска ҡағылышлы иҫкәрмәләрен һаҡлау әһәмиәтле һаналып, уларҙы ла бирергә тырыштылды. Варианттарҙа осраҡандары шул биттә юл аҫтына төшөрөлдө. Яҙып алыусы тарафынан айырым һүҙҙәргә бирелгән аңлатмалар һүҙлеккә күсерелде. Томды төҙөүселәрҙең аңлатмаларынан принципиаль айырылган йәки оригиналь тойолған осраҡтарҙа йәйә эсендә шул һүҙ аңлатмаһының авторы күрһәтелде.

## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТЫУҘАР:

*БДУ БӘК фф* — Башҡорт дәүләт университеты башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһының фольклор фонды.

*БХИ, 1, 1954* — Башҡорт халыҡ ижады. 1-се том /Төҙөүсеһе, мөхәррире, кереш мәкәлә һәм аңлатмалар биреүсеһе Ә.И. Харисов. — Өфө, 1954.

*БХИ. Риүәйәттәр, легендалар* — Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Төҙөүсеһе, инеш мәкәлә һәм аңлатмалар авторы Фәнүзә Нәҙершина, Өфө, 1996.

*Ғилми архив* — Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты.

## Ҡиссаи Йософ

ҒА: Ҡулъяҙма № 33—а9; 20,5×16,5; 15,5×12; 17. Күләме 162 бит, 4896 шиғри юл. Ҡулъяҙманың тәүге өлөшөндә «Киҫекбаш» поэмаһы күсерелгән. «Ҡиссаи Йософ» дүртенсе «б» битенән башлана. Әҫәргә «Һәҙа китаб Йософ ғәлиәссәләм» тип баш ҡуйылған.

Текст баҫма китап тексынан 916 шиғри юлға күберәк. 44 юллыҡ хәтимәлә поэманың яҙылыу ваҡыты әйтелә;

> Тарих ошо алты йөз утыҙындан
> Бу зәғиф бу китаби дөзде имде.

Поэманың яҙылыу ваҡыты — һижрә менән 630-сы йыл, хәҙерге йыл иҫәбенсә 1233 йыл, тип күрһәтелә.

Ҡулъяҙманы күсереүсе — Сәйфулла бин Ҡорбанай. Күсереп бөткәндең һуңында ул үҙенең исемен яҙып, әҫәрҙе «нөсхә әш-шәриф»тән, йәғни аҫыл, ышаныслы нөсхәнән күсереүсе айырым билдәләп китә. Яҙып бөткәс, яҙма иғтибарлап тикшерелгән, хаталы урындары юйылып төҙәтелгән, төшөп ҡалған юлдар ситенә өҫтәлгән.

Күсереү ваҡыты — 1834 йыл.

Рәсәйҙә етештерелгән ҡағыҙ, «1833» тигән һыу тамғалары бар (б. 144).

Текст ҡара менән ике бағанала яҙылған.

Ҡулъяҙманың һаҡланышы яҡшы. 1978 йылда СССР Фәндәр академияһының Ленинградтағы эксперименталь лабораторияһында (ЛКРД — документтарҙы консервациялау һәм реставрациялау лабораторияһы) реставрацияланған.

Фондҡа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 2-се археографик экспедицияһы етәксеһе проф. F. Б. Хөсәйенов тапшырған. Ҡулъяҙма 1974 йылда Илеш районының Һеңрән ауылында Мөхәммәтғәли Бикмөхәммәт улы Бикмөхәммәтовтан алынған. Әҫәр икенсе тапҡыр баҫыла. Тәүге баҫмаһы: Ҡол Ғәли. Ҡиссаи Йософ /Төркисәнән ҡайтарыусыһы, төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авт. Зәйтүнә Шәрипова (Йәғәфәрова). — Өфө: Китап, 1993. — 272 б.

«Авторына ҡағылышлы мәғлүмәттә, Көнсығыш яҙма традицияларына хас булғанса, ҡулъяҙманың ахырында: «Бони дөзгән зәғиф бәндә — аты Ғәли» («Быны яҙған зәғиф бәндә — аты Ғәли»), — тип әйтелгән. Шағирҙың исеменә археограф Р. М. Булгаков бына былдай аңлатма бирә: Во всех списках поэмы, имеющих авторский колофон, имя поэта дважды дается в одной и той же форме без всяких разночтений и вариантов — ʻАли. Однако некоторые ученые, исходя из того, что во втором случае собственному имени Али предшествует слово *кул*, сделали вывод о том, что указанное слово является компонентом двучленного имени поэта, состоящего из *Кул и* ʻАли, т. е. Ҡул ʻАли. Но такой вывод можно поставить под сомнение по двум причинам. Во-первых, сам поэт называет себя только одним именем и никаких других элементов своего имени не приводит: Зәғиф бәндә, ады Ғәлй или Да'иф банда ати Кул ʻАли ʻНемощ-

ный раб, чье имя 'Али'. Во-вторых, слово *кул* — это не элемент имени, а самостоятельное слово, имя нарицательное, со своим конкретным значением: «1. раб, невольник. 2. перен. раб божий, человек»[15] и «крестьянин; слуга». Тюркское *кул* является семантическим и функциональным эквивалентом персидского *банда* (1. раб, невольник: *банда-и худа* 'раб божий, человек'; 2 слуга) и арабского *'абд* (1. раб, невольник; слуга; 2 религ. раб божий). Причем в тексте колофона поэмы тюркское *кул* и персидское *банда* употребляются параллельно. Автор называет себя рабом божьим вне всякой связи со своим именем. Йарликагил йа рахим ул хата кули 'О Милосердный, отпусти грехи мне, грешному рабу твоему', Тәүфиҡ сәндән уманурман мән зәғиф ҡол 'Я, немощный *раб*, уповаю на содействие твое'.

Что же касается совместного употребления имени собственного со словом *кул*, то оно, с одной стороны, само по себе не дает никакого повода для включения слова *кул* в состав имени, а с другой — свидетельствует о проникновении в литературный этикет религиозной формулы представления человеком самого себя как раба божьего, характерной и для произведений других средневековых тюркских поэтов (Булгаков Р. М. «Кысса-и Йусуф» Али: Сведения различных списков о поэме и ее авторе //Поэма «Кысса-и Йусуф» Кул Гали: Проблематика, поэтика, язык произведения. — Уфа: Изд-во Башкирск. н/центра Уральского отд. АН СССР, 1988. — С. 66—67).

Ҡол Ғәли үҙе мөрәжәғәт иткән «Әнис әл-мөридин» авторы Ансари киссаның ун төрлө мәғәнәһен айырып атап әйтә: «Аҡыл эйәләре уны — матурлыҡ, Мөртәттәр — сабырлыҡ, Дин әһелдәре — өгөтнәсихәт, Ғалимдар — өркөтөр, Бәғзеләр — килештерер, Хәсрәтлеләр — һағыш, Ғашиҡтар — һөйөү, Мөриттәр — илаһи мөхәббәт, Тоткондар — ғазапланыу, Ябай халыҡ Йософ сүрәһе, тип атай.

[1] *Алла* — ислам дине тәғлимәтендә алла образын тыуҙырыусы сифаттарҙың 99 атамаһы бар: ҡадир (көҙрәтле, булдыҡлы), собхан (маҡтаулы, данлыҡлы), халиҡ (донъяға яралтыусы), йәлил (шөһрәтле, бөйөк), жаббар (бик көслө, ҡеүәтле), зөләлжәләл (бөйөк, ҙур), тәңре, хоҙай, мәүлә, илаһи, изге, хаҡ, оло эйә. рахман һ. б. Ҡиссала был атамалар йыш ҡына «алла» һүҙе урынына ҡулланыла.

[2] *Мөхәммәт* (570—632) — ислам диненә нигеҙ һалыусы.

[3] *Ике йәйә араһы* — дини хикәйәттәр буйынса, Мөхәммәт пәйғәмбәр, ете ҡат күккә ашып. алла менән һөйләшкәндә, уларҙың араһы — ике йәйә араһы булған, имеш.

[4] *Мәғәрә эйәһе* — Әбү Бәкер (572—634). Мөхәммәттең беренсе варисы (уларҙы хәлиф тип йөрөткәндәр). Дини эшмәкәрлеген дауам итеүсе. Дини хикәйәт һөйләгәнсә, Мөхәммәткә ҡурҡыныс янағанда, мәмерйәлә йәшереп тотҡан, имеш. (Мәғәрә — мәмерйә.)

[5] *Ғүмәр Хаттаб улы* (591—644) — Әбү Бәкерҙән һуң ҡуйылған икенсе хәлиф.

[6] *Ғосман бине Ғаффан* (575—656) — өсөнсө хәлиф. Мөхәммәттең кейәүе.

[7] *Ғәли бине Әбү Талиб* — (?—661) — дүртенсе хәлиф, Мөхәммәттең кейәүе. Дин өсөн көрәштә күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ғәли батыр исеме алған. Уның хаҡында бик күп хикәйәттәр һаҡлан-

ган. Ғəли исеме менəн ислам диненда « Шиит» мəҙһəбе барлыкка килеү бəйлəнгəн. Зөлфəкəр — Ғəли батырҙың кылысы, тəржемəлə «билен өҙə сабырлык» тигəнде аңлата.

[8] *Хəсəн* (625—669), *Хөсəйен* (626—680) — Мөхəммəттең ейəндəре, кыҙы Фатима менəн Ғəлиҙең улдары, ислам диненең шиит мəҙһəбендəге имамдар.

[9] *Мостафа* (һайлап алынған), əхмəт (мактаулы, данлыклы), рəсүл (илсе), алла һөйгəне — Мөхəммəт пəйғəмбəрҙе һүрəтлəүсе атамалар. Кисса тексында «Мөхəммəт» һүҙен йыш кына алмаштырып килəлəр.

[10] *Сабит улы Ноғман* (696—797) йəки Əбү Хəнифə, ислам тəғлимəтен тəү башлап яҙмаға теркəгəн дин ғалимы.

[11] *Якуп* — Көрьəндə телгə алынған пəйғəмбəрҙəрҙең береһе. Имеш, Йософтоң атаһы, сығышы менəн Ибраһим пəйғəмбəрҙең нəҫеленəн, «Тəүрат»тағы «Йаков» образына тап килə.

[12] *Нəби* (ғəрəп һүҙе) — алла һүҙҙəрен ишетеүсе һəм башкаларға еткереүсе. Көрьəн буйынса иң тəүге нəби — Əҙəм, унан һуң улар күп булған. Əммə Көрьəндə тик 28 нəби (Нух, Ибраһим, Ғайса, Дауыт, Якуп, Йософ, Əйүб, Муса һ. б.) тураһында тасуирлана. Мөхəммəт — иң һуңғы нəби. Пəйғəмбəр (фарсы һүҙе) — шул ук мəғəнəлə.

[12] *Исхак* — Көрьəндə телгə алынған пəйғəмбəрҙəрҙең береһе, Ибраһим нəбиҙең улы, Библиялағы Исаак образына тап килə.

[13] *Ибраһим нəби* — Көрьəндə телгə алынған пəйғəмбəрҙəрҙең береһе. Һəр пəйғəмбəрҙең үҙенə генə хас билдəлəмəһе булған. Ибраһимдыкы — хəлил Алла (алланың дуҫы). Ул тəү башлап алланың берлегенə инанырға өндəгəн. Библиялағы Авраам образына тап килə.

[14] *Сəждə кылыу* — доға укығанда маңлайҙы һəм танауҙы ергə тейҙереп алыу (табыныу).

[15] *Ябраил* — дини хикəйəттəр буйынса, алланың иң якын дүрт ярҙамсы фəрештəлəренең береһе, алла кушканын нəбиҙəргə еткереп йөрөүсе.

[16] *Туған калаһы Мəккəлə* пəйғəмбəрлеген танымай, үҙен эҙəрлеклəй башлағас, Мөхəммəт 620 йылдарҙа 400 сакрым тирəһе алыҫлыкта яткан Йасриб шəһəре кешелəре менəн бəйлəнешкə инə. Ул вакытта Йасрибта мəжүси һəм йəһүт динен тоткан ғəрəп кəбнлəлəре, башка халыктар йəшəгəн була. 622 йылда Мөхəммəт пəйғəмбəр Йасрибка күсеп китə һəм аҙак был кала «Мəҙинəт əн-нəби» (Пəйғəмбəр калаһы), «Мəҙинə» тип йөрөтөлə башлай. Күрəһең, киссала Мөхəммəттең Йасрибка килгəс, йəһүттəрҙе ислам динено күсергə өндəгəне тасуирлана. (Ислам, Энциклопедический словарь, М., 1991, с. 178.)

[17] *Жəрйан* — ниндəй ҙə булһа эштең, хəлдең ағышы, булып тороуы. Тарик — Кош юлы йондоҙлого, Бирйан — кыҙҙырылған, курылған, Кабəс — Уксы йондоҙлоғо, Ҫабит — даими: үҙ һүҙле, һүҙенə тоғро һ. б. Ғомуд — тура торған, бағана. Жарих — яралау; ялғанға сығарыу һ. б. Фəрг — бүлек, киҫəк, тармак.

Йондоҙ атамалары төрлө сығанактарҙа төрлөсə. Мəҫəлəн, Пермь кулъяҙмаһында — Бəйан, Тарик, Рийан, Зөлкуғтар, Кабəс,

Сабит, Fомуд, Байыҡ, Ҡылыҡ, Сариж, Фәрғ. Ҡазан баҫмаһында (Ҡазан, 1983, 425-се б). — Мәйан, Тариҡ, Бәрйан, Ҡәнған, Кабәс, Сабит, Fомуд, Хәйал, Мәлик, Сәрих, Сәпуғ (һуңғы юлы теүәл түгел. — Зәйтүнә Шәрипованың иҫкәрмәһе).

[18] *Рисаләт* — пәйғәмбәрлеккә рөхсәт; рисаләт миншураты — пәйғәмбәрлек билдәһе.

[19] *Исраил* — «исра — алла», йәғни алла ҡоло. Халыҡта Исрафил тип беләләр.

[20] *Нәмруд* — боронғо вавилон батшаларының береһе. Имеш, Ибраһим пәйғәмбәр уны алланың берлегенә инанырға өгөтләй башлағас, асыуынан Ибраһимды утҡа ырғытҡан, әммә алла ҡөҙрәте Ибраһимды утта яндырмаған, ҡотҡарған.

[21] *Исмәғил* — Ҡөрьәндә телгә алынған заттарҙың береһе, Ибраһим нәби улы. Имеш, тоғролоғон һынау өсөн, алла Ибраһимға улын ҡорбан итергә бойора. Зәм-зәм шишмәһе лә Исмәғилдең ергә аяғы менән төрткән урындан сыға башлаған, имеш.

[22] *Fад* — Fәрәбстан ярымутрауында бик борон йәшәгән ярым мифик халыҡ исеме. Хәҙерге Йәмән республикаһындағы Аден (Гаден) ҡалаһы һәм боронғо хикәйәттәрҙә «ерҙәге ожмах» итеп һүрәтләнгән Эдем ҡалаһы ошо исем менән бәйле, тип иҫәпләйҙәр. Кафыр — танымаусы, белмәүсе, динһеҙ. Ҡар.: «Сәйфелмөлөк» 4-се аңлатма.

[23] *Әле беҙ файҙаланған* Һенрән ҡулъяҙмаһында (ошо күрһәтелгән урындан ары) 60 юл күләмендә текст яҙылган бит төшөп юғалған. Уның урынына шартлы рәүештә Пермь ҡулъяҙмаһы тип аталған сығанаҡтан 20—21 биттәге текст алынды.

[24] *Хәбәши* — Эфиопия иле кешеһе.

[25] *Һеңрән ҡулъяҙмаһында* 2 бит төшөп юғалган. Ошо строфанан артабан 80 юл текст Пермь ҡулъяҙмаһынан (37—39-сы биттәр) алынды.

[26] *Нил йармағы* — *Нил даръяһы* мәғәнәһендә.

[27] *Юныс* — Ҡөрьәндә телгә алынған пәйғәмбәрҙәрҙең береһе, бер сүрә уның исеме менән аталган. Хикәйәттәр буйынса, алланың берлегенә ышанмауы арҡаһында, төрлө мажараларға осрап, балыҡ йотоп ебәргән һәм, тәүбәгә килгәс, өс көндән һуң бер сүллеккә сығарып ырғытылған. Библиялағы Ионаға тап килә.

[28] *Сөләймән* — Ҡөрьәндә телгә алынған пәйғәмбәрҙәрҙең береһе. Имеш, Сөләймән ҡоштар һәм хайуандар телен белә, бөтә тәбиғәт көстәрен үҙенә буйһондора ала. Унын мөғжизәле көсө «алла» исеме яҙылган йөҙөгөндә була. Библиялағы Соломонға тап килә.

[29] *Рәсүлиййәт* — алланың илсеһе булыу билдәләре.

[30] *Аралашыу теле* — авторҙың йөкмәткене ҡатмарландырып ебәреү өсөн файҙаланған бер алымы. Был хаҡта ҡиссаның дүрт урынында әйтелә.

Текста телдәрҙең аңлатмаһы ике төрлө яҙылған: тәүге өс осраҡта бер төрлө — «ғәрәпсә». Һуңғыһы «ғибри» теле тип уҡылды, шулай итеп Йософ һәм ағаларының теле — ғәрәп, ә мысырлылар, шул иҫәптән Мөҫәлим, ғибри (боронғо йәһүт — иврит) телендә һөйләшә булып сыға.

[31] *Ғазраил* — аллаға яҡын торған дүрт фәрештәнең береһе. Имеш, ул кешеләрҙең яҙмышын белә, әммә ваҡытын әйтә алмай. Алла тәхете эргәһендә үҫкән ағастан үлә торған кешенең исеме яҙылған япраҡ өҙөлөп төшөү менән, 40 көн эсендә кешенең тәненән йәнен айырырға тейеш икән. Икенсе төрлө Израил тип тә йөрөтәләр.

[32] *Муса* — Ҡөрьәндә телгә алынған пәйғәмбәрҙәрҙең береһе. Уның аша ергә «Тәүрат» китабы ебәрелгән, имеш. Библиялағы Моисейға тап килә.

[33] *Алда һөйләнелгәнсә,* Йософ шәһәренә ингән саҡта мәлик Раян вафат булғайны, тағы кире терелгән булып сыға. Башҡа риүәйәттең дауамы, тип тә, йә автор тарафынан ебәрелгән теүәлһеҙлек тип тә аңларға була.

[34] *Кәлимулла* — алла әйткәнде кешеләргә еткереүсе.

[35] *Пайҡы хәҙрәт* — хәбәр йөрөтөүсе.

[36] *Бидғәт* — рәсми дингә ҡаршы сыҡҡан тәғлимәт, тыйылған эш.

[37] *Мосолмандарҙа* йыл иҫәбе Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Мәккәнән Йасриб (Мәҙинә) шәһәренә күсеү (һижрәт) ваҡытынан — 622 йылдан башлана. 630 йыл — милади 1233 йылға тура килә.

[38а] «Башҡортостанда классик Көнсығыш әҫәрҙәрен халыҡ араһында уҡып ҡына түгел, ә уларҙың ҡайһы берҙәрен яттан һөйләп тә йөрөүселәр һәм шул юл менән нәфис әҙәбиәт ҡомартҡыларын йәшәтеүселәр — бөтәһенән дә элек үҙҙәренең бурыстарын дини хеҙмәт үтәү менән генә сикләмәгән муллалар, хәлфәләр һәм шәкерттәр булған. Был хаҡта башҡорт фольклорында «Тархан ҡыҙы менән «Йософ китабы» тигән махсус бер легенда ла бар. Унда халыҡтың рухи культураһын күтәреүҙә файҙалы һәм маҡтаулы хеҙмәт күрһәткән уҡымышлыларҙың яҡты образы кәүҙәләндерелгән». Харисов Ә. И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы: XVIII—XIX быуаттар. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1965. — 200-се б.

## Тархан ҡыҙы менән «Йософ китабы»

Борон-борон заманда бер башҡорт тарханының бик һылыу ҡыҙы булган. Ҡыҙ бик холоҡһоҙ икән, бер кемде лә яратмай ҙа, оҡшатмай ҙа икән был. Атаһы кейәү таба алмай ҡаңғырып, тамам тәҡәте ҡороп бөткән.

Тарханды ҡыҙғанып, бер ҡарт хажи уға шундай әмәл өйрәткән:

— Мысыр батшаһында «Йософ менән Зөләйха» тигән бер мөхәббәт китабы бар икән, шуны уҡыған бер кеше йән һөйгәнен таба икән, — тигән.

Тархан күп уйлап тормаған, Ырыҫбай исемле бер йылғыр ғына мулланы саҡыртҡан да, Мысырға барып, ана шул мөхәббәт китабын алып ҡайт, тип бойорған. Юл хәжәте минән булыр, иллә-мәгәр йәһәтерәк йөрөй күр, тигән. Ырыҫбай мулла Мысыр батшаһына киткән. Муллаға мөхәббәт китабын алып ҡайтырға түгел, шунда һарайҙан сыҡмай ғына уҡып торорға биргәндәр. Иртән алаһың да

төнгөләккә үҙ урынына ҡуяһың. Уҡып бөтмәһәң, йәнә иртәгеһен алып, кис менән урынына ҡуяһың, тигәндәр.

Был шартты Ырыҫбай боҙмай үтәгән. Китапты иртән алып уҡыған да, уҡығанын көн буйына ятлап, кис батшаның китап кәштәһенә ҡуя икән. Ятлаған өлөшөн, төн ултырып, күнеленән ҡағыҙға яҙа икән. Ете көндә «Йософ китабы»н ятлап алып, һәр бер һүҙен төн буйы керпек ҡаҡмай ҡағыҙға төшөрөп, Мысыр батшаһына күп рәхмәттәр әйтеп, Ырыҫбай мулла Тыуған иленә ҡайтып киткән.

Ҡайтып ингәс тә, мулла ҡулъяҙманы хан ҡыҙына тотторған. Ҡыҙ, ашар ашын, йоҡлар йоҡоһон онотоп, уҡыған да уҡыған, ти. Был мөхәббәт китабын уҡып бөткәс, тәмле йоҡоға сумған. Төшөндә һөләктәй һылыу бер егетте күреп, шуға мөкиббән китеп ғашиҡ булған, ти. Был эшкә ҡыҙынан былай атаһы ҡыуанған. Мулланан: «Был хеҙмәтең өсөн һиңә ниндәй бүләк бирәйем һуң?» — тип һораған. Мулла уға: «Миңә бер ниндәй ҙә бүләк кәрәкмәй, бына ошо үҙем ятлап алып ҡайтҡан «Йософ менән Зөләйха» китабын ил эсендә ырыуҙан ырыуға, ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгә, йорттан йортҡа уҡып йөрөргә рөхсәт итһәң, мин шуға бик ҡәнәғәт булыр инем», — тигән.

Тархан уйға ҡалған, шунан ул: башҡа бүләк һора, быныһына риза була алмайым, ни өсөн тиһәң, минең арҡала бөтә эбер-себер йәш-елкенсәк үҙ ишен табып, бик рәхәт йәшәп китмәй торһондар әле, тип, ҡырт киҫкән. Шулай ҙа Ырыҫбай мулла әйткәнде бәйнәбәйнә тыңлағас, тархан был яман уйын үҙгәртергә мәжбүр булған. Ни өсөн тигәндә, мулла тарханды ҡурҡытҡан: «Һинеңсә итһәк, тарханым, — тигән ул, — ҡыҙың төшөндә күреп ғашиҡ булған егете менән ҡауыша алмайынса һарғайып үләсәк. Ул егет, кейәүең булһын өсөн, ҡыҙыңды төштә күреп ғашиҡ булырға тейеш, һәм шунан ул үҙе эҙләп килер. Ә «Йософ китабы»н уҡымай йәиһә уны тыңламай тороп, ул быны эшләй алмай», — тигән.

Тар күңелле тархан, быға ҡаршы һүҙ әйтә алмай, ауыҙы ябылған. Нишләһен, риза булған.

Ырыҫбай мулла, бөтә илде ҡыҙырып, ырыуҙан ырыуға, ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгә «Йософ менән Зөләйха» китабын яттан һөйләп йөрөгән. Халыҡ араһында ул иң ҡәҙерле, иң һөйөклө ҡунаҡ булып дан алған. Уның исеме бөтә тирә-яҡҡа таралған. Тиҙҙән теге егет тә, тархан ҡыҙын төшөндә күреп, йәне-тәне менән ғашиҡ булған. Урал арҡалап, Иҙел кисеп, михнәт сигеп, хәтһеҙ ерҙәрҙе үтеп килеп, йән һөйгәнен эҙләп тапҡан, ти. Ике йәш йөрәк ана шулай ҡауышҡан, ти.

*1959 йылда Өфө ҡалаһында йәшәүсе уҡытыусы-пенсионер Вазифа Хөсәйеновanan яҙып алынған. Вазифа Хөсәйенова был әкиәткә тартым легенданы үҙенең ире Ғәлимйән Суфияр улы Хөсәйеновтан ишеткән. Был сюжет Башҡортостандың Балтас районында таралған булған. (СССР Фәндәр академияһы Урал бүлексәһе Башҡортостан ғилми үҙәгенең ғилми архивы ф. 3, оп. 12/348; 1—5-се биттәр).*

(Ҡар.: Ғилми архив. ф. 3, оп, 12/456; Харисов Ә. И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы: XVIII—XIX быуаттар. — Өфө: БКН. 1964. —

200—201-се б.). БХИ: Риүәйәттәр. легендалар /Төҙ., инеш мәк. һәм аңлатмалар язвыусыһы Фәнүзә Нәҙершина. — Өфө: БКН, 1980. — № 278; Өфө: Китап, 1997. — № 335; Башкирское народное творчество: Предания и легенды /Сост., авт. вст. статьи и коммент. Ф. А. Надршина. — Уфа: БКИ, 1987. — № 369).

[386] «Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһының беренсе варианты итеп бирелгән «Ҡиссаи Йософ» әҫәрен һәм томдағы уның башҡа вариант, версияларын сағыштырыу өсөн, «Ҡөрьән Кәрим»дә 12-се сүрә — Йософ сүрәһе» тип исемләнгән версияһын тулы килеш килтерәбеҙ. Текст «Ҡөрьән Кәрим»дең башҡортса баҫмаһынан алынды (Ҡар.: Ҡөрьән Кәрим. — Өфө: БКН, 1992. — 130—137-се б.).

## Йусуф (Йософ) сүрәһе

1. *Әлиф ләм ра.* Ошолар — асыҡ китаптың аяттары.

2. Беҙ уны ғәрәп телендә Ҡөрьән итеп индерҙек, моғайын, һеҙ аңларһығыҙ!

3. Беҙ, һиңә ошо Ҡөрьәнде үәхи ҡылып, иң яҡшы хикәйәләү менән һиңә һөйләйбеҙ, быға тиклем һин битарафтарҙан булһаң да.

4. Бына Йософ үҙенең атаһына: «Эй, атай! Мин ун бер йондоҙ, Ҡояшты һәм Айҙы күрҙем — мин уларҙың миңә сәждә ҡылғандарын күрҙем», — тине.

5. Ул әйтте: «Эй, улыҡайым! Күргәнеңде [ир] туғандарыңа һөйләй күрмә, улар һиңә ҡаршы хәйлә ҡорорҙар. Кеше өсөн шайтан асыҡ дошман бит!

6. Бына ошолай Раббың һине һайлар һәм һиңә уаҡиғаларҙы аңлатыуҙы өйрәтер, Үҙ ниғмәтен һиндә һәм Яҡуп ырыуында тамамлар, элек һинең атайҙарың Ибраһимда һәм Исхаҡта тамам ҡылған кеүек. Ысынлап та, Раббың белә, хикмәтле!»

7. Йософта һәм уның туғандарында һорашыусы кешеләр өсөн аяттар бар ине инде.

8. Бына улар әйтте: «Әлбиттә, Йософ һәм уның туғаны атайыбыҙға беҙгә ҡарағанда һөйөклөрәк, ә беҙ күмәкбеҙ. Ысынлап та, атайыбыҙ асыҡ аҙашыуҙа!»

9. «Йософто үлтерегеҙ йәки алыҫ ергә илтеп ташлағыҙ: шул уаҡытта атайығыҙҙың йөҙө һеҙгә боролор һәм бынан һуң һеҙ яҡшы кешеләрҙән булырһығыҙ».

10. Уларҙың береһе: «Йософто үлтермәгеҙ, ә ҡоҙоҡ төбөнә ташлағыҙ, уны үтеп барыусыларҙың берәйһе алыр, әгәр һеҙ быны эшләһәгеҙ», — тине.

11. Улар әйтте: «Эй, атай! Ниңә һин Йософто беҙгә ышанып тапшырмайһың, беҙ уға нәсихәт биреүселәр бит!

12. Иртәгә уны беҙҙең менән ебәр, күңел асһын һәм уйнаһын, беҙ бит уны һаҡлайбыҙ».

13. Ул: «Әгәр һеҙ уның менән китһәгеҙ, был мине көйҙөрөр, һәм һеҙ уға иғтибарһыҙ булған саҡта, уны бүре ашап китеүҙән ҡурҡам», — тине.

14. Улар: «Әгәр уны беҙ күмәк булып та бүре ашаһа, беҙ зыян күреүселәрҙән булырбыҙ», — тинеләр.

15. Шунан улар уны алып киттеләр ҙә ҡоҙоҡ төбөнә һалырға һүҙ ҡуйыштылар. Ә Беҙ уға: «Һин уларға был эштәре тураһында үҙҙәре белмәгән саҡта хәбәр итерһең», — тип үәхи ҡылдыҡ.

16. Һәм бына улар кис менән аталары ҡаршыһына илашып килделәр.

17. Улар: «Эй, атайыбыҙ! Беҙ бер-беребеҙ менән ярышырға тотондоҡ һәм Йософто әйберҙәр эргәһендә ҡалдырҙыҡ, һәм уны бүре ашаны. Әммә, беҙ дөрөҫ һөйләһәк тә, һин ышанмаясаҡһың», — тинеләр.

18. Улар ялған ҡанға [бәрәс ҡанына], буялған күлдәк алып килделәр. Ул: «Эйе, күңелдәрегеҙ һеҙгә эште матур итеп күрһәтте, ләкин [миңә] — гүзәл сабырлыҡ... Һеҙ һөйләгән эш тураһында Алланан ярҙам һорарға кәрәк», — тине.

19. Һәм мосафирҙар килде, улар һыу сығарыусыларын ебәрҙеләр, ул күнәген төшөрҙө һәм: «Ниндәй шатлыҡ, был — йәш егет», — тине. Улар уны тауар кеүек итеп йәшерҙеләр, ә Алла уларҙың нимә эшләгәндәрен белеп торҙо.

20. Улар уны һанаулы дирһәмдәрҙән торған аҙ хаҡҡа һаттылар, һәм улар был эштә арҙан эш иттеләр.

21. Уны һатып алған Мысыр кешеһе ҡатынына: «Уны яҡшы урынлаштыр, бәлки, ул беҙгә файҙа итер йәки беҙ уны уллыҡҡа алырбыҙ», — тине. Шулай итеп, Беҙ Йософто был ерҙә урынлаштырҙыҡ, — уаҡиғаларҙы аңлатырға өйрәтеү өсөн. Алла Үҙ эшендә еңеүсе, ләкин кешеләрҙең күбеһе белмәй!

22. Һәм ул бәлиғ булгас, Беҙ уға хикмәт һәм белем бирҙек. Бына ошолай бүләкләйбеҙ Беҙ яҡшылыҡ эшләүселәрҙе!

23. Ул булған өйҙөң хужабикәһе уны ҡыҙыҡтырырға маташты, ишектәрҙе бикләп ҡуйҙы ла: «Кил бында!» — тине. Ул: «Алла һаҡлаһын! Хужам минең урынымды күркәм ҡылды бит. Ысынлап та, золом ҡылыусылар бәхетле булмай!» — тине.

24. Һәм ҡатын уны теләне, һәм ул ҡатынды теләне — Раббыһынан иҫбатлауҙы күргәнгә тиклем, был — унан яманлыҡты һәм боҙоҡлоҡто Беҙ ситләштереү өсөн, ысынлап та, ул — Беҙҙең ихлас ҡолдарыбыҙҙан!

25. Улар ярышып ишеккә табан ынтылдылар, һәм ҡатын уның күлдәген арттан йыртты, һәм улар ишек янында ҡатындың хужаһын осраттылар. Ҡатын: «Һинең ғаиләңә яманлыҡ теләгән кешегә уны зинданға ултыртыуҙан йәки интектергес ғазаптан башҡа ниндәй яза?» — тине.

26. Ул: «Ул [ҡатын] мине аҙҙырырға теләне», — тине, һәм ҡатын ғаиләһенән бер шаһит шаһитлыҡ итте: «Әгәр уның күлдәге алдан йыртылған булһа, ҡатын раҫ һөйләгән булыр, ә ул алдаҡсы.

27. Һәм әгәр күлдәк арттан йыртылған булһа, ул саҡта ҡатын алдай, ә ул дөрөҫтө һөйләй».

28. Һәм ул [ир] күлдәктең арттан йыртылғанын күргәс, [ҡатынға] әйтте: «Был — һеҙҙең хәйләләрегеҙҙән, ысынлап та, хәйләгеҙ бөйөк!

29. Йософ, һин бынан йөҙ сөйөр, ә һин [катын] гонаһындан ярлыҡау һора, һин гонаһлы бит».

30. Ҡалала ҡатын-ҡыҙҙар: «Түрәнең ҡатыны егетте ҡыҙыҡтыра. Ул [егет] ҡатынды мөхәббәт менән тултырған. Беҙ ул ҡатынды асыҡ аҙашыуҙа күрәбеҙ», — тип һөйләнеләр.

31. Ул ҡатын, уларҙың мәкерҙәрен ишеткәс, улар артынан саҡырырға кеше ебәрҙе. Уларға урын әҙерләне һәм уларҙың һәр ҡайһыһына бысаҡ бирҙе һәм [Йософҡа]: «Улар алдына сыҡ!» — тине. Улар уны күргәс, уны ололанылар, үҙҙәренең ҡулдарын ҡырҡтылар һәм: «Алла һаҡлаһын! Был — кеше түгел, был гүзәл фәрештә!» — тинеләр.

32. Ул [ҡатын]: «Бына һеҙгә ошо егет, уның арҡаһында мине шелтәләнегеҙ, мин уны ҡыҙыҡтырҙым, әммә ул ғиффәтле булды. Әгәр ул мин ҡушҡанды эшләмәһә, ул зинданға ябылыр, һәм хурланғандарҙан буласаҡ», — тине.

33. Ул: «Раббым! Улар өндәгән нәмәгә ҡарағанда төрмә минә һөйөклөрәк. Әгәр һин минән уларҙың мәкерҙәрен ситләштермәһәң, улар яғына ауышырмын һәм наҙандарҙан булырмын», — тине.

34. Раббыһы уның доғаһын ҡабул итте һәм унан ҡатындарҙың мәкерен ситләштерҙе. Ысынлап та, Ул ишетә, белә!

35. Бынан һуң, улар аяттарҙы күргәс, ниндәйҙер ваҡытҡа уны зинданға ябырға уйланылар.

36. Һәм уның менән зинданға ике егет инде. Уларҙың береһе: «Бына мин үҙемде хәмер һығам тип күрәм», — тине, икенсеһе: «Бына мин баш өҫтөмдә икмәк күтәреп барам, уны ҡоштар суҡығанды күрәм, беҙгә шуны аңлатып бир әле. Ысынлап та, беҙ һинең изгелек ҡылыусыларҙан булыуыңды күрәбеҙ», — тине.

37. Ул әйтте: «Һеҙҙе ризыҡландыра торған ашамлыҡ һеҙгә килер алдынан мин ул турала һеҙгә аңлатып бирермен, ул әле килеп тә өлгөрмәҫ. Был һеҙгә — миңә Раббым өйрәткәндәрҙән. Мин Аллаға иман килтермәгән һәм ахирәт көнөнә ышанмаған халыҡтарҙың динен ташланым.

38. Мин аталарым Ибраһим, Исхаҡ һәм Яҡуптың диненә эйәрҙем. Беҙ Аллаға һис бер нәмәне тиңдәш ҡылырға тейеш түгелбеҙ. Был беҙгә һәм кешеләргә Алланың йомартлығынан, әммә кешеләрҙең күбеһе шөкөр итмәй.

39. Эй, зиндандаш иптәштәрем! Тарҡау раббылар яҡшыраҡмы, әллә берҙән-бер ҡеүәтле Алламы?

40. Унан башҡа һеҙ үҙегеҙ һәм ата-бабаларығыҙ ҡушҡан исемдәргә генә ҡоллоҡ ҡылаһығыҙ, Алла улар менән һис бер дәлил ебәрмәне. Хөкөм Аллала ғына. Ул тик Үҙенә генә ҡоллоҡ ҡылырға бойорҙо. Был тоғро дин, ләкин кешеләрҙең күбеһе белмәй.

41. Эй, зиндандаш иптәштәрем! Һеҙҙең берегеҙ хужаһына хәмер эсерер, ә икенсегеҙ әүернә ағасына ҡаҙаҡланыр һәм уның башынан ҡоштар суҡыр. Һеҙ һораған эш ҡылынған инде!»

42. Һәм ул былардан ҡотоласаҡ тип уйлағанына: «Хужаң алдында мине иҫкә ал!» — тине. Әммә уға хужаһы ҡаршыһында иҫкә алыуҙы шайтан онотторҙо. Шулай итеп, ул тағы бер нисә йылға зинданда ҡалды.

43. Һәм бына батша: «Бына мин ете һимеҙ һыйыр күрәм, уларҙы ете ябыҡ һыйыр ашай. Һәм ете йәшел башаҡ һәм икенселәре ҡоролар. Эй һеҙ, дәрәжәле кешеләр! Әгәр күргәнде аңлата белә торған булһағыҙ, минең күргәнгә аңлатма бирегеҙ!» — тине.

44. Улар: «Төш — хыялдар бәйләме! Беҙ хыялдарҙы аңлата белмәйбеҙ», — тинеләр.

45. Һәм теге икәүҙән ҡотолғаны, бер нисә уаҡыттан һуң иҫенә төшөрҙө. Һәм: «Ебәрегеҙ мине, мин бының аңлатмаһын һеҙгә хәбәр итермен!» — тине.

46. «Йософ! Эй, тоғро һөйләүсе! Ете һимеҙ һыйырҙы ете ябыҡ һыйырҙың ашауы тураһында һәм ете йәшел башаҡ менән ҡороған башаҡтар тураһында аңлат — моғайын, мин кешеләр янына ҡайтырмын, моғайын, улар белер!»

47. Ул әйтте: «Ете йыл ғәҙәт буйынса тырышып иген игерһегеҙ, урып алған игенде башағында ҡалдырығыҙ, ашауығыҙға киткән аҙ өлөшөнән башҡаһын.

48. Ошоноң артынан ете ауыр йыл килер. Ул йылдар, улар өсөн һеҙ әҙерләгәнде ашар, һеҙ һаҡлап ҡалған аҙ ғынаһынан башҡаһын.

49. Шуның артынан бер йыл килер, ул йылды кешеләргә ямғыр ебәрелер һәм улар [емеш] һығырҙар».

50. Һәм батша: «Килтерегеҙ уны миңә», — тине. Ебәрелгән кеше килгәс, ул: «Үҙеңдең хужаңа ҡайт һәм унан һора: «Ҡулдарын ҡырҡҡан ҡатындарға нимә булды?» — тип, — ысынлап та, Раббым уларҙың [ҡатындарҙың] мәкерҙәрен белә бит!» — тине.

51. Ул: «Һеҙ Йософто ҡыҙыҡтырғанда эшегеҙ нимәлә булды?» — тине. Ҡатындар: «Алла һаҡлаһын! Беҙ унда һис бер боҙоҡлоҡ белмәйбеҙ», — тинеләр. Түрә ҡатыны: «Хәҙер хәҡиҡәт беленде, мин уны ҡыҙыҡтырҙым, ә ул — дөрөҫтө һөйләүселәрҙән!» — тине.

52. «Был — мин уға йәшерендә хыянат ҡылмағанымды һәм Алла хыянатсыларҙың мәкерҙәрен тура юлдан алып бармаҫын ул белһен өсөн.

53. Мин үҙемдең күңелемде аҡламайым, әгәр Алла рәхмәтен бирмәһә, күңел яманлыҡҡа бойороусы бит. Ысынлап та, Раббым ярлыҡаусы, рәхимле!»

54. Һәм батша: «Килтерегеҙ уны миңә. Мин уны үҙемә алам», — тине. Һәм уның менән һөйләшкәс: «Һин бит бөгөн беҙҙә көслө һәм ышаныслы», — тине.

55. Ул: «Мине Ер хазиналарына һаҡлаусы итеп ҡуй; мин бит һаҡлаусы һәм беләм», — тине.

56. Һәм шулай Беҙ Йософто ерҙә нығыттыҡ, ул үҙе теләгән ерҙә урынлашһын өсөн. Беҙ Үҙебеҙҙең рәхмәтебеҙ менән теләгән кешегә ҡағылабыҙ һәм изгелек ҡылған кешеләрҙең әжерен зая ҡылмайбыҙ.

57. Ә инде ахирәт көнөнөң әжере — иман килтергән һәм тәҡүәле булған кешеләргә яҡшыраҡ.

58. Һәм Йософтоң туғандары килеп, эргәһенә инделәр. Ул уларҙы таныны, улар уны танываны.

59. Уларҙың кәрәк нәмәләрен уларға әҙерләгәс, ул әйтте: «Бер ата туғанығыҙҙы алып килегеҙ. Күрмәйһегеҙме ни, мин үлсәүҙе тулыһынса бирәм һәм мин ҡунаҡсылдарҙың иң яҡшыһы?»

60. Әгәр уны миңә алып килмәһәгеҙ, ул саҡта һеҙгә минән бер үлсәү ҙә булмаç, һәм миңә яҡын да килмәгеҙ».

61. Улар: «Беҙ уның атаһынан һорарбыҙ һәм, әлбиттә, беҙ уны эшләрбеҙ», — тинеләр.

62. Һәм ул үҙенең хеҙмәтселәренә: «Тауарҙарын уларҙың йөктәренә һалығыҙ, моғайын, ғаиләләренә ҡайтҡас белерҙәр, моғайын, кире килерҙәр», — тине.

63. Һәм улар, аталары эргәһенә ҡайтҡас: «Эй, атай! Беҙгә үлсәү тыйылды. Беҙҙең менән туғаныбыҙҙы ебәр, ул саҡта беҙ үлсәүҙе алырбыҙ. Ысынлап та, беҙ уны һаҡларбыҙ!» — тинеләр.

64. Ул: «Элек уның туғанын һеҙгә ышанып биргән кеүек, уны нисек ышанып тапшырайым? Алла — яҡшыраҡ һаҡлаусы, Ул — рәхимлеләрҙең иң рәхимлеһе!» — тине.

65. Улар йөктәрен асҡас, тауарҙарының кире ҡайтарылғанлығын күрҙеләр. Һәм: «Эй, атай! Беҙгә нимә теләргә? Бына беҙҙең тауарҙарыбыҙ беҙгә ҡайтарылған, беҙ үҙ ғаиләбеҙҙе туйҙырырбыҙ һәм туғаныбыҙҙы һаҡларбыҙ һәм бер дөйә үлсәү өçтәрбеҙ. Был — еңел үлсәү», — тинеләр.

66. Ул: «Һис ебәрмәйәсәкмен мин уны һеҙҙең менән, һеҙ уны миңә килтереүегеҙ тураһында Алла менән ант итмәй тороп, — әгәр һеҙ берәй нәмәгә тарымаһағыҙ ғына инде». Һәм улар ант иткәс, ул: «Беҙ бында һөйләгәнгә Алла үәкил!» — тине.

67. Һәм ул: «Эй, улдарым! Бер ҡапҡанан инмәгеҙ, ә төрлө ҡапҡаларҙан инегеҙ, һис бер нәмәлә Алланан һаҡлай алмайым мин һеҙҙе. Хөкөм фәҡәт Аллала. Мин Уға тәүәккәлләнем һәм тәүәккәлләүселәр Уға тәүәккәлләһен», — тине.

68. Улар аталары ҡушҡанса инһәләр ҙә, был уларҙы һис бер нәмәлә Алланан ҡотҡарманы, ә фәҡәт Яҡуптың күңел теләге генә үтәлде. Ул белем эйәһе ине, сөнки Беҙ уны өйрәттек, әммә кешеләрҙең күбеһе белмәй.

69. Һәм улар Йософ янына ингәс, ул үҙенең туғанына урын бирҙе, һәм: «Бына мин һинең туғаның, улар эшләгән эш тураһында ҡайғырма», — тине.

70. Уларҙың кәрәк нәмәләрен әҙерләгәндә, туғанының йөгөнә һауыт урынлаштырҙы. Унан һуң һөрән һалыусы: «Эй, карауан! Һеҙ бит урылар!» — тип ҡысҡырҙы.

71. Улар янына тегеләр килгәс: «Һеҙ нимә эҙләйһегеҙ?» — тинеләр.

72. Тегеләр: «Беҙ батшаның эсә торған һауытын юғалттыҡ, уны табып килтергән кешегә бер дөйә йөгө. Мин быны үҙ өçтөмә алам», — тине.

73. Улар: «Алла менән ант итәбеҙ! Һеҙ беләһегеҙ бит, беҙ Ер йөҙөндә боҙоҡлоҡ таратыу өсөн килмәнек, һәм беҙ урылар түгел», — тинеләр.

74. Тегеләр: «Әгәр һеҙ алдаҡсы булһағыҙ, бының язаһы нимә булыр?» — тинеләр.

75. Улар: «Бының язаһы — кемдең йөгөнән табылһа, шул кешегә яза [түләү итеп алына]. Бына шулай язалайбыҙ беҙ залимдарҙы», — тинеләр.

76. Һәм уның туғанының йөгөнән алда, ул уларҙың йөктәренән башланы, ә һуңынан уның туғанының йөгөнән һауытты сығарҙы. Бына шулай хәйлә ҡорҙоҡ Беҙ Йософ өсөн. Батша ҡануны буйынса ул уның туғанын ала алмаҫ ине, әгәр Алла теләмәһә. Беҙ теләгән кешенең дәрәжәләрен күтәрәбеҙ: һәр белем эйәһенән өҫтә белеүсе бар!

77. Улар: «Әгәр ул урлаған булһа, уның туғаны быға ҡәҙәр урлағайны бит», — тинеләр. Йософ быны күңелендә йәшереп ҡалдырҙы һәм уларға күрһәтмәне, «Урынығыҙ яғынан насарһығыҙ һеҙ, һәм һеҙ һөйләгәнде Алла яҡшыраҡ белә!» — тине.

78. Улар: «Эй, түрә! Уның атаһы оло ҡарт, уның урынына беҙҙең берәребеҙҙе алып ҡал. Беҙ һине яҡшы кешеләрҙән тип күрәбеҙ», — тинеләр.

79. Ул: «Алла һаҡлаһын йөгөнән беҙҙең әйбер табылған кешенән башҡаны алырға! Ул уаҡытта беҙ залимдарҙан булыр инек», — тине.

80. Унан өмөттәре өҙөлгәс, үҙҙәре генә кәңәшләшергә ҡалдылар. Унан ололары әйтте: «Әллә һеҙ атайығыҙҙың һеҙҙән Алла менән үәғәҙә алғанын белмәйһегеҙме? Һәм һеҙ бынан элек Йософ тураһында ла ғәҙелһеҙлек ҡылдығыҙ бит. Атайым рөхсәт биргәнгә тиклем йәки Алла миңә хөкөм ҡылғанға тиклем мин был ерҙән китмәйем. Ул — хөкөм ҡылыусыларҙың иң яҡшыһы.

81. Үҙ атайығыҙға ҡайтығыҙ һәм әйтегеҙ: «Эй, атай, улың урланы бит, беҙ үҙебеҙ белгәнгә генә шаһитлыҡ итәбеҙ һәм йәшерен нәмәне һаҡламайбыҙ.

82. Беҙ булған ҡаланан һора һәм беҙ булған карауандан һора — беҙ дөрөҫ һөйләйбеҙ бит».

83. Ул: «Эйе, күңелдәрегеҙ эште һеҙгә матур итеп күрһәтте, ләкин сабырлыҡ — гүзәл — моғайын, Алла миңә уларҙың барыһын да йыйыр. Ысынлап та, Ул — белә, хикмәтле!

84. Уларҙан йөҙөн борҙо һәм: «Их, ниндәй ҡайғы миңә Йософ өсөн!» — тине. Ҡайғынан уның күҙҙәре ағарҙы, һәм ул күңелендәген һиҙҙермәне.

85. Улар: «Алла менән ант итәбеҙ, хәлдән тайғанға тиклем йәки һәләк булғанға тиклем Йософто иҫкә алыуҙан туҡталмаҫһың инде һин!» — тинеләр.

86. Ул әйтте: «Мин ҡайғым һәм көйөнөсөм менән Аллаға зарланам, мин бит Алланан һеҙ белмәгәнде беләм.

87. Эй, улдарым! Барығыҙ, Йософ тураһында һәм уның туғаны тураһында һорашып белегеҙ. Алланың рәхмәтенән өмөтһөҙләнмәгеҙ. Ысынлап та, Алланың рәхмәтенән кафырҙар ғына өмөтһөҙләнә бит!»

88. Улар уның янына ингәс: «Эй, түрә, үҙебеҙгә лә, ғаиләбеҙгә лә бәлә ҡағылды. Беҙ аҙ тауар менән килдек, беҙгә һин үлсәүҙе тулыһынса бир һәм беҙгә саҙаҡа ҡыл. Ысынлап та, Алла саҙаҡа ҡылғандарға изге яза бирә бит!» — тинеләр.

89. Ул: «Һеҙ үҙегеҙҙең наҙан уаҡытығыҙҙа Йософ һәм уның туғаны менән нимә эшләгәнегеҙҙе беләһегеҙме һуң?» — тине.

90. Улар: «Әллә һин ысынлап та Йософмо?» — тинеләр. Ул: «Эйе, мин Йософ, ә был — минең туғаным. Алла беҙгә рәхмәтен һалды инде. Ғәмәлдә кем тәҡүәле һәм сабыр булһа... Алла яҡшылыҡ ҡылыусыларҙың әжерен зая ҡылмай!»

91. Улар: «Алла менән ант итәбеҙ, Алла һине беҙҙән артыҡ күрҙе һәм, ысынлап та, беҙ гонаһлыларҙан булдыҡ», — тинеләр.

92. Ул әйтте: «Бөгөн һеҙгә шелтә юҡ, һеҙҙе Алла ярлыҡар, Ул — рәхимлеләрҙең рәхимлеһе!

93. Барығыҙ ошо минең күлдәгем менән ҡайтығыҙ һәм уны атайымдың йөҙөнә ҡаплағыҙ — ул күрә башлар, һәм үҙ ғаиләләрегеҙ менән барығыҙ ҙа миңә килегеҙ!»

94. Ҡарауан юлға сыҡҡас, аталары: «Мин Йософтоң еҫен һиҙәм. Минең һүҙҙәремде дөрөҫ түгел тип әйтмәһәгеҙ ине!» — тине.

95. Улар: «Алла менән ант итәбеҙ, ысынлап та, һин үҙеңдең иҫке яңылышыуыңда!» — тинеләр.

96. Ә һөйөнсөләүсе килгәс, күлдәкте уның йөҙөнә ҡапланы, һәм был яңынан күрә башланы. Ул: «Әллә мин һеҙгә әйтмәнемме Алланан һеҙ белмәгәнде белеүемде?» — тине.

97. Улар: «Эй, атай! Беҙҙең гонаһыбыҙҙан беҙгә ярлыҡау һора. Беҙ бит гонаһлыларҙан булдыҡ», — тинеләр.

98. Ул: «Мин Раббымдан һеҙҙең өсөн ярлыҡау һораясаҡмын. Ысынлап та, Ул ярлыҡаусы, рәхимле!» — тине.

99. Улар Йософ янына ингәс, ул ата-әсәһенә урын бирҙе, һәм: «Алла теләһә, Мысырға именлектә инегеҙ!» — тине.

100. Ул ата-әсәһен тәхеткә күтәрҙе һәм улар уның алдында сәждә ҡылып йөҙ түбән йығылдылар, һәм ул әйтте: «Эй, атай! Ошо элек күргән төшөмдөң юрауылыр. Раббым ул төштө хаҡ ҡылды һәм, мине зиндандан сығарып һәм шайтан минең һәм туғандарым араһында дошманлыҡ ҡылғандан һуң һеҙҙе сүллектән килтереп, миңә яҡшылыҡ ҡылды. Ысынлап та, Раббым теләгән нәмәһенә илтифатлы. Ысынлап та, Ул белә, хикмәтле!

101. Раббым! Һин миңә батшалыҡ бирҙең һәм мине уаҡиғаларҙы аңлатырға өйрәттең, күктәрҙе һәм Ерҙе барлыҡҡа килтереүсе, Һин — донъяла һәм ахирәттә минең яҡлаусым, мине мосолман булғаным хәлдә уафат ҡыл һәм мине изге кешеләр араһына индер!»

102. Был — ғәйеп нәмәләр тураһында хәбәрҙәрҙән, Беҙ уны һиңә үәхи ҡылабыҙ; улар, мәкерлек уйлап, үҙҙәренең эшен ҡылырға ҡарар иткәндә, һин улар янында булманың.

103. Һәм һин теләһәң дә кешеләрҙең күбеһе иман килтермәй!

104. Һин уларҙан бының өсөн әжер һорамайһың. Был — ғәләмдәр өсөн иҫкә төшөрөү генә!

105. Улар күктәрҙә һәм Ерҙәге ни тиклем аяттар тирәһенән үтеп йөрөйҙәр һәм уларҙан йөҙ сөйөрәләр!

106. Уларҙың күбеһе Аллаға, фәҡәт Уға, тиңдәш тотоп ҡына иман килтерәләр!

107. Улар көтмәгәндә Алла ғазабының уларға ҡаплауы килеүенән йәки уларға киәттән [ҡиәмәт] сәғәте килеүенән именлектәме ни улар?

108. «Был — минең юлым. Мин күреү һәләтенә эйә булған хәлдә Аллаға саҡырам — мин һәм миңә эйәргән кешеләр. Аллаға дан, мин күп илаһтарға табыныусыларҙан түгел!» — тип әйт.

109. Беҙ һиңә ҡәҙәр ҙә фәҡәт ҡала кешеләрен уларға үәхи ҡылып ебәрҙек. Әллә улар Ер йөҙөндә йөрөмәнеләрме һәм уларға ҡәҙәр булған кешеләрҙең һуңғы көндәре нисек булғанын күрмәнеләрме? Тәҡүәле кешеләргә ахирәт йорто яҡшыраҡ бит. Аҡылға һалып ҡарамаçһығыҙмы ни һеҙ?

110. Рәсүлдәр, уларҙы алдаҡсыға һанайҙар тип өмөтһөҙләнгән уаҡытта, уларға Беҙҙең ярҙамыбыҙ килде һәм Беҙ теләгән кешеләр ҡотҡарылды. Беҙҙең ғәйрәтебеҙ гонаһлы кешеләрҙән ҡайтарылмай!

111. Улар тураһындағы ҡиссала аҡыллы кешеләргә ғибрәт булды. Был уйлап ҡына сығарылған хикәйәт булманы, әммә уға ҡәҙәр булғандарҙың хаҡлығын раçлау өсөн һәм һәр бер нәмәне аңлатыу өсөн, һәм иман килтергән кешеләргә юл күрһәтеү һәм рәхмәт өсөн [булды].

[38в] «Ҡөрьән Ҡәрим»дең, теҙмә телмәр рәүешенә килтереп, тәржемә ителгән варианттары ла бар. Шуларҙың береһе — Валерия Порохованың мәғнәүи вә аңлатмалы тәржемәһелер (Ҡар.: Коран / Пер. смыслов и комментарии. 3-е изд., дополненное и переработанное Валерией Пороховой. Гл. ред. д-р Мухаммад Саид Аль-Роша. — М.: Аль-Фуркан, 1997). Түбәндә 12-се сүрә, «Йософ менән Зөләйха» сюжетын эсенә алған «Йософ сүрәһе», бирелә (С. 254—255):

## Сура 12

## ЙУСУФ

Во имя Аллаха,
Всемилостивого и Милосердного!

1.

Алеф-Лям-Ра.
Сие — знаменья ясной Книги.

2.

Ее Мы ниспослали, как Коран арабский,
Чтоб Вы могли уразуметь.

3.

Тебе Мы повествуем лучшим сказом
Коран сей, что открыли Мы тебе,
Хотя ты прежде был из тех,
Кто пребывал в беспечности
(Не ведая об этом).

4.

Ты вспомни, как Йусуф сказал отцу:
«О мой отец! Одиннадцать светил
небесных[1]

А (с ними) солнце и луну
(Во сне) я видел преклоненными
пред мною».

5.

Сказал (отец): «О мой сынок!
Ты своим братьям о видении своем
не говори,
Чтоб не замыслили они
Против тебя дурные козни, —
Ведь Сатана[2] для человека — явный враг.

6.

Так твой Господь избрать тебя намерен:
Тебя научит толковать события и сны[3],
И (этим) завершит Свою Он милость
Тебе и роду (верного) Йакуба,
Как завершил ее Он прежде
Твоим отцам: (Ханифу) Ибрахиму и Исхаку.
Поистине, Господь твой сведущ,
Мудр (безмерно)!»

7.

В (истории) Йусуфа с братьями его
Были знамения для тех, кто вопрошал
(Об истинном значении ее).

8.

Ты вспомни, как они[4] — сказали:
«Поистине, Йусуф и брат его[5]
Милее нашему отцу, чем мы.
А ведь (числом своим) нас больше,
И наш отец, конечно,
в явном заблужденье».

9.

«Вам надлежит убить Йусуфа,
Иль в землю отдаленную изгнать;
Тогда отец свой лик к нам обратит[6],
И после этого придет к вам благочестье».

10.

Сказал один из них:
«Йусуфа вам не надо убивать.
Бросьте его на дно колодца,
И кто-нибудь из проходящих (караванов)
Оттуда подберет его,
Коль вы решили это сделать[7]».

11.

Они сказали: «Наш отец!
Ты почему не доверяешь нам Йусуфа?
Ведь все мы искренне добра ему желаем,
И добрые советчики ему.

12.

Ты завтра с нами отпусти его
Повеселиться, в игры поиграть,
И мы уж охраним его (от бед)».

13.

(Йакуб) сказал: «Я опечалюсь, если вы
С собой его возьмете.
Страшусь я, что поглотит его волк,
Когда (увлекшись своим делом)
К нему вы станете небрежны».

14.

Они сказали: «Если волк
Действительно его поглотит,
Когда нас целая толпа,
Тогда нам быть в прямом убытке[8]».

15.

И вместе с ним они ушли,
И согласились его бросить в глубину
колодца.
Но Мы внушением ему послали:
«Ты, несомненно, им однажды сообщишь
Про (истинную суть) их дела,
Когда они не будут знать (кто ты)».

16.

И поздно вечером
Они к отцу в слезах явились

17.

И молвили: «О наш отец!
Мы бегали вперегонки,
С вещами же оставили Йусуфа.
Волк поглотил его (и знаем мы:),
Ты не поверишь нам,
Даже хотя и говорим мы правду».

18.

И вот пришли они (к отцу)
Со лживой кровью на рубашке,
И он сказал: «О нет!
Вам души ваши (подсказали)
Все это дело (вымыслом) украсить[9].
(Отныне для меня) прекрасно
лишь терпенье,
(Пока Аллах не выявит всю мерзость
вашей лжи).
Лишь у Него искать мне помощь
Против того, что (так речисто)
(Сейчас) вы расписали (мне)».

19.

И караваном путники пришли,
И соглядателя (воды) послали.
Он опустил ведро (свое в колодец)
И сказал: «Какая радостная весть!
Здесь — юноша (прекрасный)[10]».
И спрятали его (как ценный дар)
для торга[11].
Аллах же знал, что делают они.

20.

И продали они его за мизерную цену[12],
(Всего лишь несколько) отсчитанных дирхам,
Умеренность при этом соблюдая.

21.

А египтянин, что купил его,
Своей жене сказал:

«Распорядись получше им:
Быть может, он доставит нам удачу,
Иль мы возьмем его за сына».
Так Мы Йусуфа утвердили в тех краях,
Чтоб толкованию событий научить.
Всевластием Своим Аллах вершит
Свой План[13],
Но большинство людей не знает (это).

22.

Когда Йусуфу зрелый возраст подошел,
Ему Мы даровали знание и мудрость.
Так воздаем Мы тем, кто делает добро.

23.

Но та, в чьем доме пребывал он,
Решилась совратить его[14],
И двери заперла, и так сказала:
«Поди сюда!»
Ответил он: «Да упаси Аллах!
Мой господин таким прекрасным сделал
Мне пребыванье (в этом доме).
Поистине, неправедным не быть во благе!»

24.

И так она его желала,
И он (в ответ) желал ее,
Если б свидетельства Владыки своего[15]
Он не увидел, —
Так (Мы веление Свое ему послали),
Чтоб зло и мерзость от него отвлечь.
Он — истинно, из искренних служителей
(Аллаха)!

25.

И оба бросились бегом к двери,
И порвала она ему рубаху со спины.
А у двери столкнулись оба с господином,
И молвила она:
«Каким должно быть воздаяние тому,
Кто очагу семейному недоброе задумал,
Как ни темница иль мучительная кара?»

26.

(Йусуф) сказал:
«Это она пыталась соблазнить меня».
И был свидетелем сему ее (кузен-младенец).
«Если разорвана его рубаха на груди[16],
Она права и лжец — Йусуф.

27.

Но если на спине разорвана рубаха,
То лжет она, а он правдив».

28.

И вот когда увидел он,
Что на спине разорвана рубаха,
Он молвил: «(Женщина!) Сие —
(Одна) из ваших (многочисленных) уловок.
Уловки ваши, несомненно, велики.

29.

Йусуф, ты близко к сердцу это не бери.
А ты (распутная жена!)
Проси прощения за грех свой.
Ты совершила (тяжкий) грех».

30.

И дамы в городе сказали:
«Задумала жена вельможи
Вовлечь в соблазн юного раба.
Он возбудил в ней (пылкую) любовь.
Мы видим: она в явном заблужденьи».

31.

Услышав пересуды (этих дам),
Она послала (их созвать),
И приготовила места для возлежанья,
И каждой (гостье) нож дала,
И позвала (Йусуфа): «Выйди к ним!»,
Когда они увидели его,
Они его превознесли,
(И в похотливом вожделении своем)
Порезали себе (ножами) руки и молвили:
«Убереги нас Бог! Это — не (смертный)
человек,
А благородный ангел!»

32.

Она сказала: «Вот пред вами тот,
Из-за кого меня вы порицали.
Я обольстить его пыталась,
Но (в благочестии своем)
Он оставался твердо (непорочен).
Но если он не сделает того,
Что я ему повелеваю,
Он будет заключен в темницу
И будет из числа ничтожных».

33.

Ответил он: «О мой Господь!
Темница мне милей того,
К чему меня они склоняют,
И,если Ты их (мерзкие) уловки
(Своею Волей) от меня не отведешь,
Я уступить могу (порыву), и склонюсь,
И окажусь средь тех,
Кто потерял рассудок».

34.

И внял Господь его мольбе
И от него отвел он козни.
Ведь слышит Он и знает (все).

35.

Потом подумали они
После того, как они видели знаменья[17],
Что надо заточить его на время.

36.

И вместе с ним вошли два юноши в темницу,
Один из них сказал: «(Во сне) я видел,
Что выжимаю я вино (из винограда)».
Другой сказал:
«Я видел, что несу я хлеб на голове,
А птицы от него клюют.
Скажи нам смысл (этих снов), —
Ведь видим мы, что ты из тех,
Кто действует по знанию[18] и доброте».

37.

Он (им) сказал:
«К вам не успеет подойти (та пища),
Что вам дается здесь (на пропитанье),
Как я уже вам растолкую эти (сны),
Прежде чем то, (о чем вас сны
предупреждают),
(На ваши головы) спадет.
И это — то, чему меня Господь мой научил.
И я оставил веру и обычаи народа,
Что не уверовал в Аллаха
И будущую жизнь отвергает.

38.

Я следую религии моих отцов:
(Ханифа) Ибрахима, Исхака и Йакуба.
Нам (в соучастники) Аллаху
Не должно прочить ничего.
Это — Господня милость нам и людям.
Но большинство из них неблагодарны.

39.

О мои други по темнице!
(Кто) лучше: множество господ,
Которые разнятся,
Или Единый, Неодолимый[19] в Своей мощи
Аллах?!

40.

Коль не Его,
Так только имена вы чтите,
Что вы придумали и ваши праотцы, —
На что Аллах им власти не давал.
Решение всему — лишь у Аллаха,
И повелел Он поклоняться лишь Ему.
Сие есть истинная Вера,
Но большинство людей не понимает[20].

41.

О мои други по темнице!
Один из вас поить вином владыку будет,
Другому же —распятым быть,
И птицам — с головы его клевать.
Уже решилось то, о чем вы спрос ведете».

42.

И он сказал тому из них,
Которого считал спасенным:
«Напомни обо мне владыке твоему».
Но Сатана заставил (узника) забыть
Владыке своему напомнить о Йусуфе,
И несколько (тяжелых) лет
Ему пришлось пробыть в темнице.

43.

И царь сказал:
«(Во сне) я вижу семь упитанных коров,
Которых семь худых коров съедают,
А также семь зеленых колосков
И семь других — пожатых.
О родовая знать (двора)!
Вы (сно)видение мое мне растолкуйте,
Коль вы видения способны толковать».

44.

Они ответили: «Сие — смешение (пустых)
видений.
Мы не владеем даром толкованья снов».

45.

Но (узник) тот из двух, что был освобожден,
Спустя (столь долгий) срок
Вдруг вспомнил о Йусуфе
И молвил им: «Я сообщу вам толкование
сего.
Меня пошлите вы (к Йусуфу):

46.

«Йусуф, о человек (Господней) правды!
Ты изъясни нам сон,
(В котором) семь упитанных коров
Поедены семью худыми;
И семь зеленых колосков,
И семь других — пожатых,
Чтобы я мог вернуться к людям,
И чтоб могли они понять».

47.

(Йусуф) сказал: «Вы сеять будете семь лет
Обычным образом для вас.
Что будете сжинать,
В колосьях оставляйте,
Помимо лишь немногого в еду.

48.

А после этого семь тяжких лет наступят,
Которые поглотят все,
Что про запас вы отложили,
Кроме немногого того,
Что сбережете вы (для будущего сева).

49.

И вслед за тем наступит год,
В который жители получат дождь обильный
И будут выжимать
(И масло, и вино себе на благо)».

50.

И царь сказал: «Ко мне его[21] ведите!»
Когда к нему пришел (царя) посланец,
(Йусуф) сказал[22]:
«Ты к господину своему вернись
и у него спроси:
Каков настрой и помыслы тех женщин,
Которые порезали себе (ножами) руки?[23]
Господь мой, истинно, про их уловки знает».

51.

И (царь) спросил (тогда тех женщин):
«В чем было ваше устремленье,
Когда пытались вы Йусуфа соблазнить?»
Они сказали: «Упаси нас Бог!
За ним не знаем мы дурного».
И молвила жена вельможи:
«Открылась истина теперь.
Его я соблазнить пыталась,
Но он остался из (числа) правдивых.

52.

(Я) это (говорю), чтоб (мой супруг) узнал,
Что я в отсутствие его ему не изменила[24],

И что Аллах свершится не позволит
(Злым) умыслам изменников (неверных).

53.

И я себя оправдывать не стану —
Ведь (всякая) душа склоняется ко злу,
Если Господь мой милостью ее не осеняет.
Господь мой, истинно, прощающ,
милосерд!»[24а]

54.

И царь сказал: «Ко мне его ведите!
Себе (на службу) я его возьму».
И, с ним поговорив, сказал он:
«Отныне ты при нас
И нами наделен доверием и силой».

55.

Йусуф ответил: «Ты поставь меня
Распорядителем хранилищ сей земли[25].
Поистине, я — знающий хранитель».

56.

Так наделили Мы Йусуфа силой
в той стране,
Чтоб в ней владел он всем,
Как, где и когда[26] захочет.
Мы Нашу милость жалуем тому,
Кого сочтем Своим желаньем,
И не дадим пропасть награде
Таких, кто делает добро.

57.

Награда же другого мира — краше
Для тех, которые уверовали (в Бога)
И, гнева Господа страшась, (благочестивы
были).

58.

И вот явились
И предстали пред Йусуфом его братья[27].
Узнал он их,
Они ж его не распознали.

59.

Когда он их провизией снабдил, (он) молвил:
«Вы приведите брата своего,
Что (сводный) по отцу вам[28].
Ужель не видите,
Что я даю сполна вам меру,
(По соответствию уплате),
И самый радушный хозяин?

60.

Но если вы ко мне его не приведете,
Для вас не будет меры у меня[29],
И вы ко мне не приходите».

61.

Они ответили (ему):
«Мы у его отца его отпросим,
И мы, конечно, сделаем, (что ты нам
говоришь)».

62.

Своим же слугам он сказал:
«Вы им в седельные вьюки
Их (меновой) товар вложите,
Чтоб обнаружили они его
Только тогда, когда вернутся
к своим семьям.
Быть может, это их заставит
возвратиться[30]».

63.

И вот когда они к отцу вернулись,
Они сказали: «Наш отец!
Нам отказали в мере (хлеба,
Пока мы брата своего не приведем).
Ты с нами брата нашего отправь,
Тогда получим меру мы.
Мы будем, истинно, беречь его».

64.

Сказал он (им):
«Ужель могу доверить его вам,
Как прежде его брата вам доверил?
Бог — лучший (для него) хранитель,

Он — милосерднейший (из всех, кто)
милосерден».

65.

Когда ж свои вьюки они открыли,
Они увидели, что их товар им возвращен,
И молвили они: «О наш отец!
Чего же больше нам желать:
Наш (меновой) товар нам возвращен,
И мы свою семью прокормим
И позаботимся о нашем брате,
К тому ж прибавим мы теперь
Меру (поклажи) одного верблюда[31], —
Ведь эта мера так мала».

66.

Он (им) сказал: «Я с вами не пошлю его,
Пока Аллахом вы не поклянетесь,
Что вы ко мне его вернете (невредимым),
Если, конечно, не постигнет вас (беда)».
Когда же они клятву дали, он сказал:
«Аллах — за то, что здесь мы говорили,
поручитель».

67.

И (далее) сказал: «О сыновья мои!
Вы сразу все в одни ворота не входите,
А по отдельности входите в разные врата.
Но, впрочем, вас я не могу избавить
От (провидения) Аллаха —
Ведь лишь Ему вся власть принадлежит».

68.

Когда вошли они (в Египет),
И где и как им повелел отец,
Их это не спасло ни от чего
Из (мудрых замыслов) Аллаха,
А только претворило в жизнь
(Отцовское) желание Йакуба
(Предостеречь их от беды), —
Ведь обладал он знанием того,
Чему его Мы научили.
Но большинство людей не знает (это).

69.

И вот когда они предстали пред Йусуфом,
Он принял брата (в дом) к себе
И так сказал: «Вот я — твой брат.
И не печалься тем, что сделали они».

70.

Когда же он провизией снабдил их,
Он в ношу брата кубок подложил,
И возгласил потом глашатай:
«О вы, кто в этом караване,
Ведь воры вы, наверняка!»

71.

Те, повернувшись к ним, сказали:
«Чего не досчитались вы?»

72.

Они ответили:
«Мы ищем царский кубок.
Тому, кто принесет его,
Наградой станет вьюк верблюда —
За это я ручаюсь сам».

73.

Они сказали: «Мы клянемся Богом!
И ведь вы знаете, что мы
На эту землю не пришли,
Чтобы нечестие здесь сеять.
И уж, конечно, мы не воры».

74.

(Им) отвечали (египтяне):
«Каким быть наказанию (для вас),
Коль вы окажетесь лжецами?»

75.

Они сказали: «Наказанием тому,
В поклаже у кого найдется кубок —
То, что он станет вам вилланом[32],
Как возмещение (за кражу):
Так воздаем мы зло творящим».

76.

И начал поиск он с поклажи их,
Прежде чем (вещи) брата (обыскать),
Потом извлек он (кубок) из поклажи брата:
Такой была Наша уловка для Йусуфа,
И он не смог бы брата взять себе
Согласно царского указа,
Если б того не пожелал Аллах.
Мы степенями[32a] возвышаем тех,
Кого сочтем Своей угодой.
Ведь выше всякого, кто обладает знаньем,
Лишь Тот, кто знает все и вся.

77.

Они сказали: «Если он украл,
Так ведь украл и прежде его брат[33]».
И схоронил в душе это Йусуф
И им не выказал (своих обид и намерений).
(А про себя) сказал:
«Вы в худшем положении, чем мы.
Аллах ведь лучше знает то,
О чем вы речь ведете».

78.

Они сказали: «О вельможа!
Отец его — глубокий и почтенный старец,
(И будет горевать о нем),
Возьми вместо него кого-нибудь из нас,
Мы видим: ты в делах великодушен».

79.

Он (им) ответил: «Упаси Господь
Нам взять кого-либо другого,
Кроме того, в чьей личной клади
Мы наш товар (похищенный) нашли.
Иначе были бы неправедными мы».

80.

Когда ж отчаялись они
В его (содействии их просьбе),
То удалились, чтоб наедине посовещаться,
И старший[34] их сказал:
«Ужель не знаете, что ваш отец
Взял клятву с вас перед Аллахом.
И прежде этого с Йусуфом

Не совершили вы того, что надлежало вам
(Согласно обещания отцу).
А потому я не покину эту землю,
Пока отец не разрешит мне,
Иль не решит иначе для меня Аллах:
Он —лучший из (дающих мудрые) решенья.

81.

Вы возвращайтесь к вашему отцу
И (там) ему скажите:
«О наш отец! Твой сын украл,
И мы свидетельствуем только то, что знаем.
Мы (никого) не можем уберечь
(Ни от чего, что нам) незримо
Или (от нас) сокрыто (кем-то).

82.

(Вели) спросить селенье, где мы были,
И караван, с которым шли мы,
(И ты увидишь), что мы правду говорим».

83.

Отец сказал: «О, нет!
Вам души ваши (подсказали)
Все это дело (вымыслом) украсить.
(Отныне для меня) прекрасно лишь
терпенье.
Аллах, быть может, мне вернет их всех, —
Поистине, Он знающ, мудр (безмерно)».

84.

И отвернулся он от них и молвил:
«Как велико мое страданье по Йусуфу!»
И побелели от печали его очи,
И он едва мог скорбь сдержать.

85.

Они сказали: «Именем Аллаха!
Не перестанешь ты Йусуфа вспоминать,
Пока (печаль) не исчерпает твои силы
Иль не постигнет смерть тебя».

86.

Но он сказал:
«Я предаю свою печаль и скорбь Аллаху, —
Ведь от Него известно мне,
О чем не ведаете вы.

87.

О сыновья мои, ступайте
И разузнайте о Йусуфе, а также его брате,
И никогда надежды не теряйте
На милость и отзывчивость Аллаха[35].
Надежды на Него, поистине, теряют
Лишь те, кто не уверовал в Него».

88.

Когда они явились (вновь) перед Йусуфом,
Они сказали: «О вельможа,
Беда постигла нас и всю нашу семью,
И (меновой) товар наш скуден.
Дай меру нам сполна
И окажи нам милость, —
Аллах, поистине, воздаст
Оказывающим милость!»

89.

Он (им) ответил: «Знаете ли вы,
Как поступили вы с Йусуфом
И (младшим) его братом,
Когда по безрассудству (зло) творили?»

90.

«Ужель и вправду ты — Йусуф?» —
они сказали.
Он им ответил: «Я — Йусуф, а это —
брат мой.
Аллах нам милость оказал:
Ведь те, кто, истинно, страшится Бога
И терпеливо стоек (в благочестии своем)...
Награде тех, кто делает добро,
Аллах не даст погибнуть».

91.

«Во имя Божие! — ответили они. —
Он предпочел тебя пред нами,
Поистине, мы были во грехе».

92.

Сказал он: «Нынешнего дня
Над вами нет (моих) упреков.
Простит Аллах вам (прошлые грехи).
Он — милосерднейший из всех,
кто милосерден!

93.

Идите вы (к отцу) с моей рубахой.
И там ее набросьте на его лицо.
Прозреет он тогда,
И вы ко мне со всей семьей придете».

94.

И вот когда (в обратной путь)
Их караван пустился,
Отец их вдруг сказал:
«Я ощущаю дух Йусуфа[36],
Только не думайте, что я — безумец
(старый)!»

95.

И те, (кто слышал), отвечали:
«Клянемся именем Аллаха,
Ты в старческом бреду блуждаешь».

96.

Когда ж явился благовестник,
Набросил он (рубаху) на его лицо,
И вмиг прозрел (почтенный старец)
И молвил им: «Не я ль вам говорил,
Что мне известно от Аллаха,
О чем не ведаете вы?»

97.

«О наш отец! — они сказали. —
Проси прощенья нам за наши
прегрешенья, —
Ведь, истинно, мы были во грехе».

98.

«Я буду, — он ответил (им), —
Молить прощения для вас у моего
Владыки, —
Он, истинно, прощающ, милосерд!»

99.

И вот когда они явились пред Йусуфом,
Он предоставил свой очаг
Родителям своим[37] и молвил:
«Вступите на Египетскую землю,
Если Аллаху так угодно,
В надежной безопасности ее».

100.

И он родителей своих
Возвысил высоко на троне чести,
И пали (братья) ниц пред ним,
И молвил он: «О мой отец!
Вот так толкуется мой сон далеких лет[38].
Аллах осуществил его и оказал мне милость,
Когда Он из темницы вызволил меня,
А вас сюда доставил из пустыни,
После того, как Сатана
Вражду посеял между мной и братьями
моими,—
Ведь благосклонен мой Господь
К тому, что (мудростью Своею) пожелает,
(Своим всеведением предпочтет).
Поистине, Он знает (все) и мудр (безмерно)!

101.

О мой Господь! Ты даровал мне власть
И научил пророчеству событий.
Ты — неба и земли Творец,
Ты в этой жизни и в другой — мне
Покровитель.
Ты упокой меня предавшимся Тебе,
Введи в число благочестивых!»

102.

Сие — один из сказов про сокрытые (дела),
Что Мы внушением тебе (о Мухаммед!)
ниспосылаем.

Ты не был среди них в те времена,
Когда они, сговариваясь, козни замышляли.

103.

И все же большинство людей,
Как ни желал бы ты (обратного тому),
В неверии живут (и умирают).

104.

У них за это платы ты не просишь,
Сие — Послание (Всевышнего) к Мирам.

105.

Какое множество знамений
На небесах и на земле,
Которые они проходят мимо
И (более того) — воротят спины к ним!

106.

И большинство из них
Не верует в Аллаха без того,
Чтоб соучастников Ему не прочить!

107.

Ужель защищены они надежно от того,
Что не спадет на них Господня кара,
Иль не придет к ним Час[39]
Внезапно в тот момент,
Когда они о нем не знают (и не ждут)?

108.

Скажи: «Сие — моя стезя.
Я вас зову к Аллаху
И опираюсь на свидетельство, что зримо[40]
И мне, и тем, кто следует за мной.
Хвала Аллаху, я — не с теми,
Кто прочит соучастников Ему!»[41]

109.

И до тебя Мы никого не посылали,
Помимо тех из жителей общин,
Кому Мы Откровение внушали.
Неужто по земле не ездили они,

Не видели того, каков конец был тех,
Которые до них (грешили)?»[42]
Обитель будущего — краше
Для тех, кто Господа страшится.
Ужель им это не понять?

110.

Когда посланники теряли все надежды
(В успехе миссии своей)
И думали, что их сочли лжецами,
К ним приходила Наша помощь,
И были спасены лишь те,
Кому (всеведеньем Своим)
Мы пожелали (жизнь оставить)[43],
Ведь Нашу мощь не отвратить
От (наказанья) тех, кто во грехе.

111.

В повествовании о них
Есть назидание для тех,
Кто обладает разуменьем.
Сей сказ не вымышлен,
А (послан) в подтверждение того,
Что до него ниспослано (другим),
Как разъяснение всего,
Как Руководство и как Милость
Для всех, кто Господу предался.

## Комментарии

[1] Букв. «звезды».

[2] По всему тексту Корана мы встречаемся с настоятельным предупреждением о существовании «явного врага человека: Сатаны». Как же происходит воздействие Сатаны на человека, где основные рычаги его, и можно ли противостоять ему? Давайте проанализируем тысячелетний опыт развития человеческих цивилизаций, или, скорее, человека, воздвигшего их. Из ст. 29 отчетливо явствует, что Аллах возвысил человека над всеми другими творениями, включая ангелов и джиннов, тем, что вдохнул в него от «Духа Своего» и повелел всем преклонить колени перед самым совершенным творением Своим — Человеком. Вдохнув в человека дух, Господь тем самым как бы приблизил его к Себе, дав ему возможность именно через дух познать Бога-Творца и Его Волю, ниспосланную в Писании, ибо все во Вселенной *способно познать* и почувствовать *лишь по роду своему*. Мозговая деятельность человека, являясь продуктом мозга, обладающего телесной, т. е. материальной структурой, может

познать только себе подобное, т. е. материальное, и опять-таки в пределах досягаемого, диктуемых жесткими ограничениями земного пространства и времени. Чисто земная рассудочная деятельность направлена на земное использование ее продукта: облегчение, украшение, интерес телесного, земного бытия, причем, в области техники она способна на воистину великое. Но человек смертен, смертен его мозг, и смертны продукты его мозговой деятельности в том смысле, что они служат ему только на земле, всего лишь краткий миг его земного существования. Вечен лишь Дух, вдохнутый Богом, который, освобождаясь от земной оболочки, или «временной одежды» (о ней-то, вероятно, и идет речь в айатах Корана: обречен нести ответственность перед Тем, кто близок ему по роду, за все содеянное мозговой деятельностью и руками того, в теле которого он пребывал. Дух *по роду своему* не может быть заражен, он пребывает в человеке в так называемых «внутренних ощущениях», в душе его, и только он всегда безошибочно вам подскажет, что истинно, а что ложно, что есть Добро, а что — Зло. И зная это, Сатана взывает именно к рассудку человека, который сам по себе телесный, а потому и может быть подвержен соблазну. Обратите внимание, как часто о возможности такого соблазна предупреждает вас Коран, каким прекрасным доказательством этому звучит ст. 22: «И власти не было над вами (т. е. над вашим духом!) у меня; я только звал вас (Дух позвать нельзя Сатане; Дух — всецело в ведении Бога, вдохнувшего его от Себя!), ну а вы отозвались», — это слова Сатаны, который расписывается в своем бессилии перед человеческим духом. Тягчайшим грехом человечества, Великим Грехопадением, повлекшим за собой все прочее Зло, стало то, что отозвавшись на зов Сатаны, он подчинил все свои земные деяния рассудку, который стал мощнейшим инструментом владычества Дьявола. Ведь поставив рассудок во главу своей деятельности, человек лишил себя возможности познать Бога, познать Духовное, т. е. то, что лежит за пределами телесной мозговой деятельности. Ведь познать можно только по роду своему! Только Духом может быть постигнуто Духовное, родственное ему по естеству своему. Взгляните на историю, подумайте о всех тех народах и цивилизациях, которые постигла гибель в период их самого бурного расцвета, на вершине достижений рассудка! Их не смогли спасти никакие обширные и достославные знания. Они были погублены деятельностью своего собственного рассудка, плоды которого были везде одними и теми же: бездуховность и ее материальное проявление — безнравственность, бесстыдство и распущенность в самом разнообразном обличье. Только деятельностью рассудка, неспособного к постижению чужеродного ему Духовного естества, можно объяснить столь долгое и упорное неверие древних и новых народов, испытывающих постоянную нужду в материализации атрибутов Божественного: сначала это были деревянные и каменные идолы, золотые тельцы, позже — всевозможные изобразительные средства (живописи, скульптуры и архитектуры), взывание к Богу «явить Свой лик», оживить мертвого, послать ангела и т. д. и т. п. Не в этом ли все существо рассудочной деятель-

ности человека! Диктат телесного (мозга), за который мы сейчас так больно и тяжело расплачиваемся. Не это ли — ядовитая поросль Сатаны, лишившего человека познания через Дух, преградившего ему Путь к Богу! Вот вам и «явный враг« человеку, о котором вас предупреждает Коран.

[3] «Ахадис» — толковать события, сновидения; понимать и разъяснять суть вещей, обладая пророческим даром, даром предвидения.

[4] Сводные братья Йусуфа по первой жене его отца — Валлы.

[5] Вениамин — родной брат Йусуфа от второй жены Йакуба — Рахили.

[6] Обычно эти слова относят к Рувиму, первенцу Йакуба.

[7] Эти слова относят к Иуде, среднему сыну Йакуба.

[8] Потеря престижа старших братьев, не сумевших обеспечить безопасность младшему брату.

[9] См. ст. 48 и прим. 870.

[10] Йусуф был необычайно красив и статен.

[11] «Битха'ат» — капитал, богатство.

[12] Аллах не позволил им распорядиться Йусуфом, как ценным товаром. Плата за него была чисто символическая.

[13] Букв. «дело», но в более широком смысле, как русское значение «план, программа».

[14] Зулейха — жена хозяина дома, вельможи Фараона.

[15] Духовное видение посланника помогло ему противостоять порыву чувств и предвидеть результат в том случае, если он поддастся соблазну.

[16] Слова хозяина дома.

[17] Знамения невинности Йусуфа и его необычайной притягательности для женщин побудили хозяина дома заточить его в темницу на долгий срок во избежание конфликтных ситуаций, с одной стороны, и для охраны его от похоти женщин, с другой.

[18] «Мухсинин» — от «ихсан»: делать что-то в совершенстве, быть мастером своего дела, т. е. обладать высоким знанием своего дела.

[19] «К'ахар» — непоборимый, неодолимый. См.варианты значений в ст. 4, 16.

[20] Вера — духовна, и постичь ее можно только душой, внутренними ощущениями, духом человека, берущего начало в родственном ему мире. См. прим. 870.

[21] Йусуфа.

[22] Из авторитетных тафсиров (в частности Аль Куртуби) следует, что Йусуф отказался покинуть темницу, прежде чем ему не будет вынесен справедливый оправдательный приговор, во-первых, и не обеспечена гарантия от посягательств знатных (а потому властных) женщин, во-вторых.

[23] См. ст. 31.

[24] Разночтение! Одни комментаторы выдают это за слова Зулейхи (ибн Касир, Абд. Юсеф Али), другие же — за слова Йусуфа (Крачковский, Саблуков).

[24a] (к ст. 53) Интересно, что в тексте Божественного Откровения просматривается три возможных состояния человеческой души: 1. Если умолкла она перед повелением и покинули ее сомнения и колебания в противодействии желаниям и земным страстям, она называется «спокойной душой» (ст. 27—28). 2. Если же не смолкла она, защищая свою похоть и страсти ближнего мира, противодействуя своему божественному, заложенному в ней отроду, она называется «упрекающей душой», т. к. она упрекает обладателя ее за плохое поклонение ее Властелину (ст. 2). 3. Если же оставила она всякое противодействие, подчинилась страстям и отдалась желаниям и побуждениям Сатаны, она называется «душой, повелевающей зло», о которой и идет речь в этом айате. Абу Хамид Аль Газали «Воскрешение наук о вере».

[25] Царь назначил Йусуфа хранителем и распорядителем зернохранилищ, складов и запасников всего Египта.

[26] «Хайсу» — включает все три значения: места, времени и образа действия.

[27] Минули годы, и десять сводных братьев Йусуфа по отцу прибыли в Египет со своим меновым товаром с целью приобретения зерна и другой провизии для своей страны.

[28] Вениамин (см. прим. 5 выше).

[29] Как хозяин закромов Йусуф мог дать или отказать в товаре, — т. е. он практически ставил братьям ультиматум.

[30] Прекрасный пример сопоставления целевого и вероятностного «ля».

[31] Поклажа, причитающаяся Вениамину.

[32] По действующим у иудеев законам вор становился невольником.

[32a] См. прим. ст. 96.

[33] Братья в своей неприязни к Йусуфу ложно заявляли, что он украл в детстве у своей тетки Лии, сестры матери, ценный пояс. По другим источникам, он украл идола, принадлежавшего отцу его матери.

[34] Эти слова все комментаторы относят к Иуде, к этому времени взявшего на себя обязанности «старшего» по делу.

[35] «Раух» — не «рух»! — отзывчивость в значении «успокоение, утешение».

[36] «Рих» — дыхание, запах, «дух» в значении «присутствия в воздухе».

[37] Отец и Лия, сестра покойной матери.

[38] См. ст. 4

[39] См. С. 15, ст. 85 «Час» и прим. 995.

[40] Коран.

[41] Букв. «не в числе язычников».

[42] Букв. «прошли». Прим. 787.

[43] Здесь, как и в ст. 56, внутрискобковый текст уточняет отсутствие произвола в Господнем Волеизъявлении, справедливость которого основывается исключительно на Всеведении Всевышнего и на Вездесущности Его.

## «Ҡиссаи Йософ»тоң был томға инмәгән ҡульяҙма варианттары хаҡында

Халыҡ телендә «Йософ китабы», «Йософ вә Зөләйха», «Йософ ғәлиәссәләм» кеүек атамалар менән йөрөтөлгән «Ҡиссаи Йософ» поэмаһы, Ҡол Ғәли тарафынан 1212—1233 йылдар араһында ижад ителеп, быуындан быуынға ҡәҙерле аманат итеп тапшырыла килгән. Шағирҙың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, башҡа хикмәттәрҙән күрклерәк, тыңламаҡҡа татлыраҡ ҡисса революцияға тиклем халҡыбыҙҙың иң яратҡан әҙәби әҫәрҙәре рәтендә йөрөгән, уның үҙен дә ижадҡа сәмләндергән. Йософ сюжетына төрлө төбәктәрҙә тиҫтәләрсә варианттар тыуған, легендалар барлыҡҡа килгән, «Тархан ҡыҙы һәм «Йософ китабы» легендаһынан[1] күренеүенсә, Зөләйханың йән һөйгәне Йософ менән ҡауышыу өлгөһө өмөтһөҙ сирҙәрҙән арындырыр, күңелдәргә йән өрөр ғәжәп дауа, тормошҡа йәшәү сәме өҫтәр хикмәтле бер тылсым һымаҡ ҡабул ителгән, Йософ яҙмышы миҫалында яҡшылыҡҡа, ғәҙеллеккә өндәр тәрбиә китабы ла, эстетик ләззәт татытыр көйлө китап та булып хеҙмәт иткән поэма.

Ете быуат һыҙымында «Ҡиссаи Йософ» халыҡ араһында ҡульяҙманан ҡульяҙмаға күсерелеп таралған. Ә инде 1839 йылда Ҡазан университеты типографияһында баҫылып сығыу атаҡлы ҡиссаның уҡыусылар даирәһен тағы ла киңәйтә. Ошонан һуң Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем һикһәндән ашыу баҫмаһы донъя күрә. Баҫма китап нигеҙенә ҡиссаның үҙ тексы түгел, ә уның шағир Ғәбдерәхим Усман (Утыҙ Имәни) эшләгән редакцияһы төп сығанаҡ булып китә. Поэманың ысын һиммәтен белеп, шуға ла киләсәк быуындарға үҙенсә ышаныслы текст ҡалдырырға ынтылған шағир, ҡулы аҫтындағы барлыҡ ҡульяҙмаларға таянып, кәрәкһеҙ тип тапҡан өлөштәрен ҡыҫҡартҡан, йөкмәткеһен заманына яраҡлаштырырға тырышып үҙгәрткән. Шулай итеп, китап булып сыҡҡандан һуң, күсереүселәр ике төрлө сығанаҡҡа мөрәжәғәт итә алғандар.

Хәҙерге көндә ғалимдарға поэманың 170-тән ашыу, шул иҫәптән егерменән артыҡ тулы күсермәһе булыуы мәғлүм. Уларҙың барыһы ла XVIII—XIX быуаттарҙа башкорт һәм татар китап күсереү оҫталары — хаттаттар ҡулы менән яҙылған һәм төрлө сәбәптәр арҡаһында күп фондтарға һибелгән. Ҡиммәтле күсермәләр өлөшләтә Дрезденда, Берлинда, Ленинградта, Ҡазанда, Өфөлә һаҡлана.

СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан Ғилми үҙәге «Почет Билдәһе» орденлы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан һуңғы йылдарҙа ойошторолған археографик экспедициялар төрлө шәхси коллекцияларҙан «Ҡиссаи Йософ»тоң ун һигеҙ күсермәһен табып алып ҡайтты.

---

[1] *Башҡорт* халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. — Өфө, 1980. — 261-се бит.

Башҡа фондтарҙағы кеүек үк, ҡулъяҙмалар нигеҙҙә XVIII быуат аҙағы һәм XIX быуат һуҙымында күсерелгән. Иң тәүҙә үҙ-ара, һуңынан 1849 йылда баҫылған китап тексы менән ентекле сағыштырыу уларҙың бер-береһен ҡабатламауын асыҡланы. Был, бер яҡтан, ҡиссаның Башҡортостанда таралған күп төрлө варианттары, тимәк, боронғо ҡулъяҙма сығанаҡтарҙың күп булыуын күрһәтә, икенсенән, егерменсе быуат башынаса ҡулъяҙма китаптың ҙур абруй һаҡлағанын раҫлай. Типографик ысул менән күпләп баҫылыуға ҡарамаҫтан, күсереү объекты — баҫма китап түгел, ә фондтағы иң ҡиммәтле күсермә — һеңрән ҡулъяҙмаһының авторы Сәйфетдин бин Ҡаранай яҙыуынса, «нөсхә-әш-шәриф» — боронғо ҡулъяҙма һаналған.

Ҡиссаны күсереүселәрҙең күбеһе, Ҡол Ғәлиҙең үҙ ҡулдары менән ҡағыҙға теркәгән төп тексты — архетипты (һәм артабан шул текстан килгән күсермәләрҙе) боҙорға баҙнат итмәгән, күрәһең. Варианттар бер-береһенән әллә ни айырылмай, күләмдәре лә бер сама. Улар araһындағы айырманы бер нисәгә төркөмләргә мөмкин:

а) ҡайһы бер строфаларҙың булыу-булмауы;

б) айырым фасылдарға бүлгеләү һәм бүлек исемдәренең тап килмәүе;

в) айырым строфаларҙың, строфала һүҙҙәрҙең урындары алмашыныуы;

г) текста айырым һүҙҙәрҙең алмашыныуы, төшөп ҡалыуы.

Дөйөмләштереп алғанда, был үҙгәрештәр орфографик, графемик, лексик, ғөмүмән, грамматик, хатта механик характерҙа булып, әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһенә артыҡ тәьҫир итмәгән. Улар нигеҙендә яҙма әҙәби телдең ете быуат эсендәге эволюцияһын күҙалларға, әҫәр теленә йәнле халыҡ теле һәм диалект элементтары үтеп инеү юлдарын асыҡларға була. Ошо йәһәттән фондтағы ҡулъяҙмалар бик отошло: һәр береһенең күсерелеү ваҡыты, күбеһенең күсерелеү урыны теркәлгән, өҫтәүенә берен-бере ҡабатламай. Уларҙы сағыштырып өйрәнгәндә, халыҡтың һөйләү теленең яҙма төрки телгә мөнәсәбәте аныҡланып, үҙ-ара бәйләнештәре баҙығыраҡ күренә. Ғөмүмән, тел мәсьәләләрен ретроспектив планда тикшереүҙә күсермәләр ышаныслы база булып тора.

СССР Фәндәр академияһының Урал бүлексәһе Башҡортостан Ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты һәм ғилми архив фондтарындағы ун һигеҙ ҡулъяҙма, халыҡта хәҙерге көнгә тиклем һаҡланып, һуңғы осорҙа ғына йыйылып тупланғанлыҡтан, ҡиссаның башҡорт халҡы араһындағы популярлыҡ дәрәжәһен тулыһынса күҙ алдына баҫтырып бөтмәй әле. Шулай ҙа улар Болғар дәүерендә ойошҡан Урал-Волга әҙәби системаһының иң күренекле бер ҡомартҡыһы — Ҡол Ғәли поэмаһының халҡыбыҙ тарафынан һаман да үҙ ителеүен, әҙәбиәттә уның традицияларының күп быуаттар буйы йәшәп килеүен иҫбатлаусы дәлил булараҡ ҡиммәт.

Түбәндә «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө Ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында һәм Ғилми архивында һаҡланған күсермәләренә ҡыҫҡаса тасуирлама бирәбеҙ.

1. Ҡулъяҙма № 7 — а 57[2].

20,5 × 14[3]; 17 × 11[4]; 19[5].

Күләме 44 бит[6], 3344 шиғри юл.

Ҡулъяҙманың тышы төшөп, тәүге һәм һуңғы биттәре юғалған. Поэма башлана: «ҡанлы күлмәк ҡуйынларынан чыҡардылар...», бөтә: «ағламаҡдан ике күзе күрмәз улды...»

Тексттың тулылығы, бүлек исемдәренең башҡаса булыуы менән баҫма тексҡа тап килмәй.

Күсереүсе боронғо, дефектлы текстан файҙаланған булһа кәрәк, танымаған (йыртылған, юйылған, тимәк, уҡымаҫлыҡ хәлгә килгән) һүҙҙәр урынына күп нөктәләр ҡуйып киткән. Күсереп бөткәс, оригинал менән сағыштырып, төҙәтмәләр индергән, төшөп ҡалған шиғыр юлдарын юл ситенә өҫтәп яҙған.

Ҡулъяҙманы күсереүсенең исеме һәм күсереү урыны билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — 1785 йылдан һуң, һыу тамғалары бар. Ҡағыҙ Ярославлдә етештерелгән[7].

Бүлек исемдәре ҡыҙыл, текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Фондҡа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 16-сы археографик экспедиция ағзалары И. Ҡ. Бүләков, М. Х. Иҙелбаев, Ә. Х. Вилданов тапшырған. Ҡулъяҙма 1981 йылда Салауат районы Яңы Ҡаратаулы ауылында Факиһа Ғиндулла ҡыҙы Вәлиеванан алынған.

2. Ҡулъяҙма № 36 — а 9.

20 × 16; 15,5 × 12; 14.

Күләме 74 бит.

Ҡулъяҙма бик туҙған, тышы төшөп, тәүге һәм һуңғы биттәре юғалған. Һыу тейеүҙән текст юйыла башлаған, әммә уҡыла.

Баҫма китап тексына тап килмәй, унда булмаған строфалар бар.

Ҡулъяҙманы күсереүсенең исеме һәм күсереү урыны билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — 1792 йылдан һуң, ҡағыҙҙа һыу тамғалары бар (б. 10).

Бүлек баштары ҡыҙыл, текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Фондҡа институттың хеҙмәткәре Ы. Ш. Ҡобағошева тапшырған. Ҡулъяҙма 1974 йылда Ҡуйбышев өлкәһе Больше-Чернигов районы Ҡасҡын ауылында Әмин Ғариф улы Ғарифовтан алынған.

3. Ҡулъяҙма № 57 — а 91

21,5 × 17; 16 × 13; 17.

---

[2] № 7 — а 57 — ҡулъяҙманың ваҡытлыса шифры; 20,5 × 14[3] — ҡулъяҙманың форматы ҙурлығы (сантиметрҙарҙа); [4] 17 × 11 — текст размеры; [5] 19 — бер биттәге шиғри юлдар һаны; [6] бит — «лист» мәғәнәһендә.

[7] *Клепиков С. А.* Филиграни на бумаге русского производства XVIII — начала XIX века. М.: Наука, 1978. — С. 63.

Күләме 56 бит.

Ҡульяҙманың тәүге өлөшө һәм аҙағы юғалған. Башлана: «Хаҡ Йософә Жәбраилә көндерде...», бөтә: «Атамыз Исраилә хөрмәт ҡылың...». Һыу тейеүҙән текст юйыла башлаған, ауыр уҡыла.

Баҫма китаптан айырыла: строфалар һаны артыҡ.

Күсереү урыны һәм күсереүсенең исеме билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — XVIII быуат аҙағы.

Ҡағыҙ Рәсәйҙә етештерелгән, һыу тамғалары бар.

Фондҡа 1986 йылда Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының археографик экспедицияһы ағзалары И. Ғ. Ғәләүетдинов, С. Х. Хөсәйенов тапшырған. Ҡульяҙма Мәләүез районы Иҫке Муса ауылында Һаҙый Хафиз улы Мөхәмәтшәриповтан Д. Х. Ғәрифуллин тарафынан алынған.

4. Ҡульяҙма.

20,5 × 16; 15 × 2; 15.

Күләме 59 бит.

Ҡульяҙманың башы һәм аҙаҡҡы биттәре төшөп юғалған, һаҡланышы насар.

Баҫма китап тексы менән тап килмәй, артыҡ строфалар бар. Башлана: «Малик әйдүр, нә дийүр...», бөтә: «хаҡ Йософа Жабраил...».

Күсереү урыны һәм күсереүсеһе билдәһеҙ. Күсереү ваҡыты — XVIII быуат аҙағы һәм XIX быуат башы. Ҡагыҙ Рәсәйҙә етештерелгән, һыу тамғалары бар.

Бүлек баштары ҡыҙыл, текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Ғилми архивҡа А. Ғ. Ҡудашевтың шәхси коллекцияһы менән тапшырылған (ф. 3, оп. 26, һаҡ. б. 14 б.).

5. Пермь ҡульяҙмаһы.

21 × 17; 16 × 13; 19.

Күләме 134 бит, 4912 шиғри юл.

Ҡульяҙманың тышы төшөп, бер нисә бите юғалған. Әҫәр 1 «б» битенән башлана. Баш-исем ҡуйылмаған.

Баҫма китап тексынан 912 шиғри юлға күберәк. Бүлек исемдәренең формулировкаһында, айырым строфалар килеү тәртибендә айырмалар бик күп. Ғәрәп, фарсы һүҙҙәрендә хәрәкәләр ҡуйылған.

Поэманың хәтимәһе — 40 юл, әҫәрҙең яҙылыу датаһын асыҡлаған бер строфа төшөп ҡалған.

Ҡульяҙманы күсереүсенең исеме — Ибне әмин бин Мәһди.

Күсереү ваҡыты — 1834 йыл.

Бүлек баштары ҡыҙыл, текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Фондҡа институттың хеҙмәткәре Н. Д. Шоңҡаров тапшырған. Ҡульяҙма 1963 йылда Пермь өлкәһе Ҡайынауыл ауылында Шәрип Мостаевтан алынған. Ғилми архивта һаҡлана (Ф. 3, оп. 26, һаҡл. бер. 14).

6. Ҡулъяҙма № 34 — а 9.

21 × 16; 16 × 13; 19 18.

Күләме 63 бит.

Ҡулъяҙманың һуңғы бите төшөп юғалған.

Әҫәргә «Йософ» тип баш ҡуйылған.

Бөтә: «Йософ савчы табутынны...»

Баҫма китап тексына тап килмәй, боронғораҡ текстан күсерелгән, китапта булмаған строфалар бар.

Ҡулъяҙманы күсереүсенең исеме һәм күсереү урыны билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — сама менән XIX быуаттың беренсе яртыһы.

Ҡағыҙ Рәсәйҙә етештерелгән, инициалдарҙы белдергән һыу тамғалары бар.

Бүлек баштары ҡыҙыл ҡара менән ҙур шрифта билдәләнгән, һирәкләп сәскәләр, түңәрәктәр менән биҙәлгән. Текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Ҡулъяҙманың һаҡланышы яҡшы, 1978 йылда Ленинградта (ЛКРД) реставрацияланған.

Фондҡа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 2-се археографик экспедицияһы етәксеһе проф. Ғ. Б. Хөсәйенов тапшырған. Ҡулъяҙма 1974 йылда Туймазы районы Ҡаран-Бишенде ауылында Ғәбделбарый Ғәйнетдин улы Ғәйнетдиновтан алынған.

7. Ҡулъяҙма № 31 — а 13.

20 × 16; 16 × 13; 17.

Күләме 52 бит.

Ҡулъяҙманың тышы төшөп, тәүге биттәре юғалған. Әҫәр башлана: «Йософ анда ҡайғылы ҡалур имде...»

Баҫма китап тексынан бүлек исемдәренең формулировкаһы, айырым строфалар, һүҙҙәрҙең килеү тәртибе менән айырыла.

Поэманың хәтимәһе күсерелмәгән.

Ҡулъяҙманы күсереүсе үҙен атамаған, тик аҙаҡта өҫтәп ҡуйған:

Муны яздым ядкәр улмаҡ өчөн,

Уҡыганлар доға ҡылмаҡ өчөн.

Күсереү урыны билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — 1844 йылдан элек. Иң һуңғы биттә ошо йылда берәүҙең «башҡорттарҙың V кантонындағы ун бишенсе йортонан Бурансы ауылына» барыуы тураһында яҙмаһы бар.

Ҡағыҙ Рәсәйҙә етештерелгән, һыу тамғалары бик асыҡ түгел.

Текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Фондҡа 4-се археографик экспедиция етәксеһе проф. Ғ. Б. Хөсәйенов тапшырған. Ҡулъяҙма 1974 йыл Федоровка районы Балыҡлы ауылында алынған.

8. Ҡулъяҙма № 6 — а 66

21,5 × 17; 17 × 12; 20.

Күләме 48 бит.

Ҡулъяҙманың тышы төшөп, тәүге биттәре юғалған. Башлана: «Жөмләҫе эстәмәккә ҡасид ҡылдылар...»

Баҫма китап тексынан айырылмай.

Ҡулъяҙма Үтәк мәҙрәсәһендә Төхфәтулла Ғилман уғлы тарафынан 1847 йылда күсерелгән.

Бүлек исемдәре ҡыҙыл, текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Фондҡа ошо юлдарҙың авторы тапшырҙы. 1983 йылда Белорет районы Ботай ауылында Ғәлимә Илһам ҡыҙы Кәримованан алынды.

9. Ҡулъяҙма № 50 — а 90.

20,5 × 17; 16,5 × 13; 17.

Күләме 1 бит.

Баҫма китап тексына тап килмәй, артыҡ строфалар бар.

Күсереү урыны һәм күсереүсенең исеме билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — XIX быуат уртаһы.

Бүлек баштары ҡыҙыл, текст ҡара ҡара менән яҙылған.

Фондҡа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 1986 йылғы археографик экспедицияһы ағзалары М. Х. Нәҙерғолов, З. Ш. Шәрипова тапшырҙы. Благовар районы Дүсмәт ауылында Хәмит Салих улы Ғәскәровтан алынды.

10. Ҡулъяҙма № 22 — а 12.

21 × 16; 16 × 13; 17.

Поэма ҡулъяҙма йыйынтыҡтың тәүге өлөшөндә яҙылған.

Күләме 62 бит.

Тулы текст, баҫма китаптан айырмаһы юҡ.

Оригинал менән сағыштырылып, хаталар төҙәтелгән, яңылыш күсерелгән урындар һыҙылған.

Ҡулъяҙманы күсереүсе — Бикмөхәммәт бин Динмөхәммәт.

Күсереү ваҡыты — 1848 йыл.

Ҡағыҙ Рәсәйҙә етештерелгән, һыу тамғалары бар.

Бүлек баштары ҡыҙыл, текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Фондҡа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 7-се археографик экспедицияһы ағзалары Н. Д. Шоңкаров, А. Ғ. Ҡудашев тапшырған. Ҡулъяҙма 1976 йылда Мәләүез районы Муллағол ауылында Ғилметдин Вахит улы Байбулатовтан алынған.

11. Ҡулъяҙма № 31/1 — а 11.

20 × 16; 16 × 13; 15.

Күләме 23 бит.

Ҡулъяҙманың тышы төшөп, тәүге һәм һуңғы биттәре юғалған. Поэма башлана: «Бән сине кечек иркен дөшдә күрдем...»

Баҫма китап тексына тап килмәй, боронғораҡ ҡулъяҙманан күсерелгән.

Ҡулъяҙманы күсереүсенең исеме, күсереү урыны билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — XIX быуаттың урталары.

Ҡағыҙ Рәсәйҙә етештерелгән ҡара ҡара менән ике бағаналап күсерелгән.

Фондка Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 6-сы археографик экспедицияһы етәксеһе В. И. Әхмәҙиев һәм Ә. Х. Вилданов тапшырған.

12. Ҡулъяҙма № 10 —а 35.

20 × 16,5; 15 × 11; 17.

Күләме 1 бит.

Баҫма китап тексынан айырыла, боронғораҡ ҡулъяҙманан күсерелгән, өҙөктә китапта булмаған строфалар бар.

Ҡулъяҙманы күсереүсенең исеме һәм урыны билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — XIX быуаттың урталары.

Рәсәйҙә етештерелгән ҡағыҙ.

Текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Фондка Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 10-сы археографик экспедицияһы ағзалары И. Ғ. Ғәләүетдинов, М. Х. Нәҙерғолов тапшырған. Ҡулъяҙма 1979 йыл Тәтешле районы Сокор ауылында Гөлхая Зиядрислам ҡыҙы Хәмзинанан алынған.

13. Ҡулъяҙма № 35 — а 9.

21,5 × 17; 15 × 10; 18.

Күләме 4 бит.

Бик туҙған ҡулъяҙманан бер өҙөк, текст урыны-урыны менән юйылып, насар уҡыла.

Ҡулъяҙманы күсереүсенең исеме, күсереү урыны билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — XIX быуат уртаһы.

Рәсәйҙә етештерелгән ҡағыҙ; һыу тамғалары бар.

Текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Фондка Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 2-се археографик экспедицияһы етәксеһе проф. Ғ. Б. Хөсәйенов тапшырған. Ҡулъяҙма 1974 йылда Туймазы районы Егетәк ауылынан алынған.

14. Ҡулъяҙма № 31/1 — а 13.

20,5 × 16; 16,5 × 11; 22.

Күләме — 2 бит.

Поэманың Йософ һәм Зөләйха һөйләшеүен тасуирлаған өлөшө.

Ҡулъяҙманы күсереүсенең исеме һәм күсереү урыны билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — XIX быуаттың урталары.

Рәсәйҙә етештерелгән йәшел төҫтәге ҡағыҙ, бик асыҡ булмаған һыу тамғалары бар.

Текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған, хәреф эстәре ҡыҙыл ҡара менән буялған.

Фондка Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 4-се археографик экспедицияһы етәксеһе проф. Ғ. Б. Хөсәйенов тапшырған. Ҡулъяҙма 1974 йылда Федоровка районы Балыҡлы ауылынан алынған.

15. Ҡулъяҙма № 3 — а 34.

20,5 × 16,5; 16 × 12,5; 14.

Күләме 39 бит.

Ҡулъяҙманың тышы төшөп, тәүге һәм һуңғы биттәре юғалған, ҡалғандары һәр береһе айырым-айырым йөрөй.

Поэманың аҙаҡҡы өлөштәре баҫма китап тексынан айырыла.

Ҡулъяҙманы күсереүсенең исеме, күсереү урыны билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — XIX быуат урталары.

Рәсәйҙә етештерелгән ҡағыҙ; һыу тамғалары бар.

Бүлек баштары ҡыҙыл, тексы ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Фондҡа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 11-се археографик экспедицияһы етәксеһе проф. F. Б. Хөсәйенов тапшырған. Ҡулъяҙма 1979 йылда Бөрйән районы Яңы Собханғол ауылында Йомағужа Сәйетборхан улы Мырҙабаевтан алынған.

16. Ҡулъяҙма № 107 — а 12.

21 × 16,5; 17,5 × 12; 18.

Күләме 69 бит.

Ҡулъяҙманың тышы төшөп, тәүге биттәре юғалған. Поэма башлана: «Олоғ сәғәт хәдр килде...». Баҫма китап тексына тап килмәй, күләме яғынан ҙурыраҡ. Иң аҙаҡта 2 юллыҡ хәтимәлә:

Тарих алты йөҙ ҙә туғыҙында

Ошбу зәғиф бу китабны төзде имди,

тип, әҫәрҙең яҙылыу ваҡыты һижрә буйынса 609 (хәҙергесә — 1213) йыл күрһәтелә.

Ҡулъяҙманы күсереүсе — Ҡаһарман бин Fәҙелша.

Күсереү урыны билдәһеҙ.

Яҙылыу ваҡыты — 1881 йылдан элегерәк. Ҡулъяҙманың һуңғы битендә ошо йылда булған төрлө яҙмалар теркәлгән.

Рәсәйҙә етештерелгән ҡағыҙ, яҡшы һаҡланған. Бүлек баштары ҡыҙыл, текст ҡыҙыл рамка эсенә ҡара ҡара менән яҙылған.

Фондҡа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 7-се археографик экспедицияһы етәксеһе Ә. Х. Вахитов тапшырған. Ҡулъяҙма 1976 йылда Күмертау районы Таймаҫ ауылында Мәрғүбьямал Байтүрә ҡыҙы Солтангәрәеванан алынған.

17. Ҡулъяҙма №12 — а 16.

20,5 × 16; 17 × 12; 18.

Күләме — 6 бит.

Зөләйхәнең төшө тасуирланған өлөшө. Башлана: «Әкәр малын етмәз ирсә...» бөтә: «Ошбу тунны хәкиҡәт ул бийурур...»

Баҫма текстан тулыраҡ, китапта булмаған строфалар бар.

Ҡулъяҙманы күсереүсенең исеме һәм күсереү урыны билдәһеҙ.

Күсереү ваҡыты — 1891 йылдан һуң, ҡағыҙҙа бик асыҡ тамғалары бар.

Бүлек баштары ҡыҙыл, текст ҡара ҡара менән ике бағаналап яҙылған.

Ҡулъяҙма 1977 йылда Ишембай ҡалаһынан алынды һәм фондҡа ошо юлдарҙын авторы тарафынан тапшырылды. Шәрипова З. Я. «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының ҡулъяҙма сығанаҡтары // Поэма «Ҡысса-и Йусуф» Кул Гали. — Уфа: Изд-во БНЦ Уро АН СССР, 1988. — С. 76—84.)

## Томға ингән варианттары һәм версиялары

**Беренсеһен** 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеевка р-ны Ғәбдрәфиҡ ауылында Зиннәтулла Вәхитовтан Ҡирәй Мәргән яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3. 161—165-се биттәр. Баҫылған — БХИ: Эпос. 3-сө китап. — 270—272-се биттәр.

**Икенсеһен** 60-сы йылдар башында Силәбе өлкәһе Ҡорман ауылында 61 йәштәге Зәһир Закировтан Гөлнур Аҡкилдина яҙып алған. — БДУ, БӘҠ фф. Тәү тапҡыр баҫыла.

**Өсөнсөһөн,** «Ҡинйә экиәте» исемендәгеһен, 1962 йылда Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе Ҡәримә Мостафинанан (йәше әйтелмәгән) Тәфтизән Усманов яҙып алған // БДУ БӘҠ фф 80. — 10—18-се б.

**Дүртенсеһен,** «Йософ менән Зөләйха тарихы» тип исемләнгәнен, 1970 йылда Курган өлкәһе Әлмән районы Буртөшкән ауылында Ғайсина Бәширә Фәрхетдин ҡыҙынан (1887 йылғы) Фәнүзә Нәҙершина яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 92/9. Тәү тапҡыр баҫыла.

**Бишенсеһен** 1984 йылда БДУ студенткаһы Флорида Әхмәтова Архангель р-ны Муллаҡай ауылында Вәлиева Нәғимә Вәлиәхмәт ҡыҙынан (1910) яҙып алып, Нур Зариповҡа тапшырған. Ҡулъяҙмала күпмелер дәрәжәлә диалект үҙенсәлектәре һаҡланған.

**Алтынсыһын** 1984 йылда Баймаҡ районы Мерәҫ ауылында Байрамғолова Хәҙисә Абдулла ҡыҙынан (1908) Розалиә Солтангәрәева яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3., оп. 92/1. — 5—10-сы б. Тәү тапҡыр баҫыла.

**Етенсеһен,** «Йософ китабын» тип исемләнгәнен, 1977 йылда Өфөлә йәшәүсе әсәһе Ғәзизә Ғүмәрованан (1886 йылғы) Нурия Ғүмәрова яҙып алған.

Ҡулъяҙманың күләме 16 бит, машинкалағы текст — 17 бит. (Ғ. Хөсәйенов. Ҡиссалар. Шиғырҙар. Фольклор яҙмалары. — Өфө, 1985, 17—33-сө биттәр. Төпләмә. Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана. Артабан был сығанаҡ «Ҡиссалар. Шигырҙар» тип кенә күрһәтелә.)

Ғ. Ғүмәрова хәҙерге Ғафури районының Үтәк ауылында тыуып үҫкән, ҡыҙҙар мәҙрәсәһендә уҡыған. Иҫке әҙәбиәтте яҡшы белгән. Үҙе лә шиғырҙар, бәйеттәр сығарған, төрлө ҡиссаларҙы, мөнәжәттәрҙе, бәйеттәрҙе көйләп уҡыр булған.

«Ҡиссаи Йософ» сюжеты тулы сағыла. Текст теҙмә һәм сәсмә формалар менән аралаш. Шиғри өлөштәр күпселекте тәшкил итә һәм поэтик камиллығы, шымалығы менән айырылып тора // Поэма «Ҡысса-и Йусуф» Кул Гали. — Уфа, 1988. — С. 97—107 (публ. Г.Б. Хусаинова).

**Һигеҙенсеһен,** «Йософ Ғәлиәссәләм ҡиссаһы» тигәнен, 1985 йылдың 2 июлендә Белорет районы Мәхмүт ауылы Ғәйникамал Иҫәнбаеванан (1905 йылғы) Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. Ҡулъяҙма тексы ғилми архивта һаҡлана. Күләме 16 бит, машинкала — 17 бит.

Ғ. Иҫәнбаева Белорет районы Рысай ауылында тыуып үҫкән, тыуған ауылында абыстайҙа уҡыған. Мәхмүт ауылына килен булып төшкән, иҫкесә уҡый-яҙа белә. Археографик экспедицияға ике

ҡулъяҙма китап тапшырған. Ҡиссаның шиғри өлөштәрен көйләп уҡый. Ул өлгөләр магнитофон таҫмаһына яҙылды.

Ҡисса сәсмә һәм теҙмә өлөштәрҙән ойоша. Сюжет тулы бирелә. // Поэма «Ҡысса-и Йусуф» Ҡул Гали. — Уфа, 1988. — С. 108—118. (публ. Г.Б. Хусаинова).

[1] *Корт* — боронғо төрөк телендә *бүре*. Ҡөрьәндә һәм Ҡол Ғәли яҙмаһында шулай уҡ «Ҡорт» тип әйтелә. Телдән яҙып алынған варианттарҙа күбеһенсә «бүре» тип һөйләнелә.

[2] *Батшаның ҡыҙы Зөләйха* — Ҡөрьәндә, яҙма ҡиссаларҙа һәм телдән һөйләнгән башҡа варианттарҙа Зөләйха — Мысыр батшаһының ҡатыны. З. Закиров һөйләүенсә (томда баҫылған икенсе вариант) — «мәғриб батшаның ҡыҙы».

[3] Ҡөрьәндә һәм яҙма ҡиссаларҙа Мысыр батшаһы төшөндә, һигеҙ түгел, ә ете һимеҙ һыйыр, ете арыҡ һыйыр, ете туҡ башаҡ, ете короған башаҡ күрә. Ете арыҡ һыйыр ете һимеҙ һыйырҙы ашай. Нәфисә Илимбәтова вариантында һыйырҙарҙың һаны — бындағыса: һигеҙ. Ләкин төш — сәсмә телдә хәбәр итеү формаһында ғына.

[4] *Үҙен илгә батша итеп ҡуя* — Ҡөрьәндә, батшаның төшөн юрағандан һуң, Йософ, үҙенең һорауы буйынса, ҡаҙна башлығы итеп ҡуйыла.

Кәримә Мостафина һөйләгән «Ҡинйә әкиәте»ндә батша Йософҡа иген йыйыу эшенә етәкселек итеүҙе тапшыра. «Егет арғымаҡҡа атланып, күп урындарҙа булып өлгөрә, — тип дауам итә әкиәтсе. — Бейек тауҙа баҙ ҡаҙҙырып, игенде шунда ҡойҙора. Был ваҡытта Йософтоң зинданда үткән ғазап әҙҙәре юйыла. Ул ҡайтанан бөтә кеше һоҡланырлыҡ һылыу егеткә әйләнә».

[5] Ағаларына Йософтоң үҙен танытыуы яҙма ҡиссаларҙа һәм телдән яҙып алған варианттарҙа башҡаса. Ҡол Ғәли яҙмаһында, мәҫәлән, Йософ ағаларын ҡунаҡ итеү өсөн ҡырҡ аршын оҙонлоғонда махсус һарай һалдыра, стеналарын атаһы Яҡуптың һүрәте һәм ағалары ҡылған яуызлыҡтар тураһындағы һүрәттәр менән биҙәтә. «Ҡинйә әкиәте»ндә лә ағалары килеүгә Йософтоң һүрәттәр яһатып элеп ҡуйыуы тураһында хәбәр ителә.

[6] *Тимурса* (артабан *Тимус*) — Ҡол Ғәлиҙә Таймус. Телдән яҙып алынған башҡа варианттарҙа осрамай.

[7] *Ғыш-ғишеклек әҙер итте* (шулай яҙып алынған) — Ғишыҡ ауырыуы икәнен белде.

[8] *Был зарур* — был котолғоһоҙ хәл.

[9] *Был мәртәбә* — был тапҡыр, был юлы.

[10] *Зәмин батшаһы Тимус* — баштағы «Тимурса» исеме был юлы «Тимус» тип яҙылған. «Зәмин» ғәрәпсә *ер, ерлек* тигәнде аңлата. Башта осраған «мәғриб» һүҙен иҫкә төшөрһәк, тулы мәғәнәһендә «Көнбайыш ер (йәғни көнбайыштағы) батша» тигәнде аңлата.

[11] Бындай хат яҙма ҡиссаларҙа ла осрай. Мәҫәлән, «Шәих ҡиссаи Йосыф» күсермәһендә ул шулай яҙылған: «Таймус шаһ... Мысырға бер намә* язуб йибәрди. Мәзмуны* намә шул ирде кем: Эй Мисыр шаһи малик* Раян, мәндә бер ҡыҙ бардыр, ани күреб шаһләр теләр, бирмәс ирдек. Аның өчөн кемсә мәңа лайыҡ сән. Әгәр

ҡабул ҡилсаң, безгә кеше жибәргел» (Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге китапханаһы, инв. № Б/1505).

Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» әҫәрендә хат шиғри телдә һәм киңерәк.

[12] *Мысыр ғәзизе Ҡәдфир* — Ҡол Ғәли әҫәрендә *Мысыр батшаһы Ҡәнзәфәр*; «Шәих ҡиссаи Йосыф» күсермәһендә — *Мәлик Райян*. Нәфисә Илимбәтова вариантында — *Ҡытфир*. Яҙма ҡиссаларҙа Мысыр батшаһының яуап хатында исеме ҡуйылмай. Заһир Закиров вариантында яуап хатта батшаның исеме әйтелеү — һөйләүсенең бында ҡиссаның төп сюжет серен аңламауынан килеп сыҡҡан күренеш.

[13] Ҡөрьәндә, яҙма ҡиссаларҙа һәм телдән һөйләнгән варианттарҙың күбеһендә Яҡуп пәйғәмбәрҙең ике ҡатыны булып, оло ҡатынынан — ун ул, кесе ҡатынынан ике ул үҫтерә. Оло ҡатынының бер эйәрсен ҡыҙы була. Хажеғәле Ғайсин бабайҙың һөйләүе буйынса, Яҡуптың ун ике улы дүрт ҡатынынан һәм ике кәнизәгенән (йәғни хеҙмәтсе, ҡол ҡыҙҙарҙан) булған.

[14] Йософтоң төшө Ҡөрьәндә һәм яҙма ҡиссаларҙа ла асылда шул рәүештә. Ә «Ҡинйә әкиәте»ндә башҡаса: «Имеш, күктәге ай уның (Йософтоң, — Н. З.) итәгенә тәгәрәп төшә, ә тирә-яғында йондоҙҙар була. Ҡапыл Йософ сүлгә барып сыға, унда ҡыу таяҡ сәнсә, ә таяҡ шунда уҡ йәшел ағасҡа әүерелә». Хажеғәле Ғайсин бабай һөйләүендә Йософ ике тапҡыр төш күрә. Беренсе төшө бындағыға оҡшашыраҡ. Төшөн ул ағаларына үҙе һөйләй, ләкин тегеләр ышанмайҙар. «Был Рәхилә улын атайыбыҙ беҙҙән артыҡ һөйә ине, шунан ары ла һөйкөмлө булыр өсөн, алдап төш һөйләй», — тип уйлайҙар. Йософтоң икенсе төшө — яҙма ҡиссаларҙағыса.

[15] Ҡисса варианттарының «Ҡинйә әкиәте»ндә төштө ата шулай юрай: «Балам, һин изге төш күргәнһең. Үҫеп еткәс, батша булырһың, ете ағайың һиңә ҡол булырҙар», — ти. Хажеғәле Ғайсин вариантында төштө юрау юҡ, ә Яҡуп пәйғәмбәр Йософто ағалары хөсөтлөк ҡыласағы хаҡында иҫкәртеп кенә ҡуя.

[16] Ҡол Ғәли әҫәрендә һәм Нәфисә Илимбәтованан яҙып алынған вариантта Йософтоң төшөн ағаларына еткереүсе кеше — Яҡуптың үгәй ҡыҙы; «Шәих ҡиссаи Йосыф» күсермәһендә — Яҡуптың оло ҡатыны; Хажеғәле Ғайсин һөйләүенсә, Яҡуп ҡатындарының Ҡәмәр исемлеһе; «Ҡинйә әкиәте»ндә Яҡуптың етенсе улы; Бәхтегәрәй Ғайсин һөйләүе буйынса, төш юрағанда, ағалары үҙҙәре ҡасып, тынлап тора.

[17] *17 һумға* — хаҡты халыҡтың үҙ теленә яраҡлаштырып һөйләүе менән әһәмиәтле деталь. Ҡол Ғәли әҫәрендә «18 ярмаҡҡа» һаталар. «Шәих ҡисса Йосыф» күсермәһендә — «18 ҡара тәңкәгә»; Х. Ғайсин һөйләүенсә — «18 дәрһәмгә». Б. Ғайсин һәм Н. Илимбәтова варианттарында хаҡы әйтелмәй. Ә «Ҡинйә әкиәте»ндә хаҡ айырата үҙенсәлекле: «Һатыулаша торғас, ағалары бер бөртөк ҡортбашҡа һаталар». Ҡәримә Мостафина ҡортбашты «мәрйен бөртөгө» тип аңлатҡан.

[18] Йософтоң осһоҙ хаҡҡа һатылыу «сәбәбен» күрһәтеп, документ төҙөү яҙма ҡиссаларҙа ла, телдән һөйләнгән варианттарҙа ла бар.

ләкин документтың нисә данала төҙөлөүе береһендә лә телгә алынмай. Ҡол Ғәли әҫәрендә Йософтоң өс «ғәйебе» күрһәтелә: «Уғрыдыр, ялғанчыдыр, ҡачҡучыдыр». «Шәих ҡиссаи Йосыф» күсермәһендә расписка шулай яҙылған: «Асыл Ҡанғани ғәрәб ҡолы, үҙе ялғанчы, угры, ҡачҡаҡ, аты Йосыф, 18 ҡара тәңкәгә саттуҡ». Х. Ғайсин һөйләүенсә, алыш-бирештә ҡағыҙға шулай теркәйҙәр: «Бисмиллаһи рахман рәхим, без, Яҡуп ғәләйәссәләм улдары, Йософ атлы ҡолымызны Маликкә өс шарт, өс ғәйебе — уғры, илаҡ, ҡаскалаҡ булыу сәбәпле һаттыҡ вә Малик алды».

[19] «Шәих ҡиссаи Йосыф» күсермәһендә Йософтоң ауырлығына батшаның барлыҡ хазинаһы кереп бөтә. Ҡол Ғәлиҙә хазина ғына етмәгәс, батша малын-мөлкәтен дә ҡушып бирә. Был эпизод «Ҡинйә әкиәте»ндә үҙенсәлекле һүрәтләнә.

[20] «Шәих ҡиссаи Йосыф» күсермәһендә Иблис (йәки Шайтан) ҡотортоуы телгә алынмай, Зөләйха һарайҙы үҙ уйы менән һалдырта. Ҡол Ғәлиҙә һарай һалдырыуҙы Зөләйханы тәрбиәләүсе ҡатын (даясе) тәҡдим итә. Хажеғәле Ғайсин һөйләүенсә — Зөләйханы ҡарап үҫтергән ҡарсыҡ.

[21] Зөләйханың Йософҡа ғишҡын аңлатыу эпизодын варианттар төрлөсә һүрәтләй. Ҡ. Ғәлиҙә, мәҫәлән, Зөләйха үҙ ниәтен Йософто маҡтап белдерә. Ләкин Йософ быны гонаһҡа һанай, ризалашмай. «Шәих ҡиссаи Йосыф» күсермәһендә, Зөләйха, хатта ҡулына бысаҡ алып, Йософто күндермәксе: «Менең морадымны хасил килурмә сән? Юҡ ирсә, үземне һәләк ҡилурмын», — ти.

Нәфисә Илимбәтова уны шулай һөйләгән (осрашыу бында, Зөләйханың ире Ҡытфыр батша үлеп, унын урынына тәхеткә Зөләйха үҙе ултырғас була): «...Зөләйха атаһының (йәғни Яҡуптың — Н. З.), Йософтоң исемен алтын менән яҙҙыра. Шунан кенәҙҙәрен ебәреп, Йософто саҡырта. Йософ һарайға бик түбәнселек менән генә килеп инә. Зөләйха саҡыра хәҙер быны:

— Эргәмә ултыр, кил, — ти. Йософ:

— Был өҫ менән һинең эргәңә нисек барайым, — тип бошона.

Бер әйтә, ике, өс әйтә лә, үҙе килеп төшә Йософ янына. Йософҡа ташлана, Йософ әйтә:

— Әҙәпһеҙлек булыр, яман эш булыр, — ти. Зөләйха бик ебәрмәҫкә уйлағас, теге әйләнә лә ҡаса...»

«Ҡинйә әкиәте»ндә эпизод тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ:

«Йорт тамам эшләнеп бөткәс, Зөләйха Йософто ошо сихри урынға алып килә. Улар ингән һайын, арттағы ишектәр биктәнеп бара икән. Уны тик Зөләйха ғына аса ала икән. Етенсе ҡатҡа күтәрелгәс, былар икеһе лә күҙгә алдына килеп баҫалар. Һылыулыҡтары яғынан бер-береһен еңерлек булмағандар шул улар. Икеһе лә зифа буйлы, икеһе лә йәш.

Бына ошонда Зөләйха үҙенең бөтә уйын ғәмәлгә ашырырға була.

— Беләһеңме, Йософ, мин бит һине тәүге көндән үк өҙөлөп яраттым, — тип һүҙ башлай ҡатын. Йософтоң алдына теҙләнә: — Күрәһең бит, хужам ҡарт, мин уның менән йәшәй алмайым. Көсләп,

байлыкка кыҙыҒып һаттылар бит мине. Ҡыҙған һин мине, Йософ, үҙеңә ефетлеккә ал. Мин һинһеҙ йәшәй алмайым.

— Юк, Зөләйха, — тип яуап бирә Йософ, — һиңә өйләнергә хакым юк, сөнки һин әсә енесенән[1] бит.

Зөләйха нисек булһа ла үҙ теләгенә ирешергә тырыша, Йософто косаклап ала.

— Әгәр риза булмаһаң, үҙем көсләп сығам һиңә, Йософ! — ти. — Был ишектәр һиңә асылмаясактар, һин минән былай ғына котола алмайһың, — ти.

Шул сак «Сығып касыусы һин бул, ишек асыусы мин булайым» тигән сихри тауыш Йософтоң колағына ишетелеп кала. Шуны ғына көтөп торғандай, егет был һарайҙан сығып каса...»

[22] Ғәйеплене асыклау эпизоды яҙма киссаларҙа ла, асылда, бындағы кеүек. Нәфисә Илимбәтова һөйләүендә үҙенсәлекле. Унда Зөләйха Йософтоң артынан күлдәген йыртып алып калғас, быға карата әкиәтсе: «Билдәле була бит инде, алыштырырға кейем буламы инде ул вакытта, — тип, үҙенең мөнәсәбәтен белдерә һәм дауам итә: — Шунан Зөләйха кенәздәрен ебәрә. «Шундай кеше булыр, арты йыртык, шуны миңә табығыҙ!» — ти. Һалдаттар быны табалар.

Зөләйха тағын егерме йылға ултырта Йософто...»

«Ҡинйә әкиәте»ндә лә ғәйептең кемдә булыуын асыклау эпизоды юк.

[23] *Ике егет* — Ҡ. Ғәлиҙә береһе — Хәббәз (икмәк бешереүсе), икенсеһе — Сакый (ширбәтсе, һыу, эсемлек әҙерләүсе).

[24] *Батша Риуан* — шулай яҙып алынған. Дөрөҫө Раян булырға тейеш.

[25] Айырманы күреү өсөн 4-се иҫкәрмәне карағыҙ.

[26] Башкарыусы шулай һөйләгәнме, яҙып алыусы кәрәкле һүҙҙәрҙе төшөрөп калдырғанмы, — дүрт һөйләмдең мәғәнәһе аңлашылып етмәй.

[27] *Кесе энеләрен* — Йософ менән бер имсәктәш кустылары Ибнейәмин (йәки: Ибнейәбин, Иблиәмин, Миниәмин) күҙ уңында тотола. Ләкин артабан, күрәһең, яҙып алыусының өлгөрмәүе аркаһында, фекер ағышын бәйләүсе, асыклаусы һөйләмдәр төшөп калған.

[28] *Кескәй бала илай* — Йософтоң кустыһы Ибнейәмин күҙ уңында тотола.

[29] Был хәйлә Йософтоң Ибнейәминде үҙ янында алып калырға теләүе менән эшләнә. Был эпизодты Илимбәтова Нәфисә, мәҫәлән, шулай һөйләгән:

«Йософ быларҙы (ағаларын — Н. З.) бик нык хөрмәтләгән. Ибниәминдең йөгөнә бер киҫәк алтын (Хажеғәле һәм Бәхтегәрәй Ғайсиндарҙың һөйләүенсә, алтын һауыт. — Н. З.) тыккан. Ул вакытта киҫәк-киҫәк алтын бик күп булған, ер өҫтөндә яткан.

Ҡайтыр вакыт еткәс, Йософ йөктәрен карап сыккан да:

---

[1] *Әсә енесенән — миңә әсәйҙәрсә тәрбиә кылыусы* мәғәнәһендә.

— Был ҡустығыҙҙы мин ҡайтармайым, алтын урлаған, — тигән. Үҙе Ибниәмингә ҡурҡмаҫҡа ҡушҡан.

Ағалары ҡайтып, аталарына:

— Яратҡан улың алтын урлап, батшала тороп ҡалды, беҙҙе оятлы итте, — тигәндәр. Аталары:

— Иншалла, бер нәрҫә бар бында, урламаҫ, — тип, ул эшкә ышанмаған.

[30] *Акт* — был, әлбиттә, хәҙерге заман һүҙе. Йософто каруансыларға һатҡанда бирелгән ҡағыҙ (расписка) күҙ уңында тотола.

[31] *Маневр* — был хәрби терминды ла һөйләүсенең хәҙерге заман фантазияһында тыуған яңылыҡ тип ҡарарға кәрәк.

[32] Йософтоң инде ҡартайған һәм һуҡырайған Зөләйха менән күрешеү эпизоды яҙма ҡиссаларҙа шаҡтый тәьҫирле һүрәтләнә. Ҡ. Ғәлиҙә, мәҫәлән, Йософ урам сатында илап ултырған ҡарсыҡтан (Зөләйханан) нисек был хәлгә төшөүен һорай. Зөләйха үҙенең башынан үткәндәрен һөйләй, аҙаҡ, Йософто яҡыныраҡ саҡырып, ҡулындағы ҡамсыһын һорай. Зөләйха, ҡамсыны ҡулына алып, бер аһ итә лә Йософҡа кире бирә. Йософ алыу менән, ҡулы бешеп, ҡамсыны атып бәрә.

[33] *Кәтфәр* — 12-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ.

[34] *Бер әҙәм* — башҡа варианттарҙа батша үҙе.

[35] *...хөрмәт мән татып ала.* — Шулай яҙып алынған. Дөрөҫө — *...татып ҡара* булырға тейеш.

[36] Башта һөйләнмәй ҡалған хәлдәр хаҡында һуңынан бер арала әйтеп үтеү — әкиәт һөйләүҙә була торған күренеш.

[37] *Хәйлә менән алтын беҙәлек* (беләҙек) *тыға* — Ҡол Ғәлиҙә Йософ алтын беләҙекте Ибне Йәмингә бүләк итеп бирә, ә уның йөгөнә (үҙенә алдан иҫкәртеп) бик ҡиммәтле алтын һауыт йәшертә.

[38] *Шамғун* — Ҡол Ғәли поэмаһында Йософтоң үтә яман ҡыҫҡыра алыусы ағаһы Йәһүҙә.

[39] *Бер бала* — Ҡол Ғәлиҙә Йософтоң кесе улы Мәмилә.

[40] *Чистый мин булып* — шау мин булып, миңә оҡшап.

[41] Вариантта шиғри өлөштәр бына шулай ни татарса, ни башҡортса түгел итеп яҙып алынған.

[42] Төш юрауҙа хата ебәрелгән. Башта туҡлыҡ, унан аслыҡ йылдар килә.

## Телдән яҙып алынған башҡа варианттары һәм версиялары

**1. 1963 йылда** Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеевка р-ны Ғүмәр ауылында уҡытыусы-пенсионер Ғайсин Бәхтегәрәй Сәйфулла улынан (1888 йылда тыуған) яҙып алынған // БДУ БӘҠ фф. 84 (85). — 72—74-се б.

Вариант башлыса сюжет йөкмәткеһен ҡыҫҡаса һөйләп сығыуҙан тора (машинкала өс бит).

**2. 1968 йылда** Башҡортостандың Хәйбулла р-ны Ҙур Әбеш ауылында Нәфисә Илимбәтованан (1905 йылда тыуған) Зәкиә Хисамова яҙып алған. — БДУ БӘК фф. — 1968-се йылғы яҙмалар.

Эпизодтарҙы хикәйәләүҙә әкиәт стиле, традицион алым һәм деталдәр күренә.

**3. XX быуаттың 60-сы йылдарында** Мәсетле р-ны Һөләймән ауылында 82 йәшлек Бәҙретдинова Мәхмүзәнән Тәзкирә Хажиева яҙып алған // БДУ БӘК фф, 7. — 194—199-сы б.

**Төп айырмалыҡтары:** 1) Яҡуп пәйғәмбәрҙең бер ҡатынының — ун, икенсеһенекенән ике улы тыуа. 2) Йосоп төштө ике рәт күрә: беренсеһендә — уға ун бер йондоҙ сәждә ҡыла, Ай менән Ҡояш еңенән сыға; икенсеһендә ун ике ағай ағас ултырта — өлкәндәренеке япраҡ ярмай, емешләнмәй, Йосоптоко емешләнә, ағайҙары Йосоптоҡона баш эйә. Якуп юрай: Йосоп пәйғәмбәр булыр, ағайҙары уға баш эйер. 3) Был төштөң юралышын өлкән ағайҙарға хеҙмәтсе ҡыҙ әшкәртә. 4) Йосоп бер йәштә генә була. 5) Сәхрәгә сыҡҡанда, аталары икмәк, һыу бирә. Ағалары икмәкте эткә һелтәй, һыуҙы түгә. 6) Ҡойоға ташлар алдынан Йосоптоң күлдәген систереп, һүрәтен(?) алалар. 7) Таймас тигән батшаның ҡыҙы Зөләйха төшөндә Мысыр батшаһын күреп (киләсәктәге Йосоп була инде) үҙе теләп кәләшлеккә барһа, яратмай. Батша яҡынлыҡ ҡыла алмай — ике арыҫлан ишеген һаҡлай. 8) Ҡойола Йосоп ете йыл таш өҫтөндә ултыра, сәсе нур сәсә, ҡоштар йыйыла. Сүллектә мал ҡыуып барған бай шулар буйынса иҫке ҡойола һыу барын белә. 9) Ағайҙары, ҡолобоҙ, тип, Йосопто 18 тәңкәгә һатып, уға «насар», «алдаҡсы» тигән ярлыҡ бирә. 10) Баҙарҙа Йосопто күргәс, Зөләйха уны таный: төшөнә ул кергән, имеш. 11) Зөләйха Йосопҡа ғашиҡлыҡтан ауырый — күрәҙәселәр әйтеүенсә, ҡан алдырһа, «ҡаны Йосоп тип яҙылып төшә» (?): табипсы: «Шәһәр ситенә бер һарай һалдыр, һарай бик матур булһын, һыуҙар ағып торһон, һарайҙың бағаналары алтын, көмөштән булһын, бағаналарҙа ҡоштар һайрап торһон. Үҙең, кейенеп-яһанып, тәхеткә менеп ултыр. Йосопто саҡырып ал. Йосоп ингәс, бер ишекте бикләт», — тип кәңәш бирә. Йосоп килһә,

Зөләйха хурлар кебек биҙәнеп ултыра,
Рәжим — шайтан өҙәнеп(?) тора.

12) Зөләйха Йософто маҡтай: керпектәре оҙон, эйәктәрең алма кеүек һ. б. Тәкәте бөтөүен әйтә. Йософ фирештәнән ярҙам һорай — ишек, ҡапҡалар асыла. Зөләйха баҫтыра, итәген йырта. Иренә ошаҡлай, йәнәһе, уға «һөжүм» иткән. Сабый дөрөҫөн әйтә. 13) Раян батшаның төшөн юрап, ете йыл иген уңып, ете йыл уңмаҫын әйтә. Тотҡонда саҡта бер егет килә, унан Йосоп: «Кәнгән шәһәрендә бер ағас бар ине. Шуның ун ике ботағы ла бармы икән?» — тип һорай. Егет: «Якуп пәйғәмбәр, 11 ботағы тере», — ти. Егеткә егерме(ләп) тәңкәлек беләҙек бүләк итеп, был хаҡта өндәшмәҫкә ҡуша. 14) Төрмәнән сығып, батша була, ҡартайған Зөләйханың дүрт үтенесен үтәй: уны, матурайтып, йәшлегенә, күҙенә нур ҡайтара (ул һуҡырайған була), уның менән никахлаша. 15) Ашлыҡ ала килгән ағалары, был урыҫ батшаһы беҙҙең телде ҡайҙан белә икән, тип аптыраша. Яҡуп, ун ике улы бергә йәшәй.

**4. «Йосоп пәйғәмбәр (әкиәт)»** тигән исем аҫтында яҙып алынған // БДУ БӘК фф. Төрлө йылдар. — 240—245-се б.

Текст Мәккәлә йәшәүсе Яҡуп пәйғәмбәрҙең бер ҡатынынан — тугыҙ ир бала, бер — ҡыҙ, икенсеһенән ике ир бала (Иблнәмин менән Йосоп) тыуыуын хәбәр итеүҙән башлана. **Үҙенсәлектәре:** 1) Йосоп төшөндә тулған айға ун бер йондоҙҙоң «Төшә-мөшрә ҡылыуын күрә». Ай, Йосоптоң итәгенән инеп, еңенән сыға. Атаһы быны: «Һин, улай булғас, пәйғәмбәр булаһың. Ағайҙарың һинә шәһдә (сәждә) ҡылырҙар. Һин минең урынға пәйғәмбәр булырһың», — тип юрай. Ағалары, шунан ҡурҡып, Йосопто үлтерергә ниәтләнә (уларға төштөң юралышын ҡарындаштары ошаҡлаған була). 2) Ҡоҙоҡтан сығарған Мәликкә Йосопто ағалары һатҡандан һуң, әсәһенең ҡәберенә барырға булһа — ҡулындағы бығауҙар ыҫҡына. Каруансы Ҡарағол һуҡҡас, ҡояшҡа ҡарап, доға ҡылып, дөйәләр ятмалы елдауыл сығарған. 3) Йосопто һатып алған байҙың ҡатыны Зөләйха уға ғашиҡ булып, янына ятҡас, Йосоп ҡаса. Бисә уның сабыуын киҫеп алып, тауыш ҡуптара: йәнәһе, егет уны көсләргә итҡән. 4) Туҡлыҡ, йот йылдары килере тураһында төштө Йосоптоң хужаһы — бай (ҡала башлығы) күрә. 5) Ҡала башлығы булып алған Йосопҡа осраған әбей унын ҡулынан төшкән ҡамсыны эйелеп ала — йәш Зөләйхаға әүерелә. 6) Ашлыҡ ала килгән ағаларының кесеһен, бурлыҡта ғәйепләп, Йосоп үҙендә алып ҡала (намаҙлыҡ уның йөгөнән сыға). 7) Рауил ағаһының тауышын улынан алдыра. 8) Ошо хәлде ишеткәс Яҡуп: «Улай икән, унда беҙҙең берәй тоҡом ҡалырға тейешле», — ти. 9) Яҡуп Мысырға барып уландарын күреп, кире Мәккәгә килгәндә, фирештәләр ҡәбер ҡаҙа. Ул Яҡупҡа хат яҙа: Йосоптоң һигеҙ ағаһы аслыҡтан үлә.

**5. «Йософ вә Зөләйха» (иртәк)** исеме менән 1971 йылда Миәкә р-ны Боғҙан ауылы Нәғимов Махияндан (1898) Гөлнур һәм Зәйтүнә Йәғәфәровалар яҙып алған // БДУ БӘК фф. 99. — 250—252-се б.

Был вариант күп яғы менән Заһир Закиров варианты менән тап килә.

**Ҡайһы бер деталдәр:** 1) Йософ төшөндә ун бер йондоҙ, Ай һәм Ҡояш күрә. 2) Торған ере Көнған ҡалаһы. 3) «Атаһы: «Мысыр шәһәрендә (хәҙерге Ташкент ҡалаһы) батша булырһың, ә ағаларың һинә ҡол булырҙар», — тип юрай. 4) Йосопто ҡоҙоҡтан сығарып алған сауҙагәр «тө҇кә-башҡа бик һылыу, зифа буйлы, көслө була», тиелә. Был мәғлүмәт, ағалары килеп Йософ өсөн тартҡылашҡанда, әйтелә. 5) Мысыр ҡалаһына килгәс, Зөләйха кейәүгә сыҡҡан кеше Ғәзиз атлы батша була. 6) Батша төшөндә ете һимеҙ һәм ете арыҡ һыйыр күрә. Арыҡтары һимеҙҙәрен ашай. Сағ.: Бәхтегәрәй Ғайсин вариантында бынан тыш ете ас башаҡ ете туҡ башаҡты ашай.

**6. 1972 йылда** Башҡортостандың Ейәнсура р-ны Дубняк ауылында Хажеғәле бабай Ғайсиндан (йәше әйтелмәгән, һуҡыр) китапханасы Зөлфиә Мусина яҙып алған һәм Ғайса Хөсәйеновҡа тапшырған // Ғилми архив, ф. 3 оп. Ледерин тышлы ҡалын дәфтәр, ике яғына яҙылған 128 б.

Был вариант хаҡында Ғайса Хөсәйенов шулай тип яҙған. «Ейәнсура р-ны Дубняк ауылы Ғайсин Хажеғәленән яҙып алынған ҡулъ-

яҙманың аҙағында автор был ҡиссаны «Йософ менән туғандары ҡиссаһы» тип атай. Атаҡлы немец яҙыусыһы Томас Манндың «Йософ менән ағай-энеләре» (дөрөҫөрәге: «Йософ менән ағалары». — Ә. С.) романының исеме үк ошо яҡҡа акцент яһауын раҫлап тора». (Ҡар.: Хөсәйенов Ғ. Б. Быуаттар тауышы: Башҡорт әҙәбиәте тарихы, теорияһы һәм тарихи поэтика буйынса очерктар. — Өфө: БКН, 1989. — 39-сы б.).

**7. 1975 йылда** Мәләүез р-ны Ерек ауылында Насирова Фатиманан (1906) Рәмилә Иҫәнғолова менән Миләүшә Ҡолмөхәмәтова яҙып алған // БДУ БӘК фф. 188. — 578—582-се б.

**Айырмалыҡтары:** 1) Яҡуптың ун ике улынан тыш Динә тигән ҡыҙы була. Шул ҡыҙ Йософто ағайҙары менән ебәрмәҫкә итә. 2) Йософтоң төшө шиғыр рәүешендә бирелә:

Ғәзиз Йософ тамам ун бер
Йәшәр үҙе,
Яҡуп Сәли* уйлыҡынды
(ихтимал: Яҡуптың алдында йә тубығында. — Ә. С.)
Ойор үҙе.
Ойор икән, бер ғәжәп төш
Йософ күрҙе.
Ун ике йондоҙ нурлы айға
Сәждә ҡылды.

3) Йософто ҡырға алып китергә Яҡуп рөхсәт итмәгәс, абзыларының ҡотҡоһо буйынса, ул үҙе ялынып-ялбарып рөхсәт ала. Атаһы унын сәсен ун ике толомлап үрә, күҙенә һөрмә тарта. 4) Ҡоҙоҡҡа ташлана: унда хәтфә юрған, алтын табаҡта ризыҡ хасил була. 5) Ҡоҙоҡта Йософ 60 йыл йәшәй, ҡартаймай, үлмәй. Ағалары шунан һуң каруан башлығына һата. 6) Йософто бығаулағанда, таш яуа, ыҫҡындырғас, тыма. 7) Төшөндә Йософ пәйғәмбәрҙе күргән Зөләйханы атаһы күрше батшалыҡҡа алып бара, батшаға бирә. Ул батша Йософто һатып ала. Зөләйха бергә булырға әйткәс: «Һин — 90 йәшлек әбей, мин — 18 йәштә генә», — ти. 8) Зөләйха Хоҙайҙан Йософто үҙенә ҡаратырға һорай. — 12 йәшлек һылыу ҡыҙға әүерелә (унын ире үлгән була). 9) Аслыҡ, Йософ батша булғас, башлана. 10) Яҡуптың һуҡыр күҙе Йософто күреү шатлығынан асыла.

**8. «Йософ»** тигән исем аҫтында 1975 йылда Күгәрсен районында (1905) Ә. Солтанова менән Д. Акъегетова яҙып алған // БДУ БӘК фф, 188. — 563—576-сы б.

**Айырмалыҡтары:** 1) Йософтың төшөнөң юралышын үгәй апаһы, тыңлап, башҡа ағайҙарына еткерә. 2) Ағалары менән юлға сығырҙан алда Йософ 12 толом сәсен үрә. Юлда ағаларынан туҡмала. 3) Ҡоҙоҡҡа һелтәнгәс, фирештәләр уны ебәккә кейендерә. 4) Йосопто ағалары каруанға «уғры, илай, тынлауһыҙ» тигән ҡылыҡһырлама менән һата. 5) Әсәһенең ҡәберенә зыярат ҡылғанында ике ҡамсы әләгә — боҙло ямғыр яуа. 6) Ҡортҡа кәңәше буйынса, Зөләйха ожмах кеүек өй эшләтә. 7) Аслыҡ йылы өсөнсөгә килгән ағалары

менән һуғыш була. Ақырыусылары қысқыра алмай, сөнки Йософтың балаһы арқаһынан һыйпай.

9. **«Йосоп» тигән исем аҫтында** 1982 йылды Балаҡатай р-ны Яңыбай ауылы Кәлимуллин Ғәйфулла Кәлимулла улынан (1893) Берйән Байымов яҙып алған // Ғилми архив. ф. 3. оп. 73/70 — 1—2-се б.

**Иғтибарға лайыҡ деталдәре:** 1) Батырҙың өс улы була, кинйәһе — Йосоп. 2) Ҡоҙоҡтан алыусыны ҡыуып етеп, ағалары, «ул — бур, ҡараҡ, кеше талаусы», ти; Шуға күрә уның яҡшы кейемдәрен систереп, ҡорсаңғы атҡа атландыралар. 3) Кейек ҡыуып йөрөүсе батша Йосопто матурлығына күрә һатып ала. 4) Зиндандан сыҡҡас, батша уға ҡыҙын бирә. Был вариантта Зөләйха тигән исем телгә лә алынмай.

**10. 1984 йылда** Дәүләкән р-ны Дүртөйлө ауылы Күсемханова Динә Аллаяр ҡыҙынан (1926) Гөлнур Хөсәйенова яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 92/9. — 175—177-се б.

**Үҙенсәлектәре:** 1) Ҡоҙоҡта аҡ таш өҫтөнә төшә (Йософҡа ун йәш була) — Ябраил фирештә ташты мендәр кеүек итә, малайға ожмах кейеме бирә. 2) Ағалары әйткәнсә, каруансылар Йософто рәнйетә: ҡатыға ултыртып, аяғына ағас ботинка кейҙерәләр. Әсәһе (ҡәберендә була) тауыҡ йомортҡаһындай боҙ яуҙыра. 3) Иң аҙаҡ информатор шулай ти: «Зөләйха, ҡарсыҡ булһа ла, ҡыҙ булған... Уларҙың ике ҡыҙы, биш улы була».

**11. «Йософ вә Зөләйха ҡиссаһы»** тигән исем менән 1989 йылда Дәүләкән р-ны иҫке Ҡәҙерғол ауылы Абдулханова Суфыя Сәйетгәрәй ҡыҙынан (1910) Фәнүзә Нәҙершина яҙып алган // Ғилми архив, ф. 3, оп. 92/9. — 37—40-сы б. Шунда уҡ. 17-се бит. Информатор хаҡында иҫкәрмә: «Үҙ алдына иҫкесә уҡыган. Иҫке китаптары бар».

**Иҫтә ҡалыр деталдәр:** 1) Ун бер йәшлек Йософ төшөндә ағас күрә, уң ике ботағы ла әсәһендә ҡала. Яҡуп юрай: Йософ киләсәктә батша булыр. 2) Ун улы ауыҙы ҡанлы бүре килтергәс, Яҡуп бүренән һорау ала. Бүре: «Пәйғәмбәрҙең ите беҙгә харам: ашаманым», — ти. 3) Әсәһе ҡәбере тәңгәлендә Йософ менеп барған дөйәһе сүгә. Йософ әсәһенә килеп һөйләһә, батша туҡмай — уны ер тота, яуын башлана. 4) Һыйыр тураһындағы төштө төрмәлә күрә. 5) Йософто батшаның ҡатыны Зөләйха төшөндә күргән була. Таный. Бер ниндәй мажараһыҙ никахлашалар. 6) Уландары Иблиәминде ҡалдырып киткәс, Яҡуп: «Йософ менән күрешермен әле. Йософтың еҫе килә», — ти.

**12. 1989 йылда** Дүртөйлө р-ны Иҫке Мерәҫ ауылы Дәүләтгәрәева Вәзирә Оҙелгәй ҡыҙынан (1907) Гөлнур Хөсәйенова яҙып алган. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92/9. — 168—169-сы б. Информатор хаҡындағы иҫкәрмәлә, В. Ә. Дәүләтгәрәева иҫкесә таный, тиелгән. — Шунда уҡ, 168-сы б.

Был вариантта Йософ Зөләйхаға тәңгәл сығара: ҡоҙоҡтан унын ире ала. Артабан Зөләйханың тәкәт итә алмай гашиҡ булыуын (әүәл төшөндә күргән) әйтә. Йософто төрмәгә юлыҡтырыуын әйткәндән һуң, Яҡуптың балалары ике бисәһенән икәне, Йософтоң төштә

ҡояш күреүе хәбәр ителә. Төрмәнән сыҡҡас, Йософ әнеһен алдыра. Йософ һунар итә, һукмаҡта гел Зөләйха осрай: «Һине көтә-көтә күҙҙәрем һуҡырайҙы», — ти. Йософ атаһы кәнәше менән шарт ҡуя «Йәшлегенә ҡайтһаң, алам». Шулай була.

**13. 1989 йылда** Дәүләкән р-ны Иҫке Яппар ауылы (Ябалаҡ нәҫеле) Ноғманова Ғәзизә Солтангәрәй ҡыҙынан (1928) Гөлнур Хөсәйенова яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 92/9. — 170—174-се б.

**Ҡайһы бер үҙенсәлектәре:** 1) Ҡоҙоҡтағы йылан-саян Йософҡа теймәй — фирештәләр ҡурсалай. 2) Йософтоң йөҙөнән нур бөркөләүен күреү өсөн, ауылда аҡса бирәләр. Йософ тамаҡ ҡыра — маҡтана. Бүтәнсә йөҙөнә ҡараусы булмай. Информатор: «Беҙҙең мосолман кешеләренә тамаҡ ҡырып маҡтаныу килешмәй, — ти. — Үҙ-үҙен матур күреп үтә ғорурланғанға, был ауыл уны күрергә сыҡмаған». (171—172-се биттәр. Был мотивтар Ғәзизә Ноғоманова вариантында ла ҡабатлана.) Икенсе бер ваҡытта, нурын файҙаланып аҡса йыймаһындар өсөн, Йософ битен юрый үҙе буяй. 3) Ҡаруансылар битен йыуырға ҡуша. Күлгә барһа, ҙур балыҡ үҙе өҫтөнә баҫтырып йыуындырта. Доға ҡыл, ти. Балалары юҡ икән, сөнки бер пәйғәмбәрҙе йотҡан. Йософ доға ҡыла. Ҡатындар ғәйбәте: «Ыстырам, бер бала ҡолға ғашиҡ булған». Зөләйха ни өсөн һигеҙ бүлмәле йорт (һигеҙ йорт) эшләтә, тигән һорауға яуап бар: ожмах бит һигеҙ. 5) Ашлыҡлы — 12 йыл, аслыҡлы — 12 йыл, тип, төрмәлә төш күреүселәрҙең төшөн юрай. Зөләйханың ире ике көнгә генә ултырта, әммә, шул арала үлеп китеү сәбәпле, Йософ 12 йыл ултыра.

**14. 1989 йылда** Дәүләкән р-ны Иҫке Хөсәйен ауылы Сәғәҙәтгәрәев Ҡинйәбай Шәңгәрәй улынан (1930) Фәнүзә Нәҙершина яҙып алған // Ғилми архив: ф. 3, оп. 92/9. — 40—42-се б. *Информатор хаҡында иҫкәрмә:* «Күҙе иҫкесә таный. Төрлө эштә эшләгән. Ауырғазы р-ны Мораҙым ауылынан килен булып төшкән».

**Үҙенсәлеге:** 1) Яҡуп пәйғәмбәрҙең бисәһе икәү: беренсеһенән — өс, икенсеһенән ике бала (Йосоп менән Иблиәмин) тыуа. 2) Ағайҙары, нимәгәлер асыуланып, Йосопто һата. 3) Дауыллы ямғыр яуыуын, әсәһе кәберенә барғанда, һуҡҡан өсөндөр, тип, унан ҡурҡып икенсе каруансыға һаталар. 4) Ағалары һунарҙа саҡта, каруансылар алып, ҡоҙаҡҡа төшөрәләр. 5) Йәнә каруансылар килә, Йосопто ҡоҙоҡтан сығара. 6) Зөләйханың кем ҡатыны икәнен белмәй. 7) Йосопто зинданға яптырғас, ҡыҙҙар көлә, Зөләйха бер хәйерсе малайға ғашиҡ. Картуф әрсегәндә Йософто күреп, ҡулдарын киҫәләр. 8) Ашлыҡ ала килгән кесе ағаһын «бур» тип алып ҡала, атаһы хаҡында һүҙ юҡ.

**15. Йософ менән Зөләйха*.** 1985 йылдың июнендә фольклор экспедицияһы ваҡытында Баймаҡ районы Ҡаратал ауылында Шәрифулла Ҡасҡыновтан (97 йәш) Берйән Байымов яҙып алған. Ҡулъ-

---

* №№ 15—44-се текстарға аңлатманы Ғ. Б. Хөсәйенов әҙерләне. Ҡар.: «Ҡиссаи Йософ»тоң башҡорт халыҡ варианттарына тасуирлама (Ғ. Б. Хөсәйеновтың «Ҡиссалар. Шиғырҙар. Фольклор яҙмалары» туплан-маһы буйынса) // Поэма «Кысса-и Йусуф» Кул Гали. — Уфа, 1988. — С. — 87—94.

яҙмаһы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор һәм сәнғәт бүлегендә һаҡлана, күләме 18 бит, машинкалағы тексты 15 бит. (Ҡиссалар. Шиғырҙар: 52—66-сы биттәр.)

Текст шау сәсмә формала. Сюжет тулы һәм йәнле итеп бирелә, диалог, монолог өлөштәре күп, халыҡсан теле матур, стиле шыма. Бер ни тиклем әкиәт стиленә яҡын.

**16. Йософ һәм Зөләйха ҡиссаһы.** 1985 йылда фольклор экспедицияһы ваҡытында Баймаҡ районы Өмөтбай ауылында Фатима Ғүмәрованан (1901 йылғы) Риф Сөләймәнов магнитофон таҫмаһына яҙып алған.

Магнитофон таҫмаһынан ҡулъяҙмаға күсерелгәне 18 бит, машинкала — 15 бит. (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 68—82-се биттәр.)

Текст нигеҙҙә сәсмә формала. Ф. Ғүмәрова ҡиссаны һамаҡлап һөйләгән. Текста ярым шиғыр өлөштәре, шиғри юлдар йыш осрай. Һөйләүсе сюжетты үҙенсә эшкәрткән, үҙенсәләп һөйләүе асыҡ күренә. Бына бер өҙөк:

«Унан тегеләр сығып китеп, яландан бер бүрене терелэй тотоп килтерәләр. Бүрегә Яҡуп пәйғәмбәр әйтә:

— Ни эшләп минең пәйғәмбәр булаһы баламды ашаның? Мине мәхрүм иттең? Уны йәшләй әрәм иттең?

Бүре, телгә килеп, әйтә:

— Мин үҙем Мысырҙан яңы килдем,
Бер әҙәмгә бар ине яуап һүҙем,
Балам юғалды, ти. Яуап ҡылдым.
Ун ете көн булды, бер тәғәм еймәнем.
Хәсрәтемдән тәгәм аҙыҡ еймәҫ инде.

Аптыраған Яҡуп пәйғәмбәр, һөт эсереп, икмәк ашатып, бүрене туйҙырып сығарып ебәргән. «Һинең гонаһың юҡ икән», ти.

Бүре сығып балаһын тапҡан була, ҡыуанып йәшәгән була. Йософ юҡ та юҡ — юғалды инде».

**17. Ҡиссаи Йософ.** 1985 йылда Өфө ҡалаһында йәшәүсе уҡытыусы-пенсионер Нәжем Моратов (1902 йылғы) яҙып, Ғайса Хөсәйеновҡа тапшырған. Яҙмаһын ул шундай инеш һүҙ менән башлаған:

«Мин, Моратов Нәжем Мостафа улы, 1902 йылда элекке Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙе (хәҙерге Саҡмағош районы) Иманғол ауылында (элекке Имәнле волосы) тыуғанмын. Мин кескенә ваҡытта беҙҙең өйҙә кис ултырғанда апайымдар Йософ китабын көйләп уҡыйҙар ине. Уларға эйәреп, мин дә:

Йософтоң биленә еп таҡтылар
Һәм дәхи ҡойо эсенә ут яҡтылар...

тип ауыҙ эсенән көйләп йөрөгәнем әле лә хәтерҙә.

Үҙем уҡып белә башлағас, Йософ китабын бер нисә тапҡыр уҡып сыҡҡаным булды. Бына был дәфтәрҙә хәтерҙә ҡалғандарын ҡыҫҡаса яҙырға булдым. 1985» (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 84-се бит).

Текстың башланышы: «Яҡуп ғәм Ҡәнгән илендә пәйғәмбәрлек ҡылған. Уның ун уғлы булған. Уғылдары араһында иң һөйкөмлө

яраткан уғлы Йософ исемле булған. Шул Йософ төш күргән. Төшөндә ни күргәнен атаһы Яҡупҡа түбәндәгесә һөйләгән:

— И ата, төшөмдә ун бер йондоҙ күрҙем һәм ҡояшты күрҙем. Йәнә күктән төштө. Улар минең яныма килеп, бөтөнөһө минең ҡаршымда миңә сәждә ҡылдылар, — тип атаһына һөйләне. Яҡуп ғәм был әкиәттән улының пәйғәмбәр буласағын аңланы һәм ҡәрҙәштәренә һөйләмәҫкә бойорҙо. Әгәр ҡәрҙәштәренә һөйләһәң, улар һиңә дошманлыҡ ҡылырҙар, тине».

Ҡисса сюжеты дәфтәргә күсерелгән: 10 бит, машинкала 12 бит. (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 84—94-се биттәр).

Дәфтәр аҙағына күсереүсе шулай яҙған: «Ҡиссаның ҡыҫҡаса йөкмәткеһен яҙыусы Нәжем Моратов. Өфө ҡалаһы, 1985. Яҙып, Ғайса Хөсәйеновҡа тапшырҙым».

**18. Йософ менән Зөләйха.** 1985 йылдың 3 ноябрендә Белорет районы Инйәр эшселәр поселогында Мәликә Дәүләтҡолованан (1915 йылғы) магнитофон таҫмаһына Румия Әфләтунова яҙып алған.

Магнитофон таҫмаһынан күсерелгәне 7 бит, машинкала — 6 бит. (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 95—100-сө биттәр).

Башланышы: Йософ пәйғәмбәр төш күргән ун бер йәшендә. Атаһы юраған төшөн: «Һин Мысырҙа падишаһ булырһың. Ағайҙарың һиңә баш эйер». Әйткән була: «Был төшөңдө бер кемгә лә һөйләмә, дуҫтан дошман күп», тип. Бер ҡыҙы ишетеп тороп, барып әйтә ағаларына:

Ҡәрҙәшегеҙ Йософ бер төш күрмеш,
Ай, көн, ун бер йондоҙ аңа сәждә ҡылмыш,
Атаңыҙ Яҡуп аны изгегә юрамыш,
Мин ишеттем ул юрауҙы үҙем инде.

Быны ишетеп, Рауил тигәне, һикереп тороп: «Барайыҡ, һорайыҡ, үлтерәйек», тигән. Барғандар, һорағандар Йософто аталарынан.

Ҡиссаның икенсе яртыһы шау шиғри формала. Быны һөйләүсе китаптан ҡарап, көйләп уҡыған, буғай. Ул өлөшө шулай башлана.

Йософ төрмәлә ятҡанда:

Йософ ул зиндан эсрә баҡый ҡалды,
Ҡәнғәндин бер әғрәби Мысра килде,
Ҡәнғәндин бағып, аны Йософ күрде,
Дәүә һөйрәп тәкжил белән кисәр инде.
Ул әғрәби зинданға якын килде,
Йософ анда идекен дәүә белде,
Дәүә, бузлап, Йософҡа зари ҡылды,
Мин Ҡәнғәндән килермен инде, диер инде...

Шиғри өлөш — 5 бит.

**19. Ҡиссаи Йософ.** 1985 йылдың 3 июлендә Белорет ҡалаһында Хәмиҙулла Абдрахман улы Табировтан (1898 йылғы) Ғайса Хөсәйенов яҙып алған.

Хәмиҙулла Табиров хәҙерге Ғафури районы Үгәш ауылында тыуып үҫкән. Ошо ауыл мәҙрәсәһендә уҡыған.

Күсермә үҙе 5 бит, машинкала — 6 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 101—106-сы биттәр).

Башланышы: «Пәйғәмбәрҙәр тарихынан был китап. Атайым, хәҙрәт кеше, яттан көйләп уҡый торғайны. Беҙ шуны тыңлап, аҙаҡ уҡып үҫтек. Хәҙер хәтер тарҡау инде — күбеһе онотолған. Назым менән әйтелгәнен хәҙер китаптан ғына көйләп уҡыйым.

Былай һөйләһәк, шулайыраҡ:

«Яҡуп пәйғәмбәрҙең ун ике улы булған. Ҡеҫеһе, иң матуры, Йософ булған. Йософ төш күргән...»

Сюжет шулай бик ябай, асыҡ итеп һөйләп кителә.

**20. Йософ менән Зөләйха.** Һикһәненсе йылдар башында Саҡмағош районы Балтас ауылында Әскәпъямал Нәбиулла ҡыҙы Халиҡованан (1904 йылғы) Башҡорт дәүләт университеты студентҡаһы Румия Әфләтунова яҙып алған.

Ҡулъяҙмаһы 3 бит, машинкала 2 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 107—108-се биттәр).

Башланышы: «Йософҡа пәйғәмбәр булаһы төшөнә кергән. Атаһы: «Был төшөңдө һөйләмә, көнләшерҙәр», тигән. Ағалары Йософто сәйәхәткә көсләп алып сыҡҡандар. Атаһы ҡайғырған. Йософто бер каруан табып, Мысыр шәһәренә алып киткән. Батшалыҡҡа ҡуйғандар».

Шулай ҡиссаның йөкмәткеһе, ҡыҫҡа ғына итеп, схематик һөйләп сығыла.

Был вариантта бик ҡыҙыҡлы шиғри аңлатма өлөш бар. Бына өлгөһө:

Атабыҙ Әҙәм Алла ҡаршында
Йәннәттән сыҡҡанын һөйләр.
Атабыҙ Әҙәм Алла ҡаршында
Иблис күҙенә төшкәнен һөйләр.
Анабыҙ Һауа Алла ҡаршында
Нил даръяһында йөҙгәнен һөйләр...
...Яҡуп пәйғәмбәр Алла ҡаршында
Балаһы өсөн көйгәнен һөйләр.
Йософ пәйғәмбәр Алла ҡаршында
Ҡарунға һатылып киткәнен һөйләр.
Йософ пәйғәмбәр Алла ҡаршында
Ҡойо төбөнә төшкәнен һөйләр,
Әйүп пәйғәмбәр Алла ҡаршында
Балыҡ ҡарнында ятҡанын һөйләр.

**21. Йософ ғәлиәссәләм.** Мәләүез ҡалаһында йәшәүсе Нәғимрахман Хәбибрахман улы Ғүмәровтан (1910 йылғы) Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. 80-се йылдар башында.

Күсермәһе 6 бит, машинкала — 6 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 109—114-се биттәр).

Башланышы, һөйләүсенең аңлатмаһы түбәндәгесә:

«Ғүмәров Нәғимрахман һөйләй:

«Йософ китабы»н әсәйем көйләп уҡый торғайны. Беҙ, ишле ғаилә, йыйылышып тыңлап ултырыр инек. Үҙем хәҙер улай көйләп уҡый алмайым.

Йософ ғәлиәссәләм тарихын былай яҡшы беләм. Әнбиәләр (пәйғәмбәрҙәр) китаптарынан. Элек үҙемдә «Йософ китабы» ла, әнбиәләр китабы ла була торғайны. Әллә кем алды шунда. Хәҙер юҡ инде.

Ҡөрьән тәфсирем бар. Шунан Йософ сүрәһенә ҡараған өлөшөн яратып уҡыйым бигерәк. Мәжлестәрҙә һөйләп ебәрәм. Ололар ҙа, йәштәр ҙә йотлоғоп тыңлай.

Яҡуп пәйғәмбәрҙең ун ике улы булған...»

**22. Йософ китабы.** 1985 йылдың июлендә Белорет районы Түбәнге Сермән ауылында Фәүзиә Замановананан (1907 йылғы) Зәйтүнә Шәрипова яҙып алған. Магнитофон таҫмаһы ла бар.

Күсермә 4 бит, машинкала 3 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 115—117-се биттәр).

Башланышы һәм аңлатмаһы:

«Йософ тураһында төрлө китаптарҙа яҙылған бит ул: Ҡөрьәндә лә, әнбиәләр китабында ла. Үҙенең айырым китабы ла бар, уны көйләп уҡыйҙар. Көйләп, бер юлы һөйләп булмай, элек бер нисә кис буйы бүлеп-бүлеп уҡый торғайнылар.

Яҡуп пәйғәмбәрҙең ике ҡатынынан ун бер улы булған. Йософ менән Ибне Әмин тигәне бер әсәнән, ҡалғандары икенсе әсәнән. Үҙара татыу ғына йәшәйҙәр икән былар...»

Текст тотошлай сәсмә формала.

**23. Йософ вә Зөләйха.** 1985 йылдың 12 авгусында Ырымбур өлкәһе Зианчура ауылында әсәһе Сафия Илбулдинанан Ф. Ф. Илбулдин яҙып алған. Яҙманы Ғ. Хөсәйеновҡа тапшырған.

Күсермә 7 бит, машинкала 5 бит (Ҡиссалар. Шигырҙар, 118—122-се биттәр).

Сюжет ҡыҫҡа ғына һөйләп сығыла. Сюжет ағышында халыҡлашҡан ҡыҙыҡлы деталдәр, күренештәр бар.

Яҙып алыусы аҙаҡта шундай аңлатмалар бирә: «Әнейем һөйләне: «Йософ һәм Зөләйха»ны Иҙәш ауылында әнейемдең атаһының ағаларының (Ғәлиәкбәр, Бәхтиәр) ҡыҙҙары Фәйрүзәнән, бигерәк тә Мәфтуханан ишеткән... Мәфтуха апайым һары төҫтә, түңәрәк битле, урта буйлы, бик матур булған. Ул «Йософ китабы»н яттан белгән, йырлап (көйләп) һөйләгән. Йыры матур ҙа, ҡыҙғаныс та булған. Быны ул туғандарынан Йылайырҙа йәшәгәндә үк ишеткән, отҡан». (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 121—122-се биттәр).

**24. Йософ ғәлиәссәләм.** 1985 йылдың 30 июнендә Тәтешле районы Иҫке Күрҙем ауылында Таиса Миңлехужа ҡыҙы Хужинанан (1909 йылғы) Минлеғәли Нәҙерғолов яҙып алған.

Ҡулъяҙма 6 бит, машинкала 4 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 123—126-сы биттәр).

Сюжеттың Йософ менән ағаларына бәйләнешле һыҙығы ҡыҫҡаса хикәйәләнә. Зөләйхаға бәйләнешле һыҙыҡ әҙ генә әйтеп үтелә. Зөләйха исеме телгә алынмай.

**25. Йософ һәм Зөләйха.** Бакалы районы Балыклы ауылында йәшәүсе Ғәҙелбаныу Баһауетдин ҡыҙы Салахованан (1904 йылғы) Розалия Солтангәрәева яҙып алған (1984 йылда).

Машинкала 2 бит. (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 127—128-се биттәр).

Сюжет схемаһы ҡыҫҡаса. Ҡыҙыҡлы ғына деталдәр бар.

**26. Йософ һәм Зөләйха.** 1984 йылдың авгусында Туймазы районы Собханғол (Ысмай) ауылында Ғәзизә Сәләхетдин ҡыҙы Ғүмәрованан (1918 йылғы) Розалия Солтангәрәева яҙып алған.

Машинкала — 1 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 129-сы бит).

Йософ менән Зөләйха мөхәббәте һыҙығы атап үтелә.

**27. Йософ һәм Зөләйха.** 1984 йылдың авгусында Туймазы районы Түмәнәк ауылында Хәҙисә Ситдиҡ ҡыҙы Муллагәлиеванан (1906 йылғы) Р. Солтангәрәева яҙып алған.

Машинкала 2 бит. (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 130—131-се биттәр).

Сюжет самалы ғына сағыла. Аҙаҡтан информатор шуны әйтә: «Мин быны Ҡөрьән тәфсиренән уҡыным. Ә көйлө китабын белмәйем».

**28. Йософ китабы.** 1985 йылдың 4 июлендә Белорет районы Ҡаһарман ауылында Ҡәлимулла Ғиниәтуллиндан (1909 йылғы) Ғайса Хөсәйенов яҙып алған.

Машинкала 2 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 133—134-се биттәр).

Сюжеттың төп өлөштәрен ҡыҫҡаса ғына һөйләй. Информатор, «Йософ китабы»н кешеләрҙән ишеткәнсә генә беләм, ти.

**29. Йософ вә Зөләйха.** 1985 йылдың 28 июнендә Тәтешле районы Мәмәтәй ауылында Ҡәшифә Мөхәммәтдин ҡыҙы Мостафинанан (1908 йылғы) Миңлеғәли Нәҙерғолов яҙып алған.

Ҡулъяҙмаһы 3 бит, машинкала 2 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 135—136-сы биттәр).

Сюжет ҡыҫҡа ғына хикәйә ителә. Ябайлығы, реаль бирелеше менән халыҡ хикәйәһен хәтерләтә.

**30. Йософ китабы.** 1985 йылдың 4 июлендә Белорет ҡалаһында Раянова Хәжәрҙән (1900 йылғы) Зәйтүнә Шәрипова яҙып алған.

Ҡулъяҙмаһы 4 бит, машинкала 3 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 137—139-сы биттәр).

Сюжеты ябай һәм тормошсан итеп һөйләп сығылыуы менән халыҡ хикәйәһе тип аталырға хаҡлы. Дини һәм фантастик моменттар бөтөнләй юҡ.

**31. Хәҙрәт Яғаҡуп Йософ ғәлиәссәләм.** Мәләүез ҡалаһынан Сәйфулла Әмиров, халыҡ араһынан күсереп алып, почта аша 1985 йылдың июнендә Өфөгә Ғайса Хөсәйеновҡа ебәргән.

Ҡулъяҙмаһы 4 бит, машинкала 2 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 140—141-се биттәр).

Башланышы: «Исхаҡ ғәлиәссәләмдең Ғаяз, Яғаҡуп исемле ике улы тыумыштыр.

Яғаҡуп ғәлиәссәләмдең ун ике улы донъяға килде. Әсәтенән Йософ исемле бик гүзәл һәм хәсән әхләк сифатлы вә мәғлүмәтле ине...»

Сюжетта мөхәббәт һыҙығы сағылмай.

**32. Йософ китабы.** 1985 йылдың 3 июлендә Белорет районы Абҙай ауылында Бәҙреямал Әхмәтшинанан (1914 йылғы) Фирҙәүес Хисаметдинова яҙып алған.

Ҡулъяҙмаһы 4 бит, машинкала 3 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 142—144-се биттәр).

Сюжет ябай һәм ғәҙәти формала хикәйә ителә. Жанры яғынан халыҡ хикәйәһе тип атарға мөмкин. Дини-фантастик элементтарҙың әҫәре лә юҡ.

**33. Йософ китабы.** 1985 йылдың июлендә Белорет районы Сосновка ауылында йәшәгән Ғиндулла Хәлимулла улы Юлдашевтан (90 йәш) Фирҙәүес Хисаметдинова яҙып алған.

Ҡулъяҙмаһы 2 бит, машинкала 2 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 145—146-сы биттәр).

Сюжет халыҡ хикәйәһе рәүешендә һөйләп бирелгән.

**34. Йософ китабы.** 1985 йылдың июлендә Белорет районы Шығай ауылында Фәйрүзә Шиһап ҡыҙы Шиһапованан (1907 йылғы) Зәйтүнә Шәрипова яҙып алған.

Ҡулъяҙмаһы һәм машинкала 2 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 147—148-се биттәр).

Сюжеттың Йософ менән ағаларына бәйле һыҙығы сағыла. Хикәйә рәүешендә һөйләп сығыла.

**35. Йософ китабы.** 1985 йылдың июлендә Белорет районы Ҡаһарман ауылында Мәфтуха Ғөбәйҙулла ҡыҙы Ғөбәйҙуллинанан (1906 йылғы) Зәйтүнә Шәрипова яҙып алған.

Ҡулъяҙмаһы һәм машинкала 2 бит (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 149—150-се биттәр).

Халыҡ хикәйәһе рәүешендә һөйләнелгән.

**36. Йософ китабы.** 1985 йылдың июлендә Белорет районы Түбәнге Сермән ауылында Латипова Сәмсейыһан Минһаж ҡыҙынан Зәйтүнә Шәрипова яҙып алған. Информатор 1907 йылда тыуған. Текст магнитофон таҫмаһына ла яҙылған.

Сюжет халыҡ хикәйәһе стилендә һөйләп бирелгән.

**37. Ҡиссаи Йософ.** 1985 йылдың октябрендә Белорет районы Инйәр эшселәр поселогында Мәзғүрә Шәрәфетдинованан (1900 йылғы) Румия Әфләтунова магнитофон таҫмаһына яҙып алған.

Магнитофон таҫмаһы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фонояҙма кабинеты фондында һаҡлана.

Магнитофон таҫмаһынан дәфтәргә Р. Әфләтунова күсереп яҙған. Дәфтәр 36 бит. Ул дәфтәр Ғ. Хөсәйеновтың «Ҡиссалар. Шиғырҙар» тигән төпләмәһенә теркәлгән.

Магнитофон таҫмаһын тыңлап ҡарау һәм күсермәне ҡиссаның китап тексы менән сағыштырыуҙан информаторҙың китаптан көйләп уҡығаны аңлашыла.

Яҙма ана шул көйләүе, моңо, башҡарылышы менән әһәмиәтле.

**38. Йософ ғәлиәссәләм ҡиссаһы.** Өфө ҡалаһында йәшәүсе Ғосман Әмиров (1901 йылғы) ғәрәп хәрефтәре менән дәфтәргә яҙған. Дәфтәр 34 бит. Дәфтәр аҙағында шундай мәғлүмәттәр бирелә:

«Йософ ғәлиәссәләм ҡиссаһын үҙем аңлағанса Ҡөрьән тәфсиренән яҙҙым был яҙыуҙы.

1985 йылдың 25 июнендә профессор Ғайса Хөсәйеновҡа тапшырҙым.

Яҙыусы Ғосман Байрамхужа уғлы Әмиров».

Ҡабул итеп алдым: Ғ. Хөсәйенов ҡултамғаһы. 26.07.85.

**39. Йософ менән Зөләйха эпосының һамағы.** 1985 йылдың июлендә Белорет ҡалаһында Мөслимә Вәлиеванан (1905 йылғы) Зәйтүнә Шәрипова яҙып алған.

Уның көйләп әйткән бер өлгөһөн Риф Сөләймәнов нотаға һалған (Ҡиссалар. Шиғырҙар, 223-сө бит).

**40. Йософ менән Зөләйха һамағы.** 1973 йылда Саратов өлкәһе Ҡатай ауылында йәшәүсе Хәтизә Аллаярованан (1906 йылғы) магнитофон таҫмаһына Риф Сөләймәнов яҙып алған һәм бер өлгөһөн нотаға һалған.

Зөләйха бер көн ятып ойор булды,
Йософтоң һүрәтен төштә күрҙе,
Күреүҙән шул һүрәткә ғашиҡ булды,
Йыл буйы уйланыуҙан яфа күрҙе.
(Ҡиссалар. Шиғырҙар, 224-се бит).

**41. Йософ менән Зөләйха.** (Фрагмент). 1986 йылдың июнендә СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Археографик экспедицияһы ваҡытында Благовар районының Сатра ауылында Әминә Ғәбделхаҡ ҡыҙы Авзалованан (1903 йылғы) Румия Әфләтунова яҙып алған. Ҡулъяҙманың күләме 3 бит.

**42. Йософ менән Зөләйха ҡиссаһы.** (Фрагмент). 1986 йылдың июнендә Благовар районының Әхмәт ауылында Миңнеямал Мәмәлим ҡыҙы Сәләхиеванан (1909 йылғы) Румия Әфләтунова яҙып алған. Ҡулъяҙманың күләме 3 бит.

**43. Йософ менән Зөләйха.** (Фрагмент). 1986 йылдың июнендә Благовар районының Әхмәт ауылында Фәтхиә Сәхипгәрәй ҡыҙы Яхинанан (1904 йылғы) Румия Әфләтунова яҙып алған. Ҡулъяҙманың күләме 2 бит.

**44. Йософ менән Зөләйха.** (Фрагмент). 1986 йылдың июлендә Благовар районының Япарҡул ауылында Суфия Арыҫлан ҡыҙы Мортазинанан (1904 йылғы) Румия Әфләтунова яҙып алған. Ҡулъяҙманың күләме 2 бит.

## ӘЛ-ҠИССА БУҘЙЕГЕТ

1842 йылда Өфөлә яҙылған. Был хаҡта ҡиссаға шиғри инеш һүҙҙән һуң, ҡулъяҙманың 3 а битендә, түбәндәгесә хәбәр ителә:

«Уфә шәһәринә барғанда Бус йикет китабыны бер ҡәтар күрүб идим Фарси теле берлә йазилмиш иде Йыры күб юҡ иде сүзе моңло ирде Йикетниң аты Бус йикет иде ҡизның аты Ҡарачәч ирде Бус йикетниң дусының аты билкесез ирде Бер кәмин[1] диб йазиб идик Бу

---

[1] *Бер Кәмин* — исеме билгеһеҙ бер кеше.

ғәлат[1] иде Ҡиз шәһәрининң аты юк иде Без Нәфсиай[2] диб йазиб ирдүк Үземизнинң күңлимез ҡайғылы көндә Бус йикет китабыны ҡайғымыз түкин бер хилүәт[3] йирдә мен дә сикез йөз ҡирик икенче йылында йазуб ирдүк Уфә илендә Ғәбделғәлләм дигән йикетнинң ханасында Инде безнең бу йырлап чығарған китабымыз һәр йиргә йәйелебдүр Әүәле йазғанда әлҡисса диб йазыб идик Сүзин йазиб-йырлаб идүк Шәкертләримез Бус йикет китабыны барча ан[4] берлә йазылса дикән сәбәбле барча сүзин ан берлә яздук Безнинң моңлуғ адәмләрнең күңле ачулсын диб Китабны ан берлә йазмаҡға рүхсәт бардүр

Арасында ғибрәт сүзин йаздук».

Ҡулъяҙма С.-Петербургта, Рәсәй Фәндәр академияһының Көнсығышты өйрәнеү институты китапханаһының ҡулъяҙмалар бүлегендә һаҡлана; шифры — А 1547. Фото күсермәһе — Ғилми архив, ф. 7, оп. 1, ед. хр. (һаҡлау берәмеге) 8.

Көнсығышты өйрәнеү институтында был ҡулъяҙманың ҡайҙан, нисек табылыуы хаҡында мәғлүмәт юҡ. Шуныһы ғына билдәле: ул Азия музейында иҫәпкә алынмай ятҡан материалдар араһынан араланып, 1939 йылда ғына иҫәпкә алынған (инв. 1939 г. № 2894). Бүлек мөдире М. П. Волкованың әйтеүенә ҡарағанда, ҡулъяҙма Октябрь революцияһынан һуң (әммә 1930 йылдан да һуң түгел) килеп ингән булырға тейеш.

Әҫәр хәҙерге дәфтәрҙән бәләкәйерәк дәүмәлдә, уртаға бөкләнеп, ике төрлө аҡ ҡағыҙға ҡара тушь менән яҙылған. Күләме — 50 бит (лист), өс меңдән ашыуыраҡ шиғри юл. Тәүге һигеҙ һәм 16—23-сө биттәре — Көнсығыш ҡағыҙы, ә ҡалған биттәре Рәсәйҙә эшләнгән ҡағыҙ. 9-сы биттең өҫкө һул мөйөшөндә һәм 39-сы биттә ҡағыҙҙы ҡыҫып батырылған дүрткел мисәте бар; мисәттә «В. Говард. Фабрика»[5] тигән яҙыуын уҡып була.

Пагинация ҡәләм менән һуңынан (күрәһең, инвентаризацияға алынған саҡта) гәрәпсә яҙыу тәртибендә, йәғни уңдан һулға таба, ҡағыҙҙың уң («а») битенә генә һуғылған. Һәр ҡағыҙҙың һул («о») бите аҙағында күстоды — алдағы биттең тәүге һүҙе яҙыла барған.

Беҙҙең баҫмала тексттың һул яғына ҡуйылған һандар (1а, 1б, ... 49б, 50а) ҡулъяҙма биттәрен аңлата.

---

[1] *Ғәлат* — хата.

[2] *Нәфсиай* — ҡулъяҙмала шулай. Ләкин был исем текста бер урында ла осрамай.

[3] *Хилүәт* — тыныс, аулаҡ.

[4] *Ан* — боронғо төрки теләндә көй тигәнде аңлатҡан. *Ан берлә язылса* — көйләп уҡыу өсөн шиғыр менән яҙылһа.

[5] **Говард фабрикаһы** (юридик исеме — Компания Тройцко-Кондровских писчебумажных фабрик В. Говарда) 1790 йылда Калуга губернаһының Медынск өйәҙе Кондров ауылында шул ауыл алпауыты П. Г. Шепочкин тарафынан төҙөлә, һәм төрлө сортта сығарылған ҡағыҙҙары менән Рәсәйҙә дан ҡаҙана. *Ҡарағыҙ:* Компания Тройцко-Кондровских писчебумажных фабрик В. Говарда. Исторический очерк и современное состояние фабрик (1790—1896). — М., 1996.

Тәүҙә дәфтәрҙең махсус тышлығы булмаған. Ул тик 1962 йылда кулъяҙмалар бүлегенең реставрация мастерскойында өҫтөнә дермантин йәбештерелгән ҡатырға тышлыҡ менән тышланған. Текст беренсе ҡағыҙҙың эске («б») яғынан башланып, 50-се ҡағыҙҙың «а» битендә тамамланмайынса өҙөлә. Ә ҡалған өс (50б, 51а, 51б) битендә икенсе ҡул менән яҙылған бөтөнләй башҡа нәмә (ғәрәпсә оҡшаш хәрефтәр) тураһында һүҙ бара. Тышына эрерәк хәрефтәр менән «Бу китаб Бикишәнең китабы» тип, түбәнгәрәк вағыраҡ хәрефтәр менән «Бус йекет китабы бу» тип яҙылған. Һуңғы 52-се биттең тышҡы яғында «Ошбу бус йекет китабы» тип яҙылған һүҙҙәрҙе уҡып була.

Ҡулъяҙма — авторҙың үҙенеке (автограф) түгел, ә, ҡағыҙына ҡарағанда, тәүге бер күсермәһе. Уныһы ла ҡитап күсереп өйрәнмәгән, коллиграфик оҫталығы түбән булған кеше тарафынан башҡарылғын. Яҙыу рәүешенең (почергының) тотороҡһоҙлоғо (йә ҡалын, эре, йә нескә, ваҡ яҙылыуы, нәстәлик формаһын тағы ла ауышландырыбыраҡ һуҙып, баҫып — йә ултыртып яҙыу), шиғыр юлдарын һәр биттә юлын-юлға яҙмау, күсергәндә ҡабатлауҙар ебәреү йәки, киреһенсә, төшөрөп ҡалдырыу (мәҫәлән, 15б менән 16а һәм 30б менән 31а биттәр араһында берәр бит тотош төшөрөп ҡалдырылған) һәм бигерәк тә традицион орфография нормаларының һаҡланмауы, хәрефтәр яҙылышында элементтарҙың тейешенсә һыҙатланмауы, уҡыуҙы ауырлаштырған башҡа кәмселектәр күсереүсенең яҙыу культураһы түбән булыу өҫтөнә, игтибарһыҙлығы хаҡында ла һөйләйҙәр.

Ҡулъяҙманың теле сыбар. Унда фарсы һәм боронғо төрки, йәки сығатай яҙма теленән килгән грамматик формалар (килеш һәм күплек ялғауҙары, зат һәм ҡылым формалары) менән бер рәттән йә татар, йә башҡорт, йә ҡаҙаҡ теленә генә хас фонетик һәм лексик үҙенсәлектәрҙе лә күрергә мөмкин. Ләкин ул үҙенсәлектәр ҙә һәр урында бер төрлө яҙылышында һаҡланмаған. Киреһенсә, бер үк һүҙ бер урында — татарса, икенсе осраҡта — ҡаҙаҡса, өсөнсөһөндә башҡортса яҙылған. Был бигерәк тә Ç, С, Ч, Ш өндәре ҡатнашҡан һүҙҙәр яҙылышында йыш осрай. Мәҫәлән, *ысын* һүҙе бер урында «чын» тип татарса яҙылһа, икенсе урында «шын» тип ҡаҙаҡса, өсөнсө урында «сын» тип башҡортса яҙылған. *Аш* (ашау), *Ас* (ишекте ас һәм ас кеше), *аҫыу* (дарга аҫыу) һүҙҙәре күп осраҡта ни татарса, ни башҡортса, ни ҡаҙаҡса түгел; уларҙың мәғәнәһен контекста ғына айырырға мөмкин.

Ҡулъяҙмала формаһында бер хәреф бар. Ғәрәп графикаһында булмаған был хәрефтен XIV — XV быуаттарға ҡараған күбер таштарында осрауы билдәле. Татар ғалимдарынан Ғ. Йосопов менән Ғ. Хисматуллин уны *шин* ( ) хәрефе менән бутамау өсөн *син* ( ) хәрефенең үҙенсәлекле яҙылышы тип аңлаталар[1]. Тик шу-

---

[1] *Ҡарағыҙ:* Юсупов Г., Хисматуллин Г. Булгарские эпиграфические памятники, найденные летом 1947 г. // «Эпиграфика Востока». I. Сб. статей под ред. проф. В. А. Крачковской. — М. — Л., 1951. — С. 70—71.

ныһы ғәжәп: был ҡулъяҙмала ул С өнө ҡатнашҡан һүҙҙәрҙә генә яҙылмаған, ә Ш, З йәки Ҙ хәрефтәре урынында килгән осраҡтары ла күп. Мәҫәлән, *суз* һүҙендә З, *баш, ҡаш, йәш* һүҙҙәрендә Ш йыш ҡына (бигерәк тә ҡулъяҙманың икенсе яртыһында) шул хәреф менән алмаштырылған. Текста бөтәһе 33 тапҡыр осраған Буҙйегет исеме лә өс төрлө яҙылышта: исемдәге *буҙ* аныҡлаусы 17 тапҡыр (1а, 2б, 3а, 3б, 8а, 11а, 13а, 20б, 30б биттәрендә) С менән *бус* тип, 12 тапҡыр (1б, 17а, 19б, 20б, 22а, 22б, 26б, 29а биттәрендә) Ш менән *буш* тип, ә дүрт осраҡта (29б, 31а, 49б биттәрендә) теге хәреф менән тип яҙылған.

Ғәҙәти булмаған был хәреф башҡортса һ һәм ҫ өндәре ҡатнашҡан һүҙҙәрҙә, бигерәк тә шарт ҡылым ялгауҙарында һәм киләсәк заман хәбәр ҡылымдың юклыҡ *(маҫ-мәҫ)* формаларында йыш осрай. Тап бына ошо хәл, был хәрәф ҫ өнөнөң үҙенсәлекле яҙылышы түгел микән, тип фараз итергә мөмкинлек бирә. Сөнки, ысынлап та, ғәҙәти яҙылышындағы ҫ хәрефе Ж хәрефе менән бутау ҡурҡынысын тыуҙыра.

Ш хәрефенең яҙылышында ғөмүмән теүәллек юҡ. Һүҙ башында һәм уртаһында ул күп осраҡта бары бер теш менән нисек етте шулай яҙылган. Шул арҡала уны, мәҫәлән, *баҫып* (5а), *алыҫ* (8б), *баҫты* (11б), *киҫеп* (14а), *киҫелер* (16а), *киҫмәй* (16б), *киҫеүсе* (26а), *иҫеп* (32а), *иҫкә* (39а) һүҙҙәренең яҙылышында ҫ тип уҡырға мөмкин.

Ҡулъяҙманың орфографияһы шулай үтә сыбар, ҡапма-ҡаршылыҡтар, башҡа төрлө кәмселектәр ифрат күп булғанлыҡтан, был баҫмала текст фонетик яҡтан 1982 йылгы баҫмалағыса (БХИ: Эпос, 3-сө китап) хәҙерге башҡорт яҙма тел нормаһына һалынды. Әммә лексик һәм стилистик үҙенсәлектәрен мөмкин тиклем һаҡларға тырышылынды. Сюжет ағышына ҡарата бирелгән «ғибрәт һүҙҙәре» аңлатмалар бүлегенә күсерелде, кәрәкһеҙгә ҡабатланған строфалар алып ташланды. Ҡара Ахундың үтә оҙонға һуҙылған дини вәғәздәре ҡыҫҡартылды.

**Ошо уҡ текстың бүтән баҫмалары:**

1. **Бос жигет** // Радлов В. В. Образцы народной литературы тюркских племен... Часть III: Киргизское наречие. — СПб., 1870. — С. 336—443.

Текстың ҡасан, кемдән алыныуы әйтелмәгән. Әммә беҙҙекенә һүҙмә-һүҙ тура килеүе һәм шул уҡ урында тамамланмай өҙөлөүе, бында ла ҡиссаның 1842 йыл Өфөлә яҙылыуы тураһындағы мәғлүмәттең бирелеүе, икеһенең дә бер үк сығанаҡтан булыуын раҫлай. Айырмаһы тик фонетика-орфография башкалыгына ҡайтып ҡала: һүҙҙәр ҡаҙаҡса әйтелешендә яҙылған, гәрәп-фарсы һүҙҙәре лә ҡаҙаҡсаға әйләндерелгән. Быныһы инде күсеректе башҡарыусы тарафынан эшләнгән булырга тейеш.

Ошо уҡ текст, бер аҙ ҡыҫҡартылып, 1976 йыл Алматыла «Ғашыҡнаме» исемендә айырым китап итеп сығарылды.

2. **Бүз егет** // Татар халыҡ ижады: Дастаннар / Томны төзүче, кереш мәкалә һәм искәрмәләрне язучы Әхмәтова Ф. В. — Ҡазан: Татарстан китап нәшрияты, 1984. — 275—334-че битләр.

Көнсығышты өйрәнеү институты китапханаһында һаҡланған ҡульязманан хәҙерге татар теле графикаһында М. Ғәйнетдинов күсергән. Инеш һүҙе һәм дини-мистик ҡараштарҙы сағылдырған өлөштәре ташланған. Текст «Заманнан күп заманнар үтте, диде» тигән строфа менән башлана.

* * *

[1] *Бу ялғанда* — дини ҡараш буйынса, был донъя — үтеп, бушҡа сығасаҡ фани (ялған) донъя; ысыны (баҡыйы) — үлгән кеше рухы мәңге йәшәгән теге донъя.

[2] *Бер вә барың* — алла, йәғни кешегә йән һәм иман биргән бер-ҙән-бер илаһи көс.

[3] *Ҡалды* — боронғо төрки телендә тамамланмаған процесты аңлатыусы хәбәр ҡылым формаһы.

[4] *Пәйҙә* — ҡульяҙмала *фидә*; Радловта: *Өлүмгә ажал оған пайда болған.*

[5] Ошо инеш һүҙҙән һуң 2а — 2б биттәрҙә «Ғәшаирнин сүзе» бирелгән. Сюжет менән һис ниндәй бәйләнеше булмағанлыктан, төшөрөп ҡалдырылды. Радлов баҫмаһында һаҡланған.

[6] Ошонан һуң китаптың 1842 йыл Өфөлә яҙылыуы тураһында юғарыла килтерелгән мәғлүмәт бирелгән.

[7] *һәм табиб даркарҙар ғилаж тапманы* — врачтар ҙа дарыу тапманы.

[8] *Сытарма зарлап аның* — зарланып моң түкмә, йөҙөндә һытма.

[9] *Хаҡ һалһа* — алла ҡушһа.

[10] *Уйын мән көлкөң ҡалһа* — уйнай-көлә алмаһаң.

[11] *Дәрд* — ҡульяҙмала һәр осраҡта *дирид* тип яҙылған.

[12] *Бетте* — үлде мәғәнәһендә.

[13] *Данан кәрне* — Радловта һәм ТХИ баҫмаһында жаманды (яманды) тип алынған.

[14] *Башында алтын айҙар толомо* — батша улы булыуын күрһәтеүсе билдәһе.

[15] *Айдайынча булып йорады икән* — ай яҡтыһындай балҡып тора.

[16] *Арғымаҡлы* — Радловта *сылу жаҡсы.*

[17] *Ул* — ҡульяҙмала боронғо төркисә *у* формаһында ла, *ул* формаһында ла алынған. Боронғо формаһы (*у, бы, шу*) башҡорт теленең ҡыуаҡан диалектында хәҙерге көнгәсә һаҡланған.

[18] *Түш булады* — бер-береһенә ярай, тура килә, оҡшай мәғәнәһендә. Радловта — *тос*, «ТХИ» баҫмаһында — *туш.*

[19] *Ник ҡурайды* — ниңә ситләшеп торорға.

[20] *Яратҡанның ярлығы* — Алланың бойороғо.

[21] *Шәһәре бостан Румдан* — Рум иленең (Балкан ярымутрауы) баҡса кеүек калаһынан.

[22] *Сирай* — ҡульяҙмала шулай. Мәғәнәһе аңлашылмай, күрәһең, хата яҙылған. Радловта — *сарай.* Ҡурмаши вариантында — *сәйран*: күңел асып, тамаша ҡылып йөрөү. Контекстан һуңғыһының дөрөҫ булыуы аңлашыла.

[23] Радловта ла, ТХИ баҫмаһында ла был юлдар алып ташланған.

[24] *Сәғән төҙөү йөрмәһәм* — һиңә төҙ (дөрөҫ, тура) йөрөмәһәм (бармаһам).

[25] *Киткәле* — ...ғалы-ғәле, калы-кәле — боронғо төрки телендә уртаҡ ҡылым формаһы. *Киткәле* — китергә; *еткәле* — етергә.

[26] *Ҡәмә ҡылып* — кәмәгә ултырып.

[27] *Мәймүн шәһәр* — маймылдар (ҡырағай кешеләр) шәһәре. Телдән яҙып алған ҡайһы бер варианттарҙа «һыйыр аяҡ, эт баш иле» (К. Таһиров һөйләүендә), «дейеү пәрейҙәренең ауылы» (Х. Хәмитова варианты).

[28] *Бер йөрөйбөҙ* — бергә ҡайтабыҙ.

[29] *Дам инде* — һөйләшеү бөттө, тамамланды инде.

[30] *Һыуҙа йөҙҙөм юл тапмай* — ҡулъяҙмала был юл төшөп ҡалған.

[31] *Көлкөбөҙ* — күңел асыуыбыҙ.

[32] Ҡулъяҙмала юл төшөп ҡалған. Радлов баҫмаһында: *Хан бу ҡатын устап оҡуған сон* (Хан был хатты алып уҡыған һун). ТХИ баҫмаһында ла асылда Радловтағыса тултырылган: *Хан бу хатын ҡулға алып уҡыған соң*. Әммә был артабанғы строфаларга ҡаршы килә.

[33] *Ханзада* — Буҙйегет.

[34] Ошо юл менән ҡулъяҙманың 15-се бите тамамлана. Артабан, күрәһең, бер бит төшөп ҡалған. Был өҙөклөк Радловта шулай тултырылған:

Туйымызға Бос жигит килсен жыбдан
Күйеү ҡылып тойлатып сине шаҡырадыр.

(Жигит шаҡырғанда тойға килде, жигиткә көп араҡы биреп мас ҡылдылар, аны үлтерергә аҡыл соҡҡанда жолдасы ҡыҙга ҡабар бирде) // Радлов В. В. Образцы народной литературы тюркских племен... Часть III. — С. 370. Проза өлөшө йәйәләр эсендә. Ошо уҡ йәйәләрҙән арындырылған үрҙәге ике шиғри юл ТХИ баҫмаһынан күсерелгән (204-се бит).

[35] *Яҡында* — ҡулъяҙмала *йызайыҡды* (?), Радловта *жукту* (?). ТХИ баҫмаһында строфа ташланған.

[36] *Ҡылыс башын киҫмәй, бар* — егетеңдең башын сабып өҙгәнсе, барып ҡал.

[37] *Үткәндән һуң* — үлгәндән һуң.

[38] *Төҙөү* — төҙөк, мәкерһеҙ. Радловта — *ҡотто*. ТХИ баҫмаһында «төҙөк» тип төҙәткәндәр.

[39] *Туған һымаҡ* — ҡулъяҙмала *туван суң*. Радловта — *Туған сон*.

[40] *Урға алды* — уратып алды мәғәнәһендә. Радловта — *Артынан житәл мәй тороп ҡалды*. ТХИ баҫмаһында — *уртаға алды*.

[41] *Айлыҡ* — ҡулъяҙмала *айлычлыҡ*, Радловта *айшылыҡ*, ТХИ баҫмаһында *айчылыҡ*.

[42] Ҡулъяҙмала — *Егетләрнең сүзе*.

[43] *Тауға бер аҙ төшөүгә күңел ҡылды.* — Бында яралы геройҙың тауҙың бер аҙ кесерәйеүен, тәбәшәкләнеүен үтенеүе сағыла. Эпоста ундай хәл — тәбиғәт күренештәренә мөрәжәғәт итеү — традицион күренеш.

[44] *...һалырым юҡ* — һалыр кешем юҡ.

[45] *Кашай тиһәм* — ҡасайым тиһәм.

[46] Бынан һуң алланың көслөлөгө хаҡында тағы алты юл бар. Стилистик йәһәте үтә ҡытыршы булғанға, ташланды.

[47] *Ибас бәйләп* — кире тартып алыу ниәте менән сысҡанға еп тағып ебәреү аңлашыла. Радловта — *жепкә бәйләп.* ТХИ баҫмаһында ла шулай алғандар.

[48] *Сарҡытын* — сысҡандан ҡалғанды. Радловта — *жигән шөбун* (ашаған сүбен).

[49] *Яҡынлашты* — ҡулъяҙмала *аралашды.* Мәғәнә аныҡлығы өсөн алмаштырылды.

[50] *Батшаһын* — башлығын, йәғни Буҙегетте.

[51] *Күп күренһә* — йыйылған халыҡ күренһә.

[52] *Сыҡмайҙы итергә* — ҡулъяҙмала шулай. Радловта *шыкмайды ҡандан* (хандан) тип үҙгәртелгән. ТХИ баҫмаһында — *чығадыр түргә.* Нисек кенә булмаһан, бында Буҙйегеттең ханға кейәү булмағанына Зәйтүндең шатланыуы аңлашыла.

[53] *Алдап орҙо* — алтын биреп алдаштырып, ҡарсыҡты үҙ яғына ауҙарҙы.

[54] *Үлгәнсе* — үҙең үлгәнсе.

[55] *Өмөрөң үтмәй тороп, юл бирәйем,* йәғни ғүмерең буйына үҙеңде ҙурлармын, хөрмәт итермен.

[56] *...ып-еп, дур-дүр, тур-түр* — боронғо төрки телендә тамамланмаған үткән заман хәл ҡылым формаһы. Хәҙергәсә әйткәндә: ... *ҡарашып тора, ... һорашып тора, ... талышып тора.*

[57] «Артабан «авторҙың» мистик ҡараштарын сағыштырған дини вәғәзе өҫтәлгән», тигән иҫкәрмә менән ошонан һуңғы ун юл тәүге баҫмаға индерелмәгән ине (Ҡар.: БХИ: Эпос. 3-сө китап. — 232-се б.).

[58] Строфа тамамланмаған. Радловта шул көйгә алдағыһына ялғанған.

[59] *Сачу сәсте* (ҡулъяҙма сачды) — бүләк һипте.

[60] *Батшаның үлгәнен йорто белде.* Башындағы алтын айға, толомона ҡарап, Буҙйегеттең батша улы булыуы беленгәйне. Ошоға таянып, батша улы үлтерелеүе тураһында илгә хәбәр таралыу аңлашыла.

[62] *...Түйын инде ҡылды* — ҡыҙҙың егете табылыу шатлығын байрам итеү аңлашыла.

[63] *Искәндәр* — Александр Македонский. Беҙҙең эраға саҡлы 356—323 йылдарҙа йәшәгән.

[64] Ошонда 306 бите тамамлана. Артабан ҙур өҙөклөк. Радлов баҫмаһы буйынса тултырылды.

[65] *Башын* — Буҙйегеттең киҫелгән башы.

[66] *Радлов.* Образды..., ч. III. — С. 403—405.

[67] *...телең алырмы* — ҡыҙың һүҙеңде аңлармы, әйткәнеңде ҡабул итерме?

[68] *Хуп төҙөрһөң буйыңды* — буй-һыныңды матурларһың.

[69] *Үҙем аҡ исем ҡылырмын* — бөтә эште үҙе эшләп, яҡшы исем(дан) алырмын. Радловта — *үҙем эшемде ҡылармын*.

[71] *Булмаҫын* — тыңламаясағың. Радловта *барғаның*.

[72] *... телен алыр ул.* — Теге донъяла ата-әсә өсөн дә яуап бирә, ти. Бында ана шул дини ҡараш сағыла.

[73] *Хаҡҡа* — Аллаға. Радловта — *аҡҡа*.

[74] *Кешеһе* — ҡулъяҙмала *бадшасы*. Радловта ла шулай. *Үҙҙәренең батшалығынан* тигән мәғәнәлә шулай алынғандыр.

[75] *Яратҡандан* — Алланан.

[76] *Аясама* — ҡулъяҙмала шулай. Бәлки, *асма, асмай тор*?

[77] *Кәмин* — ҡулъяҙмала шулай. Дөрөҫө *кимәнен* (кафтанын) булырға тейеш.

[78] *Ҡәмин сисеп алып, сурға төштө* — кафтанын һалып, башҡаса көйләүгә күсте. Радловта һәм ТХИ баҫмаһында был ике строфа ташланған.

[79] *Һорау һорар көн* — киәмәт көнө, йәғни ислам дине буйынса, донъя бөтөп, һәр кемдән эшләнгән эштәре өсөн яуап алыныр көн.

[80] *Бер үҙеңдән башҡаны күңелгә алмаҫ көн булыр* — киәмәт көнөндә һәр кем үҙен генә ҡайғырта. Бында ана шул дини ҡараш сағыла.

[81] *Тиргәү* — боронғо төрки телендә *тикшереү* тигәнде аңлата. Бында һорау алыу мәғәнәһендә. Шуға ла Радловта *сорау* тип алмаштырылған.

[82] *Сөләймән* — «Ҡиссаи Йософ», 28-се аңлатманы ҡарағыҙ.

[83] *Аҙәм* — пәйғәмбәр. Дини легендаларҙа һөйләнеүенсә, уның 140 улы булған. Шул улдарҙан төрлө халыҡ барлыҡҡа килгән, ти.

[84] Ҡарун — ғәрәп әкиәттәрендә һәм дини китаптарҙа ғәҙәттән тыш бай, әммә үтә һаран кеше. Башҡорт, татар телендә «һаран» төшөнсәһенең синонимы.

[85] *Ҡаһарман* — фарсы легендаларында кәүҙәләнгән бик көслө, һис кемдән еңелмәҫ батыр. Уның хаҡында төрки халыҡтарында, шул иҫәптән, башҡорттарҙа ла «Ҡаһарман батыр» тигән әкиәт бар (БХИ: Әкиәттәр. 3-сө китап. — 1978. № 36).

[86] *Ғәли* — Мөхәммәт пәйғәмбәрҙән һуң дүртенсе хәлифә, Мөхәммәттең кейәүе. Дини хикәйәләрҙә *Ғәли батыр* тип һүрәтләнә.

[87] «Бынан һуң 43-сө биткә тиклем был донъянан киткән пәйғәмбәрҙәр, батшалар, уларҙың ҡылған эштәре һанала», — тип, тәүге баҫмаға индерелмәгән ине.

[88] *Бай табыр* — ир табыр.

[89] *Ғәрәптәргә ҡаш биргән* — ситтән килгән кешеләргә яҡты йөҙ күрһәткән, үҙ ҡашына (ҡаршыһына) алған.

[90] *Ҡуйыр белгән* — яҡшы менән яманды айыра белгән. Радловта — *тигез белгән*.

[91] *Боҙоҡ булған күңелен* — боҙолған күңелен.

[92] *Хаҡ насибә һалманы* — алла насип итмәне, өлөш сығарманы.

[93] *Арҡала һис фетә юҡ* — артымдан доға ҡылыусым юҡ.

[94] *Моңһоҙ — бер хаҡтыр* — ҡайғы-зары булмаған тик аллалыр.

[95] «Артабан дүртәр юллы 16 строфала сюжетка һис ниндәй ҡыҫылышы булмаған дини вәғәз (аллаға табыныу, хәйер биреү, дин ҡушҡанды тотоу һ. б.) һөйләнә», — тип тәүге баҫмаға индерелмәгән.

[96] *Ҡаныңды кистем* — ғәфү иттем тигәнде аңлата.

[97] Ошо урында бит тулып, текст өҙөлә. Радловта ла, ТХИ баҫмаһында ла шулай. *һай-һай* — кустоды. Ә ҡалған биттәрҙә ғәрәпсә оҡшаш хәрефтәр тураһында (идғам) яҙылған. Ҡулъяҙманың һуңғы биттәре төшөп ҡалғандыр, бәлки? — тип уйларға урын юҡ. Сөнки идғам шул уҡ 50-се биттең һул («б») ягынан яҙыла башлаған. Был иһә текстың ни сәбәптәндер яҙылып бөтмәйенсә өҙөлгәнлеген күрһәтә.

Ҡормаши тексына ҡарағанда, Буҙйегеттең ата-әсәһе илдәренә ҡайтҡас үләләр. Кәмән уларҙан айырылып ҡалып, Буҙйегеттең тамына (мулаһына) инеп, үҙен үҙе үлтерә.

## ТОМҒА ИНГӘН ВЕРСИЯЛАРЫ ҺӘМ ВАРИАНТТАРЫ

**Беренсеһен** «Бузикет» исемендә 30-сы йылдар ахырында — 40 йылдар башында Башҡортостандың Федоровка р-ны Батыр ауылында Хәнифә Хәлитованан Ғибай Хәлитов яҙып алған. Ҡулъяҙмаһы һаҡланмаған. Машинкала баҫтырылған беренсе нөсхәһе «Башҡорт халыҡ әкиәттәре» тигән папкаға төпләнгән: Ғилми архив, ф. 3, оп. 10, һаҡлау берәмеге 39. — 9—27-се биттәр. Баҫылған: БХИ: Эпос, 3-сө китап. — 256—269.

Вариант Ҡормаши баҫтырған китап тексына яҡын. Хатта исеменең дә ғәрәпсә яҙылыу рәүешендә һаҡланыуын шул китап йоғонтоһо тип ҡарарға мөмкин. Вариант баҫма текстың халыҡ хәтеренә нисек һеңеп ҡалыуын һәм телдән һөйләү процесында ниндәй үҙгәрештәр кисереүен өйрәнеү өсөн әһәмиәтле.

[98] *Беҙҙе эҙләгән булмаһын* — Архивта һаҡланган текста: *беҙҙе эҙләп йөрөмәһен.* Ҡормаши баҫмаһы буйынса төҙәтелде.

[99] Строфа боҙолоп, бер генә юлға ҡалған. Ҡурмаши баҫмаһында:

Һине бында яратты,
Мине унда яратты;
Һине миңә ҡаратты,
Мине һиңә ҡаратты.

[100] *Сулдә йөрөнөм һыу тапмай, һыуҙа йөрөнөм юл тапмай* — был ике юл Ҡормаши баҫмаһынан алынды. Хәнифә Хәлитова һөйләүендә «Юлда йөрөнөм юл тапмай» тип, бер юлға ҡалдырылған.

[101] *Дөйә кеүек* — ҡиссала *бута күҙле.* Ҡормаши вариантында ла шулай.

**Беренсеһен** 30—40 йылдарҙа «Бузикет» тигән баш аҫтында Федоровка районы Батыр ауылы Хәлитова Хәнифәнән Ғибат Хәлитов яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 10/39. — 9—27-се биттәр, БХИ: Эпос. 3-сө кит. — 256—272-се биттәр.

**Икенсеһен** 1969 йылда Салауат р-ны Мәсетле ауылы Хәбирова Шәрғиә Ғәбделхаҡ ҡыҙынан (1892) Резеда Кәримова яҙып алған // БДУ БӘҠ фф., төрлө йылдар.

**Өсөнсөһөн** «Буҙикет» исеме аҫтында 1971 йылда Саратов өлкәһендәге Перелюб р-ны Бөрйән-Ҡунаҡбай ауылы Бүләкбикә (1890) Әнүр Вахитов яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3., оп. 65/18. — 1—16-сы биттәр.

**Дүртенсеһен** 1974 йылда Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылында «Таң» гәзите хеҙмәткәре шағир Инсур Йәһүҙин Ә. М. Сөләймәновҡа тапшырҙы. Был әҫәрҙе ул шул уҡ райондағы Яңы Собханғол ауылы Мырҙағолова Ғилмиһан Сабитулла ҡыҙынан (1938) яҙып алған булған // БДУ БӘҠ фф, 137 (Бөрйән экспедицияһы материалдары) — 485—547-се биттәр.

## ТЕЛДӘН ЯҘЫП АЛЫНҒАН ӘҺӘМИӘТЛЕРӘК БАШҠА ВАРИАНТТАР:

1. **Буҙйегет.** 1959 йылда Курган өлкәһе, Әлмән р-ны Аскар ауылы Рәхимйән Саттаровтан Ҡирәй Мәргән яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/1. — 15—20-се биттәр.

Йөкмәткеһе нигеҙҙә уртаҡ эпизодтарҙан тора. Егет атаһының кем булыуы әйтелмәй. Дуҫы телгә алынмай. Ҡыҙҙың исеме — Сәхибъямал, Мысыр батшаһының ҡыҙы.

Бында Буҙйегет төшөндә бер генә ҡыҙҙы түгел, ә ҡырҡ ҡыҙ күрә, шуларҙың береһенә ғашиҡ булып, уны эҙләп бер үҙе сығып китә. Буҙйегетте иҫертеп үлтереү маҡсатында уҙғарылған ялған туйҙа егетте Сәхибъямал үҙе иҫкәртә. Буҙйегет мәйете өсөн алтындан там* эшләтеү эпизодтары юҡ. Егет үлтерелгәндән һуң, ҡыҙ ауырыуға һабыша. Бер көндө үҙенең ҡырҡ иптәш ҡыҙын саҡырып алып:

Күҙ-башымды ҡан алды,
Донъя атама киң ҡалды,
Хәсрәт алды йөҙөмдө,
Ҡорбан ҡылдым үҙемде.
Сын ярымдан ҡалғым юҡ,
Бүтән ярға булғым юҡ,
Был уйымдан ҡалғым юҡ,
Йәнем алғыл бер хоҙай, —

ти ҙә, Буҙйегеттен мәйетен ҡосаҡлап, үҙен үҙе сәнсеп үлтерә.

Ошонан һуң һөйләүсе «шулай итеп был ике мәхлүк йән, ғишыҡ тотоп ҡауыша алмай, үлеп китәләр» ти ҙә, үлемдең ҡотолғоһоҙ булыуы тураһында вәғәз менән һүҙҙе тамамлай.

2. **Батша улы.** 1959 йылда Башҡортостандың Ғафури р-ны Юлыҡ ауылында Сәйфетдин Дәүләтбаевтан (1889 йылда тыуған) Мөхтәр Сәғитов яҙып алған. Күләме машинкала өс бит, йөкмәткене һөйләп биреүҙән тора, БДУ фольклор фондында һаҡлана.

Айырмаһы: Буҙйегеттең дуҫы — Ҡамал исемле. Ялған туйҙан һуңғы һуғышта Буҙйегет батшаның етмеш һалдатын яралай, етмешен үлтерә. «Урман араһында өс көн, өс төн яраһын төҙәтеп ята». Буҙйегет менән Сәхибъямал ҡауышып, бер әбейҙә фатирҙа торалар. Шунда бер аҙна буйы Сәхибъямал Буҙйегетте «көндөҙ һандыҡҡа һалып бикләп, өҫтөнә кейем өйөп йәшерен йәшәтә». Әммә хужа ҡарсыҡ ханға ошаҡлай. Буҙйегет үлтерелгәс, Сәхибъямал алтмыш ҡаланан алтмыш оҫта килтереп, ҙур һарай эшләтә, шунда «бысағының һабын Буҙйегеттең түшенә, осло яғын үҙ түшенә терәп ҡосаҡлап, сәнселеп үлә».

3. **Буҙйегет.** 1960 йылда Ырымбур өлкәһенең Александр р-ны Аҡтин ауылында 54 йәшлек Фазулла Сафаргәрәй улы Агишевтан Н. Шоңҡаров яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3. — 166—167 б.

Күләме ике бит. Әкиәт стилендә һөйләнгән, сюжет тулы түгел. Дүрт юллыҡ строфанан торған шиғыры бар. «Әле булһа ла Буҙйегет менән теге ҡыҙҙың зыяраты өҫтөндә сәскә үҫеп ултыра, ти», — тигән һөйләм менән тамамлана.

4. **«Буҙйегет»** исемендә 1964 йылда Әлшәй районы Яңы Ҡунҡас ауылы Суфиянова Шәһиҙә Дилмөхәмәт ҡыҙынан (1884 йылғы) Мөхтәр Сәғитов яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 47/71. — 12—13-сө б.

*Яҙып алыусының иҫкәрмәһе:* «Шәһиҙә инәй «Буҙйегет» әҫәрен бик яҡшы белгән булган. Хәҙер ул онота төшкән».

**Ҡыҫҡаса йөкмәткеһе шунан ғибәрәт.** Ғабдулла хандың улы Буҙйегет өс йыл рәттән көн һайын бер үк ҡыҙҙы төшөндә күрә. Ғабдулланың бик аҡыллы вәзиренең улы Ҡамалдың кәнәше буйынса, төшөндә теге ҡыҙҙан һорашып, уның Моладиә ҡалаһындағы Тахмас хан ҡыҙы Сәхипъямал булыуын белә. Икәүләшеп уны эҙләп киткәндә, ҙур даръяны һал менән сығып барғанда, мәймүндәргә әсирлеккә юлығып, унан саҡ ҡотолалар. Өс йыл буйы Буҙйегетте төшөндә күргән Сәхипъямал уның Моладиәлә икәнен белгәс, ҡырҡ ҡыҙы аша үҙенә алдырып, бергә йәшәй. Тахмас хан яу аса, егетте еңә алмай. Етмеш ерҙән яраланған Буҙйегет (иптәше хаҡында һүҙ юҡ) ҡасып китеп, хәле бөтөп, һамаҡлап ята. Мәғәнәһе: ағастың башы киҫелһә, төбө ҡала. «Хоҙайҙан әмерендән ҡалырым юҡ», — тиһә лә, кәфенһеҙ, гүрһеҙ үлеп ҡалыуҙан ҡурҡа. Әҫәр тамамланмаған.

5. **«Буҙйегеттән өҙөк»** тигән исем аҫтында 1964 йылды Әлшәй р-ны Боранғол ауылында Ҡотлобаева Гөлъямалдан (1886 йылғы) Ниғмәт Шоңҡаров яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 47—71. — 1—3-сө б.

Бүтән варианттарҙа, Сәхипъямал менән осрашҡан саҡта, баҫҡан яуҙа яраланғас, Буҙйегет назым әйтә:

Ҡарлығас ҡарлығасҡа ем бирҙе,
Хәрендәш хәрендәшкә ем бирҙе. һ. б.

Ошо шиғри юлдар был варианттың башында уҡ килә.

Артабан гүр эсенә кәфенләп һалыр кешеһе булмауға ҡайғырыуы хаҡындағы строфалар килә. Назым ошондай юлдар менән тамамлана:

Зар ҡылһам да, белмәйҙер ата-анам,
Йығылһам да белмәйҙер анам минең,
Күңелем был ерләрҙә моңло булды,
Һорарға һис кешем юҡ хәлем минең.

Артабан Сәхипъямалдың атаһы (Такмас хан), туй үткәргән кеше булып, нисек Буҙйегетте үлтерергә ниәтләнеүе, иҫерек Буҙйегеттең ҡасып ҡотолоуы һ. б. эпизодтар нигеҙҙә төп варианттарҙағыса, тик улар хаҡында аннотация кимәлендә генә бирелә.

**6. Бузикет (Буҙйегет)** исемендә 1961 йылда Силәбе өлкәһе, Ҡоншаҡ районы Зәбир ауылында Ибраһимова Мәүлиҙәнән (1910 йылғы) Һәҙиә Ҡаһарманова яҙып алған. // БДУ БӘК фф. 58. — 10—13-сө б.

Багдад ҡалаһының Ғабдулла исемле ханы булған. Уның матурлығы, көслөлөгө менән тирә-яҡта дан тотҡан Бузикет исемле улы булған. Иптәше Ҡаман була.

Бузикет бер төндө төшөндә матур бер ҡыҙға ғашиҡ була һәм уны эҙләп сығып китә. Бузикет эҙләргә сығып киткән ҡыҙ Маһатын ҡалаһының хан ҡыҙы Сәхипъямал булған. Ҡыҙын бирәм тип иҫәпләп йөрөгән Зәйтүн исемле вәзире булған.

Бузикет Сәхипъямалды барып таба, һәм улар ҡауышалар. Ләкин был турала батша ишетә. Ул иң көслө егеттәрен йыйып ала ла Бузикетте үлтертергә ебәрә. Ҡанлы көрәштә егет 70 ерҙән яралана һәм ҡасып ҡотола. Ҡыҙ Бузикетте ҡала ситендәге бер ҡарсыҡта йәшерә. Батша ишетеп, әбейҙе саҡырта. Әбей, ҡурҡып, Бузикетте тоттора. Бузикетте батша аҫып үлтертә. Ҡыҙ был турала бер ни ҙә белмәй. Ҡаман ҡыҙға хәбәр итә. Ҡыҙ Бузикеттең үлек кәүҙәһенә килә һәм әйтә:

«Хайран башың, зәм башың
Ҡиҫелгәнгә окшай ҙа —
Баһаһы юҡ кәүҙәндән
Йән киткәнгә оҡшамай.
Кәүҙәң ятыр болғаныпп,
Аяҡ-ҡулың солғаныпп;
Кәфенең юҡ, гүрең юҡ,
Бергә осар ир инең.
Ҡарағаттай күҙҙәрең,
Ҡыҙыл гәүһәр йөҙҙәрең.
Бал-шәкәрҙәй һүҙҙәрең...
Әйтһәм, һүҙең етмәҫ тим,
Йырақтарға китерһең,
Саҡырһам да, килмәҫһең,
Үҙ юлыңа төшөрһөң.
Һинһеҙ донъя булмаҫ, тим,

Мин дә артыңдан китәйем.
Һин дә алдымда булмағас,
Был донъянан китәйем.
Көн-төн илап йөрөгәнсе,
Был хәсрәтте күргәнсе,
Ҡайғы бөтмәҫ үлгәнсе,
Бергә булһаҡ кәрәк, ти».

Сәхипъямал, Бузикетте ҡосаҡлап, атаһына бара һәм Бузикетте үлтерткәне өсөн асыуланып:

«Бер көн атай, иларһың,
Күппешиман(ҡайғылы) булырһың;
Эш иткәнһең — файҙа юҡ,
Япраҡтай ҡойолорһоң.
Уйлағандан, белдем мин,
Уйың һинең шул икән:
Бузикетте үлтертеп,
Майҙан маяҡ тултырып,
Йорт эсендә туйың бар,
Һинең шундай уйың бар.
Һинең һөйгән Зәйтүнең
Эште(?) һаҡларһың,
Бузикетем булмаһа,
Ҡыҙ ҙа булып йөрөмәҫмен.
Әгәр йөҙөн күрмәһәм,
Тере лә булып йөрөмәҫмен», —

тип йырлап әйтә. Атаһы Тазмыз хан:

«Инде илама, балам, илама,
Ил эсендә яҡшы күп —
Илдән илгә аралап,
Илдән илгә йөрөрмөн,
Илдә яҡшы күренһә,
Һине уға бирермен,
Һөйгәнеңсә ҡылырмын», —

тип яңғыҙ ҡыҙының ҡайғыһын онотторалһы ҡилә. Ҡыҙ атаһына яуап итеп:

«Балаң күнеле ҡалғандыр,
Алдаһаң да, булмаҫтыр;
Ваны ла ҡабул күрмәҫтер,
Һөйәккәйем сынғанын
Һылаһаң да, булмаҫтыр;
Күңел ҡошо осҡандыр,
Ҡун, тиһәң дә, ҡунмаҫтыр;
Башым ергә төшкәндер,
Күтәрһең дә, булмаҫтыр;

Эсем боҙға тулғандыр,
Йөрәгем таш булғандыр», —

тип әйтә лә үлергә уйлай. Ул ҙур һарай һалдыра башлай. Атаһы: «О, минең ҡыҙым, үҙенә һарай эшләй, аҡылланған», — тип, уға күп хазина, оҫталар ебәрә. Ҡыҙ оҫталарҙы кире ҡаға. Һарайҙы эшләтеп, 40 иптәше менән бәхилләшеп, Бузикетте һарайға индереп һала ла хәнйәрҙең һабын Бузикеттең йөрәгенә терәй, осон үҙ йөрәгенә һалып ҡосаҡлап үлә.

Каман Бузикет тураһында Багдадҡа ҡайтып хәбәр итә. Атаһы һәм әсәһе туйға әҙерләнеп ятҡан булалар. Батша, илап, иҫтән яҙа. Улар, Маһатынға барып, ханды табалар. Бузикет тураһында һорағас, (Тазмыз) хан ҡылысын биреп, уның алдына ята. Батша ханды үлтермәй. Улар балаларын күрергә теләйҙәр. Бузикеттең инәһе уның өҫтөнә башын һалып:

«Ун ай һине күтәреп,
Имсәгемде имеҙеп,
Татлы аштар ашатып,
Аҫыраған анандан,
Тороң, балам, торһана!
Ҡилмәҫ ергә килеп һин,
Әсәң килде ҡашыңа;
Ҡермәҫ ергә кереп һин,
Бер генә йөҙөң күрһәнә», —

тип йырлай ҙа һушһыҙ йығыла.

7. **Буҙйегет.** 1965 йылда Башҡортостандың Баймаҡ р-ны Ярат ауылында Мәликә Дәүләтбаеванан Ильяс Дәүләтбаев яҙып алған. — БДУ фонды, 1965 йылғы фольклор экспедицияһы материалдары, I киҫәк, 146—150-се б. Проза ҡатыш шиғырҙан тора.

Бында Буҙйегет — Ҡасим тигән батшаның улы, Сәхибъямал — Шаһибәк батшаның ҡыҙы, ә Буҙйегеттең дуҫы — вәзир улы, Дәминдәр исемле;

Юлда күргән яфаларын һөйләүҙә шундай үҙенсәлек бар:

«...Диңгеҙҙе сыҡҡас, улар бер шәһәргә инәләр. Ул шәһәрҙең батшаһы Буҙйегет менән Дәминдәрҙе, ҡаскын тип тотоп алып, яфалаған, эшкә ҡушҡан. Көндөҙ уларҙан утын ҡырҡтырып, йөкмәтеп ташытҡан; кис менән ҡорсай аттың арҡаһын тырната икән. Бер йыл ваҡыт үткәс, ошо батшалыҡтағы ҡол ҡыҙы быларға ҡасырға ярҙам иткән».

Буҙйегеттең үлеүен ата-әсәһенә, Ҡормашиҙағы һымаҡ, Ҡари баба (вариантта *йырсы* Ҡари баба) белдерә.

«Был йырҙы тыңлағандан һуң, Буҙйегеттең атаһы менән әсәһе уның үлгәнен белгәндәр. Сәхибъямалдың ата-әсәһе лә ҡыҙҙың ҡайғыһынан һарғайып үлгәндәр» тигән һүҙҙәр менән тамамлана.

8. **Буҙйегет.** (Йәйә эсенә «хикиәт» тип ҡуйылған). Башҡортостандың Хәйбулла р-ны Зиргән ауылында (1892 йылда тыуған) Кама-

летдин Таһировтан Дания Кәримова менән Гөлфирә Ҡотломөхәмәтова яҙып алған. — БДУ фонды, айырым дәфтәр.

Текст күбеһенсә сәсмә формала, ҡайһы бер сюжет деталдәре әкиәт стилендә ябайлаштырып һөйләнә. Сәхибъямалды эҙләп барғанда, Буҙйегет иптәше менән (исеме ике төрлө: «Дуҫтыкәмин» һәм «Дуҫтөкәмән») «һыйыр аяҡ, эт баш еренә әсир төшә». Сәхибъямал янында ултырғанда батша ғәскәре уратып алғас, Буҙйегет «ете кешене үлтереп, үҙе етмеш ерҙән йәрәхәтләнеп» ҡасып китә. Йәнә ябайлаштырған үҙенсәлекле бер деталь — Сәхибъямалдың туйға әҙерләнеп көтөп ултырыуы шулай һүрәтләнә: «Буҙйегеткә бирәм тигәс, сәсен майлап тараған ине, ти. Береһен (толомон) әле үрмәгәйне, ти. Был һүҙҙе ишеткәс (йәғни Буҙйегеттең иптәше туйҙың яуыз уй менән үткәрелеүен килеп әйткәс — Н. З.) хөллә тунының бер еңен кейҙе, береһен кеймәне, сығып йүгерҙе, ти».

Яҙма варианттарҙа булып та, телдән һөйләнгән варианттарҙа иҫкә алынмаған деталдәр осрай. Мәҫәлән, етмеш ерҙән яраланған Буҙйегеттең нисек һауығыуы тап Баһауи ҡулъяҙмаһындағы кеүек һүрәтләнә: «Шунда мағарала (ышыҡланып ятҡан ерендә — Н. З.) ултырғанда бер сыскан килеп сыға. Тотоп ала. Үҙендә нисә яра булһа, шунса яраны сысканға һалды, ти. Сысҡандың аяғына еп бәйләп, осонан тотто ла ебәрҙе, ти. Сысҡан тәҡәт итә алмай, бер тамыр тапты. Шул тамырҙың яртыһын ашап, яртыһын ҡалдырҙы. Бөтөн ағзаһы сағ-сәләмәт булды. Буҙйегет: «Был да бер мәхлүк, инде шәбәйҙе. Мин дә шәбәйермен әле», — тип, тамырҙы сәйнәп йотто, ти. Шунан ул да сағ-сәләмәт булды, иҫән-аман ҡыҙҙың шәһәренә килде, ти».

Вариант шулай уҡ үҙенсәлекле тамамлана: «...Сәхибъямал ҡәберҙе 15 көндә эшләтеп бөттө. Бөтәһен әҙерләп, ҡулына бысаҡ тотоп килдә лә: «Ай Буҙйегет, Буҙйегет, ишек асып, мин дә эргәңә ятам», — тип әйтте, ти. Шул саҡ алтындан эшләнгән ҡәбер асылды. Сәхибъямал инеп китте. Ул ингәс, күк күкрәне, ер һелкенде, ҡәбер ишеге ябылды, ти».

**9. Буҙйегет.** Башҡортостандың Бөрйән р-ны Ағиҙел поселогында Йыһангир Сәлиховтан (1900 йылда тыуған) 1971 йылда Н. Шоңҡаров яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65/7. — 22—24-се биттәр. Шау сәсмә телдә.

Буҙйегет — Багдад ҡалаһында Ғабдулла хандың улы; Буҙйегеттең дуҫы Ҡамал — Ғабдулла хандың вәзире Ғабдрахмандың улы; Сәхибъямал — Таймас хандың ҡыҙы. Маймылдар шәһәренән ҡасҡас, юлда Багдад ҡалаһынан бер сауҙагәр ҡартҡа осрап, алтынкөмөштән саҙаҡа биреп китәләр. Ҡыҙ шәһәренә килеп еткәс, Буҙйегеткә төшөндә бер әбей бынан китмәҫкә ҡуша, ҡыҙҙың шәһәрҙә йәшәүен әйтә. Ҡыҙға беренсе килеүендә үк һаҡсылар батшаға хәбәр итәләр. Ҡалған эпизодтарҙы һөйләүҙә әһәмиәтле үҙенсәлектәр юҡ. Тик бөтөмө башҡасараҡ: Буҙйегетте күрергә атаһы ҡырҡ көнлөк юлды гел йәйәү, ә әсәһе йүгерек ат менән дүрт көндә үткән. Килгәс, Буҙйегеттең әсәһе: «Ғәскәр йыйып, был илде бөтөрөргә кәрәк», — ти. Ғабдулла хан Таймас ханға һуғыш асып, ҡаланың өстән ике өлөшөн һәм «бәһлеүәндәрен» ҡырып бөтөрә.

**10. Буҙйегет ҡиссаһы***. 1985 йылда Күмертау (Көйөргәҙе) р-ны Йомағужа ауылында Фәгилә Ҡотлобаеванан (1909 йылда тыуған) Сәйфулла Әмиров яҙып алған һәм Ғайса Хөсәйеновҡа тапшырған. — Ғилми архив, ф. 57, оп. 1/31. 163—168-се биттәр. Ҡулъяҙмала 6 бит. Башлыса сәсмә телдә, шиғри өлөштәрендә ритм һәм рифмалар боҙолған урындар бар. Йөкмәткеһе Ҡормаши баҫмаһына тура килә.

**11. Буҙйегет.** Баймаҡ р-ны Абдрахман ауылында йәшәүсе Иҙрисова Миңниямал ҡулъяҙмаһы. 1985. — Ғилми архив, ф. 57, оп. 1/31. Ледерин тышлы ҡалын дәфтәр, 29 (ике яҡлап 58) бит.

Әҫәрҙе Иҙрисова «Бик күп йылдар элек булған хәл» тип атаған. Әкиәт стилендә башлана: «Борон-борон заманда бер шәһәрҙә Абдулла тигән батша йәшәгән, ти. Уның вәзире Хәмитулла тигән кеше булған. Уларҙың икеһенең дә бер көндә балалары тыуған». Абдулланыҡы — Буҙйегет, Хәмитулланың — Ҡәмән. Буҙйегет төшөндә күреп ғашиҡ булған ҡыҙ — Сәхибъямал, батша ҡыҙы. Ул гел генә 40 әхирәте менән бергә йөрөй.

**12. Буҙйегет менән Сәхибъямал.** 1989 йылда Дәүләкән р-ны Иҫке Мерәҫ ауылында Сөләймәнова Мәфтуханан (1909 йылда тыуған) Розалиә Солтангәрәева яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92-10. 24-се б.

Вариант сюжет йөкмәткеһе ҡыҫҡаса һөйләп сығыуҙан ғибәрәт.

## ТАҺИР МЕНӘН ЗӨҺРӘ

Алты варианты баҫыла.

**Тәүгеһен** Ырымбур өлкәһе Ҡотос ауылында Рәхилә Теләкәеванан 1960 йылда Ҡирәй Мәргән яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 157—160-сы биттәр. Баҫылған // БХИ: Эпос. 3-сө китап. — 272—275-се биттәр.

**Икенсеһен** Ырымбур өлкәһе Күрпәс ауылында Булатов Зәкәриә Алламорат улынан (1927 йылда тыуған) 1960 йылда Ниғмәт Шонҡаров яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 21-5, 13—15-се биттәр. Баҫылған // БХИ: Эпос. — 3-сө китап. 275—277-се биттәр.

**Өсөнсөһөн** Башҡортостандың Ишембай районы Этҡол ауылында Сабирйән Ғарифуллиндан (1892 йылда тыуған) 1968 йылда Ниғмәт Шонҡаров менән Нур Зарипов яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 65/3, 4—7-се биттәр, баҫылған // БХИ: Эпос. 3-сө китап. — 277—279-сы б.

**Дүртенсеһен** Башҡортостандың Дәүләкән районы Иҫке Мерәҫ ауылында Усманова Хәнифә Садиҡ ҡыҙынан (1910 йылғы) 1989 йылда Розалиә Солтангәрәева яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 92/10. — 25—28-се б. (машинкала баҫылған). Архивтан Флорида Әхмәтова күсереп алды. Вариант үҙенсәлекле үҙгәрештәргә юлығыуы менән ҡыҙыҡлы.

---

* Был һәм бынан һуңғы яҙмаларҙы архивтан Флорида Әхмәтова ҡарап тапты.

**Бишенсеһен** Башҡортостандың Баҡалы районы Балыҡлы ауылында Миңнеямал Сафа ҡыҙы Хажиеванан (1904 йылда тыуған) 1984 йылда Розалиә Солтангәрәева яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 92/2. — 1—13-сө б.

**Алтынсыһын** 1960—1970-се йылдарҙа Баймаҡ районы Күсей ауылында 78 йәшлек Ишбирҙина Нәсиха Исхаҡ ҡыҙынан БДУ студенттары яҙып алған // БДУ БӘК ФФ, 25. — 123—131-се б.

## ТЕЛДӘН ЯҘЫП АЛЫНҒАН БҮТӘН ВАРИАНТТАРЫ:

1. **Янзөһрә менән Янтаһир.** Башҡортостандың Архангель районы Абзан ауылында Үлмәҫбикә әбейҙән (фамилияһы, тыуған йылы күрһәтелмәгән) 1966 йылда Рауил Бикбаев яҙып алған // Ғилми архив, Ф. 3, оп. 61/2, 31—32-се б. Текстың күләме машинкала бер биттән аҙ ғына артығыраҡ, сюжет тулы түгел. — Янзөһрә — бай ҡыҙы, Янтаһир — ярлы егет. Шуға күрә Янзөһрәне атаһы Янтаһирға бирергә теләмәй, ә Ҡарасөпәк исемле бай урыҫ егетенә бирмәксе. Артабан Янтаһир менән Янзөһрәнең бары бер шиғри диалогы әйтелә.

2. **Таһир менән Зөһрә.** Башҡортостандың Ишембай районы Әптек ауылында Мәрфуға Хәлилованан (1885 йылда тыуған, иҫкесә уҡый-яҙа белә) 1968 йылда Роза Нафиҡова яҙып алған // Ғилми архив, ф. 3, оп. 65/3, 1—3-сө б.

Мәрфуға инәй йәш сағында «Таһир менән Зөһрә ҡиссаһы»н яҡшы белеүен әйткән, әммә хәҙер онотҡан, теҙеп һөйләй алмаған, шиғри диалогтарҙан ҡайһы бер фрагменттар ғына яҙҙырған. Шуларҙан Зөһрәнең атаһына әсәһенең һүҙе иғтибарға алырлыҡ:

«Вәзир затҡа ҡыҙ биргәнде
Ишетмәнем, күрмәнем.
Вәзир затҡа ҡыҙ биреп,
Ханым булып йөрөмәм.
Шаһзадалар килмәйме,
Нур егетләр килмәйме?
Ете ожмах хурындай,
Хуш егетләр килмәйме?
Ишеткән йән ҡолаҡтан
Бар ҙа ғашиҡ тота, ти.
Һинең ғәйрәтеңдән ҡурҡып,
Серен эстә тота, ти».

3. **Таһир менән Зөһрә.** 1960-сы йылдарҙа Мәсетле районы Һөләймән ауылында 82 йәшлек Бәҙретдинова Мәхмүзәнән Тәзкирә Хажиева яҙып алған // БДУ БӘК ФФ, 7, 199—200-се б.

Күләме кыҫка. **Иғтибарға лайыҡ айырмалыҡтар:** 1. Таһирҙың әсәһе — байҙың хеҙмәтсеһе (Атаһы хаҡында, балаһыҙлыҡ; балалар тыуһа, йәрәштереү хаҡында — ләм-мим). 2. Бай ҡыҙы Зөһрә менән Таһирҙың дуҫлығы хаҡында Ҡараҡол ошаҡ йөрөтә. 3. Егетте ағыҙғас, Зөһрә батшаның өс ҡыҙына хат яҙа: «Минең яратҡан ғына еге-

темде Шат һыуына һалып ағыҙҙылар». 4. Алдан иҫкәртелгән ҡыҙҙар, һандыҡ ағып килеүен күреп:

«Килеп ҡыҙлар үҫәлек,
Шат һыуына төшәлек,
Дәртле Таһир киләлер,
Дарманына ирешәдер», —

тип йырлағас, Таһир:

«Ятканым такта барасы(?),
Килгәнем — Шат арасы.
Бер иманлы ҡол булса,
Мине ҡоткарасы! —

тип яуап бирә. 5. Ҡыҙҙар Таһирға ғашиҡ, Таһир алғыһы килмәй. Шуға уны ат ҡойроғона тағып ҡайтаралар. 6. Таһир ҡайтһа, Зөһрәне Ҡараҡолға туйлап яталар. 7. Ағаларына әйтеп, Таһир, үҙен һандыҡҡа һалдыртып, Зөһрәгә «бүләк» иттертә. Зөһрә үҙ бүлмәһендә һандыкты аса, Таһир килеп сыға. Ҡараҡол килеп инеп, ҡылыс алыша башлайҙар, Таһирҙың ҡылысы һына. Зөһрә бысаҡ бирә, әммә Ҡараҡол Таһирҙы үлтерә. Был вариантта бер ни тиклем кинофильмдың йоғонтоһо һиҙелә (ҡылыс һыныу, бысаҡ биреү, Таһирҙың: «Зөһрә!» — тип, Зөһрәнең: «Таһир!» — тип, әйтеп үлеүе).

**4. Таһир менән Зөһрә йыры.** 1960-сы йылдарҙа Баймаҡ районы Билал ауылында БДУ студенттары яҙып алған // БДУ БӘҠ ФФ. Төрлө йылдар.

Текста дастандың йөкмәткеһе бирелмәй, әммә ул күҙ уңында тотола:

Таһир менән Зөһрәнең
Ҡәберлеген күрербеҙ.
Улар кеүек саф күңелдән
Һөйөп тороп, ҡауыша алмаһаҡ,
Беҙ ҙә шулай үлербеҙ.

Матур ай ҡалҡа төн өсөн,
Ҡояш ҡалҡа көн өсөн,
Таһир үлә Зөһрә өсөн,
Зөһ(ө)рә — Таһир өсөн,
Мин үләм һинең өсөн.

Аҡлы ситса күлмәгемдең
Ең осо таушалмаған.
Таһир — батыр,
Зөһрә — матур —
Улар ҙа ҡауыша алмаған.

**5. Таһир һәм Зөһрә.** 1984 йылда Таймазы р-ны Собханхол (Ыҫмай) ауылында Ғәзизә Хәлфетдин ҡыҙы Ғүмәрованан (1918 йылда

тыуған) Розалиә Солтангәрәева яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92/2. 14—15-се биттәр.

Текстың күләме машинкала ике биттән артмай, сюжет тулы түгел. Шулай ҙа унда иғтибарға лайыҡ булырҙай оригиналь мотивтар, деталдәр бар. 1. Батша ла, вәзир ҙә, һунарҙа саҡта: «Инә ҡуян атһам — ҡыҙ, ата ҡуян атһам, ул була», — тип юрайҙар. Юрауҙары юш килә. 2. Таһир һандыҡта ағып килә. Икенсе батшалыҡта һыу буйында кер йыуыусы өс ҡыҙ: «Һандығы — миңә», «Эсендәгеһе — миңә», — тип бүлешә. 3. Таһир был батшалыҡта кәләш ала: һандыҡ эсендәген алырға теләүсе ҡыҙ уға кәләш була. 3. Зөһрә, Таһирҙың ҡайҙалығын белеп, Ҡараҡол тигән хеҙмәтсеһен Елъетмәҫ атында алдырта. 4. Аттың бер яғы — аҡ, иќенсе ҡабырғаһы күк булғанға, күперҙә торған һаҡсылар бутала: берәүҙәре күк атлы үтте, ти, икенсе яҡтағылары, аҡ атлы, ти. (Башҡа варианттарҙа улар ҡырҡ ҡараҡ тип аталған. Ҡар.: 2—4-се вар.). 4. Таһир, сәхәр мәлендә ҡайтып етеп, Зөһрәнең тәҙрәһе төбөндә:

«Мин ҡайттым сәхәр ваҡытында,
Йәнзөһрә ята (торор) тәхетендә.
Мин уятып, уянмаһаң,
Уяныр һын ваҡытыңда», —

тип йырлай. 5. Таһирҙы аҫып үлтерәләр. Зөһрә атаһына:

«Әй, татарҙар, татарҙар,
Баҙарҙағы ит бөткәс,
Таһир итен һатарҙар», —

тип йырлай (Күренеүенсә, икенсе юлы юҡ. Ни өсөн былай тип әйтеүе нигеҙләнмәй. Башҡаларында, Зөһрәне иҫенә килтерер өсөн, уға Таһирҙың тәненән киҫеп алынған итте еҫкәтәләр йә ашатырға итәләр). 6. Зөһрәне Ҡараҡолға бирмәксе булғас, ҡыҙ Таһирҙың ҡәбере өҫтөндә үлә (Нисек? Әйтелмәй). Ғәрлегенән Ҡараҡол да үлә. 7. Уны ике ғашиҡ араһына ҡуялар: «Зөһрә сыҡҡан гөл булып, Таһир сыҡҡан ал булып. Ә Ҡараҡол — шайтан таяғы булып».

**6. Таһир менән Зөһрә.** 1989 йылда Дәүләкән р-ны Иҫке Хөсәйен ауылында Ғәйниямал Минефазыл ҡыҙы Абыҙгилдинанан (1911 йылда тыуған) Фәнүзә Нәҙершина менән Илдар Ханнанов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92/9. 27-се бит.

Башланышы: «Таһир менән Зөһрә йәшәгән. Уларҙы байҙар ҡауыштырмаған. Тегеләр ҡаршы тора алмаған...»

Бөтөмә: «Үлгәс уларҙы икеһен дингеҙҙең ике ярына күмәләр (үлгәс тә бер-береһенә яҡын булмаһын, тип). Теге ике ғашиҡ ҡәберҙәре өҫтөнә тирәк ағасы ҡалҡып, диңгеҙ аша иңелеп үҫкән». (Башҡа варианттарҙа ҡәберҙәрҙә гөл үҫеп сыға.)

**7, 8. Таһир менән Зөһрә.** 1989 йылда Дәүләкән р-ны Иҫке Мерәҫ ауылында Вазифа Әҙелгәрәй ҡыҙы Дәүләтгәрәеванан (1907 йылда тыуған) һәм Зөбәйҙуллин Вәлиш Солтангәрәй улынан (1915 йылда тыуған) Гөлнур Хөсәйенова яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92/9, 169-сы бит.

Ике вариантта ла текстар тулы түгел. Күләме (машинкала) яртышар бит.

**9. Таһир менән Зөһрә.** 1989 йылда Дәүләкән р-ны Иҫке Мерәҫ ауылында Мәрфуха Сөләймәнованан (1909 йылда тыуған) Розалиә Солтангәрәева яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92/10. 28—29-сы биттәр.

Күләме (машинкала) бер бит.

Таһир йырының өҙөктәре килтерелә:

Эй үшәле, үшәле,
Шырт һыуына төш әле,
Дәртле Таһир киләлер,
Мораҙына ирешәлер.
Менгәнем такта парыһы,
Шырт һыуына бараһы.
Бер иманлы ҡол юкмы
Мине тиҙ ҡоткараһы.

Шырт һыуы — дөрөҫөрәге Шат йылғаһы исеме.

[1] *Сәни сәүәм* — һине һөйәм.

[2] *Юл миңә төп-төҙҙөр* — йөрөгән юлым хаҡ, дөрөҫтөр.

[3] Рауил Бикбаев яҙып алған вариантта ошо шиғри диалог ҡына килтерелә. Айырмаһы: а) Янтаһир бер үк куплетты өс тапҡыр йырлай; б) Ҡарасонаҡ — бында Ҡарасөнәк исемендә.

[4] Ҡыҙыҡлы деталь: Зөһрәгә Таһирҙың итен ашатырға маташыу Ә. Уразаев-Ҡормаши яҙмаһында ла бар. Унда Зөһрә түбәндәгесә һалмаҡлай:

Эй татар сез, татар сез,
Бер-берeңезгә уҡ атарсыз;
Базарда ит беткәнме?
Таһир итен сатарсыз.

(М. Гайфуллин. Татар әдәбияты, XIX йөз, 301-се бит).

## СӘЙФЕЛМӨЛӨК

1976 йылда Стәрлебаш р-ны Тәтер-Арслан ауылы Рысаева Миңзифа Шаһиғәскәр ҡыҙынан (1899 йылда тыуған) Ниғмәт Шоңҡаров магнитофон таҫмаһына яҙып алған. Магнитофон таҫмаһы — ТТӘИ музыка фонды. Таҫманан күсермә тексы — Ғилми архив, ф. 3, оп. 73/63, 48—109-сы биттәр. Баҫылған — БХИ: Эпос, 3-сө китап. 280—299-сы биттәр.

Төрки халыҡтарында был — шулай уҡ киң таралған ҡисса. Тәү тапҡыр Ҡазан университеты типографияһында 1807 йылда, унан һуң Октябрь революцияһына тиклем күп тапҡыр баҫылған. Ҡаҙаҡса бер версияһы 1976 йылда Алма-Атала сыҡҡан «Ғашиҡ-наме» китабына ингән.

Беҙҙең китапҡа алынған вариант — шиғри ҡиссаның халыҡ телендә тотош проза формаһына күсеп, әкиәт стилендә һөйләнелеүе, әммә сюжеттың тулы һаҡланыуы менән әһәмиәтле. Сюжеты ныҡ ҡыҫҡарып, ҡайһы бер мотив һәм эпизодтары ла үҙгәргән, бөтөнләй әкиәтләшкән ике варианты әкиәттәр томында баҫылғайны (Артабан 2-се, 3-сө варианттарҙы ҡар.).

[1] *Рәбиғелмөлөк* — баҫма варианттарҙа Мысыр батшаһы, исеме — Ғасим йәки Ғасим ибн Сафуан.

[2] *Икенсе бер батшаға* — баҫма варианттарҙа — Йемен батшаһына.

[3] *Сөләймән* — «Ҡиссаи Йософ», 28-се аңлатманы ҡарағыҙ.

[4] *Ирәм бағы* (икенсе төрлө әйткәндә, Ирәм зат әл — Имад — күп колонналы Ирәм) — мосолман мифологияһы буйынса, аҫыл таштар менән ҡиммәтле металдарҙан төҙөлгән боронғо ҡоролма. Ирәмде көньяҡ Ғәрәбстанда йәшәгән *ғад* ҡәбиләһе, йәннәткә оҡшатып, төҙөргә маташҡаны өсөн, Аллаһы тәғәлә уны емерткән, ти. Ҡар.: «Мифы народов мира. Т. 1. — М.: СЭ, 1987. — С. 560). Был хаҡта «Ҡөрьән Кәрим»дең «Әл-Фәджр» («Таң») сүрәһендәге 6—8 аятта ла телгә алына: «Раббының *ғад халҡы* менән нимә ҡылғанын күрмәнеңме ни?! Мөһабәт йорттар эйәһе Ирәм халҡы менән? 8. Уның шикелле нәмәләр тирә-яҡ илдәрҙә яһалмағайны» (Ҡар.: «Ҡиссаи Йософ», 22-се аңлатма).

[5] *Йәнкеләр* — баҫма варианттарҙа зәңгеләр, зәнкиҙәр, йәғни негрҙар, ҡара тәнле кешеләр.

[6] *Аллаһы тәғәләгә күп хикәйәттәр уҡый* — дөрөҫө, «мөнәжәттәр» булырға тейеш. Ҡазаға ҡалған геройҙың, ярҙам һорап, тылсым эйәһенә йәки Аллаға мөрәжәғәт итеүе — фольклорҙа традицион күренеш.

[7] *Һуғышта үлгәндәрҙең балаларына пенсия түләү, хөрмәт күрһәтеү* — боронғо хикәйәткә хәҙерге заман төшөнсәләренең килеп инеүен күрһәтеү яғынан бик ҡыҙыҡлы деталь.

**2. Бәдеғольямал менән Сәйфелмөлөк.** 1960 йылда Дәүләкән р-ны Яңы Аҡкүл ауылында Рәхимйән Бикбулатовтан БДУ студенты, әҙип Энәс Зәйнуллин яҙып алған. — БДУ БӘФҠ фф, 60. — 96—100-се биттәр. Бығаса бер тапҡыр баҫылған // Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр. 2-се кит. / Төҙ. М. Х. Минһажетдинов, Ә. И. Харисов; Яуаплы мөхәрр. Н. Т. Зарипов. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1976. — № 14.

**3. Сәйфелмөлөк.** 1965 йылда Салауат р-ны Лаҡлы ауылы Шафиға Моратованан (1923) Ф. Ғарипова яҙып алған. — БДУ БӘФҠ фф, 65. — 55—62-се биттәр. Бығаса бер тапҡыр баҫылған // Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр. 1-се кит. / Төҙ. М. Х. Минһажетдинов, Ә. И. Харисов; Яуаплы мөхәрр. Н. Т. Зарипов. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1976. — № 56

# ҺҮҘЛЕК

*Бор. т.* — боронғо төркисә.
*F.* — ғәрәпсә.
*Ҡаҙ.* — ҡаҙаҡса.
*Ҡыр.* — ҡырғыҙса.
*Монг.* — монголса.
*Т.* — төркисә.
*Төрөк.* — төрөксә.
*Ф.* — фарсыса.
*Хәр.* — хәрби.
*Һөйл* — һөйләш (диалект).

**Айнаҡ, айнә** *ф.* — күҙгө; контекстарҙа аңлашыла.

**Аҡшам** — ҡараңғы төшкәс уҡыла торған намаҙ; кис.

**Аллаға ҡылғанығыҙ ғийән шынар** — *ҡылған гонаһың Аллаға мәғлүм булыр* мәғәнәһендә.

**Алланың ярлығына** — Алланың ҡушҡанына (яҙмышҡа).

**Алтындан тирәкбеҙ** — алтын тирәк.

**Алтынлы утау** — алтын ятышы.

**Алтын эйәр-буҙ юрға** — алтын эйәрле (эйәренең ҡашы алтын) буҙ юрға.

**Алып** — көүәтле батыр (великан).

**Анар** — гранат емеше.

**Аң** *бор. т.* — йәнлек, йырткыс хайуан.

**Арҙа** — ике-өс йәшенә саҡлы әсәһен талап имеп йөрөгән тай йәки башмаҡ.

**Арман** *ф.* — 1. Теләк, ынтылыш; 2. Үкенеү, ҡайғырыу; 3. Изге хыял.

**Артыҡ өмөр һөрмәк бар** — артабан ғүмер һөрмәк бар.

**Арыз** *ғ.* — теләк, ынтылыш.

**Аяҡ йыйҙырып** — туй яһап (аяҡ — һауыт).

**Аяулы** — ҡәҙерле.

**Баба** — атай.

**Байыҡ** — тоғро, ысын.

**Баҡсы** *ҡаҙ.* — сихырсы, им-том менән дауалаусы.

**Баҡырыусы** *һөйл.* — ҡысҡырыусы, аҡырыусы.

**Бала кейек аттың һин** — кейектең балаһын атыу гонаһ эш иҫәпләнгән. Бында һүҙ гонаһһыҙ кешене үлтереү хаҡында бара.

**Бардуғ** — күн һауыт.

**Батил** — боҙоҡ, ялған, ысын түгел.

**Батыҡ ғәмәл** — боҙоҡ эш.

**Баһауа** *(баһау ғ.)* — матур, шәп.

**Башсы ҡылып** — йәлләткә бойороп.

**Баян ҡылған** — һөйләп биргән.

**Беҙҙән борон** — беҙҙән элек.

**Бер ар алды** — бер ерҙә.

**Бер вә бар** — Алла.

**Берең хурҙыр** — берәүегеҙ хур (ҡыҙы йә егете).

**Бер хуп һүрәт нәҙерһең** — вәғәҙә ителгәнһең.

**Биһуш** *ф.* — һушһыҙ.

**Бостан** *ғ.* — баҡса.

**Бөйөм** *ҡыр.* — иң кәрәкле нәмә.

**Бөтләк** *һөйл.* — бөтә, бөтөн.

**Буғыу** *ҡаҙ.* — йәшеренеү.

**Буҙйегет ул булмаһын** — Буҙйегет булмағайы.

**Буйтеп** *т.* — былай (шулай) итеп.

**Буҡча** *т.* — муҡса.

**Буты күҙле** — күҙе, дөйә балаһының күҙе кеүек (Урта Азияла матур күҙҙе бута күҙенә оҡшаталар).

**Бутасыҡтай** — дөйә балаҡайы һымаҡ.

**Бутаһы** — дөйә балаһы (сағ. иркәләү һүҙе «балам-бутаным»).

**Былар көнө булғандыр** — дошмандарға яйы (уңайы) сыҡҡан.

**Бәғзе тарафы һарайға килгәндәр** — күпмелер ваҡыттан һарайға килгәндәр.

**Бәндәлек** *ғ.* — ҡолсолоҡ.

**Бәрәбә әйтте** — тура килтереп (еткерә) әйтте.

**Бәһеҙәт** — Багдад.

**Вафа** *ғ.* — һүҙҙә тороу, тоғролоҡ күрһәтеү.

**Вәсвәсә булған** *ғ.* — күңел аҙҙырған.

**Гидайын (гидәй)** *ф.* — фәҡирең.

**Гиз (гыйз) булдыҡ** — ололандыҡ, хөрмәт ҡаҙандыҡ.

**Гәүһәре** *ф.* — диңгеҙ ҡабырсағынан алына торған ҡиммәтле матдә, ынйы.

**Ғажиз булды** *ғ.* — бер ни ҙә ҡыла алманы.

**Ғарыз** *ғ.* — Бер эш йәки хәл тураһында телдән (йәки яҙып) тейешле урынға еткереү; теләкте белдереү; хәлде аңлатыу (ҡар.: *ғәриз ҡылып*).

**Ғафил** *ғ.* — белмәй (һиҙмәй, абайламай) ҡалыу.

**Ғаян** *ғ.* — күренеп торған, апасыҡ.

**Ғибранисә** *ғ.* — 1. Әйтем. 2. Яҙылғандан өҙөк.

**Ғил** *ғ.* — йәшерен башҡарылған эш, сер.

**Ғилаж** *ғ.* — әмәл, сара; дарыу, дауа.

**Ғинайәт** *ғ.* — ҡайғыртыусанлыҡ.

**Ғозорон** — ҡоһорон.

**Ғоманым ҡалманы** — шигем (төйөнөм) ҡалманы.

**Ғосса** *ғ.* — ҡайғы-хәсрәт.

**Ғөрбәт** — хурлыҡ, ҡоллоҡ (туны) мәғәнәһендәрәк.

**Ғәзиз** — «Ғәзиз» һүҙе ике мәғәнәлә йөрөргә мөмкин: *(фарсы телендә)* — Мысыр батшаһының аҡса менән идара итеүсе вәзире; *(ғәрәп телендә)* — Мысыр батшаһы, хакимы, мәлиге. Ҡиссала Ҡәнзәфәр ике төрлөсә лә атала: ғәзиз, мәлик. Был тап килмәү авторҙың үҙе тарафынан ебәрелгәндер, тип уйларға ҡала.

**Ғәйебен муйынына алып** — ғәйебен танып (өҫтөнә алып).

**Ғәйептән** — көтөлмәгән ерҙән.

**Ғәләйкәләү** — сәләмгә ҡаршы сәләм биреү.

**Ғәмда ла** — кешелә лә.

**Ғәнбәр** — хуш еҫле матдә, амбра. «Мишек-гәнбәр» шул уҡ мәғәнәлә.

**Ғәп** — һүҙ.

**Ғәреште** *ғ.* — күкте.

**Ғәриз ҡылып (ғарыз итеп)** — үтенес (теләк) менән мөрәжәғәт итеү (ғариза яҙыу) (ҡар.: *ғарыз*).

**Ғәрпи** *ғ.* — 1. тыуған-үҫкән ерҙән айырылып ситтә йәшәүсе; 2. ят, сит, таныш булмаған кеше (сителеп йөрөүсе, илгиҙәр).

**Дағы** *ғ.* — ҡайғыһы.

**Дад** *ф.* — 1. Туралыҡ, ғәҙеллек; 2. Ярҙам һорап саҡырыу; 3. Зар.

**Дайым** — һәр саҡ.

**Даркар** *ф.* — кәрәкле.

**Данайын** — *үҙ-үҙен* мәғәнәһенлә булыуы ихтимал.

**Дауыт** — Дауыт пәйғәмбәр.

**Дидар** *ф.* — йөҙ, бит, сырай; дидарыма туймаған — йөҙөмә ҡарап туймаған.

**Дик** *бор. т.* — кеүек, һымаҡ, шикелле.

**Динар** — ғәрәп илдәрендә йөрөгән аҡса берәмеге.

**Донъяның киң дулты** — донъяның мөмкинлеге (ихтыяры) киң.

**Дошманыңдан буҡмай** — дошманыңдан ҡурҡмай.

**Дудаҡларын** — *телдәрен* мәғәнәһендә.

**Дүмһә** — тумба.

**Дәнәмә** *каҙ.* — һис кем, һис нәмә.

**Дәрд** *ф.* — сир, ғазап.

**Дәр әл-мәхзун** — хәсрәт йорто; карттар йорто; мәсет.

**Дәүран** *ф.* — 1. Әйләнеш; 2. Эра, эпоха; Дәүран һөрөү — ғүмер итеү.

**Егерме дүрт рәкем** — 24 ижек. Ҡулъяҙмаларҙа 2 строфа бер юлға һыйған (12-12 ижек).

**Емет** *т.* — ашамлыҡ.

**Ерҙә ҡорор ҡалмаһын** — Ерҙә буш тороп ҡалмаһын.

**Жаду** *ф.* — сихырсы, күрәҙәсе.

**Жарих** — яҙалаусы.

**Жиһан** *ф.* — йыһан, донъя.

**Жәйран** – көньяҡтың илек (ҡоралай) затлы кейеге.

**Заң** *бор. т.* — закон, ғөрөф-ғәҙәт, йола.

**Зариф** *ғ.* — ҡупшы, телгә оҫта.

**Заһи булды (заһир булды)** *ғ.* — нурланыу, асыҡ (билдәле булыу).

**Заһид** — донъя мәшәкәттәренән ваз кисеп, яңғыҙ йәшәүсе кеше, аскет.

**Зәғфрәндәй** *ғ.* **корсайҙы** — үҫемлектәй (гөл-сәскәләй) һулыны.

**Зәргәр** *ф.* — алтын-көмөштән төрлө нәмә эшләгән оҫта (зәркән).

**Иҡрар итергә** *ғ.* — таныуға, раҫларға, дөрөҫләргә, ҡеүәтләргә.

**Илдең** — халыҡтың.

**Илегеү** — кешегә эйәләшеү, яҡынайыу.

**Имәс** *т.* — түгел.

**Интизар** *ғ.* — зарығыу.

**Инәм беҙҙе күп күрҙе** — инәм мине артыҡ күрҙе.

**Иредеү** *каҙ.* — салыу, киҫеү. Муйыныма иридимәнегеҙ — муйынымдан салманығыҙ.

**Иркәк** — ата, ир, арлан зат (бында *егет* мәғәнәһендә).

**Иртәгеләрендә** — иртәктәрендә (эпостарында).

**Ир улъяға батырмы** *бор. т.* — ир малға (трофейға) ҡыҙығырмы.

**Ирәм бағы** — Ғат затлы ғәрәп ҡәүеме Йәннәткә оҡшатып ҡоролған мифик королма. Уны Аллаһы Тәғәлә емертә.

**Ирәмдең** — ихтимал, Ирәм бағы күҙ уңында тотолалыр.

**Исел** *каҙ.* — ҡыҙғаныс.

**Искәнйәр (Искәндәр)** — Александр Македонский (б. э. т. 356—323).

**Исраил** — пәйғәмбәр исеме.

**Исхаҡ** — Исхаҡ пәйғәмбәр.

**Йормаҡ тәңкә** — боронғо аҡса берәмеге.

**Йортон йыйғаны** — халҡын йыйғаны.

**Йорттан яҡшы таңлатып** — илйорттоң иң яҡшыһы, тип, таң ҡалдырып.

**Йофар** — хуш еҫле май (йәнлек майы).

**Йөрәгенде вифа ҡылманың** — йөрәгеңә тоғро булманың.

**Йәлил** *ғ.* — бөйөк, Алланың тукһан тугыҙ исеменең береһе — Жәлилүн-Яппар.

**Йәүһәре** *ғ.* — аҫыл ташы.

**Кабил мән һабил** — Аллаға ҡорбан килтергән ике ағай. Алла һабилдыҡын ғына ҡабул ҡыла. Кабил, көнләшеүҙән, уны үлтерә. Ҡар: Ҡөрьән-Кәрим. — 5: 27—35. Был сюжет «Ҡөрьән»гә «Тәүрат» менән «Инжил»дан күскән.

**Кенәһен алғыл** — үсен алһын.

**Кеше һалды** — белешергә кеше ебәрҙе.

**Киҙе** — ук ҡойроғонон керешкә терәлә торған уйымлы осо.

**Киҙәк** — нәүбәт.

**Киен** *т.* — «һуң», «буйынса», «арт» ише ярҙамсы һүҙҙәре урынына килә.

**Киен ҡайтты** — кире ҡайтып китте.

**Кик** *каҙ.* — үс.

**Килтә** — зарар; килтәсе — зарар килтереүсе.

**Кимпер** *каҙ.* — ҡортҡа, ҡарсыҡ.

**Кирәмәт (кирәмәт)** *ғ.* — мөғжизә.

**Китапты** — «Ҡөрьән Кәрим»де.

**Көндөң** — Ҡояштың.

**Көнлөктәй** — көнлөксө (тамаҡ ялына эшләүсе) кеүек.

**Көнөк** *бор. т.* — ҡатын ҡол, хеҙмәтсе.

**Көн** *бор. т.* — ҡол.

**Көрсиҙәр (көрси)** *ғ.* — ултырғыс, тәхеттәр.

**Күп илаҙы** — күптәр (халыҡ) иланы.

**Күп итте** — күп күрҙе, артыҡ күрҙе.

**Күп тубынан** — төркөмөнән.

**Күшә** *ф.* — урам.

**Кәбәс (Кабаз)** — тотоу, алыу.

**Кәнизәк** — гарем ҡыҙы.

**Ҡайтеп** *бор. т.* — ҡайһылай (нисек) итеп.

**Ҡалпағы бар башында** — башына бөркәнсек кейгән.

**Ҡандай** — ҡайһындай, ҡайһы тиклем.

**Ҡарағайлы ҡара урман үҫмәҫ ергә киткән** — ҡайтмаҫ ергә киткән, йәғни үлгән (һәләк булған).

**Ҡарауаш** *бор. т.* — хеҙмәтсе, ҡол ҡатын-ҡыҙ.

**Ҡари (ҡариә)** *ғ.* — Ҡөрьәнде яттан уҡый алыусы.

**Ҡары** *бор. т.* — ҡарт.

**Ҡарун** *ғ.* — легендар һаран.

**Ҡарыз** *ғ.* — үтескә алыу.

**Ҡарындаш ҡарындашҡа** — туған туғанына.

**Ҡасд** *ғ.* — яуыз ниәт.

**Ҡасыр** — ишәк менән йылҡы ҡауышыуынан хасил булған мал.

**Ҡасыуға яптыҡтарын ундашарҙы** *бор. т.* — ҡасыу өсөн кәрәк-ярағын әҙерләне (урынлаштырҙы).

**Ҡатил** *ғ.* — үлтереүсе, һәләк итеүсе (ҡар.: «Урал батыр» эпосы).

**Ҡояш ергә инеп бара** — «байый» мәғәнәһендә.

**Ҡуҙый** — ҡуй һарығының бәрәсе.

**Ҡул тирҙәрем** — ҡулымдын тиреләре.

**Ҡыйғас** — ҡабырсаҡ.

**Ҡырҡ аяты көндә** — Буҙйегеттең ҡырҡын уҡыткан көндө.

**Ҡәҙәм** *ғ.* — аяҡ. Ҡәҙәм баҫыу — аяғүрә баҫыу.

**Ҡәүм** *ҡ.* — 1. Ырыу, нәҫел, ҡәбилә, халыҡ (этнос); 2. Төркөм.

**Ҡәһәрмән менән Ғәли** — «Ҡаһарман Ҡатил» ҡиссаһынын геройы менән Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең кейәүе хәҙрәти Ғәли күҙ уңында тотола.

**Латифыраҡ** *ғ.* — рәхимлерәк, һөйкөмлөрәк.

**Малдан зәкәт бирмәгән** *ғ.* — Ислам дине буйынса, килемдең ҡырҡтан бере күләмендәге түләм (саҙаҡа).

**Малы һинән күп булған** — малы һинекенән күп булған.

**Мана тауы — (ман)** *ғ.* — тау (Тау тауы, изге тау).

**Масаһ** — аҡса бирәмеге.

**Мас егет** — шәп егет.

**Маһиржән** — күренекле йән (кеше).

**Мас ҡылдылар** — *иҫерттеләр* мәғәнәһендә.

**Машалла** *ғ.* — ниндәй шәп.

**Машох (машох ала)** — маша Алла.

**Мин киләмен ғәһетемдә** — антыма тоғро булып мин киләмен.

**Михрабында** — изге урында (мәсеттә мулла намаҙ, вәғәз уҡый торған урын).

**Миһман** *ф.* — ҡунаҡ.

**Миһырбаным** *ф.* — шәфҡәтлем.

**Мозарсың (мөзах)** — көлөү (мөҙаһиҙә — яҡлаусы, таяныс).

**Монсафитнә (монсыйфатнә)** *ғ.* — инсафлы рәүештә, ғәҙеллек менән.

**Моңлашырҙы** *бор. т.* — моңланыштылар.

**Мөрәүәтле** — игелекле, тәүфиҡлы.

**Мөстән аяҡ тултыртып** — берәҙектән һауыт тултыртып, йәғни һый әҙерләтеп.

**Муйындашып** — ҡосаҡлашып.

**Мула** *ҡаҙ.* — ҡәбер, кәшәнә.

**Мынса һаҡлап** — быға са һине көтөп тә.

**Мәғкүл күрһәң** *ғ.* — хуп күрһәң, оҡшатһаң, ҡеүәтләһәң.

**Мәғриб** *ғ.* — көнбайыш.

**Мәғсийәт** — гонаһ, яуыз эштәр.

**Мәжмүғ булды** — йыйылды.

**Мәйлең** *ғ.* — күңел ятышы, ирегең.

**Мәкам** — йәшәгән (торған) урын.

**Мәлик** *г.* — батша, солтан.
**Мәне** *т.* — асылы.
**Мәңге һыуы** — мәңге йәшәтеүсе тереһыу (йәншишмә).
**Мәржан** *т.* — ваҡ ынйы, мәрйен.
**Мәрүәрҙикәр рәхимә** — аҫыл таш.
**Мәрүәрид** *ф.* — ынйы.
**Мәслихәтле** *г.* — урынлы, ҡулай.
**Мәсүндәргә** — һаҡланған, тыныс, имен.
**Надир** *г.* — һирәк осрай торған, ғәҙәттән тыш.
**Назым аяны** *г.* — шиғыр әйтте.
**Найза (нәйзә)** *ф.* — һөңгө.
**Налиш** *ф.* — һыгыныу, үтенеп илау.
**Нан** — икмәк.
**Нар** — дөйә.
**Нимрут (Немрут)** — Ван күленең көнбайышындағы урын (бында уға исем биргән зат күҙ алдында тотолоуы ихтимал).
**Нитәйен** *бор. т.* — ни эшләтәйем.
**Ни хәсрәтең моҙарсың** — нишләй ҡайғынан.
**Нияз ҡылып әйтте** *ф.* — үтенеп әйтте.
**Нәби** *г.* — пәйғәмбәр.
**Нәғып, наҡып** — ни ҡылып.
**Нәзеркең** — нәҙерең (?).
**Нәкел әйләнде** — еткерҙе (әйтеп бирҙе).
**Нәмахәрәм** — хәрәм.
**Нәфҡә (нәфәка)** *г.* — йәшәү (көн итеү) өсөн кәрәк мал (ризыҡ).
**Нәһрел — ғойун** — шишмә башы.
**Обал** *бор. т.* — гонаһ.
**Олоном** — уланым.
**Өтрөк** *ҡаҙ.* — ялған.
**Пара-пара** *ф.* — киҫәк-киҫәк.
**Пол** *ф.* **пул** — аҡса. Бында табыш, килем мәғәнәһендә.
**Пот, санәм** — мәжүсиҙәргә табыныу предметы, һын, һүрәт, идол һ. б.
**Потхана** — пот ҡуйылған табыныу бүлмәһе.
**Рази була** *арх.* — риза була.

**Рисаләтең мөбәрәк булһын** *г.* — пәйғәмбәрлегең ҡотло булһын.
**Рисауа (рисвай) булырға** — фашланырға, мәсхәрәләнергә.
**Робағы вәзен** — дүрт юллыҡ шиғыр үлсәме. Рифмаһы — *аааб.*
**Рум** — Византия.
**Руми** — Византия кешеһе.
**Сабах** *г.* — иртә.
**Сайлау** *диал.* — биҙәү, матурлау.
**Сайран** — сәхрә.
**Сайыл (сайл)** *г.* — теләнсе.
**Саҡ** — 1. Аяҡ (һауыт, кубок); 2. Дәлил, факт.
**Саҡый** — аяҡсы (араҡы ҡойоп тороусы).
**Сасу** *ҡаҙ.* — аптырап ҡалыу.
**Сауға** *ҡаҙ.* — һунарҙан алып ҡайтып, бүләк итеп бирелгән йәнлек.
**Сахаба** *г.* — Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең үҙен күргән замандаштары.
**Сахан (сахен)** *г.* — асыҡ ер, сәхнә.
**Серт** *ҡаҙ.* — нәҙер, әйткән һүҙ, уй-теләк.
**Ситдыҡ** — тогро (Йософто маҡтаған һүҙҙәрҙең береһе).
**Собхан** — *Алла* мәғәнәһендә.
**Сөләймән** — Сөләймән пәйғәмбәр.
**Сур** — дини миф буйынса, заман ахыры көнөндә Исраил пәйғәмбәр ҡыскырта торған мөгөҙ (торба).
**Сүйтә дә** *ҡаҙ.* — шулай итһә лә.
**Сыҡмаҫ тур** — сығып булмаҫ сокор.
**Сыҡыл** *бор. т.* — рухи йәберләнеү; әхлаҡи тартыныу, оялыу.
**Сын хәкикәт йәр булһаң** — ысынлап һөйгән (яҙған) йәр булһаң.
**Сының мән** — *түбән зат* мәғәнәһендә.
**Сәбәп кенә** — дөрөҫөрәге, «һылтау ғына».
**Сәған** *бор. т.* — һиңә.
**Сәйет** — хаким.
**Сәли** — дөрөҫө: *сәүче.*
**Сәләмнамә** — сәләм хаты.
**Сән** *бор. т.* — һин.
**Сәнам** *ф.* — табыныу ташы (тораташ, һынташ).

**Сәргәрҙән** *ф.* — аптырап йөрөүсе, башы әйләнгән.

**Сәрүәрлек** *ф.* — башлыҡ булыу.

**Сәсә** *һөйл.* — сәнсә.

**Сәүче** *бор. т.* — «пәйғәмбәр» мәғәнәһендә.

**Сәхиб ямал** *ғ.* **сәхиб** — эйә, хужа; ямал (жәмал) — матурлыҡ, гүзәллек эйәһе.

**Сәхәп жәмлә** — матурлыҡ эйәһе.

**Сабит (Сабит)** — үҙ һүҙле, үҙ һүҙендә ныҡ тороусы.

**Табиб** *ғ.* — врач, доктор.

**Таҕ** *бор. т.* — тәхет.

**Тағи** — яуыз, деспот.

**Талаҡ** *ғ.* — ҡатын айырыу. Был һүҙҙе өс мәртәбә әйтһәң, ир менән ҡатын айырылышҡан, тип иҫәпләнә. Ир, иҫенә килеп, һүҙенән кире ҡайтырға теләһә, ҡатыны шуға риза булһа ла, улар еңел генә ҡушыла алмай: ҡатын тәүҙә, юрый ғына булһа ла, икенсе ир менән никахҡа инеп, уның менән өс көн тороп, унан талаҡ алырға тейеш була. Шунан әүәлге ире, бөтә йолаһына килтереп, әйттереп, никах уҡытҡас ҡына, бергә йәшәү мөмкин була.

**Талиғашиҡ баллардан** — ғашиҡ балаларҙан.

**Там** *т.* — ҡәбер өҫтөндә эшләнгән королма, кәшәнә.

**Тануҡ** — шаһит, күреүсе.

**Тар билғау** — мәжүси һәм христиандар бәйләй торған махсус билғау.

**Таяғынды ҡулға алып** — таяҡ таянып (йәғни ҡыҙҙы эҙләргә оҙон юлға сығырға).

**Теркәү ҡылса** *бор. т.* — яуап көнө етһә.

**Тик (тикле)** — затлы.

**Тикһеҙ** — затһыҙ.

**Торғанға йәр табылыр** — ғүмере барға йәр табылыу.

**Торҡа** — 1. Тоҡ; 2. Шлем.

**Тош булдыҡ** — осраныҡ, юлыҡтыҡ.

**Төмән** — ун мең.

**Төңкәре (разый) булмасмын** — һис ҡасан риза булмам.

**Туҙахта** — тамуҡта.

**Тулған Ай тик** — тулған Айҙай.

**Тун** — гөмүмән, өҫ кейеме.

**Түш булып** — хужа булып.

**Тәгбир** — төш юрау, күрәҙәселек.

**Тәдбир** *ғ.* — тейешле сара.

**Тәжир** — сауҙагәр.

**Тәкбир** *ғ.* — ололау.

**Тәҡсир** *ғ.* — ололап өндәшеү һүҙе.

**Тәҡуа** *ғ.* — дин ҡушҡанды ғына эшләү, диндар булыу.

**Тәфсир** — Ҡөрьәнгә шәрех (комментарий).

**Тәфсирсе** — Ҡөрьәнде шәрехләүсе.

**Уған** *бор. т.* — *уға табан* тигәндең ҡыҫҡартылмышы.

**Ундашаҙы** — аңлашылды(?).

**Утау** *ҡаҙ.* — яңы айырылып сыҡҡан ғаилә (ул менән килен) өсөн ҡоролған тирмә.

**Үлем йырын йырлай** — һыктай.

**Фани (донъя)** — ялған донъя, йәгни был донъя.

**Фазыл** *ғ.* — өҫтөнлөк, инсафлы, намыҫлы, иң һәйбәт.

**Фасылына** *ғ.* — бүлегенә.

**Фиҙа ҡылдым** *ғ.* — ҡорбан иттем.

**Фытыр** — ураҙанан һун бирелә торған саҙаҡа (хәйер).

**Фәҙәттә эш** — *хәрәм эш* мәғәнәһендә.

**Фәрғ** *ғ.* — бушлыҡ, иркенлек.

**Фәрит** — тиндәшһеҙ, берҙән-бер.

**Фәтә** *ғ.* — фатиха (доға ҡылыу, ризалыҡ биреү) һүҙенең ҡыҫҡартып әйтелеше.

**Хазинадар** — хазина башлығы (ҡаҙна эйәһе).

**Хазир** *ғ.* — күҙ алдында тороусы.

**Хаин** — һатлыҡ.

**Хайран башын хур итеп** — түбәнселеккә төшөп.

**Хаҡ бәндәсе** — Алла бәндәһе.

**Хаҡ дидәрен** — Алланың йөҙөн.

**Хаҡҡа** — Хаҡ тәғәлә, Аллаға.

**Хаҡтан билге алғанмын** — Аллаһы тәғәлә тарафынан тамғаланғанмын.

**Хаҡтан теләйем** — Аллаһы тәғәләнән теләйем.

**Хаҡ тәғәлә** *ғ.* — Алла.

**Ханым** — ханбикә, хан бисәһе.

**Ханымға** — хан ҡатынына.

**Ханыма** — хан ҡатыны.

**Ханымы** — хан ҡатыны.

**Ходая** *ғ.* — эй, хоҙай!

**Хозурынызға** — янығыҙға.

**Хөзәүәннә (хөзәүәнзин)** — Хоҙай.

**Хөллә** — елән кеүек кейем.

**Хөрмәткәр** — хөрмәт (ҡунаҡ) күрһәтеүсе (итеүсе).

**Хәбиб** — яратҡан, һөйгән.

**Хәлил** *ғ.* — яҡын, ысын дуҫ.

**Хәрәм** — *гарем* мәғәнәһендә.

**Хәсис мәлғүн** *ғ.* — ерәнгес шайтан.

**Хәтимә** *ғ.* — ахыр, эпилог.

**Һаба** — һауыт.

**Һаҙә китаб Йософ Ғәлиәссәләм** — был Йософ Ғәлиәссәләм (Йософ пәйғәмбәр) китабы (булыр).

**Һануз (һәнүз)** *ф.* — әле һаман, әле лә, һаман да.

**Һауыт-саҡ** — яу кейеме (?).

**Һине бында яратты** — Аллаһы тәғәлә һине бында бар итте (донъяға килтерҙе).

**Һис тә миңә яҡмайҙы** — һис тә миңә оҡшамай.

**Һөйгәненә бирһен ул** — үҙе кемгә теләй, шуға бирһен.

**Һулыу** *һөйл.* — һулыш, тын алыш.

**Һәза (л)** *ғ.* — был.

**Чар** *ғ.* — дүрт.

**Шан ҡапҡаһынан** *ф.* — Сирия (Дамаск) ҡалаһынан.

**Ширләү** *ҡаҙ.* **(шир** — ҡайғы, **ширләйен** — ҡайғырайым, ҡайғы йырын йырлайым) — ҡайғырыу.

**Шөйлә** — ап-аруҡ.

**Шул хәҙәре** — шул сәғәте.

**Шундиҡ** *бор. т.* — шундай уҡ.

**Шәриф** — затлы, лайыҡлы, оло дәрәжәле.

**Шәриф ҡол** *ғ.* — ҡәҙерле, иғтибарлы, ҡәҙерләүгә лайыҡ.

**Шәфәғәтле** — шәфҡәтле.

**Шәһәри Бостан** *ғ.* — баҡса-шәһәр.

**Шәһәрстан** — ҡала (ҡәлғә).

**Ырҡан утым** — яҡынса: текән төшкән ут (*ут* — *үлән* мәғәнәһен биреүе лә ихтимал).

**Эй, дая** — эй бағымсы (няня).

**Эй дәриға!** — Эй ҡыҙғаныс!

**Әкәм** *ҡаҙ.* — әсәм.

**Әкә-шәшәм** — ата-әсәм.

**Әлбиҙаҡ** *ғ.* — хуш бул.

**Әлүидағ (әлбиҙаҡ)** *ғ.* — хуш, бәхил бул.

**Ййҙаҡлы** — эйәрһеҙ ат менгән кеше (?).

**Яҡмайҙы** — оҡшамай.

**Яҡмасы** — ғәйепләмә, һылтанма.

**Яҡшы ҡыҙлар** — хур ҡыҙҙары.

**Ялғандан** — ялған (фани) донъянан.

**Ялғызин** — берҙән-берен.

**Ямалыңа** *ғ.* — матурыңа, һылыуыңа.

**Ямантайланған** *һөйл.* — ямаҡайланған, бында: төҫө насарайған.

**Яман юлға гиз булдыҡ** — яман юлға юлыҡтыҡ.

**Яман юлдаш** — бик шәп юлдаш (сағ.: яман яҡшы — бик яҡшы).

**Янған уттың** — тамуҡтың.

**Янул үлмәк иткәндәй** — йәнә үлмәҫтәй булып.

**Яңғыҙынан** — берҙән-беренән.

**Япмасы** — һылтама, япһарма.

**Яптыҡ** *бор. т.* — кәрәк-яраҡ.

**Ярлыҡ ҡылды** – фарман бирҙе, бойорҙо.

**Яр-яр әйтеп** — туйҙа әйтелә торған тәбрикләү һүҙе.

**Ятыпты таҡ өҫтөндә** — тәхет өҫтөндә яталыр.

**Яуҙа алған бөйөмөн** — яуҙа өлгәшкәнен (күрһәткән булдыҡлылығын).

# ҠИССА ҺӘМ ДАСТАНДАРҘЫҢ КӨЙ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Дастан шиғыры мотлаҡ көйләп башҡарыла. Үткән быуаттарҙа башҡорттар был жанр өлгөләрен думбыра сиртеп йә ҡыл-ҡумыҙҙа уйнап һәм бер үк ваҡытта үҙҙәре көйләп-һамаҡлап ултырып башҡарыр булғандар.

Бындай традиция Урта Азия һәм Алғы Азия халыҡтарында әле лә күҙәтелә. Башҡорттарҙа, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡобайырҙарҙы һәм дастандарҙы думбыра сиртеп һамаҡлап башҡарыу ысулы (манераһы) байтаҡ дәүергә туҡталып, тыйылып ҡала. Уҙған йөҙйыллыҡтың 80-се йылдарында был сәнғәт ҡайтанан аяҡҡа баҫтырыла башланы. Һүнеп ҡала яҙған ошо изге традицияны, яңынан тергеҙеп, халыҡҡа кире ҡайтарыу бурысын Башҡортостан радиоһы, телевидениеһы, сәнғәт училищеһы менән сәнғәт институты һәм фольклорсы ғалимдар үтәне.

Был китапҡа ингән дастандарҙың көй өлгөләре бөртөкләп йыйылған. Әҫәрҙәр оло йәштәге башҡарыусыларҙан яҙып алынған. Дастандарҙың көйләп башҡарыла торған өлөштәрен улар *һамаҡ* тип йөрөтәләр. Оҙон көйҙән айырмалы рәүештә, һамаҡ һуҙып йырланмай, ә шиғырҙың ритмик төҙөлөшөнә буйһоноп көйләп әйтелә. Бындай ысул әҫәрҙең йөкмәткеһен тәрәнерәк асыу, уны төрлөләндереү маҡсатында ҡулланыла. Әлбиттә, һамаҡлау ысулының башҡа төрлө вазифаһы ла бар, тик әлегә беҙ үрҙә килтерелгән көйҙәрҙең ритмик үҙенсәлектәренә генә туҡталып үтәйек.

**«Йософ менән Зөләйха»** ҡиссаһының бөтә варианттары ла ун бер, ун ике ижекле дүртәр юллыҡ строфанан төҙөлгән. Һәр ижеккә бер-ике генә нота тап килә, һәм улары ла һуҙып йырланмай, ә һигеҙле йә дүртле нота үлсәме менән һамаҡлана. Һамаҡтың көйө ике фразанан тора. Уның беренсеһе шиғырҙың тәүге ике юлына, икенсеһе һуңғы ике юлға ҡушылып башҡарыла. Һамаҡтың тауыш киңлеге (диапазоны) бер октава тәшкил итә, һәм ул пентатоник лад өндәре сифатында яңғыраш ала.

Ябай һәм яғымлы булыуы арҡаһында, «Йософ менән Зөләйха» һамағы (көйө) халыҡ араһында киң таралған. Был көй тәьҫирендә бик күп бәйеттәр ижад ителгән, ә һуңғы йылдарҙа йырҙар ҙа сығарыла.

Был китапта **«Таһир менән Зөһрә»** дастанының көйө өс вариантта бирелде. Уның беренсеһе, һамаҡлап әйтелһә лә, киң диапазонда һәм һуҙынҡы темпта башҡарыла. Был көйҙәрҙең үҙенсәлектәре, асылда, шиғыр строфаһының ишле юлдар менән түгел, ә тиррада рәүешендәге төҙөлөшөнән килә. Мәҫәлән, әгәр строфа биш юлдан торһа, уның тәүге өс юлы һамаҡтың

(көйҙөң) беренсе фразаһында әйтелә, ә ҡалған ике юлы көйҙөң икенсе фразаһына ҡушып башҡарыла. Әгәр ҙә поэтик строфа алты йә ете юлдан төҙөлһә, көйҙөң беренсе фразаһы, күп тапҡыр ҡабатланып, тик һуңғы ике юлы ғына көйҙөң икенсе яртыһына тура килтереп һамаҡлана.

«Таһир менән Зөһрә» һамағының икенсе варианты тар диапазонлы көйгә һамаҡлана, уны башҡарғанда көй һәр шиғри строфа һайын үҙгәреп ҡабатлана. Көйҙөң ритмикаһына һигеҙле ноталарҙың ҡабатланып килеүе хас. Оҙон ритмлы ноталар — фраза аҙағында, тын алыш пауза менән теүәлләнә.

Дастандың өсөнсө һамағы көйләп, йырлап башҡарыу өсөн ҡулай. Был көйгә бәйет, мөнәжәттәр ижад ителә һәм башҡарыла. Ғөмүмән, «Таһир менән Зөһрә» дастаны башҡорт халыҡ ижадында төплө урын алған әҫәр. Ул йәштәр өсөн мөхәббәт доғаһы хеҙмәтен үтәй. Уның тәьҫирендә лирик йырҙар ижад ителә һәм тиҙ арала халыҡ араһында таралып китә.

**«Буҙйегет»** дастанының һамаҡтары биш вариантта бирелде. Уларҙың да ҡабатланмаҫ үҙенсәлектәре бар. Мәҫәлән, беренсе һәм дүртенсе һамаҡтың строфаларын етешәр ижекле дүрт юллыҡтар тәшкил итә һәм, көйләп башҡарғанда, уларҙың айырмалыҡтары аныҡ һиҙелә: беренсе вариантта ике фразалы көй шиғырҙың ике юлы менән теүәлләнә, ә дүртенсе вариантта һәр дүрт юлға дүрт фраза көй тура килә. Икенсе һәм өсөнсө варианттарҙа көй фразалары шиғыр юлдары һайын үҙгәреп ҡабатлана. Көйҙәрҙең ритмы *синкопа һәм ямбик баҫымға* ҡоролған. Уларҙың интонацияһы боронғо туй йолаһы сеңләүҙәренә оҡшаш.

Ҡисса һәм дастандарҙың көй өлгөләренә байҡау яһағанда, уларҙың бик боронғо дәүерҙәрҙән бирле һаҡланып килгәнлектәренә төшөнөргә була. Улар халыҡ ижадының баһалап бөткөһөҙ алтын фондын тәшкил итә. Китапта килтерелгән материалдар дастандарҙы театралләштереп башҡарыу мөмкин булыуы тураһында һөйләй.

*РИФ СӨЛӘЙМӘНОВ.*

# ҠИССА ҺӘМ ДАСТАНДАРҘЫҢ КӨЙ ҮРНӘКТӘРЕ

## 1. ЙОСОФ МЕНӘН ЗӨЛӘЙХА

*(1 вариант)*

**Умеренно скоро** ♩=72




Бәйғәмбәрлек, нәбилек һин аласаҡһың,
Һәммә мөлкәт эйәһе һин буласаҡһың.
Рәхәтлектәр һөйөнөсө аласаҡһың,
Был төшөндә бөйөк дәүләт күренә инде.

Ләкин һинә аманат шул, йәнем, уғлым:
Был төшөндө берәүгә лә әйтмә һин, бел.
Ҡешеләрҙең көнләшеүенән нык һаҡлан,
Кешегә гел шайтан дошман булыр инде.

Һис кәрәкмәҫ серҙәреңдең сиселеүе,
Ҡәрҙәштәрең төш мәғәнәһен һиҙенеүе.
Көнсөллөктән арағыҙҙың өҙөлөүе, —
Баштан уҡ бел — беҙгә михнәт була инде.

Яҡуптың бар ине тағы үгәй ҡыҙы,
Ҡолағына ишетелде былар һүҙе.
Эләксенән һаҡлай күрһен Хоҙай үҙе,
Ҡәрҙәштәрен ҡотортоп ул әйтте инде.

## 2. ЙОСОФ МЕНӘН ЗӨЛӘЙХА

*(2 вариант)*




Йософ килеп уға ҡамсыһын һондо,
Зөләйха ҡамсыға өрөп кире бирҙе.
Ҡамсыға ут ҡабынғанын Йософ күрҙе,
Ҡамсы янып, Йософ ҡулын беш(е)рер инде.

Йософ, бәғрем, күрҙеңме һин, аңланыңмы?
Ҡамсыға ут ҡабынғанға таң ҡалдыңмы?
Ҡулынды бешергәнгә түҙә алдыңмы?
Ул ут мине ҡырҡ йыл буйы көйҙ(ө)рә инде.

## 3. ЙОСОФ ВӘ ЗӨЛӘЙХА

*(3 вариант)*




Йософ: «Йә, Зөләйха, ҡайҙа һинең дан һәм малың,
Зифа буйың, оҙон сәсең, хупъямалың*,

---

* Хупъямал (*фарсы, ғәр.*) — хуп (яҡшы, гүзәл, күркәм); ямал (матур).

Тулған айҙай балҡып торған йөҙ нурҙарың —
Нисек итеп был хәлдәргә төштөң инде?»

Зөләйха: «Йософ бәғерем, яным, малым-затым бирҙем,
Һинең өсөн һәммәһен дә фиҙа ҡылдым,
Бәхетемдән, тәхетемдән айырылдым —
Һинең ғишҡың шундай тәьҫир итте имде!»

Йософ: «Зөләйха, әгәр сынлап ғашиҡ булһаң,
Ғишыҡлыҡҡа тоғролоғоң һаҡлай алһаң,
Ғишығыңды аңлатырға дәгүә ҡылһаң,
Был дәғүәгә берәр дәлил кәрәк имде».

Зөләйха: «Йософ йәнем, якын килсе һин яныма,
Рәхим итеп, был ҡамсыңды бир ҡулыма,
Ғашиҡ булһам, ул күрһәтер быны һиңә —
Күрһәтмәһә, дәғүәм ялған булыр ине».

## 4. ЗӨЛӘЙХАНЫҢ ЙОСОФҠА ӘЙТКӘНЕ




Ай шикелле һинең ҡыйгас ҡаштарың бар,
Ынйыға тиңләрлек һинең тештәрен бар,
Йылҡылдаған йофар кеүек сәстәрең бар —
Үрергә үҙ ҡулым менән лайыҡ инде.

Ғәжәп матур ҡара бөҙрә сәстәрең бар,
Балдан татлы, мөрәүәтле һүҙҙәрең бар,
Ҡараш һалһаң, диләфрүздәй күҙҙәрең бар,
Керпектәрең йөрәгемде тишер инде.

Һүҙең татлы, телең йомшаҡ, һүҙҙәрең үҙ,
Буйың зифа, йөрөшөң яҡшы, һындарың төҙ.

Ғәжәйеп килешле баш, ул нурлы йөҙ —
Хоҙай үҙе һиңә бүләк ҡылмыш инде.

Аҫыл яҡутҡа тиң һинен яңаҡтарың,
Йәш алманан нәфисерәк эйәктәрең,
Бал-шәкәрҙән татлыраҡтыр ирендәрең —
Ҡулың йылыһы күңелемде иретер инде.

Яңы ҡалҡҡан тал сыбыҡтай бармаҡтарың,
Ынйы-мәрмәрҙән теҙелгән тырнаҡтарың,
Ҡамфорд ағасынан артығыраҡ беләктәрең,
Ҡулдарың ебәктәрҙән йомшаҡ иде.

Хәҡиҡәт: һин ирекһеҙ иттең мине,
Эй, хоҙайым, ҡасан була ҡауышыу көнө?
Көн дә, көн дә күрә торғас, Йософ, һине, —
Йә, Йософ, һүҙҙәрең хуш, үҙең ғәрле,
Һис кемдең күргәне юҡ һиндәй йәрҙе, —
Әҙәмиҙән тыумыш тәүге һиндәй нурлы,
Әсәләрҙән һинең кеүек тыумаҫ инде!

## 5. ТАҺИР МЕНӘН ЗӨҺРӘ

*(1 вариант)*




Таһир йәнем, хуш инде,
Хызыр булһын юлдашың,
Былбыл булһын моңдашың,
Был донъя михнәтенә
Хур булмаһын ир башың.

Таһир йәнем, хуш инде,
Ҡайғыларҙан китәһең,
Зар ҡылған Зөһ(ө)рәне
Кемгә ҡалдырып китәһең?

# 6. ТАҺИР МЕНӘН ЗӨҺРӘ

*(2 вариант)*

**Умеренно скоро**




Күп карауандар килеп тә(ү),
Күп сатырҙар төҙөп тә(ү),
Мин Зөһ(ө)рәмдән ай(ы)рылып,
Бында ин-зар булып та(у).

Егет ин-зар итмәңгеҙ,
Һөйөнөстәр бирәбеҙ.
Юлда ос(о)рап күрҙем мин,
Сәләм, тине Зөһ(ө)рәңгеҙ

Таһир, төшөң ҡара икән,
Мөшкөл эшең бар икәң.
Ғәрип башың ҡайғыһын,
Күрер көнөң бар икән.

Күргән әҙәм дошман ул,
Арабыҙға төшкән ул.
Икебеҙҙе күҙәтеп,
Күп серҙәрҙе сискән ул.

Арғымаҡҡа менерһең,
Күп ерҙәрҙе үтерһең.
Ғишыҡ-йәрең Зөһрәне
Кемгә ҡуйып китерһең.

Һинһеҙ эскән аштарым,
Ҡыҙыл ҡанға оҡшай ҙа(у),
Яҡты көндә йөрөгәнем,
Ҡараңғы төнгә оҡшай ҙа(у).

*Зөһрә үҙ атаһына ошондай һүҙҙәр әйтә:*

Миңә һалған һарайың —
Эсенә ут яҡ инде.
Ялҡылдатып, яндырып,
Бер ҡыҙынып ҡал инде.

*Ҡарағол Таһир менән Зөһрә араһында дошман булып йөрөй. Ул Зөһрәнең әсәһенә әйтә:*

Шаһизадалар килмәйме,
Ханзадалар килмәйме?
Ете ожмахтың нурындай,
Нур-егеттәр килмәйме?

Ай-аймандай үҙенде,
Йәндәй күргән ҡыҙыңды,
Хөрмәтләгән Таһирың
Аҙғындырҙы ҡыҙыңды.

## 7. ТАҺИР МЕНӘН ЗӨҺРӘ

*(3 вариант)*




Таһир һамаҡлай:
— Аҡҡош күрһәң, атып ал,
Былбыл күрһәң, һатып ал.
Таһир йәнең килде бит, —
Тәҙ(е)рәнән тартып ал.

Күп карауандар килеп тә,
Күк сатырҙар ҡороп та.
Мин Зөһрәмдән айырылып,
Бында ин-зар булып та.

Һине һөйәм, Зөһ(ө)рә,
Һине һөйәм үлгәнсе,
Ризык бөтөп, тәкдир етеп,
Ҡара гүргә кергәнсе.

Зөһрә һамаҡлай:
Арғымаҡҡа менерһең,
Күп ерҙәрҙе үтерһең.
Ғашиҡ йәрең Зөһ(ө)рәне
Ҡемгә ҡуйып китерһең?

Таһир, йәнем, хуш инде,
Хыҙыр булһын юлдашың.
Был донъя михнәттәренән
Хур булмаһын ир башың.

Ғашиҡ булдым мин һиңә,
Ғашиҡ булдым ғүмергә.
Насип булһын икебеҙгә
Гүргә бергә керергә.

## 8. БУҘЙЕГЕТ

*(1 вариант)*

**Умеренно скоро**




Килсе, дуҫым, янымa,
Васыятым әйтәйем,
Атам менән инәмә
Сәләмемде әйтәйем:

Атам-инәм зар булһа,
Сабыр ҡыл, тип әйтә күр!
Килгән ахыр көндәре,
Сабыр кыл, тип әйтә күр!

## 9. БУҘЪЕГЕТ

*(2 вариант)*

**Умеренно скоро**




Һыйыр килеп мөңрәһә,
Быҙауы уның бар микән?
Быҙау күҙле Буҙъегет
Был уйында бар микән?
Ҡуйҙар килеп баҡырһа,
Ҡуҙы уның бар микән?

Ҡуҙлы күҙле Буҙъегет
Был уйында бар микән?

Былбыл ҡоштар һайрайҙыр,
Ҡыҙыл гөлө юҡ микән?
Ҡыҙыл йөҙлө Буҙъегет
Был уйында юҡ микән?

## 10. БУҘЙЕГЕТ

*(3 вариант)*




Дүрт йыл булды юлында
Хайран булып йөрөп мин;
Даръя кисеп, тау үтеп,
Күрмәгәнде күрҙем мин.
Табандарым уйылып,
Ҡулым тирем һуйылып,
Дәүләт бағым юйылып,
Зар сәргәрҙан булдым мин.

Атамды мин күрмәнем,
Анамды мин күрмәнем.
Өйҙә ғүмер һөрмәнем,
Бер һин өсөн йөр(ө)нөм мин.

Һине эҙләп йөр(ө)гәнмен,
Буйың төштә күргәнмен,
Йәнем ҡорбан ҡылғанмын,
Рәхим итһәң кәрәкте.

Зәғфрандай һулығанмын,
Өс йыл тотҡон булғанмын.
Йөҙөң күрер көн булһа,
Ни булһам да булғанмын.

Миһман булып килеп мин,
Хайран булып йөрөп мин.
Нурың төштә күреп мин,
Рәхим итһәң кәрәкте.

Атым минең — Буҙйегет,
Ҡашымда бар дуҫ егет,
Бер ҡайғылы хуш егет,
Рәхим әйтһәң кәрәкте.

Сын хәҡиҡәт йәр булһаң,
Өйгә керһәм кәрәкте.
Йәнем һөйгән яныйым,
Йөҙөң күрһәң кәрәкте.

## 11. БУҘЙЕГЕТ

*(4 вариант)*



Мәслихәтле йән дуҫтым,
Аҡыл тапмай булдым зар.
Мәхкүр күрһәң, йән дуҫтым,
Сәфәр сығар уйым бар.

Китмәҫ бәләгә юлыҡтым,
Дарманым юҡ, йән дуҫтым.
Уны эҙләп үлһәм дә,
Арманым юҡ, йән дуҫтым.

Бер йыл булды янғаным,
Был ҡайғыға ҡалғаным.
Унан башҡа уйым юҡ,
Күңелем уға һалғаным.

Юлдашым юҡ әйтергә,
Дарманым юҡ китергә.
Йән-юлдашым, һин үҙең,
Ҡыймай йөрөнөм әйтергә.

## 12. БУҘЙЕГЕТ

*(5 вариант)*



# ҠИССА ҺӘМ ДАСТАН КӨЙҘӘРЕНӘ АҢЛАТМА

1. **Йософ менән Зөләйха.** 1991 йылда Ғафури районы Ҡурғашлы ауылы Рәкиә Ғәзизова башкарыуында (1928 йылда тыуған) музыка белгесе Риф Сөләймәнов яҙып алған һәм нотаға һалған[1].

2. **Йософ менән Зөләйха** *(2 вариант)*. 1985 йылда Учалы районы Ҡаранйылға ауылы Мөслимә Вәлиева башҡарыуында Зәйтүнә Шәрипова магнитофон таҫмаһына яҙып алған. Әҫәрҙең көйөн музыка белгесе Риф Сөләймәнов нотаға һалған.

3. **Йософ менән Зөләйха** *(3 вариант)*. 1973 йылда Саратов өлкәһе Перелюб районы Ҡатай (Ҡочумбет) ауылы Хәтизә Аллаярованан Риф Сөләймәнов яҙып алған һәм нотаға һалған.

4. **Зөләйханың Йософҡа һамаҡлап әйткәне.** 1970 йылда Силәбе өлкәһенең Миәс ҡалаһында Хәҙисә Күсәбаеванан (1902 йылда Учалы районында тыуған) Әхнәф Харисов магнитофон таҫмаһына яҙып алған. Әҫәрҙең көйөн музыка белгесе Фатима Фәйезова нотаға һалған.

5. **Таһир менән Зөһрә.** 1973 йылда Хәтизә Аллаярованан Риф Сөләймәнов яҙып алған һәм нотаға (3-сө аңлатманы ҡарағыҙ) һалған.

6. **Таһир менән Зөһрә** *(2 вариант)*. 1990 йылда Әбйәлил районы Булат ауылы Алсаф Әбделмәнованан (1925 йылда тыуған) Риф Сөләймәнов яҙып алған һәм нотаға һалған.

7. **Таһир менән Зөһрә** *(3 вариант)*. 1986 йылда Салауат районы Шәрәк ауылы Мәфрүзә Тәфкәлимованан (1920 йылда тыуған) Риф Сөләймәнов яҙып алған һәм нотаға һалған.

8. **Буҙйегет.** 1973 йылда Хәтизә Аллаярованан Риф Сөләймәнов яҙып алған һәм нотаға һалған (3-сө аңлатманы ҡарағыҙ).

9. **Буҙъегет** *(2 вариант)*. 1973 йылда Хәтизә Аллаярованан Риф Сөләймәнов яҙып алған һәм нотаға һалған (3-сө аңлатманы ҡарағыҙ).

10. **Буҙйегет** *(3 вариант)*. 1985 йылда Мөслимә Вәлиеванан яҙып алынған (2-се аңлатманы ҡарағыҙ).

11. **Буҙйегет** *(4 вариант)*. 1977 йылда Баймаҡ районы Манһар ауылы Минниямал Идрисованан (1933 йылғы) Айрат Ҡобағошов яҙып алған һәм нотаға һалған.

12. **Буҙйегет** *(5 вариант)*. 1964 йылда Әлшәй районы Буранғол ауылы Ғәйшә Ҡотлогилдинанан Ниғмәт Шоңҡаров магнитофон таҫмаһына яҙып алған. Көйҙө композитор Камил Рәхимов нотаға һалған.

---

[1] Бында килтерелгән ҡисса һәм дастандарҙың көйҙәре айырым китапта баҫылып сыҡҡан. Ҡарағыҙ: Башҡорт халыҡ музыка сәнғәте: 1-се том. Эпик йырҙар һәм көйҙәр. // Төҙ., баш һүҙ һәм аңлатмалар авт. Р. С. Сөләймәнов; Яуаплы мөхәрр. Фәнүзә Нәҙершина — Өфө: Китап, 2001, 55—65-се б.

# ҺЫҒЫМТА

Ил эсендә дан алған шәхестәренә башҡорт борон-борондан ҡытлыҡ кисермәгән. X быуат тирәһендә исламды ҡабул иткәс, ғилем эстәп, сит илдәргә китеү гәҙәте ингән. Тарихи Башҡортостандың географик урыны ата-бабаларыбыҙҙың Ватаны иҫәпләнгән, тарих атаһы Геродот Рифей тауы тип телгә алған Урал тауы Евразияның умыртҡаһын хасил итеүе, уның Бөйөк Ебәк юлынан ситтә ятмауы уға һуғылып үтеүселәрҙе, ҡыҙығыусыларҙы ла, яңы ил тип таныл, шунда төйәкләнеп ҡалыусыларҙы ла ишәйткән. Шул сәбәптән, шулай уҡ байтаҡ ырыу, ҡәбиләләрҙең Урта Азия тараф-тарынан күсеп килеп, башҡорт милләтенә нигеҙ ташы булырҙай абориген-дар менән ассимиляциялашыуҙары һөҙөмтәһендә, «күсеп йөрөүсе сюжеттар» рәүешендә лә, махсус рәүештә «үтескә алыу» һөҙөмтәһендә лә, этногенез тарихына бәйле килеш тә сит тупраҡта яралған һәм урындағы халыҡ теленә ят булған *ҡисса, дастан* тигән атамалар менән нарыҡланған эпик әҫәрҙәр башҡорт халҡының ауыҙ-тел репертуарына килеп инә. Ихтимал, тамыры Ассирия-Вавилонияға олғашҡан, аҙаҡ «Тәүрат»ҡа, торараҡ «Ҡөрьән Ҡәрим»гә индерелгән, халыҡ-ара сюжет күрһәткестәрендә «Йософ сюжеты», «Иосиф Прекрасный» тип йөрөтөлгән сюжетҡа нигеҙләнеп, төрки донъяһында өр-яңы поэма «Йософ сәүчә ҡиссаһы»н ижад иткән Әйле башҡорто Ҡол Ғәли (XIII б.) кеүек, ул «килмешәк» сюжеттарҙың башҡаларына ла яңы әҫәр яҙыусылар, яҙмаһалар, телдән ижад итеүселәр булғандыр. Һәр хәлдә, ошо томға индерелгән «Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһының да, «Буҙйегет», «Таһир менән Зөһрә», «Сәйфелмөлөк» дастандарының да башҡорт башҡарыусыларынан яҙып алынғандарының варианттары менән версияларының күп төрлөлөгө, халыҡ араһында уларҙың төп ҡаһармандарын ғашиҡлыҡ өлгөһө, тоғролоҡ, саф мөхәббәт символы итеп идеаллаштырыусы йыр, бәйеттәр таралыуы ят сюжеттарҙың яңы урынды ятһырамауҙары, урындағы халыҡтың уларҙы, ятһынмай, ижади ҡабул итеүҙәре хаҡында һөйләй. Инеш мәҡәлә (Н. Т. Зарипов) шул турала башлаған әңгәмәне һүҙ ахыры (Ә. М. Сөләймәнов) башҡорт фольклоры репертуары тарафынан үҙләштерелгән ҡисса, дастандарҙың милли эпос традициялары менән бәйләнешкә инеп, яңы этно-географик мөхиткә адаптациялаыыу шарттары һәм һөҙөмтәләре юҫығында ослап ҡуя. Томға ингән «Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһы менән «Буҙйегет», «Таһир менән Зөһрә», «Сәйфелмөлөк» дастандарының варианттары шул үҙенсәлектәрҙе һәйбәт иллюстрациялай.

# РЕЗЮМЕ

Башкирский народ издавна славился личностями, которые были известны не только на своей Родине, но и за ее пределами. Со времен принятия ислама (около X века) многих башкир привлекали культура и быт восточных стран. Уральские горы, признаваемые всеми хребтом Евразии и простирающиеся недалеко от всемирноизвестного Шелкового пути, с давних пор притягивали к себе внимание и друзей, и врагов, среди которых было немало людей, пожелавших обосноваться здесь. Целые роды и племена или отдельные их группы переселялись из Средней Азии и нашли новую родину на Урале, чтобы в дальнейшем быть ассимилированными аборигенами, представляющими собой зачатки нации, которая позже стала известна под этнонимом *«башкорт»*. Поэтому в устно-поэтический репертуар последней стали проникать эпические сюжеты, имеющие чуждые для аборигенов жанровые обозначения *«кисса»* и *«дастаны»*. Вполне возможно, что, подобно выходцу башкирского племени Айли средневековому поэту Кул Гали (XIII в.), создавшему поэму «Кисса-и Юсуф» на библейский сюжет, чьи мотивы нашли отражение и в «Коран-Кариме», поэму, один из вариантов которой включен в данный том, существовали народные таланты, слагавшие устно или написавшие аналогичные произведения на сюжеты других, заимствованных с Востока кисс и дастанов. Об этом свидетельствует обилие многообразных вариантов и версий не только киссы «Юсуф и Зулейха», но и дастанов «Бузъегет», «Тагир и Зухра», «Сайфульмулюк», помещенных в данный том, а также то, что народ стал воспевать их героев в своих песнях и баитах, как настоящих идеалов любви и верности. Последнее лишний раз доказывает, что заимствованные когда-то сюжеты в новой этнической среде нашли ту почву, которая дала им возможность обрести новую жизнь. В вариантах и версиях кисс и дастанов, записанных среди башкир, выделяются особые художественные и содержательные качества, не присущие для их среднеазиатских аналогов. Эти выводы, сделанные Н. Т. Зариповым в предисловии к тому, развиты в послесловии (А. М. Сулейманов), где данный вопрос освещается в аспекте взаимовлияния этих заимствованных сюжетов с собственно башкирскими эпическими памятниками и адаптации их к новым этно-географическим условиям. Варианты и версии киссы о Юсуфе (или об Иосифе Прекрасном) и дастанов «Бузъегет», «Тагир и Зугра», а также «Сайфульмулюк» удачно иллюстрируют сказанное в предисловии и послесловии.

# NETICE

Başkurt halkinin memleket içinde şöhret kazanmiş şahislari eskiden beri az degildi. Yaklaşik X. asirda Islam dinini kabul ettikten sonra ilim almak maksadiyla yabanci ülkelere gitme alişkanligi haline gelmiştir. Başkurdistan'in Tarihi cografi yeri, babalarimizin vatan sayilan, tarihin babasi Herodor tarafindan Rifey dagi diye anilan Ural daginin Avrasya'nin belkemigini oluşturmasi, onun Büyük Ipek yolundan pek uzakta bulunmamasi buraya ugrayanlarin meraklarini, burayi yeni ülke kabul ederek yerleşenlerin sayisini çogaltmiştir. Bu sebepten boy ve kabilelerin büyük bir kismi Orta Asya tarafindan göç edip Başkurt milletinin esasini oluşturabilecek yerlilerle karişma neticesinde «göç eden süje» şeklinde, mahsus «borç alma» neticesinde, etnoginez tarihine bagli şekilde yabanci yerlerde meydana gelen ve yerli halk dili için yabanci olan kissa, destan gibi isimlerle degerlendirilen epik eserler Başkurt halkinin folkloru arasinda yer aliyor. Belki kökü Assiriya-Vavilonya'da olan, sonra «Tavrat'ta», «Kuran-i Kerim'de» yer alan, dünya süje göstergilerinde «Yusuf Süjesi», «Iosif Prekrasniy» diye adlandirilan süjeyi esas alarak, Türk milletlerinde yep-yeni bir poem «Yusuf sevçe kissasi'ni» yazan Ey'li Başkurt Kul Ali (XIII asir) gibi, bu yabanci süjeler başkalarina yeni eser yazmalarina veya agizdan agiza dolaşmalarina vesile olmuştur. Her halde bu ciltte yazilan «Yusuf ve Züleyha» kissasinin «Buzyeget», «Tahir ve Zühre», «Seyfelmülük» gibilerinin Başkurt halki arasindaki varyatlarinin ve versiyonlarinin çeşitli olmasi; halk arasinda onlarin baş kahramanlarinin sevgi anlayişi, dogruluk, saflik, aşk sembolü olarak idealize eden şarkilara, beyitlere girmesi ve onlarin yeni topraklarini benimsemeleri oradaki halkin onlari kabul etmelerini açik bir şekilde gösteriyor. N. T. Zaripov giriş makalesinde başlandigi konuyu, daha sonra A. M. Süleymanov Başkurt folkloru repertuvari tarafindan benimsenen kissalar, destanlarla milli destan gelenekleri arasinda baglanti kurarak, yeni etno-cografi mühite adapte olma şartlari ve neticeleri şeklinde tamamlamiştir. Ciltte yer alan «Yusuf ve Züleyha» kissasi ile «Buzyeget», «Tahir ve Zühre», «Seyfelmülük» destani varyatlari bu özellikleri iyi tasvir ediyor.

# CONCLUSION

From the days of yore the Bashkirs have not felt any want for famous personalities. There was a custom of travelling abroad for education since the adoption of Islam around the X$^{th}$ century. The Urals being Eurasia's mainstay, (the Rifey Mount, after *Herodotus*), historical Bashkortostan's geographical position, our forefathers' Motherland and the fact of it being not too far from the Great Silk Route — all that multiplied people who visited it, took an interest in it and those who settled down there. For that reason the epic works that had originated on foreign soil and termed by the odd sounding words qyssah, ***dastan*** enter the folk repertory of the Bashkir nation. That came about also by virtue of many a tribe and clan migrating from Central Asia and assimilating the local aborigines giving rise to the Bashkir nation. Influence has been exercised also by the «travelling plots» and certain borrowed motifs. It is quite probable that there were creators of new works based on those «travelling plots» like it did *Qol Galy* (XIII$^{th}$ century), a Bashkir of the Aile tribe. He created a new poem in the Turkic world *The Yosof qissahy* based on «the Joseph plot», Joseph the Fair — the thing has its roots in the Babylon times having found its way later to the Bible and the Quran. Any way, the foreign plots had been accepted by the local people in a creative way, they were no longer felt as foreign. This is testified by the multifarious versions circulating among common folk, by songs glorifying the main heroes' amorous feelings and faithfulness. That concerns the sagas featured in the present volume — *Yosof and Zukhra, Buthyeghet, Tahir and Zukhra, Saifelmuluk*. The introductory article is written by *N. Zaripov*, the afterword is by *A. Suleimanov* and they discuss the narratives of the qyssa and dastan type borrowed into the Bashkir folklore repertory forming a link with the national saga traditions and the adaptation ways to the new ethnic and geographic surrounding. The pecularities are well illustrated by the variants of the above-mentional works.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Мөхәрририәттән . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5

**Мөхәббәт тураһындағы дастандар һәм ҡиссалар**

*(Нур Зарипов)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 6

**Ҡиссаи Йософ** *(Ҡол Ғәли версияһы)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 11

1. Йософ менән Зөләйха *(Вәхитов Зиннәтулла варианты)* . . . . . . . . 143
2. Йосоп менән Зөләйха *(Закиров Заһир варианты)* . . . . . . . . . . . . 146
3. Кинйә әкиәте *(Мостафина Кәримә версияһы)* . . . . . . . . . . . . . . . . 151
4. Йософ менән Зөләйха тарихы *(Ғайсина Бәширә варианты)* . . . . . . 156
5. Йософ менән Зөләйха *(Вәлиева Нәғимә варианты)* . . . . . . . . . . . 163
6. Йосоп һәм Зөләйха *(Байрамғолова Хәҙисә варианты)* . . . . . . . . . 168
7. Йософ китабы *(Ғумәрова Ғәзизә варианты)* . . . . . . . . . . . . . . . . 172
8. Йософ ғәлиәссәләм ҡиссаһы *(Иҫәнбаева Ғәйникамал варианты)* . . 183

**Әл-ҡисса Буҙйегет** *(Өфө версияһы)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 193

1. Буҙйегет *(Хәшимова Хәнифә версияһы)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . 264
2. Буҙйегет *(Хәбирова Шәрғиә варианты)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 277
3. Бузикет *(Биишева Бүләкбикә варианты)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . 289
4. Буҙйегет *(Мырҙабаева Ғилмиһан варианты)* . . . . . . . . . . . . . . . . 299

1. **Таһир менән Зөһрә** *(Теләкәева Рәхилә варианты)* . . . . . . . . . . 332

2. Таһир менән Зөһрә *(Булатов Зәкәриә варианты)* . . . . . . . . . . . . 335
3. Таһир менән Зөһрә *(Ғарифуллин Сабирйән варианты)* . . . . . . . . . 337
4. Таһир менән Зөһрә *(Усманова Хәнифә варианты)* . . . . . . . . . . . . 339
5. Таһир һәм Зөһрә *(Хажиева Миңнеямал версияһы)* . . . . . . . . . . . 343
6. Зантаһир менән Зәнзөһрә *(Ишбирҙина Нәсиха варианты)* . . . . . . 349

1. **Сәйфелмөлөк** *(Рысаева Миңзифа версияһы)* . . . . . . . . . . . . . . 352

2. Бәдеғөлъямал менән Сәйфелмөлөк *(Бикбулатов Рәхимйән версияһы)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 372
3. Сәйфелмөлөк *(Моратова Шәфиға варианты)* . . . . . . . . . . . . . . . 375

**Һүҙ ахыры. Ҡисса вә дастандарыбыҙ** *(Әхмәт Сөләймәнов)* . . . . . . . 380

**Аңлатмалар** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 444
**Һүҙлек** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 528
**Ҡисса һәм дастандарҙың көй үҙенсәлектәре** *(Риф Сөләймәнов)* . . . . 535
**Ҡисса һәм дастандарҙың көй үрнәктәре** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 537
**Ҡисса һәм дастан көйҙәренә аңлатма** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 546

*«Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығы*
*Рәсәй Фәндәр академияһы*
*Өфө ғилми үҙәге «Почет билдәһе» орденлы*
*Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында*
*әҙерләнде һәм институттың*
*ғилми советы тарафынан баҫырға раҫланды*

Литературно-художественное издание

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## Том 6

### Эпос: киссы и дастаны

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *С. Шәрипов*
Мөхәррире *Ф. Исхаҡова*
Рәссамы һәм биҙәүсе мөхәррире *А. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *З. Сыңғыҙова*
Корректорҙары *А. Абдуллина, Э. Шәйхетдинова, А. Иҙелбәкова*

Нәшр. лиц. № 0168, 10.04.96. Йыйырға бирелде 25.06.01. Баҫырға ҡул ҡуйылды 14.11.01. Ҡағыҙ форматы $60\times90^{1}/_{16}$. Офсет кағыҙы № 1. Әҙәби гарнитура. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 34,5+0,5 йәбештермә+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 37,0. Иҫәп-баҫма таб. 33,92+0,37 йәбештермә+0,45 форз. Тиражы 3000 дана. Заказ № 555.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.